(41) ... менән, : Ҡошсо[62] тотоғо : менән : һуғышмыш, : яугирҙәрен күп : үлтермеш, : әйберен барыһын да : күп : килтерҙе. : Көлитуғандың : утыҙ ете : йәшендә : ҡарлуҡ : бөтөн (халҡы) : орор-бәрер : арҡылы (дыуамалланып) : яу (дошман) булды, : Изге Тамаҡ (һыуы) : башында : һуғыштыҡ беҙ.



(42) (2)

(42) ...тыгн ; ол сүңшдә : оутз йш йор рты : лпшлчы : [ут]ын : бынп : оплйо : ттды : [кы]рг : одшро : снчды : ҡрлуҡоғ : үлртмз : лутмз : збодн : йғы [бо]лты : ҡрә күлтә : сүңшдмз : күлтыгн : быр ҡырҡ : йш йор рты : лпшлчы : ҡын :

(42) ...[Көли]туған : ул һуғышта : утыҙ йәш йөрөр ине, : Алып Шалсы : атын : менеп : ап-алға : тейҙе (ташланды), : ике яугиргә : үтәләй : сәнсте. : Ҡарлуҡтарҙы : үлтерҙек

[62] Ҡошсо – башҡорттоң Ҡошсо ырыуы.

беҙ, : алдыҡ беҙ. : Аҙау бөтөн (халҡы) : яу (дошман) булды, : Ҡара күлдә[63] : һуғыштыҡ беҙ, : Көлитуғанға : ҡырҡ бер : йәш йөрөр ине, : Алып Шалсы : ағын (аҡ атын) :



(43) бын... [п]лйо тгды : злтбрг : утоутды : збодн : нтә йуҡ болты : чым ҡғн : ылы : ҡмшғ : болутуҡынтә : бодн : ылгык[г]ы : болутуҡынтә : ызгл : бодн : бырлә : сүңшдмз : күлтыгн : лпшлчы : ҡын : бынп

(43) менеп... ап-алға тейҙе (ташланды), : аҙау илтабарын : тотто, : аҙау бөтөнө (халҡы) : анда юҡ булды. : Әсәм, ҡаған : иле : ҡумшыҡ (йомшаҡ) : булғанында, : бөтөнө (халҡы) игелекле булғанында әсәгел[64] : бөтөн (халҡы) : менән : һуғыштыҡ беҙ. : Көлитуған : Алып Шалсы : ағын (аҡ атын) : менеп



(44) [опл]... [д]ы : ол утнтә : түс... [ы]згл : ... : үлты : утуҡоз оғз : бодн : кнтү : боднм : рты : тңры : йыр : болғкын : үчүн : йғы болты : быр йылтә : быш йолы : сүңшдмз : ңылк : утоғоблҡдә : сүңшдмз :

(44) ап-ал...ды, : ул атынан : төштө...Әсәгел (Үсәргән-Болғар) : ... : үлде. : Туғыҙ уғыҙ : бөтөн (халҡы) : кәнде[65] : бөтөнөм (халҡым) : ине, : Тәңре, : Ер : болғанғаны : өсөн : (беҙгә) яу (дошман) булды (ҡылды). : Бер йылда : биш юлы (тапҡыр) : һуғыштыҡ беҙ. : Иң элек : Туҡ-болаҡта[66] : һуғыштыҡ беҙ.

(45) күлтыгн : змнҡғ : бынп : оплйо : тгды : лутрг : снчды : сү[т]гысынтә : йытнчрг : ҡылчлды : кнты : ҡошлғкдә : дз бырлә : сүңшдмз : күлтыгн : зйғзын : : бынп : оплйо : тгп : быррг : снчды :

---

[63] Ҡара күлдә -- Ҡара диңгеҙ янында.

[64] Әсәгел (Әсәрген) – башҡорттоң Үсәргән ҡәбиләһенең көнбайыш тармағы -- болғарҙар.

[65] Кәнде – үҙ.

[66] Туҡ-болаҡ – хәҙерге Ырымбур өлкәһендәге Туҡ йылғаһы.

(45) Көлитуған : аҙау менгеһен : менеп : ап-алға : тейҙе (ташланды), : алты яугиргә : сәнсте, : шул тейгеһендә (бәрелешендә) : етенсе яугирҙе : ҡылысланы. : Үҙ : ҡышлағында : даз (тажик) менән : һуғыштыҡ беҙ, : Көлитуған : аҙау көрәнен : менеп, : ап-алға : тейеп (ташланып), : бер яугиргә : сәнсте,

(46) утуҡоз рг : грә : утуҡыды : [д]з : бодн : нтә үлты : үчнч : бо[л]... ндә : оғз бырлә : сүңшдмз : күлтыгн : змнҡғ : бынп : тгды : снчды : сүсын : снчдмз : ылын : лутмз : түртнч : чош : бшынтә : сүңшдмз : түрк :

(46) утуғыҙ (туғыҙ) ирҙе : өйөрөп : туҡыны (туҡманы), : тажик : бөтөн (халҡы) : анда үлде. : Өсөнсө (юлы) : Бол...нда : уғыҙ менән : һуғыштыҡ беҙ. : Көлитуған : аҙау менгеһен : менеп : тейҙе (ташланды), : сәнсте. :Һуғышсыларын : сәнстек беҙ, : илен : алдыҡ беҙ. :Дүртенсе (юлы) : Сош (йылғаһы) : башында : һуғыштыҡ беҙ. : Төрк



(47) бодн : дҡкмшутды : йблҡ болты... ырты :озә[к]лмс сүсын : күлты... : ғуты : утөңрә : бырoғш : лпғо : онрг : утоңәтыгн : йоғынтә : грп үлртмз : бычнч : згнтыҡдздә : оғз : бырлә : сүнсдмз : күлтыгн :

(47) бөтөнөнөң (халҡының) : аяғы ҡаймылышты, : ямаҡ булды...ине. : Шул саҡ килмеш : (дошман) һуғышсыларын : Көлитуған : ығытып (ҡыуып), : Төңрә[67] (тигән) : бер ырыуҙың : алыпын (батырын), : ун яугирен, : (алар) Тоңатуғанды : йыйғандарында (ерләгәндәрендә), : өйөрөп үлтерҙек беҙ. : Бишенсе (юлы) : Эҙгәнте Ҡадаҙҙа : уғыҙ : менән : һуғыштыҡ беҙ. : Көлитуған



(48) з йғзын : [б]ынп : [т]гды : кырг : снчды : б[лыҡ]ә : [бр]мды [ол]сү : нтә ү[л] : мғы : ҡорғн : ҡышлп : йзыңә оғзғро : сүутшҡдмз : күлтыгн : бгбшлйо : ҡыутмз : оғзйғы : ордоғ : бсды : күлтыгн :

[67] Төңрә -- Таңғауыр башҡорт ырыуы.

(48) аҙау күрәнен : менеп : тейҙе (ташланды), : ике яугиргә : сәнсте, : ҡәлғәгә : ебәрмәне, : ул (дошман) һуғышсылары : шунда үлде. : Мағы : Ҡорғанда[68] : ҡышлап, : яҙына уғыҙға ҡарай : һуғышҡа сыҡтыҡ беҙ. : Көлитуған : бәк башлығында : ыҡтыҡ беҙ. : Уғыҙ яуы : урҙаны : баҫты. : Көлитуған

(49) үгсзҡын : бынп : утуҡоз рн : снчды : ордоғ : бырмды :үгмҡутон : олйо : углрм : клрм : клүңнм : уҡончйлрм : бончәймә : тыргы : күң болтычырты : үлгы : йорутды : йолутә : йутоҡлтчы : ртгз :

(49) маҡтаулы үҙ ағын (аҡ атын) : менеп, : туғыҙ яугирен : сәнсте, : урҙаны : бирмәне. : Өгәм (үгәй анам) ҡатын, : ололарым, : улдарым, өкәләрем (икәтәйҙәрем), : килендәрем, : ҡанбабаларым, : барсағыҙ ҙа -- : тереләрегеҙ --: (ул дошмандарға) күндәм хеҙмәтсе булыр инегеҙ, : үлеләрегеҙ : йортта, : юлда : аунап ятып ҡалыр : инегеҙ --

(50) күлтыгн : юҡ рср : уҡоп : үлтчы : ртгз : ынм : күлтыгн : кргк : болты : үзм : сҡнтм : күрүр : күзм : күрмзтг : бырлр : былгм : былмзтг : болты : үзм сҡнтм : үд тңры : йср : кысы оглы : уҡоп : үлгглы : түрүмс :

(50) (әгәр ҙә ки) Көлитуған : юҡ ине булһа (булмаһа), : күп : үләсәк : инегеҙ. : Энем : Көлитуған : гүр эйәһе : булды. : Үҙем һағындым (һыҡтандым), : күрер : күҙем : күрмәҫтәй : булды, : белегем (аңым) : белмәҫтәй : булды, :үҙем һағындым (һыҡтандым). : Үтәһен (ғүмер ахырын) Тәңре : яҫар, : кеше улдары : күп : үлгеләп : тормош.



[68] Мағы (Могучий) Ҡорған – Урта Азиялағы хәҙерге Кәттә Ҡорған ҡалаһы.

(51) нчә : сҡнтм : күздә : йшклср : тыдә : күңлтә : сығут : клср : йнтро : сҡнтм : ҡутғды : сҡнтм : кышд : олйо :ы[нй]гунм : оғлнм : бглрм : боднм : күзыҡшы : йблҡ : болтычытып : сҡнтм : йоғчы : сығутчы : ҡыутн : утутбы : бодн : бшлйо :

(51) Шундай : һағындым (һағышландым), : күҙгә : йәш килер : ине лә : күңелгә : һағыш : килер ине лә : яңынан (уғата ҡаты) : һағындым (һыҡтандым), : ҡаты : һағындым (һыҡтандым). : Ике саттың (хан нәҫеленең) – : илауҙан -- : энеләремдең, : улдарымдың, : бәкләремдең, : бөтөнөмдөң (халҡымдың) : күҙе-ҡашы : ямаҡ : булды бит, тип, : һыҡтандым. Юҡлап һыҡтаныуға (йола үтәүгә) : ҡатай-көҙән, : татабы (татар) : халыҡтары :башлығы булып



(52) одрсңүн : клты : утбғч ҡғнтә : ысйы : лык[ң] : клты : бртүмнгғы :лутонкүмш : кргксз : клүрты : тупут : ҡғнтә : бүлн : клты : ҡорйә : күн : бутсҡдҡы : соғд : брч [к]р : боҡрҡолс : боднтә : нңсңүн : оғлутрҡн : клты :

(52) Уҙыр-сәнкем : килде. : Утбағыусы (Ҡытай) ҡағандан : Ысйы Олоғо : килде, : ун бер меңлек : алтын-көмөш : үлемтеге : килтерҙе. : Тибет : ҡағанынан : Билән : килде. : Ҡырый көнбатыштағы : Соғдтың : барса ҡорондағы, : Бохара ылыҫындағы : бөтөндәрҙән (халыҡтарҙан) : Анаң-сәнкем, : Уғыл-тархан : килде.



(53) онуҡ : оғлм : түргс : ҡғнтә :мҡрч : утмғчы : оғз : былгә : утмғчы : клты : ҡырҡыз : ҡғнтә : утрдош : ыннчо чор : клты : брҡ : ытгүчы : бдз : йрутғмә : быттутш : ытгүчы : утбғч : ҡғн : чыҡны : чңсңүн : клты :
күлтгн : уҡон : йылҡә : йыты : егрмкә : очды : утоҡзнчй : йты оутзҡә : йоғ : ртүртмз : брҡын : бдзын : быттутш... бычын : йылҡә : йтнчй : йытыоутзҡә : уҡоплҡдмз : күлтыгн : ү... ҡырҡ : рутуҡ... ытыйшң : болыут : утш... бончә : бдзчг : утойғн : лтбр : клү[р]ты :

(53) Ун уҡтан[69] -- улым, : төргөш : ҡағандан : -- Маҡрас : тамғасы, : уғыҙҙан : -- Белге : тамғасы : килде. : Ҡырғыҙ : ҡағандан : -- Тордош :Инаныс Сор : килде. :Бурау : итеүсе (бина бураусы), : биҙәкле : йортона : яҙыулы таш : итеүсе (яһаусы) -- : утбағыусы (ҡытай) : ҡағандың : сығаны (ике туған ҡустыһы) : Саң-сәңкем[70] : килде.
Көлитуған : ҡуй : йылында : (беренсе айҙың) егерме етеһендә : осто (вафат булды), : туғыҙынсы : айҙың : утыҙында : яҡ (таш битен) : ырҙырттыҡ беҙ. : Бураһын, : биҙәген, : яҙыулы ташын : мәсен : йылдың : етенсе : айының : утыҙында : күмәкләп : ололаныҡ беҙ. : Көлитуған : ү(лгәндә) ҡырҡ артығы... ете (ҡырҡ ете) йәшендә : булды. : Таш... барса : биҙәкселәрҙе : Тойғон : Илтабар : килтерҙе.
Оло Яҙыу тамам

2. Нәүбәттә икенсе ташъядкәр – Белге Утан Уҡымышлыһы (Тоньюкук) ҡатын үҙе яҙған текст (Кесе Яҙыу)



(1) былгә : утон уҡуҡ : бн үзм : утбғч ылңә : ҡылнтм : түрк бодн : утбғчкә : ҡүрр рты

(1) Белге[71] : Утан[72] (Тәхетендә танғауыр-үҫәргән башҡорттары ултырған Тан дәүләте) Уҡымышлыһы : мин үҙем : утбағыусы[73] илендә : ҡылындым (белем алдым), : төрк[74] бөтөнө (халҡы) : утбағыусыға : ҡарар ине.

---

[69] Ун уҡ – 635 йылда Көнбайыш Төрки Ҡағанат ҡағаны Эшбара ҡулынан “автономия” хоҡуғы алған үҫәргәндәр. Б.э. тиклем 105 йылда хәҙерге Башҡортостандың Таштуғай төбәгендә төйәкләнмеш Әлми хандың башҡа сығарылған ике улы Дала һәм Насипбай кешеләренән дауамланған ҡуш ҡәбилә тармаҡтары һәр береһе бишәр ырыу тәшкил итеп (Үҫәргән ырыуы әлегәсә биш аранан хасил), йәмғеһе ун булғанлыҡтан, унауына ла үҙ ҡәбилә башлығы *сат (шад)* һайлап ҡуйыу хоҡуғының билдәһе – алтын ун уҡ тапшырылғанлыҡтан, улар “ун уҡ” берлеге тип йөрөтөлгән.
[70] Ҡытай императоры булып башҡорт ултырғанлығына бер дәлил.
[71] Белге – белгес, белекле, белемле зат тигән маҡтаулы ләҡәп.
[72] Утан (Тан) – утлы ҡоралға эйә дәүләт мәғәнәһендә; заманында сяньби-үҫәргән башҡорттары яулап алып төҙөгән һәм хаҡимлыҡ иткән Ҡытай империяһы (618 – 907 йй.). Был дәүләттә беренсе башлап “утлы уҡ” тигән ҡорал һуғышта киң ҡулланыла: “Термин “хо цзянь” интерпретировать нетрудно – это “огневая”, или зажигательная стрела, применение которой, вероятно, столь же древнее, сколь и появление лучного оружия. В китайской военной истории немало примеров огневого нападения с помощью зажигательных стрел... В период Тан (беҙҙеңсә, Утан. – *Й.С.*) к древку стрелы привязывали керамический сосуд... с горячим составом, продевая привязь через два отверстия в наконечнике стрелы”.(С.А. Школяр. Китайская доогнестрельная артиллерия. М., 1980, стр. 165). Бының график һыҙылышын бәғзе авторҙар “т” тип ҡыҫҡартып уҡыған ырын-хәрефтә (өҫкө мөйөшө уҡ менән осланған ромб) күрәбеҙ һәм ул минең тарафтан, һуҙынҡыһы менән ҡуша тулы килеш, “ут” тип күсерелә. Ә ул ырын-хәрефтең һәм шундай уҡ хәлдәге уҡ-һүрәт ырынын текстағы ҡайһы урында тулы килеш “ут” һәм “уҡ” тип, ә ҡайҙа “т” һәм “ҡ” тип кенә уҡыу ҡағиҙәһен аныҡ тикшереп билдәләү – үҙе айырым бер бурыс.



(2) турк бодн : ќнын болмйн : утбғчдә : дрлты : ќнлнты : ќнын уќодп : утбғчкә : йнә ычкды : тңры : нчәтмсрнч : кнбртм :

(2) Төрк бөтөнө (халҡы) : ҡанун белмәй ине, : утбағыусыла (Утан дәүләтендә) : терелде, : ханланды. : Ханына уҡ атып, : утбағыусыға : йәнә ышыҡланды (буйһондо), : Тәңре анса (шул саҡ) тимеш (әйтмеш) ине: : “Көн бирҙем, :



(3) ќнңн : уќодп : ычќдң : ычќдк үчн : тңры : үлтмсрнч : түрк бодн : үлтылќнты : йуќ болты : түрк : сыр бодн : йрынтә :

(3) (ләкин) ханыңа : уҡ атып : ышыҡланыуың (Ҡытайға буйһоноуың) өсөн : Тәңре : үле итмеш ине”. : Төрк бөтөнгә (халҡына) : үләт алҡынды, : (ул) юҡ булды, : төрк : сыр[75] бөтөнө (халҡы) : ерендә :



(4) бод ќлмды : ыдәт щдә : ќлмсы : уќобрнп : йты йүз болты : кы үлгы : тлғ рты : быр үлгы : йдғ рты : йты йүз : кысыг :

(4) бөтөнө ҡалманы, : ыҙалы囗 эштә (ҡытай иҙеүендә) : ҡалмышы : ҡубарынып : ете йөҙ (һуғышсы) булды, : ике өлөшө : атлы ине, : бер өлөшө : йәйәүле ине. : Ете йөҙ : кеше, :



(5) одзғмә : олғы : щд рты : йғлтыды : йғмсыбн ртм : былгә утон уќуќ : ќғнмоќысйын тдм : сќнтм : торуќ боуќлы : смз боуќлы : әрќдә

(5) ул мәлдә : олоһо : шад[76] : ине, : (ул) “йыйылығыҙ!” тине, : йыйыусыһы мин инем -- : Белге Утан Уҡымышлыһы. : “Ҡаған ымы[77] ҡушайым, тинем; : һығындым

---

[73] Утбағыусы (бәғзеләр “табғач” тип уҡый) – Утан (Тан) иле императоры.

[74] Төрк – Тороҡ (Тора) тау хоҙайы Тәңрегә (мифик Имир тәүбаба фаллосына) табыныусы башҡорттар, улар менән 922 йылда Башҡортостан тупрағында ғәрәп илсеһе Ибн-Фаҙлан да осрашҡан.

[75] Сыр (сир, сәр, үсәр, үсәрҡан) – көнбайыш Үҫәргән ҡәбиләһе, бөгөнгө Сырдарья йылғаһы шулар исемен һаҡлай.

(уйландым): : “Отороҡ (арыҡ) буғаны (һыйыр малын), : һимеҙ буғаны: (бер ҡарау) арҡылы



(6) былср : смз боуҡә : уторуҡ буҡә тйн : былмз рмс тйннчә сҡынтм : нтә кысрә : тңры : былг бртк үчн : үзмк : ҡғн ҡысдм : былгә утон уҡуҡ : бойлә бғәутрҡн

(6) белерҙәр: : “һимеҙ буға”, : “отороҡ (арыҡ) буға” тиеп; : (ә был) белмәҫ имеш тиеп анса (шунса, шундай) һығындым (уйландым)[78]. : Шундай кисерештә : Тәңре : белек (белем) биргәне өсөн : үҙем үк : (уға) ҡаған (тип) ҡуштым, : Белге Утан Уҡымышлыһы -- : буйлы (нәҫелле) буға-тархан (менән)



(7) бырлә : ылтрс ҡғн : болйн : брйә :утбғчғ : үңрә ҡытнғ : йырйә оғзғ : укск : үлрты : блгсы : чбсы : бнкртм : чогй ҡозын : ҡрәҡомғ : олрор :ртмз

(7) бергә Илтиреш[79] ҡаған : булайың (бул, тинем). : Барҙыҡ (һөжүм иттек) : утбағыусыға (ҡытайға); : һуңынан ҡытанға (киданьгә, йәғни ҡатай-көҙәнгә); : йөрөнөк : уғыҙға, : ул кешеләрҙе : үлтерҙек. : Белгесе, : кәңәшсеһе : мин инем. :Соғай ҡоҙоғонда, : Ҡараҡомда : ултырыр (йәшәр) инек беҙ.

(8) кйк йыйү : тбсғн ййү : олрор ртмз : бодн : боғзы : туҡ рты : йғмз : тгрә : очуҡтг рты : быз : сғ : ртмз : нчә олррррыҡлы : оғзднтн : күргклты
(8) Кейек ейеп (ашап), : ҡуян ейеп (ашап) : ултырыр (йәшәр) инек беҙ. :Бөтөн (халыҡ) : боғаҙы : туҡ ине, : яғыбыҙ-тирә (тирә-яғыбыҙ) : асыға ине, : беҙ : һау : инек беҙ. : Анса (шул саҡ) ултыраҡлы : уғыҙҙан төндә : күрегебеҙ (күҙәтсебеҙ) килде (ҡайтты).



(9) күрг сбынтғ : тоҡз оғз : бодн үзә : ҡғн : олртырыр : утбғч ғро : уҡон ысңүнг : ыдмс : ҡытн ғро : тоңрәсмғ : ыдмс : сбнчә ыдмс : з ҡнә : түрк бодн

---

[76] Шад (шата, сата) – хан нәҫеле, мырҙа (принц).
[77] Ымы (имя) – исеме.
[78] Ҡаған үлтерелгәс, уның урынына ҡалырға тейешле улының тәжрибәһеҙлеген уйлап һағышлана.
[79] Илтиреш – ил тиреүсе (йыйыусы), дәүләт төҙөүсе.

(9) Күрег (күҙәтсе) һөйләне: : туғыҙ уғыҙ[80] : бөтөндән (халҡынан) өҫтә : ҡаған : ултырыр; : утбағыусы (ҡытай) ҡоро (беҙгә ҡаршы): уғын, һөңгөһөн (тоҫҡаған тип) : әйтмеш, : ҡытан (ҡатай-көҙән) ҡоро : Тәңреһе – маг (тип) : әйтмеш; (ул йәғни уғыҙ ҡағаны) һүҙенсә әйтмеш: : "Аҙ ғына : төрк бөтөнө (халҡы)



(10)

(10) йорыйр рмс : ҡғны : лп рмс : йғочысы : белгә рмс : ол ҡы ҡысы : бррср : сыны тбғчғ : үлүртчы : тырмн : үңрә ҡытнғ : үлртчы : тырмн : быны оғзғ :

(10) йөрөйҙөр имеш, : ҡағаны : алып (батыр) имеш, : яусыһы (яу башлығы) -- : Белге (Утан Уҡымышлыһы) имеш; : ул ике кеше : абарыр (алып барған, етәкләгән) сыр (үҫәргән халҡы) : һине – утбағыусыны : үлтерәсәк, : тирмен; : һуңыраҡ ҡытанды (ҡатай-көҙәнде) : үлтерәсәк, : тирмен; : мине – уғыҙҙы :



(11)

(11) үлтртчыҡ тырмн : утбғч : брднйнтг : ҡытн : үңднйнтг : бн йырднтйн : түрк сыр бодн : йрынтә : ыдыйөрмзон : осрыдый уҡкыслм :

(11) үлтерәсәк, тирмен; : утбағыусы (ҡытай) -- : биредән-яндан, : ҡытан (ҡатай-көҙән) -- : уңдан-яндан, : мин – (ошо) ерҙән : тегәйек (ҡамайыҡ); : төрк сыр (төрк Үҫәргән) бөтөнө (халҡы) : ерендә : ыҙалап йөрөмәһен (беҙҙе): : осорайыҡ уҡ ҡыҫылымын! –



(12)

(12) тырмн : ол сбғ : сдп : түн одсҡм : клмды : күнтз : олрсҡм клмды : нтә үтрү : ҡғнмә үтнтм : нчә үтнтм : утбғч : оғз : ҡытн : бо чгү : ҡбср

(12) тирмен". : Ул һабаҡты (һүҙҙе) : ишетеп : төн оҙоно йоҡом : килмәне, : көндөҙ : алыр йоҡом килмәне. : Анда (шунда) ултырып : ҡағанымдан үтендем, : анса (ошолай) үтендем: : "Утбағыусы (ҡытай), : уғыҙ, : ҡытан (ҡатай-көҙән) -- : был өсәү : ҡауышыр



(13)

(13) ҡлтчы бз : үзчы : тсн : тотмстгбыз : йойҡ әрклг : топлғлы очзрмс : йнчгә рклг : үзглы очз : йойҡә : ҡлн болср : топлғ олуҡ : лпрмс : йнчгә

(13) ҡылынһа, беҙ : Уҙасы : Ташын : тотмаҫтайбыҙ; : Яйыҡ арҡылы : Тубылғылы (Тобол) осона уҙырбыҙ, : Йәнәсәйгә арҡылы : уҙғалы осто уҙа (килә) : Яйыҡкаса ҡалын (көр) булышырлыҡ, : тупланырлыҡ : алыптарбыҙ : имеш; : Йәнәсәйгә

[80] Туғыҙ уғыҙ – туғыҙ ырыулы Күбәләк-Тиләү башҡорт ҡәбиләһе берләшмәһе.



(14) йоғн болср : үзглклылпрмс : үңрә : ӄытндә : брсә : утбғчдә : ӄорйә : ӄорднтә : йырйә : оғздә : кыучбың : сүмз : клтчмз : брмонә : нчә үтнтм :

(14) яғына(са) булышыр : уҙғалыҡлы алыптарбыҙ имеш. : Һуңыраҡ : ҡытанда (ҡатай-көҙәнгә) : барып, : утбағыусыла (ҡытайҙа) : ҡор өйө : ҡорҙоҡ та (ҡорорбоҙ ҙа) : йөрөрбеҙ : уғыҙға. : Ике-өс мең : һум үҙ ҡалтасыбыҙҙа (финансисыбыҙҙа) : бар мына. : Анса (шулай) үтендем.:



(15) ӄғнм : бн үзм : былгә утон уӄуӄ : үтнтк... : үтнчмн : сдүбрты : күңлкчә : одзтды : күкүңг : йоғро : үткн йысғро : одзтм : ынғк клкн : тоғлдә : оғз клты :

(15) Ҡағаным, : мин үҙем -- : Белге Утан Уҡымышлыһы -- : үтендек (Тәңрегә), : үтенесемде : ишетә бирҙе (тыңланы), : күңелеңсә (күңелең теләгәнсә) : ут (кисеп) уҙ, тине. : Күк Үңгә -- : Юғары : Үтәгән яҫыһынаса : ут уҙҙым, : Ингәк Ҡалҡан : таулыла : уғыҙ (ҡаршы) килде -- :



(16) сүсы үч бың рмс : быз : кыбың : ртмз : сүңсдмз : тңры : йрлӄды : йндмз : үгзкә : түсды : йндуӄ йолтә : ймә : үлтыкк : нтә үтрү : оғз уӄын : клты

(16) һуғышсыһы (ғәскәре) өс мең ир имеш. : Беҙ -- : ике мең : инек беҙ, : һуғыштыҡ беҙ. : Тәңре : ярлыҡаны -- : еңдек беҙ, : (улар) йылғаға : төштө (батты). : Еңдекле (еңеүле) юлда : йәнә : үлтерештек: : анда үлтерергә : уғыҙ уҡсылары : килде



(17) клүртмк : түрк боднғ : үткн йркә : бн үзм : былгә утон уӄуӄ : үткн йрг : уӄонмс тйн : сдп : брйкы : бодн : укорйӄы : йырйӄы : үңркы : бодн клты

(17) Килертамаҡҡа -- : төрк бөтөнгә (халҡына), :Үтәкән ергә. : Мин үҙем, : Белге Утан Уҡымышлыһы, : Үтәкән ергә : ҡунмыш (туҡталған икән) тип : ишетеп, : (эргәмә) бар яҡтың : бөтөнө (халҡы) -- : уғыр яғы, : йыр(аҡ) яғы, : уңғар яғы : бөтөнө (халҡы) килде. :



(18) кыбың ртмз : бызкысүболты : түрк бодн : олрғлы : түрк : ҡғн : олрғлысӊтоӊблҡә : тлойүгзкә : тгмс йоҡрмс : ҡғнмә : үтнп : сүлтдым

(18) Ике мең инек беҙ -- : беҙ ике сү[81] (ғәскәр) булдыҡ. : Төрк : бөтөнө (халҡы) : ултырғалы (ултырған), : төрк : ҡаған : ултырған Сынтоң ҡаланан : Атулай[82] ыуыҙғаса (һыуынаса) : теймеш (барып етеү әмәле) юҡ имеш. : Ҡағанымдан : үтенеп : сү (ғәскәр) илттем,



(19) снтоӊ блҡә : тлой үгзкә : тгүртм : үч отз блҡ : сыды : осын бонтто : йортдә : йт оҡл оррты : утбғч ҡғн : йғмз рты : он уҡ ҡғны : йғмз рты :

(19) Сынтоң ҡаланан : Тулай ыуыҙға : тейгерҙем (еткерҙем), : утыҙ өс : ҡаланы : сыйҙым (емерҙем). : Осын : мең тотоғо (башлығы): йортонда : ете : уғылы (улы) : тора ине. : Утбағыусы (ҡытай) ҡағаны -- : яуыбыҙ (дошманыбыҙ) ине. : Ун уҡ[83] ҡағаны -- : яуыбыҙ (дошманыбыҙ) ине. :



(20) рутуҡ : ҡырҡз : күчлг ҡғн : йғмз болты : олүч ҡғн : үглсп : лутон йысүзә : ҡбслмтмс : нчәүглсмс : үңрә түрк : ҡғнғро : сүллмтмс : ңросүлмср : ҡчнңрср : оләзнә :

(20) Артыҡ (артабан) : ҡырғыҙ : Көслөк ҡаған : яуыбыҙ (дошманыбыҙ) булды. : Ул өс ҡаған : өйөлөшөп (уҡмашып) : Алтын яҫыла : (беҙҙе) хәбес (әсир итеп) алам, тимеш -- : анса уйлашмыш (шулай уйлашҡандар). : Һуңыраҡ төрк : ҡаған ҡорона : сү (ғәскәр) илтмештәр. : "Аңар (әгәр) сү (ғәскәре) үлмәһә, : ҡасан да әрсер : ул беҙҙе: :



(21) ҡғн ылп рмс : йғочысы былгә рмс : ҡлнңрср : үлртсыкк : үчгүн : ҡбсп : сүллм : ныйуҡҡыслм : тмс : түргс : ҡғн : нчәтмс : бнӊ боднм нтә рүр : тмс :

(21) ҡағаны алып имеш, : яусыһы (яу башлығы) Белге имеш -- : (ятып) ҡалһаң әрсер : үлтергәнсе. Өсөбөҙ : ҡауышып, : сү (ғәскәр) алып, : аны юҡ иткәнсе ҡыҫайыҡ!" -- : тимеш (тигәндәр). : Түргеш : ҡаған : анса (ошолай) тимеш (тигән): : "Минең бөтөнөм (халҡым) анда йөрөр, -- : тимеш (тиган). -- :

[81] Сү (сүб, сүбәй, сыбай, һыбай) – атлы ғәскәр.

[82] Атулай ыуыҙғаса – Әтиләй (Иҙел) һыуынаса.

[83] Ун уҡ – Көнбайыш төрки ҡағанатта (Урта Азияла) Үҫәргән башҡорттарының автономиялы ун ара берләшмәһе.



(22) түрк бодн ймә болғнч олтмс оғз ыймә : утрҡнч олтмс : олсбын : сды : түнймә : одсҡмҡлмзрты : олрсҡм : ҡлмзрты нтә сҡнтмә:

(22) Төрк бөтөнө (халҡы) өйөмә болғаныс ул", -- тимеш (тигән). Уғыҙ: "Өйөмә : ытырғаныс ул", -- тимеш (тигән). : Шул һүҙен : ишетеп : төн буйына : күҙемә йоҡом килмәҫ ине, : алыр йоҡом : килмәҫ ине – шундай һағындым-һағышландым... :



(23) ...ә : сүллм... тдм : күгмз : йолы : бррмс : утомстйнсды : бойолон : йорыср : йрмчытдм... йрчытлдм : чүлгызры : болутм

(23) ...ә : сү (ғәскәр) алайыҡ... тинем. : (Ҡағанымдың:) "Күгебеҙ : юлынан : барырбыҙ, : үтербеҙ", -- тигәнен ишетеп: : "Был юлдан : йөрөшөргә : ярамаҫ", -- тинем... ерсе (юл күрһәтеүсе табырға) теләнем, : сүлгиҙәре (сәфәр башлығы): булдым



(24) үзм : зйырм... ныблм... рмс : быруотороуҡы : рмс : нынбрмс : ңрйутп : бырутлғбрмстйн : олйолн : йорср : ончтдм : сҡнтм : ҡғнмз

(24) үҙем. : "Эҙ-йөрөм... аны беләм... имеш, : бер ултыраҡлы (ер) имеш, : (юл) шунан бармыш. : Аңарға (шуға) етеп, : (унда) бер утлыҡ (үләнлек) бар имеш, тинем. -- : Ул юлды : йөрөү зерә : йонсоткос", -- тинем, : һағындым (һағышландым, уйландым). : Ҡағаныбыҙға



(25) үтнтм : сүйорыутнчм : утлут : тдм : ҡтрмлкчә: оғрҡлутдм : утүзә : бнтрәкрғ : скдм : йукро : утйтәйдғн : ығчутоутно : ғуторутм : үңрәкыр :

(25) үтендем, : сү (ғәскәр) йөрөтөү үтенесемде : үтәлдерт, : тинем. : Аҡтирмәлегәсә : арҡылы үттем, : ут (үләнлектән) уҙып, : мин туры ҡараға (ҡырлаға) : сыҡтым. : Юғары : Үтәйҙә ятҡан : ағасҡа тотона(-тотона) ығылдырттым (уҙҙыртым ғәскәрҙе). : Һуңыраҡ ҡырланан :



(26) йоғро тгрп ыбырғп : сдмз : йобло : ынтмз : онтүнкә : йнткә : утоғбырү : брдмз : йрчы : йрйңлп : боғзлнты : боңды : ҡғн : йлүкртмс

(26) йүгерә-тәгәрәп-бырағып : остомоҙ (остоҡ беҙ), : яулы(ға) (һуғышҡа) индек беҙ; : көн-төн йәнүтке (йәнгә үткес) : ут-уҡ бәреп : барҙыҡ беҙ; : ерсе (ерҙе белеүсе, юл күрһәтеүсе) : ер яңылыштырып : боғаҙланды (боғвҙынан һуйылды). : Моңдо (күктәге әруах) ҡаған: : “Елегеҙ күр!” – тимеш.



(27) нысобғ : брлм : олсоб уҡ оды : брдмз : снғлы : түсүртмз : утғ : ыҡә : бйорртмз : күнймә : түнймә : йлү : брдмз : ҡырҡзғ : окәбсдмз :

(27) Аны-һыуға (Аму-даръяға) : баралым (барғаныбыҙҙа) : ул һыуыҡ ине. : Барҙыҡ беҙ. : Һанарға (ғәскәрҙе) төшөрҙөк (аттан) беҙ, : аттарҙы : ышыҡка : ҡуйырға бойорҙоҡ беҙ. : Көнмө, : төнмө -- : елеп барҙыҡ беҙ : ҡырғыҙға, : йоҡлағанында баҫтыҡ беҙ. :

(28) сүңгн : чдмз : ҡны : сүсы : трлмс : сүңсдмз : снчдмз : ҡнын : үлртмз : ҡғнкә : ҡырҡз : бодны : чҡды : йкнты : йнтмз : күгмнйысғ : брү : клтмз :

(28) Һөңгөләп : (юл) астыҡ беҙ, : ханы, : һуғышсылары : тирелмеш (эркелде), : һуғыштыҡ беҙ, : сәнстек беҙ, : ханын : үлтерҙек беҙ. : Ҡағанға : ҡырғыҙ : бөтөнө (халҡы) : сүкте (бил бөктө), : йөгөндө (теҙләнде) -- : еңдек беҙ. : Күгмән яҫыһына : барыу : ҡылдыҡ беҙ, :



(29) ҡырҡздә : йнтмз : түргс ҡғнтә : күргклты : сбнтг : үңднҡғнғро : сүйорылмтмс : йормср : бызны : ҡғнылпрмс : йоғычысы : белгә рмс : ҡчнңрср

(29) ҡырғыҙҙы : еңдек беҙ. : Түргеш ҡағандан : күрег (күреүсе, темеҫкен) килде, : сабы (һүҙе) шундай: : “Уңдан ҡаған ҡорона : сү (ғәскәр) йөрөтәм, -- : тимеш. -- : Йөрөтмәһәк : беҙҙе... – ҡағаны алып имеш, : яусыһы (яу башлығы) : Белге (Утан Уҡымышлыһы) имеш -- : ҡасһаҡ әгәр :



(30) бызны : үлртчыкк : тмс : түргыс ҡғны : утсҡмстыды : он уҡ бодны : ҡлысз утсҡмс : тыр : утбғчсүсы : бррмс : олсбғ : сдп : ҡғнм : бнбгрү : түсйынтыды :

(30) беҙҙе үлтерәсәк", -- : тимеш. : Түргеш ҡағаны : үтә сыҡмыш (юл үтергә сыҡты), тине; : ун уҡ бөтөнө (халҡы) : көллөһө лә (юл) үтергә сыҡмыш, : тир; : утбағыусы (ҡытай) сүе (ғәскәре лә шунда) : бар имеш. : Ул һабаҡты (һамаҡты йәки һүҙҙе) : ишетеп, : ҡағаным: : "Бән (мин) өб (өй) ҡырына : төшәйем (ҡайтайым)", -- тине -- :



(31) ҡутон : йуҡ бlмс рты : ныйоғлутйынтды : сүбрң : тыды : лутонйысдә : олрң тды : сүбсы : ынлҡғн : утрдоссд : брзон : тды : былгә утон уҡуҡә : бңә : йды :

(31) катыны юҡ булмыш (вафат булған) ине, : "аны йоҡлатайым" (ерләйем), тине. : Сү (ғәскәр) менән барың, : тине. : Алтын яҫыла : ултырың (туҡтал), тине. : (Дошмандың) сү (ғәскәр) башы (булып) : Инәл ҡағандың : Утордос (исемле) саты (хан нәҫеле) : баралыр, : тине. : Белге Утан Уҡуҡка -- : миңә : әйтте, :



(32) босүглт : тыды : ҡыйнғ : күңлңчәй : бнсңә нәййын : тыды : ҡлррср : күр : үклүр : клмзрср : тылғсбғлыолор : тыды : лутон йысдә : олрутмз :

(32) был ғәскәрҙе илт, : тине. : Ҡыйна (туҡма) : күңеленсә, : мин һиңә (башҡаса) ни әйтәйем, : тине. : Килер иһә ир (килһә ирҙәр) -- : ҡор ығылыр (йыйылыр); : килмәҫ иһә ир(ҙәр) -- : телле-һабаҡлы (һүҙле, мәғлүмәтле) булып ултыр : тине. : Алтын яҫыла : ултырҙыҡ беҙ. :



(33) үчкүргкысыклты : сбы : быр : ҡғн ысү утсҡды : он уҡ сүсы : ҡлысз : утсҡды : тыр : йрсйзыдә : тырллмтмс : олсбғсдп : ҡғнғро : олсбғыутм :ҡнтйнсбғйнә

(33) Өс күрег (күреүсе, күҙәтсе) кеше килде, : һүҙе : бер: : "(Тегеләрҙең) ҡағаны ғәскәре (менән) юл үтә сыҡты, : ун уҡ ғәскәре : көллөһө лә : юл үтә сыҡты", -- : тир. : "Ярыш яҫыла : тирeләйек (йыйылайыҡ)", -- тимеш (тигәндәр). : Ул һабаҡты (һамаҡты, һүҙҙе) ишетеп, : ҡаған ҡырына : ул һабаҡты (һүҙҙе) еткерҙем: : "Ҡалайтайым?" Һабағы (һүҙе) йәнә

(34) клты : олрңтыйн : тмс : йлмә : ҡрғо : дгүты : орғл : бсутмә : тмс : бүг ҡғн : бңро : нчәйыдмыс : пәутрҡғнғро : чрәсб : ыдмс : белгә утонуҡуҡ : нығол : үзол : ңлр

(34) килде: : "Ул урыныңа тейен (шул урынында ҡал), -- тимеш. -- : Елмәле (шәп атлы) ҡорҙо : үткәртеп (йөрөтөп) : ырғыл, : (үҙеңде) баҫтыртма", -- : тимеш. : Бөйөк

ҡаған; миңә : анса (шулай тип) әйтмеш. : (Миңә) -- апаһы тархан[84] ҡырына : серле һүҙ : әйтмеш: : “Белге Утан Уҡымышлыһы : аныҡ (аңлы) ул, : үҙе ул : аңлар. :



(35) сүйорылм[тдчы] : онәмң : олсбғсдп : сүйорыутдм : лутон йысғ : йолсз нсдм : ртсүгзг : кчгсзн : кчдмз : түн ҡутдмз : болчоҡә : утңүнтрү : тгдмз :

(35) Сү (ғәскәр) йөрөлтмә тиеүсене : өнәмәң”. : Ул һүҙен ишетеп, : сү (ғәскәр) йөрөттөм : Алтын яҫынан. : Юлһыҙ – аны (юлды) астым, : Иртыш ыуыҙғаса (һыуғаса), :кисеүһеҙ – аны кистек беҙ, : төн киттек беҙ : Балсыҡҡа, : таңында туры : тейҙек (еттек) беҙ. :



(36) утылғклүрты : сбнтғ : йрсйзыдә : онтүмн : сүтрлты : тыр : олсбғсдп бглр : уҡопн

(36) Тел (әсир) килтерелде, : һүҙе ошондай: : “Ярыш яҫыла : ун төмән (йөҙ мең) : сү (ғәскәр) торалыр”, -- : тир. : Ул һүҙҙе ишетеп бәкләр : күбенеһе



(37) йнлм : рығоб утойг : тды : бррчәтрмн : бн былгәутонуҡуҡ : лутон йсғ : сәклтмз : ртс үгзг

(37) йыйналып: : “Ырғып үтәйек” (тиҙерәк ҡасайыҡ), -- : тине. : Мин анса (иһә) әйтермен: : “Мин – Белге Утан Уҡымышлыһы! : Алтын яҫыһы аша : килдек беҙ, : Иртыш ыуыҙҙы (һыуҙы)



(38) кчә клтмз : клмсы : лптыды :утоймды : тңры омй : ыдуҡйрсоб : бсә бртырнч : нкә : тзрбыз :

(38) кисеп килдек беҙ, : (ҡурҡып) ҡалмаҫы -- : алып!” – тинем. : Улар тойманы. : “Тәңре, Һомай, изге Ер-Һыу: “Баҫа бар!” – тигәнендә : нигә : туҙырарбыҙ?! :

(39) күстйн : нкә уҡоруҡорбыз : зтйн : нәбснлм : тглмтыдым : тгдмз : ййыдмз : кынтыкүн : клты

[84] Апаһы тархан – ҡағандың апаһы (ҡатын-ҡыҙ) тархан, йәғни Белге Утан Уҡымышлыһы үҙе – ҡағандың ошо ике туған апаһы.

(39) “(Ул) көслө” тиеп : нигә ҡурҡырбыҙ?! : “Аҙ(быҙ)” тиеп : нигә башымды алып : түгеләйем (ҡасайым)?!” -- : тинем. : Төйҙөк беҙ, : йәйҙек (тараттыҡ) беҙ. : Икенсе көн : килде,



(40) үртчә ҡызп клты : сүңсдмз : бызнтә : кыолысыңрчә : рутуҡрты : тңрыйрлҡдуҡ үчн : күстйн : быз

(40) үртсә (үрттәй, уттай) ҡыҙып килде. : Һуғыштыҡ беҙ. : Беҙҙекенән : (улар) ике өлөшкәсә (ике тапҡыр) : артыҡ ине. : Тәңре ярлыҡағаны өсөн : көсҡә тейенеп, : беҙ

(41) уҡорҡмдмз : сүңсдмз : утрдос : сдрә : бды : ййдмз : ҡғнын : утоутдмз : йбғосын : сдын

(41) ҡурҡманыҡ беҙ, : һуғыштыҡ беҙ. : (Дошман яҡта) Утордос : сатыры : ауҙы, : (ҡалғандарын) йыйҙыҡ беҙ, : ҡағанын : тотҡоҡ беҙ, : ябағаһын (ябайҙарын), : сатын (Утордосты)

(42) нтә үлрты : лгчәр : утоутдмз : олуҡтүн : боднынсйо : ыутмз : олсбғ : сдп : он уҡ бглры : укоп

(42) анда үлтерҙек, : илле сәр (ғәскәр башлығын) : тотҡоҡ беҙ, : шул уҡ төндә : бөтөнөн (халҡын) һуя : иттек (һуйҙыҡ) беҙ. : Ул һүҙҙе : ишетеп :ун уҡ бәкләре : күп



(43) клты : йүкнты : клгмә : бглрын : боднын : ытп : йығпн[ч]ә : бодн : тзмсрты : он уҡ сүсын : сүлтдм

(43) килде, : йөгөндө (теҙләнде). : Килгән : бәгләрен, : бөтөнөн (халҡын) : тотоп : йыйғанда : анса (күпмелер) : бөтөн (халыҡ) : таймыш ине (ҡасҡайны). : Ун уҡ ғәскәрен : һуғышҡа илттем. :



(44) бызймә : сүлдмз : ныртмз : йнчүгзг : кчә : тынсыоғлы : йутғмә : бңлгкутғғ : ...

(44) Беҙ йәнә : сү (ғәскәр) илттек (йөрөттөк) беҙ, : Анды артылдыҡ беҙ, : Йәнәсә ыуыҙҙы (һыуҙы) : кисеп, : Тынсы улы : ятағына -- : Бәңлегек тауға : ...



(45) тмрӄығӄә : тгы : ыртмз : нтәйнторуӄмз : ынлӄғнӄә... тзыӄ : утуӄрсын...

(45) Тимерӄапӄаға[85] : тиклем : барҙыӄ беҙ, : анда йәнә торҙоӄ беҙ. : Ынал ӄағанға... тажик : тоғроһон (тажикка буйһонғандарҙы)...



(46) нтәйырӄы : суӄбслғсоғдӄ : бодн : уӄоп : клты : олкүнтә : тгты : түрк бодн : тмрӄпғӄә

(46) андағы ерҙәге : һыу башлығы, Соғдаӄ : бөтөнө (халӄы) : күп : килде. : Ул көндә : тейҙе (етте) : төрк бөтөнө (халӄы) : Тимерӄапӄаға.

(47) тынсы оғлы йутғмәутғӄә : тгмсыды йукрмс : олйркә : бн былгә : утонуӄуӄ : тгрүткүчн

(47) Тынсы улы ятағындағы тауға : теймеш (еткән) инек, : (ул) юӄ имеш. : Ул ергә : мин, Белге : Утан Уӄымышлыһы, : тейгерткәстен (ғәскәремде еткергәстен)

(48) срғлутон : үрңкүмс : ӄызуӄодз : грытбы : ғыбоңсз : клүрты : ылтрсӄғн : былгсын үчн

(48) һары алтын, : затлы көмөш, : ӄыҙы-ӄырӄыны : гуртауы (көтөүе) : ығылып моңһоҙ (мәшәӄәтһеҙ) : килер ине. : Илтиреш ӄаған : Белгеһе (бар) өсөн,



(49) лпын үчн : утбғчкә : йты йгрмы : сүңсды : ӄыутнӄә : йтысүңсды : оғзӄә : бссүңсды : нтә йғочы :

(49) алыптары (бар) өсөн : утбағыусыға (ӄытайға ӄаршы) : егерме ете : (тапӄыр) һуғышты, : ӄыутанға (ӄатай-көҙәнгә ӄаршы) : ете (тапӄыр) һуғышты, : уғыҙға (ӄаршы) : биш (тапӄыр) һуғышты, : анда яусы (яу башлығы булып) :



(50) ймә : бн : бртм : йғычсы : ймә бн ртм : ылтрс ӄғнӄә : ...түркбгүӄғнӄә : түрк былгә ӄ...

(50) йәнә : мин : барҙым -- : яусыһы (яу башлығы) : йәнә мин инем. : Илтиреш ӄағанға : (...бөтөн) төрк бағынғанға (күрә), : (уға) Төрк Белге ӄ[86]...

---

[85] Тимерӄапӄаға – Дербент ӄәлғәһенә.

[86] "Төрк Белге ӄаған ләӄәбен бирҙем" булһа кәрәк.

(51) ҡпғнҡғн : ...түнодмуты

(51) Ҡапаған ҡаған : ...төн үтмәне,

(52) күнтз : олрмуты : ҡызлҡнм : ткты : ҡрәтрм : йүгрты : сгкүчгбртмк : бн үзм : ознйлмг : ймә : ыутмуҡ

(52) көндөҙ : (тыуып) өлгөрмәне -- : ҡыҙыл ҡаным : түгелде, : ҡара тирем : йүгерҙе. : Эҫе көсөмдө бирҙем ки : мин үҙем : оҙон юлымда. : Йәнә үттем ки



(53) рҡойкрғоғ : олғрутдм : бснғмә : йғығ : клүрыррым ҡғнмн : сүлтдмз : тңры йрлҡзо

(53) Арҡой ҡарағаса. : Оло ҡыр(ла) үттем, : боҫонғома (боҫоноу урыныма) : йәйәү : килер инем. Ҡаған менән : сү (ғәскәр) илттек беҙ. : Тәңре ярлыҡаны –



(54) бо түрк боднҡә : йрҡлғйығ : клтүрмдм : түгнлгутғйүгртмдм : ылтрс ҡғн : ҡзғнмср :

(54) был төрк бөтөнгә (халҡына) яраҡлыҡ (көплө-ҡораллы дошман) яуын : килтертмәнем, : түгенлек (бөлгөнлөк) утын йүгертмәнем. : Илтиреш ҡаған : ҡаҙанмаһа әгәр, :



(55) одо бн үзм : ҡзғнмср : ылймә : боднймә : йукртчырты : ҡзғнтуҡын үчн : одоғзм : ҡзғнтуҡмүчн : олғболтм : нңйрдкы : ҡғнлғ : боднкә :

(55) ошо мин үҙем : ҡаҙанмаһам әгәр... : Илемә, : бөтөнөмә : йоҡ арттырыусан : ҡаҙаныштарым өсөн, :ошо үҙемдең : ҡаҙанышым өсөн, : олоғ булдым. : Анаң-Ерҙәге : ҡағанлыҡҡа, : бөтөнгә (халыҡҡа), :



(56) ылймә : ылболты : боднймә : боднболты : үзмҡрыболтм : олғболтм : нңйрдкы : ҡғнлғ : боднҡә :

(56) илемә -- : ил булды, : бөтөнөмә (халҡыма) -- : бөтөнлөк булды, : уҙем ҡары (ил инәһе) булдым, : олоғ булдым. : Анаң-Ерҙәге : ҡағанлыҡтың : бөтөнгә (халыҡҡа ҡарата)

(57) бунтты : бррср : нәбоңы : бррртчырмс

(57) мөнтөгө (етешһеҙлеге) : бар иһә (булһа), : моңһоҙо бар (буласаҡ)-артасаҡ имеш.

(58) түрк былгә ҡғн : ылңә : бытытдм : бн былгә утонуҡуҡ :

(58) Төрк Белге[87] ҡаған : иленә (быны): яҙҙырттым : мин – Белге Утан Уҡымышлыһы.

(59) ылтрыс ҡғн : ҡзғнмср : йуҡртрср : бн үзм былгә утонуҡуҡ : ҡзғнмср : бн йуҡртмср

(59) Илтиреш ҡаған : ҡаҙанмаһа, : юҡ (ине) артыр сара; : мин үҙем, Белге Утан Уҡымышлыһы, : ҡаҙанмаһам, : минһеҙ юҡ (ине) артыр сара.



(60) ҡпғн ҡғн : түрксыр бодн : йрынтә : бодйма : боднйма : кысыйма : ыдыйуҡртчырты :

(60) Ҡапаған ҡағандың : төрк-сыр (Үҫәргән) бөтөн (халҡы) : ерендә : бөтәйеү, : бөтөнәйеү (халыҡ булып тупланыу), : кешеләнеү (кеше һаны ишәйеү) : сараһы юҡ, артыш (артыу) юҡ ине.



(61) ылтрс ҡғн : былгә утонуҡуҡ : ҡзғнтуҡ үчн : ҡпғн ҡғн : түрксыр бодн : йорыдуҡыбо

(61) Илтиреш ҡаған, : Белге Утан Уҡымышлыһы : (бергәләп) ҡаҙанғаныбыҙ өсөн : Ҡапаған ҡаған(дың) : төрк-сыр (Үҫәргән) бөтөнө (халҡы) : йөрөйҙөр (йәшәйҙер).



(62) түрк былгә : ҡғн : түрксыр боднғ : оғз боднғ : ығдүолрор

(62) Төрк Белге : ҡаған : төрк-сыр (Үҫәргән) бөтөнгә (халҡына), : уғыҙ бөтөнгә (халҡына) : игелекле (булып) ултырҙы (тәхеттә).

Шулай итеп, тамам – үткән быуатта уҡ башлаған, ныҡышмаланып соҡсонған эшемә, ниһәйәт, аҙаҡҡы нөктә ҡуйылды -- Хоҙай Бабайға шөкөр! Бөйөк текстарыбыҙҙың икеһен дә ырын-хәрефтәрҙән туранан-тура әҙмә-әҙлекле уҡып, аҡҡа күсереп бирҙем. Был ядкәрҙәр – мәңге көсөн юғалтмаҫлыҡ тәрбиәүи-рухи ҡорал ул! Бабаларыбыҙҙың йөрәк көсөргәнеше

[87] Төрк Белге – Илтиреш ҡағандың һуңғы ләҡәбе.

ырын-яҙыу юлдарында йәҙрәләге дарылай тынҡыслап төйөлгән. Һәммәһен, түкмәй-сәсмәй, мәктәп дәреслектәренә индерергә кәрәк ине лә бит...
28.11.06.

ОЛО ҺӘМ КЕСЕ ЯҘЫУҘАРҘЫҢ ХӘҘЕРГЕ ӘҘӘБИ ТЕЛЕБЕҘГӘ ИРКЕН КҮСЕРЕЛЕШЕ

1. ОЛО ЯҘЫУ

(1) Өҫтә Күк-Тәңре, аҫта Көрән Ер яһалғанда ике арала кеше улы яһалды. Кеше улынан өҫтә Әсәм-Апам (текст авторы Юллыҡтуғандың үгәй әсә-апаһы Белге Утан Уҡымышлыһы), Быуман-ҡаған, Истәми-ҡаған ултыра. Ултырып, төрк[88] бөтөндөң (халҡының) илен, турыһын (ҡанунын) тота торған ине. Бирелгән (2) дүрт тарафында күп яу-дошман бар ине. Ғәскәр ебәреп-һуғыштырып, дүрт тарафындағы халыҡтарҙы күп алды, күптәрҙе емерҙе, башлыларын йөгөндөрттө, теҙлеләрен сүктертте. Алғараҡ (көнсығышҡараҡ) Ҡыҙырған юшауға-үләнлеккә тиклем, кирегә (көнбайышҡа) -- Тимерҡапҡаға (Ҡафҡаздағы Дербентҡа) тиклем еткереп ҡундырҙы ғәскәрен. Ике арала (Уралда) (3) йәшәй ине үкһеҙ-яңғыҙы төрк халыҡ. Анда тәхеттә ултырыусы Белге ҡаған[89] ине, алып-батыр ҡаған ине – бойороҡтары ла белдекле ине бит, алып-батыр ине бит! Бәктәре (бейҙәре) йәмғеһе, бөтөн халҡы йәмғеһе уға тоғролоҡло ине – илен шулай ҡулында тота ине бит, илен ҡулында тотоп, хөкөм итә ине; үҙ үлеме менән (4) гүр эйәһе булды. Юҡһыныусылар, һыҡтаныусылар шунда көнсығыштан – мүкле сүлдәгеләр, утбағыусы (ҡытай), тибет, абар, римле, ҡырғыҙ, өс уғыр хан, ватыусы ут атар[90], ҡатай-көҙән, татабы[91] -- барса халыҡ килеп һыҡтанды, иланы. Шундай көйлө-шәп ҡаған ине. Андан һуңыраҡ энеһе ҡаған (5) булды бит, улы ла ҡаған булды бит. Андан һуңыраҡ энеһе әсәһендәй[92] булманы бит, улы ла ҡаңындай -- атаһындай[93] булманы бит, белекһеҙ ҡаған ултырҙы бит, ябалаҡ-яман ҡаған ултырҙы бит, бойороғо ла белекһеҙ ине бит – яман ине бит. (6) Бейҙәре, бөтөн халҡы тоғролоҡһоҙ булғаны өсөн, утбағыусы (ҡытай) халҡы ярығыбыҙҙы (берҙәм булмауыбыҙҙы) күрә алғаны өсөн, арбаҡлағаны (үҙенә ҡаратҡаны) өсөн, энеле-әсәле барыһы ханға ҡаршы һуғышҡаны[94] өсөн, бейле бөтөнлөгөн йомшартҡаны өсөн төрк бөтөн халҡы иләүләнгән илен ҡулынан ысҡындырҙы, (7) ҡағанланған ҡағанын йотторҙо утбағыусы (ҡытай) халҡынан. Бейлек, ир-улан ҡол булды, һылыу ҡыҙ, улан күң (күндәм хеҙмәтсе) булды, төрк бейҙәре төрк исемен юйҙы һәм әүерелде утбағыусыға (ҡытайға); бейҙәр, утбағыусы (ҡытай) исемен алып, утбағыусы (ҡытай)

---

[88] Төрк – Тороҡ (Тора) тау хоҙайы Тәңрегә (фаллосҡа) табыныусы башҡорттар, улар менән 922 йылда Башҡортостан тупрағында ғәрәп илгиҙәре Ибн-Фаҙлан да осрашҡан.

[89] Белге ҡаған йәки Төрк Белге ҡаған – Илтиреш ҡағандың һуңғы маҡтаулы ләҡәбе.

[90] Ватасы ут атар – бәғзеләр быны “утыҙ татар” тип уҡый. Минеңсә, был – ватҡыс артиллериянан ут атып һуғышыусы айырым ҡытай, йәки вьетнам иле булһа кәрәк.

[91] Татабы – татар.

[92] Йәғни атаҡлы үгәй әсәһе – Белге Утан Уҡымышлыһыһындай.

[93] Йәғни Илтиреш ҡағандай.

[94] Илтиреш ҡағанға тиклемге “ябалаҡ” (ямаҡ) ханды уға ҡаршы баш күтәреүселәр үлтереп, халыҡ Ҡытай ҡулы аҫтына ыға.

ҡағанға (8) буйһондо. Илле йыл уға эҫе көсөн бирҙе. Анан ары көн тыуышҡа (көнсығышҡа) – Мүкле ҡағанға тиклем һуғышып барҙы, ултыраҡлы Тимерҡапҡаға (Дербентҡа) тиклем һуғышып барҙы, утбағыусы (ҡытай) ҡағанға илен, ҡанунын хеҙмәт иттерҙе. Төрк ҡоро булған күмәк (9) халыҡ – ир-әсә әйтә ине: "Илле-дәүләтле бөтөн халыҡ инем, илем өмөтө ҡайҙа? Инде кем файҙаһына дәүләтселлек ҡаҙанырмын? – тиер ине. – Ҡағанлыҡлы бөтөн халыҡ инем, ҡағаным ҡайҙа? Ниндәй ҡағанға эҫе көсөмдө бирермен?!" – тиер ине. Ана шулай тип, утбағыусы (ҡытай) ҡағанға яу (дошман) булды. (10) Яу булып, этләнеп, йортонда өмөтһеҙлөк сикте йәнә. Барса эҫе көсөн бирә тороп, ысҡынманы (азат булманы). Төрк бөтөн халҡы "үләйем, ырыуымды серетәйем", тир ине, юғалыуға барыр ине. Өҫтә төрк Тәңреһе, аҫта төрк изге Ере (11) һүҙен ошолай әйтте: "Төрк бөтөн халҡы юҡ булмаһын! – тиеп. – Бөтөн халыҡ булһын!" – тиеп. Ҡаңым (атам) Илтиреш ҡағанды, өгәм (үгәй анам) Ил Белге ҡатынды[95] Тәңре түбәһенән ҡағып (һөйөп) юғары күтәрҙе бит! Ҡаңым (атам) ҡаған егерме ете ир менән юл үтергә сыҡты, үтешендә (12) уның хаҡта, өйөр-өйөр күс (ғәскәр) төйнәй, тип ишетеп, балыҡтағылар (ҡалалағылар) тауға ыҡты (ағылды), тауҙағылар килде -- тирелеп (йыйылып), етмеш ир булды. Тәңре көс биргәне өсөн, ҡаңым (атам) ҡағандың һуғышсылары бүреләй ине, дошмандары ҡуйҙай ине. Алға (көнсығышҡа) ҡарай ғәскәрен йөрөтөп халҡын тирҙе (йыйҙы), күмәк ир итте. (13) Күмәге ете йөҙ ир булды, ете йөҙ ир булып алыштылар. Ҡаған аҫрамыш бөтөн халыҡты, ошоғаса ҡытайға күндәм хеҙмәтсе тигән, ҡол тигән бөтөн халыҡты, төрк ҡанунынан ысҡынған бөтөн халыҡты әсәм-апам[96] ҡанунынса йөрөттө. Төләстә[97] ултыраҡланып йәшәгән (14) ябайҙары, саты (хан нәҫелдәре) бергә барҙы. Бирелә (көньяҡта) утбағыусы (ҡытай) бөтөн халҡы яу-дошман ине. Арыла (төньяҡта) Абыз ҡағандың туғыҙ уғыҙ[98] бөтөн халҡы яу-дошман ине. Ҡырғыҙ, уйғыр хан, ватыусы ут атар, ҡатай-көҙән, татар – күп яу-дошман ине. Ҡаңым (атам) ҡаған быларға ҡаршы (15) ҡырҡ артығы ете (йәғни 47) юлы (тапҡыр) һуғышҡа йөрөнө, егерме һуғышта һуғышты. Тәңре ярлыҡағаны өсөн иллеләрҙе илһеҙ итте, ҡағанлыларҙы ҡағанһыҙ итте, ҡаршы яуҙарҙы боҙҙо-ҡыйратты, теҙлеләрҙе сүктерҙе, башлыларҙы йөгөндөрҙө (тубыҡландырттып бил бөктөрттө). (16) Шулай ҡанундар ҡаҙанып осто – вафат булды. Ҡаңым (атам) ҡаған зыяратына дошманыбыҙ башлығы Абыҙ ҡағанды һынландырған балбалдар (тораташтар) теҙеп ҡуйылды. Ул турыла (тәңгәлдә) өҫтә -- әсәм һәм ҡаған ултыра[99]. Әсәм һәм ҡаған, бергә ултырып, төрк бөтөн халыҡты йәшәтте, йәшәү сығанағы сәсте. (17) Әсәм менән ҡаған ултырғанда үҙем тордош (хәҙерге төркмән?) бөтөн халҡы өҫтөндә сат-солтан инем. Әсәм һәм

---

[95] Өгәм (үгәй анам) Ил Белге ҡатынды – был юлдарҙы яҙыусы Юллыҡ-туған уны, Белге Утан Уҡымышлыһын, Ил Белеге тип кенә исемләй. Илтиреш ҡаған, үҙе яу юлында саҡта өйҙә ҡалған ҡатыны вафат булғанын ишетеп, уны ерләргә ҡайтып китә (Белге Утан Уҡымышлыһы яҙған ядкәрҙең 31-енсе юлын ҡарағыҙ). Ә инде был ядкәрҙең ошо 11-енсе юлына ҡарағанда, тол ҡалмыш Илтиреш ҡаған үҙенең данлы ғәскәр башлығы һәм кәңәшсеһе, ике туған апаһы (старшая сестра) Белге Утан Уҡымышлыһына өйләнгән булырға тейеш; ә тәүге ҡатынынан тыуған улы Юллыҡ-туғанға (был ядкәрҙең авторына) ул ысынлап та "өгәм" (үгәй анам) булып сыға.

[96] Йәғни үгәй әсәһе (апаһы) Белге Утан Уҡымышлыһы төҙөгән ҡанун.

[97] Төләс – Талас, хәҙерге Ҡырғыҙстандағы ҡала.

[98] Туғыҙ уғыҙ – Кубәләк-Тиләү башҡорттары бабаларының туғыҙ ырыулы ҡәбилә берлеге.

[99] Авторҙың үгәй әсәһе Белге Утан Уҡымышлыһы менән атаһы Илтиреш ҡаған берлектә идара итеүенә ишара.

ҡаған менән бергә алғары (алдағы – көнсығыштағы) Йәшел ыуыҙҙағы[100] Шантуң[101] яҫылығына тиклем ғәскәр илттек беҙ, уйғыр ҡырына, Тимерҡапҡаға (Дербентҡа) тиклем етеп һуғыштыҡ беҙ. Күгмән[102] аша килеп (18) күмәге утыҙ биш тапҡыр ғәскәр илттек беҙ, егерме өс тапҡыр һуғыштыҡ беҙ, иллеләрҙе илһеҙ иттек беҙ, теҙлеләрҙе сүктерҙек беҙ, башлыларҙы йөгөндөрҙөк беҙ. Төргөш ҡаған үҙ төркөбөҙ (19) булғаны өсөн, шулай була тороп та, беҙгә ҡарата яңылышлығы өсөн ҡағаны үлде, бойороғо (бойороусы вәзире – премьер-министры), бейҙәре лә үлде. Ун уҡлы бөтөн халҡы имгәк (ыҙа) күрҙе. Әсәбеҙ-апабыҙ ҡулында тотҡан[103] ер-һыуы эйәһеҙ булмаһын тип, аҙ һанлыны бөтөн халыҡ итеп яратыусы инсан (20) Барс бей ине. Ҡаған исемен бында уға беҙ бирҙек, уға кесе һеңлемде бирҙек. Үҙе яңылышты – ҡағанлығынан осто (вафат булды), бөтөн халҡы, күндәмдәре (хеҙмәтселәре) ҡол булды. Күгмән ер-һыуы[104] эйәһеҙ ҡалмаһын тип, аҙғын ҡырғыҙ бөтөн халҡы йортона (21) йәнә барҙыҡ беҙ. Алғары (көнсығыштағы) Ҡыҙырҡан юшығы (үләнлеге) аша уҙып, бөтөнөһө нисәмә көн торҙоҡ беҙ, ни саҡлым юл үттек беҙ! Ирегә (көнбайышҡа) ҡарай Киң Үтәрмәнгә тиклем төрк бөтөн халҡын ана шунса киңлеккә ҡундырҙыҡ (йәйелдерҙек) беҙ, шунса ерҙе ҡулда тоттоҡ беҙ; ул ваҡытта ҡол – ҡоллоғон белмәҫ ине. (22) Шунса ҡаҙанған илебеҙ, ҡаныбыҙ бар ине. Төрк, уғыҙ бейҙәре, бөтөн халҡы ишетегеҙ! Өҫтән Тәңре баҫмаһа, аҫтан Ер теленмәһә, -- төрк халҡы, һинең илеңде, ҡаныңды кем арытты (көсһөҙләндерҙе)?! (23) Үкен! Кирелегең менән игелекле Белге ҡағанға ҡаршы барып, изге илеңә ҡайһындай ҙа яңылышлыҡ, яманлыҡ килтерҙең! Һуғыш яраҡлылар ҡайҙан булһа ла өҫтөңә килдеме, йәнеңде алдымы; һөңгөлөләр ҡайҙан булһа ла өҫтөңә килдеме, бала-сураны алдымы? (Утбағыусыға – ҡытайға хеҙмәт итеп,) изге Үтәкән юшауына (үләнлегенә) (24) барҙың, кирегә (көнбайышҡа) ҡарай барыуға барҙың, барған ерҙә гелән шул ине бит: ҡаның һыуҙай йүгерҙе (аҡты), һөйәгең тауҙай ятты, бейлек ирең-улың ҡол булды, һылыу ҡыҙ, улың күндәм (хеҙмәтсе) булды. Шуларҙы белдерер өсөн, (25) дошманыбыҙ башлығы ҡырғыҙ ҡаған һынлы балбалдар (тораташтар) теҙҙем. Төрк бөтөн халҡының исеме, күсе юҡ булмаһын, тиеп, ҡаңым (атам) ҡағанды[105], өгәм[106] (үгәй анам) ҡатынды[107] күтәргән Тәңре, ил биргән Тәңре: "Төрк бөтөн халҡының исеме, күсе юҡ булмаһын", -- тип, мине лә ҡаған итеп ултыртты бит. Аның байып-йәлсегән бөтөнөнә-халҡына ултырманым, эсендә ашһыҙ, тышында тунһыҙ яуыз-яман бөтөндөң-халыҡтың өҫтөнә ултырҙым. Энем Көлитуған менән бергә һөйләштек беҙ: "Ҡаңыбыҙ (атабыҙ) һәм әсәбеҙ ҡаҙанышын юғалтмайыҡ!" -- (27) тиеп. Төрк бөтөн халҡым өсөн төн йоҡламаным, көндөҙ тик ултырманым, энем Көлитуған менән бергә, ике сат (хан нәҫеле) менән бергә оло етешлектәр ҡаҙандым. Шунса ҡаҙанып, хатта бер-ике генә халыҡҡа ла ут-һыу зыяны ҡылманым. Мин (28) барған һәр бөтөн халыҡ үлергә етешеп, йәйәүлеһе, яланғасы яныма килде. "Бөтөнөмдө-халҡымды игелекләйем!" –

---

[100] Йәшел ыуыҙҙағы – Йәшел йылғалағы, хәҙерге Ҡыуанһыу (Хуанхэ).

[101] Шантуң – хәҙерге Пекин янындағы ҡала.

[102] Күгмән – Күк Ирәндек (Көньяҡ Ирәндек) тауы.

[103] Белге Утан Уҡымышлыһы сығарған ҡанундар буйынса йәшәүсе.

[104] Күгмән ер-һыуы – Күк Ирәндек ер-һыуы – Төрки ҡағанаттың ҡағандар тоҡомон башлаусы Әсинә (Үҫәргән) башҡорттарының тыуған төйәге.

[105] Илтиреш йәки Төрк Белге ҡағанды.

[106] Өгәм – үгәйем, ә был осраҡта "үгәй анам" тигән һүҙ.

[107] Белге Утан Уҡымышлыһын.

тип, йырағырак (төньяккарак) уғыҙ-бөтөнгә үттем, алғарак (көнсығышкарак) катай-көҙән, татабы-татар бөтөндәренә үттем, бирегәрәк (көньяккарак) утбағыусыға (кытайға) үтеп, егерме ике тапкыр оло һуғыш (29) кисерҙем. Тәңре ярлыканы: котом бар өсөн, өлгөм бар өсөн үлеп барыусы бөтөн халыкты терелеүсе иттем, яланғас бөтөн халыкты тунлы иттем, юксыл бөтөн халыкты байыттым, аҙ һанлы бөтөн халыкты ишәйттем. Уғыры (уйғыр) иллегендәге (30) бөтөн халыкка күп кыйралыш килтерҙем, уларҙы яуһыҙ-ғәскәрһеҙ кылдым, күбеһе миңә караны (буйһондо), эҫе көсөн бирҙе. Шунса хакимлык каҙанып, энем Көлитуған үҙ үлеме менән гүр эйәһе булды. Атам каған осканында (вафат булғанында) энем Көлитуған ете йәштә калғайны. (31) Һомайҙай өгәм (үгәй анам) катын[108] катарында энем Көлитуған ир-ат булды[109]. Егерме алты йәшендә әсәм менән кағандың илен, канунын – шунса каҙанышты алға илтешеп, Соғдка үтеп кереп һуғыштык беҙ, уны боҙҙок (кыйраттык) беҙ, утбағыусының (кытайҙың) уң тотоғон (уң флангаһын тотоусы ғәскәрен) баҫтык. (32) Көлитуған йәйәүләп иң алға ташланды, уң тоток башлығының эйәрсенен – коралланып каршы килгәнен тотто, шул кораллыны кағанға инселәне (бүләк итте). Оло һуғышта аларҙы юк кылдык беҙ. Энемдең утыҙ бер йәшендә сәсә-сәңкемгә[110] каршы һуғыштык беҙ, иң алға үткән осорҙа буҙы (буҙ аты) (33) үлде. Икенсе тапкыр Эшбара Ямтарҙың буҙ атын менеп ташланды, ул аты ла үлде. Өсөнсө тапкыр Йөгөнһөлөк бейҙең ике аҙымлык юрға туры атын менеп укталды, ул аты ла үлде. Елгәнендә ярағына (һуғыш кейеменә) йөҙҙәрсә ук кундыртты, еҙле (еҙ кәпәсле) башына берәүе (34) тейгәнен һеҙ, төрк бейҙәре, ошоно укып белерһегеҙ. Ул һуғышсыларҙы анда (шул урында) юк кылдык беҙ. Анан һуңырак Ер-Байырка, Оло-Иркен беҙгә яу (дошман) булды. Аларҙы еңеп, Түрге Йырғын (Байкал) күлдә боҙҙок (кыйраттык) беҙ. Олоғ-Иркен аҙ ғына һанлы ирен (һуғышсыларын) теҙеп каршы барҙы. Көлитуған утыҙ алты йәшендә сакта кырғыҙға үтеп кереп һуғыштык беҙ. Һөңгө бөтөмө (буйы) тәрән карҙы сығып, Күгмән (Күк Ирәндек) юшауҙы (үләнлекте) үткәнсе йөрөп, кырғыҙ бөтөн халкын йоклағанында баҫтык беҙ, каған менән Сөң юшауҙа һуғыштык беҙ. Көлитуған Байыркының ак айғырына (36) менеп иң алға ташланды, бер иргә уғын атты, гүр эйәһе итерлек сәнсте. Ул бәрелештә Байырканың ак айғырының ботон сыя аттылар. Кырғыҙ каганын үлтерҙек беҙ, илен алдык беҙ. Ул йылда То- (37) утокка Иртыш ыуыҙын (һыуын) кисеп йөрөнөк беҙ, төргөш бөтөн халкын йококонда баҫтык беҙ. Төргөш каған һуғышсылары Болсала ут бөрсәһеләй ябырылып килде, һуғыштык беҙ. Көлитуған башка буҙатын менеп ташланды, башка буҙы к... (38) тотторҙо... икеһен үҙе алдырҙы. Анда йәнә кереп, Төргөш каған бойороғон (бойороусы вәзирен – премьер-министрын), аҙау[111] тотоғоноң (башлығының) элеген (кулын – ярҙамсыһын) тотто. Каганын шунда үлтерҙек беҙ, илен алдык беҙ. Кара төргөш бөтөн халкын Табарҙа кундырҙык (урынлаштырҙык). (39) Соғдак бөтөн халкынаса үтәйек, тиеп, Йәнәсәй ыуыҙҙы (һыуҙы) кисеп, Тимеркапкаға (Дербентка) тиклем һуғышып барҙык беҙ. Шунан һуңырак кара төргөш бөтөн халкы беҙгә яу-дошман булды. Куңырһыуҙы үтеп барҙык. Беҙҙең һуғышсыларҙың аты ороток (арык), аҙығы юк ине. Яман кеше ир (40) алып-

[108] Катын – каған катыны Белге Утан Укымышлыһы.

[109] Көлитуған батырҙы уның үгәй анаһы Белге Утан Укымышлыһы тәрбиәләп ир-ат корона еткергән.

[110] Сәсә-сәңкемгә -- Үҫәргән ырыуының Әсә-Бүрегә табыныусы әсә тармағына.

[111] Аҙау башкорттарының һәм каҙактарының бабалары.

батырҙары беҙгә ташланды. Шундай мәлгә үкенеп, Көлитуғандың аҙ һанлы ирен (яугирҙәрен) алдан йөрөтә инек беҙ. Оло һуғышта һуғышты ул. Алып-батыр Шалсының аҡ атын менеп ташланды, ҡара төргөш бөтөн халҡын шунда үлтерҙе, алды. Йәнә йөрөп, (41) ...менән, Ҡошсо[112] тотоғо (башлығы) менән һуғышты, яугирҙәрен күп үлтерҙе, улъя-әйберен барыһын да күп килтерҙе -- Көлитуғандың утыҙ ете йәшендә ине. Ҡарлуҡ бөтөн халҡы орола-бәреләдыуамалланып беҙгә яу-дошман булды, Изге Тамаҡ (Иҙелтамаҡ?) һыуы башында һуғыштыҡ беҙ. (42) ...Көлитуған ул һуғышта утыҙ йәш йөрөр ине, алып-батыр Шалсы атын менеп иң алға ташланды, ике яугиргә үтәләй сәнсте. Ҡарлуҡтарҙы үлтерҙек беҙ, алдыҡ беҙ. Аҙау бөтөн халҡы беҙгә яу-дошман булды, Ҡара күлдә[113] һуғыштыҡ беҙ, Көлитуғанға ҡырҡ бер йәш йөрөр ине; алып-батыр Шалсы ағын (аҡ атын) (43) менеп... иң алға ташланды, аҙау илтабарын тотто, аҙау бөтөн халҡы шунда юҡ булды. Әсәм һәм ҡаған иле ҡумшыҡ (йомшаҡ) булғанында, бөтөн халҡы игелекле булғанында әсәгел[114] бөтөн халҡы менән һуғыштыҡ беҙ. Көлитуған алып-батыр Шалсы ағын (аҡ атын) менеп (44) иң ал...ды, ул атынан төштө... Әсәгел (Үсәргән-Болғар) ... үлде. Туғыҙ уғыҙ бөтөн халҡы кәнде[115] бөтөнөм-халҡым ине; Тәңре, Ер болғанғаны өсөн, беҙгә яу-дошман булды. Бер йылда биш юлы (тапҡыр) һуғыштыҡ беҙ. Иң элек Туҡ-болаҡта[116] һуғыштыҡ беҙ.(45) Көлитуған аҙау менгеһен менеп иң алға ташланды, алты яугиргә сәнсте, шул бәрелешендә етенсе яугирҙе ҡылысланы. Үҙ ҡышлағында даз (тажик) менән һуғыштыҡ беҙ, Көлитуған аҙау көрәнен менеп, иң алға ташланып, бер яугиргә сәнсте, (46) туғыҙ ирҙе өйөрөп туҡманы, тажик бөтөн халҡы шунда үлде. Өсөнсө юлы Бол...нда уғыҙ менән һуғыштыҡ беҙ. Көлитуған аҙау менгеһен менеп ташланды, сәнсте. Һуғышсыларын сәнстек беҙ, илен алдыҡ беҙ. Дүртенсе юлы Сош йылғаһы башында һуғыштыҡ беҙ. Төрк (47) бөтөн халҡының аяғы ҡаймылышты, ямаҡ булды...ине. Шул саҡ килгән дошман һуғышсыларын Көлитуған ығытып (ҡыуып), Төңрә[117] тигән бер ырыуҙың алып-батырын, ун яугирен, шулар Тоңатуғанды йыйғандарында (ерләгәндәрендә) өйөрөп үлтерҙек беҙ. Бишенсе юлы Эҙгәнте Ҡадаҙҙа уғыҙ менән һуғыштыҡ беҙ. Көлитуған (48) аҙау көрәнен менеп ташланды, ике яугиргә сәнсте, ҡәлғәгә ебәрмәне, ул дошман һуғышсылары шунда үлде. Мағы Ҡорғанда[118] ҡышлап, яҙында уғыҙға ҡарай һуғышҡа сыҡтыҡ беҙ. Көлитуған бей башлығында ыҡтыҡ (киттек) беҙ. Уғыҙ яуы урҙаны баҫты. Көлитуған (49) маҡтаулы үҙ ағын (аҡ атын) менеп, туғыҙ яугирен сәнсте, урҙаны бирмәне. Өгәм (үгәй анам) ҡатын, ололарым, улдарым, өкәләрем (икәтәйҙәрем), килендәрем, ҡанбабаларым, барсағыҙ ҙа – тереләрегеҙ – ул дошмандарға күндәм-хеҙмәтсе булыр инегеҙ, үлеләрегеҙ йортта, юлда аунап ятып ҡалыр инегеҙ – (50) Көлитуған юҡ ине булһа (булмаһа), күп үләсәк инегеҙ. Энем Көлитуған гүр эйәһе булды. Үҙем һағындым-һыҡтандым, күрер күҙем күрмәҫтәй булды, белегем (аңым) белмәҫтәй булды, үҙем һағындым-һыҡтандым. Үтәһен (ғүмер ахырын) Тәңре яҫар, кеше улдары күп

[112] Ҡошсо – башҡорттоң Ҡошсо ырыуы.
[113] Ҡара күлдә -- Ҡара диңгеҙ янында.
[114] Әсәгел (Әсәрген) – башҡорттоң Үсәргән ҡәбиләһенең көнбайыш тармағы -- болғарҙар.
[115] Кәнде – үҙ.
[116] Туҡ-болаҡ – хәҙерге Ырымбур өлкәһендәге Туҡ йылғаһы.
[117] Төңрә -- Таңғауыр башҡорт ырыуы.
[118] Мағы (Могучий) Ҡорған – Урта Азиялағы хәҙерге Кәттә Ҡорған ҡалаһы.

үлгеләп торор. (51) Шундай ҙа һағындым-һағышландым, күҙгә йәш килер ине лә күңелгә һағыш килер ине лә яңынан уғата ҡаты һағындым-һыҡтандым, ҡаты һағындым-һыҡтандым. Ике саттың (хан нәҫеленең) – энеләремдең, улдарымдың, бейҙәремдең, бөтөн халҡымдың илауҙан күҙе-ҡашы ямаҡ булды бит, тип һыҡтандым. Юҡһынып һыҡтауға (йола үтәүгә) ҡатай-көҙән, татабы (татар) халыҡтары башлығы булып (52) Уҙыр-сәнкем килде. Утбағыусы (ҡытай) ҡағандан Ысйы Ослоғо килде, ун бер меңлек алтын-көмөш үлентеге килтерҙе. Тибет ҡағанынан Билән килде. Ҡырый (алыҫ) көнбатыштағы, Соғдтың барса ҡорондағы, Бохара ылыҫындағы бөтөн халыҡтарҙан Анаң-сәнкем, Уғыл-тархан килде. (53) Ун Уҡтан[119] -- улым, Төргөш ҡағандан – Маҡрас тамғасы, уғыҙҙан – Белге тамғасы килде. Ҡырғыҙ ҡағандан – Тордош Инаныс Сор килде. Бурау итеүсе (бина бураусы), биҙәкле һуңғы йортона яҙыулы таш итеүсе (яһаусы) – утбағыусы (ҡытай) ҡағандың сығаны (ике туған ҡустыһы) Саң-сәңкем[120] килде.

Көлитуған ҡуй йылында беренсе айҙың егерме етеһендә осто (вафат булды), туғыҙынсы айҙың утыҙында яҡ (таш битен) ырҙырттыҡ беҙ. Бураһын, биҙәген, яҙыулы ташын мәсен йылдың етенсе айының утыҙында күмәкләп ололаныҡ беҙ. Көлитуған үлгәндә ҡырҡ артығы ете (ҡырҡ ете) йәшендә булды. Ташсыларҙы, барса биҙәкселәрҙе Тойғон Илтабар килтерҙе.

Оло Яҙыу тексы тамам

2. КЕСЕ ЯҘЫУ

(1) Белге[121] Утан[122] (ҡытай тәхетендә танғауыр-үҫәргән башҡорттары ултырған Тан дәүләте) Уҡымышлыһы тигән ләҡәпле мин үҙем утбағыусы[123] илендә ҡылындым

---

[119] Ун уҡ – 635 йылда Көнбайыш Төрки ғағанат ҡағаны Эшбара ҡулынан "автономия" хоҡуғы алған үҫәргәндәр. Б.э. тиклем 105 йылда хәҙерге Башҡортостандың Таштуғай төбәгендә төйәкләнмеш Әлми хандың башҡа сығарылған ике улы Дала һәм Насипбай кешеләренән дауамланған ҡуш ҡәбилә тармаҡтары һәр береһе бишәр ырыу тәшкил итеп (Үҫәргән ырыуы әлегәсә биш аранан хасил), йәмғеһе ун булғанлыҡтан, унауына ла үҙ ҡәбилә башлығы *сат (шад)* һайлап ҡуйыу хоҡуғының билдәһе – ун уҡ тапшырылғанлыҡтан, улар "ун уҡ" берлеге тип йөрөтөлгән.

[120] Ҡытай императоры булып башҡорт ултырғанлығына бер дәлил.

[121] Белге – белгес, белекле, белемле зат тигән маҡтаулы ләҡәп.

[122] Утан (Тан) – утлы ҡоралға эйә дәүләт мәғәнәһендә; заманында сяньби-үҫәргән башҡорттары яулап алып төҙөгән һәм хаҡимлыҡ иткән Ҡытай империяһы (618 – 907 йй.). Был дәүләттә беренсе башлап "утлы уҡ" тигән ҡорал һуғышта киң ҡулланыла: "Термин "хо цзянь" интерпретировать нетрудно – это "огневая", или зажигательная стрела, применение которой, вероятно, столь же древнее, сколь и появление лучного оружия. В китайской военной истории немало примеров огневого нападения с помощью зажигательных стрел... В период Тан (беҙҙеңсә, Утан. – *Й.С.*) к древку стрелы привязывали керамический сосуд... с горячим составом, продевая привязь через два отверстия в наконечнике стрелы".(С.А. Школяр. Китайская доогнестрельная артиллерия. М., 1980, стр. 165). Быным график һыҙылышын бәғзе авторҙар "т" тип ҡыҫҡартып уҡыған ырын-хәрефтә (өҫкө мөйөшө уҡ менән осланған ромб) күрәбеҙ һәм ул минең тарафтан, һуҙынҡыһы менән ҡуша тулы килеш, "ут" тип күсерелә. Ә ул ырын-хәрефтең һәм шундай уҡ хәлдәге уҡ-һүрәт ырынын текстағы ҡайһы урында тулы килеш "ут" һәм "уҡ" тип, ә ҡайҙа "т" һәм "ҡ" тип кенә уҡыу ҡағиҙәһен аныҡ тикшереп билдәләү – үҙе айырым бер бурыс.

[123] Утбағыусы (бәғзеләр "табғач" тип уҡый) – Утан (Тан) иле императоры.

(белем алдым), төрк[124] бөтөн халҡы ул саҡтарҙа утбағыусыға ҡарар (буйһонор) ине. (2) Төрк бөтөн халҡы ҡанун белмәй ине, утбағыусыла (Утан-Тан дәүләтендә) терелде, ханланды. Ханына уҡ атып, утбағыусыға йәнә ышыҡланды (буйһондо), Тәңре шул саҡ әйтте: “Көн бирҙем, (3) ләкин ханыңа уҡ атып ышыҡланыуың (ҡытайға буйһоноуың) өсөн Тәңре һине үле итер”. Төрк бөтөн халҡына үләт алҡынды, ул юҡ булды, төрк сыр[125] бөтөн халҡы ерендә (4) береһе лә ҡалманы, ыҙалы囗 эштә (ҡытай иҙеүендә) ҡалғаны ҡубарылып, ете йөҙ һуғышсы булды, ике өлөшө атлы ине, бер өлөшө йәйәүле ине. Ете йөҙ кеше (5) ине ул мәлдә: олоһо шад[126] ине, ул “йыйылығыҙ!” тине, йыйыусыһы мин инем – Белге Утан Уҡымышлыһы. Уға ҡаған ымы[127] ҡушайым, тинем, һығындым (уйландым): “Оторо̆к (арыҡ) буғаны (һыйыр малын), һимеҙ буғаны бер ҡарауҙан (6) белерҙәр: “һимеҙ буға”, “арыҡ буға” тиеп; ә был белмәй имеш, тиеп, шунса уйландым[128]. Шундай кисерештә Тәңре белем биргәне өсөн тәүәккәлләнеп, үҙем үк уға ҡаған тип ҡуштым, Белге Утан Уҡымышлыһы – буйлы (нәҫелле) буға-тархан менән (йәғни минең менән) (7) берлектә эш итеүсе Илтиреш[129] ҡаған бул, тинем. Барҙыҡ (һөжүм иттек) утбағыусыға (ҡытайға); һуңынан ҡытанға (киданьгә йәни ҡатай-көҙәнгә); йөрөнөк уғыҙға, ул кешеләрҙе үлтерҙек. Ҡағандың белгесе, кәңәшсеһе мин инем. Соғай ҡоҙоғонда, Ҡараҡомда ултырыр (йәшәр) инек беҙ. (8) Кейек ейеп (ашап), ҡуян ейеп ултырыр (йәшәр) инек беҙ. Бөтөн халыҡ боғаҙы туҡ ине, тирә-яғыбыҙ асыға ине, беҙ һау инек. Шул саҡ ултыраҡлы уғыҙҙан төндә күрегебеҙ (күҙәтсебеҙ) ҡайтып килде. (9) Күрег (күҙәтсе) һөйләне: туғыҙ уғыҙ[130] бөтөн халҡынан өҫтә ҡаған ултырыр, утбағыусы (ҡытай) ҡоро беҙгә ҡаршы уғын, һөңгөһөн тоҫҡаған, тип әйтте; ҡытан (ҡатай-көҙән) ҡоронОң Тәңреһе – маг, тип әйтте; уның (уғыҙ ҡағандың) һүҙен дә әйтте: “Аҙ ғына һанлы төрк бөтөн халҡы йөрөйҙөр имеш, ҡағаны алып-батыр имеш, яусыһы (ғәскәр башлығы) Белге (Утан Уҡымышлыһы) имеш; шул ике кеше етәкләп алып барған сыр[131] (Үҫәргән) халҡы һине – утбағыусыны үлтерәсәк, тинем; һуңыраҡ ҡытанды (ҡатай-көҙәнде) үлтерәсәк, тинем; мине – уғыҙҙы (11) үлтерәсәк, тинем; утбағыусы (ҡытай) – биренән-яндан, ҡытан (ҡатай-көҙән) – уңдан яндан, мин – ошо ерҙән ябырылып ҡамайыҡ; төрк сыр (төрк Үҫәргән) бөтөн халҡы ер йөҙөндә ыҙалап йөрөмәһен беҙҙе: уҡ осороп ҡыҫымлайыҡ! – (12) тинем”. Шул һабаҡты (хәбәрҙе) ишетеп, төн оҙоно йоҡом килмәне, көндөҙ алыр йоҡом килмәне. Шунда ултырып ҡағанымдан үтендем, ошолай үтендем: “Утбағыусы (ҡытай), уғыҙ, ҡытан (ҡатай-көҙән) – был өсәү ҡауышыр 13) булһа, беҙ Уҙансы Ташын ҡулыбыҙҙа тота алмаҫбыҙ; Яйыҡ арҡылы Тубылғылы (Тобол) осона уҙырбыҙ, Йәнәсәй арҡылы Уҙғалы осто уҙа килә Яйыҡҡаса ҡалын (көр) булырлыҡ, тупланырлыҡ алып-батырҙарбыҙ ҙаһа;

---

[124] Төрк – Тороҡ (Тора) тау хоҙайы Тәңрегә (мифик Имир тәүбаба фаллосына) табыныусы башҡорттар, улар менән 922 йылда Башҡортостан тупрағында ғәрәп илсеһе Ибн-Фаҙлан да осрашҡан.

[125] Сыр (сир, сәр, үсәр, үсәрҡан) – көнбайыш Үҫәргән ҡәбиләһе, бөгөнгө Сырдарья йылғаһы шулар исемен һаҡлай.

[126] Шад (шата, сата) – хан нәҫеле, мырҙа (принц).

[127] Ымы (имя) – исеме.

[128] Ҡаған үлтерелгәс, уның урынына ҡалырға тейешле улының тәжрибәһеҙлеген уйлап һағышлана.

[129] Илтиреш – ил тиреүсе (йыйыусы), дәүләт төҙөүсе.

[130] Туғыҙ уғыҙ – туғыҙ ырыулы Күбәләк-Тиләү башҡорт ҡәбиләһе берләшмәһе.

[131] Сыр – Үҫәргән халҡы Төрки Ҡағанат дәүләтенең нигеҙен тәшкил итеүенә тура ишара.

Йәнәсәй яғынаса булышырлыҡ уҙғалыҡлы (йөрөмтәл) алыптарбыҙ ҙаһа! Һуңыраҡ ҡытанға (ҡатай-көҙәнгә) барып, утбағыусыла (ҡытайҙа) ҡор өйө (баш ҡала) ҡорайыҡ та йөрөйөк уғыҙға. Ике-өс мең һум үҙ ҡалтасыбыҙҙа (финансисыбыҙҙа) бар бына". Ана шулай үтендем. (15) Ҡағаным, мин үҙем, Белге Утан Уҡымышлыһы, үтендек Тәңрегә, үтенесемде ишетә бирҙе (тыңланы), күңелең теләгәнсә ут кисеп уҙ, тине. Күк Үңгә, Юғары Үтәгән[132] яҫыһынаса ут кисеп уҙҙым, Ингәк Ҡалҡан[133] таулыла уғыҙ ҡаршы килде – (16) һуғышсыһы өс мең ир имеш. Ике мең инек беҙ, һуғыштыҡ беҙ. Тәңре ярлыҡаны – еңдек беҙ, тегеләр йылғаға төштө (батты). Еңеүле юлда йәнә үлтерештек: анда үлтерергә уғыҙ уҡсылары килде (17) Килертамаҡҡа – төрк бөтөн халҡы өҫтөнә, Үтәгән ергә. Мин үҙем, Белге Утан Уҡымышлыһы, Үтәгән ергә ҡунған (туҡталған) икән тип ишетеп, эргәмә бар яҡтың бөтөн халҡы – уғыр яғы, йыраҡ яғы, унғар яғы – бөтөн халҡы килде. (18) Ике мең инек беҙ – беҙ ике су[134] (ғәскәр) булдыҡ. Төрк бөтөн халҡы ултыраҡланған, төрк ҡаған ултырған Сынтоң ҡаланан Атулай[135] ыуыҙғаса (һыуынаса) барып етеү әмәле юҡ имеш. Ҡағанымдан үтенеп су (ғәскәр) илттем, (19) Сынтоң ҡаланан Атулай ыуыҙға еткерҙем, утыҙ өс ҡаланы сыйҙым (емерҙем). Осын мең тотоғо (башлығы) йортонда ете улы тора ине. Утбағыусы (ҡытай) ҡағаны – яуыбыҙ (дошманыбыҙ) ине. Ун уҡ[136] ҡағаны – яуыбыҙ (дошманыбыҙ) ине. (20) Арытабан ҡырғыҙ Көслөк ҡаған яуыбыҙ (дошманыбыҙ) булды. Ул өс ҡаған өйөлөшөп (берләшеп), Алтын яҫыла беҙҙе хәбес (әсир) итеп алырға һүҙ ҡуйышҡандар – шулай уйлашҡандар. Һуңыраҡ төрк ҡаған ҡорона (йәғни беҙгә ҡаршы) су (ғәскәр) илттеләр. "Әгәр су-ғәскәре үлмәһә, ҡасан да әрсер ул беҙҙе: ҡағаны алып-батыр имеш, яусыһы (яу башлығы) Белге имеш – йоҡлап ҡалһаң әрсер үлтергәнсе. Өсөбөҙ ҡауышып (берләшеп), су (ғәскәр) алып, аны юҡ иткәнсе ҡыҫайыҡ!" – тигәндәр. Түргеш ҡаған ошолай тигән: "Минең бөтөн халҡым анда йөрөр, -- тигән. – (22) Төрк бөтөн халҡы өйөмә болғаныс ул", -- тигән. Уғыҙ: "Өйөмә ытырғаныс ул", -- тигән. Шул һүҙҙәрен ишетеп, төн буйына күҙемә йоҡо килмәне, көндөҙ алыр йоҡом килмәне – шундай борсолдом-һағышландым...(23) ...ә су (ғәскәр) алайыҡ... тинем. Ҡағанымдың: "Күгебеҙ (Тәңребеҙ) юлынан барырбыҙ, үтербеҙ", -- тигәнен ишетеп: -- "Был юлдан йөрөргә ярамаҫ", -- тинем... ерсе (юл күрһәтеүсе) табырға теләнем, ахыры үҙем сүлгиҙәре (сәфәр башлығы) булдым. "Эҙәрмәнлек... аны беләм... имеш, алдыбыҙҙа бер ултыраҡлы ер имеш, юл шунан бармыш. Аңарға (шунда) етеп, анда бер утлыҡ (үләнлек) бар имеш, -- тинем. – Ул юлдан йөрөү зерә йонсотҡос", -- тинем, уйландым. Ҡағаныбыҙға (25) үтендем, су (ғәскәр) йөрөтөү үтенесемде үтәлдерт, тинем. Аҡтирмәлегәсә арҡылы үттем, ут-үләнлектән уҙып, мин туры ҡараға (ҡырлаға) сыҡтым. Юғары Үтәйҙә ятҡан ағасҡа тотона-тотона ырғылдырттым ғәскәрҙе. Һуңыраҡ ҡырланан (26) йүгерә-тәгәрәй барып остоҡ беҙ, яулыға (һуғышҡа) индек беҙ; көн-төн йәнгә үткес ут-уҡ бәреп барҙыҡ беҙ; ерсе (юл күрһәтеүсе) ерен яңылыштырып боғаҙланды (боғаҙынан һуйылды). Моңло (күктәге әруах) ҡаған: "Елегеҙ көр!" – тине. (27) Аны-һыуға (Амударъяға) барғаныбыҙҙа ул

---

[132] Үтәгән -- хәҙерге Силәбе өлкәһендә тороп ҡалған Арҡайым ҡорамы янындағы йылға.

[133] Башҡортостан Республикаһының Усалы районындағы Ҡалҡан-тау.

[134] Сү (сүб, сүбәй, сыбай, һыбай) – атлы ғәскәр.

[135] Атулай ыуыҙғаса – Әтиләй (Иҙел) һыуынаса..

[136] Ун уҡ – Көнбайыш төрки ҡағанатта (Урта Азияла) Үҫәргән башҡорттарының автономиялы ун ара берләшмәһе.

һыуыҡ ине. Барҙыҡ беҙ. Һанар өсөн ғәскәрҙе аттан төшөрҙөк беҙ, аттарҙы ышыҡҡа ҡуйырға бойорҙоҡ беҙ. Көнме, төнме – елеп барҙыҡ беҙ, ҡырғыҙҙы йоҡлағанында баҫтыҡ беҙ. (28) Һөңгөләп юл астыҡ беҙ, ханы, һуғышсылары эркелде, һуғыштыҡ беҙ, сәнстек беҙ, ханын үлтерҙек беҙ. Ҡағанға ҡырғыҙ бөтөн халҡы сүкте, йөгөндө -- еңдек беҙ. Күгмән яҫыһына барҙыҡ беҙ, (29) ҡырғыҙҙы еңдек беҙ. Түргеш ҡағандан күрег (күҙәтсе-темеҫкен) килде, һүҙе шундай: “Уңдан ҡаған ҡорона су (ғәскәр) йөрөтәм, -- тигән. – Йөрөтмәһәк, беҙҙе... ҡағаны алып-батыр имеш, яусыһы (яу башлығы) Белге (Утан Уҡымышлыһы) имеш. Ҡасһаҡ әгәр (30) беҙҙе үлтерәсәк”, -- тигән. Түргеш ҡағаны юл үтергә сыҡты, тине; Ун уҡ бөтөн халҡы көллөһө лә юл үтергә сыҡты, тине; утбағыусы (ҡытай) ғәскәре лә шунда бар имеш. Ул һабаҡты (һамаҡты йәки һүҙҙе) ишетеп, ҡағаным: “Мин өй ҡырына ҡайтайым”, -- тине. Ҡатыны вафат булған икән – аны йоҡлатайым (ерләйем), тине. Ә һин су (ғәскәр) менән барың, тине. Алтын яҫыла ултырың (туҡтал), тине. Дошмандың су (ғәскәр) башы булып Инәл ҡағандың Утордос исемле саты (хан нәҫеле) баралыр, тине. Белге Утан Уҡымышлыһына – миңә әйтте, (32) был ғәскәрҙе илт, тине. Ҡыйна (туҡма) күңелең ҡанғанса, мин һиңә башҡаса ни әйтәйем, тине. Килһә ирҙәр – ҡор йыйылыр, килмәһә ирҙәр – телле-һабаҡлы (мәғлүмәтле) булып ултыр, тине. Алтын яҫыла ултырҙыҡ беҙ. (33) Өс күрег (күҙәтсе) килде, һүҙҙәре бер: “Тегеләрҙең ҡағаны ғәскәре менән юл үтә сыҡты; Ун уҡ ғәскәре көллөһө лә юл үтә сыҡты”, -- тинеләр. “Ярыш яҫыла йыйылайыҡ”, -- тигәндәр. Шул хәбәрҙе ишетеп, ҡаған ҡырына шул хәбәрҙе еткерҙем, “ҡалайтайым?” тип һораным. Яуабы йәнә (34) килде: “Шул урыныңда нығын, -- тигән. – Шәп атлы ҡорҙо алға үткәртеп ырғыл, үҙеңде баҫтыртма”, -- тигән. Бөйөк ҡаған миңә шулай тип әйткән. (Миңә ҡарата --) апаһы тархан[137] ҡырына ҡарата серле һүҙ әйткән: “Белге Утан Уҡымышлыһы зирәк ул, үҙе аңлар ул: (35) су-ғәскәр йөрөтмә (һөжүм итмә), тиеүсене өнәмәҫ”. Шул һүҙен ишетеп, су-ғәскәр йөрөттөм Алтын яҫынан. Юлһыҙ – юл астым Иртыш ыуыҙғаса, кисеүһеҙ – аны кистек беҙ, төн киттек беҙ, таңында тура Балсыҡҡа еттек беҙ. (36) Тел (әсир) килтерелде, һүҙе ошондай: “Ярыш яҫыла ун төмән (йөҙ мең) су-ғәскәр тора”, -- тине. Шул һүҙҙе ишетеп бейҙәр күбенеһе (37) йыйналып: “Ырғып үтәйек” (тиҙерәк ҡасайыҡ), -- тине. Мин иһә әйттем: “Мин – Белге Утан Уҡымышлыһы! Алтын яҫыһы аша килдек беҙ, Иртыш ыуыҙҙы (38) кисеп килдек беҙ, ҡурҡыныстан янтайып ҡалмаҫ алып-батырҙар!” – тинем, әммә тойманылар. “Тәңре, Һомай, изге Ер-Һыу “барып баҫ!” тигәнендә ниңә туҙарбыҙ?! (39) Ул көслө, тиеп, ниңә ҡурҡырбыҙ?! Аҙбыҙ, тиеп, ниңә башымды алып ҡасайым?!” – тинем. Һәм дошманды төйҙөк беҙ, туҙҙырҙыҡ беҙ. Икенсе көн килде, (40) урттәй ҡыҙып килде. Һуғыштыҡ беҙ. Беҙҙекенән улар ике тапҡырға артыҡ ине. Тәңре ярлыҡағаны өсөн көскә тейендек беҙ, (41) ҡурҡманыҡ беҙ, һуғыштыҡ беҙ. Дошман яҡта Утордос сатыры ауҙы, ҡалғандарын да ҡыйҙыҡ беҙ, ҡағанын тоттоҡ беҙ, ябағаһын (ябайҙарын), сатын (Утордосты) (42) шунда үлтерҙек, илле сәрҙе (ғәскәр башлығын) тоттоҡ беҙ, шул уҡ төндә бөтөн халҡын һуйҙыҡ беҙ. Шул хәбәрҙе ишетеп, Ун уҡ бейҙәре күп (43) килде, йөгөндө (тубыҡланып бил бөктө). Килгән бейҙәрен, бөтөн халҡын тотоп йыйнағанда күпмелер халҡы ҡасҡайны. Ун уҡ ғәскәрен һуғышҡа илттем. (44) Беҙ йәнә ғәскәр илттек, Анды артылдыҡ беҙ, Йәнәсәй ыуыҙҙы

---

[137] Апаһы тархан – ҡағандың апаһы (ҡатын-ҡыҙ) тархан, йәғни Белге Утан Уҡымышлыһы үҙе – ҡағандың ошо ике туған апаһы.

кисеп, Тынсы улы яғына – Бәңлегек тауға... (45) Тимерҡапҡаға (Дербентҡа) тиклем барҙыҡ беҙ, анда йәнә торҙоҡ беҙ. Ынал ҡағанға... тажик тоғроһон (тажикка буйһонғандарҙы)... (46) андағы ерҙәге һыу башлығы, Соғдаҡ бөтөн халҡы күп килде. Ул көндә етте төрк бөтөн халҡы Тимерҡапҡаға. (47) Тынсы улы ятағындағы тауға еткәйнек, ул үҙе юҡ имеш. Ул ергә мин, Белге Утан Уҡымышлыһы, ғәскәремде еткергәстен, (48) һары алтын, затлы көмөш, ҡыҙы-ҡырҡыны мәшәҡәтһеҙ ағылып килер ине. Илтиреш ҡаған, мин Белгеһе бар өсөн, (49) алып-батырҙары бар өсөн утбағыусыға (ҡытайға) ҡаршы егерме ете тапҡыр һуғышты, ҡыутанға (ҡатай-көҙәнгә) ҡаршы ете тапҡыр һуғышты, уғыҙға ҡаршы биш тапҡыр һуғышты, анда яусы (яу башлығы) булып (50) йәнә мин барҙым – яусыһы (яу башлығы) һәр саҡ мин инем. Илтиреш ҡағанға (бөтөн) төрк бағынғанға күрә, (уға) Төрк Белге ҡ[138]... (51) Ҡапаған ҡаған ...төн үтмәне, (52) көн тыуып өлгөрмәне – ҡыҙыл ҡаным түгелде, ҡара тирем йүгерҙе. Эҫе көсөмдө бирҙем ки мин үҙем оҙон юлымда. Йәнә үттем ки (53) Арҡой[139]. Оло ҡырла[140] үттем, боҫонғома (боҫоноу урыныма) йәйәүләп килер инем. Ҡаған менән су-ғәскәр илттек беҙ. Тәңре ярлыҡаны – (54) был төрк бөтөн халҡына яраҡлыҡ (көплө-ҡораллы дошман яуын) килтертмәнем, бөлгөнлөк утын йүгертмәнем. Илтиреш ҡаған ҡаҙанмаһа әгәр, (55) ошо мин үҙем ҡаҙанмаһам әгәр... илемә, бөтөн халҡыма йоҡ арттырыусан ҡаҙаныштарым өсөн, ошо үҙемдең ҡаҙаныштарым өсөн олоғ булдым. Анаң-Ерҙәге ҡағанлыҡҡа, бөтөн халыҡҡа, (56) илемә -- ил булды, бөтөн халҡыма бөтөнлөк булды, үҙем ҡары (ил инәһе) булдым, олоғ булдым. Анаң-Ерҙәге ҡағанлыҡтың бөтөн халыҡҡа ҡарата (57) мөнтөгө (етешһеҙлеге) бар иһә (булһа), моңһоҙо бар булып артасаҡ имеш. (58) Төрк Белге[141] ҡаған иленә был ядкәрҙе яҙҙыртым мин – Белге Утан Уҡымышлыһы. (59) Илтиреш ҡаған ҡаҙанмаһа, юҡ ине артыр сара; мин үҙем, Белге Утан Уҡымышлыһы ҡаҙанмаһам, минһеҙ юҡ ине артыр сара -- (60) Ҡапаған ҡағандың төрк-сыр (Үҫәргән) бөтөн халҡы ерендә бөтәйеү, бөтөнәйеү (халыҡ булып уҡмашыу), кешеләнеү (кеше һаны ишәйеү) сараһы юҡ, артыш (артыу) юҡ ине. (61) Илтиреш ҡаған, Белге Утан Уҡымышлыһы бергәләп ҡаҙанғаныбыҙ өсөн Ҡапаған ҡағандың төрк-сыр (Үҫәргән) бөтөн халҡы ер йөҙөндә йөрөйҙөр (йәшәйҙер). (62) Төрк Белге ҡаған төрк-сыр (Үҫәргән) бөтөн халҡына, уғыҙ бөтөн халҡына игелекле булып ултырҙы тәхеттә.
Кесе Яҙыу тексы тамам

Был изге текстарҙы, оҙаҡҡа һуҙмайынса, мәктәп дәреслектәренә индерергә, тарихыбыҙҙы тулыраҡ өйрәтеү өсөн файҙаланырға кәрәк.
Ошо башҡортомдоҡолай героик-тетрәткес тарихлы башҡа һис бер халыҡты ла белмәйем! Ғәзиз бабаларыбыҙҙың көсөргәнешле, данлы тормошон сағылдырған эпик роман һәм поэмалар, трагедиялар ҡасан яҙылыр, кинодрамалар ҡасан экрандарҙы шаңғыртыр? Уяныр быҙмы ҡасан?!.
05.10.2011

[138] "Төрк Белге ҡаған ләҡәбен бирҙем" булһа кәрәк.
[139] Арҡайым булһа кәрәк.
[140] Урал тауҙары булһа кәрәк.
[141] Төрк Белге – Илтиреш ҡағандың һуңғы ләҡәбе.

Һиндостанда санскритҡа әйләнгән башҡорт теле.

Аманат.

Был хеҙмәтем егерме биш йыл элек үк яҙылһа ла, заманында ташҡа баҫтыртып сығарыу мөмкин булманы, сөнки илебеҙ тоталитар тәбиғәтле советтар хакимиәтенең “алға – коммунизм еңеүҙәренә” әйҙәүсеһе булған КПСС, йәмғиәтте ауыҙлыҡлап тотоусыһы КГБ ҡыҫымы аҫтында тонсоғоп, бөтә нәмә 1917 йылғы большевиктар ихтилалынан ғына башлана тигән “тәғлимәт”кә һуғарылып, сая рухыбыҙ бығауланып һәм тонсоғоп йәшәнек. Башҡорт халҡының (һәм башҡа халыҡтарҙың да) сал-боронғо тарихы, быуаттарҙы ашып килгән үҙенсәлекле мәҙәниәте тураһында, һүҙ ҡуҙғатыу ғына түгел, ауыҙ асырға ла ярамай; 1917 йылға тиклем “ярым ҡырағай, шыр-наҙан” халыҡҡа унық мәҙәниәтен, шул иҫәптән әҙәби телен, яҙмаһын, сәнғәтен дә, юҡтан бар итеп, бөйөк урыҫ халҡының ҡаҙанышы булған Коммунистар партияһы, Бөйөк Октябрь революцияһы бүләк итеп бирҙе, шуға күрә СССР-ҙа “совет халҡы” тигән һәм фәҡәт урыҫ телендә һөйләшкән берәгәй милләт кенә сәскә атырға тейеш, тип кенә һөрәнләргә рөхсәт ителә ине. Шул шарттарҙа, әлбиттә, боронғо Һиндостан тупрағына Күк Уралдың шанлы мәҙәниәтен илтеп еректергән, ил төҙөгән арыуҙар (арийҙар) – боронғо башҡорттар, һәм уларҙың күркәм әҙәби (санскрит) теле – нигеҙендә боронғо башҡорт теле, тип иҫбат итеү совет ысынбарлығы нигеҙҙәрен ҡаҡшатыусы һөрһөп бөткән милләтселек һаналып, ундай фекер йөрөтөүселәр бөйөк державаның хаҡ дошманы рәүешендә ләғнәтләнеп хөкөм ҡылынды. Шуға күрә ундайҙарға бөтә ишектәр ҙә ябыҡ, үҙ илендә үҙе ят ине. Дөрөҫөн генә әйткәндә (ә дөрөҫлөк бөтәбеҙ өсөн кәрәк!), КПСС-тың Башҡортостан өлкә комитеты башҡорттан маңҡорт яһарға йүнәлтелгән баяғы төп идеологияһын үҙенең билдәле төп һөрәнсеһенән бөтә республика, хатта держава трибуналарынан ныҡышмалы һөрәнләтте, шул ныҡышмал һөрәнләүҙәр төрлө ваҡытта төрлө матбуғатты “биҙәне”. Мәҫәлән:

«*По обе стороны от Урала — от Волги до Иртыша на протяжении тысячелетия* ***скитались*** *башкирские племена, гонимые всеми ветрами исторической судьбы* (Башҡортостан тигән илебеҙ булмаған, ҡыу ҡамғаҡтай ҡыуылып йөрөгәнбеҙ!.. — Й.С.)... *Вплоть до 1919 года...* ***не имели*** *ни своей собственной крыши над головой* (меҫкенләнеп кеше өйөндә йәшәгәнбеҙ!.. – *Й.С.*) *, ни прочной ограды на рубежах, иными словами,* ***не имели*** *своей государственности»*. (М. Карим. Тепло родного очага. «Советская Башкирия» гәзитенең 1972 йыл 1 май һаны). Һәм йәнә:

«*Беҙ* ***фәҡир*** *булдыҡ... Беҙ* ***артта ҡалғайныҡ...*** *Беҙ...* ***белемле түгел инек...*** *Әлбиттә, ул алыҫ замандарҙа ла, мәҫәлән, Парижға беҙҙең йырсыны йәки ҡурайсыны алып барыр булғандар, ләкин бүтәндәрҙе шаҡ ҡатырған өсөн* ***ҡырағай кеше***[142] *итеп күрһәтергә саҡырғандар»*. (Мостай Кәрим. Бөйөк Октябрь революцияһының 70 йыллығы айҡанлы Башҡорт опера һәм балет академия театрында тантаналы ултырышта һөйләгән телмәренән. «Совет Башҡортостаны» гәзитенең 1987 йыл 6 ноябрь һаны).

---

[142] Мәшһүр ҡурайсыбыҙ Йомабай Иҫәнбаев күҙ уңында тотола.

Ә шулай ҙа, ялған тарих менән аңдарҙы томалағандары өсөн йөрәгем янып, өмөтһөҙ – шайтан, тигәндәй, туған партиям үҙенең тарихта соҡсонған ябай коммунист яҙыусыһына ла бер кәлимә-һүҙ әйтергә ирек бирер, алдымдағы бикле ишек ҡыҫығынан үткәреп үк ебәрер, тигән йәшерен өмөт менән ҡанатланып, оҙаҡ ҡаңғыртҡан бер ҡулъяҙмамды партия өлкә комитеты ҡарамағына илттем. Тейешенсә комплекслы ысул менән эшләнгән, “Бөрйәндәрҙең әҙәби мираҫы” тигән дүрт табаҡлыҡ тикшеренеү ине ул. Өлкә комитетынан әҫәрем республиканың иң абруйлы ғилми үҙәгенә -- Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтына атҡарылған да абруйлыларҙың дәрәжәле исемдәре, датаһы ҡуйылмыш рәсми яҙма хөкөмөн алған булып сыҡты (фрагмент):

О рукописи З.А. Султанова «Литературное наследие бурзян» (102 стр. машинописи).

В своей рукописи З.А. Султанов ставит основной задачей показать, что древние башкиры племени бурзян имели непосредственное отношение к древнейшим государствам Азии — Парфии и Бактрии, были творцами культурных ценностей этих стран, авторами (или соавторами) эпических памятников Авесты и Ригведы... Мысль автора — эти памятники надо считать одновременно образцами древнейшего литературного наследия башкир-бурзян. З.А. Султанов утверждает, что им открыт на берегу озера Асылыкуль древнейший храм башкир-зороастрийцев с алтарем для жертвоприношений и проторуническая надпись на камне с поэтическим текстом (знаки и текст не приводятся), относящиеся к VII — V вв. до н.э. Этим перекидывается мост между Приуральем и далеким Средним Востоком в античности и очерчивается громадная территория обитания древних бурзян... Автор, таким образом, связывает события и явления, удаленные и хронологически (более тысячелетия), и территориально, объединяет явления и факты, между которыми нет никакой лингвистической и исторической связи...

Для обоснования своих вольных сопоставлений языковых явлений З.А. Султанов ссылается на «ностратическую» теорию В.И. Иллича-Свитыча и выступает против традиционных методов сравнительно-исторического языкознания, против генеологической классификации языков... Ничего общего с этой теорией приводимые сравнения, этимологические упражнения автора не имеют...

Рукопись «Литературное наследие бурзян» не может претендовать на роль научного исследования: в ней не соблюдены элементарные требования современной компаративистики, исторической этнографии и фольклористики. Отвергать устоявшиеся методы научного познания можно лишь на основе полного овладения ими.

Зам. Директора ИИЯЛ БФАН СССР, д.ф.н. ***— З.Г. Ураксин.***

Зав. Сектором этнографии ИИЯЛ БФАН СССР, к.и.н. ***— Н.В. Бикбулатов.*** *Ст.н.с. сектора литературы и фольклора ИИЯЛ БФАН СССР, к.ф.н.* ***— М.М. Сагитов.***

Верно: (печать и подпись). *1 марта 1981 г.*

Хәҙер инде был үтә “абруйлы” раҫлауҙарҙың кәм тигәндә бер яҡлылығы, иҫкергәнлеге үтә күренеп торһа ла, заманында ел-ямғыр теймәҫлек “хаҡлыҡ бағанаһы” ине ул. Ошонан һуң “башына тай типкән” авторға тын алыр ҙа форсат ҡалмай башланы – “милли сикләнгәнлек” (“национальная ограни-ченность”) тигән шомло мөһөр, ҡанын сәсрәтеп, маңлайына сәпәлде, ә бәхетле осраҡ арҡаһында ғына

“Ағиҙел”дең 1982 һәм 1984 йылдарҙағы дүрт һанында сығып ҡалған “Урал батыр шәжәрәһе” тигән әҫәре (буласаҡ “Хәтерхитап”тың бүлеге) шул мөһөрҙө юйылмаҫлыҡ ныҒытты...

Махсус белемле ғалимдарыбыҙ ошолай ярһып һөрәнләгәндә сәйәсәтте толпарламыш төп әҙәби һөрәнсебеҙҙән башҡасаны көтөп тә булмай ине:

1984 йыл, «Совет Башҡортостаны» гәзитенең 21 июнь һаны.

«РСФСР-ҙың унынсы саҡырылыш Верховный Советының туғыҙынсы сессияһында КПСС Үҙәк Комитетының апрель (1984 йыл) Пленумы, СССР-ҙың ун беренсе саҡырылыш Верховный Советының беренсе сессияһы ҡарарҙары, КПСС Үҙәк Комитетының Генарльный секретаре, СССР Верховный Советы Президиумы Председателе К.У. Черненконың уларҙа яһаған сығыштары нигеҙендә Россия Федерацияһы халыҡ депутаттары Советтарының бурыстары тикшерелә. 20 июндә ул Мәскәүҙә Кремлдең Ҙур һарайында эшен дауам итте.

Депутаттар һәм ҡунаҡтар В.И. Воротников, Г.В. Романов, В.В. Кузнецов, И.В. Капитонов иптәштәрҙе оҙаҡ ҡул сабыуҙар менән ҡаршы алды».

Ҡайһындай ҙа ҙур форум һәм ҡайһындай ҙа мәртәбәле кешеләр! Бөйөк державаның бөйөк мәсьәләләрен уртаға һалып хәл ҡылырлыҡ был оло йыйында Башҡортостан вәкиле лә республикабыҙҙың, халҡыбыҙҙың ошоғаса хәл ителмәгән ихтыяждарын һәм мохтажлыҡтарын ҡыйыу ярып һалғандыр ҙа уңышҡа өлгәшкәндер, тигән өмөт уяна. Әммә-ләкин...

Бына шул бөйөк форумда Башҡорт АССР-ы Әлшәй һайлау округынан халыҡ депутаты, РСФСР Верховный Советы Председателенең урынбаҫары М. С. Кәримов телмәренең «изюминка»һы:

«Ҡайһы берҙә теге йәки был йән көйҙөргөс факттарҙы осратырға тура килә... Милли республикаларҙан, милли тыйнаҡлыҡ һәм фәнни объективлыҡ тойғоһон юғалтҡан бәғзе бер тарихсылар йәки ***әҙәбиәтселәр*** *тарихты күпертеп күрһәтеүгә, үткәндәрҙе ал да гөл итеп тасуирларға тотона, боронғо ҡомартҡыларҙан үҙенә өлөш ҡайырырға һәм шунда үҙ мөһөрөн баҫырға тырыша; йәнәһе, улар башҡалар көнләшһен өсөн бик боронғо культураға ҡыҫылышы барлығын иҫбатламаҡсы.* ***Бер милли әҙип[143] нәҡ уның ата-олатайҙарының тәгәрмәсте уйлап табыуын тылҡый.*** *Былдай саҡта инде башҡа берәүгә тәгәрмәс майлау өсөн дегет ҡайнатҡандарын иҫбатларға тотоноу бер ни тормай; имеш, тегеләр тәгәрмәс менән булашҡанда уныҡылар дегетте күпкә элегерәк яһаған. Үткәндәргә ошондай, әгәр әйтергә рөхсәт икән, «киң» ҡараш — беҙҙең социалистик тормошобоҙ нормаларына бер нисек тә тап килмәгән* ***милли сикләнгәнлек*** *билдәһе ул».*

Иллә тапҡан даһа Башҡортостан исеменән бөйөк держава форумында хәл ҡылаһы проблеманы!..

Уҙаманға тынғы бирмәҫ ошо “проблема” артабанғы йылдарҙа һәм башҡа трибуналарҙан да ялҡынлы ҡабатланды...

Тап ошондай самаһынан сығып “россиянмын” өлгөрләгән күрһәтергә тырышыусыларға яуап иткәндәй, донъяға билдәле әҙип Сыңғыҙ Айытматовтың әсе иронияһы яңғыраны тап ана шул осорҙа:

«Что же это за национальная культура, которая не имеет своей базы?

---

[143] Йыһат Солтанов, әлбиттә!

Но когда подобные болевые мысли высказываются, то тут же находятся люди, которые начинают рассматривать это как ***проявление национализма, узости взглядов.*** *К сожалению, этот зуд сверхбдительности, проистекающей в немалой степени от* ***карьеризма,*** *не встречает должного осуждения. Необходимо отметить в связи с этим, что в результате такая тенденция породила на местах особый тип* ***демагога — говоруна-трибунщика,*** *который сделал для себя восхваление русского языка к месту и не к месту и умаление собственного чуть ли не престижной профекссией».* («Литературная газета»ның 1986 йыл 13 август һаны).

Ә беҙҙең трибуныбыҙ, трибуналар бейеклеге менән генә мөрәхәтһенмәй, түбәнерәк тә төштө: үҙенең кесе ҡәләмдәше Йыһат Солтановты, өс бала атаһын, «Ағиҙел» редакцияһындағы барлы-юҡлы икмәк һынығлыҡ эшенән дә күҫәклэтә ҡыуҙыртып, заманында эшһеҙ-ашһыҙ интегеп йөрөүсе ҡорҙашы Рәми Ғарипов хәленә ҡалдырырға тырышты:

Протокол №1, 8 июнь 1984.

Йыйылыш БАССР Яҙыусылар союзы идараһында (Ә.М. Мирзаһитов бүлмәһендә) бара.

Ҡатнашалар: Мостай Кәрим, Әсгәт Мирзаһитов, Әмир Гәрәйев, Ғилемдар Рамазанов, Рафаэль Сафин, Рәшит Солтангәрәйев, Булат Рафиҡов, Әнүр Вахитов, Роберт Байымов, Әсхәл Әхмәтҡужин, Муса Ғәли, Динис Бүләков, Әхнәф Дилмөхәмәтов (КПСС-тың Башҡортостан өлкә комитеты Культура бүлегенең мөдире).

Көн тәртибе: «Агиҙел»дең быйылғы 9-ынсы һанын тикшереү...

Фекер алышыуҙар:

Рәшит Солтангәрәйев*. Кадрҙарҙы безболезненно алмаштырырга кәрәк, бер бүлек тә үҙ-үҙенә тура килмәй.*

Ә. Мирзаһитов*. Беренсе сара — редколлегияны ныгытайыҡ, икенсе сара — кадрҙарҙы ныгытайыҡ.*

Мостай Кәрим*. «Урал батыр шәжәрәһе»* (Йыһат Солтановтың. — *Й.С.) эссеһы нимә ул? Иптәш тарихсылар, аңлатып бирегеҙ! Бында бит тоташ* ***бред****.* (Шефының ошо «тәрән ғилми» асышы булған *«бред»* билдәләмәһен Ә.М. Мирзаһитов Мәскәүҙәге «Литературная Россия» гәзитенең 1987 йыл 13 март һанында Йыһат Солтановтың ижадын ҡамсылағанында рәхәтләнеп ҡулланды. — *Й.С.*).

Әнүр Вахитов*. «Урал батыр шәжәрәһе» эссеһына бүләк бирелде...*

Ә. Мирзаһитов*. Номерҙы редколлегияһыҙ төшөрмәгеҙ. Премиялар ҙа редколлегияла хәл ителһен, әҫәр тормошҡа яңылыҡ биргән булһын. Давайте, аппаратты ныгытыуҙы* (йәғни Йыһат Солтановты эшенән ҡыуыуҙы. — *Й.С.) хәл итәйек!*

Әхнәф Дилмөхәмәтов*. Бындай һөйләшеү һуңғыһы булмаһын ине. Журнал хаҡында съезда ла байтаҡ һөйләнде, ләкин эшкә тотонайыҡ. Редакторҙан тора бөтәһе лә: ул бөтә процесты ойошторорға тейеш!.. Шунан килеп: бөтә эште обком алдына ла өйөп ташламагыҙ, кәрәкле эш түгел был...*

Әмир Гәрәйев *(баш редактор). Әйткәндәрегеҙ бөтәһе лә дөрөҫ... Солтановты алмаштырырга кәрәк. Кадрҙарҙы ныгытайыҡ.*

Ә. Дилмөхәмәтов*. Аҙаҡ ҡыйшанлап йөрөү булмаһын, джентельмен булайыҡ: нимә һөйләнелгән — ошонда ҡалһын.*

Протоколды алып барҙы: ***Әсхәл Әхмәтҡужин».***

Көндәлек эштә тырнаҡ аҫтынан кер эҙләп бәйләнеүҙәр – психик һөжүмдәр йышайҙы. Баш редактор, әйләнгәне һайын, партия өлкә комитетына барып ҡайта ла “ҡасан эштән китәһең?” тип теңкәгә тейә ине. Түҙмәнем, “үҙем теләп” китергә ғариза бирҙем...

Уҡыусыларға бөгөн тәҡдим ителгән, ләкин 1980 йылда уҡ төпсөнгән был “санскрит” та, башҡа байтаҡ әйберҙәрем кеүек үк, ҡулъяҙмала килеш ҡаҡланып ҡалғайны. Дәү Хоҙай күрә: үҙем өсөн тип түгел, илем өсөн тип эшләгән эштәремдең береһе ине был. Бороңғоларҙан аманат.

(Санскрит – урыҫса – башҡортса һайланма һүҙлек Әҫәрҙәремдең XI томында бирелә).

11.01.2007.

ҠАЙҺЫ БЕР КАРТАЛАР

Ҡаяташтарҙағы карталарҙың салбабаһы – Башҡортостан Республикаһының Нуриман районы Сандыр ауылында табылған ташкарта.

Ауыл йорттарының береһененең тупһаташы булып ятҡан, ғалимдарҙың тоҫмаллауынса, *бынан илле миллион йыл элек* (!) яһалған. Инде Өфөлә Башҡорт дәүләт университетында һаҡлана. Мәғлүмәтте “Труд” гәзитенән күсереп бирәмен:

ТРУД 12 ФЕВРАЛЯ 2000 ГОДА

ТАЙНА "ДАШКИНОГО КАМНЯ"

В БАШКИРИИ НАЙДЕНА ПЛИТА С ИЗОБРАЖЕНИЕМ МЕСТНОСТИ, СДЕЛАННЫМ 50 МИЛЛИОНОВ ЛЕТ НАЗАД

Так выглядела Башкирия в те далекие времена?

Сенсационное сообщение пришло из Башкирии. В селе Чандар ученые Башкирского государственного университета во главе с проректором, профессором, доктором физико-математических наук Александром Николаевичем Чувыровым нашли удивительную плиту. На ней изображено местность от Уфимской возвышенности до города Мелеуза. При этом изображение рельефное, его можно получить только с космических высот. Самое поразительное – возраст карты. Как утверждают специалисты, ей 50 миллионов лет! Мы связались с Александром Чувыровым и попросили рассказать об этом подробнее.

Профессор А.Н. Чувырев: “Находка лежала вот здесь под крыльцом”.

-- Это совсем незапланированная удача. На Урале находят немало камней с надписями на древнем китайском языке. Хотелось обнаружить образец такой каменной библиотеки. Я не археолог, такой поиск – хобби, увлечение. И только. Но мы знали, что такие камни ...имки. Об этом рассказывают ...тся в отчетах разного рода экспедиций, проводившихся в Уфимской губернии в XVIII веке. Камни не хлеб или колбаса – пропасть не могут. Так родилась идея экспедиции в район поселка Чандар...

Размеры плиты полтора метра по высоте, ширина – метр с небольшим и толщина – 20 сантиметров. Вес – примерно тонна... Когда мы отмыли, очистили камень, я посмотрел и понял: это карта. Сама плита оказалась трехслойной, сделанной искусственным образом, о чем свидетельствует анализ рентгенограмм. Первый – цементный или керамический на основе доломита, толщиной в 18 сантиметров. Второй – в полтора сантиметра – обогащенный кремнием, чтобы придать картинке

Дом 40 – место обнаружения камня

прочность. Микротвердость ее чуть меньше, чем у корунда. Третий – в несколько миллиметров – фарфоровый. Видимо, для того, чтобы создавать рассеянный свет, освещать карту. Она – рельефная. Примерно такие есть у военных. На ней изображено местность от Уфимской возвышенности до современного города Мелеуза. Карта не простая – специальная. На ней отмечены гидротехнические сооружения. Система каналов протяженностью в 15 тысяч километров, дамбы, 12 плотин шириной до полукилометра. Есть мощнейшие водозаборы. Для чего они – можно только предпологать. Вполне возможно, что воду забирали для нужд какого-то производства. Обозначены ромбические площадки – они находились недалеко от каналов. Видимо, взлетно-посадочные полосы. Скорее всего, те, кто тогда жил и строил, летали – никаких дорог на карте нет. Либо пользовались водными маршрутами... Есть на карте и надписи. Поначалу мы думали, что это древнекитайский -слоговой язык неизвестного происхождения. Надписей много. Что они обозначают – непонятно. Но один значок я, по-моему, расшифровал. Он обозначает широту. Изображение земного шара, к нему направлена касательная, которая пересекается с прямой линией под углом 55 градусов. Эта та широта, на которой я сейчас сам нахожусь... Создана специальная комиссия. Мы знакомили с картой не только российских ученых, но и, например, специалистов университета в китайском городе Чанша. Выбор не случаен. Именно здесь находится знаменитый музей, где хранятся самые древние карты. И там совершенно однозначно сказали, что наша чандарская карта не китайского происхождения. Лично я встречался с крупнейшим международным экспертом профессором из Китая Ду Ханом. И его мнение такое же – ничего подобного китайцы не могли создать.

Бабаларыбыҙ эҙ ҡалдырған ерҙәрҙәге ташкарталар.

Таулы Алтайҙағы ташкарталар (йыйынтыкта: Петроглифы Горного Алтая. Новосибирск, 1980). Һүрәттәр эсендәге яҙыуҙар минең тарафтан өҫтәлде.

(Таулы Алтай, таблица 69, төбәк VIII. Бронза быуаттар дәүере).

Алтай ҡаяларындағы был һыҙмаларҙа Урал – Алтай берәгәйлеге күрһәтелгән (ул ерҙәрҙә башҡорт бабалар йәшәгән).

Таблица 50, төбәк VII. Был картала Урал – Месопотамия, башҡорт – шумер берҙәйлеге күрһәтелгән.

Ә түбәндә шул уҡ ҡаяларҙағы картала хәҙерге башҡорттар йәшәгән Башҡортостан тупрағының боронғо башҡорттарҙың бер өлөшө (шумерҙар) йәшәгән Месопатамия тупрағы менән тығыҙ берҙәйлеге күргәҙмәле ядкәр ҡылынған (карталағы ер-һыу атамаларын мин ҡуйҙым).

Ер шарының географик атластары – мал тиреләрендә һынлана.

Мәғлүм башҡорт риүәйәтендә Хоҙай Бабай атабыҙ Әҙәмгә «бер үгеҙ тиреһе» ҙурлыҡ ҡоро ер бүләк итеүе бәйән ҡылына. Памир-Алай тауҙарындағы Сармыш



ҡаяташында шуны, ысынлап та, «бер үгеҙ тиреһе» ҡиәфәтендәге тоташ ҡоро ер картаһы рәүешендә тамаша ҡылабыҙ (һүрәттә №1). Ер шарының иң боронғо хәле был, сөнки һүрәт бербөтөн Евразия-Африка-Америка ҡитғаларының айырымланыуынан элегерәк төшөрөлгән...
Шунан һуң байтаҡ дәүерҙәр ағылып уҙған һәм «бер үгеҙ тиреһе» ҡап-уртаға — Евразия-Африка һәм Америка ҡитғаларына бүленеү мөҙҙәте яҡынлашҡан. Һөҙөмтәлә ул Тянь-Шань тауҙарындағы Сыймалыташ картаһында (№2) шул «бер үгеҙ тиреһе»нең бил тәңгәленән — тап хәҙерге Беринг боғаҙы булаһы ерҙән ныҡ нәҙегәйеп, «нескә бил»дең бына-быны өҙөлөргә торғанлығы фашлана. Нәүбәттәге картала иһә ҡитғаларҙың айырымланып өлгөрөүе һүрәтләнгән...
(Таулы Алтай, Сармыш ҡаяһындағы географик атлас).

Карта булараҡ быныһы уғата камиллаша төшөп, ентеклерәк тасуирлауға лайыҡлы.



Әгәр ҡоро ер һыҙымын «үгеҙ»ҙең ҡойроғонан башлап аҫ (Көн) яҡлап һуҙымда барлаһаҡ, яҡшы ғына күҙаллана бөтәбеҙгә билдәле географик тәңгәлдәр: 1 (ҡойроҡ) — Африка, 2 (артҡы бот) — Үҙәк Азия, 3 (алғы бот) — хәҙерге Австралия һәм уны әүәле дөйөм-дәү ҡитғаға тоташтырыусы «күпер» — хәҙерге ваҡ утрауҙар һәм архипелагтар сылбыры. Шуларҙан ҡала 4-енсе ослоҡай — хәҙерге Корея ярымутрауы; 5-енсе — ул саҡтарҙағы ҡоро ергә тоташ булған хәҙерге Сахалин һәм Япон утрауҙары. 6-нсы — шулай уҡ ул саҡтағы тоташ ҡоро ер рәүешендәге хәҙерге Курил утрауҙары менән Камчатка ярымутрауы һәм улар уратаһындағы боронғо эске диңгеҙ — хәҙерге Охот диңгеҙе. 7-нсе — ҡитғабыҙға уткүрше Америка ҡитғаһы башланған нәҙек муйын (буласаҡ Беринг боғаҙы тәңгәле). 8-енсе — Төньяҡ Америка ҡитғаһы. 9-ынсы



Нәүбәттәге һүрәттә: хәҙерге Ҡаҙағстан, Тамғалы тауҙағы "үгеҙ тиреһенә һыҙыл-ған" географик атлас. Уда күрһәтелгән ҡитғалар: 1. Евразия. 2. Австралия. 3.Африка. 4. Америка. 5. Гренландия. Бронза быуаттар дәүере, б.э. тиклем II мең йыллыҡтын икенсе яртыһы. А.Г. Медоев.

— Көньяҡ Америка ҡитғаһы...

Күренеүенсә, тоташ бер ҡитға сифатындағы ҡоро ерҙән Америка ҡитғаһының бына-бына айырымланырға торған сағы...
Әлеге “үгеҙ тиреһе” карталары ошо китаптан килтерелде: Я.А. Шер. Петроглифы Средней и Центральной Азии. М., 1980, стр. 37, 86.

Тарих һәм сәйәсәт

Теләгән бер илдә, теләгән бер режим хакимиәтендә тарих фәне сәйәсәткә бәйле булды, була һәм буласаҡ, сөнки хакимлыҡ ҡылыусы партия, төркөм, монарх, диктатор һәм шулай уҡ илдә күпселек тәшкил итеп өҫтөнлөк алған этнос тарих тигән ҡөҙрәтле идеологик ҡоралды үҙ ҡулында тоторға, үҙ файҙаһына егергә -- был өлкәнең монополисы булырға тырыша. Ошо классик хәл Рәсәй империяһының өҫтөнлөк итеүсе этносының мәғрифәтле вәкилдәре тарафынан булдырылған һәм шул этносҡа хеҙмәт иткән *урыҫ тарих мәктәбенең* күп быуатлыҡ эшмәкәрлегендә сағыла. Һуңғы 350 йыл буйына бөтә көстәренән улар был мәктәптең нигеҙҙәрен һипләне һәм өҫҡоролмаларын нығытты, империя ҡыҫаһындағы төрлө халыҡтарҙың империяға *итәғәтле* зыялыларын *урыҫ тарих мәктәбе* аша үткәреп тәрбиәләне, көслө дәүләт аппаратының бөтә сараларын ҡулланып, шул мәктәптең рухи ҡолдарының тотороҡло ҡатламын барлыҡҡа килтерҙе; быны үҙебеҙҙең сағыштырмаса бәләкәй халҡыбыҙҙың рухи тормошонда күп күрҙек һәм күрәбеҙ – империя мәктәптәре аша ғилми дәрәжәләргә ирешкән “белгес”тәребеҙҙең күпселеге, үҙ баштары менән түгел, ә “юғарынан” алмаштырып ҡуйылған сүлмәкбаш менән эшләй. Шуға күрә ошоғаса үҙебеҙҙең *ысын* тарихыбыҙҙы белмәйбеҙ, йәки, белһәк тә, өҫтөнән тапап үтәбеҙ. Ғалимдарыбыҙҙың шул ҡылыйлығы милли мәҙәниәт әһелдәренә күсә лә шулар аша хәтерһеҙлек сире халҡыбыҙға таратыла – маңҡорттарыбыҙ ярала. Бының күргәҙмәле һабағы итеп Башҡортостандың халыҡ шағиры дәрәжәһенә ирешкән һәм хатта ҡыҙыл империяның алтын йондоҙо менән бүләкләнгән инсаныбыҙ эшмәкәрлегенән бер-нисә үрнәк килтереү ҙә етә:
«По обе стороны от Урала — от Волги до Иртыша (шулай ҙа ҡабул ҡылған бит тарихи Башҡортостандың мин билдәләгән сиктәрен! — *Й.С.*) — *на протяжении тысячелетия* ***скитались*** *башкирские племена, гонимые всеми ветрами исторической судьбы* (Башҡортостан тигән илебеҙ булмаған!.. — *Й.С.*)... *Вплоть до 1919 года...* ***не имели*** *ни своей собственной крыши над головой, ни прочной ограды на рубежах, иными словами,* ***не имели*** *своей государственности».* (М. Карим. Тепло родного очага. «Советская Башкирия» гәзитенең 1972 йыл 1 май һаны). Һәм йәнә:
«Беҙ ***фәҡир*** *булдыҡ... Беҙ* ***артта ҡалғайныҡ...*** *Беҙ...* ***белемле түгел инек...*** *Әлбиттә, ул алыҫ замандарҙа ла, мәҫәлән, Парижга беҙҙең йырсыны йәки ҡурайсыны* (бөйөк ҡурайсыбыҙ Йомабай Иҫәнбаевты йәғни. – *Й.С.*) *алып барыр булгандар, ләкин бүтәндәрҙе шаҡ-ҡатырған өсөн* ***ҡырағай кеше*** *итеп күрһәтергә саҡырғандар».* (Мостай Кәрим. Бөйөк Октябрь революцияһының 70 йыллығы айҡанлы Башҡорт опера һәм балет академия театрында тантаналы ултырышта һөйләгән телмәренән. «Совет Башҡортостаны» гәзитенең 1987 йыл 6 ноябрь һаны).
«Мине һәр саҡта ла күңел төпкөлөнән сыҡҡан ике тойго етәкләне, — ти ул, — *совет интернационализмы һәм милли үҙаң. Бында мин милли үҙаңды милли ирәбелектең һәм*

милли тыйнаҡлыҡтың юғары сағылышы тип аңланым һәм аңлайым. Ҡайһы саҡта ана шул тыйнаҡлыҡты юғалтыуҙы төҫмөрләһәм, үкенесле булып китә. Был, мәҫәлән, ҡайһы бер әҙәбиәтсе һәм тарихсыларҙың ата-бабаларҙың культура тарихындағы сигенә сыҡҡыһыҙ мәртәбәләрен дәғүәләүҙә, дөйөм төрки, хатта дөйөм кешелек ҡомартҡыларынан бары тик үҙенекен, бары тик «беҙҙең» һыныҡты ғына һындырырға маташыуында сағылыш таба. Ундай юл менән барһаҡ, беҙҙең боронғо зат-ырыуыбыҙ тәгәрмәс майын кешелек тәгәрмәстең үҙен уйлап тапҡанға тиклем үк әҙерләй башлаған, тип анһат ҡына иҫбатларға ла мөмкин»... (Мостай Кәрим. XXXVII Башҡортостан өлкә партия конференцияһында һөйләгән телмәренән. «Совет Башҡортостаны» гәзитенең 1984 йыл 21 ғинуар һаны).

Аңлатма: «Ағиҙел» журналының 1982 һәм 1984 йылдарҙағы дүрт һанында Йыһат Солтановтың «Урал батыр шәжәрәһе» тигән тәүәрихе ташҡа баҫылып, журналдың йыллыҡ бүләгенә лә лайыҡлы булғайны һәм был хеҙмәттә йылҡы малын беренсе башлап ҡулға эйәләштереү, донъялағы беренсе арасалы тәгәрмәсте яһау үҙебеҙҙең Уралда — башҡорт бабалар тарафынан башҡарылыуы комплекслы тикшеренеүҙәргә таянып иҫбатланғайны...

1984 йыл, «Совет Башҡортостаны» гәзитенең 21 июнь һанында:

«РСФСР-ҙың унынсы саҡырылыш Верховный Советының туғыҙынсы сессияһында КПСС Үҙәк Комитетының апрель (1984 йыл) Пленумы, СССР-ҙың ун беренсе саҡырылыш Верховный Советының беренсе сессияһы ҡарарҙары, КПСС Үҙәк Комитетының Генарльный секретаре, СССР Верховный Советы Президиумы Председателе К.У. Черненконың уларҙа яһаған сығыштары нигеҙендә Россия Федерацияһы халыҡ депутаттары Советтарының бурыстары тикшерелә. 20 июндә ул Мәскәүҙә Кремлдең Ҙур һарайында эшен дауам итте.

Депутаттар һәм ҡунаҡтар В.И. Воротников, Г.В. Романов, В.В. Кузнецов, И.В. Капитонов иптәштәрҙе оҙаҡ ҡул сабыуҙар менән ҡаршы алды».

Ҡайһындай ҙа ҙур форум һәм ҡайһындай ҙа мәртәбәле кешеләр! Бөйөк державаның бөйөк мәсьәләләрен уртаға һалып хәл ҡылырлыҡ был оло йыйынға Башҡортостан вәкиле лә республикабыҙҙың, халҡыбыҙҙың ошоғаса хәл ҡылынмаған ихтыяждарын һәм мохтажлыҡтарын ҡыйыу илтеп һалғандыр ҙа хәл ителеүенә өлгәшкәндер, тигән өмөт уяна. Әммә-ләкин...

Бына шул бөйөк форумда Башҡорт АССР-ы Әлшәй һайлау округынан халыҡ депутаты, РСФСР Верховный Советы Председателенең урынбаҫары М. С. Кәримов (Мостай Кәрим) телмәрене «изюминка»һы:

«Ҡайһы берҙә теге йәки был йән көйҙөргөс факттарҙы осратырға тура килә... Милли республикаларҙан, милли тыйнаҡлыҡ һәм фәнни объективлыҡ тойғоһон юғалтҡан бәғзе бер тарихсылар йәки әҙәбиәтселәр тарихты күпертеп күрһәтеүгә, үткәндәрҙе ал да гөл итеп тасуирларға тотона, боронғо ҡомартҡыларҙан үҙенә өлөш ҡайырырға һәм шунда үҙ мөһөрөн баҫырға тырыша; йәнәһе, улар башҡалар көнләшһен өсөн бик боронғо культураға ҡыҫылышы барлығын иҫбатламаҡсы. ***Бер милли әҙип[144] нәҡ уның ата-олатайҙарының тәгәрмәсте уйлап табыуын тылҡый.*** *Бындай саҡта инде башҡа берәүгә тәгәрмәс майлау өсөн дегет ҡайнатҡандарын иҫбатларға тотоноу бер ни тормай; имеш, тегеләр тәгәрмәс менән булашҡанда уныҡылар дегетте күпкә элегерәк яһаған. Үткәндәргә ошондай,*

---

[144] Йыһат Солтанов, әлбиттә!

*әгәр әйтергә рөхсәт икән, «киң» ҡараш — беҙҙең социалистик тормошобоҙ нормаларына бер нисек тә тап килмәгән **милли сикләнгәнлек**[145] билдәһе ул».*

Иллә тапҡан даһа Башҡортостан исеменән бөйөк держава форумында хәл ҡылаһы олуғ проблеманы!..

Донъяға танылған әҙип Сыңғыҙ Айытматовтың әсе иронияһы яңғыраны тап шул осорҙа:

«Что же это за национальная культура, которая не имеет своей базы?

*Но когда подобные болевые мысли высказываются, то тут же находятся люди, которые начинают рассматривать это как **проявление национализма, узости взглядов.** К сожалению, этот зуд сверхбдительности, проистекающей в немалой степени от **карьеризма,** не встречает должного осуждения. Необходимо отметить в связи с этим, что в результате такая тенденция породила на местах особый тип **демагога — говоруна-трибунщика,** который сделал для себя восхваление русского языка к месту и не к месту и умаление собственного чуть ли не престижной профессией».* («Литературная газета»ның 1986 йыл 13 август һаны).

Һәм бына бөйөк Мөхәммәтша Буранғоловтың, килер быуындар өсөн башҡорт тарихын һаҡлап ҡалған фидаиҙың, шул эше өсөн баяғылар тарафынан ҡаты эҙәрлекләнеүе тураһындағы шаһәҙәтнамәһе:

Первому секретарю ЦК КПСС, Председателю Совета Министров СССР т. Хрущеву Н.С. —

от писателя, народного сасяня Башкирской АССР Бурангулова Мухамедши Абдрахмановича, г. Уфа, ул. Мингажева, 125, кв. 45

Заявление

...Однако некоторые клеветники, любители дешевой славы, которые занимались творением из мухи слона и пользуясь жестокостью Сталина беспощадно клеветали на честных людей и умывались их слезами. Именно такие, как Сайфи Кудашев, Мустай Каримов, Кирей Марган, Бакир Усманов и Ахняф Харисовы в 1946 году 26 августа представили в ЦК КПСС доклад о репертуарном плане драмтеатров. В этом докладе они взяли на замечание мою драму «Идукэй и Мурадым» и в этой связи пытались меня оклеветать и обвинять в чем то. И действительно в 1950 году по их инициативе, по приговору особого совещания я был осужден на 10 лет и был выслан в лагерь. Освободился после смерти Сталина, в 1956 году. По приезде из места заключения в Уфу, где я и жил, обратился с заявлением о реабилитации к прокурору Баш. АССР. Тогда он по телефону обратился к выше упомянутому председателю правления Союза писателей Башкирии Мустаю Каримову. После этого разговора, через три дня прокурор республики мне заявил, что «не нахожу основания реабилитировать Вас». Тогда я был вынужден обратиться к прокурору РСФСР, он также в моей просьбе отказал. Тогда я был вынужден обратиться к Вам, Никита Сергеевич, по Вашему указанию Генеральный прокурор СССР по моему делу сделал протест и по этому протесту Верховный Суд Баш. АССР 30 октября 1959 года меня реабилитировал полностью»... (Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының ғилми архивы, ф. 25, оп. 1, ед. хр. 58).

---

[145] Көнгә ҡарап йүҙ төҫөн алмаштырған хамелеон кеүек, заманаға яраҡлашып, «милләтселек» тигән боронғо терминын шулай алмаштыра.

Халыҡ сәсәне бөйөк Мөхәммәтша Буранғолов яҡты донъянан киткәндән һуң бушанып ҡалған "ҡотороҡо милләтсе" урынына яңы «һөрһөп бөткән»дәрҙе эҙләп табыу (табылмаһалар, яһау!) һәм баяғы сәйәсәттәге мөҡәддәс көрәшен дауам итеп, бөйөк ҡыҙыл империяның ҙур сәйәсәт үрҙәренә өҙләкһеҙ күтәрелеү сәме тынғы бирмәй ине, ахырыһы, сәйәсмәнлек нәфсеһе нығ ҡуҙғалған һәм ҡыҙышҡан халыҡ шағирына. Шуға күрәлер ҙә ул, Мәскәүҙең һәм урындағы партократияның аҫтыртын милли сәйәсәте хорына ҡушылып бар көсөнә йырлау өсөн, башҡорт халҡының тарихын эстән емертергә тотона — үткәнен юҡҡа сығара, ә юҡҡа сығарып булмаҫтайын тырышып түбәнһетә — Бөйөк Октябрь революцияһынаса башҡорттоң бер нимәһе лә булмаған, ә үҙе ҡырағай булған, тигән «дөйөм йыр»ға ауаздашланып көсәнә...

Тарихыбыҙға бәйле ошондай сәйәси тартыштар осоронда, әлбиттә, халыҡҡа башҡорттоң йәшертелгән ысын тарихын ҡайтарып бирергә тырышҡанда боронғо сығанаҡтар, географик карталар кире ҡаҡҡыһыҙ таяныс булып торҙо, ләкин баяғы политикандар уларҙы барыбер күрмәҫкә, күрһәләр ҙә, телгә алмаҫҡа, алһалар ҙа, төрлө уйҙырмалар ярҙамында бутарға, юҡҡа сығарырға көсәнде. Ундайҙарҙы иң йөҙәткәне – бик боронғо географик карталар ине, сөнки сығанаҡтарҙағы яҙмаларҙы төрлөсә аңлатып яңылыштырырға була, ә карталар менән алдашыуы ҡыйын, сөнки географик объекттар һәм уларҙың атамалары күргәҙмәле рәүештә күҙгә төртә.

КҮК УРАЛДЫҢ АҪАБАЛАРЫ

Тарих һәм сәйәсәт

Теләгән бер илдә, теләгән бер режим хакимиәтендә тарих фәне сәйәсәткә бәйле булды, була һәм буласаҡ, сөнки хакимлыҡ ҡылыусы партия, төркөм, монарх, диктатор һәм шулай уҡ илдә күпселек тәшкил итеп өҫтөнлөк алған этнос тарих тигән ҡөҙрәтле идеологик ҡоралды үҙ ҡулында тоторға, үҙ файҙаһына егергә -- был өлкәнең монополисы булырға тырыша. Ошо классик хәл Рәсәй империяһының өҫтөнлөк итеүсе этносының мәғрифәтле вәкилдәре тарафынан булдырылған һәм шул этносҡа хеҙмәт иткән *урыҫ тарих мәктәбенең* күп быуатлыҡ эшмәкәрлегендә сағыла. Һуңғы 350 йыл буйына бөтә көстәренән улар был мәктәптең нигеҙҙәрен һипләне һәм өҫкоролмаларын нығытты, империя ҡыҫаһындағы төрлө халыҡтарҙың империяға *итәғәтле* зыялыларын *урыҫ тарих мәктәбе* аша үткәреп тәрбиәләне, көслө дәүләт аппаратының бөтә сараларын ҡулланып, шул мәктәптең рухи ҡолдарының тотороҡло ҡатламын барлыҡҡа килтерҙе; быны үҙебеҙҙең сағыштырмаса бәләкәй халҡыбыҙҙың рухи тормошонда күп күрҙек һәм күрәбеҙ – империя мәктәптәре аша ғилми дәрәжәләргә ирешкән "белгес"тәребеҙҙең күпселеге, үҙ баштары менән түгел, ә "юғарынан" алмаштырып ҡуйылған сүлмәкбаш менән эшләй. Шуға күрә ошоғаса үҙебеҙҙең *ысын* тарихыбыҙҙы белмәйбеҙ, йәки, белһәк тә, өҫтөнән тапап үтәбеҙ. Ғалимдарыбыҙҙың шул ҡылыйлығы милли мәҙәниәт әһелдәренә күсә лә шулар аша хәтерһеҙлек сире халҡыбыҙға таратыла – маңҡорттарыбыҙ ярала. Быны күргәҙмәле

һабағы итеп Башҡортостандың халыҡ шағиры дәрәжәһенә ирешкән һәм хатта ҡыҙыл империяның алтын йондоҙо менән бүләкләнгән инсаныбыҙ эшмәкәрлегенән бер-нисә үрнәк килтереү ҙә етә:

«По обе стороны от Урала — от Волги до Иртыша (шулай ҙа ҡабул ҡылған бит тарихи Башҡортостандың мин билдәләгән сиктәрен! — *Й.С.*) — *на протяжении тысячелетия* ***скитались*** *башкирские племена, гонимые всеми ветрами исторической судьбы* (Башҡортостан тигән илебеҙ булмаған!.. — *Й.С.*)... *Вплоть до 1919 года...* ***не имели*** *ни своей собственной крыши над головой, ни прочной ограды на рубежах, иными словами,* ***не имели*** *своей государственности».* (М. Карим. Тепло родного очага. «Советская Башкирия» гәзитенең 1972 йыл 1 май һаны). Һәм йәнә:

«Беҙ ***фәкир*** *булдыҡ... Беҙ* ***артта ҡалғайныҡ...*** *Беҙ...* ***белемле түгел инек...*** *Әлбиттә, ул алыҫ замандарҙа ла, мәҫәлән, Парижға беҙҙең йырсыны йәки ҡурайсыны* (бөйөк ҡурайсыбыҙ Йомабай Иҫәнбаевты йәғни. – *Й.С.*) *алып барыр булғандар, ләкин бүтәндәрҙе шаҡ-ҡатырған өсөн* ***ҡырағай кеше*** *итеп күрһәтергә саҡырғандар».* (Мостай Кәрим. Бөйөк Октябрь революцияһының 70 йыллығы айҡанлы Башҡорт опера һәм балет академия театрында тантаналы ултырышта һөйләгән телмәренән. «Совет Башҡортостаны» гәзитенең 1987 йыл 6 ноябрь һаны).

«Мине һәр саҡта ла күңел төпкөлөнән сыҡҡан ике тойғо етәкләне, — ти ул, — *совет интернационализмы һәм милли үҙаң. Бында мин милли үҙаңды милли ирәбелектең һәм милли тыйнаҡлыҡтың юғары сағылышы тип аңланым һәм аңлайым. Ҡайһы саҡта ана шул тыйнаҡлыҡты юғалтыуҙы төҫмөрләһәм, үкенесле булып китә. Был, мәҫәлән, ҡайһы бер әҙәбиәтсе һәм тарихсыларҙың ата-бабаларҙың культура тарихындағы сигенә сыҡҡыһыҙ мәртәбәләрен дәғүәләүҙә, дөйөм төрки, хатта дөйөм кешелек ҡомартҡыларынан бары тик үҙенекен, бары тик «беҙҙең» һыныҡты ғына һындырырға маташыуында сағылыш таба. Ундай юл менән барһаҡ, беҙҙең боронғо зат-ырыуыбыҙ тәгәрмәс майын кешелек тәгәрмәстең үҙен уйлап тапҡанға тиклем үк әҙерләй башлаған, тип анһат ҡына иҫбатларға ла мөмкин»...* (Мостай Кәрим. XXXVII Башҡортостан өлкә партия конференцияһында һөйләгән телмәренән. «Совет Башҡортостаны» гәзитенең 1984 йыл 21 ғинуар һаны).

Аңлатма: «Ағиҙел» журналының 1982 һәм 1984 йылдарҙағы дүрт һанында Йыһат Солтановтың «Урал батыр шәжәрәһе» тигән тәүәрихе ташҡа баҫылып, журналдың йыллыҡ бүләгенә лә лайыҡлы булғайны һәм был хеҙмәттә йылҡы малын беренсе башлап ҡулға эйәләштереү, донъялағы беренсе арасалы тәгәрмәсте яһау үҙебеҙҙең Уралда — башҡорт бабалар тарафынан башҡарылыуы комплекслы тикшеренеүҙәргә таянып иҫбатланғайны...

1984 йыл, «Совет Башҡортостаны» гәзитенең 21 июнь һанында:

«РСФСР-ҙың унынсы саҡырылыш Верховный Советының туғыҙынсы сессияһында КПСС Үҙәк Комитетының апрель (1984 йыл) Пленумы, СССР-ҙың ун беренсе саҡырылыш Верховный Советының беренсе сессияһы ҡарарҙары, КПСС Үҙәк Комитетының Генарльный секретаре, СССР Верховный Советы Президиумы Председателе К.У. Черненконың уларҙа яһаған сығыштары нигеҙендә Россия Федерацияһы халыҡ депутаттары Советтарының бурыстары тикшерелә. 20 июнда ул Мәскәүҙә Кремлдең Ҙур һарайында эшен дауам итте.

Депутаттар һәм ҡунаҡтар В.И. Воротников, Г.В. Романов, В.В. Кузнецов, И.В. Капитонов иптәштәрҙе оҙаҡ ҡул сабыуҙар менән ҡаршы алды».

Ҡайһындай ҙа ҙур форум һәм ҡайһындай ҙа мәртәбәле кешеләр! Бөйөк державаның бөйөк мәсьәләләрен уртаға һалып хәл ҡылырлыҡ был оло йыйынға Башҡортостан вәкиле лә республикабыҙҙың, халҡыбыҙҙың ошоғаса хәл ҡылынмаған ихтыяждарын һәм мохтажлыҡтарын ҡыйыу илтеп һалғандыр ҙа хәл ителеүенә өлгәшкәндер, тигән өмөт уяна. Әммә-ләкин...

Бына шул бөйөк форумда Башҡорт АССР-ы Әлшәй һайлау округынан халыҡ депутаты, РСФСР Верховный Советы Председателенең урынбаçары М. С. Кәримов (Мостай Кәрим) телмәренең «изюминка»һы:

«Ҡайһы берҙә теге йәки был йән көйҙөргөс факттарҙы осратырға тура килә... Милли республикаларҙан, милли тыйнаҡлыҡ һәм фәнни объективлыҡ тойғоһон юғалтҡан бәғзе бер тарихсылар йәки әҙәбиәтселәр тарихты күпертеп күрһәтеүгә, үткәндәрҙе ал да гөл итеп тасуирларға тотона, боронғо ҡомартҡыларҙан үҙенә өлөш ҡайырырға һәм шунда үҙ мөһөрөн баçырға тырыша; йәнәһе, улар башҡалар көнләшһен өсөн бик боронғо культураға ҡыçылышы барлығын иçбатламаҡсы. ***Бер милли әҙип***[146] ***нәҡ уның ата-олатайҙарының тәгәрмәсте уйлап табыуын тылҡый.*** *Бындай саҡта инде башҡа берәүгә тәгәрмәс майлау өсөн дегет ҡайнатҡандарын иçбатларға тотоноу бер ни тормай; имеш, тегеләр тәгәрмәс менән булашҡанда уныҡылар дегетте күпкә элегерәк яһаған. Үткәндәргә ошондай, әгәр әйтергә рөхсәт икән, «киң» ҡараш — беҙҙең социалистик тормошобоҙ нормаларына бер нисек тә тап килмәгән* ***милли сикләнгәнлек***[147] *билдәһе ул».*

Иллә тапҡан даһа Башҡортостан исеменән бөйөк держава форумында хәл ҡылаһы олуғ проблеманы!..

Донъяға танылған әҙип Сыңғыҙ Айытматовтың әсе иронияһы яңғыраны тап шул осорҙа:

«Что же это за национальная культура, которая не имеет своей базы?

Но когда подобные болевые мысли высказываются, то тут же находятся люди, которые начинают рассматривать это как ***проявление национализма, узости взглядов.*** *К сожалению, этот зуд сверхбдительности, проистекающей в немалой степени от* ***карьеризма,*** *не встречает должного осуждения. Необходимо отметить в связи с этим, что в результате такая тенденция породила на местах особый тип* ***демагога — говоруна-трибунщика,*** *который сделал для себя восхваление русского языка к месту и не к месту и умаление собственного чуть ли не престижной профессией».* («Литературная газета»ның 1986 йыл 13 август һаны).

Һәм бына бөйөк Мөхәммәтша Буранғоловтың, килер быуындар өсөн башҡорт тарихын һаҡлап ҡалған фидаиҙың, шул эше өсөн баяғылар тарафынан ҡаты эҙәрлекләнеүе тураһындағы шаһәҙәтнамәһе:

Первому секретарю ЦК КПСС, Председателю Совета Министров СССР т. Хрущеву Н.С. —

от писателя, народного сасяня Башкирской АССР Бурангулова Мухамедши Абдрахмановича, г. Уфа, ул. Мингажева, 125, кв. 45

Заявление

...Однако некоторые клеветники, любители дешевой славы, которые занимались творением из мухи слона и пользуясь жестокостью Сталина беспощадно клеветали на

---

[146] Йыһат Солтанов, әлбиттә!

[147] Көнгә ҡарап үҙ төçөн алмаштырған хамелеон кеүек, заманаға яраҡлашып, «милләтселек» тигән боронғо терминын шулай алмаштыра.

честных людей и умывались их слезами. Именно такие, как Сайфи Кудашев, Мустай Каримов, Кирей Марган, Бакир Усманов и Ахняф Харисовы в 1946 году 26 августа представили в ЦК КПСС доклад о репертуарном плане драмтеатров. В этом докладе они взяли на замечание мою драму «Идукэй и Мурадым» и в этой связи пытались меня оклеветать и обвинять в чем то. И действительно в 1950 году по их инициативе, по приговору особого совещания я был осужден на 10 лет и был выслан в лагерь. Освободился после смерти Сталина, в 1956 году. По приезде из места заключения в Уфу, где я и жил, обратился с заявлением о реабилитации к прокурору Баш. АССР. Тогда он по телефону обратился к выше упомянутому председателю правления Союза писателей Башкирии Мустаю Каримову. После этого разговора, через три дня прокурор республики мне заявил, что «не нахожу основания реабилитировать Вас». Тогда я был вынужден обратиться к прокурору РСФСР, он также в моей просьбе отказал. Тогда я был вынужден обратиться к Вам, Никита Сергеевич, по Вашему указанию Генеральный прокурор СССР по моему делу сделал протест и по этому протесту Верховный Суд Баш. АССР 30 октября 1959 года меня реабилитировал полностью»... (Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының ғилми архивы, ф. 25, оп. 1, ед. хр. 58).

Халыҡ сәсәне бөйөк Мөхәммәтша Буранғолов яҡты донъянан киткәндән һуң бушанып ҡалған "ҡоторонҡо милләтсе" урынына яңы «һөрһөп бөткән»дәрҙе эҙләп табыу (табылмаһалар, яһау!) һәм баяғы сәйәсәттәге мөҡәддәс көрәшен дауам итеп, бөйөк ҡыҙыл империяның ҙур сәйәсәт үрҙәренә өҙлөкһөҙ күтәрелеү сәме тынғы бирмәй ине, ахырыһы, сәйәсмәнлек нәфсеһе ныҡ ҡуҙғалған һәм ҡыҙышҡан халыҡ шағирына. Шуға күрәлер ҙә ул, Мәскәүҙең һәм урындағы партократияның аҫтыртын милли сәйәсәте хорына ҡушылып бар көсөнә йырлау өсөн, башҡорт халҡының тарихын эстән емертергә тотона — үткәнен юҡҡа сығара, ә юҡҡа сығарып булмаҫтайын тырышып түбәнһетә — Бөйөк Октябрь революцияһынаса башҡорттоң бер нимәһе лә булмаған, ә үҙе ҡырағай булған, тигән «дөйөм йыр»ға ауаздашланып көсәнә...

Тарихыбыҙға бәйле ошондай сәйәси тартыштар осоронда, әлбиттә, халыҡҡа башҡорттоң йәшертелгән ысын тарихын ҡайтарып бирергә тырышҡанда боронғо сығанаҡтар, географик карталар кире ҡаҡҡыһыҙ таяныс булып торҙо, ләкин баяғы политикандар уларҙы барыбер күрмәҫкә, күрһәләр ҙә, телгә алмаҫка, алһалар ҙа, төрлө уйҙырмалар ярҙамында бутарға, юҡҡа сығарырға көсәнде. Ундайҙарҙы иң йөҙәткәне – бик боронғо географик карталар ине, сөнки сығанаҡтарҙағы яҙмаларҙы төрлөсә аңлатып яңылыштырырға була, ә карталар менән алдашыуы ҡыйын, сөнки географик объекттар һәм уларҙың атамалары күргәҙмәле рәүештә күҙгә төртә.

Папирус битендәге башҡорт изге тауҙары картаһы

Бабаларҙың ҡая таштарға төшөрөлгән карталары тураһында күп яҙылды, ә бында йомшаҡ матдәләрҙәге үҙебеҙгә ҡағылышлы бер килке карталарҙы байҡайыҡ.

Беҙҙең эраға тиклем 2778 йылдан алып 730 йылғаса төрлө осорҙарҙа Боронғо Египет тәхетендә иң кәмендә 6 (алты) башҡорт фирғәүен булып ултырғанын яҙғайныҡ. Шулар араһынан тарихта иң күренеклеһе Үҫәргән йәки Саргон батша

булыр. Б.э.тиклем XXIV быуатта ул бөтә Шумерҙы яулап ала һәм Египетҡаса барып етә, үçәргәндәр ундағы халыҡтарҙың рухи-дини тормошонда ла шаҡтай эҙ ҡалдыра. Улар илткән тәүдинебеҙгә бәйле ҡомартҡы – б.э. тиклем 1300 йылда папируска һүрәтләнгән изге 1.Ҡуш-тау, 2.Шәке-тау, улар янынан ағылыусы 3.Ағиҙел йылғабыҙ картаһы:



Ни өсөн Тора-тау һәм Йөрәк-тау күрһәтелмәгән, тигән һорауға яуап *тәүдин* ҡанундарынан аңлашыла: Тора-тау – бөтә дүрт юлдыҡылар өсөн дә уртаҡ, бөтә хоҙайҙарҙы ла тыуҙырған изге тау; Ҡуш-тауҙың төньяҡ убаһы менән Йөрәк-тау – Тышҡы Башҡорт (бәжәнәк-башҡорт) ҡәүемдәренеке; Ҡуш-тауҙың көньяҡ убаһы менән Шәке-тау – Эске Башҡорт (үçәргән-башҡорт) ҡәүемдәренең изге тауы. Һуңғыһы ғына айырып күрһәтелгәнлектән, тимәк, был картаны Боронғо Египеттың үçәргән башҡорто яһаған. Бик боронғо замандарҙан уҡ башҡорттоң *дүрт юл* ҡәүемдәре Ағиҙел һыу юлынан буйлап килеп, картала күрһәтелгән ҡоро юлдан ошо изге тауҙарға барып табынғандар. Өçтәп иçкә төшөрәйек: мифтарыбыҙҙа Ҡуш-тау – ***Дәү Хоҙайыбыҙ Имирҙың*** ҡуш имсәге һаналған (Шәке-тау – имсәк башы) һәм уның тәүге исеме *лә* ***Имәй*** (карталарҙа Имай, Умай) булған; иң боронғо карталарҙа ошо исем (Умай) хәҙерге Урал тауҙарына ҡушылған. 1375 йылда нәшер ителгән Каталон картаһында Ағиҙел йылғабыҙ тап Ҡуш-тауыбыҙҙан башлана – унда асыҡ итеп Ҡуш-тау һүрәтләнгән:

Птолемей картаһында Эске (Көнбайыш) Урал һәм Тышҡы (Көнсығыш) Урал

Птолемейҙың (б.э. II быуатында йәшәгән) “География”һындағы донъя карталарын 1540 йылда Себастьян Мюнстер ташҡа баҫтырып сығарған. Унда



Төнь яҡ боҙло океандан – Каспий диңгеҙенәсә буйлаған, Урал тауҙарының ике яғына һуҙылған Скиф-өйө (Скифия) тигән ифрат ҙур ил бар – һуңынан ул тарихи Башҡортостан тип йөрөтөлә. Боронғо географтарға ныҡ билдәле был “скиф” атамаһы боронғо башҡортса ***“әсә-көб”*** тигәндән хасил, йәғни *“әсә-бүре”*; боронғо телебеҙҙә бүре-эт тоҡомо *“көб”* *(көбәс – бүре-әсә; көбәт, ҡеүәт – бүре-ата йәки эт; көбәк – бүре-әкә/аға, йәғни йәш ата эт)* тип исемләнгән. Әсә-Бүре Үҫәргән башҡорттарының башбабаһы *Шүлгән-матурҙың* имсәк әсәһе һаналған һәм

изгеләштерелгән, шуға күрә Көнбайыш Урал (Эске Башҡорт) ерҙәрендә йәшәүсе һәм Әсә-Бүрегә табыныусы башҡорттарҙы “скиф” тип атағандар һәм был атама Көнсығыш Урал (Тышҡы Башҡорт) ерҙәрендә йәшәгән һәм башбабаһы *Урал-батырҙың* имсәк инәһе Бизон-Һыйырға йәки Болан-Һыйырға табынған Бәжәнәк башҡорттарына ла йәбештерелә. Шулай итеп, Скифия – башҡорт тоҡомоноң бер туған ике фратрияһының – үҫәргән-башҡорт менән бәжәнәк-башҡорттоң йәшәү урыны, хаҡ-аҫаба ерҙәре. Птолемей картаһында ул яҡшы төҫмөрләнә: Имай-Урал тауҙары, Эске Башҡорт һәм Тышҡы Башҡорт, “ат ите ашаусылар – башҡорттар, Урал көнсығышында Абҙаҡ, Әсәтән ҡалалары...



Рис. 23а. TABVLA ASIAE VII. Скифия, Согдиана, Персия, Индия. Первая часть.

Шул картаның икенсе өлөшөндә күрәбеҙ: Яйыҡ, Иҙел, Кама, Ағиҙел; Өфө йылғалары, Иҙел тамағында уң яҡлап Сармат-Юрматы башҡорттары; Ағиҙел менән Өфө йылғалары ҡушылған сата-аралыҡта (тап хәҙерге Өфө торған ерҙә) – Rh-Obo-sti йәғни ***Агиҙел-Өфө-саты*** тигән мәркәз исеме – тап ошо ***Өфө*** башҡалабыҙ! Бабаларыбыҙҙың был дини-мәҙәни үҙәгенә яттар аяҡ баҫа алмаған (юлда уҡ үлтерелгән), уның хаҡында сит илдәрҙең кешеләре ишетеп кенә белгәндәр, шуға күрә картала Өфө-ҡалабыҙ ҡәҙимгесә бина һүрәте рәүешендә билдәләнмәгән. Әммә, асыҡ күренеүенсә, Өфө ҡалаһы Птолемейға билдәле булған. Шуға күрә хәҙерге һаҡсыл тарихсыбыҙ Н.А.Мәжитовтың датаһы -- Өфө ҡалаһының йәшәй башлауын б.э. V быуаты менән билдәләүе хәҡиҡәткә тап килмәй.

Инде Иҙелдең урта үҙән картаһына күсәйек.



Рис. 18d. TABVLA ASIAE II. Сарматия Азиатская. Четвертая часть

Унда Свияга һәм Терешка йылғалары аралығында башҡорт ир-ҡыҙҙарының – Амазонкаларҙың иле күрһәтелгән. Терешканың уң яғында йәнә башҡорттоң Арбалы-Ҡаңғы иле.

Әйткәндәй, Өфө ҡалаһының исеме ***Ур-Өфө-өй* – *Рифей*** рәүешендә б.э. тиклем үк гректарға киң билдәле булған, Птолеией ***Имай*** (Эмей, Имсәк – Ҡуш-тауҙың боронғо исеме) тип белгән Урал тауҙарын да гректар ***Рифей*** тип йөрөткән.

Мөхәиммәт әл-Идриси картаһы (1154)

Билдәле булыуынса, һәр хәлдә минең тикшереүҙәр һөҙөмтәһенсә, Өфө ҡалаһы б.э. тиклемге бик боронғо замандарҙан уҡ Евразия ҡитғаһының дин һәм мәҙәниәт мәркәзе рәүешендә донъяға билдәле булған һәм, хәҙер инде төрлө илдәрҙең иң алдынғы ғалимдары таныуынса, хәҙерге һәм тарихи Башҡортостан сиктәрендәге Урал – *кешелек донъяһының бишеге* булған. Фәнни яҡтан өҙлөкһөҙ дөрөҫләнә килгән ошо фактты танымау, юҡҡа сығарыу өсөн баяғы ғилми-әҙәби яһилдар тарафынан, башҡортсалап әйткәндә, төрлө этлектәр эшләнә. Күҙгә төртөп торған матди асышты -- Өфө-II тип йөрөтөлгән боронғо Өфө ҡалаһының ҡаҙылма ҡомарҡыларын инҡар итеүҙәр, моғайын, маңҡортлоҡтан арына башлаған тарихсыларыбыҙҙың да үҙ эшендә һүлпәнлеге, ҡыйыуһыҙлығы арҡаһындалыр, б.э. тиклем үк киң билдәле мәркәздең йәшәү осорон б.э. V быуатынан ғына башлау күрһәтә шуны. Ләкин Н.А.Мәжитовты ошо үтә һаҡсыллығы ла уны яһилдарҙан ҡотҡармай – һәр яҡлап ябырылалар. Александр Антонов тигән берәү, мәҫәлән, бына нимәләр яҙа:

“В книге, написанной Н.А.Мажитовым совместно с А.Н.Султановой, авторам уже не понадобилось отождествлять правый приток Итиля с рекой Уфой: «На карте (Идриси. — И.А.) страна башкир размещена в верховьях реки, впадающей в Каспийское море». Верховьями этой реки, как известно, считалась «Агидель (Белая) со своими притоками», вытекающими с Уральских гор, которые на карте «выведены под названием Айани». Но если река, на которой жили башкиры, вытекала из гор Айани, то это не Белая, а Верхняя Кама, где и помещены башкиры на карте Идриси. Конечно, нельзя считать, что башкиры и в самом деле жили не на Белой, а на Каме. Ведь и сам Идриси в седьмой секции пятого климата размещает башкир в верховьях Итиля, т. е. на р. Белой. Но этим данным противоречат данные седьмой секции седьмого климата, которые отражены на карте. Стало быть, Идриси дает две версии локализации башкир — на Белой и на Верхней Каме. Нет необходимости доказывать, что первая версия правильна, а вторая — нет (минеңсә, икеһе лә дөп-дөрөҫ – тарихи Башҡортостан ерҙәре. Й.С.). Значит, локализацию башкир в седьмой секции седьмого климата сочинения Идриси и на его карте надо признать ошибочной, а попытки Н.А.Мажитова доказать, что на карте Идриси башкиры размещены правильно, — неубедительными”.

Күренеүенсә, бында әл-Идриси картаһында билдәләнгән башҡорттарҙың йәшәү урынын *яңылыштырыу* маҡсатында картаның үҙе түгел, ә боронғо автор тарафынан төрлө быуаттың төрлө сығанаҡтарынан йыйылған һәм күбеһе хаталыҡлы тасуирнамәләр беренсе урынға ҡуйыла һәм быға А.Н.Мәжитов тоҫмалының теүәллекле эшләп еткерелмәүе ярҙам итә. Башҡорттарҙы тап ошолай ерлектәренән тайҙыртып кесерәйтеү, ҡырағайлаштырыу, кәмһетеү алымы тарихсы И.Г.Коновалованың Рәсәй фәндәр академияһы Рәсәй тарихы институты раҫлаған “Восточная Европа в сочинениях ал-Идриси” тигән китабында (1999) һис бер йәшермәйенсә ҡулланыла:

“*Басджирты*. Сведения, приводимые ал-Идриси о басджиртах (башкирах), также отчасти повторяют данные более ранних писателей. Новая информация касается городов басджиртов: "Из городов внутренних басджиртов [назовем] Мастр и Кастр. Оба города невелики, и купцы редко посещают их. И никто в них не бывал, так как [туземцы] убивают всех чужестранцев, которые хотят проехать через их страну (дөрөҫө -- ҡитғаның изге дини үҙәге Өфө ҡалаһына яттарҙы үтәкрмәйҙәр. -- Й.С.). Оба города стоят на реке, впадающей в Исил".

По всей вероятности, эти данные ал-Идриси получил из вторых рук: информатор географа сам вряд ли бывал в городах басджиртов и знал лишь их названия, а также имел представление о труднодоступности этих городов для купцов. Наличие целого ряда вариантов чтения названий городов (Мас.т.р, Маст.р, Мамир, Мас.рада; Кас.т.р, Камир, Кас.р) также говорит о недостаточной конкретности полученных ал-Идриси сведений о городах басджиртов.

Основными занятиями башкир в XII в. являлись кочевое и полукочевое скотоводство, охота, в том числе пушной промысел,

бортничество. Никаких городов в XII в. у башкир не было (тарихсыға һис килешмәҫлек күрәләтә алдап кәмһетеү! – Й.С.). Даже в XIII в. путешественник Вильгельм Рубрук отмечал полное отсутствие каких-либо поселений в стране башкир (сөнки Рубрук та Эске Башҡорт үҙәгенә үтеп керә алмаған. --.Й.С.). Данные ал-Идриси о наличии городов у басджиртов могут отражать дошедшие до его информатора сведения о башкирских родо-племенных названиях -- кесе и мишар" (сетерекле хәлдән еңел ҡотолоу! – Й.С.).



Рис. 1. Поволжье по карте бр. Пицигани 1367 г.

Ҙур күләмле хеҙмәтенең төрлө биттәрендә башҡорт ерһыуҙарын, тауҙарын исемләп тикшергәндә лә был тарихсы ундағы *башҡорт* атамаһы морон төртөрҙәй урындарҙы уратып үтә, фәҡәт өҫтә килтерелгән кәмһетеүле өҙөктә генә үҙ алымынан һөрлөгөргә мәжбүр. Ғөмүмән, башҡорт халҡын һәм тарихын иҫәпкә алмау урыҫ тикшереүселәренең күпселегенә йоҡҡан яман сир һәм улар был йоғошлонан арынырға йыйынмай. Сәбәбе үҙебеҙҙән дә – тарихты сәйәсәткә хеҙмәт иттерткән остаздарыбыҙ аша атларға ярамай тип ҡанға һеңдергән идеологик кәртәләрҙе йырып сыға алмайбыҙ. Әйтәйек, Н.А.Мәжитов китабының хатта 2010 йылғы яңы баҫмаһында ла әл-Идриси картаһына (1154) иғтибар ителмәгән (Птолемей хаҡында әйтәһе лә түгел!) һәм, үкенескә ҡаршы, урта быуат картографтарына ла яҙа таянылған: "...на карте западноевропейских авторов XIV-XVI вв. братьев Пицигано (1367 г.) и Г.Меркатора (1554 г.) город Паскерти (Башкорт) помещен в среднем течении р. Белой, примерно, на уровне современной Уфы. На Южном Урале городище Уфа-II самый крупный памятник, поэтому логично предположить, что под городом Башкорт вышеназванные авторы подразумевали комплекс памятников (городища, некрополь, селища) с городищем Уфа-II в центре.

Утверждение за городищем Уфа-II названия «город Башкорт» легко объяснимо: оно возникло от самоназвания народа башкорт -- коренного населения Южного Урала. Эта - распространенная традиция, когда этнонимы присваиваются городам".

Һуңғы һөйләм дөрөҫ, әлбиттә, ләкин Пицигано билдәләгән Башҡорт ҡалаһы Н.А.Мәжитов инанып раҫлаған урында түгел шул, ә Ағиҙел тамағына (Кама

йылғаһына) яҡыныраҡ *һул ярҙа.* Ләкин Паскатир йәки Мәрмәр (хәҙерге Эстәрлетамаҡ) үҙ урынында тора (картала аҫтарына һыҙылған).



Меркаторға килгәндә, уның 1641 йыл нәшер ителгән картаһында, Өфө йылғаһы күрһәтелмәһә лә, Уфиу (Өфө) ҡалаһы үҙ урынында – Ағиҙелдең уң ярында ғәмәлдә Өфө йылғаһының тамағында урынлаштырылған; ул осорҙа Башҡортостан ҡурсаулыҡтарының сиктәре асылғанлыҡтан, Өфө ҡалаһы үҙ исемендә яҙылған, ә элегерәкке -- 1633 йылғы нәшер картаһында Өфө йылғаһы ла күрһәтелеп, тап хәҙерге урынындағы Өфө-ҡалабыҙ шул әүәлгесә Паскерти тип аталғайны. Һәр хәлдә, Ағиҙел-Өфө йылғалар сатындағы Паскертиҙы Өфө ҡалаһы тип раҫлаусы башҡорт ғалимдары Й.М.Йосопов, Н.А.Мәжитов, А.В. Бесәншин уҙамандар хаҡлы. Шул уҡ ваҡытта Н.А.Мәжитовтың, артыҡ һаҡсыллыҡ (әллә ҡурҡаҡлыҡ?!) күрһәтеп, Птолемей һәм Мөхәммәт әл-Идрисиҙы уратып үтеүе башҡорттарҙың һәм Өфө ҡалаһының тарихын бутаусы һәм ҡыҫҡартыусыларҙың тирмәненә һыу ҡоя. Бына әл-Идриси картаһындағы Эске Башҡорт күренеше:



Кәм тигәндә 16 (ун алты) башҡорт ҡалаһы билдәләнгән һәм иң эре өсөһөнөң исеме асыҡ уҡыла: ***Маср,*** (хәҙерге Татарстан Республикаһындағы Сермән), ***Ҡаср,*** (хәҙерге Өфө), ***Караҡия*** (хәҙерге Ырымбур өлкәһе Биләй районында Яйыҡтың уң ярындағы Ҡыҙылташ/Красногор ҡалаһы, был заманда ҡасаба). Быларҙың тәүгеһе –

Пицигано картаһындағы, икенсеһе 1633 йылғы Меркаторҙыҡындағы Паскерти (Башҡорт). Ни өсөн былай: Өфө-ҡалабыҙ берәүҙәрҙекендә -- Паскерти, икенселәренекендә Ҡаср? тигән һорауға яуап: Паскерти тигәндәре, минеңсә, “Башҡорттарҙыҡы” йәғни башҡорттарҙың баш ҡалаһы, тигән киңәйтелгән билдәләмә, сөнки Өфөнөң ысын исемен яттарға әйтмәгәндәр. Шуға күрә әл-Идриси исемдәрен әйтеү тыйылған ике ҡалабыҙҙы үҙ телендә атаған: Маср – ғәрәпсә “серле, йәшерен”, Каср – “батша һарайы, бейек һәм матур итеп һалынған бина”, ысынлап та, ҡитғаның дини-мәҙәни мәркәзе Өфөгә тап килә. Эстәрлетамаҡ ҡалабыҙҙың боронғо ике исеме барлығын әйткәйнем, икеһе лә башҡортса: “мәре” (урыҫтағы “море”) һүҙенең әлегәсә телебеҙҙә “һыу” (“мар” тиһәк, ғәрәпсә “йылан” булыр ине) мәғәнәһендә йөрөүен иҫләһәк, Мәр-Мәр – “һыу-һыу” тимәк, ике йылға (Эстәрле, Ашҡаҙар) тамағындағы ҡала. Икенсе исеме Паскатир – Басаҡ/Бажаҡ/Бөжәк/Балаҡ (Әсә-Бүре/Волк, Волчица) һәм Тор/Тора/Түрә (Хоҙай) һүҙҙәренең ҡушмаһы, тимәк, Әсә-Бүре-Хоҙай ҡалаһы. Шул Паскатирҙан, баштағы “п” өнө юйылып, Аскатир/Ашҡаҙар йылға исеме тороп ҡалған. Билдәле сәйәхәтсе Плано Карпини Алтын Урҙаның баш ҡалаһы Ҡара-Ҡоромға барырға 1245 йылда юлланып, сәйәхәтендә шул Паскатир (Эстәрлетамаҡ) ҡалаһы аша уҙған, ул баш ҡала бынан алыҫ түгел Урал артындағы Ҡара-ҡан/Ҡараған (Ҡара-һыу) һәм Үтәгән (монголдар Утикен тип яҙа) йылғалары сатында бик боронғо ҡалабыҙ Арҡайым тәңгәлендә ҡоролоп, Ҡара йылға буйындағы ҡала-ҡором, йәки боронғо ҡала мәғәнәһендә ***Ҡара-Ҡором*** тип аталған.

Идрисиҙың карталарына бирелгән аңлатмаларында башҡорттар тураһында ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр бар:

«В упомянутую Русскую реку (Волга-Иҙелгә. – Й.С.) впадают шесть больших рек, берущих начало в горе Кукайа (Күк-ҡая – Күк Урал. – Й.С.), а это большая гора, протянувшаяся от моря Мрака до края обитаемой земли. Эта гора простирается до страны Йаджуджа и Маджуджа на крайнем востоке и пересекает ее, проходя в южном направлении до темного, черного моря, называемого Смолистым. Это очень высокая гора; никто не может подняться на нее из-за сильного холода и глубокого вечного снега на ее вершине. В долинах этих рек живет народ, известный под именем ан-нибарийа (яңылыш уҡылған *ан-барид* – мәңге һыуыҡ; йәғни *мәңге һыуыҡ яҡ халҡы*, башҡорттар. – Й.С.). У этого народа есть шесть укрепленных городов, расположенных между руслами этих рек, текущих, как мы уже сказали, с горы Кукайа. Никто не может покорить этих людей: у них принято не расставаться с оружием ни на миг, они чрезвычайно осторожны и осмотрительны». Башҡа сығанаҡтарҙа ла башҡорттарға бәйле ошондай уҡ сифаттар килтерелгән.

Боронғо башҡорт картаһы

Мәхмүд Ҡашғариҙың “Диуану лүғәт әт-түрк” (1072-1074 йылдарҙа яҙылған) әҫәренең ҡулъяҙма күсермәһенә теркәлгән боронғо географик карта был (хәҙерге Төркиәлә һаҡлана). Һәм ул 1076 йылда эшләнгән “әл-Ҡасдари доңъя картаһы” булараҡ та билдәле. Әммә әл-Ҡасдариҙың кем (булғанмы-булмағанмы) икәнлеге мәсьәлә булып ҡала, шул уҡ ваҡытта был картаның Мәхмүд Ҡашғари хеҙмәтенән дә

боронғораҡ икәнлеге мәғлүм, сөнки Мәхмүт Ҡашғариҙағы байтаҡ географик атамалар унда күренмәй. Хәҙерге заман ҡаҙаҡ, үзбәк, уйғыр, курд һәм хатта япон авторҙары ошо картаны яһаусыларҙы үҙ бабалары итеп раҫларға тырыша имеш, ләкин был мәғәнәһеҙ, сөнки ундағы мәғлүмәттәр беҙҙең боронғо ғәрәпсә менән сыбарланған төрки әҙәби телендә яҙылып, үҙәк һүрәтләү объекты итеп Урал тауҙары менән ҡуша киң майҙанлы тарихи Башҡортостан һәм уның тирә-яғы алынған, шулай уҡ һүрәтләү саралары ла заманының төп идеологияһына – донъя-ғаләм тураһындағы башҡорт мифологияһына туранан-тура нигеҙләнгән; шуға күрә был ҡомартҡыны ғәмәлдә башҡорт кешеһе эшләгәндер йәки эшләттергәндер тип тоҫмалларға һәм уны башҡорт халҡының мираҫы тип билдәләргә сәбәп бар: иң ҙур дәлилдәрҙең береһе – донъяның дүрт тарафының картала, европеоид картографтарҙыҡынан ҡырҡа айырмалы булараҡ, донъя-ғаләм ҡоролошона һәм уның яҡтарына тап башҡорт мифологияһына яраҡлаштырылып урынлаштырылыуы:

Һүр.1. Карта үҙе

Уңда – төньяҡ (боронғо башҡортса: **туң яҡ** йәғни һыуыҡ яҡ; һыуыҡлыҡты белдереүсе "туң" һүҙенән йүнәлеште билдәләүсе **"уң"** һүҙе яһалған, шуға күрә ер йөҙөн һүрәтләү дәүерендә карталағы төньяҡ уң яҡҡа ҡуйылған.

Һулда – көньяҡ (боронғо башҡортса: **һүл (һыу) яҡ** йәғни һыу-һүл туңмай торған йылы яҡ; "һүл" һүҙенән йүнәлеште белдереүсе **"һул"** һүҙе яһалған, шуға күрә карталағы һүл яҡ (көньяҡ) һул яҡҡа ҡуйылған.

Өҫтә -- көнсығыш: Көн-Ҡояш иртән өҫкә сыға (ҡалҡа) торған яҡ -- **өҫ яҡ** һаналған, шуға күрә карталағы көнсығыш өҫкә ҡуйылған.

Аҫта – көнбайыш: Көн-Ҡояш кисен аҫҡа төшә (байый) торған яҡ – **аҫ яҡ** һаналған, шуға күрә карталағы көнбайыш аҫҡа ҡуйылған.

Донъя тарафтары күрһәткесенең башҡорт телендәге икенсе төрө лә бар, уның терминдары аҙаҡ урыҫ теленә йәтешләнеп кергән:

Көнсығыш: Әбәс-атаҡ (баш-атай – мифик Ер-атаның Көн һәм Айҙы "тыуҙыра" йәки сығара торған енси ағзаһы, фаллос)<бәсатаҡ<**восток.**

Көнбайыш: Ә<u>сә-бат</u>аҡ (батаҡ – Һауа-әсәнең енси ағзаһы йәней)<(ә)<u>**сәбат**</u>(аҡ)<**запад.**

Картаның ошолай башҡортса йүнәлешләндерелеүен күптәр (Уралыбыҙҙа шытҡан тәүтел, тәүдин һәм тәүмифология белемдәренән мәхрүмдәр) аңлай алмай бутала, яңылышлыҡтар тыуҙыра. Әйткәндәй, был картаны тәүбашлап етди тикшереүсе Иван Иванович Умняковҡа ла (И. Умняков. Самая старая турецкая карта мира. – Труды Самаркандского гос. пединститута, I, вып. 1, Самарканд, 1940) хас ошо етешһеҙлек артабан башҡаларҙы -- ул авторға таянып эш итеүсе бер-нисә быуын авторҙарын да бутай һәм күптән был мәсьәләгә яңыса ҡараш талап итәлә.

Уны, ғәҙәттә, төркиҙәрҙең ***иң боронго*** географик картаһы, тип атап йөрөтәләр, ләкин һис кенә лә "иң боронғо" түгеллеген хайран ҡалдырткыс дәлилләүсе ғәзиз ҡомартҡыларыбыҙ – ҡая таштарға сыйылған һәм Ер шарының барлыҡ ҡитғалар географияһын бынан егерме биш мең (25000) йыл элегерәкке хәлендә шаҡ-ҡатырғыс



Һүр.2. Ер йөҙөнөң бынан 25000 йыл элек торошон Һүрәтләгән иң боронғо донъя географик атластарының береһе: 1. Австралия, 2. Алыҫ Көнсығыш, 3. Ғәрәп ярымутрауы, 4. Һинд субконтиненты, 5. Африка, 6. Пиреней (ул саҡта утрау), 7. Гренландия, 8. Төньяҡ Америка, 9. Көньяҡ Америка – Ҡыҙылҡомдағы Бүкәнтау ҡаяһында. – Этнография и археология Средней Азии, изд. “Наука”, М. – 1979, 141-енсе бит.

теүәллектә тасуирлаған донъя атластарыбыҙ ҙа бар (“Ватандаш” журналының 1997 йыл 2-3 һандарында: Зигат Султанов. Корни), ундағы донъя тарафтары ла хәҙерге беҙҙәр географик карталарҙа күреп өйрәнгәнсә түгел (һүр.2): мәҫәлән, хәҙерге беҙҙеңсә ҡарағанда, Австралия (1) – төньяҡ-көнбайышта, Алыҫ Көнсығыш (2) – көньяҡ-көнбайышта, Гренландия (7) – көньяҡта, Америка ҡитғалары (9) – көнсығышта урынлаштырылған, ә улар киреһенсә булырға тейеш ине...

Башҡорт-урыҫ (уртаҡ) календарындағы ете тәүлеклек аҙна көндәренең исемдәре лә баяғы картаның асылын тыуҙырышҡан рухиятҡа – башҡорт мифологияһындағы донъя-ғаләм ҡоролошо тураһындағы төп мифҡа тығыҙ бәйле. Күпселек уҡыусы уны белмәгәнен иҫәпкә алып, артабанғы фекер ағылышы аңлайышлы булһын өсөн, ҡыҫҡаса ғына биргәндә, бабаларҙың мифик тәғлимәтендә донъя-ғаләм ҡоролошо ошондай:



Һүр.3. Тәүмифологияла донъя-ғаләм ҡоролошо: Өҫкө Донъя һәм Әсә Балыҡлы өҫкө һыу; Урта Донъя (тәгәрмәсҡала Арҡайымлы); Аҫкы Донъя һәм Ата Балыҡлы аҫкы һыу. Һандар менән күрһәтелә: 1. Уралйәндең тыуыуы (воскресение), 2. Уралйәндең аҫкы һыу аша үтеүе (суббота), 3.Урпалйәндең өҫкө сүл (сүр) аша үтеүе (среда), 4. Уралйәндең Өҫкө Донъяға кереүе (понедельник), 5. Уралйәндең иң өҫкә өйөлөүе -- өйлә (полдень), 6. Уралйәндең Шүлгәнгә әүерелеүе һәм Аҫкы Донъяға батыуы – байыуы (вторник), 7. Шүлгәндең өҫкө сүл (сүр) аша үтеүе (среда), 8. Шүлгәндең аҫкы һыу аша үтеүе (четверг), 9. Шүлгәндең Аҫкы Донъяға кереүе – (пятница), 10. Шүлгәндең иң аҫка төшөүе – төш (полночь). Урыҫса көн (ай) атамалары

Иң элек иҫкәртәйек: бабаларҙың донъя-ғаләм-тереклек мифы буйынса, Үҫәргән (Эске Башҡорт) кешеләренең башбабаһы Шүлгәнде -- Әсә-Бүре/Бүре-Әсә ҡиәфәтенә кергән Көн-апа/Ҡәнифә (Ҡояш), ә Башҡорт (Тышҡы Башҡорт) кешеләренең башбабаһы Уралды Бизон (Боҙ-инә/Буҙан-һыйыр/Болан) ҡиәфәтенә кергән Ай/Айбикә имеҙеп үҫтергән; шуға күрә үҫәргәндәр – бүреләр, башҡорттар – боҙинәктәр (бәжәнәктәр/печенегтар) тип йөрөтөлгән. Үҫәргән ырыуында әлегәсә *бүреләр* араһы бар.

Өҫтә күрһәтелгән беренсе осор тәүмиф моделендә (1) Әр-ата (Ир-ата йәки Ер-ата -- фаллос) бәргән (йәки биргән) Әр-ал-ян (ир -- ал төҫтәге янғын-ут) йәки **Уралйән** мәңгелек орбита буйынса Өҫкө донъяға ҡалҡынып, унда яҡтылыҡ-ут сәсә

(Көн бурысын үтәй) ҙә Аҫҡы Донъяға батҡанында (6) Әс-ал-ҡанға (әсә -- ал төҫтәге ҡанға) әүерелеп йәғни (Ә)<u>**салҡан**</u><сүлҡан<**Шүлгән** булып Аҫҡы Донъяға төшә лә унда ҡараңғылыҡ-һыу һала. Тимәк, төп мифтың беренсе осор моделендә бер үк есем Өҫкө Донъяла (“ер өҫтөндә”) – Көн (Ҡояш), ә Аҫҡы Донъяла Ай булып йөрөй йәғни икегә төрләнә, тип һаналған.

Төп мифтың икенсе осор моделендә был әүерелмән есем Ай-Көн үҙаллы икегә бүленеп, кеше ҡиәфәтле Уралға һәм Шүлгәнгә әүерелә (Өҫкө Донъяла – Урал, Аҫҡы Донъяла Шүлгән булып һынлана). “Урал батыр” эпосында улар, игеҙәктәр, кеше ҡиәфәтле Йәнбирҙе-атаның һәм Йәнбаға (йәки Йәнбикә)-әсәнең кеше ҡиәфәтле яртылаш үлемесле (йәғни бәндәүи кәүҙәһе үлемесле, илаһи башы үлемһеҙ) игеҙәктәре **Урал** (ир-ат енесле) һәм **Шүлгән** (ҡатын-ҡыҙ енесле) рәүешендә һынлана ла икеһе бер йүнәлештә (Көн һәм Ай юлынан) аллы-артлы тағылышып Ер шарын мәңге “әйләнеп йөрөй”. Йәғни уларҙың бәндәүи кәүҙәһе ер йөҙөндә кеше ҡиәфәтендә, илаһи башы күк йөҙөндә Көн (Ҡояш) ҡиәфәтендә хәрәкәтләнгән. Көнө еткәс улар икеһе лә яртылаш үлеп, **Шүлгәндең** үлемесле кәүҙәһе – **Шүлгән-тауға** (хәҙерге Силәбе өлкәһендә), ә үлемесһеҙ башы утлы **Көнгә** (Ҡояшҡа) әүерелә; **Уралдың** үлемесле кәүҙәһе – **Урал-тауға**, ә үлемесһеҙ башы “һыулы-боҙло” **Айға** әйләнә. Был башбабаларҙың өҫтәрәк күрһәтелгән **Әсәл-ҡан (Әсәл-хан)** һәм **Урал-жан (Урал-ян)** тигән тәүисемдәренә килгәндә, ундай исемдәр ҡушыу йолаһы әҙәмдәргә лә күскән: урта быуаттарҙа Уралдан Шәйбәни-хан ғәскәрҙәрендә Урта Азияға киткән башҡорт **аҫаба-үзбәктәр** (асабаҡ>азабаҡ>**үзбәк** – Урта Азия аҫабалары) әлегәсә мотлаҡ рәүештә ҡатын-ҡыҙ исемдәренә -- *хан*, ир-аттыҡына – *жан* ҡушымталарын теркәй (Мәйсәрәхан, Ғарипжан); Урал аҫабаларында ла был йола берталай һаҡлана (Ғарифйән, Ғәйшә-ханым).

Донъя-ғаләм моделе, өҫтәге һүрәттән күреүебеҙсә, өс ҡатламдан ғибәрәт, имеш:

1. Өҫкө Донъя (Күк көмбәҙе -- Әсә-һауа) йәғни Әсә-аба (Аҫаба)<сәба<**һауа** – хоҙайҙарҙың Асманға ашҡан изге йәндәре (ғаләмдәр, йондоҙҙар, планеталар рәүешендә) йәшәй торған урын һәм Урта Донъялағы бәндәләрҙең мәйеттәре яндырылып көлө Күккә осоролғас йәндәре унда ҡабат тәнләнеп, ҡара күмер төҫөндәге кеше ҡиәфәтенә кереп кәүҙәләнгән өҫкө ер йөҙө -- **Африка** ҡитғаһы. Илаһиҙарға килгәндә, Күк һүлендә (Һинд океанында) йәшәй, имеш, ер йөҙөн үҙ арҡаһында тотоп торған Өҫкө Донъя Тотаны (титаны) **Әсә Балыҡ**; Күктән аҫҡа батҡан (байыған) Көн менән Ай шуның тән-үҙәге аша Ер Кендеге Арҡайымға уҙа, тип һанағандар. Көн һәм Ай есемдәре Өс Донъяны аша үтеп тулы әйләнешенең ваҡыт бәрәмеге Өҫкө Донъяла Ә<u>**сә-үтәк**</u>ә<сүтәкә<**сутка** исемләнә.

2. Урта Донъя (Евразия ҡитғаһы) – Ер Кендеге Арҡайым һәм Ер Терәге Тора-тау, Ер имсәге Ҡуш-тау һәм ике имсәк башы Шәке-тау менән Йөрәк-тау урынлашҡан, бәндәләр тыуып-үлгәнсе йәшәй торған урын, имеш.

3. Аҫҡы Донъя (Ер-ата) йәғни Әрә-ата (арата, әр-ат – ир-ат)<Ир-ата<<u>**Ер**</u> йәғни беҙҙең Урта Донъялағы бәндәләрҙең мәйеттәре ергә күмелгәс (ерләнгәс) аҫҡа төшөп киткән йәндәре унда ҡабат тәнләнеп, ҡыҙыл ҡан (бронза) төҫөндәге кеше ҡиәфәтенә кереп кәүҙәләнгән “аҫҡы ер” – **Америка** ҡитғаһы. Ер һыуында (Төньяҡ Боҙло океанда) йәшәй, имеш, ер йөҙөн үҙ арҡаһында тотоп торған Аҫҡы Донъя Тотаны (титаны) **Ата Балыҡ**; Ерҙән ҡалҡҡан һәм Әсә-һауаны буйлап үткән **Көн** менән **Ай**

шуның аша Ер Кендеге Арҡайымға уҙа, ти. Көн һәм Айҙың Өс Донъяны аша үтеп тулы әйләнешенең ваҡыт бирәмеге аҫта (Аҫкы Донъяла) А**та-балыҡ**<тауалыҡ<**тәүлек** атала. Тап ошо мифҡа бәйле боронғо географтар ер йөҙөн ике кит балығы арҡаһына ҡуйып һүрәтләгән. Шуға бәйле башҡорт халыҡ мәҡәле бар: “Игелек ҡыл да һыуға һал – халыҡ белер, халыҡ белмәһә -- Балыҡ белер” (Балыҡ-хоҙайҙарға ишара).

Һүрәттә (3) Өҫкө Донъялағы Донъя Ҡуласаһы **Асаба-Астаҡ (Свастика)** ундағы Көн һәм Айҙың, төньяҡ географик киңлектән (экватор һыҙығының төньяғынан) тороп ҡарағанда, сәғәт уктары йүнәлешендә әйләнешен, ә Аҫкы Донъялағы Свастика, киреһенсә, уның, көньяҡ географик киңлектән тороп ҡарағанда, сәғәт уктары хәрәкәтенә ҡаршы йүнәлештә әйләнешен күрһәтә.

Донъя-ғаләм моделенән (3-өнсө һүрәттән) күренеүенсә, тәүге берәгәй (Көн һәм Ай икеһе бер һаналған) есем Уралйән-Шүлгәндең орбитала бөтә өс донъя арҡылы тулы әйләнеше ун (10) өлөшкә бүленгән, шуға күрә Урта Донъялағы (Евразия ҡитғаһындағы) бабаларыбыҙҙың 10 (ун) айлыҡ йыл һәм 10 (ун) тәүлеклек аҙна календарҙары булған, ә аҙаҡҡа табан шул унауҙың ете (7) өлөшөн һайлап алып, ете тәүлеклек аҙна календары яһалған (“Үҫәргән-үҫен календары” тигән хеҙмәтемдә ентеклерәк бирелә).

Ете тәүлеклек аҙна календарындағы көндәрҙең исемдәре лә тәүҙә башҡорт теле нигеҙендә яһалып, Көн менән Ай әйләнешендәге уларҙың тәғәйен ваҡыттағы тәғәйен урындарына бәйле атап бирелгән, булып сыға (һүрәттәге һандар буйынса барлағыҙ):

1. Баскәр-әсәнөйө (Көн менән Ай “баскәр”ҙән йәғни “баш-ир”ҙән -- фаллостан ҡалҡынып, “әсәнөйө”нә йәғни Әсә-һауаның ауыҙына табан йүнәлә)<баскәрәсәнөйө<**воскресение.**

2. Суб-үтә (һыу үтә йәғни Көн менән Ай аҫтағы һыуҙан Балыҡ ауыҙы аша үтә)<субүтә<**суббота.**

3. Сүр-үтә (өҫкө сүр/һыу аша үтә)>сүрүтә>**среда.**

4. Абан-аталанаҡ (Апа-ана йәғни Әсә-һауа аталана – Аҫкы Донъя Ер-атаның аталығынан ҡалҡҡан Көн менән Ай Өҫкө Донъя Әсә-һауаның ауыҙына барып/бәреп керә)<(А)**банаталанаҡ**<**понедельник.**

5. Көн менән **Ай** иң өҫкә өйөлә -- **өйлә** ваҡыты (**полдень**).

6. Батыр-анаҡ (Өҫкө Донъя-анаҡтан Көн менән Ай бата йәғни байый)<батыранаҡ<**вторник.**

7. Сүр (Сүл)-үтә (батҡан Көн менән Ай өҫкө һүл-һыуҙан ундағы Балыҡ ауыҙы аша үтә)<сүрүтә<**среда.**

8. Су-үт-бараҡ (Көн менән Ай аҫтағы һыуҙы үтеп Ер-атаның ауыҙына табан бара)<суүтбараҡ<**четверг.**

9. Буй-үтәнсә (Көн менән Ай Ер-атаның ауыҙынан уның буйына үтә)<буйүтәнсә<**пятница.**

10. Көн менән **Ай** иң аҫҡа төшә -- **төш** ваҡыты (**полночь**).

Күренеүенсә, боронғо аҙналыҡ календарҙа воскресение (йәкшәмбе) – беренсе, ә суббота (шәмбе) икенсе көн булып иҫәпләнгән. Был календар иң тәүгеләрҙең береһе һәм теүәлерәге тип ҡаралырға хаҡлы. Бабалар һуңынан үҫемлек үҫтереү (игенселек) менән шөғөлләнә башлағас, ошо уҡ 10 бүлеккә нигеҙләнгән 10 айлыҡ

йыл һәм 10-дың 7-һенә нигеҙләнгән 7 тәүлеклек аҙна менән билдәләнгән, исемдәре лә игенселеккә бәйле Үҫәргән-Үҫен календары ла барлыҡҡа килә.

Схемалағы (1) фаллос атамаһы “баскәр”гә йәғни “баш-ир”гә иғтибар итегеҙ: ир-ат кәүҙәһендәге ике “баш”тың иң мөһиме һаналмыш был ағзаның (фаллостың) аталышы этностыҡына тап килә – баскәр/башкир/башҡорт (шуға табыныусы һәм ишаратын муйынға тағып йөрөүсе башҡортто 922 йылда ғәрәп сәйәхәтсеһе Ибн Фаҙлан күргән)...

Инде карта (еңел аңлайышлы булһын өсөн мин уны, хәҙергесә итеп, 45 градус һулға әйләндереп ҡуйҙым) эстәлегенә күсәйек.



Һүр.4, минең тарафтан номерланған боронғо башҡорт картаһы

Тарихи башҡорт ерҙәре һәм сал-боронғо, үҙебеҙгә ныҡ ҡағылышлы мәркәзебеҙ Өфө ҡалаһы ла (№32, карталағы исеме ҡороҡло "ж" хәрефе менән "Жржн") күрһәтелгән был ҡиммәтле ҡомартҡылағы бер килке объекттарҙы мин ғәрәп цифрҙары менән нумерлап-аңлатып сыҡтым, бына шуларҙың теҙмәһе:

1. Иҙел йылғаһы (картала исемһеҙ).
2. Жәйхун ("Жихун" – Жаиҡ-ын) – Яйыҡ (Урал) йылғаһы.
3. Рәмил -- Ирәмәл (Урал тауҙарының бер буйы).
4. Рәмил -- Ирәмәл (Урал тауҙарының икенсе буйы).
5. Бесермән – хәҙерге Саратов.
6. Көбстан – Бүрестан (хәҙерге Башҡортостан). Боронғо телебеҙҙә **көб** (йөнтәҫ көплө-тиреле тигән мәғәнәлә; ғәрәпсә лә "ғаба" – йөнтәҫ, йөнтәҫ көп тигән һүҙ) – **бүре**, көбәк – **ата бүре**, көбәсәк – **әсә (инә) бүре**; карталағы **Көбстан** (бүре ыҫтаны, иле тигән һүҙ) – йәмғеһе бер бөтөн тәшкил итеүсе, үҙҙәрен **әсә бүре** һәм **ата бүре** тоҡомдары (үҫәргән-төркиҙәр) итеп һанаусы бер туған ике ырыуҙың дәүләте. Әлегәсә телебеҙҙә ***өй көбәге*** (өй бүреһе – ҡулға эйәләштерелгән бүре йәғни эт мәғәнәһендә) тигән әйтем бар, бәйләнгән эттәй өйҙән сыҡмай ултырған ирҙе шулай тиҙәр. Әле әйтелгән Көбстандың (бүре-эткә табыныусы үҫәргәндәр иленең) кешеләрен дә борон сит тарафтар ***көбәк*** (бүре) тип атаған, шуның "б" өнө "м"-ға үҙгәреп, ***көмәк/кимак*** (шул уҡ үҫәргән) этнонимы һәм ***күмәк*** (множество) һүҙе барлыҡҡа килгән. "Бүре" һүҙенең килеп сығышы ла тап ошо "көб"кә бәйле: көб-әрә (бында "әрә" – ир тигән һүҙ)>(көө)-бәрә>***бүре*** (йәғни ир – ата бүре, ә мифик асылы буйынса ергә төшкән Ай). Ә әсә бүре (волчица) төшөнсәһендәге һүҙҙән килә: көб-әсә>(көө)-бәсә>баса ("босой волк")>***бисә/босой/бесәй*** (мифик асылы буйынса ергә төшкән Көн/Ҡояш). Һәм Көн-әсә (Ҡояш) һүҙе лә бер үк -- өндәр сиратлашыуынан (б-м-н) хасил: көб-әсә>көм-әсә>Көн-әсә (Ҡояш).

Мифология буйынса, был ырыу тармаҡтарының исем-аталышы ошолай хасил:

а) Көб-әс-әр-әк (бүре-әсә-ир-аға) – Көб-**<u>әсәрәк</u>** (сәрәк, сиреү); шунан килә боронғо сығанаҡтарҙағы әс (ас), сәр (царь), сир, сер (сэр), серк этнонимдары. Һәм "әсәрәк"кә -ән сығанаҡ килеш ялғауы теркәлеп, -- әсәрәк+ән= **Үҫәргән**. Ябайлаштырып әйткәндә, "Үҫәргән" этнонимының нигеҙендә "Әсә-Бүре-Көн" термины ята. Телдә оҙаҡ әүмәләнә торғас, ул ***Әс-Әр-Көн*** (Һыу-Ер-Ҡояш) булып "шымарған", ләкин әүәлге мәғәнәһендә ҡала, сөнки, башҡорт мифологияһы буйынса, күктәге Көн аҫка төшөп һыу-ер (әс-әр) буйлап йөрөгәненда бүре ҡиәфәтен алып, шул уҡ "әс-әрә" (һыу-ер)>сәрә (серый волк)>соро (һоро-бүре)>зорро (америка индейҙары телендәге бүре) исемендә йөрөгән. Ошо "әсәрәк"те ҡыҫҡартып әйтеп, әрәк (әрәй/арий) тип тә йөрөткәндәр һәм "әрәк"тән "ирек" – иректе кешеләр (арийҙар) төшөнсәһе формалашҡан. Был тармаҡтың ораны "Асаба" (әсә-апа "әсә-бүре") һәм ошо төшөнсәнән килә үҫәргән ер хужаларың ләҡәбе **"аҫаба"** – Күктәге Көн менән Айҙы белдереүсе Ҡояш-Көн мәғәнәһендәге термин ул (шунан хасил ырыу тамғаһы Ҡойошҡан), ә уның (Көндөң) ер йөҙөндә тере кәүҙәләнеше *Әсә-Бүре* булған (Көнгә табыныусы **Үҫәргән** ырыуының изге тотемы); ә Үҫәргән менән бер туған **Башҡорт** яғының табыныу объекты Ай иһә ер йөҙөндә тере Боҙ-инә йәғни бизон-һыйыр, шулай уҡ *Болан-инә* рәүешле кәүҙәләнгән**;**

б) Көб-әт-әр-әк (бүре-ата-ир-аға)<(көб)**<u>әтәрәк</u>**<**төрөк**; шулай уҡ был кешеләр ҙә *әрәкле* – ирекле *ир-арийҙар* булған. Орандары “Атаҡа” (ата-аға – атай-Ай мәғәнәһендә).

Ошо икәүҙән бер бөтөн тәшкил итеүсе һәм киләсәктә бөтәһе бергә **башҡорт** тип аталасаҡ күп ырыулы бөйөк ҡәбиләнең исем-аталыштарын бергә теркәп, **төрк-сир-бөтөн** тип тә төркөмләп йөрөткәндәр (Орхон – Селенга таш ядкәрҙәрендә ырып яҙылған); дөйөм орандары ла *аталыкты* һәм *әсәлекте* белдереүсе ике оранды бергә теркәүҙән хасил: Атаҡа+Асаба= (А)**<u>таҡасаба</u>** – **Туҡсаба** (хәҙерге үҫәргәндәрҙең бер килкеһе, ҡасандыр айырымланған ырыуҙарҙың, **Ҡыпсаҡ** менән **Үҫәргәндең**, ошо көндә лә бер үк оран йөрөтөүенән сәйерһенеп, буғай, тарихи хаҡиҡәтте боҙоп, “ораныбыҙ – Муйтән” тип яңылышалар). Ҡыпсаҡ ырыуының ғәмәлдә шулай уҡ боронғо **сир** -- үҫәргәндәр икәнлеген, шуға күрә орандары ла бер үк (Атаҡа-Асаба – Туҡсаба) икәнлеген баҫымлыҡлап, Ҡыпсаҡ ырыуының Үҫәргәндән айырымланыу сәбәбен һәм дәүерен түбәндәрәк бирербеҙ. Бөйөк Төрки ҡағанат дәүләттәре ошо “түрк-сир-будун”дар (башҡорттар) тарафынан төҙөлгән, донъяға билдәле Орхон – Селенга таш ядкәрҙәрендәге ырын-яҙыуҙар тап шулар хаҡында һөйләй (был хаҡта айырым хеҙмәтем бар). Ә инде картаға ҡайтһаҡ, нәүбәтендә түбәндәге матдәләр дауамлана:

7. Тараз.
8. Шәһәр.
9. Нәзлә -- ғәрәпсә һыуыҡ ер.
10. Жанбаҡ.
11. Бишбалыҡ.
12. Мәсин -- Ҡытай.
13. Жабға -- Япония.
14. Фаику урман йаҡур Алманиһә -- өҫтөнлөксә (башлыса) урман яғыусы (урман яндырып иген баҫыуҙары әҙерләүсе?) Алмания (Германия).
15. Ҡашмир.
16. Жәбин Ҡыбчаҡ – ҡурҡаҡ ҡыпсаҡ.
17. Мискин Ҡыфчаҡ -- меҫкен (ярҙамсыһыҙ, бисара, ярлы) ҡыпсаҡ.
18. Мискин Ҡыфчаҡ – шундай уҡ.

Картанан күренеүенсә, ул замандың ҡыпсаҡ төркөмдәре Иҙел һәм Дон аралығындағы далала (Ҡубан йылғаһы буйындараҡ, урыҫ иле менән сиктәш) өс төркөмгә бүленеп йәшәгән һәм урыҫтар ҙа уларҙы **половец>бала-буҙ** йәғни “буҙ-бүре”ләр тип исемләгән. Әгәр тикшереп ҡараһаҡ, ысынлап та: “бала<балаҡ<**волк” – бүре; буҙ** – көлһыу-күгелйем төҫ (бүре төҫө). Көнбайыш Европа халыҡтарына ла был ҡәүем шулай уҡ **куманы>кубаны** – “көплөләр” йәғни “бүреләр” рәүешле билдәле: ҡоман>көбән, бында “көб” – бүре, -ан – сығанаҡ килеш ялғауы. “Бүреләр”ҙең (үҫәргән һәм уларҙан айырымланған ҡыпсаҡтарҙың) төп сығышы ҡайҙан икәнлеге картанан асыҡлана: **Көбстан** (Бүрестан, хәҙерге Башҡортостан, №6) һәм шундағы **Ҡубан<Көбән** (Бүреләр) ҡалаһы, №31; ошо ерҙән уларҙың бер өлөшө (үҫәргән-нуғайҙар) Көбән (Кубань) йылғаһы буйына күсенгән, элегерәк тарихи сәбәптәр арҡаһында ҡыпсаҡтарҙың өс төркөмө лә шунда килгән. Каспий диңгеҙенең көньяғындағы “руси сәхәбә” лә (№19) хәҙерге мәғәнәһендәге урыҫтар түгел, ә уларҙың башҡорт-төрки бабалары үҫәргәндәр (“Донъяларҙың төп-үҙәге ҡайҙа?”

тигән хеҙмәтемдә ентеклерәк күрһәтелде – интернеттың "башкирский портал"ында). Ә боҙ-һыйыр Бизонға, Боланға табыныусы бәжәнәк-башҡорттар (ҡариаҡу Башҡорт, №28) ул осорҙа үҫәргән-бүреләрҙән айырым – урыҫтарға яҡын сиктәш Дон һәм Днепр аралында йәшәгән; урыҫ йылъяҙмаларынан билдәле "Башҡорт-хан" да, моғайын, "Башҡорт иленең ханы" мәғәнәһендә әйтелгән, ә хандың үҙенең исеме билдәле түгел (бәлки, Ҡоншаҡ<Кончактыр?). Күңелгә яғышһыҙ "ҡурҡаҡ ҡыпсаҡ", "меҫкен ҡыпсаҡ" ҡушаматтары иһә "ҡыпсаҡ" этнонимының тарихи тамырына -- килеп сығышына бәйле. Ағас көпсәгенә юрап аңлатҡан халыҡ этимологияһын ситтә ҡалдырып, ғалимдарға – тарихҡа мөрәжәғәт ҡылайыҡ.

Көнбайыш Төрки ҡағанатта (империяла) хакимлыҡ иткән баяғы Көб-әсә (Бүре-әсә) тармағы сирҙарҙың (үсәргәндәрҙең) бер төркөмө 646 йылда уларҙың шул үҙәк хакимиятына ҡаршы баш күтәргән **басмыл – ҡарлыҡ – уйғыр** берләшмәһе тарафынан вәхшиҙәрсә бик ҡаты ҡыйратылып, ҡулға төшкән яугир-ирҙәре Мысыр ғәрәптәренә ҡоллоҡҡа һатылып, ҡасып-боҫоп иҫән ҡалғандарының бер килкеһе, ифрат ҡурҡаҡланып та меҫкенләнеп, тиҙәр, Көбстандың (хәҙерге Башҡортостандың) көнсығыш сигенә -- Ҡыртыш (Иртыш) йылғаһы буйына ҡаса һәм, дошмандарға ҡаршы ҡулына ҡорал тотоп һуғышырҙай ғәйәр ирҙәр булыуҙан тамам төңөлөп, үҙҙәренең "үҫ**әр**гән" этнонимындағы ғорур **әр** (ир, арий) элементынан ваз кисеп (баш тартып), "сир"һыҙ (яугирһеҙ) ябай "көбәсәк" – әсә-бүре (ҡатын-ҡыҙ) хәленә ҡалырға мәжбүр була; ә ирлегеңдән (арийлығыңдан) баш тартыу ул заманала ҡурҡаҡлыҡтың, меҫкенлектең эталоны һаналғанлыҡтан, үҫәргән-сирҙарҙың шул төркөмдәренә яугир-ирһеҙ "көпсәк"лек (ҡыпсаҡлыҡ) йәғни "бүре-әсәк"лек ләҡәбе йәбештерелә. Шул йәһәттән ҡаҙаҡ тарихсыһы Рөстәм Абдуманаповтың яҙыуынса, күренекле төркиәтсе С.Г. Кляшторныйҙың фекере бик фәһемле: "Кыпчак – прозвище-оберег с уничижительным значением "злочастный, неудачный, злополучный". Это значение слова возникло, по мнению ученого, как подмена этнонима **"сир"** в ритуальной практике после падения сирского каганата в 646 году". Тар-мар ҡылынған бик күп "сир"ҙарҙы, ә тулы әйтелештә "әс-ир"ҙәрҙе (үҫәргән-ирҙәрҙе) Мысыр ғәрәптәренә ҡоллоҡҡа (мәмлүклеккә) һаталар, шул "әс-ир"ҙән **әсир** (пленный) төшөнсәһе барлыҡҡа килә, -- Византияға ҡоллоҡҡа һатылғандарҙың "slave" (славян) этнонимы шулай уҡ "ҡол" төшөнсәһендә инглиз теленә кергәндәй... Берыңғай иҫкәртәйек: мәсьәләне насар белгән, йәки фәндә өҫтөнлөк итеүсе төрки түгел телселәрҙең яңылыш билдәләүе һөҙөмтәһендә "ҡыпсаҡ телдәр" тип төркөмләнгән телдәребеҙ ҙә "үҫәргән телдәр" тип йөрөтөлөргә хаҡлы, сөнки улар нигеҙҙә үҫәргән тел ҡанундарынан тәшкил. Әйткәндәй, XI быуат фарсы авторы Насир Хосров яҙыуынан башланған һәм таралған "дәшт и-ҡыпчаҡ" ("ҡыпсаҡ далаһы") атамаһына көсәнеп **дәүләт** төшөнсәһе биреү ҙә (мәҫәлән, ҡумыҡ Мурад Аджи кеүектәр) дөрөҫ түгел, сөнки тарихта ҡыпсаҡ дәүләте булмаған, ә улар йәшәгән даланы ғына әлеге Насир Хосров шулай атап ебәргән. Шул хатаның киң таралыуы арҡаһында Сыңғыҙ-хан яулауҙарына дусар булған һуңғы осор Евразия ҡитғаһындағы һәм Мысырҙағы *бөтә төркиҙәрҙе лә* бер ҡалыптан "ҡыпсаҡ" тип йөрөткәндәр һәм әлегәсә был төҙәтелмәй; мәҫәлән, Мысыр мәмлүктәренең иң атаҡлыларынан булған Насретдин әл-Насири әл-Башҡурди, Сәнжәр әл-Руҡны әл-Башҡурди, Алаитдин Башҡурд әл-Насири, Ғилметдин әл-Башҡурди, Сарын әл-дин әл-Башҡурди, Ҡыратай Хазинадар Ғилметдин әл-Башҡурди, Ғилметдин Сәнжәр әл-

Башҡурди, Ғилметдин Башҡурд әл-Насири (Әхмәтзәки Вәлиди Туған. Башҡорттарҙың тарихы. Өфө, "Китап" – 1994, 22-23-өнсө биттәр) һәм Иҙел менән Яйыҡ араһында (Башҡортостанда!) тыуып-үҫеп ун дүрт йәшендә ғәрәптәргә ҡоллоҡҡа һатылған, ә аҙаҡ Мысырҙың бөйөк хакимдарына әүерелгән Бейбарс әл-Бөржәни кеүектәр әлегәсә тарихи әҙәбиәттә әнә шул яһалма "бөйөк ҡыпсаҡтар" ләҡәбенән арынмай...

Икенсе осор тыуа: Сыңғыҙ-хан яулауҙары барышында ҡыпсаҡлыҡ ҡалыбы онотолоп, бөтә төркиҙәргә "татар" ләҡәбе тағыла һәм заманында карталарҙа Евразия ҡитғаһы, тулыһынса, тип әйтерлек, "Тартария" тип тамғалана (хәҙер быны Ҡазан пантатаристары кинәнеп файҙалана). Сәбәбе: әлеге карталағы Иҙел – Дон аралында ҡыпсаҡтарға күрше "татар йорто" (№27) булған; Сыңғыҙ-хан шул татар һуғышсыларын (үҙенең атаһын үлтергән ҡан-дошмандарын), күберәк ҡырылһындар өсөндөр инде, көнбайыш фронтта һуғыштың алғы сафына ҡуйып файҙалана, шуға күрә иң элек шуларҙан зыян күргән европалы халыҡтар бөйөк хандың бөтә илен яңылыш рәүештә **татарҙар** тип исемләй...

19. Руси сәхабә -- урыҫ-йомарт (боронғо Үҫәргән ҡәбиләһенең ир-әс – ир-әсә яҡ тармағы).

20. Бәжәнәк – йәки печенег, ә асылы боронғо төп башҡорт; Кейәү>Киев ҡалаһын нигеҙләүселәр.

21. Дербенд Хазаран – Хазар дәүләтенең ҡалаһы Дербент.

22. Мжал-Баскун – көслө баҫҡынсылар.

23. Хуаризм – Хорезм.

24. Табаристан арғи – арғы Табаристан.

25. Алдым ҡала – урыҫтарҙың Владимир ҡалаһы.

26. Саҡалба – саҡ-албан (хәҙерге Алания – Осетия), элекке төрки-славяндар.

27. Ҡариаҡу Татар – Татар йорто.

28. Ҡариаҡу Башҡорт – Башҡорт (Бәжәнәк) йорто, Дон һәм Днепр аралында.

29. Барсмәнд – Бүре-әсә (барс) ҡорамы йәғни Бүре-әсәгә табыныусы **барсилдар** (бүре-әсә иле – үҫәргәндәр) ҡалаһы; ул тарихи Башҡортостандың мәркәз ҡалаһы "Журжан" – Үҫәргән (хәҙерге Өфө №32) менән йәнәшә тора. VI быуатта барсилдар Ҡафҡазға барып урынлаша һәм Бүре-әсә-иле<**Берсилия** тигән дәүләт ҡороп йәшәй, шуға мәңгелек һәйкәл булып унда Эльбрус һәм Эльбурс (Ил-бүре-әсә) тауҙары тора.

30. Аж – Ижау>Ижевск ҡалаһы.

31. "Хҙн" -- Ҡыҙан – Ҡыҙ-ҡала. Ағиҙелгә Өфө ҡойған саталыҡта – Ағиҙелдең уң ярында (Иглин районының Аҡбирҙе аулынан 2,5 км көньяҡ-көнсығыштараҡ), Өфөнөң һул яғында урынлашҡан боронғо ҡалабыҙ, хәҙер уның емеректәрен урындағы кешеләр Ҡыҙ-ҡала-тау тип йөрөтә (Археологическая карта Башкирии, М., 1976, 140-сы бит, №1184).

32. Ҡойроҡло "ж" менән яҙылыштағы "Жржн" – Жәр-жән – Сәр-йән, йәғни Үҫәргән (Үҫәргән ҡәбиләһенең исемен,ҡыҫҡартып, Әсәр, Сәр тип тә йөрөткәндәр, ғәрәп яҙыуында, баяғыса, "жәр" тип алынған), был иһә хәҙерге Өфө ҡалаһы, Өфө йылғаһының һәм Ағиҙелдең уң ярындағы сатала.

33. Ҡушан.

34. Варнак – Бүре-анаҡ<**Варяг**, Балтик диңгеҙе буйындағы **үҫәргән-бөрйән, өпәй** башҡорттары нигеҙләгән һәм йәшәгән Бүре-әсә-өйө>**Пруссия** дәүләте (хәҙерге Рәсәй Федерацияһының Калининград өлкәһе).

35. Болғар – Каспий диңгеҙенең көньяҡ-көнбайышындағы **тәүге Болғар** ҡалаһы (Иҙел буйы Болғарға тиклемгеһе).

36. Суар – Каспий диңгеҙенең көньяҡ-көнбайышындағы **тәүге Сувар** ҡалаһы (Иҙел буйы Суварға тиклемгеһе).

Инде Мәхмүт Ҡашғари китабына йәбештерелгән баяғы карта (еңел аңлайышлы булһын өсөн мин уны, хәҙергесә итеп, 45 градус һулға әйләндереп ҡуйҙым) эстәлегенә күсәйек.

Тарихи башҡорт ерҙәре һәм сал-боронғо, үҙебеҙгә нығ ҡағылышлы мәркәзебеҙ Өфө ҡалаһы ла (№32, карталағы исеме ҡойроҡло “ж” хәрефе менән “Жржн”) күрһәтелгән был ҡиммәтле ҡомартҡылағы бер килке объекттарҙы мин ғәрәп цифрҙары менән нумерлап-аңлатып сыҡтым, бына шуларҙың теҙмәһе:

37. Иҙел йылғаһы (картала исемһеҙ).

38. Жәйхун (“Жихун” – Жаиҡ-ын) – Яйыҡ (Урал) йылғаһы.

39. Рәмил -- Ирәмәл (Урал тауҙарының бер буйы – көньяҡтағы Ирәндек).

40. Рәмил -- Ирәмәл (Урал тауҙарының икенсе буйы – төньяҡтағы Ирәндек).

41. Бесермән – хәҙерге Саратов.

Көбстан – Бүрестан (хәҙерге Башҡортостан). Боронғо телебеҙҙә **көб** (йөнтәҫ көплө-тиреле тигән мәғәнәлә; ғәрәпсә лә “ғаба” – йөнтәҫ, йөнтәҫ көп тигән һүҙ) – **бүре**, көбәк – **ата бүре**, көбәсәк – **әсә (инә) бүре**; карталағы **Көбстан** (бүре ыҫтаны, иле тигән һүҙ) – йәмғеһе бер бөтөн тәшкил итеүсе, үҙҙәрен **әсә бүре** һәм **ата бүре** тоҡомдары (үҫәргән-төркиҙәр) итеп һанаусы бер туған ике ырыуҙың дәүләте. Әлегәсә телебеҙҙә ***өй көбәге*** (өй бүреһе – ҡулға эйәләштерелгән бүре йәғни эт мәғәнәһендә) тигән әйтем бар, бәйләнгән эттәй өйҙән сыҡмай ултырған ирҙе шулай тиҙәр. Әле әйтелгән Көбстандың (бүре-эткә табыныусы үҫәргәндәр иленең) кешеләрен дә борон сит тарафтар ***көбәк*** (бүре) тип атаған, шуның “б” өнө “м”-ға үҙгәреп, ***көмәк/кимак*** (шул уҡ үҫәргән) этнонимы һәм ***күмәк*** (множество) һүҙе барлыҡҡа килгән. “Бүре” һүҙенең килеп сығышы ла тап ошо “көб”кә бәйле: көб-әрә (бында “әрә” – ир тигән һүҙ)>(кө)-бәрә>***бүре*** (йәғни ир – ата бүре, ә мифик асылы буйынса ергә төшкән Ай). Ә әсә бүре (волчица) төшөнсәһендәге һүҙҙән килә: көб-әсә>(кө)-бәсә>баса (“босой волк”)>***бисә/босой/бесәй*** (мифик асылы буйынса ергә төшкән Көн/Ҡояш). Һәм Көн-әсә (Ҡояш) һүҙе лә бер үк -- өндәр сиратлашыуынан (б-м-н) хасил: көб-әсә>көм-әсә>Көн-әсә (Ҡояш).

Мифология буйынса, был ырыу тармаҡтарының исем-аталышы ошолай хасил:

а) Көб-әс-әр-әк (бүре-әсә-ир-аға) – Көб-**<u>әсәрәк</u>** (сәрәк, сиреү); шунан килә боронғо сығанаҡтарҙағы әс (ас), сәр (царь), сир, сер (сэр), серк этнонимдары. Һәм “әсәрәк”кә -ән сығанаҡ килеш ялғауы теркәлеп, -- әсәрәк+ән= **Үҫәргән**. Ябайлаштырып әйткәндә, “Үҫәргән” этнонимының нигеҙендә “Әсә-Бүре-Көн” термины ята. Телдә оҙаҡ әүмәләнә торғас, ул ***Әс-Әр-Көн*** (Һыу-Ер-Ҡояш) булып “шымарған”, ләкин әүәлге мәғәнәһендә ҡала, сөнки, башҡорт мифологияһы буйынса, күктәге Көн аҫҡа төшөп һыу-ер (әс-әр) буйлап йөрөгәнендә бүре ҡиәфәтен алып, шул уҡ “әс-әрә” (һыу-ер)>сәрә (серый волк)>соро (һоро-бүре)>зорро (америка

индейҙары телендәге бүре) исемендә йөрөгән. Ошо “әсәрәк”те ҡыҫҡартып әйтеп, әрәк (әрәй/арий) тип тә йөрөткәндәр һәм “әрәк”тән “ирек” – ирекле кешеләр (арийҙар) төшөнсәһе формалашҡан. Был тармаҡтың ораны “Асаба” (әсә-апа “әсә-бүре”) һәм ошо төшөнсәнән килә үҫәргән ер хужаларың ләҡәбе **“аҫаба”** – Күктәге Көн менән Айҙы белдереүсе Ҡояш-Көн мәғәнәһендәге термин ул (шунан хасил ырыу тамғаһы Ҡойошҡан), ә уның (Көндөң) ер йөҙөндә тере кәүҙәләнеше *Әсә-Бүре* булған (Көнгә табыныусы **Үҫәргән** ырыуының изге тотемы); ә Үҫәргән менән бер туған **Башҡорт** яғының табыныу объекты Ай иһә ер йөҙөндә тере Боҙ-инә йәғни бизон-һыйыр, шулай уҡ *Болан-инә* рәүешле кәүҙәләнгән**;**

б) Көб-әт-әр-әк (бүре-ата-ир-аға)<(көб)**<u>әтәрәк</u>**<**төрөк**; шулай уҡ был кешеләр ҙә *әрәкле* – ирекле *ир-арийҙар* булған. Орандары “Атаҡа” (ата-аға – атай-Ай мәғәнәһендә).

Ошо икәүҙән бер бөтөн тәшкил итеүсе һәм киләсәктә бөтәһе бергә **башҡорт** тип аталасаҡ күп ырыулы бөйөк ҡәбиләнең исем-аталыштарын бергә теркәп, **төрк-сир-бөтөн** тип тә төркөмләп йөрөткәндәр (Орхон – Селенга таш ядкәрҙәрендә ырып яҙылған); дөйөм орандары *ла аталыкты* һәм *әсәлекте* белдереүсе ике оранды бергә теркәүҙән хасил: Атаҡа+Асаба= (А)**<u>таҡасаба</u>** – **Туҡсаба** (хәҙерге үҫәргәндәрҙең бер килкеһе, ҡасандыр айырымланған ырыуҙарҙың, **Ҡыпсаҡ** менән **Үҫәргәндең**, ошо көндә *лә* бер үк оран йөрөтөүенән сәйерһенеп, буғай, тарихи хаҡиҡәтте боҙоп, “оранЫбыҙ – Муйтән” тип яңылышалар). Ҡыпсаҡ ырыуының ғәмәлдә шулай уҡ боронғо **сир** -- үҫәргәндәр икәнлеген, шуға күрә орандары *ла* бер үк (Атаҡа-Асаба – Туҡсаба) икәнлеген баҫымлыҡлап, Ҡыпсаҡ ырыуының Үҫәргәндән айырымланыу сәбәбен һәм дәүерен түбәндәрәк бирербеҙ. Бөйөк Төрки ҡағанат дәүләттәре ошо “түрк-сир-будун”дар (башҡорттар) тарафынан төҙөлгән, донъяға билдәле Орхон – Селенга таш ядкәрҙәрендәге ырын-яҙыуҙар тап шулар хаҡында һөйләй (был хаҡта айырым хеҙмәтем бар). Ә инде картаға ҡайтһаҡ, нәүбәтендә түбәндәге матдәләр дауамлана:

42. Тараз.
43. Шәһәр.
Шато тюркское племя, до IX века кочевала в районе Бешбалыка. Когда Танская империя утратила влияние в Западном крае, шато совместно с уйгурами взяли под свой контроль танские гарнизоны в Бешбалыке (Бэйтин) и Аньси (Куча) и оказали успешное сопротивление тибетцам, пытавшимся захватить эти важнейшие стратегические центры. В 790 г. шато поссорились с уйгурами и перешли на сторону тибетцев, что способствовало захвату тибетцами указанных гарнизонов. Позднее шато были вытеснены из притяньшанья в район Ордоса, где кочевали в IX – начале X в. В смутное время после падения империи Тан шато вторглись в Северный Китай и основали там одно за другим *три своих государства:* Позднее Тан (923 – 936), Позднее Цзинь (936 – 946) и Позднее Хань (947 – 951).

Предки императора Чжуан-цзуна (908 – 926) первоначально именовались *чжуе*[217], происходят от *западных тюрок туцзюе.* При последующих поколениях *выделились*, сами себя назвали *шато* и взяли фамилию Чжуе. Во время правления танского императора Дэ-цзуна (779 – 805) Чжуе Цзиньчжун жил в округе Цзиньмань, находящемся в подчинении Бэйтина...

---

[214] Чуюэ – сураш, Үçәргәндең сураш сатаһы.

[215] Хәҙерге Рәсәйҙенң Красноярский крайында.

[216] Шуниши (шунасы йәғни бүресе) – Үçәргәндең “бүреләр” тоҡомо.

[217] Үçәргәндең сураш тармағы башҡорттары.

ШАҢДАУ

Бөйөк Ватан һуғышы яугирҙәренең хәтирәләре һәм тарихи ҡомартҡылар.

(Башҡорт дивизияһына бәйле төрлө мәғлүмәттәр)

Милли дивизияның фиҙакәр йылъяҙмасыһы

(С.Р. Ҡадировтың тыуыуына 100 йыл)

Һүр. 1. С.Р. Ҡадиров, 1943 йыл. Черниговты азат иткәс

Бөйөк Ватан һуғышы ҡаһармандарының данлы исемлегендә 112-нсе (16-нсы гвардия) Башҡорт атлы дивизияһының элекке политбүлек башлығы урынбаҫары отставкалағы гвардия подполковнигы Сабир Рәхим улы Ҡадиров та (07.03.1906., Бәләбәй районы Туҙлыҡыуыш ауылы. — 13.12.1984., Өфө) лайыҡлы урын алып тора. Сөнки ул тәүге көндәрҙән үк башлап дивизияны арымай-талмай ең һыҙғанып төҙөүселәрҙең береһе, был хаҡта шул осорҙағы БАССР Верховный Советы Президиумының рәйесе Р. Ибраһимов үҙе ҡул ҡуйған документ асыҡ һөйләй:
Дивизиябыҙ төҙөлгән тәүге көндәрҙән үк һуғышсан сафҡа баҫып, уның байрағы аҫтында Иҙелдән Эльбағаса ғәрәсәтле юлдар үтеп, яуыз фашистар Германияһының баш ҡалаһы Берлинды теҙ сүктертеүҙә ҡатнашып, рейхстаг стенаһында үҙ имзаһын ҡылысының осо менән яҙып ҡалдырған батырҙарыбыҙҙың береһе ул. Совет халҡының немец-фашист илбаҫарҙарына ҡаршы Бөйөк Ватан һуғышы инде тарихҡа кереп китте, йылдар үтә барған һайын, уның ҡаһармандарының исемдәре, яҙып ҡалдырған һүҙҙәре, үҙ күҙҙәре менән күреп биргән мәғлүмәттәре ифрат та ҡиммәтләнеп, киләсәк быуындар өсөн уларҙың һәр бөртөгө, валсығы ла алтын бәрәбәренә торасаҡ (мәҫәлән, беҙ үҙебеҙ 1812-14 йылдарҙағы Ватан һуғышында ҡатнашсыларҙың кес кенә булһа ла эҙҙәрен архивтарҙан зарығып эҙләгәндәй). Ул яугирҙәрҙең күбеһе донъяла юҡ инде, улар ҡалдырған ҡиммәтле иҫтәлектәр ҙә күңелдәрҙән аҡрынлап һүрелә, юйыла – ваҡыт хөкөмө рәхимһеҙ. Шуға күрә үҙебеҙ күреп белгәндәрҙең тәржемәи хәлдәрен, аҙмы-күпме яҙма ҡомартҡыларын әрәм-шәрәм итмәйенсә, киләсәк өсөн ядкәр итеү – изге бурысыбыҙ һанайым һәм шуны үҙ хәлемдән килгәнсә үтәргә ниәтләндем.

С П Р А В К А

16

Дана настоящая тов. Кадырову Сабиру Рахимовичу в том, что он действительно с первых же дней Великой Отечественной войны 1941 года был одним из первых организаторов 112 -й башкирской кавалерийской дивизии на территории республики. Был членом оргкомитета по формированию этой дивизии. По районам башкирии и военным частям он раз"яснял цели и задачи этой дивизии. После формирования дивизии он стал заместителем начальника политотдела этой дивизии,где он прослужил до конца войны. За период войны он с честью оправдал доверие партийной организации и правительства Башкирии.

Справка дана для представления в органы социального обеспечения.

Председатель Президиума Верховного Совета Башкирской АССР и член правительственной тройки по организации 112-йкв. дивизии Депутат Верховного Совета СССР-

Р. Ибрагимов / Р. ИБРАГИМОВ/

Беҙ белмәгән замандарҙа уҡ аҫаба башҡорттар төйәкләнмеш йәмле Өсән йылғаһының ул саҡтарҙа әле әҙәм аяғы баҫмаған бер төбәгенә хәҙерге Бәләбәй башҡорттарының ҡайһылыр бер бабаһы барып сығып, әйләнәһендәге йомарт ерһыуҙарҙан хушһынып, шундағы ағас туҙҙарынан (йәғни ҡабығынан) буласаҡ ауылдың беренсе ҡыуышын ҡора һәм был ауылды Туҙлыҡыуыш тип атайҙар (хәҙер иһә рәсми ҡағыҙҙарға Тоҙлоғош тип яҙылған).

Һүр. 2. Ата-әсәһе Ғәбдрәхим, Хәмдиниса Ҡадировтар. 1930 йыл.

Сабир Рәхим улы Ҡадиров 1906 йылдың 7 мартында хәҙерге Башҡортостан Республикаһы Бәләбәй районының тап шул Туҙлыҡыуыш ауылында, һуңынан үҙе яҙыуынса, "фәҡир ерекмән ғаиләһендә тыуып үҫә -- һабан һөрә, иген игә". Ғәбдрәхим бабайҙың береһенән береһе мыҡты һәм уңған дүрт малай, бер ҡыҙ балаһы буйға етеп, барыһы тиң илдең алтын ҡаҙыҡтарына әйләнә. Урта бармаҡтай уландарҙың дүртеһе лә юғары белем алып, Бөйөк Ватан һуғышында командирҙар рәүешендә ҡатнаша, тик береһе, Сабир ағайҙың яраткан ҡустыһы Хәбир, бөйөк Еңеүгә ни бары бер ай ҡалғас ҡына, 1945 йылдың мартында Берлин йүнәлешендәге алыштарҙа батырҙарса һәләк була. Уның етем ҡалған улын, Ревты, Ғәбдрәхим бабайҙың ҡушыуынса, һуғыштан һуң Сабир ағаһы үҙенең улы һымаҡ итеп тәрбиәләп үҫтерә, уҡытып ҙур юлға сығара. Башҡа туғандарына ла йәлләмәй мәрхәмәтен. Ғөмүмән, Сабир Рәхим улы һәр кемгә лә игелекле, итәғәтле, изге күңелле ине; һуғышта ла, моғайын, шулай булғандыр (быны яуҙаштарының уға яҙған хаттары дөрөҫләй).

Ветерандың тормош юлын ҡыҫҡаса һәм асығыраҡ күҙ алдына килтерер өсөн, үҙ ҡулы менән сыбарлаған мәғлүмәтнамәһен күсерәм:

"1917 йылда ауылыбыҙҙағы земство башҡорт-урыҫ мәктәбен тамамланым.
1925 йылдың яҙында – Бәләбәй педтехникумын.
1925-26 – мәктәптә уҡытыусы.
1927-29 – Бәләбәйҙә ШКМ (школа крестьянской молодежи) директоры.
1929-31 – Туймазы РОНО мөдире.
1931-38 -- Өфө Сәнғәт техникумы директоры. Бер үк ваҡытта Тимирязев исемендәге пединституттың киске бүлегендә уҡып, 1933 йылда уның тарих факультетын тамамланым.

1924-31 – ВЛКСМ ағзаһы, 1926 – ВКП(б) ағзалығына кандидат, ә 1931 йылдан башлап ағза.

Һүр. 3.Эльбалағы осрашыу айҡанлы миҙал

1938-39 – партия өлкә комитетының штаттағы лекторы.

1939-41 – Башҡорт опера театры директоры.

1941 йылдың 23 июненән башлап – армияла, 17-нсе бригада политбүлегенең өлкән инструкторы.

1941 йылдың 20 ноябрендә -- 112-нсе Башҡорт атлы дивизияһының политбүлек башлығы урынбаҫары.

Һуғышты Эльба ярында Америка ғәскәрҙәре менән осрашып тамамланым.

Яраландым, контузия алдым. 1945 йылдың авгусында Өфөгә хөкүмәтебеҙ тарафынан БАССР Верховный Советы депутаты рәүешендә саҡырып ҡайтарылдым”.

Һүр. 4. С.Р. Ҡадиров БАССР Верховный Советы депутаты. 1947

Һуңғыһын аңлатыу кәрәк: һуғыш арҡаһында депутаттар сафы һирәгәйеп, яңы һайлауҙар үткәрергә лә форсат булмағас, республикабыҙ етәкселеге Сабир Рәхим улын кооптация ысулы менән депутат итеп тәғәйенләп, армиянан саҡыртып ала.

Әйткәндәй, Сабир ағайҙың яҙыу өҫтәле тартмаһында уның “БАССР Верховный Советы депутаты” тип ташҡа баҫып яҙыулы блокноты (миңә һуғыш эпизодын яҙып биргән бер бите үҙемдә һаҡлана) һәм ҡиммәтле тарихи ҡомартҡы – Эльбалағы осрашыуҙың билдәһе итеп шундағы яр башына ҡоролған, инглизса һәм урыҫса яҙылған стеланың макеты һаҡлана ине — Башҡортостанға ҡайтҡан берҙән-бер дана булғандыр ул, моғайын (инде ҡайҙа икәнлеге билдәһеҙ). 1984 йылдың 13 декабрендә Өфөлә вафат булып, баяғы Рев ҡустыһы хәстәрлегендә тыуған Туҙлыҡкыуышына ҡайтарып ерләнгән яугиребеҙҙең түшен иһә юғары батырлыҡ билдәләре – бер түгел өс Ҡыҙыл Байраҡ ордены, беренсе һәм икенсе дәрәжә Ватан Һуғышы һәм Ҡыҙыл Йондоҙ ордендары, тиҫтәнән ашыу миҙалдар биҙәй ине. Шулар араһында бер-нисәһе батырҙың һәм ул батырҙарса һуғышҡан дивизиябыҙҙың данлы юлын туранан-тура билдәләй: “За оборону Сталинграда”, “За освобождение Варшавы”, “За взятие Берлина”, “За победу над Германией”... Бөйөк Ватан һуғышы ҡаһарманының яҡты образы әлеге Рев ҡустыһының халыҡсан ябай ғына, ләкин хисле йөрәк тибеше уның шиғыр юлдарында сағыла:

Сабир ағайыма

Көнбайышта Гитлер һуғыш башлағас,
Тыныс тормош бәхетебеҙ өҙөлдө.
Ҡара яуҙы Тыуған илдән ҡыуырға
Башҡорттарҙан дивизия төҙөлдө.

Дим буйында өйрәттегеҙ ирҙәрҙе
Арыҫландай йөрәкле, ныҡ булырға.
Фашистарҙы автоматтан ҡырырға,
Кәрәк икән – ҡылыс менән торарға.

Уҡытыусы инең тыныс хеҙмәттә,
Балаларҙы уҡыттың, аңлы иттең.
Ил саҡырғас, ҡылыс тағып биленә,
Дошман өңө Берлинға барып еттең.

Эй ағайым, өлгө булдың беҙгә һин,
Орден, миҙалдар менән тулды түшең.
Ҡылысыңды алмаштырып ҡәләмгә,
Китап яҙҙың – данланың яугир эшен.

Һин дә бөгөн юҡ инде арабыҙҙа –
Егерме йыл уҙҙы беҙҙән киткәнгә.
Күңелдәрҙә әммә мәңге тереһең –
Үҙең нәҡ 100 йәшлек егет икән дә!

Һиндәй сая командирҙар өйрәтте
Башҡорт егеттәрен туры атырға.
Илдең етмеш һигеҙ Совет Геройын
Яҙған һеҙгә яуҙан алып ҡайтырға!

Рев Ҡадиров. 30.10.2005.

Һүр. 5. С.Р. Ҡадиров ғүмеренең аҙаҡҡы йылдарында ике туған ҡустыһы Рев Хәбир улы Ҡадиров менән.

Еңеү менән ҡайтып төшкән уҙаманды шунда уҡ Хөкүмәтебеҙҙең Сәнғәт идаралығы башлығы итеп ҡуялар һәм ул милли мәҙәниәтебеҙҙе үҫтереү, яңы үрҙәргә күтәрелдертеү өсөн ең һыҙғанып керешә. Башҡа зарурат тыуып, оҙаҡламай үҙен Башҡорт дәүләт педагогия институтына партбюро секретаре вазифаһына күсерәләр. Аспирантура тамамлағас, 1949 йылдан алып 1967 йылда пенсияға сыҡҡансы ул Өфө театраль училище директоры булып эшләй. “Белем” йәмғиәтенең әүҙем лекторы, СССР Журналистар берлегенең үткер ҡәләмле ағзаһы, данлы Башҡорт дивизияһының ҡаһарман һалдаттары һәм офицерҙары (шул иҫәптән Шайморатов генерал) тураһындағы “Волганан – Эльбағаса”, “Уттар, һыуҙар аша”, “Урал бөркөтө” (һуңғы икеһе был юлдарҙың авторының ҡәләм тотоп эшләшеүе ярҙамында нәшер ителде) исемле китаптарҙың, журнал һәм гәзит биттәрендәге, ветеран үҙе әйтеүенсә, 284 очерк һәм мәҡәләләрҙең авторы булараҡ та замандаштары яҡшы белделәр уны. Дивизия яугирҙәренең иҫтәлеген мәңгеләштереү, йәш быуынды уларҙың ҡаһарманлыҡ өлгөһөндә Ватаныбыҙҙың патриоттары итеп тәрбиәләү йәһәтенән ғүмере буйына арымай-талмай эшләне. Ҡоро һүҙ булмаһын өсөн, М.М.

Шайморатовтан һуң дивизияның командиры булған генерал Г.А. Беловтың 1969 йылдың 31 мартында уға яҙған хатынан өҙөк килтерәм (тарихилыҡты нығыраҡ һаҡлар өсөн, урыҫса текстарҙың бөтәһе лә тәржемәләнмәй ҡалдырыла): “Мне приятно слышать, что Вами ведется большая работа по организации музея дивизии, а то ведь было обидно, что есть хорошо организованные музеи в школах Черниговской, Гомельской областях, а вот откуда родилась дивизия, музея нет. Ваша работа “12 дней в тылу врага” (буласаҡ “Уттар, һыуҙар аша” китабы. – Й.С.) мне кажется будет иметь большое значение, как с точки зрения патриотического воспитания молодежи, так и исторической правды об участии тех или иных офицеров в Рейде”. Һәм бына икенсе хат – Башҡорт дивизияһы штабының немец теленән баш тәржемәсеһе өндәшә: “Дорогой Сабир Рахимович! Горячо поздравляю Вас, героя и историка Великой Отечественной Войны, с Днем Победы. Храбро сражаясь в составе труднейшего рода войск против вооруженного до зубов врага, Вы прошли через горнило этой великой войны с мужеством и отвагой. Слава Вам!

С огромным интересом прочел Вашу книгу о нашем любимом генерале Шаймуратове. Она будет замечательным памятником этому национальному герою башкирского народа и его славным соратникам. Кроме правдивости, книга имеет и несомненные художественные достоинства, что значительно повышает ее ценность. Поздравляю Вас и с завершением и изданием этого замечательного труда.

С праздничным приветом невоеннообязанный доброволец – ветеран Великой Отечественной войны, старший лейтенант в отставке **М.Г. Губайдуллин.**

Уфа, Май 1981”.

Һәм бына икенсе сәләм: унда рейд ваҡытында беҙҙең яугирҙәрҙең билдәле Дебальцево тимер юл станцияһында һуғышыуы тураһында ҡиммәтле мәғлүмәт бар; шулай уҡ дивизияның рейдтан сығыу йүнәлешендәге ваҡиғаларға ла мөһим һыҙаттар өҫтәлә.

Иптәш Ҡадиров С.Р.!

Һеҙҙең “Уттар, һыуҙар аша. Фронт яҙмалары” тигән хәтер дәфтәрегеҙҙе “Агиҙел” журналының 1972 йылгы 5-енсе һанында укып сыктым һәм бик нык тулкынландым. Мин был рейдта баштан алып аҙаҡкаса ҡатнаштым, Фондеранцев хужалыгында эскадрон командиры инем. Күп хәлдәр, күп эпизодтар күрелде – барыһын да яҙып бөтөрлөк түгел. Уларга бит өс тиҫтә йылдар үтеп бара, беҙҙең йәштәр ҙә ете тиҫтәгә баҫты – хәтерҙән сыга бара. Шулай ҙа бер-ике һүҙ яҙып, һеҙгә рәхмәт белдерәм. Сәләм әйтегеҙ Өфөлә йәшәгән һәм осраган иптәштәргә -- С. Хәбировҡа, икенсе Хәбировҡа (Башвоенкоматта), Т. Кусимовҡа, С. Әлибаевҡа һәм башҡаларга.

Дебальцево тимер юл станцияһының һул яҡ урамында минең подразделение һөжүм итте, Дебальцевоны ҡалдырып киткәндә беҙ заслонда инек. Таң яктырганда урам аша сыгырга кәрәк ине, кирбестән һалынган йортҡа кереп, ҡаты ут аҫтында урамды ҡар өҫтөнән йөҙөп сыҡтыҡ. Мәктәптә беҙҙең ҡаты яраланган һалдаттар бар ине, уларҙы ҡалдырып китеү бик йән әсеткес ҡыйын булды... Бер-нисә минут та үтмәй, көн яктыра барҙы, беҙҙе эҙәрләп килгән фашистар автоматтан ата башлагас, уңга агас араһына төшөп торҙоҡ та, улар яҡынлагас, Хисмәтуллин менән ут астыҡ, дүрт немец шунда дөмөктө, ҡалгандары тимер юлдың икенсе ягына китеп йәшенделәр...

Хәҙер хәтеремдә юҡ, бер утарға килдек. Наклонный шахта бар ине, шуны ҡараныҡ. Беҙҙең подразделение шунда – ошо утарҙа йыйналды. “Катюша” йырын йырлап килгән биш немецты тотоп, шунда йырҙары өҙөлдө. Шунан һуғыша-һуғыша оҙон юлдар үтеп, таң беленгәндә Беренсе Юлиноға килгәс минең эскадронда 17 кеше бар ине. Беренсе Юлиноның бер осонда ағастар үҫкән баҡсала -- өй, шунда комдив генерал иптәш Шайморатов миңә приказ бирҙе – Икенсе Юлиноға барырға, ауылдан сыҡҡас, 3-өнсө километрҙағы опушка-ағаслыҡты биләргә. Шулай Икенсе Юлиноны үткәндә дивизияның ун-ун биш атлыһы беҙҙе уҙып китте, беҙ йәйәүле инек ул саҡта. Мин үҙ һалдаттарым менән Икенсе Юлиноны сыҡҡас, күрһәтелгән урманға ҡарай юл тоттом, һыбайлылар һулға киттеләр – шунда генерал да бар ине. Урманға ингәс, немец засадаһына эләгеп, 5 һалдатым үлде, артабан тағы 4-еһе ятып ҡалды (23 февралдә). Фронт аша үҙебеҙҙең яҡҡа 8 кеше сыҡтыҡ. Киске сәғәт 6-ларҙа (24 февралдә булһа кәрәк. – Й.С.) танкы армияһы һыҙығында миномет батареяһы подразделениеһы ҡаршыланы.

Минең уйымса, генерал Шайморатов 23 февралдә иртәнге сәғәт 7 менән 8 араһында юғалтылғандыр. Беҙҙең арттан бер “Катюша” килә ине, Икенсе Юлиноның урам осона сыҡҡас шартлаттылар, ул тирәлә ҡар тәрән булғас, машинаға юл ҡыйынлашҡайны, шул сәбәпле булғандыр шартлау, тип уйлайым.

24 февралдә Фондеранцев Ғәлиев тигән политрукка приказ бирә генералды эҙләргә. Ғәлиев баш тартҡас, Фондеранцев уны ата. Мин шул саҡта бер бәләкәй генә утарҙа инем, миңә килеп Шайхромов әйтте. Чернухино – Дебальцево хәлдәре онотолмаҫ...

23 февралдә мин бер вещевой мешокка осрағайным, унда суконный салбарҙар бар ине, гимнастерка ла – суконный – офицерҙарҙыҡы. Унда бер общий тетрадь – көндәлек яҙылған, булһа кәрәк. Шундай минутта дәфтәрҙе алып ҡарап торҙом да, мин дә быраҡтырмаҡ булдым – күҙ алдымда һалдаттарым үлеп ята ине, 5 кеше... Янымда бер майор бар ине – корпустан, фамилияһын белмәйем. Немецтар урманды автоматтан прочесывать итә башлағайны, майор һәм башҡалар минең яндан киткәндәр. Коневодым иптәш Хисмәтуллин менән күреп ҡалдыҡ: тере ҡалған һалдаттарым икенсе урманға йүгерҙе. Немецтар был урманды уратып алғас, мин бер шырлыҡ ҡыуаҡта тороп ҡалдым; партбилетты обложкаһынан алып, эске кеҫәгә һалып маташа инем, күрәм: 10-15 метрҙа өс немец боҫоп тора миңә арттары менән, ә миндә карабин да бер пистолет (ТТ). Автомат булһа, бер очередь етер ине, тип, “ҡуян боҫто ҡыуаҡҡа”; тегеләр шул арала ҡуҙғалды, минән йыраҡлашты, мин дә уларҙан йыраҡлашырға булдым. Ағастан-ағасҡа ышыҡланып, фронт линияһына табан йүнәлдем, бара торғас, автомат очередена осраным, шунда карабин ярҙам итте – сәпәнем немецты, юл асылды. Урмандан сығып, бер йылға буйына төштөм, унда – тропинка, ҡарайым: немец юлымы – түгелме? Әһә, быймалылар, тимәк, беҙҙекеләр! Шул һыу буйында тап булдылар минең яндан киткән майор һәм коневодым иптәш Хисмәтуллин (Бүздәк районынан, иҫән-һау ҡайтты). Фронт линияһын киҫеп сыҡтыҡ шул көн.

Ореховола өҫ-баш алмаштырып, мунса инеп, иҫән-һау ҡалғандарыбыҙ осраштыҡ...

Халиҡов Миңлеғәли Миһран улы,
элекке гвардия 58-енсе кавалерия полкының өлкән лейтенанты.
Нөгөш Ҡасабаһы, Ленин урамы – 14. *(Датаһы ҡуйылмаған).*

Эйе, яугир-ветерандың ҡылысҡа тиң ҡәләме менән яҙылған тарихи әҫәрҙәрен тулҡынланмайынса ғына уҡыуы мөмкин түгел, сөнки уларҙа 112-нсе Башҡорт (16-

нсы гвардия) кавалерия дивизияһының Иҙелдән алып Эльбағаса уттар-һыуҙар кисеп үткән ҡаһарман юлы үҙе лә шунда булған ысын яугир тарафынан бөтә дөрөҫлөгөндә яҡтыртыла. Бигерәк тә башҡорт һыбайлыларының баяғы 1943 йылдың февралендә Донбасста немец-фашист илбаҫарҙарының тәрән тылына героик рейды (ул рейдта С.Р. Ҡадиров үҙе ҡатнашҡан) беренсе тапҡыр тулы итеп, бөтә ҡаһарманлығы һәм фажиғәһе менән бәйән ителә, генерал М.М. Шайморатовтың һ.б. батырҙарса нисек һәләк булыуы ла, яу ҡырында үҙ күҙҙәре менән күргәненсә, дөрөҫ асып бирелә. Шуның өсөн китап уҡыусыларҙан, бигерәк тә рейдта ҡатнашҡан яугирҙәрҙән авторға күп рәхмәт хаттары килде. Уларҙа С.Р. Ҡадировтың ысын яугирлек сифаттары ла сағылдырылған. Миҫал өсөн Сибай ҡалаһынан һуғыш ветераны Вәлиев Зиннәт Ғибат улының ике хатын һәм тағы ла бер ветерандыҡын нисек бар – шул көйөнсә түкмәй-сәсмәй күсерәм:

1. Һаумыһығыҙ, Сабирйән ағай!
Үҙеңә һәм дә ғаиләләреңә ҙур сәләм менән һәм һаулыҡ теләп — Зиннәт.
Бик күп һуңлап, һеҙҙең 1972 йылда “Агиҙел” журналының 5-енсе номерында баҫылып сыҡҡан, Башҡорт дивизияһының дошман тылында нисек һуғышыуҙары тураһындағы яҙған китабығыҙҙы уҡып сыҡтым да һеҙгә хат яҙып ултырам.
Һеҙ, бәлки, онотҡанһығыҙҙыр, мин ул ваҡытта һеҙҙең комсомолдар эше буйынса ярҙамсығыҙ инем һәм бөтә унда булган эштәрҙе һеҙҙең бойорогогоҙ буйынса эшләнем һәм үтәгән эштәр тураһында, шулай уҡ һәм башҡа ваҡигаларҙы һеҙгә ваҡытында докладывать итеп торҙом.



Һүр. 6. Уңдан һулға: Зиннәт һәм Баҡый Вәлиевтар

Бына әле күп ваҡыттар үткәс, һеҙҙең хәтирәләрҙе уҡып сыҡҡас, унда булган ваҡигаларҙы иҫкә алып, күҙгә йәш килеп тулды, сөнки мин үҙем дә һеҙҙең менән бергә булгас, ундағы ваҡигалар минең өсөн билдәле.
Мин рейдтан бер ярым тәүлеккә һеҙҙән һуң сыҡтым, сөнки һеҙҙең бойороҡ буйынса мин тылыбыҙҙағы саналы, арбалы атлылар һәм ранен булган яугирҙәр менән килдем; беҙҙе немецтар көндөҙгө сәгәт 12-лә 2-нсе Юлино ауылы янында ут асып ҡаршы алдылар, беҙ үҙебеҙҙең көс бөткәнсе кискә тиклем улар менән һуғыштыҡ, көс бөткәс, буш (патронһыҙ) мылтыҡ, автоматтар менән, ҡайһыларыбыҙ ҡылыс күтәреп дошманга ҡаршы барҙыҡ; улар беҙҙе танкынан һәм ҙур калибрлы пулеметтарҙан аталар ине. Кисҡырын имен ҡалгандарыбыҙ урманга йыйылышып, тороп ҡалган — ранен булган һәм санала килгән кешеләребеҙгә барырга йыйындыҡ, разведка ебәрҙек. Разведчиктарҙың әйтеүе буйынса, — һәм үҙебеҙ ҙә ут яҡтыһын күреп торҙоҡ, — немецтар беҙҙең тылдағы повозкаларҙа килгән ранен булган халыҡтарҙы огнеметтарҙан яндырып үлтерәләр.
Мин рейдтан сыҡҡас та тура үҙеңә килдем, ҡосаҡлашып илашып алдыҡ, мин унда булган хәлдәрҙе һеҙгә һөйләй башлагайным, һеҙ миңә былай тип әмер әйттегеҙ: “Ярай, Зиннәт, тәүҙә тамағыңды туйҙырып, кейемеңде алмаштыр, ял ит, шунан һуң һөйләшербеҙ”, — тинең. Шунан һуң һораның, партбилетыңды һаҡланыңмы, тип. Мин партбилетымды

күрһәткәс: "Молодец!" — тинең. Ял иткәс, мин һеҙгә булған хәлдәрҙе һөйләнем, һеҙ ҙур әһәмиәт биреп тыңланығыҙ...
Үҙең әйтмешләй, хәҙер кешеләрҙең, ауылдарҙың исемен онотоп бөтөлгән. Күп ваҡыт үтте, ҡартайылды, һуғыштан һуң ауыр эш — бөтәһен дә бер баш күтәрә бит инде... Мин үҙем 1970 йылдан алып — пенсионер.
Мин, унда булған кеше, һеҙҙең яҙма әҫәрегеҙҙе тулыһынса, ысын күңелем менән ҡотлап ҡаршы алам һәм поддерживаю.
Үҙеңә был көсөң өсөн ҙур рәхмәт әйтәм. Киләсәктә үҙеңә һаулыҡ һәм бәхет теләп, бывший помощник начальника политотдела дивизии по работе среди комсомольцев, участник рейда ***Валиев Зиннат Гибатович.***
Сибай, ул. Горького, дом 47 — 23.
30. 07.1974.

2. Сабир Рәхим улы!
Үҙеңә, ҡатыныңа һәм бала-сағаларыңа күп һанда сәләм һәм һаулыҡ теләп — Зиннәт.
Бөгөн бик күтәренке кәйеф һәм шатлыҡ менән хат яҙып ултырам һеҙгә.
27 июль көндө Сибай эшсе гәзитендә һеҙҙең минең турала яҙған мәҡәләгеҙҙе уҡыным һәм ул ваҡыттағы булған ваҡиғаларҙы күҙ алдыма килтереп илап та алдым.
Шулай, Сабир ағай, һеҙ ул ваҡытта, — ысын күңелем менән әйтәм! — Шайморатов мәрхүм менән икәүегеҙ бөтөн булған ауырлыҡтарҙы үҙегеҙҙең өҫтөгөҙгә алдығыҙ һәм дошманды еңеп сыҡтығыҙ. Кемдәр ул ваҡиғаларҙы үҙенең башынан үткәргән һәм һау ҡалғандар — улар үҙҙәре үлгәнсе лә һеҙҙе онотторға хаҡтары юҡ.
Һеҙ Башҡортостан Правительствоһы, партия алдында яуаплы булдығыҙ һәм ул яуаплылыҡты ҡаһармандарса үтәнегеҙ — берегеҙ йәнен бирҙе, берегеҙ, һау ҡалып, шул дәһшәтле ваҡиғаларҙы халыҡҡа һөйләй; был, Сабир ағай, һинең өсөн ҙур бәхет һәм горурлыҡ, бының өсөн беҙ ҡыуанабыҙ һәм һиңә һаулыҡ теләйбеҙ.
Үҙеңдең ярҙамсыңды онотмай иҫкә алып, халыҡҡа таныштырыуыңа күп һанда рәхмәт.
Бөтә булған кәрәк нәмәләрҙе хатҡа яҙығыҙ, бар хәлсә ярҙам итербеҙ.
Сәләм менән һәм һаулыҡ теләп — ***Зиннәт.***
06.08.1974.

Ә быныһы батырыбыҙҙың тыуған яғы Бәләбәйҙән:
Йәштәш Сабир Рәхимович!
Быны яҙыуымдың сәбәбе шул: һинең "Уттар, һыуҙар аша" исемле китабыңды ҙур рух күтәренкелеге менән уҡып сыҡтым. Бик оҡшаны, бигерәк тә һуғыш ветераны булғанымамы, уны йотлоғоп уҡыным. Китап ҙур булмаһа ла, эсенә ҙур һуғыштың бик оҙон юлын һыйҙырған, Башҡорт дивизияһының хәрәкәте, батырҙарса көрәше, бөтә эпизодтары дөрөҫ һәм ерлекле рәүештә тасуирланған. Уны уҡығанда туған башҡорт һуғышсыларының, тиңһеҙ батырлыҡтар күрһәтеп, дошман менән ҡыйыу көрәшеүҙәре өсөн горурланаһың. Ябай кешеләрҙең дошман тылына үтеп шундай ҡаһарманлыҡ ҡылыуҙарына хайран ҡалаһың. Был бит кешенең шул тиклем дә үҙ илен, үҙ халҡын, ер-һыуын үлеп һөйөүҙән – яратыуҙан, гитлеризмға нәфрәте көслө булғандан килә. Һеҙ ундай геройҙарҙы күп күрһәткәнһегеҙ. Был китап башҡорт һуғышсыларының тарихына бик мөһим хазина булып инәсәк. Уны уҡыған йәш быуынға һоҡланғыс һәм батырлыҡ һабағы буласаҡ. Уның шуныһы мөһим, һеҙ башҡорт атлыларының хәрәкәтен бөтә фронт хәрәкәтенә бәйләп, тиерлек, тулы Пкәүҙәләнештә биргәнһегеҙ. Күренеп тора: һеҙ уның

өҫтөндә бик күп һәм ныҡышмалы эшләгәнһегеҙ. Бының өсөн һеҙгә ҙур рәхмәт, сәләмәт йәшәп, алдағы көндә лә ижади эшегеҙ уңышлы булһын!
Ҡайсаҡ мин 112-нсе дивизияға эләкмәгәнем өсөн көнләшеп тә ҡуям. Сөнки беҙ 113-өнсө дивизияла булып, унда дивизия газетаһы редакторы булырға әҙерләнгән сағымда ғына, дивизияны тараттылар. Мин артчәскә эләгеп һуғышҡа киттем (1942 йылдың 25 мартында), 4 июлдә Воронеж өлкәһендә яраландым. Унан икенсе часкә -- Смоленск йүнәлешендә, унан курста булдым, шунан 3-өнсө Прибалтик фронтында Эстонияны (Тартуҙы) дошмандан таҙартҡанда тағы ҡаты яраланып, 1945 йыл мартта өйгә ҡайттым. Шулай итеп, дүрт йыл эсендә дүрт частә булдым. Бындай хәл миңә оҡшаманы, бер ерҙән икенсе ергә йөрөү арҡаһында өлкән лейтенанттан ары үҫә алманым...
Ярай, нитәһең... гәфү итегеҙ. Ләкин минең дә ҙур булмаған күләмдә яҙған һуғыш эпизодтарым бар. Килһәң, миңә кермәй китмә.
Әйткәндәй, был китапты урыҫса баҫтырғанда уғата яҡшы булыр ине. Бер фекер: китапта дивизия газетаһы һәм уның журналистары сағылдырылмаған. Бәлки, уның сәбәбе барҙыр.
***Насип Сафиуллин**. 17.11.1977.*

Сабир ағайҙың әйтелгән ике китабын ҡулыма ҡәләм тотоп эшкәртәү барышында мин уға бик күп һорауҙар бирҙем, тексты яңынан-яңы өҫтәлмә мәғлүмәттәр менән байытырға, һәр береһен миңә яҙма, йәки документтарҙың төп нөсхәләре рәүешендә тапшыра барырға күндерҙем. Шуларының байтағы китаптарына керетелде, ә ҡайһы берҙәре архивымда тороп ҡалды. Бөгөнгө уҡыусы өсөн дә, тарих өсөн дә әһәмиәтле был материалдарҙы бер килке тәртипкә килтереп, компьютерҙан үткәрергә байтаҡ ҡына көсөмдө һәм ғүмеремде, шулай уҡ матди сығымдарымды сарыф иткәс, матбуғатҡа тапшырырлыҡ хәлгә еткерелде, буғай. Шулар артабан да һәм аҙаҡҡаса минең аңлатмаларыма ярашып теҙелә.

Рейдҡа инер алдынан һәм рейдта

Һүр.7. Уңдан һулға: дивизия штабы комиссары Дәүләт Аритколов, дивизия командиры М.М. Шайморатов, Генштаб офицеры Ковальчук, дивизияның махсус бүлек башлығы М.И. Кузнецов. 1942

Список ведущих руководящих офицеров

1. Гвардии генерал-майор Шаймуратов Миннигали Мингазович, 1899 года рождения, член КПСС с 1924 г., командир дивизии.

2. Голенов Иван Иванович, 1900 г.р., гв. полковник, начальник штаба дивизии. Очень опытный военначальник, участник гражданской войны, коммунист, живет в Москве.

3. Черников А.А., 1899 г.р., гв. подполковник, начальник оперативного отдела штаба дивизии. Смелый, опытный офицер, участник гражданской войны. Жив, пенсионер.

Һүр. 8. Г.Е. Фондеранцев

4. Кадыров С.Р., 1906 г.р., гв. майор, исполнял обязанности начальника политотдела дивизии.

5. Ариткулов Д.Ш., 1900 г.р., гв. майор, комиссар штаба дивизии, член КПСС с 1919 г., участник гражданской войны, примерный офицер высокого роста. Погиб 23.02.1943.

6. Гималитдинов А.Ш., 1898 г.р., гв. майор, депутат Верховного Совета БАССР, прокурор дивизии, коммунист. Среднего роста, общительный. Писал стихи. Погиб 23.02.1943.

7. Кузнецов М.И., 1903 г.р., гв. майор, начальник особого отдела дивизии. Скромный, требовательный. Умер в Уфе в 1968 г.

8. Фондеранцев Г.Е., 1898 г.р., гв. подполковник, командир сводного полка дивизии. Участник гражданской войны, грамотный, смелый, требовательный офицер, награжден 9 орденами. После гибели генерала он командовал при выходе из рейда дивизии. Очень большие заслуги в рейде. В настоящее время пенсионер, живет в Минске.

9. Захаров Н., 1904 г.р., гв. подполковник, командир полка, беспартийный. Слабохарактерный, малоопытный, особые заслуги в боях не было.

10. Сарыгин А.А., гв. майор, начальник санслужбы дивизии, коммунист. Среднего роста, очень заботливый врач.

11. Хабиров Сайфулла, 1906 г.р., коммунист, гв. капитан (ул ваҡытта), хәҙер полковник. Урта буйлы, киң күкрәкле, көләс йөҙлө. Дивизияның артдивизионы командиры, бик оҫта һәм мәргән атыусы. “Хәбиров пушкаһы ата!” — тиерҙәр ине. 11 орденлы, кадровый офицер. Дөйөм белеме аҙ булыуға ҡарамаҫтан, үҙ эшен яҡшы белә. Рейдтан иң һуңлап сыҡты.

Инеү һәм сығыу (ҡыҫҡаса)

1943 йылдың 6 феврале, көн үтә һалҡын. Быйыл ҡар ғәҙәттәгегә ҡарағанда ла күп яуҙы. Бына әле лә тирә-яғыбыҙҙағы ағас ботаҡтарына бәрелә-һуғыла эре ябалаҡлап яуа ул. Ворошиловград тирәһендә ер йөҙө тигеҙ түгел — ағаслы тәрән-тәрән соҡорҙар (балкалар) йырғыслаған. Ҡалҡыулыҡтар буйлап теҙелгән украин утарҙары. Ҙур түгел улар, ләкин йыш ултырғандар. Беҙҙең алда күренеп торған 1-енсе Май совхозы ни бары 17 йорттан хасил. Унан дүрт саҡрым алыҫтараҡ — Петровеньки ауылы, унда ла ни бары 39 йорт. Бындай ауылдар, совхоздар күп был яҡта.

Ворошиловград ҡалаһы менән Ворошилов исемендәге совхоз араһындағы ҡалын ҡулҡаға — урманға урынлаштыҡ. Ошо ерҙән ырғылып, дошман тылына үтеп инергә тейешбеҙ. Шуның өсөн тәүҙә дошман фронтын 3-өнсө армия өҙөргә тейеш ине, ләкин шул яҡта гөрләгән һуғыштың һаман нәтижәһе күренмәй. Был хәл генерал Шайморатовты ныҡ борсой. Ул тирә-яҡҡа разведкалар ебәрә тора, бигерәк тә дошмандың Ворошиловград төркөмө ҡыҙыҡһындыра беҙҙе (унда разведчиктарҙың өлкән лейтенант Шәрипов төркөмө китә). Генерал бейек ҡарағай башына менеп, тегендә барған һуғышты биноклдән күҙәтә. Бөтә офицерҙар һәм һалдаттар алда торған ифрат та ҙур һәм яуаплы хәрби бурысты уңышлы үтәп сығыу өсөн ентекле әҙерләнә: ҡоралдарын таҙарталар, боеприпастарын ҡайтанан ҡарап сығалар; үҙ-ара кәңәшләшеп, әңгәмәләшеп тә алалар. Генерал быларҙың барыһы менән ҡыҙыҡһына, күҙәтә, тикшерә тора.

Рейдҡа инеребеҙ алдынан һуңғы почта ҡыуып етеп, уның башлығы капитан Кошелев Н.Г. хаттарҙы һәр бер боецҡа һәм офицерға үҙ ҡулынан тарата. Уларҙы беҙҙең иптәштәр ҙур шатлыҡ менән уҡыйҙар һәм, һуңға ҡалмаҫ өсөн, яуап хаты яҙырға ашығалар. Мин разведчиктар эргәһенә килгәндә өлкән лейтенант Дилмөхәмәтов Рәшит бисәһе Фәүзиәгә хат яҙып өлгөрткәйне, ниңәлер миңә уҡып ишеттерергә булды (хәтеремдә ҡалыуынса, ошондайыраҡ йөкмәткеле):

*Һөйөклө Фәүзиәм! Һеҙҙең бәхетегеҙ өсөн дошманды беҙ уның үҙ ояһына кереп ҡырырға булдыҡ. Алда торған һуғыштар үтә ауыр буласаҡ. Ватаныбыҙ шуны беҙгә ышанып тапшырғаны өсөн бик шатбыҙ, үтәп сығыу өсөн бөтә көсөбөҙҙө биреп тырышасаҡбыҙ. Әгәр ҙә минән хат килмәй торһа, хафаланма, бөгөлөп төшмә. Балаларҙы ярат, үп, хаттарымды уҡы уларға. Атай юҡ тип бойоҡмаһындар. Дошманды еңеп ҡайтҡас бәхетле йәшәрбеҙ. Үҙеңде һәм балаларҙы ҡосаҡлап үбеп, үҙеңде мәңге яратыусы **Рәшитең**.*

Конверт тышына: “БАССР, г. Белебей, ул. Тукаева, 13, Насыровой Фаузии Мухаметовне”, тип яҙылғайны (Рәшит үҙе ҡайта алмай ятып ҡалды).

3-өнсө армияның һөжүме өҙөлдө — беҙҙең өсөн фронт һыҙығы йырылманы. Дошман үҙ уңышы менән шат. Инде унда корпусыбыҙҙың 14-енсе, унан һуң 15-енсе дивизиялары атака башланылар, ләкин көтөлгән һөҙөмтә юҡ... Уларҙың уңышһыҙлығынан йәне көйгән Шайморатов үҙ дивизияһына “алға! алға!” тип бойороҡ бирҙе. Ошоно ғына көткән башҡорт егеттәре, толпарҙарына атланып, көслө ташҡын булып ут ҡосағына ташландылар. Киҫкен бәрелеш 35 минутҡа һуҙылды, дошман ныҡ ҡаршы торҙо, ләкин беҙҙе бер нәмә лә туҡтата алманы. Фашистарҙың фронтын өҙөп үтеп, алда ятҡан Ворошилов исемендәге совхозды биләнек. Немецтарҙың 750 һалдат һәм офицерҙары дөмөктөрөлдө, 25 пушкаһы, 19 минометы, боеприпас тупланған ике склады беҙҙең ҡулға төштө. Беҙ асҡан ике километр оҙонлоҡ “капка”нан бөтә корпус дошман тылына керҙе, дәһшәтле рейд башланды.

Ләкин беҙҙең тылдар — хужалыҡ частәре артыбыҙҙан эйәрә алманылар, үҙебеҙҙең яҡта бүленеп ҡалдылар. Шул иҫәптән аҙыҡтар тейәп бер төркөм машиналар менән килеүсе дивизия хужалыҡ бүлеге башлығы, дивизия командирының тыл буйынса урынбаҫары подполковник Денисов та ҡаты яраланып, артҡа сигенергә мәжбүр була. Әммә генерал Шайморатов бошоноуын беҙгә белдермәй, зарар юҡ, аҙыҡ-түлекте һуғышып, дошман ҡулынан тартып алырбыҙ, тип йыуатырға тырышты... (Ғөмүмән, дивизия хужалыҡтарын беҙ үҙебеҙ менән күп алмаҫҡа тырыштыҡ: генерал

бойороғо менән типография, күп һандағы обоздар, санчасть, ветлазарет һ.б. тылда ҡалдырылды).

Санэскадрон

Дошман тылында хәрәкәт иткәндә **санэскадрон** мөһим бурыс башҡарҙы. Яраланған иптәштәргә үҙ ваҡытында тейешле ярҙам күрһәтеү, ҡаты яралыларҙы дивизия менән бергә оҙата килеү бик ауыр эш, шуны беҙҙең санэскадрон яугирҙәре, йәндәрен аямайынса, ҙур намыҫ менән үтәнеләр. Шулар хисабынан:

санэскадрон башлығы гв. майоры А.А. Сарыгин (1969 йылда Өфөлә үлде);

санинструктор М. Вәлиев (Туймазыла парикмахер булып эшләй);

Ғайсин Ярулла (Әлшәй районы);

старшина Ғәйнелхаҡ Сөйәрғәлиев (һуғыштан һуң филология фәндәре кандидаты, 1969 йылда Өфөлә үлде);

Ғәйнуллин Вәлиәхмәт (Усалы районы Мулдаш ауылы).

Ветеринария хеҙмәте яугирҙәре:

гв. майоры Баһаутдинов Мансур Бағдан улы (1906 йылғы, коммунист, Талбазыла йәшәй).

өлкән лейтенант Салихов Хәлил Әхмәтйән улы (1906 йылғы, Тәтешлелә йәшәй);

Кузин Йосоп Сиразитдин улы (Ғафури районы Сабай ауылы);

өлкән лейтенант Әлүков Ғиниәтулла (Өфөлә йәшәй);

старшина Сафуанов Әхмәт Вилдан улы (Өфөлә йәшәй).

Интенданттар — рейдҡа кергәндәре:

Гәрәйев Әхмәт Ғәли улы, гв. капитаны (Өфөлә — пенсионер);

Ҡасимов Хәмзә Мирсалихович, гв. капитаны (Өфөлә йәшәй);

Нәбиуллин Ғариф, өлкән лейтенант (Илеш районы), үлеп ҡалды;

Волоцкий Степан, өлкән лейтенант (Баҡалы районы), үлеп ҡалды;

Бикмөхәмәтов Миңнулла Ғәли улы, һалдат, склад мөдире булып хеҙмәт итте (1908 йылғы, Украинала йәшәй).

Дивизия рейд алдынан һуғыша-һуғыша 385 саҡрым марш үтте һәм иң ауыр шарттарҙа дошман тылында ҡаты һуғыштар алып барҙы; шуға ла ҡарамаҫтан, аттарыбыҙ арыманы, аҡһаманы (һәр ат үҙ тамағын үҙе туйҙыра: ағас кимерәләр, ҡарҙа тибенеп үлән табалар, сөнки башҡорт аттарының тояғы ҡаты, ватылмай. Ошоноң менән беҙҙең аттар иң яҡшы яғынан күрһәттеләр үҙҙәрен. Башҡа республикаларҙан килгәндәре аяҡһыҙ ҡалып, стройҙан сығып бөттөләр).

Саперҙар

Рейд барышында тәрән соҡорҙарҙан (балкаларҙан) ағас теҙеп һалып сығыу мөмкинлеген уйлап табыусылар:

Йомаҙилов Ғаян Туръян улы, 1915 йылғы, сапер взводы командиры, коммунист (Өфөлә йәшәй);

Урасев Искәндәр Барый улы, 1917 йылғы, коммунист (Өфөлә 1968 йылда үлде);

Яҡупов Муллағим Арыҫлан улы, 1909 йылғы (Өфөлә йәшәй).

Сабир ағай яуҙа үлеп ҡалғандарҙың ғаиләләре, туғандары менән оҙаҡ йылдар буйына хаттар алышҡан, йөрәк йылыһын өләшеп, уларға кәрәкле мәғлүмәттәрҙе

биргән. Ҡоралдаштары күмелгән исемһеҙ ҡәберҙәрҙе эҙләп табыу, исемдәрен яҙҙыртыу өсөн дә арымай-талмай эшләгән...

Рейдтан сығыу йүнәлешендә

1943 йылдың 18 февраль көнө. Эре аҡ ҡар һалмалары бөтөрөлә һауала. Башҡа көндәргә сағыштырып ҡарағанда, тирә-яҡ тынысыраҡ. Дивизия штабының оператив бүлек башлығы майор Черников: “Көслө дауыл алдынан була торған шомло тынлыҡҡа оҡшай был”, — тип борсолоп ҡуйҙы. Эйе, фашистарҙың ҡамауын һәм фронтын йырып үҙебеҙҙең яҡҡа сығыу юлында ҡаты һуғыштар көтә беҙҙе.

Шул арала телефонсы Сырлыбаев (Баймаҡ егете) штаб башлығы полковник Иван Иванович Голеневҡа өндәште:

— Иптәш полковник, һеҙҙе “Ағиҙел” һорай. — Капитан Сәйфулла Хәбиров “хужалыҡ”ы (артиллерия-миномет дивизионы) ул саҡта ошондай ләҡәп менән йөрөтөлә ине.

Полковник, телефон трубкаһын алып:

— “Ағиҙел”, “Ағиҙел”, был — мин, тыңлайым. Йә, нимә бар?

Капитан Хәбиров:

— Беҙҙең ҡаршылағы соҡор аръяғынан Чернухиноға табан дошмандың 23 танкыһы килә... Юҡ, алыҫ түгел, 200 — 250 метр самаһында. Беҙҙең “торба”лар ныҡ һәм оҫта йәшерелгән... юҡ, күрмәйҙәр...

— Ныҡ торорға, бер генә танкыны ла үткәрмәҫкә! 21-енсе “хужалыҡ” менән тығыҙ бәйләнештә булығыҙ. — Беҙҙән уңда күрше 21-енсе дивизия хәрәкәт итә ине. — Снарядтарҙы бәрәкәтле тотоноғоҙ... бушҡа атмағыҙ. — Трубканы Сырлыбаевҡа ҡайтарып, һөйләнде: — Эйе, Хәбировтың хәле ауырлаша... Их, бер ун йәшник снаряд булһа, фашистарҙың кәрәген бирер ине лә бит... ҡайҙан алаһың...

Шул хәлгә бәйле рәүештә, Иван Ивановичтан өҫтәлмә күрһәтмәләр алып, беҙ, майор Черников менән мин, капитан Хәбиров “хужалыҡ”ына киттек. Тура барырға мөмкин булмағанлыҡтан (дошман өҙлөкһөҙ ата), саңғылар кейеп, Демченко утары аша йүнәлдек. Хәбировтың штабы утарҙан алыҫ түгел айырым торған яңғыҙ таш һарай эргәһендә ине. Һарай ҡаршыһында — яңғыҙ ҡарт өйәңке. Ваҡыты-ваҡыты менән разведчиктар шуға үрмәләп менеп, дошманды күҙәтәләр. Беҙҙе капитан Хәбиров һәм уның штаб башлығы өлкән лейтенант Кәримов Миңлеғол ҡаршыланы. Ысынлап та, урындағы шарттарҙан файҙаланып, пушкалар оҫта итеп йәшерелгән икән. Хатта көбәктәрен, корпустарына тиклем, аҡ төҫкә буяғандар, үҙҙәре лә аҡ халатта. Кәримов компас беркетелгән картаһын асып, беҙҙе урындағы хәл менән таныштыра башланы. Шул арала телефондан лейтененант Хәмзә Әүхәтов (Аҫҡын районынан) Фащевка яғында уның батареяһы торған урынға дошман танкылары килә ятыуын, алдағы соҡорға яҡынлашҡанын ашығыс хәбәр итте. Уға телефондан Хәбиров:

— Ныҡ йәшеренеп күҙәтергә, мин бойормай тороп, атмаҫҡа! — тип киҫәтте. Өҫтәп:

— Танкылар соҡорҙан өҫкә күтәрелгәндә, кәшкәйгән ҡорһаҡтарына тура атырға, бер генә снаряд та бушҡа китмәһен! — тип ҡаты баҫым яһап бойорҙо. Күп тә үтмәй, күрәбеҙ: ысынлап та, дошмандың баяғы 23 танкыһы, Хәбиров “хужалыҡ”ына тоҫҡалып, Фащевка утары йүнәлешенә дөрөп килә ине. Улар, тәрән соҡорҙан үтеү өсөн уңайлы урын һайлап, алдынғы танк тап Әүхәтов пушкаһына ҡаршы соҡорға сумды. Беҙҙең тарафта тынлыҡ. Ана, баяғы танк инде, кәшкәйеп, соҡорҙан менеп килә. Шуны күҙәтеп торған Хәбиров Әүхәтовҡа: “Ат!” — тип бойорҙо. Түҙемһеҙлек менән шуны ғына көткән Әүхәтов атып та ебәрҙе. Танкыны ҡара төтөн сорнап алды ла соҡорға ҡапланып ауҙы. Көтмәгәндә был хәлде күреп, дошмандың бөтә

танкылары ла көслө ут асып алға — беҙгә ташландылар, ләкин Урал егеттәренең ҡаҡшамаҫ-көслө ҡаршылығына осранылар: бөтә пушкаларыбыҙ телгә килде. 25 минут дауам иткән ошо ҡаты һуғышта бер Әүхәтов ҡына ла, яңғыҙы ғына атып (иптәштәре үлеп бөткән), 7 танкыны яндырҙы. Лейтенант Шакирйәнов — 6 танкыны, өлкән лейтенант Мөғин Нагаев 4 танкыны дөмөктөрҙө. Бер танк соҡорҙо уңышлы үтеп, беҙ йәшеренгән һарайға яҡынлашып килгәндә, Хәбиров үҙе тороп йүгерҙе һәм яҡындағы пушканан тура тоҫҡап атты, ул танк та урынында янып ҡалды. Мин шунда капитан Хәбировтың, оҫта командир ғына түгел, ә бик мәргән атыусы ла икәнлегенә тағы ла бер ҡат инандым. Ҡалған бер-нисә танк кире боролоп ҡасырға мәжбүр булды.
Хәбиров телефон аша Әүхәтовҡа бер-нисә ҡат өндәшеп ҡараһа ла, яуап килмәне. Шул арала унын батареяһы урынлашҡан ергә бер төркөм фашист һалдаттары автоматтан көслө ут асып йүгерәләр — был инде дошман пехотаһының атака башлауы ине. Шуны күреп, уң яҡтағы 21-енсе дивизиянан ярҙам һораныҡ. Улар: “Күрәбеҙ... һөжүм башлайбыҙ... ныҡ тороғоҙ!” — тип хәбәр бирҙеләр. Һәм шул күршеләребеҙ дошман пехотаһын, күп юғалтыуҙарға дусар ҡылып, сигенергә мәжбүр иттеләр. Ошо ваҡытлы тынлыҡтан файҙаланып, яраланған иптәштәрҙе йыйнай, ярҙам күрһәтә башланыҡ. Ләкин лейтенант Әүхәтов табылманы, ә янындағы ике иптәше үлеп ята. Аҙаҡ шуны белдек: 21-енсе дивизия разведчиктары һушын юғалтҡан Әүхәтовты немецтар Дебальцево станцияһына алып киткәнен күргәндәр. Беҙҙең өсөн ифрат ҙур ҡайғы ине был. Һуғыш бөткәс кенә мәғлүм булды: уны, украин кешеләрен көсләп тейәгән вагонға һалып, көнбайышҡа оҙатҡандар. Әүхәтов юлда барғанда төндә вагон иҙәнен ҡуптарып, рельстар араһына төшөп ҡала. Һуңынан урындағы партизандарға ҡушылып, фашистарға ҡаршы ҡыйыу һуғыша. 1944 йылда ҡабат Ҡыҙыл Армия сафны баҫып, дошманды еңә-еңә, Прагаға барып етә. Ләкин 1945 йылдың майында Прага өсөн барған һуңғы һуғышта батырҙарса һәләк була...

* * *

Һүр. 9. Рейдта Садриев Әҙеһәмгә партия билеты тапшырыу. Уңдан һулға: корпус комиссары Белов һәм рейдтағы дивизия политбүлек башлығы С. Р. Ҡадиров. 1943 й. феврале

Чернухинола беҙҙе дошман уратып алырға, юҡ итергә әҙерләнә. Беҙгә ҡаршы унын алты пехота дивизияһы, ике танк полкы, өс артиллерия полктары хәрәкәт итә.

Ҡорал һәм боеприпастары көнбайыштан өҙләкһеҙ килеп тора. 8-енсе корпустағы беҙҙең һәм күрше 14-енсе, 15-енсе атлы дивизияларҙың яугирҙәре штат расписаниеһына ҡарағанда 35-40% ҡына ҡалды (беҙҙең Башҡорт дивизияһында 2864 кеше ине). Снаряд бөткәнлектән, пушкаларыбыҙҙың күбеһен шартлаттыҡ. Боецтар трофей немец автоматтары менән ҡоралландылар. Рация эштән сыҡты — “Оло ер” менән бәйләнеш өҙөлдө.
Чернухино ауылында барлығы 109 йорт ине. Кескәй генә йылға Чернуха буйлап һуҙылған. Бер генә урам. Батҡыл урында. Уға ҡаршы 3-4 саҡрымда ҙур узловая станция Дебальцево урынлашҡан. Ҙур эшсе ҡасабаһы. Күберәк халҡы шахтерҙар. Уның аша Ворошиловград, Сталино, Артем, Николаевка станцияларына тимер юл үтә. Шул юлдарҙы өҙөп, дошман коммуникацияларын ҡыйратып, Ҡыҙыл Армияға Ворошиловградты ауырлыҡһыҙ алырға булышлыҡ иттек.
Шулай итеп, иңебеҙгә йөкләнгән бурысты тулыһынса үтәп, “Оло ер”гә ҡайтырға сығабыҙ. Беҙҙе ҡамап тотҡан фашистарҙы бик оҫта алдап, ҡара төндә балка буйлап уларҙың утлы “тоҙаҡ”ынан ысҡынабыҙ. Күп юғалтыуҙарға, ас булыуға ҡарамаҫтан, һалдат һәм офицерҙарҙың рухы күтәренке, сөнки дошманды еңдек, тиҙҙән үҙебеҙҙең яҡта булырбыҙ.
22 февраль, таң алды. Беҙ, бик ауыр һуғыштарҙан һуң, Чернухинонан 25 саҡрымдар көньяҡ-көнсығыштағы Стрюково утарындағы дошманға һөжүм итәбеҙ. Дивизия штабы — Стрюково янындағы тәрән соҡорҙа, ул ҡалын урман менән ҡапланған. Разведчик өлкән лейтенант Бикмәтов беҙҙең Фондеранцев полкына ҡаршы фашистарҙың 30-лап танкыһы ташланғанын ашығыс хәбәр итте. Генерал Шайморатов, йыуан ҡарағайға һөйәлеп, бер аҙ уйланып торҙо ла, ҡулындағы планшетына ҡарап, тиҙ генә бында Хәбировты саҡырығыҙ, тине эргәһендә торған подполковник Вәлиевҡа. гҮҙе, картанан күҙен алмай, ниндәйҙер билгеләр һыҙа.
— Саҡырыуығыҙ буйынса килдем, иптәш генерал! — тине Хәбиров, ҡабаланып, атын ездовой Казыхановҡа тапшырҙы.
— Яҡшы. Ҡайҙа, картағыҙға ҡарағыҙ!
Хәбиров планшетын асып, ғәйепле кеше һымаҡ, генералға төбәлде:
— Ғәфү итегеҙ, был районҙың картаһы юҡ икән, иптәш генерал, — тине. Подполковник Вәлиев (штабтың артиллерия башлығы) үҙ планшетынан бер карта сығарып Хәбировҡа бирҙе. Генерал:
— Бына беҙгә ҡаршы Стрюково утарына йәшеренгән немецтар 30-лап танк менән Фондеранцевты ҡамарға әҙерләнә. Уларҙы Петровеньки станцияһы яҡлап нығыу ҡаршы алырға кәрәк. Дошмандың өҫтәлмә көсө 152-нсе шахта яҡлап беҙгә ҡаршы көслө атака әҙерләй. Һеҙгә бойорам: өлкән лейтенанттар Мотиғуллин һәм Нагаев батареяларына Стрюковолағы дошман танкыларын юҡ итергә. Бындағы һуғыш менән подполковник Вәлиев етәкселек итер. Ә һеҙ үҙегеҙ Шакирйәнов, Кәримов батареялары менән 152-нсе шахтаны дошмандан бушатығыҙ! — Хәбиров генералға: “Ҡар тәрән, аттар аҙ ҡалды...” — тип, тағы ла нимәлер һөйләмәк булһа ла, уға ҡарап: — “Аңлайым, табығыҙ, бер генә пушканы ла ташламағыҙ!” — тип ҡаты киҫәтте. Хәбиров, генералдың рөхсәтен алып, үҙ “хужалыҡ”ына ҡарай китеп юғалды. Генерал ул киткән яҡҡа төбәлеп: “Батыр һалдат. Асыға ла, арыйҙа белмәй”, — тине.
Офоҡ артына күсеп барған ҡояш нурҙары һүрелде, тәрән соҡорҙо шомло ҡараңғылыҡ баҫты. Күҙ бәйләнеү менән үк, генерал шәп разведчик Бикмәтовҡа

(артиллерист) Петровеньки тимер юл станцияһына барырға бойорҙо һәм ул үҙе менән 25 разведчикты алып юлға сыҡты. Шомло минуттар. Әгәр ҙә генералдың был бойороҡтары үҙ ваҡытында үтәлмәһә, таң атыу менән дошман беҙҙе тулыһынса ҡамап аласағы билдәле һәр кемгә. Был хәл генералдың үҙен дә ныҡ борсой.

Ҡараңғылыҡтан файҙаланып, Мотиғуллиндар, Нагаевтар үҙ пушкаларын Стрюковоға яҡын уҡ килтереп урынлаштырғандар. Фашист танкыларының асыҡлыҡҡа — утар осона килеп сығыуын һағалайҙар. Гөрләп мотор тауыштары ишетелә. Күп тә үтмәй, өсәр-өсәр булып утарҙан ҡара тәреле танкылар Фондеранцев позицияһына ябырыла. Ләкин алыҫ китә алмайҙар: уларҙы беҙҙең егеттәр мәргән ут менән ҡаршылай. 19 минут эсендә дошман үҙенең 21 танкыһын юғалта. Өлкән лейтенант Мотиғуллиндың атырға снаряды бөткәс, ҡаршы килеүсе танкыны канауға ятып көтөп ала ла, өҫтөнә ырғып менеп, яртылаш ҡыҫыҡ люгын асып, танк эсенә бер-бер артлы өс граната ташлап өлгөрә. Танк шул урынында ҡатып ҡала.

Өлкән лейтенант Нагаев ошо бәрелештә генә лә дошмандың 9 танкыһын дөмөктөрә. Бер-нисә танк, кире боролоп, 152-нсе шахта яғына киткәнен хәбәр иттеләр. Төнгө сәғәт 13 еткәндә капитан Хәбиров фашистарҙың шул 152-нсе шахталағы төркөмө лә юҡҡа сығарылғанын хәбәр итте. Унда бигерәк тә өлкән лейтенант Кәримов ҙур батырлыҡ күрһәтә -- 8 танкыны яндыра. Бынан тыш, дошман яҡтың100-ҙән артыҡ атын ҡулға төшөрә. Шулай итеп, беҙҙең пушкаларҙы тәрән ҡарҙан йөнтәҫ тояҡлы немец аттары һөйрәй башланы.

Иртәнге сәғәт биштәр еткәндә, беҙ, дошман ҡулынан арындырылған Стрюково утары аша үтеп, Петровеньки тимер юл станцияһына ҡарай ҡуҙғалдыҡ. Станцияға етергә бер өс саҡрымдай ҡалғас, разведчик Бикмәтов ҡаршыланы, станциялағы ҡасабала дошман штабы һәм уларҙың тылдары урынлашыуын хәбәр итте. Генерал:

— Бикмәтов, үҙ көсөңә өҫтәлмә итеп Фондеранцев "хужалығ"ынан бер эскадрон ал да ҡасабалағы һәр йортҡа өсәр кеше бүлеп сыҡ, ныҡ һаҡлыҡ менән ҡамап алығыҙ ҙа бер үк ваҡытта ташланығыҙ уларға. Береһен дә ҡасырмағыҙ!

Беҙ ҡасаба ҡаршыһындағы станция будкаһына килеп еткәндә, Бикмәтовтар генералдың бойороғон үтәгән ине инде: йылы йорттарҙа иҙерәп йоҡлап ятҡан 197 немецты эске бельеларында ғына урамдағы киң майҙанға сығарып теҙгәндәр... Дошмандың барлыҡ ҡоралдарын, боеприпастарын алып, Фащевка утары аша Штеревка йүнәлешендә ҡуҙғалдыҡ. Унда фронт — дошман оборонаһы. Шуны йырып, Ново-Николаевка ҡасабаһына — "Оло Ер"гә сығырға тейешбеҙ.

* * *

Инде һөйөклө генералыбыҙ Миңлеғәли Минһаж улы Шайморатовтың әле булһа күҙ алдымда торған буй-һынын, ҡиәфәтен, ҡайһы бер ғәҙәттәрен тасуир ҡылайым. Бына ул: урта буйлы, ҡара күҙле, яҫы ҡара ҡашлы, киң күкрәкле, һәр ваҡыт аҫҡа ҡарап уйланып йөрөй. Бик аҙ һүҙле. Кәрәккәндә инглиз, ҡытай, немец һүҙҙәрен ҡушып ебәрә. Ҡарт коммунист. Хәрби эште яҡшы белә, ике академия тамамлаған. Берәй эш боҙоп теңкәһенә тейгән кешегә: "Ах һин, художник!" ти, башҡа асыулы һүҙе юҡ. Баянда матур уйнай. Иң яратҡан көйҙәренән "Урал", "Буранбай"... Йөрөгәндә лә шуларҙы ауыҙ эсенән йырлап йөрөй. Партияға, социалистик Ватанға мөкиббән бирелгән. Бөтә көсөн, белемен халыҡҡа хеҙмәт итеүгә бағышлаған. Түш кеҫәһендә

ҡыҙы Һылыуҙың (тәүге ҡатынынан Ҡазанда тыуған) фотоһын һаҡлай, йыш ҡына алып ҡарай, һағына. Бисәләрен (тәүгеһен дә, һуңғыһын да) иҫкә алмай. Тәүгеһе ул Ҡытайҙа хеҙмәт иткәндә башҡа иргә сыға, ә һуңғыһы Ольга Павловна менән ни бары ике ай ғына тороп ҡала — эҫенеп тә өлгөрмәгән, күрәһең. Төрөпкә тарта, салбар кеҫәһендә — утсаҡма (зажигалка), тәмәкеһе түңәрәк көн кеҫәттә. Ауыҙынан төтөн балдаҡтары сығарып, оҙаҡ ҡына ҡарап торорға ярата. Эскән кешене өнәмәй. Матур әҙәбиәтте мауығып уҡый, сумаҙанында даими китаптар йөрөтә. Үҙ фекерен ныҡ яҡлай. Үҙе тотоп ҡарамай, үҙе күрмәйенсә тороп, бер нәмәгә лә ышанмай. Йыш ҡына: “Ленин менән кәңәшләшеп алырға кәрәк”, — ти, уның әҫәрҙәрен йыш уҡый. Ошо талантлы командирыбыҙҙың ҡулы аҫтында бөтә ауырлыҡтарҙы артта ҡалдырып, бына-бына дошман фронтын йырып, әллә ни ҙур юғалтыуҙарһыҙ үҙебеҙҙең яҡҡа дөрөп сығырбыҙ кеүек ине... Ләкин 23 февраль иртәнге сәғәт 5-тә тетрәткес фажиғәле хәл булды.

Генерал-лейтенант Борисов (корпус командиры) Юлино 1-енсе утарына саҡырҙы Шайморатовты (уның менән бергә мин һәм дивизиябыҙҙың махсус бүлек башлығы гв. майоры М.И. Кузнецов барҙыҡ). Борисов ултырған яңғыҙ йортҡа инеү менән, ул Шайморатовҡа: “Ниңә тиҙерәк алға бармайһың?” — тип екерҙе. Борисов үҙе нык иҫерек, уның эргәһендә корпустың штаб башлығы полковник Сабуров һәм тағы ла ике офицер бар. Дивизиябыҙ корпустың алдында — головной булып бара ине. 15-енсе дивизия беҙҙән һулда, ә 14-енсе дивизия корпустың артынан килә. Шайморатов корпус командирына алдағы һәм флангылағы хәлде аңлата башланы. Борисов уға: “Һин беләһеңме, минме?!” — тип тауышын күтәрҙе. Шайморатов: “Тыңлағыҙ әле, мин, круговой оборона тотоп, алдағы 24 февралде үткәрәм. Көслө разведка яһап, дошман көстәрен белермен. 25 февралдә барығыҙҙы ла иҫән-һау “Оло Ер”гә алып сығырмын”, — тип аңлатырға тырышһа ла, иҫерек Борисов һаман да: “Алға! Алға!” — тип аҡырынды. (Йәйәләр эсендә әйтеп үтәйек: генерал Борисовтың шул ғәйебен уны күргән башҡа офицерҙар ҙа дөрөҫләй. Дивизиябыҙҙың рейдтағы йыйылма полк командиры Г.Е. Фондеранцев 1968 йылдың 16 ғинуарында Минск ҡалаһынан С.Р. Ҡадировҡа яҙа: “О гибели Шаймуратова первым письмом Ахтяму Ихсанову написал так, как оно было, где я ставил вину Борисову. Ихсанов мне ответил, что он со мной не согласен, но я ему ответил, что я остаюсь при своем мнении, и только через некоторое время он мне написал что я прав, что это подтвердил генерал Чаленко”. — Й.С.). Шуны күреп Шайморатов боролоп сығып китте, беҙ уның менән бергә дивизия урынлашҡан Юлино 2-нсе утарына ҡайттыҡ. Һалдаттарыбыҙ ифрат нык арығандар ине (өсөнсө тәүлек ашамаған, ял итмәгән, тик ағас бөрөләрән сәйнәп килделәр). Генерал: “Алға — атакаға!” — тип бойороҡ бирҙе. Дивизия ике колоннаға бүленеп ҡуҙғалды.

Таң атып-яҡтырып килә. Тигеҙ ялан. Тәрән ҡар. Һулда Петровка, Штеревка утарҙары, уңда район үҙәге Ивановка, алда Малониколаевка һәм Елизаветовка ауылдары (беҙ ошонда сығырға тейеш). Ҡушарлап ике туры ат еккән, айыу тиреһе көпләнгән арҡалы санаға Сабуров менән бергә ултырып, “алға! алға!” тип аҡырып, Борисов беҙҙе елдереп уҙып китте (ул тиҙерәк “Оло Ер”гә сығырға ашыҡҡандыр). Ләкин күп тә үтмәй, дошман пулеметтары уның аттарын атып ҡолата, санаһы түңкәрелә. Күсер һалдатты һәм Сабуровты ла үлтерәләр. Яраланған генерал Борисовтың үҙен әсирлеккә алып китәләр...

Бынан һуңғы һуғыштарҙа беҙгә уның һүрәте төшкән, ҡултамғаһы ҡуйылған бик күп һандағы саҡырыу листовкалары ташланылар. Унда: “Мин бында яҡшы торам, юҡҡа ҡан түкмәгеҙ, бөйөк Германияға бирелегеҙ! Бәхетле булырһығыҙ”, — тип яҙылғайны. Беҙ, әлбиттә, ышанманыҡ. Ул шулай ялған-яһалма листовка булды ла. Һуғыш бөткәс, Борисовты үҙем ике тапҡыр күрҙем. Ул әле лә иҫән, Киевта йәшәй.

Бер 10-15 минуттан көслө һуғыш башланды. Дошман менән үҙ-ара буталдыҡ (рукопашный бой). Өлкән сержант Әхмәҙуллин Әхмәтхужа, Башҡорт АССР-ы Верховный Совет депутаты (Ҡалтасы районы Шушнур ауыл советы Урал ауылынан), дивизия ҡыҙыл байрағын күтәреп, бөтә боецтарҙы: “Алға! Ватан өсөн, Сталин өсөн!” — тип оранлап атакаға өндәне. Ҡанға батып ауғас, байраҡты яҡын иптәше Нурғәлиев Хәниф алып алға йүгерҙе. Улар икеһе лә күп-күп яугирҙәребеҙ менән бергә ошо дәһшәтле һуғышта һәләк булдылар, ләкин дошман да күп юғалтыуҙарға осрап, Фромандировка ауылын ташлап ҡасырға мәжбүр булды. Был атакала фашистар 200-ҙән артыҡ һалдатын, биш танкыһын юғалтты. Ҡанға батып ауған Нурғәлиев ҡулындағы ҡыҙыл әләмде үҙ ҡулыма алып алға — дошманға ташланырға тура килде (ул әләмде тун эсенән күкрәгемә урап, унда инде батырҙарса һәләк булған 16 коммунистың партбилеттары һаҡлана ине, “Оло Ер”гә алып сыҡтым). Ошонда дошман пуляһынан Шайморатов һәләк булды...

* * *

Чернухинола ҡаты яраланған иптәштәрҙе урындағы халыҡҡа, ҡарарға һәм һаҡларға ҡушып, медикаменттар биреп, расписка менән ҡалдырып китергә тура килгәйне. Бына уларҙың сама менән исемлеге:

1. Кузин Йосоп Сиразитдин улы, Ғафури районы Ҡабарды ауылы.
2. Садиҡов Ғәтиәт Сәләхитдин улы, лейтенант, 1913 йылғы, Ҡандра районы.
3. Шәмситдинов Мөнир Шәмситдин улы, лейтенант, 1912 йылғы, Шаран.
4. Кәримов Зиннур Мөхәмәт улы, лейтенант, 1915 йылғы, Усалы.
5. Сирбаев Әхкәм Зәйнитдин улы, лейтенант, 1918 йылғы (Хәйбулла).
6. Аҙнабаев Рәшит Зәки улы, лейтенант, 1920 йылғы, Баймаҡ.
7. Хәсәнов Ғәлимхан Хәсән улы, капитан, 1907 йылғы, Ҡандра.
8. Исхаҡов Шәһит Миңлекәй улы, лейтенант, 1918 йылғы, Ауырғазы.
9. Исхаҡов Зиннәтулла Исхаҡ улы, һалдат, 1903 йылғы, Кушнаренко.
10. Сәрүәров Ғариф Сәрүәр улы, һалдат, 1906 йылғы, Балтас.
11. Фатихов Лотфулла Фатих улы, һалдат, 1904 йылғы, Яңауыл.
12. Нәбиев Ситдиҡ Хисмәтулла улы, һалдат, Илеш районы Йәркәй ауылы...

1942 йылда Дон фронтында фашистар тарафынан язалап үлтерелгән алты разведчик:

1. Төхфәтуллин, помполит, Туймазы районы Төпкилде ауылы.
2. Насритдинов Камай, һалдат, Баҡалы районы.
3. Хазиев Әмир Хази улы, һалдат, Туймазы районы.
4. Әмиров Хәтмулла Әмир улы, старшина, 1918 йылғы, Туймазы районы.
5. Ғиззәтуллин Ғәйфулла Сөнәғәт улы, һалдат, 1914 йылғы, Баймаҡ районы.
6. Исламов Таһир Ислам улы, һалдат, 1909 йылғы, Шаран районы.

Шул алты ҡорбандың ҡонон алырға дошман тылына барып, фашистарҙы дөмөктөрөп, немец аттарын алып ҡайтыусылар:

1. Сәлихов Хәлил Әхмәтйән улы, өлкән лейтенант, 1906 йылғы, Тәтешле районы.
2. Ғайсин Муса, һалдат, 1912 йылғы, Тәтешле районы Яңғыҙнарат ауылы, әле лә шунда йәшәй.
3. Мостафин Сабир, һалдат, 1907 йылғы, Тәтешле районы Ҡудаш ауылы.
4. Шәрәфитдинов Йомағужа, һалдат, 1908 йылғы, Усалы районы.
5. Ҡәйүмов Закир, һалдат, 1910 йылғы, Саҡмағош районы.
6. Садиҡов Тимеркәй Садиҡ улы, һалдат, 1915 йылғы, Туймазы районы.
7. Латипов Рәхим, һалдат, 1907 йылғы, Бәләбәй районы Туҙлыҡыуыш ауылы.
8. Вилданов Хәким, һалдат, 1905 йылғы, Белорет районы.
9. Баязитов Шәмситдин, һалдат, 1905 йылғы, Дәүләкән районы.
10. Ғафуров Заһир, һалдат, 1906 йылғы, Ҡырмыҫҡалы районы.
11. Шафиҡов Әхиәр Талип улы, һалдат, 1915 йылғы, Туймазы районы.
12. Әлүков Ғиниәтулла, Өфөнән.
13. Ғәйнуллин Вәлиәхмәт, һалдат, Усалы районы.

Улар алып ҡайтҡан аттарҙы дивизияның артиллерия бүлектәренә бирҙек. Бик таҙа малдар ине.

Чернухино — Дебальцевола һәләк булыусылар бөтәһе 415 кеше.

Рейдтан сыҡҡан көндә (23-24 февраль 1943 йыл) батырҙарса үлеп ҡалған иптәштәрҙең исемлеге (әлбиттә, барыһы ла түгел):

1. Ген. Шайморатов М.М., дивизия командиры.
2. Майор Аритколов Д.Ш., дивизия штабы комиссары.
3. Майор Ғималитдинов, дивизия прокуроры.
4. Латипов Р., һалдат, разведчик.
5. Ғилманов, махсус бүлек хеҙмәткәре.
6. Баязитов, дивизия штабының 4-енсе бүлек башлығы ярҙамсыһы.
7. Йәһүҙин, тәфтишсе.
8. Гулов (Миңлеғолов), разведчик.
9. Садиҡов Г.С., лейтенант.
10. Шәмғетдинов М.Ш., лейтенант.
11. Сарбаев З.М., лейтенант.
12. Аҙнабаев А.З., кесе лейтенант.
13. Хәсәнов Г.Х., өлкән лейтенант.
14. Миңлекәйев Ш.М., өлкән лейтенант.
15. Шәрәфитдинов Ю.Ш., һалдат.
16. Ҡәюмов З.К., һалдат.
17. Вилданов Х.В., һалдат.
18. Буранғолов Ш.И., һалдат.
19. Ғафуров М.Т., һалдат.
20. Шафиҡов А.М., һалдат.
21. Садиҡов С.С., өлкән сержант.

....

Бөтәһе 749 кеше.

Дошман тылында тәрән рейдта батырҙарса һәләк булып та, ошоға тиклем хәбәрһеҙ юғалыусылар исемлегендә йөрөтөлгән иптәштәрҙең исемлеге, улар Чернухино йәки Петровский ҡасабаларында туғандар ҡәберендә күмелгәндәр (Ворошиловград өлкәһе Ивановка районы). Тәүҙә исем-фамилияһы, шунан һуң тыуған, йәки һуғышҡа тиклем йәшәгән урыны, аҙаҡ үлеү датаһы бирелә.

1. Иҙелбаев Харрас Әлмөхәмәт улы, Усалы районы Байрамғол ауылы. 23.02.1943.
2. Әбделмәнев Рәшит Хәлим улы, Ғафури районы Елемҡаран ауылы. 28.12.1942.
3. Хоҙайбирҙин Шәйхетзар Низамитдин улы, Ауырғазы районы Атйетәр ауылы. 23.02.1943.
4. Ғарифуллин Рамаҙан Ғарифулла улы, Илеш районы Абалаҡ ауылы. 23.02.1943.
5. Айратҡолов (Аритҡулов) Дәүләт, Өфө. 23.02.1943.
6. Ғималитдинов Ямалитдин, Өфө. 23.02.1943.
7. Камалитдинов Нури Камалитдин улы, Нуриман ҡасабаһынан. 23.02.1943.
8. Латипов Рәхим Латип улы, Бәләбәй районы Туҙлыҡыуыш ауылы. 23.02.1943.
9. Нурғәлиев Фасат Нурғәли улы, Краснокама ҡасабаһы. 23.02.1943.
10. Ғәйнуллин Сафиулла, Нуриман районы Иҫке Иҫәй ауылы. 23.02.1943.
11. Шафиҡов Талип Шафиҡ улы, Дәүләкән районы Аҡҡолой ауылы. 20.02.1943.
12. Иҙрисов ...?, Архангель районы Абҙай ауылы. 23.02.1943.
13. Мәжитов Хәйрүәр Ғәйнитдин улы, Эстәрлетамаҡ районы Усман (хәҙер Сулпан) ауылы. 19.02.1943.
14. Насибуллин Абдулла, Эстәрлетамаҡ районы Сумар ауылы. 20.02.1943.
15. Әбүбәкиров Әхмәт Мәхмүт улы, Баймаҡ районы Йомаш ауылы. 24.02.1943.
16. Мөхәмәтдинов Мансур Ниғмәтулла улы, Ғафури районы Байымбәт ауылы. 23.02.1943.
17. Дилмөхәмәтов Йәрмөхәмәт, Мәсетле районы Ләмәҙтамаҡ ауылы. 19.02.1943.
18. Минһажев Мәүлитйән, Салауат районы Иҙрис ауылы. 19.02.1943.
19. Икбаев М.Д., Ишембай — 8, Загородная урамы, 23.
20. Әбделмәнев Әбделнасир Я., Йылайыр районы Ҡашҡар ауылы.
21. Иҫәнгилдин Зәки Шәриф улы, Күгәрсен районы Тәүәкән ауылы. 23.02.1943.
22. Әбүбәкиров Ҡаһарман Ибраһим улы, Баймаҡ районы Йомаш ауылы. 23.02.1943.
23. Ырыҫкужин Фатуат Шәйхилислам улы, Әбйәлил районы Ҡушай ауылы. 24.02.1943.
24. Йәғләмүнев Хәбиб Йәғләмитдин улы, Салауат районы Иҙелбай ауылы. 20.02.1943.
25. Фәрхитдинов Сиразитдин Фәрхитдин улы, Салауат районы Иҙелбай ауылы. 20.02.1943.
26. Ҡужин Х., Ғафури районы Сабай ауылы. 20.02.1943.
27. Ишкинин Хәмзә Хәйритдин улы, Күгәрсен районы Наҙар ауылы. 23.02.1943.
28. Миңләхмәтев Мөхәмәтдин, Миәкә районы Е.-Урсай ауылы. 23.02.1943.
29. Йәмилев Рашат Сәмәрхан улы, Ишембай районы Ураҙбай ауылы. 24.02.1943.
30. Байғужин Юныс Аллабирҙе улы, Йәнсура районы Байдәүләт ауылы. 18.02.1943.
31. Абдуллин Зәйнулла Насибулла улы, Ғафури районы Яугилде ауылы. 24.02.1943.

32. Ҡалмурзин Мотаһар Зиннәт улы, Баймаҡ ҡасабаһы. 24.02.1943.
33. Саҡаев Әхмәт Әхмәҙулла улы, Саҡмағош районы Аблай ауылы. 23.02.1943.
34. Зaһиҙуллин Нәбиулла Сәхи улы, Ишембай ҡалаһы Стаханов урамы, 114, кв. 6. 22.02.1943.
35. Кәримов Мәсәлим, Ҡырмыҫҡалы районы. 19.02.1943.
36. Хәбибуллин Миңнулла Хәбибулла улы, Хәйбулла районы Ҡармыш ауылы. 23.02.1943.
37. Абдуллин Әхтәм Әхмәтхужа улы, Ғафури районы Имәндәш ауылы. 21.02.1943.
38. Шайморатов Миңлеғәли Минһаж улы, Ҡырмыҫҡалы районы Биштәкә ауылы. 23.02.1943.
39. Чернов Александр Николаевич, Ҡырмыҫҡалы ҡасабаһы. 22.02.1943.
40. Исхаҡов Әхтәм Исхаҡ улы, Өфө. 23.02.1943.
41. Саҙриев Әҙеһәм Саҙри улы, Туймазы районы Аҙнағол ауылы. 24.02.1943.
42. Дилмөхәмәтов Рәшит Дилмөхәмәт улы, Бәләбәй ҡалаһы, Туҡай урамы. 24.02.1943.

Дошман тылында тәрән рейдта хәрәкәт иткәндә күп документтарҙы яндырырға тура килде, шуға күрә үҙ ваҡытында уларҙың ғаиләләренә аныҡ хәбәр ебәреп булманы.
С.Р. Ҡадиров.

Рейдтан сыҡҡас, дивизияның хәле

Сов. Секретно,
экз. №
ЧЛЕНУ ВОЕННОГО СОВЕТА СТЕПНОГО ВОЕННОГО ОКРУГА
ГЕНЕРАЛ-ЛЕЙТЕНАНТУ тов. МЕХЛИСУ
от заместителя командира по политчаси 16 Гвардейской Кавалерийской Дивизии – гвардии подполковника Назирова М.З.
Р А П О Р Т
В чсоставе 7 Гвардейского Кавалерийского Корпуса находится 16 Гвардейская Кавалерийская Дивизия, история организации этой дивизии Вам известна.
Решением государственного Комитета Обороны от 13.11.41 года Башкирскому Обкому ВКП(б) и Совнаркому был рпазрешен сформировать 112 Башкирскую Кавалерийскую дивизию за счет внутренних ресурсов народного хозяйства Башкирской Республики. Вокруг этого политического документа областной партийной была проделена огромная политическая работа.
Везде и всюду были проведенв митинги, собрании, каждого отобранного бойца обсуждали на собраниях, достоин ли быть он в составе этой дивизии, выделяли самых лучших лошадей. Каждый колхоз, совхоз и предприятие своего выделенного бойца с ног до головы обула, одела во всем новом. Открылись в райцентрах специальные мастерские по изготовки обуви и одежды для Башкирской дивизии. Крупные промышленные предприятия Башкирии за счет дополнительных часов сверх плана изготовили: походные кухни, седлы, уздечки, тачанки и все необходимые для дивизии. В общем, за исключением вооружения, все было обеспечено за счет мобилизации внутренних ресурсов народного хозяйства Башкирии.

Весь партийно-политический аппарат дивизии был скомплектован из числа лучшей части партийно-советского актива Республики.

В составе дивизии было:

Башкир – 89%,

Татар – 7%

и прочей национальности – 4%.

Мне выпала высокая честь. По ходатайству Обкома ВКП(б), ЦК ВКП(б) назначил меня военным комиссаром этой дивизии, освободив от обязанности 1-го секретаря одного крупного промышленного района (Баймакского) Башкирии.

Дивизия с апреля месяца 1942 года надится в составе действующей армии и до настоящего месяца вела непрерывные бои с противником на самых ответственных участках фронта. Первое боевое крещение она получила в период летнего наступления противника в 1942 году в районе Борки, Дролгоруково, Тербуны в составе войск Брянского фронта.

Не смотря на занятия этого района лишь за 4-5 дней до подхода главных сил противника дивизия в жестоких боях показала исключительную стойкость, храбрость и мужество. Не было ни одного случая отступника, изменника Родины и дезертира.

Дивизия бросалась неоднократно на контратаку, нанося огромные потери противнику. Благодаря исключительной стойкости, в этом учаске противник был задержан, ниодного шага не отошли назад, за что приказом командующего войсками Брянского фронта более 100 человек бойцов, командиров и политработников были награждены орденами и медалями Советского Союза.

На участке Тербуны – Касторное дивизия заняла прочную оборону и до последних дней зимнего наступления Красной Армии.

В октябре месяце дивизия была переброшена в состав войск Юго-Западного фронта для участия в зимнем наступлении Красной Армии.

До ноября 1942 года совместно с танковыми частями 5 танковой армии дивизия первым ворвалась в район обороны противника, прорвала ее и все время шла передовым отрядом в направлениях Аблиевская, Чернышки, Морозовск, Тацинск, Усть-Белая Калитва, Ворошиловград, и после в рейде по тылам противника.

За ее стойкость, мужество и храбрость дивизии заслуженно присвоено звание "ГВАРДИЯ" и она была преобразована в 16 Гвардейскую Кавалерийскую дивизию. Все это Вам известно.

Я описал это лишь потому, что за последнее время отношение к этой дивизии со стороны отдельных руководителей резко изменилось и никакой поддержки по существу она не получает, а наоборот, очень часто ущемляются ее интересы. Казалось бы немножко политически грамотным отдельным деятелям Красной Армиии должно было быть понятным существование этой национальной дивизии, которая целиком и полностью себя оправдала и является огромным политическим фактором, особенно в период Великой Отечественной войны, имея ввиду, что она в коннице является единственной и так же не очень много во всей Красной Армии. Этой истины люди не понимают и не хотят понимать.

ФАКТЫ: 1. Для пополнения 7 Гвардейского Кавалерийского Корпуса был переброшен 4-й полный корпус. Из расформированных 6 полков нашей дивизии дали только один полк, в результате дивизия укомплектована:
по людскому составу на 76,3% или нехватает 1319 чел. ;
по конскому составу на 52% или нехватает 2548 голов лошадей когда, как 14 и 15 Гвардейские Кавалерийские Дивизии почти полностью укомплектованы как людскими, так и конским составом.
2. На время рейда по тылам противника наша дивизия пострадала больше других дивизий. Весь полковой обоз и транспорт был уничтожен.
Во время рпаспределения хозяйства 2-х расформированных дивизий нам ничего не досталось. Даже в дивизии нет ни одной легковой машины.
3. В расформированных дивихзиях было немалое количество бойцов башкирской и татарской национальностей, так же не учли и этот принцип.
Сейчас остальные дивизии приступили к сколачиванию подразделений и имеют полнокровные эскадроны и занимаются боевой и политической подготовкой, а мы же ничего не имеем сколоченного за исключением артиллерийско-минометных подразделений полков.
В целях быстрейшего приведения соединения в полнокровное состояние прошу Вас оказать соодействие:
1. Быстрее укомплектовать дивизию людским и конским составом.
2. Если можно будет сохранить ее как национальную то принять меры получить пополнение за счет Башкирской и Татарской национальностей.
Мы до этого пополнения все время получали из Башкирии. Но в данное время из-за ограниченности ресурсов Башкирское правительство дать ничего не может. Поэтому нельзя ли будет из частей Степного Военного Округа всех бойцов, командиров и политработников башкирской и татарской национальностей перебросить в нашу дивизию.
В Туймазинском 9-ом запасном полку, в Башкирии, имеется 1200 человек обученных бойцов башкир и татар призванные из Башкирии. Просил бы Вас поставить вопрос перед генерал-полковником тов. ГОРОДОВИКОВЫМ срочно перебросить их для укомплектования нашей дивизии.
В составе 78 стрелковой дивизии Юго-Западного фронта находится 300 человек...
Фронт командованиеһының милли Башҡорт дивизияһына ни рәүешле ҡарашын белдергән был мөһим документ, үкенескә ҡаршы, ошо урында өҙөлә (дауамы табылманы).

Хаҡиҡәткә тоғролоҡ өсөн

Фашизмды еңеп ҡайтҡан яугирҙәребеҙ данлыҡлы Башҡорт дивизияһының иҫтәлеген мәңгеләштереү йәһәтенән һәр төрлө саралар күрә башлай. Ветерандар араһынан иң беренсе булып Сабир Рәхим улы Ҡадиров яу ҡылысын журналист ҡәләменә алмаштырып, һуғыш тамамланыуҙың икенсе йылында уҡ, йәғни 1946 йылда уның “Волганан Эльбаға саҡлы” тигән очерктар йыйынтығы Башҡортостан китап нәшриәтендә ташҡа баҫылып сыға.
Шул арала дивизия ветерандарының теңкәһенә тейә башлаған бер хөсөттө алып ташлау зарураты ла тыуа, сөнки бәғзе бер көнсөлйәндәр бер үҙенән 78 Советтар Союзы Геройы биргән милли дивизияның нисек тә бәҫен төшөрөргә һәм уның

беренсе командирына үлгәндән һуң Герой исемен бирҙертмәҫкә тырышалар һәм, сталинизм заманында һуғышта хәбәрһеҙ юғалғандарҙың шик аҫтына алыныуынан – хатта һатлыҡйәнлеккә тиңләнеүенән мәкерле файҙаланып, рейд ваҡытында фашистар тылында һәләк булып ятып ҡалған генерал М.М. Шайморатов тураһында, ул үлмәгән, ә фашистарға әсир төшкән, тип ялған хәбәр тараталар (әсирлектән ҡайтҡан һәм Шайморатовтың үлеме өсөн ғәйепле элекке генерал-лейтенант Борисов, үҙ абруйын күпертергә маташыусы яҡташыбыҙ генерал-майор Ғәлиев, дивизияның элекке комиссары М. Нәзиров һ.б.). Ошо сетерекле хәлдәрҙе мин С.Р. Ҡадировтан ентекле төпсөнә һәм ул миңә береһен дә йәшермәй һөйләр ине. 1983 йылдың 18 мартында булған шундай әңгәмәләребеҙҙең береһен блокнотыма эйәрә яҙып барғайным (С.Р. Ҡадиров һөйләй):

Һуғыш бөткәс, элекке генерал-лейтенант Борисов Башобкомға хат яҙҙы Шайморатов өҫтөнән: “Большие потери при выходе были по вине Шаймуратова, -- не выполнил моего приказа”.

Мин опровергать итеп Башобкомға яҙҙым: “Борисов яла яға Шайморатовҡа, ул һәләкәт өсөн Борисов ғәйепле булды”, -- тип.

Борисов тағы Башобкомға яҙҙы (үҙ хатаһын таныл): “Мин пленда булдым, шуға күрә, үҙемде аҡлар өсөн, Шайморатов өҫтөнән шулай яҙырға мәжбүр булдым”…

Шунан һуң обком, хөкүмәтебеҙ документтар әҙерләне – ходатайство Геройлыҡҡа посменртно. Ҡул ҡуйғандар: Ваһапов, Ибраһимов, Ураҙбаев (предсовмин). Но письмо было задержано – Шайморатов пленда ҡалды тип ялалы хәбәр тараттылар: элекке комиссар дивизии Нәзиров, чтобы прикрыть свои недостойные поступки: находясь в Уфе с ноября 1942 года по 26 марта 1943 года разбазаривали большое количество подарков, собранные от народа для личного состава дивизии. Во время рейда Шаймуратов назвал его “башкирским феодалом”. Назиров был тогда разжалован со звания старшего батальонного комиссара на старшего лейтенанта и отправлен в резерв. Это сделал Шаймуратов, на это Назиров обиделся. Присоединился Назирову генерал-майор Галиев, чтобы самому остаться единственным генералом из башкир. (Потом он за какие-то грехи был осужден, посажен в тюрьму). Башҡортостанда Шайморатов тураһында әйбер яҙыу тыйылды ул осорҙа. Светлое имя Шаймуратова хотели похоронить, чтобы не остался в истории.

Я сам был очевидцем его героической гибели, поэтому возмутился и обратился в Президиум Верховного Совета БАССР лично товарищу Нигматжанову (Председателю Президиума) об розыске останков Шаймуратова. Он поддержал, создал комиссию из четырех человек: председатель—я как депутат Верховного Совета БАССР, члены профессор судебно-медицинской экспертизы Кузнецов, от областных газет Габитов Калимулла (ныне живет в г. Октябрьске) и фотокорреспондент ТАСС Якупов Лутфи, ибо они были в дивизии, знали Шаймуратова. В пути мы заехали в Москву, остановились на двое суток и я, пользуясь депутатским правом и мандатом Верховного Совета БАССР, обратился в отдел кадров Генштаба РККА (начальник отдела кадров – дважды Герой Советского Союза генерал-полковник Голиков, бывший командир 174-ой стрелковой дивизии, который формировался в г. Стерлитамаке. Он принял и я доложил, куда мы едем. Он приветствовал и заявил, окажем помощь, Шаймуратова знаем, он заслужил

такого внимания. Спасибо Башкирскому правительству за заботу о своем герое. Какая потребуется помощь – обратитесь ко мне.
Я попросил личное дело Шаймуратова, чтобы списать нужные нам данные. Генерал поручил одному капитану штаба, чтобы он привез из Госархива Крпасной Армии личное дело Шаймуратова и ознакомил делом меня. Поручил меня покормить и сказал зайти завтра утром. На другой день утром в 10.00 Московской времени я пришел в комендатуру, капитан меня ждал в проходной комнате. Оставил свои документы в комендатуре и с капитаном вошли во второй этаж Генштаба. Посадили меня в свободную комнату и принесли личное дело Шаймуратова. Я списал что мне нужно из его личной анкеты. А вынести личного дела не разрешалось. Я поблагодарил товарищей и ушел. Все эти данные помогли нам при раскрытии останков Шаймуратова…

Акт

Мы, члены Правительственной комиссии по вяснению обстоятельств смерти и установлению места погребения и личности командира 112-й Башкирской – 16 гвардейской кавалерийской дивизии генерал-майора М.М. Шаймуратова в лице председателя комиссии депутата Верховного Совета БАССР Кадирова Сабира Рахимовича и членов в лице заслуженного деятеля науки БАССР республиканский судебный медицинской эксперт министерства Здравоохранения БАССР проф. В.Г. Кузнецова и зам. ответственного секретаря редакции газеты "Кызыл тан" Габитова К.Х., фотокора ТАСС Якубова Л.И., изучив прилагаемый при сем материал об обстоятельстве смерти, места погребения и опознания личности генерал-майора М.М. Шаймуратова, комиссия приходит к следующему заключению:

1. Командир 112 Башкирской – 16 гвардейской кавалерийской дивизии генерал-майор М.М. Шаймуратов героически погиб в боях за Родину при выходе из Дебальцевского района между 8 – 9-ю часами утра 23 февраля 1943 года в балке, проходящей один *км* южнее поселка Штеровка и 4 *км* севернее нас. Пункта Ивановка Ивановского района Ворошиловградской области.
2. Труп генерал-майора Шаймуратова, как труп неизвестного генерал-майора впервые был обнаружен немецкими патрулями и в конце февраля месяца 1943 г. , по распоряжению немцев, погребен рабочими завода им. Петровского в балке против Романовой скалы.
3. После осбобождения Донбасса труп генерала неизвестного звания вместе с трупами других офицеров, павших в этом бою, в конце октября 1943 года был перенесен и похоронен с гражданскими почестями в нижнем саду пос. Штеровка.
4. В лице похороненных в поселке Штеровка генерала неизвестного звания личность генерала Шаймуратова установлена многочисленными свидетельскими показаниями и опознанием его по групповым фотокарточкам и портретам.
5. Данные эксгумации трупа не противоречат свидетельским показаниям и с вероятностью определяют личность генерал-майора Шаймуратова.
6. Таким образом, погибший в районе пос. Штеровка и погребенный в том же поселке труп генерала неизвестного звания (генерала в подлинности) является генерал-майором М.М. Шаймуратовым.

Установив личность генерал-майора М.М. Шаймуратова, его останки похоронены комиссией 20 октября 1948 года в расположении воинской части № 5273-В при заводе им. Петровского Ворошиловградской области Ивановского района.
Председатель комиссии **Кадиров.**
Члены комиссии: **Кузнецов, Габитов, Якубов.**
19.10.1948.

Һүр. 10. М.М. Шайморатовты яңынан ерләгәс.

Л. Яҡубов фотоһы

Ошо эштәр барышында, өҫтә әйтелгәндәрҙән тыш, БАССР Верховный Советы Президиумы Председателе Н. Ниғмәтжанов рейдта ҡатнашып иҫән ҡайтҡан ветерандароҙың байтағының 1943 йыл 23 февраль трагедияһы тураһындағы шаһәҙәтнамәләрен йыя. Ошоларға таянып, Миңлеғәли Минһаж улы Шайморатовҡа үлгәндән һуң Советтар Союзы Геройы исемен биреүҙе һораған, ВКП(б) өлкә комитеты секретаре С. Ваһапов һәм БАССР Верховный Советы Президиумы Председателе Н. Ниғмәтжановтар ҡултамғалаған һәм 1948 йылдың 11 декабре менән даталанған юллама СССР Министрҙар Советы Председателе И.В. Сталинға атҡарыла (был документтар йыйылмаһын ҡарағыҙ: Йыхат Султанов. Обстоятельства гибели генерала М.М. Шаймуратова по свидетельствам очевидцев. – "Ватандаш" 10/1999 журналының 140-150-нсе биттәре), әммә юллауҙары туҡталып ҡала, сөнки был эшкә ҡаршылар үҙ хөсөттәрен Мәскәүгә еткерәләр…

Дөрөҫөн әйтергә кәрәк: дивизияның данлы тарихын йәш быуынға еткереү өсөн янып-көйөп йөрөгән, ҡулдарына ҡәләм алып эшкә тотонған ветерандарҙың үҙҙәренең араһында ла шөҡәтһеҙ интригалар, ҡарыулашыуҙар тыуып ҡына тора әленән-әле. Бигерәк тә иҫтәлектәрен ташҡа баҫтыртҡан әһелдәрҙең үҙ хаталарын танымауҙары, ҡоралдаштары тәнҡитләгәндә "һеркәһе һыу күтәрмәүе" арҡаһында болара хәл.

Иҫкәртеп үтеү кәрәк: дивизия ветераны яҙыусы Әхтәм Ихсан 1943 йылда дивизия гәзитенең редакторы яҙыусы Али Ҡарнайҙың һәләк булыуында ғәйепләнә лә, дивизияның махсус бүлеге тикшергәс, партия комиссияһында (ДПК) хөкөм ителеп, штрафротаға оҙатыла һәм һуғыштан һуң *Исаев Александр Сергеевич* булып әйләнеп ҡайта (документтар бар). Сәғит Әлибаевты иһә шул уҡ йылда 58-енсе полкта хеҙмәт иткәнендә милләтселектә ғәйепләйҙәр ҙә, дивизиянан алып, армия резервына ебәрәләр, шул ыңғайҙан (ошо милләтселеккә юл ҡуйғаны өсөн) С.Р. Ҡадировҡа ла

партия шелтәһе эләгә. Шөкәтһеҙ шул күрмештәре өсөндөр инде, был икәү С.Р. Ҡадировҡа асыу тота, ә был иһә уларҙың һуғыштан һуңғы хөсөттәрендә сағыла. Бәлки, тыныс ҡына ла йәшәрҙәр ине, ләкин тынғыһыҙ С.Р. Ҡадировтың тыныс ҡына тик ятмауы һис тә тынғылыҡ бирмәй шул. Бигерәк тә дивизия яҙмышындағы иң көсөргәнешле, һәләкәтле мәлдәрендә кемдең ҡайҙа ҡалыуы тураһында йәшермәй ысҡындырыуҙары. Һәм бына “Советская Башкирия” гәзитенең 1964 йыл 23 февраль һанында Т. Кусимов, С. Әлибаев, З. Сираев имзалары менән С.Р. Ҡадировты ғәйепләүсе “Дорогой побед” тигән мәҡәлә сыға: “…в статьях т. Кадырова “Когда отрезали путь врагу” (“Ҡызыл таң” от 31 января 1963 года) и “Где ты мой молодой однополчанин?” (“Совет Башҡортостаны” от 17 февраля 1963 года) допущены ошибки в освещении боевой деятельности 112 Башкирской кавалерийской дивизии в период боев по окружению и уничтожению группировки немецко-фашистских войск на Волге.

Утверждение т. Кадырова о том, что 112 дивизия в составе 8-го кавалерийского корпуса совершила с 4-го по 8-го декабря 1942 года глубокий 335 километровый рейд в тыл врага, является ошибкой”. Улар бында ***дошман тылына рейд*** һүҙенә генә бәйләнә.

Ләкин уйлап ҡарайыҡ: ысынлап та “ошибка”мы икән был? “Сит ил һүҙҙәре һүҙлеге”нән: “Рейд – набег, налет подвижных (кавалерийских, танковых, механизированных) воинских частей в ***тыл противника*** для действий на его коммуникациях, разрушения военных объектов и т.д.” Ҡайһылай ҙа хаҡлы яҙған икән дә “ошибка”лы С.Р. Ҡадиров – ысынлап та ***дошман тылына*** һәм 335 кенә түгел, ә ***360 километрлы*** тәрән рейд булған икән шул, Г.А. Белов китабын уҡығыҙ: “В то время у нас еще не было опыта ***прорыва фронта*** на узком участке и ***ввода в него*** подвижных соединений. По плану армии танковые и кавалерийские корпуса должны были ***вводиться*** на второй день операции, ***когда пехота сделает “ворота”.*** Однако командуюший 5-ой танковой армией генерал-лейтенант П.Л. Романенко сделал это в первый же день операции… подвижные соединения вышли на оперативный простор ***по тылам противника…***

После войны стало известно, что Гитлер приказал отдать под суд командира 48-го корпуса генерала Гейма за ***пропуск*** советских танковых и кавалерийских корпусов ***в оперативную глубину немецких армий.*** Суд приговорил Гейма к смертной казни…

…Тыловые органы армии не успели создать баз материального снабжения, а станция снабжения находилась ***на расстоянии 360 километров от передовых частей”*** (44, 48, 55-енсе биттәр). Күренеп тора: ике автор тарафынан наҙан яҙылған мәҡәләгә яугир генерал, моғайын, уҡып та тормай ҡул ҡуйған… Быны унын, йылдар үткәс, С.Р. Ҡадировҡа ҡарата әйткән ысын һүҙҙәре дөрөҫләй.

“Это было в 1979 году, -- тип башлана бер иҫтәлек. – Тогда я работал управляющим конторы “Росбакалея” Минторга РСФСР, членом коллегии Минторга Башкортостана.

По согласованию Советом Министров БАССР организовывали ярмарки по заключению договоров продажи продовольственных товаров всем торгующим организациям республики. Проводить эту государственную мероприятию арендовали зал у руководства Башвоенкомата.

Однажды я зашел в столовой комнату для гостей чтобы пообедать. Там я лоб в лоб встретился с генералом Героем Советского Союза Кусимовым. Мы с ним встретились и здоровались с рукопожатием. Он уже меня знал, но не знал что я племянник Сабира Рахимовича Кадырова. И я ему об этом сказал. Он с удовольствием слушал меня и сказал: ***Кадыров очень грамотный офицер.*** У него на столе был полный стакан водки, потом залпом выпил и закусил один стакан сметаной...
Рев Кадыров, ветеран труда. 2005 год.

Кусимов ауыҙынан күсенгән һүҙ – алтын бәрәбәрендәлер, моғайын.
Билдәле булыуынса, Башҡорт атлы дивизияһында төрлө ваҡытта яҙыусыларыбыҙҙан, 1943 йылда үлеп ҡалған Али Ҡарнайҙан тыш, Әхтәм Ихсан, Шакир Насиров, Кирәй Мәргән, Ҡадир Даян хеҙмәт итеп ҡайта. Йылдар үтә тора, ләкин улар ҡәләменән дивизия тураһында ҡулға тоторҙай күләмле әҫәр тыумай. Быныӊ сәбәбе, әҙиптәребеҙҙеӊ һәлкәүлегенән тыш, моғайын, ул осорҙа дивизия командиры хаҡындағы ҡара ялалы хәбәрҙеӊ тамырланыуы арҡаһында булғандыр. Дөрөҫөн әйтергә кәрәк, Әхтәм Ихсан башлап боҙа был тынлыҡты – 1960 йылда уныӊ ҡаһарман атаевсыларға бағышланған "Утыҙ ыласын" поэмаһы һәм төрлө шиғырҙары бергә айырым китап булып баҫылып сыға. Бер үк осорҙа "Саҡматояҡ аттарҙа" тигән документаль повесе һәм "Шайморатов генерал" исемле пьесаһы өҫтөндә эшләй. Ләкин һуӊғыһыныӊ яҙмышы, ҡулъяҙма көйөнсә үк, әҙәбиәттәге бер йәмһеҙ күренеш арҡаһында хәйерһеҙ булып сыға. Эш шунда: бәғзеләрҙә әүәлдән үк бер-береӊдән "сәлдереү" шөғөлө булған, мәҫәлән, күренекле фольклорсы һәм драматург Мөхәммәтша Буранғолов 50-нсе йылдарҙа Башҡортостан Яҙыусылар берлегенә рәсми күндергән ғаризаһында зарлана: "Пьесы, которые я ставил к постановке в театрах или к выпуску в печати издательством, присваивались и выпускались отдельными проходимцами. Например, в 1918 году я сдал директору Казанского театра А. Карееву рукопись пьесы "Ашкадар" и "Зангяр шаль" (архивта шул исемле ике шаршаулы әҫәргә М. Буранғоловтыӊ авторлығы хаҡында документ бар. – Й.С.). Пьесу "Зангяр шаль" присвоил Карим Тинчурин, который тогда работал вместе с Кареевым.
В 1919 году моя пьеса "Карагул", переданная мною "руководителю" Башкирского театра Муртазину, присвоил Д. Юлтый, изменив отдельные места. Он же в 1927 году присвоил другую мою пьесу "Ялан-Яркей", сдал в Башгостеатр. Мою пьесу "Башкурт туе" присвоил М. Муртазин. О двух последних я подал в суд. Суд признал меня автором пьесы "Ялан-Яркей" и признал соавтором пьесы "Башкурт туе" вместе с Муртазиным. Решение суда о соавторстве было незаконно. Это получилось потому, что тогдашние такие авторитеты, как Д. Юлтый и Губей Давлетшин пошли в суд в качестве свидетелей на стороне Муртазина и судьи тоже были сторонниками Муртазина"... (Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтыныӊ ғилми архивы, ф. 25, оп. 1, ед. хр. 58).
Үкенескә ҡаршы, Әхтәм Ихсан пьесаһы менән дә шундай уҡ хәл ҡабатлана. Машинкала баҫтырылған ҡулъяҙманы драматург Ибраһим Абдуллин уҡырға ала ла, бит ситтәренә үҙ фекерҙәрен сыйғыслап, кире ҡайтара. Дивизияла Әхтәм Ихсан менән бергә хеҙмәт иткән Шакир Насировты үҙенә авторҙаш итеп, "Шайморатов генерал"ды Башҡорт драмтеатр сәхнәһендә ҡуйҙыртып өлгөрә, ләкин эше судҡа

китеп, суд пьесаны Әхтәм Ихсандыҡы итеп таный. Һөҙөмтәлә ғауғалы әҫәр сәхнәнән төшөп ҡала, матбуғатҡа ла юлы ябыла, ә “үҙһүҙле” авторының дошмандары ҡәләмдәштәре араһында ла арта...
1966 йылда Башҡортостан китап нәшриәтендә был әҙиптең “Саҡматояҡ аттарҙа” тигән повесе донъя күрә. Баштан-аяҡ дивизия яугирҙәренә бағышланып, профессионал яҙыусы ҡәләменән сыҡҡан документаль-художестволы әҫәр, әлбиттә, ошо өлкәләге бушлыҡты тултыра барыусы ыңғай күренеш була, ләкин авторҙың художестволы фәстереүҙәре документаллекте күмеп китеп, ысынбарлыҡты үҙҙәре күреп яҡшы белгән айырым яугирҙәрҙең ризаһыҙлығына осрай. Бигерәк тә С. Ҡадиров ҡәнәғәтһеҙлеген йәшермәй, өҫтәүенә, Али Ҡарнай менән булған шомло ваҡиғаны ла оноттортмай. Был иһә повесть авторының ҡанын ҡыҙҙыра һәм ул ҡайһы бер ветерандарҙы С.Р. Ҡадировтың “уйҙырмаларын” фашларға аяҡландыра.
1969 йылдың 8 июлендә мин “Ағиҙел” журналы редакцияһында эшләй башлағайным. Үҙемдән алда булып киткән хеҙмәткәрҙең өҫтәл тумбаһының иң аҫтына “ҡаҡлап” ҡалдырған әйберҙәрен аҡтарып сығарғас, машинкала баҫылғандың икенсеме, өсөнсөмө данаһына күҙем төштө -- Башҡорт атлы дивизияһының яугир юлы тураһында уның ветераны С.Р. Ҡадировтың фронт яҙмалары ине был. Шунда уҡ уҡый башланым да өйөмә алып ҡайтып тамамлап ҡуйҙым. Әҙәби яҡтан сейле-бешеле булып, әҙип ҡәләме ярҙамына ла мохтажлығы күренеп торһа ла, дивизия һәм уның шанлы яугирҙәре тураһындағы әлегәсә булмаған ысын документаль әйбер ине был. Фекеремде журналдың баш редакторы Ә.М. Мирзаһитовҡа белдергәс, яҙмаларҙың авторын саҡыртып килтерҙе лә мин әҫәрҙе “кондицияға еткереү” өсөн ныҡышмалы эш башлап ебәрҙем, һөҙөмтәлә ул “Ағиҙел”дең 1972 йылғы бишенсе һанында “Уттар, һыуҙар аша” исеме аҫтында донъя күрҙе һәм бик күп уҡыусыларыбыҙҙың, шул иҫәптән дивизия ветерандарының ихтирамын яуланы. Әҫәрҙе китап итеп донъяға сығарышыуҙа ла ең һыҙғанып ярҙам иттем; әҙерләнгән тексты дивизия ветерандарынан уҡытып алдыҡ:

Протокол.

16-нсы гвардия дивизияһы ветерандар Советы ағзаларының нәүбәттәге ултырышы: ултырышта ветерандар Советы председателе гв. полковнигы С. Хәбиров, гв. майоры А. Кәримов, гв. подполковнигы С. Мотиғуллин, подполковник Р. Мостафин, өлкән лейтенант М. Усманов, старшина Л. Сиразитдинов, өлкән лейтенант А. Дәүләтбаев, подполковник Баһауитдинов, гв. майоры С. Ҡадировтар ҡатнашты.

Көн тәртибе:

1. Дивизия политотделы начальнигының элекке урынбаҫары гв. майоры С.Р. Ҡадировтың “Уттар, һыуҙар аша” тигән ҡулъяҙмаһын уҡып тикшереү.

1. Үҙенең ҡулъяҙмаһын гв. майоры С. Ҡадиров уҡып сыға, һуңғы һүҙ итеп былай ти: мин был әҫәремдә дивизия тарихындағы иң мөһим, хәл иткес һуыштарға туҡталдым, сөнки улар хаҡында ошоға тиклем бер кем дә тулы иҫтәлеге менән яҙғаны юҡ әле. Шулар хисабынан – дошман тылында 17 көн, туғандаш Польшаны дошмандарҙан азат итеүҙә башҡорт халҡының ярҙамы; дошманды үҙ өңөндә дөмөктөрөү һәм Эльбала союздаш армиялар менән осрашыу. Әлбиттә, быларҙы яҙыр өсөн авторҙың унда үҙе ҡатнашыуы талап ителә, минең үҙемә юғарылағы хәл иткес һуғыштарҙа актив ҡатнашырға тура килде. Ул көндәрҙә алып барған көндәлегем был әҫәргә нигеҙ булды.

Бынан тыш, республикабыҙҙа имеш Шайморатов генерал үлмәгән, пленда икән һ.б. шундай ялған версиялар йәшәп килә. Шуларҙы документаль хәлдә юҡҡа сығарыу – фаш итеү ниәте менән үҙем Башҡортостан Верховный Советы исеменән төҙөлгән комиссия етәксеһе булыуым менән уның ҡайҙа һәм нисек һәләк булыуын дөрөҫләп яҙам да инде. Был беҙҙең яҙыусыларыбыҙ, тарихсыларыбыҙ һәм йәш быуын өсөн дә ифрат та мөһим эш булып тора. Эльбала Америка армияһы менән осрашыуҙа ҡатнашыу, унда ҡоролған монументты урынлаштырыуҙа актив ҡатнаштым (медалем – документым бар), был хәл быға тиклем бер кем тарафынан да яҙылып матбуғатта сыҡҡаны юҡ әле. Былар халҡыбыҙҙың Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында күрһәткән батырлыҡтарын асыҡлауҙа, тулылатыуҙа, әлбиттә, тәғәйен ярҙам буласаҡ. Быларҙы "Ағиҙел" журналы баҫып сығарғандан биреле мин дивизия ветерандарынан бик күп маҡтаулы хаттар алдым. Улар бына – 83 хат. Уларҙа күрһәтелгән ҡайбер дөрөҫ фекерҙәрҙе, факттарҙы иҫәпкә алдым.

Фекер алышыуҙар:

М. Усманов. С.Р. Ҡадиров юғарыла яҙылған көслө һуғыштарҙа актив ҡатнашты, дошман тылында генерал Шайморатов менән өҙлөкһөҙ бергә булды. Һуғыштан һуң уның кәүҙәһен эҙләп тапты, ҙурлап күмеп ҡайтты... Ул ваҡытта С.Р. Ҡадиров политотдел начальнигы вазифаһын үтәй ине. Дивизияның иң ауыр көндәре – дошман тылында булды, былдағы ауырлыҡтарҙы, беҙҙең батырлыҡтарҙы бик дөрөҫ һәм тулы яҙған, был хәлде унан башҡа берәү ҙә тулы яҙасаҡ түгел. Мин С.Р. Ҡадировтың ҡулъяҙмаларының китап итеп баҫылыуын һорар инем.

С. Мотиғуллин. Мин үҙем был һуғыштарҙа актив ҡатнаштым, дошман тылында булдым. Гв. майоры С.Р. Ҡадиров был ауыр көндәрҙе бик дөрөҫ, белеп һәм тулы яҙа, был һуғыштарҙа ҡатнашҡан бөтә һалдаттар, офицерҙар ҙа, әлбиттә, күрһәтелеп бөтмәгән; бәлки уларҙың батырлығын яҙып бөтөрөү мөмкин дә түгелдер. Мин иптәш Усманов фекеренә ҡушылам.

Сиразитдинов. Мин майор Ҡадировтың хәтере көслөлөгөнә аптырап ултырам. Нисек ул бынан 33 йыл элек булған хәлдәрҙе тулы һәм дөрөҫ яҙа алған! Беҙҙең Одер буйында тәүлектәр буйына ял итмәй ҡорал ташығаныбыҙҙы ла онотмаған. Был китап баҫылып сыҡһа, мин, дивизияның ветераны булараҡ, бик шат булыр инем.

А. Дәүләтбаев. Быға тиклем яҙылған китап, статьяларҙа күберәген генералдар, өлкән офицерҙар хаҡында ғына була ине, бына был "Уттар, һыуҙар аша" тигән ҡулъяҙма һалдаттарҙы, интендаттарҙы, врачтарҙың хеҙмәтен дә тулы яҡтырта. Мин дә иптәштәр фекеренә ҡушылам.

А. Кәримов. Был яҙма телефон справочнигы шикелле дөрөҫ. Мин гв. майоры С.Р. Ҡадировҡа быны яҙғаны өсөн рәхмәт белдерәм. Был китап булып ташҡа баҫылып сыҡһа, халҡыбыҙҙың тарихын ныҡ байытыр ине.

С. Хәбиров. Уларҙы яҙғанда иптәш Ҡадиров һәр ваҡыт минең менән кәңәшләште. Беҙ уның менән оператив карталар өҫтөндә көндәр буйына һөйләшеп ултыра инек. Яҙылғандар документаль дөрөҫ, уның тырышлығы өсөн беҙ рәхмәт белдерәбеҙ.

Ҡарар: Беҙ, 16-нсы гвардия Башҡорт атлы дивизия ветерандары, бер тауыштан С.Р. Ҡадировтың "Уттар, һыуҙар аша" исемле ҡулъяҙмаһын Башгосиздат тарафынан китап итеп баҫылыуын һорайбыҙ. Был йәш быуынды патриотик һәм интернациональ рухта тәрбиәләүгә бик ҙур ярҙам булыр ине. Ҡултамғалар:

Ветарандар Советы председателе отставкалағы гв. полковнигы

С. Хәбиров.
Протоколды яҙыусы отставкалағы гв. майоры **А. Кәримов.**

Ләкин С.Р. Ҡадировҡа теш ҡайраған бер килке ҡоралдаштары итәк аҫтынан ут йөрөтөп, башҡа өсәүҙең ҡултамғаһы артына ышыҡланып, партия өлкә комитетына шикәйәтнамә тапшырҙылар; партия ҡарыуы, әлбиттә, тәү сиратта “Ағиҙел”селәргә төштө һәм беҙ яуап ҡайтарҙыҡ:

“КПСС-тың башҡортостан Өлкә комитеты пропаганда һәм агитация бүлеге мөдире У.Н. Бакиров иптәшкә.
Һеҙҙең 1974 йылдың 8 майында редакцияға ебәргән хатығыҙға (уға М.М. Халиҡов, М.С. Ильясов, Н.Я. Дауытов иптәштәрҙең “С Ҡадировтың нәүбәттәге уйҙырмалары” тигән 43 битлек жалобаһы ла теркәлгән) ҡарата түбәндәгеләрҙе хәбәр итәбеҙ.
Әле әйтелгән жалобала 112-нсе Башҡорт дивизияһы ветераны С.Р. Ҡадировтың “Ағиҙел”дең 1972 йылғы 5-енсе һанында донъя күргән “Уттар-һыуҙар аша” исемле фронт яҙмалары тәнҡит күҙлегенән ҡарап анализланған, авторға күп кенә үпкә һәм ғәйепләү һүҙҙәре белдерелгән. Редакция тарафынан былар барыһы ла иғтибарға алынды һәм ихлас тикшерелде.
“Уттар-һыуҙар аша” фронт яҙмаларында, ул ваҡиғаларға өс тиҫтәгә яҡын йыл үткәс яҙылғанлыҡтан, автор тарафынан, ысынлап та, рейд эпизодтарына ҡағылышлы ҡай бер кескәй деталдәрҙә, календарь-көн иҫәптәрендә һәм төбәктең географик атамаларында, айырым кешеләрҙең исем-фамилияларында, уларҙың тыуған һәм үлгән йылдарында һ.б. теүәлһеҙлектәргә юл ҡуйылған икән. Иҫтәлек һымаҡ ауыр жанрҙа шулай булыу ихтималлығын алдан уҡ күҙ уңында тотоп, “Ағиҙел”дә әҫәрҙең тәүге юлдарында уҡ автор тарафынан уҡыусыларына өндәшелеп, үҙҙәренең фекерҙәрен һәм төҙәтмәләрен яҙып ебәреп, хикәйәләнгән ваҡиғаларҙың теүәллегенә ирешеүҙә ярҙам күрһәтеүҙәрен һорап мөрәжәғәт ителгәйне. Шул иҫәптән был өс иптәштең ғәҙел тәнҡит өлөшө лә әҫәрҙе китап итеп сығарыу алдынан авторға файҙалы буласаҡ.
Шуның менән бергә, “Ағиҙел”дә баҫылған фронт яҙмаларының дөрөҫлөгө ул өс иптәш тарафынан тулыһынса инҡар ителеп, “уйҙырмалар” тип аталыуы менән редакция килешә алмай. Дивизияның тәрән дошман тылына героик рейды тураһындағы әлегәсә билдәле булған был берҙән-бер яҙма-иҫтәлекте ташҡа баҫып сығарырҙан алда редакция ҡулъяҙманы рейдта ҡатнашҡан ветерандар комиссияһының тикшереп хуплау протоколы менән дә танышҡайны; бынан тыш, редакция хеҙмәткәрҙәре, хәлдәренән килгәнсә, архивта һәм әҙәбиәттә тейешле тикшеренеүҙәр башҡарҙы, ә икеһе (Й.Ә. Солтанов, Р.Н. Низамов) шул дәһшәтле 1943 йылдың февралендә туғандаш Украина ерендә (Донбасс) дивизиябыҙ хәрәкәт иткән урындарҙа булып ҡайтты. Әҫәр баҫылып сыҡҡандан һуң, журнал уҡыусыларҙың, шул иҫәптән рейдта ҡатнашыусы ветерандарҙың да, хуплау хаттары күп килде. Әйтелгәндәрҙең барыһына нигеҙләнеп, С.Р. Ҡадиров иптәштең “Ағиҙел” баҫып сығарған “Уттар-һыуҙар аша” тигән фронт яҙмаларының, үрҙә аталған ваҡ етешһеҙлектәре булһа ла, рейд барышын дөйөм алғанда дөрөҫ яҡтыртыусы һәм әлегәсә берҙән-бер иҫтәлек икәненә ышанабыҙ. Үкенескә ҡаршы, шуны шиккә алыусы шикәйәтнамә (жалоба) авторҙарының — М.М. Халиҡов, М.С. Ильясов һәм

Н.Я. Дауытовтарҙың үҙ намыҫтарына үҙҙәре тоғро булмауҙарын, коммунистик принципиаллекте юғалтыуҙарын әйтергә тура килә. Сөнки улар әҫәр донъя күргәндән һуң редакцияға үҙ ҡулдары менән яҙып ебәргән хаттарында С.Р. Ҡадировтың фронт яҙмаларының дөрөҫлөгө, ифрат та кәрәклеге, үҙҙәре өсөн ҡиммәт булыуы тураһында С.Р. Ҡадировҡа рәхмәттәр аша белдерәләр. Был иһә Һеҙ беҙгә оҙатҡан документтың ысын күңелдән төҙөлөүен, дөрөҫлөгөн шик аҫтына ҡуя.
Баш редактор: Р. Низамов".

Ҡырҡ өс битлек шикәйәтнамә менән, әлбиттә, фронт яҙмаларының авторын да таныштырҙыҡ һәм ул рәсми рәүештә беҙгә бына нәмәләр яҙып бирҙе:

"Аңлатма, "Ағиҙел" журналы редакцияһына.

Һеҙҙең һорау буйынса, түбәндәгеләрҙе белдерәм.
"Ағиҙел" журналының 1972 йыл май айы һанында "Уттар-һыуҙар аша" тигән иҫтәлектәрем баҫылып сыҡҡайны. Уға рейдта булған сержанттарҙан М.С. Ильясов, Н.Я. Дауытов һәм лейтенант М.М. Халиҡов иптәштәр үҙ фекерҙәрен әйтеп рецензия яҙғандар. Был бик урынлы, сөнки мин үҙ иҫтәлегемдең башында уҡ был хаҡта: "Утыҙға яҡын йыл үткән, рейдҡа ҡағылышлы штаб материалдары үҙ ваҡытында яндырылған. Күп иптәштәр ул ут эсенән сыға алмай батырҙарса һәләк булдылар. Шуға күрә үҙ кәңәштәрегеҙ, хәтерегеҙҙә һаҡланған факттар менән миңә, рейд тарихын тулыраҡ төҙөү өсөн, ярҙам итһәгеҙ ине", тип мөрәжәғәт иткәйнем. Был саҡырыуға бөгөнгө көндә рейдта ҡатнашҡан 54 иптәш мин яҙғандарҙы ысын күңелдән дөрөҫләп, тулы һәм асыҡ хат яҙып ебәрҙеләр. Улар үҙ хаттарында минең иҫтәлекте бик күп яңы факттар менән байыттылар, шуның өсөн уларға ысын күңелдән рәхмәт.
Ә юғарыла әйтеп үтелгән иптәштәрҙең рецензияһын уҡып сыҡҡас, шуны әйтке килә: ул рейд хаҡында бер төрлө лә белеме булмаған, унда ҡатнашмаған кеше тарафынан тик ниндәй ҙә булһа асыуын ҡандырыу, үс алыу ниәте менән яҙылған, тиәһе килә. Сөнки аҡты ҡара тип яҙмаҫтар ине. Шул уҡ ваҡытта рецензия яҙыусының хәрби белеме лә бик түбән икәне асыҡ күренеп тора. Быны таш шулайлығын иҫбатлау өсөн, түбәндәге факттарҙы килтерәм.
1. Рецензияның авторҙары: "Ҡадиров ниңәлер 58-енсе полк командиры Кусимов хаҡында бер һүҙ ҙә яҙмай", — тиҙәр. Рейд алдынан (1942 йылдың ноябренән алып 1943 йылдың 25 мартына тиклем) Кусимов дивизияла булманы. Уның урынына килгән капитан Иҙрисов та 1943 йылдың февраль баштарында уҡ яраланып дивизиянан китте. Полк комиссары С. Әлибаев "һалҡын тейҙереп" тылға күсте. Шулай итеп, 58-енсе полк "хужа"лары рейдҡа инеү алдынан таралышып бөттөләр. Икенсенән, рейдта дивизия частәре номер менән йөрөтөлмәнеләр. Полк урынына — "хужалыҡ". Рейдҡа беҙ ни бары сабельниктарҙан — ике хужалыҡ (беренсеһе Фондеранцев хужалығы, икенсеһе Захаров хужалығы) һәм артдивизион (С.Х. Хәбиров хужалығы) менән индек. 58-енсе полк яугирҙәрен ошо хужалыҡтарға бүлеп бирҙек. Тимәк, рейдта 58-енсе полк айырым булып хәрәкәт итмәне.
2. "Һалдат һәм командирҙарҙы Ҡадиров гвардиясылар тип атамай".
Был ысынлап та дөрөҫ, сөнки беҙгә гвардия исеме тик 1943 йылдың 14 февралендә генә, Ворошиловградты дошмандан азат иткәс кенә, бирелде.Һәм был хаҡта

күпселек рядовойҙар һәм кесе офицерҙар рейдтан сыҡҡас ҡына белде. Мәҫәлән, дивизияның һуңғы командиры генерал Г.А. Белов үҙенең билдәле китабында: "Вышедшие из рейда полки получили новые номера и стали называться гвардейскими", — тип яҙа (76-нсы бит).

3. "Артиллеристар, минометчиктар ҡылыс һәм автомат менән һуғышмайҙар". — Асыҡтан-асыҡ наҙанлыҡ. Беҙ, атырға снарядтар бөткәс, бер килке пушкаларҙы, хатта "катюша"ларҙы ла шартлаттыҡ. Уларҙың расчеттары сабельниктар менән бергә автомат, ҡылыс һәм гранаталар менән ҡырҙылар дошманды. Хатта артдивизион командиры майор Хәбиров та муйынына автомат аҫты.

"Артиллеристар, ветеринарҙар разведкаға барманылар". — Юҡ һүҙ. Обстановканы белмәү. Өлкән лейтенант Мөғин Нагаев батарея командиры ине. Ләкин Миус йылғаһынан башлап ул һәр ваҡыт алда разведка алып барҙы. Хатта корпустың артиллерия башлығы полковник Голованов үҙе шул разведчиктар менән етәкселек итте. Улар төндә Артемовск ҡасабаһында йоҡлап ятҡан бер батальон фашист танкистарын дөмөктөрҙөләр (ҡулға төшкән танкыларын саперҙарыбыҙ шартлатты).

4. "Беҙ рейдҡа ингәндә Ворошиловградта немецтар юҡ ине". — Был инде оятһыҙлыҡ. "Беҙҙең Донбасста хәрәкәт итеү Ворошиловградты азат итеүҙе тиҙләтте" (Белов, 77-нсе бит).

5 "Тәрән соҡорҙар, урмандар юҡ ине". — Бының дөрөҫ түгеллеген иҫбатлау өсөн, корпус командиры М.Д. Борисовтың мәҡәләһе баҫылған "Твои освободители, Донбасс!" тигән китаптың 35-енсе битен асабыҙ: "Порывистый ветер бросает в лицо комья снега. Открытая донецкая степь перерезана *глубокими балками и оврагами.* Сугробы снега в них достигали несколько метров высоты. Часто пушки, автомашины и повозки приходилось вытаскивать на руках. Эти балки часто окружены *лесами и кустарником*".

6. "Партизандар булманы, дивизия етәкселәре улар һәм урындағы халыҡ менән бәйләнештә булманы". — Был инде рейд хаҡында бер нәмә лә белмәү һәм рейд батырҙарына туранан-тура ҡара яғыу. Әле әйтелгән китаптың 36, 42-нсе биттәрендә генерал Борисов бына нимә ти: "Уже с самого начала рейда корпус постоянно получал поддержку со стороны местных партизан и стихийно возникающих патриотических групп... Навечно останутся в нашей памяти имена командиров партизанских отрядов А. Пискунова, И. Чернявского и их товарищей". Беҙҙең капитан Ҡасимов Хәмзә дошман тылында бүленеп ҡалғайны. Ул партизандарҙың бер бригадаһында комиссар булып хеҙмәт итә. Күп наградалар менән ҡайтты, әле лә иҫән, Өфөлә йәшәй.

7. "Рейдта Ҡадиров яҙған ҙур һуғыштар булманы". — Ҡаты һуғыштарҙа үлеп ҡалған меңләгән батырҙарыбыҙҙы мәсхәрәләү был. Тап ошо хаҡта бит генерал Борисов яҙа: "Ворошиловград противник опоясал тремя мощными оборонительными рубежами, плотно насыщенными войсками. Здесь целый день (8/II) вели упорные бои с 335-ой пехотной дивизией и частями танковой дивизии СС "Рейх" (34-енсе бит).

А.Г. Белов: "За время нахождения в рейде корпус успешно выполнил все возложенные на него задачи. Он нанес значительный урон 62-ой, 164-ой пехотным и 17-ой танковым дивизиям врага, в 36 местах взорвал железнодорожное полотно и три моста,...уничтожил до 12 тысяч солдат и офицеров, 28 танков, 15 складов с боеприпасами, 10 складов с продовольствием, 85 орудий и минометов, 54 пулемета,

152 автомашин, 830 повозок. Разгромил штаб 62-ой пехотной дивизии, освободил из плена 1480 человек и эшелон с гражданским населением. Своими действиями корпус облегчил освобождение Луганска войсками 3-й гвардейской армии, вселил надежду в советских людей, находившихся под гнетом немецких оккупантов, в их скорое освобождение, поднял их на активные действия в партизанских отрядах и подполных группах" (77-нсе бит). Бына ошо героик һәм ҙур һуғыштар хаҡында — улар ҡайҙа, ҡасан һәм нисек ойошторолғанын, кемдәр ҙур батырлыҡ күрһәткәнен хәлемдән килгәнсә асыҡлап яҙам да инде.

8. "Үҙен ҙур күрһәтеү өсөн, подполковник А. Черновты, майор Таицты һәм капитан Зәйнуллинды иҫкә алмай, улар политбүлектә етәкселек эшен башҡарҙылар". — Дөрөҫ, мин улар хаҡында яҙманым. Уларҙы белмәгән, күрмәгән өсөн түгел, ә халыҡ дошмандары менән бер ниндәй ҙә уртаҡлығым булмағаны өсөн. Һалдаттарса күрә алмайым мин уларҙы. А. Чернов, дивизияла комиссарлыҡ вазифаһын үтәй тороп, иң ауыр осорҙа, пленға ҡалыуҙан ҡурҡып, үҙенең офицер кейемен һалды, үлеп ятҡан һалдат кейемен һалдыртып кейҙе. Ғәфү ителмәҫлек енәйәт был. Таиц, политбүлек башлығы урынбаҫары булып та, дошман фронтын өҙөп унық тәрән тылына кергән көндә (7/II) ҡайҙалыр ҡасып сығып китте. Рейдта булманы. Зәйнуллинды иһә хөкүмәтебеҙгә, илебеҙгә асыҡтан-асыҡ хыянат ҡылғаны өсөн дивизияның "смерш"ы ҡулға алып атты. Уларҙы маҡтап С. Әлибаев яҙа, ләкин мин яҙа алмайым. Ул хаҡта шигегеҙ булһа, Өфөнөң госбезопасность комитетына мөрәжәғәт итегеҙ.

Һәм йәнә: "Улар урынына үҙен маҡтай, ул политотдел башлығы вазифаһын үтәмәне". — Был хаҡта күп яҙып тормайым, тик А.Г. Беловҡа һүҙ бирәм: "Тепло встретились мы с полковником И.И. Голеновым, подполковником М. Валиевым, майором С.Х. Хабировым, временно исполняющим обязанности начальника политотдела дивизии майором С.Р. Кадыровым. Когда я был заместителем командира дивизии, Кадыров был заместителем начальника политотдела дивизиии. Высокий, стройный, с выразительными черными глазами, Кадыров был печален; как и все в дивизии, он был удручен гибелью генерала Шаймуратова. Он рассказал, как трудно было выходить из рейда, как после гибеля Шаймуратова он и временно вступивший в командование дивизией полковник Г.Е. Фондеранцев наводили порядок, собирали людей, готовили их к выходу... За решительные и смелые действия в тылу врага орденом А. Невского были награждены полковник Г.А. Черников, майор С.Х. Хабиров; орденом Отечественной войны I степени — подполковник М. Валиев, майор С. Кадыров" (78, 80-енсе биттәр). Ошолай булғас, минең рейдта кем булыуым һәм нисек һуғышыуым тураһында башҡаса яҙып тороуҙың кәрәге юҡ, тип һанайым.

9. "Шайморатов партсобраниела доклад яһаманы, ул политик тәрбиә эше менән шөғөлләнмәне, унық быға ваҡыты булманы. Ысын коммунист, легендар полководец, шуға күрә лә Ҡадиров менән дә мөнәсәбәте яҡшы булманы". — Унық өҫтөнән көлөү был. Генерал мине хәрби эшкә өйрәтте, тактик белем бирҙе. Бер ваҡытта ла партйыйылыштарҙан ситтә тороп ҡалманы. Иҫ киткес принципиаль кеше ине. Дошман тылында бер ҡалаҡтан ашап йөрөнөк. Булған эске фекерҙәрен һөйләй ине. Шунық өсөн дә мин 1948 йылда Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумының ҡушыуы буйынса унық кәүҙәһен эҙләп табып, ҙур хөрмәт менән

Петровский ҡасабаһында туғандар ҡәберлегенә ҡәҙерләп күмдем. Унын дошмандары тараткан төрлө ялған хәбәрҙәрҙе алып ташланым. Ул хаҡта кәрәкле материалдар хәҙер ҙә Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумында һаҡлана.

“Рейдта политик эш күренмәне”. — Асыҡтан-асыҡ ялған. Политик эштең тейешле юғарылыҡта булыуы арҡаһында дивизия составынан рейдта ғына түгел, унан алдараҡ һәм һуңғараҡ та бер генә лә хыянатсы, ҡурҡаҡ һалдат, офицер булманы (юғарыла әйтеп үткән өс кешенән башҡа). Һәм дивизия составынан ни бары ике кеше ҡыуылды (Ә. Ихсанов — А. Ҡарнайға ҡарата провакаторлығы өсөн штафротаға тапшырылды, С. Әлибаев милләтселегє өсөн армияның резервына оҙатылды).

10. “Дошман фронтын Башҡорт дивизияһы өҙмәне, уға тиклем 1,5 — 2 километр асыҡлыҡ бар ине”. — Авторҙар үҙ наҙанлыҡтарын үҙҙәре асалар. Һүҙҙе шул уҡ генерал Беловҡа бирәйек: “Утром 7/II соединения корпуса вышли на рубеж, где должен был находиться участок прорыва во вражеской обороне. *Но никакого прорыва сделано не было...* Только, когда в бой была введена 112-я Башкирская кавалерийская дивизия, противника нам удалось потеснить... В итоге между хуторами Белесклеватым и Лысым *образовался прорыв* до двух километров. Вот в этот *сделанный своими силами прорыв* и устремились соединения корпуса” (70-енсе бит).

11. “Рейдтан сыҡҡанда генерал Шайморатов үлгән, ләкин Ҡадиров үҙе иҫән ҡалған, ул уның менән яҡын дуҫ, фекерҙәш булһа, үҙе үлер ине”. — Был йөмләлә ни тиклем ахмаҡлыҡ! Быны һуғышта булмаған, йәки булып та ситтән ҡарап торған ахмаҡ яҙырға мөмкин. Рецензенттар, генерал Шайморатовтың һәм башҡаларҙың батырҙарса һәләк булыуы менән генә сикләнмәй, уның менән бергә дивизияның башҡа — осраҡлы ғына иҫән ҡалған иптәштәрҙе лә үлтереп бөтөрөргә теләйҙәр. Шул саҡ ҡәнәғәт булырҙар ине улар. Минеңсә, фашистар һүҙе был. Рейдтан сыҡҡандағы ауыр һуғыштарҙан һуң, рейд батырҙарынан — өлкән командирҙарҙан И.И. Голенов (штаб башлығы), Ҡадиров (политбүлек башлығы), Хәбиров (артдивизион командиры), Черников (штабтың оператив бүлек башлығы), М. Вәлиев (дивизия артиллерияһының бүлек башлығы), доктор Сарыгиндар ғына иҫән ҡалды. (Героик үлгәндәр хаҡында яҙған инек). Рецензенттар уларҙың да үлеп ҡалыуҙарын теләгәндәр. Ниндәй ҡәбәхәтлек! Нафиҡов үлде — комиссары Әхмәтов иҫән ҡалды. Сәйетғәлин Байғужа үлде — командиры Захаров иҫән ҡалды. Бер санала ултырып барған (рейдтан сыҡҡан көндә) корпус штабы башлығы полковник Сабуров үлде — Борисов иҫән ҡалды һ.б. Былдай ахмаҡлыҡты һуғыш хаҡында аҙ ғына белеме булған кеше һис ҡасан да яҙасаҡ, һөйләйәсәк түгел.

Генерал Шайморатов хаҡында ысынбарлыҡты дөрөҫ асып яҙыусылар юҡ ниңәлер. Мин көсөмдән килгәнсә тырыштым, яҙҙым — уны халыҡ белә.

12. “Чернухинола яраланғандарҙы ҡалдырманыҡ”. — Бының ялған икәнлеген иҫбатлау өсөн, рецензияға беренсе булып ҡул ҡуйған лейтенант М.М. Халиҡовтың үҙенә һүҙ бирәйек: “Ул рейдҡа хәҙер утыҙ йылға яҡын ваҡыт үтеп китте, күп ваҡиғалар хәтерҙән сығып бара. Һеҙҙең “Ағиҙел” журналының 5-енсе номерында яҙған хәтерләүҙәрегеҙҙе уҡып сыҡтым... *Рәхмәтемде белдерәм һеҙгә...* Дебальцевоны ҡалдырып киткәндә беҙ заслонда инек... Мәктәптә беҙҙең *ҡаты яраланған һалдаттарҙы ҡалдырып китеү* бик йән әрнеткес ҡыйын булды”... (Хатты уҡығыҙ). Ошо хәлдә күргән, ошоларҙы дөрөҫ яҙған “алдаҡсы” Ҡадировҡа ҡаршы әтмәләнгән

рецензияға ҡайһы ҡулы менән ҡул ҡуйҙы икән?.. Тимәк, уң ҡулы “рәхмәт” әйтә, һул ҡулы ҡаршы килә...

Чернухинола ҡалдырылған — яраланған иптәштәрҙең бер өлөшө (хәлдәренән килгәндәре) улар (Халиҡов әйткән заслондағылар) артынан Юлиноға тиклем килделәр һәм, хәлдәре ауыр булыуға ҡарамаҫтан, ауырыу ҡулдарына ҡайтанан ҡорал алып һуғыштылар. Дивизия прокуратураһының секретаре Йәһүдин дә Чернухинола ҡалдырылғайны. Өс урындан яралы, башы бәйләнгән. Ул да Юлино-I өсөн барған һуғышта ҡатнашты; уң ҡулы хәрәкәтһеҙ, һул ҡулы менән автоматтан фашистарға ут асты... Ләкин һәләк булды. Мин ундай онотолмаҫлыҡ батырҙар тураһында күп яҙыр инем, шулай уҡ башҡалар ҙа яҙһындар.

13. Иҫкәртмә: а) исемдәре әйтелгән рецензенттар бик күп фамилияларҙы — кешеләрҙе бутайҙар. Билдәле, сержанттар үҙ подразделениеһынан, һирәк осраҡта үҙ полкынан башҡаны белә алмай. Миҫал өсөн: Хәкимов Моталлап (былтыр Өфөлә үлде, һуғышта 62-нсе полктың инструкторы ине) менән мин яҙған Хәкимов Салауат хаҡында һүҙ бара. Салауат Өфөлә түгел, ә 1944 йылда Польшала һәләк булды. Һуңғы ваҡытта ул 62-нсе полктың минбатарея командиры ине. Белмәгәнде яҙыу түгел, һөйләргә лә ярамай. “Юрғаныңа ҡарап аяғыңды һуҙ”, тигәндәр;

б) Нурғәлиев Хәнәфи. Дөрөҫ, ул 58-енсе полк штабында эшләне. Һәм Сталинград өсөн барған һуғышта һәләк булды. Ләкин мин яҙған Нурғәлиев Хасифулла Фатҡулла улы бөтөнләй башҡа кеше. Рейдҡа тиклем ул 62-нсе полктың штаб башлығы ярҙамсыһы ине. 23/II ул дивизия байрағын юғары күтәреп алға ташланды;

в) “Кубе наместник түгел, ә рейхскомиссар; Украинала наместник Кубе булманы, ә Кох булды”. — Быныһы ла Бөйөк Ватан һуғышы тарихы буйынса наҙанлыҡ. Гитлер осоронда һәр бер наместник шул уҡ ваҡытта рейхскомиссар ҙа булды. 1941 — 1943 (13/I) йылдарҙа Кубе Украинала рейхскомиссар-наместник ине. Һуңынан, Гитлер бойомо буйынса, ул Белоруссияға күсерелде. Уны шунда 1943 йылдың 28 сентябрендә партизандар дарға аҫтылар;

г) “Боевой листок”ты Ҡадиров яҙған Сөйәрғәлиев сығарманы”. — Политотдел аппаратын белмәү, унан алыҫ тороу (сержант). Политотделда тех. секретарь булып бер генә Сөйәрғәлиев эшләне, исеме уның Барый. Һуғышҡа тиклем Дәүләкән педучилищеһенең директоры ине. Һуғыштан һуң Өфө сәнғәт техникумында завуч. Һуңғы ваҡытта филология фәндәре кандидаты. *Белмәгәс, һөйләмә.*

Ошолары менән бергә рецензия яҙыусыларҙың ҡай бер дөрөҫ кәңәштәре лә бар. Шулары өсөн рәхмәтемде белдерәм:

1. Минең иҫтәлектә барлығы 178 кеше хаҡында яҙыла, шуларҙың араһынан 9 иптәштең исем-фамилиялары, тыуған йылдары дөрөҫ яҙылған булһа ла, һуғышҡа тиклемге ауыл, райондары дөрөҫ бирелмәгән (документтар яндырылғайны). Төҙәткәндәре өсөн ҡайтанан рәхмәт.

2. Ҡай бер һуғыштарҙың даталары бер-ике көнгә яңылышыуҙары бик мөмкин. Дошман тылында йөрөгәндә бит бер һуғыш бөтмәй тороп икенсеһе башлана... Бының өсөн дә рәхмәт.

3. Арыҫлан Мөбәрәков халҡыбыҙ ебәргән ҡәҙерле бүләктәр менән беҙгә (Кременчук) килгән булһа ла, беҙҙе көтмәй ҡайтып китә. Алып килгән бүләктәрен алдыҡ, уға ҙур рәхмәт. Әйтелгән сәбәп арҡаһында дивизия ҡаршында ул сығыш яһаманы, уның урынына Бикбулатова Зәйтүнә, Абдулла Шамуҡов, яҙыусы Сәғит Агиш, Ольга

Калининалар телмәр һөйләнеләр һәм концерт ҡуйҙылар. Бының өсөн уларға ла рәхмәт.

4. Генерал Шайморатовтың “тыуған көнө” тип минең тарафтан дөрөҫ үк яҙылмаған. Уның менән ултырҙашлыҡ Совет Армияһының 25 йыллығына бағышланғайны. Шунда генерал: “Үҙемдең тыуған көнгә тип алынған коньякты Шакиров һаман да һаҡлаған”, — тине. Беҙ уның бәхете, Ватан өсөн “бокал” күтәрҙек.

5. “Тельман совхозы түгел, Тельман поселкаһы”. — Ул ваҡыт өсөн дөрөҫ.

Шуны әйтергә кәрәк, аҡты ҡара итеп көсәнеп, юҡты бар итеп ваҡыт уҙғарғансы, рецензия яҙыусы “иптәштәр”гә үҙ ваҡыттарын, көстәрен Штеревка ҡалҡыулығында күмелгән 769, Петровскийҙа — 103, Чернухинола — 97, Фащевкала 79 исемһеҙҙең — батырҙарса көрәшеп үлеп ҡалған иптәштәренең исемлектәрен төҙөүҙә ярҙам итһәләр бик файҙалы булыр ине. Әлбиттә, мин яңғыҙым уларҙың барыһын да белмәйем. Мин унан, Украинанан, өҙлөкһөҙ хат, саҡырыу ҡағыҙҙары алам, ләкин ҡарсығымдың хәле ауыр булғанлыҡтан унда бара алмайым.

6. “Рейдта ҡатнашҡан бик күп кешеләрҙе иҫкә алмаған”. — Был да дөрөҫ. Сөнки журнал редакцияһы бик аҙ урын бирә. Мин яҙғандарҙың 57 процентын киҫтеләр. Алған хаттарға таянып алдағы көндә (көсөм-ҡеүәтем етһә) өҫтәп яҙасаҡмын.

Рецензия авторҙарына шуныһы өсөн рәхмәт: улар минең әҫәр менән ҡыҙыҡһынғандар, уҡығандар. Ләкин киләсәктә ундай рецензия яҙғанда ижадсылар араһында ҡулланылмай торған жаргондарҙы файҙаланмаҫҡа кәңәш итәм. Был бит әҙәпһеҙлек, наҙанлыҡ. Йәнә:

1. Рейдта булып та, минең иҫтәлекккә ҡарата үҙ фекерҙәрен яҙған иптәштәрҙең хаттарынан өҙөктәрҙе теркәйем.

2. М.М. Халиҡов иптәштең элек миңә ебәргән рәхмәтле хатын теркәйем.

3. Рейдта ҡатнашҡан иптәштәрҙең иҫтәлек баҫылғанға тиклем үк уны баҫырға тәҡдим итеп яҙған ултырыш протоколы журнал редакцияһында.

Һеҙҙе ихтирам итеп: **С. Ҡадиров.** 17 май 1974 йыл”.

Партия өлкә комитеты “Ағиҙел”де тыныслыҡта ҡалдырҙы, ә хат авторҙырына ниндәй яуап булғанлығын белмәйем.

Әммә хөрмәтле ветерандарҙың уртаҡ тел таба алмайынса үҙ-ара сәкәшеүҙәре тынманы. 1971 йылда элекке полк комиссары С.Р. Әлибаевтың “Көндәлек биттәренән. Комиссар яҙмалары” тигән китабы сыҡҡайны – һуғышта бергә булған иптәштәренең бер килкеһе араһында ризаһыҙлыҡ тыуҙырҙы. Өҫтәүенә, икенсе йылында уҡ “Ағиҙел”дә ул яҙмаларҙың дауамы ла баҫылып сыҡҡас, ҡәнәғәтһеҙлек артты, шуның сағылышы журналдың баш редакторы алдына килеп ятты:

“Ағиҙел” журналы редакторы ип. Низамовҡа.

Һеҙҙең 1972 йылда үҙ журналығыҙҙа С. Әлибаевтың “Комиссар яҙмалары” тигән баҫмағыҙҙа ғәфү ителмәҫлек хаталар бик күп. Шуларҙың мин бында тик ҡайберҙәрен генә әйтеп үтәм.

1. Автор: “Мине Ваһапов (Совмин председателе) саҡырып алды ла: “Һине Башҡорт дивизияһына комиссар итеп ебәрергә булдыҡ”, -- тине. Мин шатлыҡ менән ашығыс ҡына Мәғариф министрлыҡ эшемде иптәштәргә тапшырҙым да дивизияға Димгә киттем”, -- ти. Ни тиклем ялған (ул бит үҙе көндәлек тип яҙа)! Әлибаев С.

Мәғариф министрлығынан 1938 йылда уҡ бушатылды һәм партиянан сығарылды. Төп ғәйеп – ҡара милләтселек. Был хаҡта ул ваҡыттағы Башобком секретаре ип. Ҡузыев Рамаҙан Усмановичтан һәм Аҙнабаев Ҡасимдан (обкомда орготдел мөдире ине) һорағыҙ, тулыраҡ итеп дөрөҫләрҙәр. Икеһенең дә телефоны бар.

2. Илгә хыянат иткәне өсөн капитан Зәйнуллин тейешле органдар тарафынан атылды (ул Әлибаевтың инструкторы ине). Ә һеҙ уны Ватан геройы рәүешендә яҙып сығаһығыҙ. Һуңынан Комитет госбезопасности талабы менән генә Әлибаевтың китабынан алып ташланды. Был хаҡта Башгосиздатта эшләүсе ип. Гәрәйевтән һорағыҙ.

3. Дивизияның дошман менән беренсе осрашыуында – Олымь йылғаһы буйында -- Әлибаев ҡурҡып, үҙе эшләгән полктың 1-енсе эскадронын алып (командиры Әминев – элекке судья, Шишмәнән) артҡа ун биш саҡрым ҡаса. Икенсе көндә Шайморатов Әминевте штрафротаға оҙата. Әлибаевты вазифаһынан алырға приказ бирә. Тик уның ул ваҡыт СССР Верховный Советы депутаты булыуы ғына штрафротаға ебәрелеүенән ҡотҡара. Был хаҡта дивизия командиры генерал А.Г. Беловтан һәм шул уҡ полктың эскадрон командиры булған Мәмбәтколов Бәдриҙән һорағыҙ (ул Сибайҙа йәшәй).

4. Статьяһының башынан алып бөткәнсе политотделды танымай, йәки уға ялған ғәйептәр яға. Сәбәбе – политотдел һәр ваҡыт Әлибаевтың асыҡтан-асыҡ милләтселеген аса килде. Төҙәлмәгәс, 1943 йылдың ноябрендә дивизиянан шул уҡ милләтселектә, ҡурҡаҡлыҡта (Владимир-Волынскиҙа полктың бөтә пушкаларын дошман ҡулында ҡалдырып ҡасты) ғәйепләп артҡа оҙатылды. Шунан биреле дивизияла бер генә көн дә булманы. Был хаҡта дивизияның полктағы “смерш” вәкиле майор Чурмантаев Ғүмәрҙән һорағыҙ, тулы мәғлүмәт бирер (ул хәҙер Черниковкала Орджаникидзе райсполкомының жильуправление начальнигы).

5. Үҙенең һеҙгә тапшырған өҫтәлмә яҙмаларында, уҡыған иптәштәр әйтеүенсә, ул тағы ла рейдҡа инеү ваҡытында дошман яғына ҡасҡан подполковник (майор?) Таицты маҡтап яҙа, гәрсә ул беҙҙә ни бары 19 ғына көн булды. Ниңәлер һәр ваҡыт дошмандар менән бик тиҙ табыша. Шулай уҡ дивизияла 24 көн генә хеҙмәт иткән подполковник А. Черновты (политотдел начальнигы булып килгәйне) күрһәтергә тырыша. А. Чернов рейдта, Миус йылғаһына яҡынлашып килгәндә үҙенең офицер кейемдәрен һалып ташлай ҙа һалдат кейеменә кейенә. Күрәһең, плен ҡалырға әҙерләнгән. Ләкин ул 19 февралдә дошман пуляһынан һәләк булды – ҡурҡаҡ яҙмышы шулай инде. Әҫәрҙең ундай принципиаль политик хаталары, әлбиттә, күп.

Миненсә, үҙенең алдап, эште аңламай яҙыуында төп сәбәп шул – үҙе ҡотола алмаған милләтселек. Был хаҡта кәрәк булһа, тапшырырмын – генерал Беловтың хаттары бик күп. Күрәһең, уның да теңкәһенә тейгән.

Үҙенең хаталарын йәшереү өсөн, яҙмаларын дивизияның ветерандарынан уҡытмай. Дөрөҫ юл түгел был. Шуның арҡаһында китапты сығарыуҙа яуаплы редактор Ғәйнан Әмириҙе лә ауыр хәлдә ҡалдырҙы (Белов, Ҡузыев, Аҙнабаев, Чурмантаев, Хәбиров С. һ.б. бик күптәр, ни эшләп ул Ғәйнан Әмири кеше хаталарын үҙ өҫтөнә ала икән, тиҙәр). Быны мин алдағы көндә лә артыҡ ҙур политик хаталар китмәһен өсөн иҫкәртеп яҙам.

Һеҙҙе хөрмәт итеп: **С.Р. Ҡадиров.** 24.01.1975.

Бөтәһен үҙ күҙе менән күреп кисергән ветеранға Әхтәм Ихсан китабындағы күҙенә салынған етешһеҙлектәр ҙә һис тынғылыҡ бирмәне – уның өсөн өндәшмәй ҡалыуы мөмкин түгел хәл ине. Өҫтәүенә, әйтелә килгән ғәҙел тәнҡиттәрҙе иҫәпкә алмайынса, автор әҫәренең киңәйтелгән яңы баҫмаһын әҙерләй башлай һәм шуның бер өлөш ҡулъяҙмаһын партия өлкә комитетынан Усманов иптәш, уҡып фекер әйтһен өсөн, әлеге лә баяғы шул дивизия ветераны С.Р. Ҡадировҡа йүнәлтә. Әммә рецензия һис тә автор файҙаһына булмай:

Черниговты азат иткәндә

1943 йылдың сентябрендә 7-нсе корпус 61-енсе армия ҡарамағында була. Армия командующийе генерал-лейтенант П.А. Белов корпус алдына бурыс ҡуя: төньяҡ-көнбайыштан дошман тылына үтеп, Черниговтағы ғәскәрҙәренә ойошҡан рәүештә сигенергә мөмкинлек бирмәү. Беҙҙең 16-нсы гв. дивизияһы Зметнево-Бабаны, Мена-Березна станцияһын һәм Черниговты азат итеүҙә әүҙем ҡатнашырға тейеш. Был бойороҡто дивизия полковник Г.А. Белов етәкселегендә уңышлы үтәп сыҡты, дивизияға маҡтаулы Чернигов исеме бирелде. Бына ошо тарихи ҙур ваҡиғаны Ә. Ихсан үҙенең китабының “Атлы арыҫландар” тигән бүлегендә яҙа. Ләкин автор ул ваҡиғаларҙа үҙе ҡатнашмаған, фактик материалдар менән эш итмәгән – ысынбарлыҡты боҙоп, хата тасуирлай.

Һөжүм башланыу хаҡындағы бойороҡто алыу менән полковник Г.А. Белов дивизия политбүлек башлығы полковник М.Н. Покровский менән полк командирҙарын, уларҙың политик эш буйынса урынбаҫарҙарын йыйып, частәр алдына тәғәйен бурыстар ҡуя.

Өс йылға (Десна, Снов, Днепр) аралығындағы өсмөйөштә урынлашҡан Чернигов ҡалаһын фашистар ныҡ һаҡлай. Беҙҙең төп бурыс – Черниговты азат итеүҙә әүҙем ҡатнашыу. Ихсан иһә Чернигов йүнәлешендәге осраҡлы айырым бәрелештәргә төп иғтибарын бирә. Алда торған төп бурыс үтәлмәй тороп, ундай эпизодтарҙы ҡабартыу дөрөҫ түгел. Эйе, подполковник Т. Кусимовтың 58-енсе полкы ҙур батырлыҡ күрһәтте. Ләкин тәүҙә өс, һуңғараҡ дүрт (танковый полк өҫтәлде) полк хәл иткес һуғыштарҙа (ике тәүлек буйы) һуғышмайынса, 58-енсенең артынан эйәреп килделәр, тигән һүҙ ҙур хата. Ә Ихсан яҙмаларында тап шулай килеп сыға. Яҙманың башынан алып һуңғы битенәсә 62-нсе полк, уның дивизияла дан алған командиры подполковник Г. Маркарян, 148-енсе артполк командиры майор С. Хәбировтар бер генә һүҙ менән дә иҫкә алынмай. Улар бит был һуғыштарҙа иң актив ҡатнашсылар. Шулай уҡ көнө-төнө һалдаттар, урындағы халыҡ араһында аңлатма алып барған политработниктар бөтөнләй күренмәй. Автор бер генә урында С. Әлибаевты күрһәтергә тырыша, ләкин ул да дөрөҫ түгел, сөнки ул ваҡыт С. Әлибаев юҡ – аттан ҡолап төшөп, аяғын имгәтеп, санэскадронда ята ине. Ә бына ҙур батырлыҡ күрһәткән майор Закиров, капитан Х. Биксурин, капитан К. Ғәбитов, өлкән лейтенант Ш. Насиров һәм башҡа бик күптәр бер генә лә телгә алынмай. Әйтерһең, дивизияла бер төрлө лә политик эш алып барылмаған. (Бының ниндәй хата икәнен аңлау өсөн Г.А. Белов китабының 87-нсе битен уҡыу ҙа етә). Автор, полк командиры Горлатов үҙенең полкындағы бер кемде лә белмәй ине әле, сөнки ул полкты ошо

көндәрҙә генә ҡабул итте, ти. Дөрөҫ түгел. Ул инде ул саҡта өс ай буйы полк менән командовать итә ине. Уға тиклем булған полк командиры Г.Е. Фондеранцев ауырыны, ти. Хата. Ул, минаға эләгеп, һуҡырайып Мәскәүгә оҙатылғайны.

Березна ҡалаһында дивизияның штабын дошмандың бомбаға тотоуын, беҙҙең юғалтыуҙарҙы автор бик киң яҙа, ләкин дошмандың ундағы юғалтыуҙарын асып бирмәй. Дивизияның 60-ынсы полкы унда 400-ҙән артыҡ фашисты әсир төшөрҙө, һуғыш ҡоралдары тупланған ҙур складын -- өс мең граната, илле мең патрон, ике пушка, дүрт миномет, аҙыҡ складын алды. Ул көндә 62-нсе полк Березнаға һунлап килде, сөнки Городишко утары янында юлға ҡаршы төшкән танкылар менән ҡаты һуғыш алып барҙы.

Автор бөтә көсөнә, Снов йылғаһын беренсе булып кисеп, Клочков утарын 60-ынсы полк алды, ә 62-нсе полк уға ярҙам итте, тип иҫбатларға тырыша. Булған хәлде боҙоп күрһәтеү был. Документтар бына ни һөйләй: 58-енсе, 60-ынсы полктар, йылға аша күпер булмағанлыҡтан, оборонаға күсә. Шул саҡ 62-нсе полк (командиры Г. Маркарян) разведчигы өлкән лейтенант В.Е. Козлов йылғаны үтеү өсөн кисеү таба. Маркарян 58, 60-ынсы полктарҙы көтөп тормай йылғаны кисеп, Клочково утарын ала (тылдан барып). Бында айырыуса 62-нсе полктың Е. Должук, Т. Тихонов эскадрондары ҙур батырлыҡ күрһәтә. Улар менән туранан-тура полк штабы начальнигы А.В. Красиков етәкселек итә. Өлкән лейтенант Тихонов көтмәгәндә атлы атака менән дошманға ташлана, уны сигенергә мәжбүр итә. Сержант Узаков үҙенең отделениеһы менән утыҙҙан артыҡ фашисты ҡырып һалды. Полктың 45 миллиметрлы батарея командиры Г. Әхмәров үҙ ҡулы менән дошмандың өс танкыһын яндырҙы. Шулай итеп, 62-нсе полк Клочковоны алғанда ҙур батырлыҡ күрһәтте. Бына шуға ла полк командиры Маркарян – Богдан Хмельницкий, өлкән лейтенант Должук – Ленин ордены, С. Ҡадиров Боевой Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән бүләкләнде, ә Красиков, Тихонов, Әхмәров, Узаҡов иптәштәргә Советтар Союзы Геройы исеме бирелде. Әхтәм Ихсан иһә быларҙың береһен дә күрмәй, юҡты бар итеп яҙа. Шуның менән нимә әйтергә, кемде алдарға теләйҙер?.. Дошман Клочково янындағы күперҙе шартлатырға өлгөрмәне, шул күперҙән икенсе көндә генә 60-ынсы полк сығып, алға китте. (Г.А. Белов. 91-92-нсе биттәр).

Утыҙ сәғәт эсендә дивизия ҡаты һуғыштар менән 130 километр ара үтеп, Черниговтың төньяҡ-көнбайышына барып етеп, һөҙөмтәлә 21 сентябрҙә 61-енсе армияның ғәскәрҙәре Черниговты азат итте. Ошо һуғыштарҙа күрһәткән батырлығы өсөн дивизияға Чернигов исеме бирелде. Ике тәүлек эсендә дивизия дошман ҡоллоғонан 24 утарҙы азат итте. Авторҙың юғарыла әйтелгән ғәфү ителмәҫлек хаталарынан тыш, башҡа “ваҡ” кәмселектәре лә бик күп, был уның хәрби белеме булмауы тураһында һөйләй. Унынса килеп сыға:

1. Дивизияның штабы, командиры полковник Белов баяғы ҡаты һуғыштарға бер төрлө лә етәкселек итмәй. Хатта полк командиры Кусимовҡа ул түгел, ә 61-енсе армия командиры Белов үҙе, йәки корпус командиры оператив приказдар бирә. Бындай хәлдең совет армияһында булыуы мөмкин түгел.

2. Дивизияла бер төрлө лә политик-тәрбиә эше юҡ. Политотдел иҫкә лә алынмай.

3. 1943 йылдың февраль айынан башлап дивизияла (ғөмүмен Ҡыҙыл Армияла) комиссарҙар институты бөтөрөлдө. Шуға ҡарамаҫтан, автор эскадрон политругы, полк комиссары (С. Әлибаев) тип яҙа бирә.

4. Полк командирҙары Кусимов, Горлатовтар үҙҙәренән кесе офицерҙарға исемдәре, аталарының исемдәре менән мөрәжәғәт итәләр. Ысынбарлыҡты боҙоу был. Ғәҙәттә, устав буйынса, звание менән өндәшәләр бит.

5. Ҡаты һуғыштар бара, ләкин дивизияла артиллерия хәрәкәт итмәй. Хатта артполк командиры дан алған С.Х. Хәбировтың исеме лә әйтелмәй. Был инде ысын наҙанлыҡ. Бер генә операция ла артподготовкаһыҙ башланмай.

6. Яңғыҙ һалдат (ҡыҙыл әрмис) ат менеп, ҡылыс тағып разведкаға ебәрелә (меҫкен һалдат!). Ул ҡылыс айҡап ике немецты ҡыуып китә, береһен үлтерә, икенсеһен – штаб начальнигын – ауыҙына сепрәк тығып, ҡапсыҡҡа һалып, күтәреп алып ҡайта штабҡа. Дошман уға атмай. Ҡыҙыл әрмис засадаға эләгә, аты үлә... Был бит көлкө! Разведкаға, ҡағиҙә булараҡ, бер кеше генә ебәрелмәй, төркөм бара. Ә ни өсөн ҡылыс? Кеше ышанмаҫтай һүҙҙе ысын булһа ла һөйләмә, ти, ә был – уйҙырма.

7. Автор дошманды артыҡ ҡурҡаҡ, көсһөҙ итеп күрһәтә. Беҙ юҡҡа ғына дүрт йыл һуғыштыҡмы икән ни?!.

8. Дивизияның политработниктары ерле халыҡ араһында бик ҙур политик эш алып барҙылар, ә ерле халыҡ беҙгә ярҙам итте, ләкин автор быларҙың береһен дә күрмәй.

9. Ауылға ҙур мал көтөүе ҡайта, уға эйәреп, беҙҙең һуғышсылар ауылға бәреп кереп, дошманды ҡыйраталар, ти автор. Ул ваҡытта ниндәй көтөү булһын, булған малдарҙы, хатта тауыҡтарына тиклем, немецтар ашап бөткән ине инде. Бөтөн ауылда бер һыйыр тапмаҫһың...

10. Кешеләрҙе, хатта өлкән офицерҙарҙы ла бутай автор. Андрей Абакумовты 60-ынсы полк командиры итеп күрһәтә, ә ул политотдел инструкторы, ә парторг капитан Х. Биксурин ине. Бындай хаталар бик күп (24 -- 25-енсе биттәр). Полктың замполиты майор Закиров бөтөнләй юҡ. Штабтың оператив бүлек башлығы – майор Черников, ти, ә ул 1943 йылдың апреленән биреле дивизияла юҡ.

11. Снов йылғаһын үтер өсөн кисеүҙе разведчик Разваниев таба, ти. Ысынбарлыҡта иһә уны өлкән лейтенант Козлов (62-нсе полк) таба. Йылғаны көслө ут аҫтында кистек, ти. Ҙур хата. Әгәр ҙә дошман беҙҙең йылғаны кискәнде күргән булһа, Клочкованы ике эскадрон (Должук, Тихонов) азат итә алмаҫ ине. Беҙҙекеләр дошман тылына кереп, уларҙы ҡамап алғас ҡына башланды атышыу (мин үҙем дә шунда инем). Ғөмүмән, китаптың 38 – 44-енсе биттәре ғәфү ителмәҫлек хаталарҙан тора. Әгәр ҙә бөгөнгө көндә лә 62-нсе полк командиры Маркарян, уның штаб начальнигы капитан Красиковтар иҫән булһалар, авторға рәхмәт әйтмәҫтәр ине, әлбиттә.

Бындай әйберҙе түшәмдән алып ҡына яҙып булмай бит. Фактик материалды яҡшы белергә, хәрби яҡтан бераҙ ғына булһа ла белемле булыу кәрәк.

Әҫәрҙе был көйө баҫырға мөмкин түгел. Мин уның художестволы яғын ҡабат әйтеп тә тормайым инде.

Отставкалағы гвардия майоры **С.Р. Ҡадиров.** 15.07.1975.

Рецензияның тәүге битенең ситендә автор иҫкәртмәһе бар:

“Шуға күрә ул миңә асыу өҫтәне, тәүгеһе Ҡарнай өсөн ине. ***С.Ҡ.”***

Күрһәтелгән етешһеҙлектәргә дивизияның икенсе бер ветераны – журналист Кәлимулла Ғәбитов та иғтибар итә:
Сабир Рәхимович!
Ялҡынлы сәләм ал. Шунан уҡ эшкә күсәм.
Беҙҙең дивизия тураһында әлегә тиклем донъя күргән әҫәрҙәр (“Саҡматояҡ аттарҙа”, “Путь мужества и славы”), белмәйем ни өсөндөр, мине шатландыра алманылар. Сөнки Белов та, Ихсановса уҡ булмаһа ла, 58-гә дан йырлай кеүек. Миңә ҡалһа ул Чернигов өсөн көрәштә 62-нең дошман тылына кереп һуғышыуын, фронттан һөжүм итеүсе ике полкка юл асыуын бер кешегә -- штаб начальнигына ҡайтарып ҡалдыра. Уны ла ысынбарлыҡтағыса түгел, бәлки, боҙоп һүрәтләй. 62-нең ике эскадронын, Тихонов етәкселегендә, атлы атакаға күтәрә. Һеҙгә һәм миңә билгеле булыуынса, унда ат атланып түгел, хатта эйелә-һығыла булһа ла, йәйәү йөрөрлөк тә түгел ине. Бесәне сабылған таҡыр туғайҙа үрмәләп йөрөүҙәр, ике эҫкерт төбөндәге станоклы пулеметтарҙың расчеттарын урманға сығартыу, урмансы өйөндәге яралыларға һеҙ һыу килтерткәс, эскадронды һөжүмгә күтәреүҙәр онотолмағандыр, тип уйлайым.
Бының менән мин: “Белов үҙ әҫәрендә беҙҙең үрмәләп йөрөүҙе күрһәтергә тейеш ине”, -- тип әйтмәйем. Киреһенсә, һан яғынан шаҡтай өҫтөн торған дошмандың пыр-туҙып сигенергә мәжбүр ителеүе, – эскадрон командирҙарының оҫталығы, һуғышсыларҙың батырлығы һүрәтләй бирелһен ине, тигән фекерҙе яҡлайым.
Ғөмүмән әйткәндә, Белов әҫәре уҡыусыға күп нәмә бирә. Ләкин дивизияның бер босмағында тапаныуы оҡшап етмәй.
Дивизияны тулы алып һүрәтләп күрһәтеү, моғайын, бик ауыр. Ә бер полкты алып, шуның аша дивизия етәкселәрен дә сағылдырып үтеү еңелерәктер, әлбиттә. Был яҡтан ҡарағанда, һеҙҙең алым уңышлы булғандыр, тип уйлайым. Мине үкендергәне шул: 112-нсе Башҡорт атлы дивизияһы Бөйөк Ватан һуғышында тиңһеҙ батырлыҡ күрһәтте, ә уның тураһында йәйелеп уҡырлыҡ – беҙгә алмашҡа килеүсе быуынды бабаларының батырлығы менән ысын-ысындан ғорурландырып тора алырлыҡ бер әҫәр ҙә яҙылманы. Бик ҡыҙғаныс! Сәбәп – юғары ойошмаларҙың был мәсьәлә менән ҡыҙыҡһынмауы булһа кәрәк.
Һәр полктың, дивизияның яҙма тарихы бар ине бит. Ул документтар ҡайҙа, кемдә ята? Белмәйем. Бәлки, һеҙ беләһегеҙҙер?
20.03.1977.

Сал ветеран С.Р. Ҡадиров 1982 йылда Әхтәм Ихсан повесенә ҡабат әйләнеп ҡайтып, түбәндәгене яҙа (ҡайҙа тапшырыу-тапшырмауы аныҡ билдәле түгел. Аҫтараҡ килтерелгән Ә. Ихсан шикәйәтнамәһенең башына ҡарағанда, “Ағиҙел”гә булғандай):

Тарихты боҙоусыларға сик ҡуйырға бик ваҡыт!

Ысынбарлыҡты тапап, аҡылға һыймаҫлыҡ ялған “факт”тар өҫтәп тарихты асыҡтан-асыҡ бутаусы итеп Әхтәм Ихсанды алырға була.
Бына беҙ уның 1966 йылда Башҡортостан китап нәшриәте тарафынан баҫылып сыҡҡан “Саҡматояҡ аттарҙа” тигән китабының тик һуңғы бүлеге “Рейд”ка ғына туҡталабыҙ. Ни тьиклем алдашыу, ысынбарлыҡты боҙоп тасуирлау! – үҙе үк авторҙың кемлеген фашлай.

Беҙ уның баш бүлегенән алып һуңғы бүлегенә тиклем бер ҡасан да булмаған һәм хата, ялған факттарҙан төҙөлгән икәненә туҡталып тормайбыҙ. Тик ул “әҫәр”ҙең һуңғы бүлеге “Тәрән рейдта” тигән ахмаҡлығына ғына иғтибар йүнәлтәбеҙ.

1. Автор 205-енсе биттә: 8-енсе кавалерия корпусының частәре “11 февралдә сәғәт икелә Васильевка ауылынан ҡуҙғалып, дошман тылына инеп киттеләр”, тип яҙа. Бының ялған икәнен дивизия командиры Советтар Союзы Геройы генерал Г.А. Белов үҙенең “Путь мужества и славы” тигән китабында (70-енсе бит): 1943 йылдың 8 февралендә Белесклеватый менән Лысый утарҙары араһынан үтеп, дивизия дошман тылына кереп китте”, -- тип күрһәтә. Был документтар менән дөрөҫләнә.

2. Корпусҡа, шул уҡ хисаптан 112-нсе Башҡорт атлы дивизияһына гвардия исеме Ворошиловград (Луганск) ҡалаһы дошмандан азат ителгәс кенә 1943 йылдың 14 февралендә бирелә, ә Ихсан иһә (207 – 208-енсе биттәр) уны күпкә алдан бирҙертә. Белмәгәс, унда үҙең булмағас, ниңә инде алдашырға. Беҙ гвардия исеме бирелеүҙе дошман тылында рәсми рәүештә 16 февралдә генә алдыҡ. Шайморатовтың шоферы Ибраһим Шәрәфитдинов (бөгөн дә Өфөлә йәшәй) бик ауыр шарттарҙа йәшерен пакет менән, төнгө ҡараңғылыҡтан файҙаланып, корпус командиры генерал Борисовҡа китә. Ул таң алдынан урап ҡайта. Ҡулындағы Шайморатовҡа яҙылған пакетты уға тапшыра. Ана шунда ғына корпусҡа, шул уҡ хисаптан дивизияға гвардия исеме бирелгәнлеге асыла.

3. Ихсан үҙе уйлап сығарып, ниндәйҙер полицейский Шайморатовҡа ата, тик повары Әсғәт Мохтаров (Дүртөйлөнән) ҡына үҙ кәүҙәһе менән Шайморатовты һаҡлап ҡала, тип һис тә булмаған нәмәләрҙе яҙа. Мохтаров бомба ярсығынан яралана.

4. Немец һалдаттары үҙ окоптарынан (209-ынсы бит) “башҡорттар уйнаған ҡурайҙы яратып тыңлайҙар”, имеш: “Башҡорт! Уйна, уйна!” – тиҙәр. Был бит асыҡтан-асыҡ уйҙырма! Улар беҙҙе “ҡырағай монголдар” тип атайҙар ине. Унан һуң фронттың алғы һыҙығында ятҡан яугир ҡурай уйнай буламы һуң?..

5. 214-енсе бит: “Корпусҡа гвардия исеме бирелеү менән корпус командиры генерал Борисов үҙенең комиссары подполковник Н. П. Белов менән беҙҙең дивизияға килеп банкет ойошторалар”, -- ти. Был инде көнө-төнө ут аҫтында ҡалған осорҙа, Чернухино өҙлөкһөҙ янып ятҡанда һис нисек тә була торған хәл түгел һәм булманы ла. Шулай уҡ корпус комиссары Н.П. Белов подполковник түгел – ул 1940 йылдан биреле полковник. Ихсанов (214-енсе бит): “Борисовтың мөләйем йөҙөнә ҡарап Шайморатов: “Кешелекле, киң күңелле икәнлегегеҙҙе башҡорттар онотмаҫ”, -- ти. Өҫтә әйткәнебеҙсә, Борисов беҙ Чернухинола ваҡытта беҙҙең дивизияға бер тапҡыр ҙа килмәне. Эйе, Борисовты башҡорттар бер ҡасан да онотмаҫ, сөнки Шайморатовтың һәләк булыуында ғәфү ителмәҫлек төп ғәйеп уның өҫтөндә. Ул 23 февралдә Беренсе Юлино утарында Шайморатовты тыңлаған булһа, үҙе лә дошман ҡулына әсир төшмәҫ, Шайморатов һәм башҡа бик күп яугирҙәр ҙә һәләк булмаҫтар ине. Әлбиттә, беҙ был трагик хәлде бер ҡасан да онотасаҡ түгелбеҙ.

6. “Дошман тылында ваҡытта Шайморатов урындағы халыҡтарҙан үҙенә ҡунаҡтар ҡабул итте”, -- тип яҙа Ихсан (215 – 217-нсе биттәр). Ниндәй ахмаҡлыҡ! Бер өҙлөкһөҙ ҡанлы һуғыш барғанда, ашарға, икмәк түгел, тоҙ ҙа булмаған саҡта дивизия хужаһы ҡунаҡтар йыйнай, имеш…

7. 223-өнсө биттә Ихсан дивизияның 58, 62-нсе полктарын дошманға ҡаршы һуғыштыртып яҙа. Рейд ваҡытында булмаған полктарҙы булды тип алдап яҙыуҙың кемгә кәрәге бар? Рейдта дивизия тик бер генә -- сводный 60-ынсы полктан ғына торҙо, уның командиры подполковник Г.Е. Фондеранцев булды.

8. 230-ынсы биттә Ихсанса: "1943 йылдың 23 февралендә Шайморатов офицерҙарҙы йыйып, Совет армияһының 25 йыллыҡ байрам тантанаһы үткәрә"… 23 февралдә иртәнге сәғәт биштә Шайморатов һәләк булды. Иҫән ҡалған яугирҙәр дошман менән ҡапма-ҡаршы килеп, һирәк була торған ҡанлы һуғыш алып бара. Ә Ихсанов байрам ашы үткәрә… Ниндәй аҡылһыҙлыҡ!

9. Юлино һәм Фромандировкаларҙа һуғышҡа тиклем немецтар йәшәгән. Һуғыш башланыу менән үк уларҙы башҡа өлкәгә күсергәндәр. Уларҙа бер аҡһаҡ бисәнән башҡа бер кем дә юҡ. Ә Ихсан унда урамдағы халыҡ менән һөйләшеүҙәр, кәңәшмәләр уҙғара (232-нсе бит). Фромандировка утарына беҙҙең эскадрон командиры өлкән лейтенант Мирсаяпов барып, һарай түбәһенә ҡыҙыл әләм элде, ти. Ул утар беҙҙең маршрутта түгел, уға корпустың 55-енсе дивизияһы һөжүм итә. Беҙ уға ҡағылманыҡ. Үҙ хыялына барып өҫтәй (235-енсе бит): "Полковник Белов мал һарайында башҡа яралылар менән бергә "Интернационал" йырлап, ҡаты яранан шунда үлә", -- ти. Был инде алдашыуҙың да сигенән уҙып китеү. Бөтә корпуста Белов фамилиялы һәм полковник званиеһында ике генә офицер булды: береһе – Г.А. Белов (һуңынан беҙҙең дивизия командиры), ул рейдта бер генә көн дә булманы, әле лә иҫән-һау. Икенсеһе Н.П. Белов, корпус комиссары. Ул был районда булманы, корпустың беҙҙән көньяҡтараҡ хәрәкәт иткән 14-енсе дивизияһында ине. Улар Елизаветовка утарына барып сыҡтылар, ул Белов та рейдтан һау-сәләмәт сыҡты, бер төрлө лә яра алманы. Полтавала йәшәп, 1981 йылда ғына ҡартайып үлде. Корпус дошман тылынан "Оло Ер"гә сығыу өсөн ашығыс әҙерлек алып барғанда корпус хужалары үҙ-ара бүлештеләр: беҙҙең дивизия менән – Борисов, Сабуров (штаб башлығы), полковник Карпушенко (корпус политбүлек башлығы), ә 14-енсе дивизияла – полковник Н.П. Белов (комиссар). 55-енсе дивизияға Борисовтың урынбаҫары генерал-майор Дудко беркетелде.

10. 237-нсе биттә Ихсан: "Беҙҙең яугирҙәр, тәрән окоптарҙан сығып, дошманға ҡаршы ташландылар", -- ти. Сей наҙанлыҡ. Дошман фронтын өҙөп, ҡан түгеп, һәр бер аҙымды үлсәп атлағанда окоп соҡоп торалармы ни? Тубыҡтан ҡар ярып барылды. Беҙ бит унда фронт тотоп һуғышманыҡ, туҡталып та торманыҡ. Мин, торам-торам да, тағы ла аптырауҙа ҡалам: нисек итеп һәм ни өсөн шул тиклем алдашырға кәрәк булды икән авторға?!

"Дивизия дошман тылында 200 километр ер үтте", -- хыял, ялған! Корпус, шул хисаптан беҙҙең дивизия, ни хәлдә, ҡайһы урындарҙы үтеп, ҡайҙа "Оло Ер"гә килеп сыҡты? Һис бер нәмә асыҡланмай. Полковник И.И. Голенев (дивизия штаб башлығы), Борисов, полковник Сабуров, полковник Карпушенко, подполковниктар Паршин, Кузнецов М.М., майорҙарҙан Я. Ғималитдинов, Д. Аритҡолов, капитан Камалитдиновтар ҡайҙа һәм ниндәй шарттарҙа яраландылар, һәләк булдылар? Улар хаҡында бер хәбәр ҙә юҡ. Алдаша торған авторҙың ҡапсығы бушаған, күрәһең. Китапта яҙылған "факт"тарҙың, өҫтә әйтелгәнсә, береһе лә дөрөҫ түгел. Бына ни өсөн ул ҡулъяҙмаһын беҙҙән йәшереп, уҡырға бирмәй йөрөнө. Нәшриәттең күҙен буяу

өсөн, рейд хәлдәрен белмәгән, уның ауырлығын кисермәгән айырым иптәштәрҙән маҡтау тамғаһы алыу менән сикләнде.

С.Р. Ҡадиров. *(Датаһы ҡуйылмаған).*

Ошоноң менән тынғыһыҙ йән үҙенә ҡаршы көстәрҙе ҡабаттан аяҡландырыуы шул уҡ 1982 йылда уның М.М. Шайморатов тураһындағы "Урал бөркөтө" тигән китабы донъя күргәс ныҡ асыҡланды – шул уҡ йылда Әхтәм Ихсандың автор өҫтөнән партия өлкә комитетына ебәргән 36 битлек шикәйәтнамәһенең бер данаһы "Ағиҙел"гә еткерелде. Китапты баҫмаға әҙерләүҙә туранан-тура ҡатнашлығым булғанлыҡтан, ҡатырға папкаға тегеүле тексттың төп ғәйепләү пункттарын күсереп алған блокнотымды С.Р. Ҡадировтың фатирына алып барып, бермә-бер уҡып ишеттерҙем, бит ситтәренә уның яуаптарын ҡыҫҡаса теркәй барҙым. Шикәйәтнамәнең үҙен уға ваҡытлыса ҡалдырып, тиҙ арала партия өлкә комитетына яуап яҙып ебәреүен һораным һәм ул шулай итте лә:

Секретарю Башкирского обкома КПСС т. Т.И. Ахунзянову от бывшего политработника Башкирской кавалерийской дивизии С.Р. Кадырова

ЗАЯВЛЕНИЕ

Мне стало известно, что автор книги "На огненных копытах" А. Ихсанов обратился в обком партии с подметным письмом "О фактах искажений истории боевых действий 112-ой Башкирской (16-ой гвардейской) кавдивизии на фронтах Великой Отечественной войны Кадыровым С.Р. (Ответ на его письмо в редакцию журнала "Агидель"). 1982". С этой писаниной меня познакомили только лишь 10 июня 1983 г., поэтому только сейчас могу представить мой ответ в распоряжение обкома.

Ә. Ихсанов хатына минең яуап

Был хат менән мин тик 10 июндә генә таныштым, шуға күрә үҙ ваҡытында тулы яуап яҙа алманым.

Әгәр ҙә Ихсанов үҙ хатын унда күрһәтелгән айырым иҫкәртмәләр, эшкә ярҙам итеү ниәте менән яҙған булһа, мин уға рәхмәт әйтер инем, ләкин ул уны ғәйепләү акты формаһында аткара. Быға ул, күрәһең, асыу тотоп, 1963 йылдан биреле әҙерлек алып барған. Минең һәр бер статьяны, сығыштарҙы йыйнап-төпләп килгән. Ысынбарлыҡты белмәүсе иптәштәр иҫәбенән үҙенә фекерҙәштәр тапҡан. Мин үҙ әҫәрҙәремде китап итеп баҫтырғанғасы тәүҙә журналдарҙа, газеталарҙа баҫтырам, уҡыусыларҙан ярҙам, кәңәш көтәм. Уларға күп йылдар (1977 йыл) үтеүгә ҡарамаҫтан, Ихсанов бер генә лә иҫкәртмә яһаманы. Һәр ваҡыт маҡтап килде. Күрәһең, уңайлы ваҡыт көткән.

1. Ихсанов, дивизияның Днепрҙы кисеү хаҡындағы "Ағиҙел" журналында баҫылған "документаль повес"ендә, беҙҙең унда оҙаҡ туҡтап тормай, дошман белмәһен өсөн, ашығыс – "с ходу" кисеүҙе инҡар итә. Беҙҙең Днепрҙы аҙ юғалтыуҙар менән уңышлы кисеүебеҙҙең төп сере лә шунда бит. Г.А. Белов үҙенең әҫәрендә (105-енсе бит): "58-енсе полкты – Кусимовты алдынғы отряд итеп тәғәйенләүемдә яңылышманым", -- ти. Тимәк, 58-енсе полкты алдан сығырға корпус командиры генерал Малеев түгел, ә Г.А. Белов тәғәйенләгән. Ихсанов хаталана. Белов фекеренә Малеев та ҡаршы килмәй, дөрөҫ тип таба.

2. Ихсанов үҙенең "На огненных копытах" тигән әҫәрен яҙғанда минең күп материалдарҙы (185 бит) алып файҙаланды, шуларҙан файҙаланып Ибраһим

Абдуллин яҙған “Шайморатов” драма әҫәренә соавтор булды. Китабын яҙып бөткәс, мин биш тапҡыр унан уҡырға һораным, ул уҡытманы, йәшерҙе. Мине бигерәк тә рейд материалдары ҡыҙыҡһындыра ине, сөнки үҙе унда булмаған кеше уны дөрөҫ яҙа алмай. Китабы баҫылып сыҡты, ә унда, бигерәк тә рейд өлөшөндә, ҡот осҡос хата (ул хаҡта мин һеҙгә -- обкомға яҙғайным инде). Ихсановтың, Ҡадиров китапҡа икенсе автор булырға теләгәйне, тигән фекере тулыһынса ялған. Ул китапҡа, Ихсанов көсләһә лә, мин ҡул ҡуясаҡ түгел: был минең үҙ выжданыма ҡаршы килеү булыр ине.

3. Белов китабының икенсе баҫмаһынан геройҙар фотоһын алып, үҙенекен ҡуйған, ти. Был инде яҙыусы кешегә ғәфү ителмәҫлек хыянат: китапҡа ниндәй үҙгәрештәр керетеү ул тик бер автор хоҡуғы. Мин уның әҫәренә бер төрлө лә ҡатнашым булманы. Г.А. Белов әлдә иҫән бит, үҙенән һорарға мөмкин. Клочковоны алғанда атлы атака булманы, уны Ҡадиров үҙе өҫтәгән, ти. Ә Г.А. Белов (92-нсе бит): “Был беҙҙең беренсе һәм уңышлы рәүештә ат өҫтөндә (һыбай) дошманға ҡаршы атака булды”. Миңә асыу тотоп, булған хәлде ниңә инкар итергә икән?.. Белмәйем, -- юҡ ерҙән йөй эҙләү. Дивизия командирының наградаларына шикләнә. Беловтың ордендары күп, мин уларҙы һанағаным һәм яҙғаным да юҡ. Үҙенән һорап белергә мөмкин.

4. Дивизия төҙөлә башлағандан алып, һуғыш бөткәнсе мин дивизияла, дөрөҫөрәге, үҙебеҙҙең 8 (7)-нсе атлы корпуста булдым. Ниндәй вазифалар үтәгәнде Г.А. Беловтың китабының 78-енсе битенән ҡарағыҙ. “Ҡадировты дивизиянан корпус резервына оҙаттылар”, -- ти. Ялған. Корпус политбүлек ҡаршыһында өс айлыҡ – һалдаттар һәм урындағы халыҡ араһында тәрбиәүи эш үткәреү өсөн лекторҙар әҙерләү (19 кешелек) курстары асылды. Шул курстар менән етәкселек итеү һәм уларҙы уҡытыу эше миңә йөкмәтелде. Үҙем штатта дивизияла торҙом. Курстар ябылыу менән кире дивизияға ДПК (парткомиссия) яуаплы секретаре булып ҡайтып эш башланым. Белмәгәнде ниңә яҙырға инде.

5. С. Зәйнуллин менән А. Чернов хаҡында мине ғәйепләү – артыҡ наҙанлыҡ. Мин “смерш” органында бер генә көн дә эшләмәнем. Улар политбүлеккә буйһонмайҙар. Улар хаҡында ысынбарлыҡты белергә теләгән кеше КГБ органына мөрәжәғәт итһен. Улар хаҡында материал уларҙа тулыһынса һаҡлана (Өфөлә).

6. Биштәкә ауылынан фәҡирҙәр бергәләшеп Красноусольск партизандарына барып ҡушылалар – был дөрөҫ хәл. Ә инде Совет Армияһына (действительную) Шайморатов 1919 йылдың 18 июлендә яҙылған хисаплана, мин шулай яҙам да. Әлбиттә, быға ҡаршы түгел мин.

7. Совет Армияһы архивындағы Шайморатов материалы №159 хисаплана. Ә хәбәрһеҙ юғалғандар исемлегендә -- №723. Мин бит Башҡортостан Дәүләт комиссияһы составында М. Шайморатов кәүҙәһен эҙләргә барғанда архивҡа үҙем кермәнем, ә беҙгә кәрәкле документтарҙы – М. Шайморатов делоһын беҙгә архивтан Генштаб офицеры алып килде, шунда мин үҙемә кәрәкле материалдарҙы күсереп алдым. Мин үҙ китабымда тап шулай тип яҙам бит. Архивта ултырҙым, тигәнем дә, яҙғаным да юҡ. Ниңә инде юҡты эҙләргә...

8. “1919 йылда Петроградта Ленинды тыңлау бәхетенә ирештем”. – Был минең китапта юҡ. Әммә ошо көнгә тиклем миңә уның, Шайморатовтың, “Ленинды

тыңланым" тигән хәбәре ҡолаҡта тора. Ҡайҙа, нисек тыңлағанын хәтерләмәйем. Ундай һөйләм юҡ минең китапта.

9. Һуғыш – һуғыш бит ул, Шайморатов, бәлки, Ихсанов әйткәнсә, граждандар һуғышында икенсе яра ла алғандыр. Хәҙер дөрөҫләүе ауыр. Әммә мин белгәне – бер яра. Янбаш һөйәгендәге ҡара эҙ раҫлай шуны. Мин шуны яҙам да инде.

10. Шайморатов 3-4 класс белеме менән эскадрон командиры була аламы, ти Ихсанов. Был инде тарихтан наҙанлыҡ. Буденный – 3 класс, Городовиков – 2 кл., Пархоменко 4 класс белемле һ.б. Тик Ворошилов ҡына 5 класс тамамлаған. Ә Блюхер? Ә бит улар эскадрон менән генә түгел, армия менән етәкселек итәләр.

11. Шайморатовтың ҡайҙа һәм ҡасан хеҙмәт итеүе тарихи дөрөҫ итеп һәм тулы итеп "Урал бөркөтө"ндә яҙылған. Уны бер кем дә боҙа ла, үҙгәртә лә алмай.

12. Шайморатовтың наградалары: дөрөҫ, беренсе Ҡыҙыл Байраҡ орденын ул 1938 йылда (№1858) ала. Тик Ихсанов: "Ҡытайҙағы хеҙмәте өсөн", -- ти. Ә ул наградаға реляцияла Шайморатовтың граждандар һуғышындпғы батырлығы һәм Ҡытайҙағы хеҙмәттәре күрһәтелә. 1921 йылғы Антонов восстаниеһын баҫтырыуҙа ҡатнашҡан – был дөрөҫ, сөнки Майкопта булған гарнизон, курсанттар шунда ебәрелә. Шуның өсөн дә ул восстание тиҙ үк бөтөрөлә (1921 йылдың 15 октябрендә).

13. Шайморатовтың исемле клиногы булмаған, дивизияла бер кем дә күрмәгән, ти Ихсанов. Штрафной батальонда ҡасып йөрөгән Ихсанов, әлбиттә, күрмәгәндер, ә бына дивизияның ысын ветераны гв. майоры Н. Бикмәтов күргән – уҡығыҙ: "Советская Башкирия", 1983, 13 февр., 4-енсе бит.

14. Минең китапта дивизия тарихын яҡтыртҡан 1384 музей ойошторолған, тип яҙылған. Бында музей һәм ***стендтар*** тип өҫтәргә кәрәк. (Быға Башҡортостан ғына түгел, Татарстан, Ырымбур өлкәһе, Белоруссия, Украина, хатта Польша ла керә).

15. "Минән башҡа Шайморатов бер аҙым да атламаны, минең һүҙҙән сыҡманы". – Бындай ялған – уйламай әйтелгән фекерҙе мин һис ҡасан һөйләгәнем дә, яҙғаным да булманы һәм буласаҡ та түгел. Мин уны оло белгес-командир, патриот итеп кенә күрһәтә киләм. Бына ошо дөрөҫ фекер ҡайһы берәүҙәргә оҡшамай икән, мин ғәйепле түгел.

16. Буденныйҙың Шайморатов хаҡындағы фекерен ҡайҙан алған икән, ти. Ул дивизияла (Украинала) булды. Оҙатыу ашы булды, митинг булды – шунда һөйләне. Бынан тыш, "Советская Башкирия", "Совет Башҡортостаны" газеталарында баҫылды. (Редакциялар Пушкин урамында ине). Мин бит Ихсановтан, бөтөн совет халҡы ҡан түгеп һуғышҡанда һин ниңә штрафной батальондан ҡасып, фамилияңды Исаевҡа алмаштырып, нимә эшләп йөрөнөң, ер ҡорто, тип һорамайым бит. Сөнки һорау алыу өсөн махсус органдар бар.

17. Мин бер ҡасан да, Ленин ордены менән бүләкләндем, тигәнем булманы. Был хаҡта минең яҙмаларҙы ҡарарға мөмкин. Кемдер быны хата яҙған икән, минең ни ғәйебем бар? Мине былай ҙа хөкүмәтебеҙ ситләп үтмәне.

18. 1942 йылдың 16 окт. Совет Армияһында комиссарҙар институты бөтөрөлдө. Был дөрөҫ. Ләкин беҙҙең корпус маршта, һуңынан рейдта булыу сәбәпле, беҙҙә ул үҙгәреш тик 1943 йылдың апрелендә генә үтәлде. Беҙ әле рейдтан "кубик", "шпал"дар менән сыҡтыҡ. Шуның өсөн дә минең әҫәрҙә "комиссар" һүҙе бик дөрөҫ һәм урынлы ҡулланыла. Корпус комиссары полковник Белов (гәрсә уны Ихсанов үҙ

китабында “Интернационал” йырлатып үлтерһә лә) корпустан 1943 йылдың 17 апрелендә генә китте. Дивизия комиссары Нәзиров 21 апрелдә генә вазифаһынан бушанды. Гв. майоры Әритҡолов дивизия штабы комиссары вазифаһын үтәгәндә 1943 йылдың 23 февралендә һәләк булды һ.б. Шул йылдың апрелендә генә беҙ погондар таҡтыҡ. Был – ысынбарлыҡты белмәү инде.

19. “Урал бөркөтө” китабы тышлығында Шайморатов түгел, ә Ҡадиров үҙе ултыра, ти. Бына бер һуҡырлыҡ! Минең менән Шайморатовты айыра алмаған кеше нисек итеп үҙен дивизия ветераны итеп хис итә лә, яҙа ла ала икән?! Минең бурка кейгән фоторәсем 1944 йыл Висла буйында төшкән, ә Шайморатовты Башҡортостан художниктары, уның төрлө рәсемдәренән күсереп, һуғыштан һуң ғына яҙғандар. Мин ул рәсемдең барлығын да белмәй инем. Уны тик 1982 йылда Кусимовтар Кавказға – дивизияға барырға әҙерләнгәндә Өфө офицерҙар йортона алып килделәр. Шунда ғына күрҙем. Мин китап тышына генералдың атҡа атланған, киң билдәле фотокарточкаһын урынлаштырыуҙы һораным, ләкин башҡалар баяғы рәсемде яҡшыраҡ күрҙеләр. Уны майор Баһауитдинов ҡайҙандыр алып килгәйне. Ғөмүмән, быны бутау – ахмаҡлыҡ. Минең менән Шайморатов – Ер менән Күк айырмаһы. Миндә бит уның 17 позала төшкән фотолары һаҡлана. Килеп ҡарарға мөмкин. Бына был инде – ғәфү ителгеһеҙ, юҡ ерҙән сүп эҙләү.

20. Ихсанов: “Корпус командиры генерал Борисов – илебеҙҙең ҙур патриоты, Борисов хаҡында яҙмайһығыҙ”, -- ти. Ғәйеп ҙур. Мин Борисовтың үтәнән-үтә кем икәнлеген белә тороп, нисек маҡтап яҙайым, ти? Кәрәк булғас, бына яҙам инде: алкоголик; иҫерек башы менән рейдтан сыҡҡанда Шайморатовты тыңламай, ғәмәлдә уның үлеменә сәбәпсе булды; үҙе (иҫерек хәлдә) айыу тиреһенә күмелеп санала йоҡлап барғанында немецтарға плен бирелде, унан беҙгә өҙлөкһөҙ листовкалар (үҙ портреты менән) яҙҙыртты, беҙҙе фашистар яғына сығырға өндәне. Һуғыш бөткәнсе немецтарҙа булды. Суд ваҡытында үҙенең бөтә ғәйебен Шайморатовҡа ауҙарҙы. (Обкомда уның хаты бар).

21. Исем-фамилиялар, ауыл исемдәре, офицерҙарҙың званиелары, партбилет номерҙары тураһында. Һуғыш бөтөүгә ҡырҡ йыл ваҡыт үтте. Күптәр һуғыш яландарында батырҙарса ятып ҡалдылар, күптәр тыуған йортона ҡайтып вафат булдылар, аҙмы-күпме бөгөнгө көндә йөрөп ятыусылар ҡартайҙы. Ә инде хәтер тигәнең ул көн дә тарҡала, һүнә килә. Шуға күрә айырым деталдәр хәтерҙә буталыуы ла бик мөмкин – был бит объектив хәл. Һуғыш ваҡытында –офицерҙарҙың званиелары көн дә үҙгәрә торҙо: бөгөн ул лейтенант, ә иртән инде капитан, майор... Шайморатов полковник ине, генерал булды; Кусимов майор ине, генерал булды; Хәбиров Сәйфулла өлкән лейтенант ине, полковник булды һ.б. Шуның өсөн, ваҡытын белмәй тороп, уларҙы баһалау хата. Партия билеты номерҙары ла шулай: билдәле булыуынса, бер нисә мәртәбә партия билеттарын алмаштырыу үткәрелде. Уларҙың номерҙары үҙгәрҙе. Миҫал өсөн: Шайморатовтың 1938 йылға тиклем яҙылған документтарында партия билеты номеры 083112. Ә инде 1938 йылдан һуң – 1324378. Ул уны Совет Армияһы Политуправлениеһы тарафынан ни бары 1938 йылдың 8 майында ғына ала һ.б.

22. Шайморатов Ленин ордены менән бүләкләнмәне, тиҙәр. Дөрөҫ түгел. Брянск фронтында уҙғарылған һуғыштарҙан һуң 97 яугир бүләкләнде, шул хаҡта исемлек бар, әммә унда Шайморатов, Нәзиров юҡ. Сөнки уларҙы корпус наградлай.

Бына бер ваҡыт Нәзиров Ҡыҙыл Байраҡ ордены тағып ҡайта дивизияға, ә Шайморатовҡа бер нәмә лә юҡ. Һуңынан хәл асыҡлана: Шайморатовҡа Ҡыҙыл Йондоҙ ордены бирергә булғандар. Ул уны, әлбиттә, алмай. Корпус хужалары үҙҙәренең хатаһын аңлай, Шайморатовҡа яңы реляция яҙып, уны Ленин ордены менән награддлайҙар. Ләкин был приказ һуңлап – беҙ маршта йәки рейдта ваҡытта килә. Шуға күрә ул уны тағып йөрөмәй вафат була. Бутарға ярамай: ул икенсе Ҡыҙыл Байраҡ орденын Мәскәүҙән Өфөгә китере алдынан ғына – 1941 йылдың 10 декабрендә ала (№532/2). Был иһә уның Мәскәү янында Доватор дивизияһында күрһәткән батырлығы өсөн.

23. Ихсанов: Шайморатовтың кәүҙәһен партизандар күмгән, имеш. Уйлап торһаң, башҡа һыймаç алдашыу. Улар йәшереп күмгәс, ауыл ҡарттары Романенколар нисек уны табып, Штеревкаға ҡайтарып күмәләр, ти? Икенсенән, ялан тулы үлек, яралылар ятҡанда (беҙҙекеләр ҙә, немецтар ҙа), унда ҡайҙан партизандар булһын, ти? Өсөнсөнән, беҙ үтеп китеү менән ул район фашистар менән тулыһынса уратылып, баçып алына. Һәр бер үлекте аҡтарып сығалар, яралыларҙы атып үлтерәләр. Ике иптәште: Паршин (корпус политбүлек начальнигы урынбаçары) һәм Лазаревты (корпустың "смерш" начальнигы) Штеревка сиркәүе ҡаршыһында икеһен ҡуша бәйләп, бензин һибеп, тере килеш яндыралар; Ленин орденлы уҡытыусы Матвееваны ауыл башындағы тиреçлеккә сығарып аталар...

24. Чернухинола һуғыштан һуң Ҡадиров булманы, ти. Ялған. Мин ике тапҡыр булдым. Шайморатовтың кәүҙәһен эҙләгәндә Ворошиловград өлкәһендә булмаған ауыл ҡалманы...

25. Ҡадировты дивизиянан бушаттылар, ти. Юҡ-буш һүҙ. Һуңғы 1944 йыл аҙаҡтарында дивизия тулыһынса интернациональ дивизияға әүерелде, уның составында 32 милләт вәкилдәре хеҙмәт итте. Политотделға корпуста ла (полковник Степаненко), дивизияла ла (полковник Покровский) яңы кешеләр килде. Әлибаев Сәғитте 58-енсе полкта милләтселектә ғәйепләп, уны дивизиянан бушатып, фронт резервына оҙаттылар. Шул айҡанлы мине, Әлибаевтың хатаһын күрмәгән, тип, тәүҙә 62-нсе полкка (16-нсы дивизия), шунан 52-нсе полкка (14-енсе дивизия – шул уҡ беҙҙең 7-нсе кавалерия корпусында) күсерҙеләр. Шул уҡ вазифаға – полк командирының полит. эш буйынса урынбаçары итеп. Шул вазифала һуғыш бөткәнсе хеҙмәт иттем. Ҡабатлап әйтәм: мин бер генә көнгә лә 7-нсе корпустан китмәнем. Минең хеҙмәт хаҡында генерал Г.А. Беловтың хатын мин У.Н. Бакировҡа ебәрҙем. Уға уҡ ебәрелгән хатта дивизия ветераны Нагаев минең хаҡта "беҙҙең Фурманов булдығыҙ бит һеҙ" тип яҙа.

26. Атаевтар эскадронында өлкән сержант Рәхмәтуллин да булған, тип яҙған, ти Ихсанов. Хата һүҙ һөйләй. Рәхмәтуллин улар составында булманы. Атаевтарға ярҙамға ебәрелгән өлкән сержант Багаев (Миәкәнән) төркөмөндә ине ул, һуңынан батырҙарса һәләк булды. Шулай тип яҙам да. Ләкин уçал фекерле кеше үҙенсә борғолай, күрәһең.

27. Мин генерал Кусимовты хурлап, Днепрҙы башлап ул түгел, 62-нсе полк кисте һ.б. тип бер ҡасан да, бер ҡайҙа ла һөйләгәнем дә, яҙғаным да булманы. Ниндәйҙер Ғиләжеваны миңә бәйләйҙәр, ул ханымды мин һис ҡасан белгәнем дә, күргәнем дә юҡ. Ихсанов шундай провакациялар аша минең менән Кусимов араһын

боҙоп, миңә ҡаршы үҙ файҙаһына уны – уның абруйын файҙаланырға тырыша. Мин бит һәр ваҡыт Кусимов хаҡында юғары фекерҙә.

Үҙем барып, тулыһынса һөйләп бирер инем, ләкин өйҙән сыға алмайым. Ҡарсығым бик ауыр хәлдә -- күрмәй ҙә, ишетмәй ҙә... Үҙемдең аяҡтар ныҡ ауырта, күҙ ҙә бик насар күрә. Был инде яҙыуымдан уҡ һиҙелеп торалыр. Аңлашылмаған урындары булһа, телефондан шылтыратығыҙ; мөмкин булһа, өйгә кереп сығығыҙ. Шуны онотмағыҙ: Шайморатов минең ағам да, энем дә түгел. Уны яҡшы белгәнем өсөн, оло патриотик генерал итеп ихтирам итеп, 35 йыл уның хаҡында яҙам.

Ихсанов: Ҡадиров дивизияла тәүҙә пропагандист булған, тигән юҡ нәмә яҙа. Бына минең документ: "Удостоверение личности №33. Старший политрук С.Р. Кадыров состоит на дейсвительной военной службе в 112 Баш. Кав. Дивизии. Штатная должность – зам. Начальника политотдела дивизии. 8 января 1942 года. Нач. Штаба капитан Зайцев".

Кем генә тәнҡитләмәһен, уның да үҙенә күрә файҙаһы бар. Шуға күрә мин Ихсановтың уҫал, ялған, хата фекерҙәрен артҡа ташлап, файҙалы яғын иҫкә алып, алдағы көндә үҙ эшемдә киң файҙаланасаҡмын. "Урал бөркөтө"н тиҙ арала эшкә ашырлыҡ итергә һүҙ бирәм. Үҙ-ара талашыу бөтһөн ине лә ижади эшкә тотонорға ваҡыт инде.

Мин һуңғы ун йыл эсендә 164 очерк, хәбәр яҙғанмын, 83 ғаиләнән рәхмәт хаты алдым. Минең материалдарҙа тактик йәки стратегик хаталар булыуы мөмкин түгел. Айырым ваҡ моменттарҙа ҡайһы бер етешһеҙлектәр бар икән, уларҙы тиҙ төҙәтеп була. Мин уларҙы эшләйәсәкмен.

Ихсанов "Саҡматояҡ аттарҙа" тигән китабының икенсе өлөшөн баҫтырырға йөрөй, мине общественный редактор булырға саҡырҙы. Мин: "Уҡып сыҡмайынса тороп ризалыҡ бирмәйем", -- тинем. Шунан һуң ул Нагаев Мөғинде алып, генерал Г.А. Беловтың тыуған көнөнә тура килтереп, Мәскәүгә баралар. 83 йәшлек ҡартты ҡунаҡ итеп, -- Нагаевты Белов ярата ине, сөнки ул яҡшы һуғышты, -- Беловтан Ихсановтың башҡортса яҙылған китабына фатиха бирҙертеп ҡул ҡуйҙырталар, шатланып ҡайтып китәләр. Һуңынан Белов миңә хат яҙа, һин уҡыныңмы уны, тип. Мин, күргәнем дә юҡ уны, тигәс, генерал: "Алдағандар бит мине", -- тип хат яҙа. Был инде алдашыуҙың сиге. Шул бәндә (Ихсанов) бөгөнгө көндә лә, оялмайынса, үҙен 112-нсе Башҡорт дивизияһы ветераны итеп яҙып йөрөй. Йолҡоп ташланған сүп!

Мин Башҡорт атлы дивизияһының үткән оло юлын тулыһынса яҙғаным юҡ, ә бына дошман тылына атаҡлы рейд хәлен минән башҡа тулы итеп кем яҙыр икән?.. Таныҡлы генерал М.М. Шайморатовты кем күтәреп алыр икән? Һәр хәлдә, һәләк булған яуҙаштарым хаҡында мин ғүмерем буйына намыҫым ҡушҡанса һәм көсөмдән килгәнсә эшләйем.

Оло ихтирам менрән: **С.Р. Ҡадиров**. 11.06.1983.

Адрес: Уфа – 25, ул. Дорофеева, 7, кв. 7. Телефон: 22-98-50.

Үлеренә алты ай ҡалғас яҙылған...

Шул уҡ йылда мәсьәләгә үҙ ҡараштарын белдереп ебәргән башҡа ветерандарҙың да хаттары бик фәһемле:

Дорогой друг Сабир Рахимович!

Я безмерно был обрадован получением Вашего письма еще в мае. У меня нет слов, чтобы оправдать свое молчание, ведь я своевременно не ответил на такое важное письмо от Вас.
Главное – хотелось сначала прочитать Вашу книгу и книгу генерала Белова о нашей дивизии. Все это я отложил на время отпуска, т.к. май – июнь у меня большая учебная нагрузка в двух местах, кроме того в научной лаборатории (для заводов).
В конце июня выехал на отдых в Крым. В Феодосии этих книг не оказалось. Читал их после возвращения в Казань. Вашей книги в Казани нет, выписали из Башкирской республиканской библиотеки. Она называется “Волганан Эльбаға ҡәҙәр (очерктар)”. Өфө, Башгосиздат – 1947.
Ваша работа конкретна, об эпизодах и людях. Книга Белова больше о корпусе, чем о 112-ой Башкирской. События от Сталинграда до рейда и сам рейд страдает отсутствием данных о героях и нет ход сражений и боевых эпизодов. В целом, она пока единственная работа, пожалуй так, о делах 112-ой (16 гв.) дивизии. Можно было дать более подробную биографию Шаймуратова.
В каком плане Вам нужны описания эпизодов о рейде? Я мог бы написать о том, как ночью состоялся “военный совет” в ночь перед тем как выйти из рейда, как я получил распоряжение Шаймуратова поехать в полк и дать распоряжение о переходе в наступление, потом ждал на окраине деревни прибытие штаба во главе Шаймуратова, о том, как ему я доложил, передал лошадей Ариткулову (мой коневод с лошадьми где-то остался и я перед выходом остался без лошадей), о том как мы с Черниковым возглавили группу бойцов и офицеров.
Перед выходом мы стояли у стога соломы с начальником разведки Гуловым (Миннигуловым) и пели романс в шутку “Была бы ночка да ночка потемней, была бы тройка да тройка порезвей”, намекая на то, что для выхода к своим нужна темнота и хорошие лошади. Но сражение, вернее бой, началось уже тогда, когда начало светлеть. Я идя пешком сзади колонны наблюдал, как падали лошади, как был сражен Шаймуратов и другие, как снег стал красным от крови людей и лошадей. В это трудное времы мне дал лошадь (заводную) Черников и, пожалуй, это меня и спасло.
Гулов был с лошадьми, он оказался рядом с Шаймуратовым, поэтому и погиб. А в книге Белова о нем ничего не сказано, а ведь он был боевым офицером штаба и лучшим коммунистом.
Жив ли Ихсанов (он работал в редакции)? Я всегда стоял и стою, что он виновен в самоубийстве Карная – редактора газеты. Прав ли я?
В феврале – июне четыре месяца буду жить в Москве, увижу т. Белова. Пришлите его адрес, телефон.
Ш.С. Салитов, бывший секретарь первичной парторганизации штаба дивизии.
Һәм йәнә:

Ком. Сәләм һеҙгә, Сабир Рәхимович!
...Ихсановтың һеҙгә яла яғып маташыуына асыуландым. Кемгә нисек, ә уға ул алама эштән тәүбә итергә, кешегә кешесә яҡын килеү юлына баҫырға ваҡыт ине бит инде!
Миңә билгеле булыуынса, Һеҙ, 62-нсе полкка килгән көндән башлап, һәр көн һәм төн, һәр сәғәт һәм минут ут эсендә булдығыҙ. Смагорина ваҡиғаһын, Черниговөсөн

алышта лесник өйөндәге хәлде, Одер аша беренселәр сафында килеүегеҙҙе, шунда ҡанға сәсәп ҡаты яраланып йығылыуығыҙҙы ғына булһа ла белгән кеше, намыҫы булһа, “Һеҙ тылда яттығыҙ!” тип әйтә алмаҫ ине. Эттең Айға өрөүенә оҡшатам мин был яланы. Бүтән тиң юҡ быға!

Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында бер генә һөжүмдә, атакала, оборонала ҡатнашмаған, ҡоралһыҙландырылып әсир ителгән тере фашисты, уныһын да әле ДОТ тирәһендә генә күргеләгән кешенең хәрби батырлыҡ үрнәге күрһәтеүселәргә дөрөҫ баһа биреүе бик тә шикле бит.

Шайморатовтың мәйетен, Штеревка поселогы шахтерҙары ярҙамында, башлап мин таптым һәм мәйет шул поселок клубы ихатаһына килтереп күмелгәйне.

Дәүләт комиссияһы председателе Ҡадиров, профессор по судмедицине Кузнецов, фотограф Якубов һәм мин—Ғәбитов... Кузнецовтың мәйеттең кемлеген билгеләп төҙөгән актыһы, минең һәм Һеҙҙең Предверхсовета БАССР Ниғмәтжановҡа яҙып биргән докладнойҙар Верхсовет архивында һаҡлана лаһа!

Сәйфулланың был мәсьәләгә ҡыҫылыуы аңлашылмай. Ул, Донбассҡа барып, беҙҙең кавкорпустың ике дивизияһы юҡ ителгән урындарҙа тикшереү үткәргәнме ни?..

К. Ғәбитов. 25.04.1983.

Миңә ҡалһа, бер-береһенә ҡаныҡҡан ошо өс ветерандың да, бигерәк тә дивизия ваҡиғаларына теүәллекле С. Ҡадировтың, дивизия тураһындағы яҙмаларының ташҡа баҫылып сығыуына ыңғай ҡарайым, сөнки ваҡыт иләгенән иләнгәндә кәбәктәре елгә оса, тос бойҙайҙары ғына ҡала. Тәғәйен Әхтәм Ихсанға килһәк, нәшриәттең һорауы буйынса мин уның китабының төҙәтелгән һәм өҫтәлгән һуңғы баҫмаһына (автор уның донъяға сығыуын күреп өлгөрә алманы) ыңғай рецензия яҙып бирҙем, уны һис шикһеҙ баҫып сығарыу кәрәклеген белдерҙем. Һәм ул китап, тәжрибәле әҙип Ноғоман Мусиндың игелекле ҡулынан тиҙләтелеп, киң ҡатлам уҡыусыларға барып етте, Иншә-Алла.

Дивизиябыҙ тарихындағы иң фажиғәле төйөн булған рейд тураһында унда ҡатнашмағандарҙың (Ә. Ихсан, С. Әлибаев) яҙып маташыуы хата өҫтөнә хата тыуҙырғанлыҡтан, һуңғыһының шул хаҡтағы ҡулъяҙмаһын редакцияла һағайып ҡаршыланыҡ һәм, яҡшылап танышып сыҡҡас, шул рейдтың атаҡлы ҡатнашсыларының береһе отставкалағы гв. полковнигы С.Х. Хәбировҡа уҡырға бирҙек. Абруйлы офицерҙың рецензияһы шаҡтай ҡаты булып сыҡты:

Тарихты дөрөҫ яҙайыҡ

“Ағиҙел” журналы редакцияһынан (Й.Ә. Солтанов) миңә, уҡып фекер әйтеүемде һорап, С.Р. Әлибаев иптәштең ҡулъяҙмаһын бирҙеләр. Унда беҙҙең Башҡорт атлы дивизияһының 1943 йыл февраль айында дошман тылына тәрән рейды тураһында һүҙ бара. Дивизиябыҙ тарихындағы был героик битте йәш быуынға асып бирергә тырышыу, әлбиттә, маҡтаулы һәм изге эш, ләкин унда хаталарға һис юл ҡуйылмаһын ине. Автор үҙе рейдта ҡатнашмағанлыҡтан, байтаҡ ҡына ваҡиғаларҙы, үкенескә ҡаршы, йә боҙоп, йә уйлап сығарып, йә имеш-мимештәргә таянып тасуирлай, минеңсә. Дошман тылына үтеп кереүҙе һүрәтләүҙән үк башлана был етешһеҙлек. Шуға күрә, С.Р. Әлибаев иптәштең был әҫәрен уҡыусылары баштан уҡ айыҡ фекер йөрөтһөн өсөн, рейдҡа кереү барышының туранан-тура үҙемә

ҡағылышлы өлөшөн үҙ күҙҙәрем менән күргәнемсә яҙып биреүҙе бурысым һанайым.

Һүр. 11. С.Х. Хәбиров

Батальон комиссары С.Р. Әлибаев хеҙмәт иткән 275-енсе (ул ваҡыттағы командиры майор Иҙрисов) һәм 313-өнсө кавалерия полктарыбыҙ 1943 йылдың 5 ғинуарында Морозовск ҡалаһында тылдан өҫтәлмә көстәр (пополнение) көтөп ҡалдылар. 294-енсе кавалерия полкы (командиры подполковник Г.Е. Фондеранцев) һәм 101-енсе артиллерия-миномет дивизионы (командиры өлкән лейтенант С.Х. Хәбиров) иһә корпустың башҡа частары менән бергә һуғыша-һуғыша, Морозовскиҙан ҡасҡан фашист ғәскәрҙәрен ҡыуып китеп, Тацинская станцияһын һәм байтаҡ ауылдарҙы ҡоллоҡтан ҡотҡарып, немец ғәскәрҙәрен Северский Донец йылғаһы аръяғына ҡыуып сығарҙы, 18 ғинурарҙа Усть-Белая Калитва ҡалаһын азат итте. 294-енсе полк шул ыңғайҙан 101-енсе артдивизион уты ярҙамында боҙ өҫтөнән баяғы йылғаны аша сығып, 79,9 ҡалҡыулығын алып, оборонаға күсте. Ә артта ҡалған баяғы 275 һәм 313-өнсө полктар, Морозовскиҙа өҫтәлмә көс алғандан һуң, унан китеп, беҙ азат иткән Погорелово һәм Поповка ҡасабаларында тупландылар. 28 ғинуарҙа 275-енсе полк Усть-Белая Калитвалағы 294-енсе полкты алмаштырҙы, ә 294-енсе полк артабан хәрәкәт итте (көнбайышҡа). 1 февралдә 275-енсе полкты 3-өнсө армияның 54-енсе уҡсы дивизияһы алмаштырҙы. Ә Әлибаев иптәштең яҙмаһында 54-енсе дивизия, фашистар фронтын йырып, С. Әлибаев хеҙмәт иткән шул 275-енсе полкты дошман тылына керетеп ебәрмәксе, ләкин был дөрөҫ түгел — алмаштырҙылар ғына. 275-енсе полк 5 ғинуарҙан (Морозовск) алып 294-енсе полкты алмаштырғанынаса бер генә лә хәрби операцияларҙа ҡатнашманы.

Погорелово ҡасабаһында биш тәүлек буйына алдағы хәрәкәткә әҙерлек барғанда, киҫҡырын майор Иҙрисов минең фатирға килеп, һөйләшеп ултырҙыҡ. Ҡазан хәрби училищеһендә бергә уҡығанды һәм күптән түгел булып үткән һуғыштарҙы, бигерәк тә 275-енсе полктың (командиры майор Т.Т. Кусимов ваҡытында) Блиновск тирәһендәге бәрелештә алға дөрә алмауы арҡаһында дивизиябыҙ тотҡарланып, 25 ноябрҙә немец самолеттары килеп өлгөрөүен, беҙҙе көнө буйына бомбаға тотоуын хәтерләнек. Был хәл полк командирының ҡаушап ҡалыуы арҡаһында килеп сыҡты (шуны иҫтә нык тотайыҡ!). Һәм алда торған бурыстар тураһында һөйләштек.

С.Р. Әлибаевтың, имеш, майор Иҙрисов һалдаттарҙың араҡыһын эсеп бөтөргән, тип яҙыуы ялған — командирға нахаҡ яла яғыу был. Мин биш көн буйына уның менән бергә булып, иҫереклеген, йәки араҡы еҫе килгәнен һиҙмәнем.

7 февралдә Давыдово — Куриленко утарҙары төбәгендә тупланырға әмер алып, ҡараңғы төшөүгә мин шунда килеп еттем. М.М. Шайморатовты эҙләп табып, 101-енсе артдивизион килгәнлеген белдереп, ә 1-енсе пушка батареяһы артподготовкаға

киткәндән һуң килеп етмәгән әле, тигәс, көтәбеҙ, килгәс тә әйтерһең, тине. Шунда уҡ алға ҡуйылған хәрби бурысты нисек аңлауым тураһында һораны. Әйтеп бирҙем: “101-ый артдивизион следует за 275-ым кавалерийским полком по маршруту Давыдово — Куриленко — Ивановка — Ново-Анновка. Сосредоточиться к исходу дня в хуторе Васильевка”, — тинем. Шул урында мине төҙәтеп: “Село Ново-Анновку обходить с права, двигаться по балке!” — тине.

1-енсе 76 миллиметрлы батарея килеп етеү менән 275-енсе полк артынан ҡуҙғалдыҡ.

Иртән 8 февралдә Ново-Анновкаға етер алдынан мин, исемһеҙ ҡалҡыулыҡта күҙәтеп торғаным килеш, үҙемдең дивизион колоннаһын үткәреп ебәреп, аттарҙың, һуғышсыларҙың хәлдәрен белгәндән һуң, колонна башына килеп етеүемә, Иҙрисов та үҙенең колоннаһын алға үткәреп бөтөп, икебеҙ тап килештек, 300 — 400 метр арауыҡта һөйләшеп барҙыҡ. Уның колоннаһы туҡталып, минең колонна уның колоннаһын артта ҡалдырып үтә башлағас, ни күрәм: Иҙрисов полкы исемһеҙ ҡалҡыулыҡтың һул яғына (М.М. Шайморатов ситләтеп үтергә бойорған Ново-Анновка яғына) боролоп китеп бара... Дивизионымды ҡалҡыулыҡтың уң яғына үткәреп ебәреп туҡтаттым һәм шунда уҡ Иҙрисовҡа: “Полкыңды кире бороп, был юлға төшөр”, — тип тәҡдим иттем.

Ново-Анновканан немецтар бер орудиянан ата башланылар быларға. Мин ҡабат ҡалҡыулыҡҡа менеп, ҡайҙан атҡандарын ҡарағанда, Иҙрисов, йүгерә-атлай, полкының эскадроны ятҡан ергә етеп бара ине. Мин, беҙҙең йүнәлештә йәйәүләп Г.Е. Фондеранцев (294-енсе полк командиры), уның артынан штаб башлығы капитан Красиков һәм 20-ләп һыбайлы штаб кешеләре беҙҙе янлап уҙып барғанын күргәс, йүгереп төшөп, Г.Е. Фондеранцевтан, 294-енсе полкты тотанаҡларға, тигән бойороҡ алдым да шул полк артынан ҡуҙғалып киттек. Ә 275-енсе полк баяғы ҡалҡыулыҡтың һул яғында немецтар утына ҡаршы позицияла ятып ҡалды, полк командиры Иҙрисов шунда яралана. Дивизияның башҡа полктары маршрут буйынса хәрәкәтен дауамланы.

Васильевка йүнәлешендә тимер юлды аша сыҡҡас, Ворошиловградҡа (Луганск) ҡарай балка (тәрән соҡор) буйлап йүнәлдек. Балка осланған урында һул яҡка — Васильевкаға табан боролғанда уң яҡтан (Ворошиловград яғынан) 2 танк килеп сыҡты ла колонна алдынан барған һыбайлыларға атты, снарядтары һыбайлылар араһында ярылды. Уларҙың артынан — Г.Е. Фондеранцев кошовкаһы (арҡалы сана) бара, ә ул үҙе минең кошовкала икәү бергә ултырып килә инек. Арттараҡ килгән 1-енсе батарея командиры өлкән лейтенант Миңлеғол Гәрәйев ут асып, танкыларҙы ҡыуҙы. Ул көндә шунан башҡа бер урында ла һуғыш булманы. Дивизия штабы һәм 101-енсе артдивизион — Васильевка утарында, 294-енсе полк — Ворошилов исемендәге совхозда, 313-өнсө полк — Петровский ҡасабаһында, корпустың 55-енсе дивизияһы — Розолиновка ҡасабаһында, 21-енсе дивизия менән корпус штабы Тельман исемендәге совхозда тупландыҡ.

9 февраль көнө үҙемдең командирҙарҙы алып, ҡайҙа ут позицияһы, ҡайҙа күҙәтеү нөктәһе урындарын тәғәйенләргә рекогносцировкаға сығып, Петровский ҡасабаһынан башланыҡ. Петровский ҡасабаһынан Давыдово утарына табан тәрән балка һуҙылған. Балка төбө — һыу (боҙ), уң яғында — тау, шул тауҙан беҙгә — Давыдово утары, ә уның уң яғында — Ворошилов исемендәге совхоз һәм шунан Давыдовкоғаса һуҙылған тәрән соҡор күренә. Эштәрҙе тамамлап ҡайтып килгәндә

ҡараңғы төшә башлағайны. Күрәбеҙ: 294-енсе полк шул Петровский ҡасабаһына етеү менән һулға боролоп, балка буйлап Давыдово утарына табан йүнәлде, уның артынан 313-өнсө полк килә.

Давыдово утарында немец пехотаһы, танкылары һәм артиллерияһы тупланғанын беләбеҙ. Минең 101-енсе артдивизионға тейешле ваҡытында шуларға ҡаршы ут асырға бойоролоуы сәбәпле, һуғыш һыҙығына сыҡтыҡ. Кистән Давыдовоға барып етеүебеҙ менән үк, немецтар ут асты. Таң атҡанғаса һуғышта дошман үҙенең көстәрен арттырғандан-арттыра барып, төш ауышҡас, беҙҙең өҫкә яуҙырылған көслө артиллерия утынан һуң, атакаға күсте. Дошман пехотаһы үҙҙәренең артиллерия, миномет һәм танкыларының ут ләүкетеп тотанаҡлауы ярҙамында шыуыша-шыуыша килеп етеп, инде беҙҙең өҫкә атакаға ташлана ғына тигәндә, 101-енсе артдивизион кәртәләү уты (заградогонь) яуҙырҙы ла, алдан уҡ ҡарҙы ҡаҙып әҙерләп ҡуйған икенсе һыҙыҡҡа (минең күҙәтеү нөктәһе рәтендә) күсеп, ҡар окоптарҙан дөмбәҫләргә тотондо фашистарҙы. Шул арала миномет батареяларын Петровский ҡасабаһына күсерҙек, ә пушка батареяһы балка буйлап беҙҙең артҡа төшөргә маташҡан немецтарға туранан-тура тоҫҡап ата башланы. Аталар, ләкин снарядтары ярылмай...

Дошман ныҡ яҡынайғас, артиллеристарым йәнә позиция алмаштырҙылар. Ҡулымда бер орудие, миномет та ҡалмағас, минән арттараҡ (тау түбәһендәрәк) дивизия политбүлек башлығы вазифаһын башҡарыусы майор С.Р. Ҡадиров иптәште күреп ҡалдым. Йүгереп барып: “Ниңә көс бирмәйһегеҙ?” — тип һорағас: — “Ана, эҫкерт ҡырында коневодтарҙан башҡа көс юҡ!” — тине. Эҫкерт артынан М.М. Шайморатов килеп сыҡты. Уға табан ашығып, тауға менә башланым. Бик ныҡ асыулы йөҙ менән, “ҡайҙа немецтар?” тип һораны минән. Ҡулымды һуҙып күрһәтә башлағайным, “картанан күрһәт!” тине. Уның картаһынан: “бына бында беҙ торабыҙ, ана, балка буйлап немецтар килә, бына был беҙ торған ерҙән 200 метрҙа беҙҙекеләр килеп ятты; уларҙың алдында (аралары 100 метр ҙа юҡ) немецтар цепта”, тинем, тау түбәһенәрәк менеп, уң яҡтан килеүсе немецтарҙы күрһәттем.

Шунан һуң күҙәтеү нөктәмә табан атлай инем, оборонала ятҡан беҙҙең һуғышсыларҙың ҡапыл йүгерешеп тауҙан төшөп килеүҙәрен күрҙем. Арттарынан аҡ халатлы немецтарҙың баҫтырыуын абайлап, мин дә төшә башланым. Шул тауҙан ҡар һыуы ағып төшә торған соҡор эсенән, атын етәкләп, дивизияның артиллерия командиры майор Вәлиев китеп бара. Мин уға ҡысҡыра-ҡысҡыра төшә торғас, тауышымды ишетеп көтөп алды:

— Мә, минең атҡа мен дә тиҙерәк миномет батареяһынан ут ас — тау башындағы ике эҫкерткә!” — тине.

Һыбай сабып бара инем, кәртәләүсе әтрәт (заградотряд), автоматтарын тоҫҡап, бер кемде лә үткәрмәй. Химия эскадроны командиры мине танып, үткәреп ебәрҙе.

Өлкән лейтенанттар Рябов һәм Ғәзимуллин иптәштәр батареяларынан ут асырға әҙер инеләр. Рябовҡа — уң яҡтағы, Ғәзимуллинға һул яҡтағы эҫкерткә атырға ҡушып: “Дистанция 1200 метр. 4-әр мина менән беглый огонь!” — тип команда бирҙем. Икеһе лә берәр минометтан берәр мина осорҙолар, шунан һуң башҡа миналарын залп менән немецтар өҫтөнә яуҙыра башланылар. Шул ваҡыт эргәмә РС (“Катюша”) командиры килеп, минән: “Нисә километр алыҫлыҡҡа атаһығыҙ?” — тип һораны. — “Ҡайҙа установкаң?” — тигәс: — “Ана, баҡса артында дүрт

установка”, — тине. Күҙәмәләп үлсәнем дә: “1350 метр, тиҙ генә ике эҫкерткә ут ас!” — тип бойорҙом. Шул уттан һуң иптәш Г.Е. Фондеранцев тауға бер взвод ҡылыслыларҙы мендереп ебәрҙе. Эҫкерттәр ҙә юҡ, бер бәндә лә юҡ, тип төштөләр.
Бына шулай Давыдово утары аша Алексеевка ҡасабаһын үтеп һәм Ворошиловск станцияһында тимер юлды киҫеп сығып Дебальцевоға һөжүм итеү планын бер ынтылышта үтәй алмағас, баяғы Петровский ҡасабаһында М.М. Шайморатов дивизия алдына яңы бурыс ҡуйҙы һәм алда үтәсәк маршуртты минең картаға ла үҙенең ҡәләме менән һыҙҙы.
— Таң атыуға Успенкоға барып етергә. Унда машиналар менән боеприпастар килер, ауыр булһа ла, күп итеп алырға тырыш! — тине. — Беҙҙең төп көс — 294-енсе кавалерия полкы һәм 101-енсе артдивизион, дивизияның авангарды булаһығыҙ. Фондеранцев, ана, ҡыҙыл таш йортта — уның менән ныҡ элемтә тот. Успенкола мине табығыҙ! — тип өҫтәне лә: — Ғәлимов килдеме? Мин корпус командиры Борисовҡа киттем...
Инде ошоларҙы баяғы иптәштең ҡулъяҙмаһындағылар менән сағыштырып ҡарағыҙ — Ер менән Күк араһы...
С.Р. Әлибаев бөтөнләй ҙә икенсе төҫтә яҙа. Әгәр ҙә үҙе шул бәрелештә булған булһа, шул хәтлем дә оҙаҡ — көнө буйы атҡан батарея тауыштарын ишетер ине... 10 февралдә дивизияның бөтә подразделениелары тупланды Петровскийҙа, шул уҡ көндә иртәнге сәғәт 9-ҙа 294-енсе полк артынан 101-енсе артдивизион ҡуҙғалды.
С.Р. Әлибаев яҙғандай тәртипһеҙ рәүештә сигенмәнек, ә, һуғыша-һуғыша, берәр метрлап ҡалдыра килдек. Аҙаҡҡы рубежда немецтың бер һалдаты ла ҡалмай ҡырылып бөттө.
Әлибаевтың, сигенеп килгәндәрҙе йыйып, ҡабат алға алып барҙым, шунда яраландым, тигәне — бөтөнләй ҙә дөрөҫ түгел.
Иҙрисов (275-енсе полк командиры) рейдҡа инергә барғанда, баяғыса, Ново-Анновка янында яраланып ҡалды, уның 275-енсе полкы ла шунда ҡалды. Ә Әлибаевтың иһә 7 февралдә Давыдово — Куриленко тирәһендә үк тороп ҡалыуын Иҙрисов үҙе һөйләгәйне миңә (өҫтә әйтелгәнсә, икәүләшеп Ново-Анновкаға етеп барғанда). Һуғыш эпизодтарын тикшереп өйрәнеү өсөн уның ҡулъяҙмаһында иғтибарға алырлыҡ бер нәмә лә юҡ. Автор үҙенең шул тиклем дә ҡара эсле икәнен асыҡ күрһәткән һәм гел генә үҙен батыр, үткер боевой комиссар итергә тырышҡан.
“Бер-нисә иптәш рейдҡа керер алдынан, төҫтәре бөтөп, тегендә керәбеҙ бит, малай, тип шөрләне”, — тип яҙа ул һәм шундайҙарҙың береһе итеп Аритҡоловто күрһәтмәксе. Майор Д. Аритҡолов һис тә ҡурҡаҡлыҡ арҡаһында түгел, ә разведчиктар төркөмө менән рейдтан үҙҙәре айырым сығырға тырышып китеп юғалдылар. Ҡайҙан башы еткән икән был авторҙың шундай ҙа яла-яуызлыҡтарҙы уйлап сығарырға?!. Дошман фронтын ярып рейдтан сыҡҡан саҡта дивизияның күп өлөшө батырҙарса һәләк булды. Фашистар тылында ни булырын алдан уҡ ныҡ һиҙенеп, буғай, Әлибаев иптәш үҙе бит Давыдово — Куриленко тирәһендә үк тороп ҡала...
Д. Аритҡоловто дивизия командирының сәйәси ярҙамсыһы итеп яҙа, ләкин ул дивизия штабының политруғы ғына ине (Әлибаев шаштыра).
Әлибаев иптәш бик күп танк яндыра, ә ғәмәлдә 45 миллиметрлы полк пушкаһының бәләкәй генә танкеткаға көсө етә ине, әгәр ҙә ул иң күбе 400 метр алыҫлыҡта булһа.

Танкының броняһын тишә торған снарядлы орудиелар менән 101-енсе артдивизионда ғына булып, унда дүрт орудиелы бер батарея, ә уның командиры Миңлеғол Гәрәйев ине. Дошман тылына инеп барғанда Юлино-2 утары янында ул бер танкыны яндырҙы, ул да булһа, тәтәй-тәтәй, Ивановка ҡасабаһына табан ҡасты. Башҡа дивизияларҙың артиллеристары һәм корпустың танкыларға ҡаршы дивизионы ул әйтелгән осорҙа бер танк та яндырманылар.

Һуғыш яланында Әлибаев иптәштең үҙе яҙғанынса батырлығын күрмәнем. Тамағына һыуыҡ тейһә лә, ҡулына шырау керһә лә, санэскадронға киткәнен күп ишетергә тура килде. гҮҙенең полк командиры Иҙрисовты, дивизия политбүлеге башлығының урынбаҫары Ҡадировты, дивизия политбүлеге башлығы Черновты, дивизия комиссары Нәзировты һәм хатта дивизия командиры Шайморатовты кешелектән сығарып ташлай, иң йүнһеҙ әҙәмгә һанай, ә үҙен иң аҡыллы кеше итеп күрһәтә.

Күп һүҙ китапҡа ғына ярай, тиһәләр ҙә, ул яҙған был һүҙҙәр бер ҡайҙа ла ярамаҫ. Әгәр ҙә рәсми рецензия кәрәк тиһәгеҙ, дивизияның ветерандар Советына биреп уҡытығыҙ ҙа ҡарарын яҙҙыртып алығыҙ.

С.Х. Хәбиров.

Ветерандар Советын мәшәҡәтләп торманыҡ – былай ҙа аңлашыла ине...

Ветерандарҙың рәсми мөрәжәғәтнамәләре

1. Первому секретарю обкома КПСС тов. Нуриеву З.Н.

Председателю Президиума Верховного Совета Башкирской АССР тов. Загафуранову Ф.З.

Председателю Совета Министров Башкирской АССР тов. Акназарову З.Ш.

1 декабря 1966 года исполняется 25 лет со дня формирования 112-ой, впоследствии 16-ой Башкирской гвардейской кавалерийской дивизии.

Как Вам известно, эта дивизия своими боевыми подвигами стала одной из лучших дивизий Советской Армии.

За время войны она прошла с боями более 7500 километров боевого пути, начиная из-под Брянска – Воронежа до Сталинграда, через донецкие степи, Украину, Западную Белоруссию до Варшавы, через Вислу до Балтийского моря, Одер – Берлин до Эльбы.

За три года своих беспрерывных боевых действий дивизия была награждена орденами Ленина, Боевого Красного Знамени, Суворова, и Кутузова 2-ой степени.

В связи с двадцатой годовщиной победоносного окончания Великой Отечественной войны Указом Президиума Верховного Совета Украинской ССР боевые заслуги дивизии – ее личного состава в период боевых действий дивизии на территории УССР в освобождении г. Луганска (бывш. Ворошиловград), Донбасса, освобождение г. Чернигова, форсирование Днепра, освобождение Западной Украины отмечены юбилейной медалью.

Начиная с августа 1943 года до конца войны за успешное выполнение дивизией боевых заданий командования приказами Верховного Главнокомандующего было объявлено 15 благодарностей и столько же раз столица нашей Родины г. Москва

салютовала в честь ее воинов. К концу войны дивизия насчитывала в своем составе 78 Героев Советского Союза, а все остальные офицеры, сержанты и солдаты были награждены тремя и более боевыми наградами.
Указом Верховного Совета СССР все офицеры, сержанты и солдаты были награждены медалбю "За оборону Сталинграда", "За освобождение Варшавы" и "За взятие Берлина".
В целях увековечения памяти павших за нашу Родину воинов этой дивизии, группа ветеранов дивизии по своей инициативе учасвует по сбору материалов и сведений, относящихся к периоду формирования и боевых действий дивизии, подвигам ее бойцов и офицеров, систематически выступает с воспоминаниями в печати, выезжает в районы и города республики, гда также выступает на собраниях с воспоминаниями, направленными на военно-патриотическое воспитание молодежи и школьников.
Башгосиздатом выпущена первая книга – документальная повесть "На огненных копытах", повествующая о героических подвигах воинов дивизии. Ведется работа по сбору материалов к изданию второй части книги.
В краеведческом музее создан небольшой уголок истории дивизии. Музей намерен расширить этот уголок, но не имеет средсв.
Тысячи бойцов и офицеров погибли в боях под Сталинградом, в донских степях, Донбассе – на полях Украины, Белоруссии. На могилах погибших местные советские и общественные организации установили обелиски без их имен и фамилий. Руководители этих органов просили через наших представителей соодействовать в восстановлении имен и фамилий погибших, чтобы занести их на надгробные обелиски. Для этого необходимо обратиться в Главное архивное управление Советской Армии.
Ветераны дивизии обращаются к Вам с просьбой отметить 25-летний юбилей дивизии с проведением следующих мероприятий:
1. Поручить редакциям областных газет и журналов, Комитету по радиовещанию и телевидению более широко освещать на страницах газет и журналов, в передачах по радио и телевидению боевые эпизоды этой дивизии по воспоминаниям ее воинов.
2. В целях увековечения памяти воинов дивизии наименовать сквер возле Башкирского театра оперы и балета в сквер имени воинов 16-ой гв. кавдивизии с установлением обелиска.
3. В с. Петровском Луганской области на могиле генерала Шаймуратова и воинов дивизии, и г. Усть-Новая Калитва Ростовской области на могиле 30 воинов и Героя Советского Союза лейтенанта Атаева, повторивших подвиг героев-панфиловцев, установить обелиск от башкирского народа.
4. Дать указания соответствующим министерствам об изыскании в этом году 5-6 тысяч рублей для выдачи краеведческому музею со специальным назначением на финансирование расходов, связанных с созданием уголка истории Башкавдивизии.
5. Поручить группе товарищей, включая ветеранов дивизии, внести в Совет Министров Башкирской АССР предложение, связанное с мероприятиями по установлению обелисков на могилах генерала Шаймуратова, героев-атаевцев и на

некоторых других, где захоронены героически погибшие воины с тем, чтобы эти мероприятия осуществить в течение 1967 года.

По поручению ветеранов дивизии председатель инициативной группы гв. полковник в отставке – **С. Хабиров.** 12.10.1966.

Документтың һуңғы битенең артында яҙыу: "Тапшырылды: 13.10.1966. ***Ә. Ихсан*".**

2. Председателю Президиума Верховного Совета БАССР тов. Султанову Ф.В.

Председателю Совета Министров БАССР тов. Акназарову З.Ш.

Как Вам известно, сформированная в период Великой Отечестьвенной войны 112-ая Башкирская кавалерийская дивизия за время войны прошла с боями более 7500 километров боевого пути, начиная из-под Брянска – Воронежа до Сталинграда, через донецкие степи, Украину, Западную Белоруссию до Варшавы, через Вислу до Балтийского моря, Одер – Берлин до Эльбы.

За три года своих беспрерывных боевых действий дивизия стала гвардейской, награждена орденами Ленина, Боевого Красного Знамени, Суворова и Кутузова 2-ой ст.

Начиная с августа 1943 года до конца войны за успешное выполнение дивизией боевых заданий командования приказом Верховного Главнокомандующего было объявлено 15 благодарностей и столько же раз столица нашей Родины г. Москва салютовала в честь ее воинов. К концу войны дивизия насчитывала в своем составе 78 Героев Советского Союза.

Основные боевые действия совершались в сотнях населенных пунктах выше указанных направлений и, естественно, в этих пунктах были значительные потери солдат и офицеров, которые погребены в братских могилах. Я побывал в г. Усть-Белая Калитва Ростовской области и по маршрутам рейда дивизии в Ворошиловградской области и был очевидцем того, что на хорошо оформленных надмогильных памятниках и обелисках нет имен погребенных солдат и офицеров нашей дивизии, в то же время, когда имеются таковые на обелисках других дивизий участников совместных действий.

Мне, как постоянному учанику боевых действий дивизии, работавшему в масштабе всей дивизии, известны места всех крупных сражений. Братские могилы могут быть в населенных пунктах: Тербуны-II, Бурки Курской, ныне Липецкой области (на участке Брянского фронта); в г. Усь-Белая Калитва, станциях Чернышки, Морозовская, Тацинская, в селах Аблеевка, Аржановское, Красный Яр, Дееп, Поповка, Сиволобово (в составе 5-ой танковой армии Юго-Западного фронта); в г. Чернигов и в селах Березное, Бегач, Ситнево, ст. Мина Черниговской области (участок Юго-Западного фронта); в местах Мозырьской операции (Волкошанка, Малодуш, Васильевичи, Калинкович, Мозырь и др.); в гг. Ковель, Турийск, Владимир-Волынск Волынской области БССР и далее за границей.

Нам пока неизвесты установлены ли везде могилы наших воинов на местах, и если установлены, имеются ли на них обелиски или памятники, есть ли на установленных обелисках и памятниках имена погибших.

Руководящие партийные и советские органы отдельных областей и районов обращаются ко мне, как ветерану дивизии, с просьбой выслать списки погибших на местах воинов нашей дивизии. Уточнение мест погребания и увековечение памяти павших просят и их семьи, роственники, знакомые. Понятно, что целенаправленной работы выполнить их просьбы до конца я не в силах. На наш взгляд это нужно начать с выяснения вопроса, кто и где погиб и мог быть захоронен. Этого можно делать только путем выборки из списков погибших, хранящихся в Управлении по учету персональных потерь Министерства Обороны СССР.

В связи с этим я прошу Вас в целях увековечения памяти погибших в борьбе с фашизмом организовать с участием ветеранов дивизии широкое изучение славного пути, пройденного сынами Башкирии, состояние памятников и обелисков на местах боев, установление с помощью местных жителей мест погребения воинов дивизии, восстановление имен погибших.

Я, как непосредственный участник всех боевых действий от начала формирования до конца войны, сохраняю в памяти многое, что сделано дивизией, большинство из личного состава дивизии, их личный подвиг, места захоронения многих погибших, поэтому восстановление в памяти всего происшедшего на местах боев, установление через архивный материал имен всех погибших и т.д. мне не представляло бы особого труда. И по состоянию здоровья я пока в силах это сделать.

Работа в этом направлении может быть проведена в 2 этапа. 1-й этап – установление имен погибших и уточнение маршрутов боевых действий дивизии в архивах Министерства Обороны СССР. Первый этап может быть осуществлен двумя лицами: мною, как знакомому событиями и человеком знакомому с работой в архивах. 2-й этап – работа на местах боевых действий: установление наличия памятников и обелисков, составление списков погребенных для вручения в местные органы власти, уточнение имеющихся списков на основе архивных данных и по памяти, представление материалов для установления новых обелисков и памятников. Понятно, что круг участников на этом этапе будет намного шире.

Понятно, что такая большая работа не может быть проведена без финансирования работающих на этой области, особенно тех, кто в данное время не работает. Я прошу Вас пока разрешить вопрос с финансированием работ 1-го этапа – работу в архивах, для чего сделать расчеты с учетом всех возможных расходов – проезд в оба конца, питание, оплата за труд всех командированных, за печатание материалов и т.д. Это примерно составит 150 рублей в месяц на каждого работника не включая проездных, которые в свою очередь составят не менее 50 рублей.

С просьбой бывший командир 148-го гвардейского Томашевского трижды орденоносного артиллерийско-минометного полка гвардии полковник в отставке – **С.Х. Хабиров.** 17.02.1972.

Ҡаһарман яугир планлаштырған изге эштәр үтәлмәне, башҡорт тарихы аяҡ аҫтында тапалып ҡала бирҙе, сөнки милли мәсьәләләргә юғарынан ҡараш шундайыраҡ ине. Автономиялы дәүләтебеҙҙең башлығы Ф.В. Солтановҡа рәхмәт: шулай ҙа ул аҙ-маҙ финанс сығарып, беҙ өсәүгә (С.Х. Хәбиров, Й.Ә. Солтанов, Р.Ғ.

Низамов) дивизияның тәрән рейд эҙенән Донбасстың бер төбәгенә ҡыҫҡа ғына ваҡытҡа булһа ла йөрөп ҡайтырға форсат бирҙе. Хөрмәтле ветеранығыҙ С.Р. Ҡадиров, ҡарсығы сирләү сәбәпле, бара алмай ҡалды.

3. Члену Президиума Верховного Совета СССР, первому секретарю Башкирского обкома КПСС тов. Шакирову Мидхату Закировичу

Мы, ветераны 112-ой Башкирской гвардейской осободобровольческой кавалерийской дивизии, просим Вас:
Как Вам известно, дивизия полностью и с честью оправдала доверие народов Отчизны.
В приветствии по случаю 25-ой годовщины образования Башкирской АССР Центральный Комитет нашей партии и Совнарком СССР в марте 1944 года писали:
"В дни Отечественной войны Советского Союза против немецко-фашистских захватчиков башкирский народ показал высокое понимание своего патриотического долга перед Родиной. Сыны Башкирии – воины Красной Армии в боях за Родину проявили доблесть и мужество, достойные славных боевых традиций башкирского народа"... Такую же высокую оценку дали Бюро Башкирского обкома КПСС и правительство республики. Они летом 1943 года нам писали:
"...Вы не уронили чести взрастившего Вас народа, не осрамили седин отцов и матерей Ваших. От всего сердца мы говорим Вам, соколы – рахмат!"
Дивизия была награждена орденами Ленина, Красного Знамени, Суворова и Кутузова, присвоено почетное имя "Черниговская". Москва 15 раз салютовала в честь дивизии за успехи на фронтах. В составе части 78 солдат и офицеров стали Героями Советского Союза.
Все эти успехи безусловно связаны с именем командира дивизии Минигалия Мингазовича Шаймуратова. Он не только организовал дивизию, но и обучал, воспитывал весь личный состав.
Учитывая его огромные заслуги перед Родиной в годы гражданской войны, а также в годы второй мировой войны, мы, ветераны дивизии, убедительно просим Вас, дорогой Мидхат Закирович, ходотайствовать перед Президиумом Верховного Совета СССР в присвоении Героя Советского Союза генерал-майору, верному сыну отчизны Минигалию Мингазовичу Шаймуратову (посмертно). Это имело бы исключительно большое значение в деле военно-патриотического воспитания молодого поколения республики, но и не только республики. Народы Башкирии, Украины и Белоруссии давно его считают своим заслуженным народным героем.
Личное дело Шаймуратова с соответствующей характеристикой находится в сейфе Верховного Совета БАССР.
От имени всех ветеранов дивизии: бывший зам. начальника политотдела дивизии подполковник в отставке – **С.Р. Кадыров.** 15.08.1979.

Ләкин изге мәсьәләне был юлы ла урынынан ҡуҙғалтыусы булманы – ҡаһарманға тейешле данлы исем һаман бирелмәне. Әммә илдең күңелендә ул ***Халыҡ Геройы*** рәүешендә йәшәүен дауам итә.

Әлеге лә баяғы шул тынғы белмәҫ С.Р. Ҡадиров-ветеран бер ҙә ятып тынмай бит:

4. Башкирский обком КПСС.
Уважаемый Тагир Исмагилович Ахунзянов!
Вот уже более сорока лет занимался изучением революционного пути генерала М.М. Шаймуратова. Сложность заключался не только в том, что он был, как секретный работник разведслужбы Красной Армии, совершенно неизвестным в Башкирии, но по своему служебному положению многим сослуживцам и в Москве.
Вот почему, когда он в сложной обстановке героически погиб, этим решили воспользоваться для личного интереса кой-кто из его сослуживцев.
1. Командир 7-го гвардейского кавалерийского корпуса генерал-лейтенант Борисов, попавший в этот день в плен, потом после войны перед судом военного трибунала в Москве был вынужден писать в Башкирский обком КПСС о том, что во всем виноват Шаймуратов, что он не выполнил его приказ. Узнав об этом я лично написал Борисову, что не Шаймуратов, а он сам с пьяной головой вел дивизию на неоправданный прорыв. После этого он был вынужден писать в обком КПСС второе письмо, где он пишет, что иначе он не мог бы оправдаться перед военным судом. Это и помешало присвоить Шаймуратову посмертно звание Героя Советского Союза, хотя реляция была подписана руков. обкома партии и правительства БАССР.
2. Кроме этого, некоторые товарищи (Назиров Мубаряк, генерал Галиев) старались по возможности очернить генерала (якобы он в плену), ибо Назиров поехал в Уфу 17.11.1942 г. за пополнением и прибыл в дивизию только 27.03.1943 г. За это время не было ни от кого ни одной телеграммы. Мы продолжали выполнять нагрузку за полноправную дивизию, хотя активных штыков было всего лишь 52%. За это генерал назвал Назирова “башкирским феодалом”... Галиев хотел остаться единственным генералом из башкир...
3. Дивизия с честью оправдала доверие народа. В годы войны количество коммунистов увеличилось в четыре раза. Осталось черным пятном в истории дивизии то, что единственным солдатом, который был исключен из партии и отправлен в штрафную роту был Ихсанов Ахтям. Вот он даже сегодня продолжает черное, коварное, провакационное дела. В моей книге “Урал бөркөтө”, над которым я работал 35 лет, описывается, как я своими глазами видел, героическая гибель генерала. В 1948 году я съездил на место его гибели, перехоронил в воинской части. Он (Ихсанов) решил, побывав в штрафной роте, оспаривать моих доводов в пользу генерала.
Очень прошу Вас:
Сохранить героический образ генерала Шаймуратова М.М. как он описывается в моем долголетнем труде. Дать сугубо партийную оценку клевете Ихсанова по адресу генерала М. Шаймуратова.
В книге, как первое издание, отдельные недостатки могут быть. Мы их учитываем, сделаем все возможное их исправить и дополнить. За такие деловые, правдивые замечания мы рады, за это отвечаем только благодарностью.
С. Кадыров. 13.03.1983.

Төрлөләрҙән

Дивизияның “Ҡыҙыл атлылар” гәзите редакторы, күренекле яҙыусы Али Ҡарнайҙың фажиғәле үлеме, быға гәзиттең яуаплы секретаре яҙыусы Әхтәм Ихсандың күпмелер ҡыҫылышы тураһында ул заманда матбуғатта яҙыу тыйылһа ла, шомло хәбәр зыялылар араһында киң таралып, әлеге яҙыусының ғүмере буйы ижадына редакцияларҙа кәртә ҡоролоуына сәбәпсе булды. Билдәле булыуынса, уны дивизияның махсус бүлеге тикшереүе нигеҙендә партия комиссияһы (ДПК) хөкөм иткән, ғәйепләнеүсе шул ваҡытта үҙенең ғәйебен танығанмы, әллә танымағанмы? Комиссия протоколын архивтан һис кем эҙләп табып тикшереп ҡарамағанлыҡтан, был һорауға әлегәсә асыҡ ҡына яуап биреүе ҡыйын. Икеләнеү, моғайын, ветерандар араһында ла булғандыр, сөнки дивизия штабы партойошмаһының элекке секретаре С.Ш. Сәлитов 1983 йылда Ҡазан ҡалаһынан С.Р. Ҡадировҡа ебәргән хатында: “Жив ли Ихсанов (он работал в редакции)? Я всегда стоял и стою, что он виновен в самоубийстве Карная – редактора газеты. ***Прав ли я?***” – тип һорай. Шул уҡ йылда яҙылған икенсе бер хатында: “Я получил письмо от Ихсанова. Пишет очень тепло и просит выслать описание боевого эпизода и мое фото, чтобы включить в свою работу. Как на это смотришь?
Мое мнение о Карнае и решении ДПК об Ихсанове не изменилось. Я поддерживаю то решение, которое было принято тогда ДПК”, -- тип хәбәр итә. Һәр хәлдә, замана ҡануны буйынса, штрафротаға эләккәндең гонаһы уның үҙ ҡаны менән йыуылған...
Ваҡиғаны, баяғыса, имеш-мимеш – ауыҙ-тел ижады хәлендә ҡалдырмайынса, яҙма документ рәүешенә керетеү өсөн, Али Ҡарнайҙың тыуыуына 70 йыл яҡынлап килеү айҡанлы Сабир ағайҙы иҫтәлек яҙырға күндерҙем.

Яҡын ҡоралдаш дуҫым

Мин Али Ҡарнай менән көтмәгәндә яҡын дуҫтар булып киттем. Бөйөк Ватан һуғышына тиклем уның күп кенә әҫәрҙәрен бик яратып уҡый инем, ләкин үҙе менән ниҙәлер яҡындан таныша алманым. Билдәле булыуынса, 112-нсе Башҡорт атлы дивизияһы Дим станцияһында ойоштородо. Дивизияның политбүлек начальнигы урынбаҫары булып хеҙмәт итә инем. Бүлек начальнигы Абдуллин иптәш беҙгә ниҙәлер бик һуңлап килде. Шуға ҡарамаҫтан, политбүлек ҡарамағында башҡорт телендә хәрби газета сығарырға ҡарар ителде. Быны партияның Башҡортостан өлкә комитеты ла хупланы. Тейешле органдан рөхсәт алғас, мин Яҙыусылар союзы председателе Сәйфи аға Ҡудашевты күреп: “Сәйфи аға, беҙ үҙебеҙҙең телдә газета сығарырға булдыҡ Сөнки дивизия составында 99% һалдат, офицерҙар башҡорт һәм татарҙар, -- тинем. – Уларҙың күбеһе оло йәштәгеләр, урыҫ телен яҡшы белмәйҙәр. Беҙгә яҡшы редактор кәрәк”, -- тип тә өҫтәнем. Сәйфи аға быны шатланып ҡаршыланы: “Сабир, мин һеҙгә бынамын тигән редактор ебәрермен”, -- тине. Икенсе көндә үк, ҙур дәрт менән Рәшит Ниғмәти килеп инде лә: “Иптәш батальонный комиссар, мин үҙ теләгем менән килдем. Нимә бойорһағыҙ ҙа тулыһынса үтәргә әҙермен”, -- тине. Мин Рәшит менән күптән таныш булғанға (28-30-ынсы йылдарҙа Туймазыла бергәләшеп “Ленин юлы” газетаһын сығара инек), был яңылыҡты шатланып ҡаршыланым. Һүҙ туранан-тура газета сығарыу хаҡында барҙы. Рәшит: “Бик яҡшы, маҡтаулы эш. Мин бөтә көсөм менән эшкә тотонорға әҙер”, -- тине. “Тәүҙә штабҡа лейтенант Лейсинға кереп, үҙегеҙҙе рәсмиләштерегеҙ”, -- тинем. Лейсин тәртип буйынса уны медосмотрға оҙатҡан. Бер аҙҙан һуң яныма санэскадрон

командиры А. Сарыгин инеп: “Иптәш батальонный комиссар, һеҙ ебәргән Р. Ниғмәтуллиндың үпкәләре сирле, фронттағы ауырлыҡҡа түҙә алмаҫ”, -- тип белдерҙе. Яҡын дуҫым Рәшитте кире Өфөгә ҡайтарып ебәреү, әлбиттә, бик ҡыйын булды. “Рәшит, асыуланма, фронтта төрлө саҡтар була бит, сәләмәтлегең самалы. Һин бында ла һалдат, Ватанға ҙур ярҙам итә алаһың”, -- тип, Өфөгәсә оҙата килдем уны. Был юлы Сәйфи ағаға кереп тормай, Башвоенкоматтың политбүлегенә киттем, редактор булырлыҡ кеше табып ебәреүҙәрен һораным. Урамға сығып күп тә барманым, “иптәш Ҡадиров!” тип кемдер өндәште, әйләнеп ҡараһам – Али Ҡарнай. Ғәҙәттән тыш асыҡ йөҙ, күтәренке тауыш, шатлыҡ менән: “Яңы ғына Рәшитте күрҙем. Ул һеҙгә бик үпкәләгән, мине дивизияға алманылар, ти. Мине алығыҙ, сәләмәтмен. Фронтҡа китеү хаҡында ике ғариза бирҙем, ләкин һаман саҡыртмайҙар, бына әле лә тап шул хаҡта военкоматҡа китеп барам”, -- тип белдерҙе. Был мине шатландырҙы. Бергәләп Башвоенкоматҡа индек, уның ғаризаларын таптылар. Шунда уҡ минең һорау ҙа, Алиҙың теләге лә ҡәнәғәтләндерелде.

1941 йылдың декабрендә Али Ҡарнай Дим станцияһында миңә Яҙыусылар союзының рекомендацияһын тапшырҙы. Мин уны политбүлектең газета сығарыу тураһындағы ҡарары менән таныштырҙым. Уның күҙҙәрендә шатлыҡ сатҡылары сағылды: “Бик һәйбәт, бик һәйбәт. Ышанығыҙ, эшләйбеҙ уны!” – тине. Һәм ул эшкә сумды. Күп тә үтмәй, үҙенә ярҙамсылар ҙа тапҡан -- әҙәби бүлек буйынса Шакиров Насир, газета секретаре Әхтәм Ихсан, наборщиктарҙан Х. Хәйерова һәм Ф. Фәтҡуллиналар. Бөтәһен ҡабул иттек. 10 көн эсендә партияның өлкә комитеты (Буренкин) ярҙамында Али Димгә газетаны баҫтырыу машинаһы, шрифттар алып килде. Өҫтәүенә, ике айға етерлек ҡағыҙ ҙа тапҡан. Аптырап ҡалыуымды күреп, ул: “Иптәш батальонный комиссар, миңә өлкә газеталары редакторҙары ныҡ ярҙам итте. Ни теләһәм, шуны бирәләр”, -- тине. Ысынлап та шулай ине. Дивизияны ойоштороуҙа республиканың бөтөн халҡы ысын күңелдән ярҙам итте, иң ышаныслы улдарын унда ебәрҙе. 11 көн эсендә газетаның беренсе номерын сығарырға тулыһынса әҙер икәнен хәбәр итеп, Али: “Иптәш батальонный комиссар, газетаға ниндәй исем бирәбеҙ?”—тип һораны. Яныбыҙға дивизияның комиссары М. Нәзиров ингәйне. Бергәләшеп һөйләшкәс, Ҡарнай тәкдиме буйынса ҡуштыҡ: “Ҡыҙыл атлылар”.

Дивизияның героик тарихында “Ҡыҙыл атлылар” онотолмаҫ шөһрәт ҡаҙанды. Һуғыштағы һәр бер батырҙы, уның эске хистәрен, фашистарҙы күрә алмауын, Ватанға, партиябыҙға ысын күңелдән бирелгәнлеген, шул юлда үҙен ҡорбан итергә әҙер икәнлеген тасуирлап торҙо газета. Али һәр көн һуғыштың алғы һыҙығында булды. Һәр бер полкта, эскадронда кәрәкле хәбәрселәр әҙерләне, уларҙы үҫтерҙе. Һәр юлы уны һуғыштың ауыр урындарында осратаһың. Үҙен тирәләп алған һалдаттарҙы, офицерҙарҙы күрәһең.

1943 йылдың июль айҙары. Көтмәгәндә ул Өфөнән һөйөклө бисәһенең үлеү хәбәрен ала. “Берҙән-бер улым йәтим ҡалған”, -- тип тәрән ҡайғыға бата, бөтәһен бик ауыр кисерә. Шул уҡ ваҡытта ҡаты ауырып китә. Санэскадронға барырға ҡушылһа ла, бармай, хеҙмәтен дауам итә. Алавка тигән утарҙа Әхтәм Ихсанов менән кескенә бер бүлмәлә йәшәйҙәр. Дивизия алдағы һуғыштар өсөн ҙур әҙерлек алып бара...

Бер көн иртән Али, төҫө ҡасҡан хәлдә, политбүлеккә инеп, китель кеҫәһенән партбилеты юғалғанлығын әйтә. Ауырыуы өҫтәлә. Икенсе көндә газетаның баш

мәкәләһендә “Сталин стратегияһы” тигән һүҙҙәр “Сталин трагедияһы” тип баҫылған. Мин газетаның главлиты инем, ләкин ул көндә корпуста кәңәшмәлә инем.
Ул былай була: Ҡарнай ауырып ятҡанда Ә. Ихсанов газетаның нәүбәттәге номерын (контроль экземпляр) уға уҡып сыға. Ҡарнай газетаны баҫып сығарырға рөхсәт итә...
Ҡайтып төшөүем менән Барый Сөйәрғәлиев (политбүлек секретаре) миңә пакет бирә. Унда газетаның шул номеры, юғарыла әйтелгән һүҙҙәр аҫтына ҡыҙыл ҡәләм менән һыҙылған.
Бөтә тиражды йыйып алырға ҡуштым (бер генә полкка ебәреп өлгөргәйнеләр), ләкин 22 данаһы табылманы. Был хәлдәрҙе тикшереп, Ҡарнайға шелтә биреп, яңы партбилет тапшырырға, тип ҡарар иттек. Әммә икенсе көндә үк Степной фронттың политбүлек начальнигы генерал Мехлис (уҫал, үҙһүҙле кеше) Алиҙы үҙенә саҡырта. Ул беҙҙең рөхсәт менән аҙыҡтар алып (65-70 саҡрым юл), атҡа атланып, коневоды менән бергә йүнәлә. Мехлис уны ҡабул итә. Оҙаҡ ороша, ә ҡулында кемдер тарафынан яҙылған хат һәм “Ҡыҙыл атлылар” газетаһының баяғы номеры...
Бер аҙҙан һуң Али Ҡарнай һәм коневоды дивизияға ҡайтырға юлға сыға. 15 саҡрымдай үткәс, аттарҙы ашатып, эсереп алайыҡ тип, тәбиғәттең бик матур бер урынында туҡтайҙар. Кескенә йылға аға. Өс тапҡыр газета ҡағыҙына төрөп махорка тарта Али. Көтмәгәндә, үҙен-үҙе ата. Был хәл беҙҙең өсөн ҡурҡыныс та, ҙур юғалтыу ҙа булды. Беҙ уны матурлап күмдек.
Али Ҡарнайҙың асыҡ йөҙө, саф күңеле, баҫалҡылығы, эш һөйөүсәнлеге бөгөн дә беҙҙең хәтерҙә. Беҙҙә ул онотолмаҫлыҡ тәрән эҙ ҡалдырҙы. “Ҡыҙыл атлылар” газетаһы дивизияла ғына түгел, бөтә корпуста (башҡа дивизияларҙа ла башҡорт һәм татарҙар бар ине), хатта беҙ беркетелгән армияла ла шөһрәт ҡаҙанды, уны яратып уҡынылар. Газетаның күп номерҙарында А. Ҡарнайҙың үҙ очерктары, шиғырҙары күп баҫыла ине. Ул һәр ваҡыт Башҡортостан өлкә газеталары менән тығыҙ бәйләнештә булды. Уларҙа дивизияның героик хәрәкәте хаҡында мәкәләләр баҫыла торҙо (“Беренсе удар” һ.б.).
Дивизия дошман тылынан сыҡҡас (24.02.1943), ул минең һәм штаб началинигы И.И. Голенев ярҙамында рейд хаҡында күләмле әҫәр яҙҙы. Шул турала ул миңә: “Өфөгә оҙаттым”, -- тине. Ләкин ул әҫәр ниңәлер һаман донъяға сыҡмай, беҙ уны көтәбеҙ...
С. Ҡадиров. 15.01.1974.

Кавалерия аттары

Башҡорт дивизияһы тураһында “Ҡара яуҙы ҡайтарыу” (Я. Хамматов һуңынан нәүбәттәге романын “Ҡара яу” тип атаны) тигән роман яҙырға ең һыҙғанып, мәғлүмәттәр йыя инем (дивизия һуғышып уҙған ергә лә барып ҡайттым), әммә ижад юлымдағы ҡаршылыҡтар маҡсатыма ирешергә форсат бирмәне. Шулай ҙа шөғөлөмдән төңөлмәнем, архив документтары араһында соҡсоноуымдан тыш, ветерандарҙан мөмкин тиклем күберәк алып ҡалырға тырыштым. Сабир ағай Рәхимовтың фатирына барғаным һайын, уны төрлө һорауҙарым менән күмеп ташлай, һөйләгәндәренең бер килкеһен ағылышында уҡ ҡуйын дәфтәремә күсереп бара, үҙенән дә яҙҙыртып алғылай инем. Ҡыҙыҡһыныуым төрлө. Мәҫәлән, блокнотымдың бер битендә ошондай һорау тора: “Атты менеп йөрөүселәр ни рәүешле яраланғандар (эпизодтар)? Аттар?”

Һәм бына менге аттарының үҙҙәре тураһында бер килке мәғлүмәт (С.Р. Ҡадиров ауыҙынан).

Беренсенән, һуғышҡа тиклем үк һәр ауыл Советында “фонд Красной Армии” аттары бар ине. Һуғыш башланғас, райвоенкоматтар ауыл Советтары рәйестәренә бойорҙо: шул аттарҙы килтереп тапшырырға. Райвоенкоматтар уларҙы Башҡорт кавалерия дивизияһы формалашҡан Дим тимер юл станцияһына килтерҙеләр.

Миәкә һәм Бәләбәй военкомы Ленский (мосолман кешеһе) үҙҙәре теләп яҙылған 75 һалдатты (уҡытыусылар, ауыл Советтары һәм колхоз председателдәре) аттары (шул иҫәптән атаҡлы “Кречет”) менән бергә килтереп еткерҙе. Ленский “Кречет”ты артлы санаға еккән, үҙе ултырып, алдан килеп туҡтаны. Шайморатов:

-- О, жеребец неплохой!

Башҡа аттарҙы бер-береһенең ҡойроҡтарына тағып килтергәндәр. Шуларҙы ҡабул иткән ерҙә капитан Ә. Ғәбитов менән майор Нафиҡов та тора, икеһе лә Миәкә районының “Кречет”ты килтергән Илсеғол ауылынан. Ғәбитовҡа колхоз председателе өндәшә:

-- Ауылдашым, үҙебеҙҙең “Ҡорос ат” (“Кречет”) тигән был айғырҙы үҙең менеп ал инде, дошманды еңеп ҡайтығыҙ! – ти. Ә был Ғәбитов – Кусимовтың урынбаҫары. Һуғышта ул ысынлап та һумалалай ҡара “Ҡорос ат”ты менеп йөрөнө.

Дивизия комиссары Нәзировтың Баймаҡ конезаводы бүләк иткән ерән айғыры бар ине, Ғәбитов Брянски фронты Озерки буйында яраланып госпиталгә киткәс, шул “Кречет”ты ла алды үҙенә. Иң һуңынан уны капитан Ибраһим Фәттәхов менде.

Һүр. 12. “Кречет”ҡа – “Ҡорос ат”ҡа атланған Һылыуҡай (Һылыу Әхмәтова?). Сталинград фронты, 1942 й. *Л. Якубов фотоһы.*

Польша ерендә *Люблин* ҡалаһынан *Лодзгәсә* 175 саҡрымды ҡарайғыр ("Кречет") дағаһыҙ килгән. Таш юлда юртҡанда тояҡтары аҫтынан осҡон сәсрәп бара (минең ат дағалы – ут саҡмай, ә унан осҡон сыға, йәнәшә юртып барабыҙ).

Күп аттар үҙ ваҡытында ашамаһа бойоға, ә был, тәүлектәр буйы ашамаһа *ла*, бодрый. Теләгән бер ағасты, кәртәне кимереп ашап бөтә. Сос, аҡыллы. Аттар менән бергә бәйҙә торғанда, мотор тауышын ишетеп, бейей башлай, тирләй (башҡалар – юҡ).

Калеш (Польша) йәғни Берлин ҡапҡаһы алдында һөжүм әҙерләгәндә Фәттәхов бер "ярты", закуска алып килгән (4-5 партбилет килтергән – яңы алынғандарға тапшырырға). Шешәне асмағайныҡ та – тревога булды: 19 фашист бомбардировщигы килә (Ҡояш байымағайны). Бына икенсе төркөмө *лә* күренде. Юл ҡырыйында канау, һикереп төшөп, канау буйына яттыҡ. Шуны күреп, ҡарайғыр ҙа үҙе килеп канау буйына ятты. Коневодтар, аттарҙы ебәреп, үҙҙәре ергә һырышҡан. Башҡа аттар, сабышып, урманға кереп киткән, ә был, "Кречет", коневод эргәһенә һыҙылып ятҡан...

Атлағанда бейеп бара (ҡуштан ҡыҙҙар көйәнтәләп һыуҙан ҡайтҡандай). Ауылда саҡта колхоз председателе 1 Май байрамдарында уйната торған булған уны.

Исемен беләː "Кречет!" тип саҡырһаң, әллә ҡайҙан осоп килеп етә. Ни тиклем ас булһа *ла*, теләһә кем биргән аҙыҡты алмай. Коневод килә, һөйә, шәкәр киҫәге ҡаптыра. Шуны һура, шунан һуң ғына ашай.

Эшелонда. Товарный вагонды урталай бүлеп, бер яҡта – 4, икенсе яҡта 4 ат. Вагонға мостиктан менәләр, төшәләр. Ике атҡа бер һалдат бара вагонда.

Өфөнән Брянскиға тиклем үттек эшелонда. Өс урында туҡтап (ике тәүлеккә бер) аттарға прогулка яһаныҡ (тик тороп аяҡтары ойой). Туҡталыуҙар – 1-1,5 сәғәткә, шул арала сабып йөрөп киләләр.

Шундай осраҡ булды: бер офицер (*Лисин*) Тула тирәһендәге бер туҡталышта 3-4 километр алыҫлыҡта күренеп торған бер ауылға коневодын йомош менән ебәрә. Эшелон ҡуҙғалып, тегеһе торған да ҡалған. Өс көндән һуң ҡыуып етте аты менән.

Эшелонда 25 вагон, һәр вагонда 8 ат – бөтәһе 200 баш.

Штаб, политбүлек айырым вагонда бара.

Фронтҡа 23 километр ҡалғас, вагондарҙан төштөк, ҡорал алдыҡ (Тербуны-II-*лә*). Шунда 8-енсе корпусҡа ҡушылдыҡ. 20 көн самаһы ҡоралдарҙы өйрәндек, 2 июндә Олымь йылғаһы буйында һуғышҡа керҙек.

Ҙур йылғаларҙы кисеү. Ат һәйбәт йөҙә *ул*, *ләкин* алдан уҡ өйрәтергә кәрәк йөҙҙөртөп. Юғиһә, ҡарғып, алғы аяҡтарын күтәрә *лә* арт яғына бата. Ваҡ йылғаларҙа атты йөҙөргә өйрәттек. Яугир алдан етәкләп, йөҙөп бара.

Ҙур йылғаны кискәндә һәр кемгә резин тоҡ бирелә. Кейенеү нәүбәтенсә, өҫ-башын тултыра шунда. Тоҡто, 1,5 метр ара ҡалдырып, эйәргә бәйләй. Тоҡ һыу өҫтөндә күлкеп бара. Эйәрҙең ике яғындағы сөмкәгә патрондарын һала, автоматын беркетә. Ат менән бергә һыуға керә, тәүҙә атлап баралар (һалдат һыу түбәнендә -- ат ышығында булырға тейеш). Ат йөҙә башлағас, һыңар ҡулы менән ат ялына тотона, икенсеһе менән ишә. Теҙгендән алырға ярамай, сөнки тейеү менән ат туҡтап, батырға мөмкин. Ат сапсына башлаһа, яугир уның ҡойроғона йәбешә. Һыу төбөнә аяҡ тейеү менән ат туҡтай. Яугир тоҡто, ҡоралдарҙы ала, сыға, кейенә, әҙерләнә, атакаға китә, ә ат һыуҙа ҡала. Коневодтар килеп, аттарҙы ышыҡҡа алып китәләр.

Кисер алдынан тәүҙә разведка ебәреп, аръяҡта әрәмәлек, һаҙлыҡ, дошман һирәк урынды табып сығабыҙ төндә. Таң атҡас, тотоналар атырға, бомба ташларға, ләкин беҙ инде нығынып өлгөрәбеҙ.

Березина йылғаһы янында (Чернигов ҡалаһына яҡын) һыбайлы атакаға ташландыҡ (Белов китабының 86-нсы бите). Фашистар яғында венгер кавалерия частәре һәм һатлыҡйән Дон казактары булды. Беҙ, 8-енсе һәм 2-нсе атлы корпустар, Белоруссияла һаҙлыҡҡа батырҙыҡ уларҙы. Немецтарҙың үҙҙәренең кавалерия частәре булманы. Ләкин, уңайы тура килгәндә, фашист командирҙары ла ат менеп йөрөнөләр.

Белоруссия фронты—Речица ҡалаһы, Гомель яны. Кусимовты шунда дошмандың дүрт һыбайлыһы ҡамап ала; бер юлы өс ҡылыс (ике ҡулында һәм береһе запаска ауыҙында) менән сая алышып, еңеп сыға (бәлки, легендалыр? – Й.С.).

Кавалерия аттары разведкала киң ҡулланыла. Мәҫәлән "тел" алып ҡайтыу (эйәргә, йәки эйәр алдына арҡыры һалып).

Дивизияның һәр бер полкында, эскадронында ат дағалаусы бар. Марштан һуң (300-400 километр үткәс) ветврач аттарҙы ҡарап сыға, шунда уҡ дағаларға ҡуша.

Фураж. Төйөкләнгән (тюковый) бесән һәм һоло бирелә (нормаль шарттарҙа). Күп ваҡыт улары килеп етмәй. Шуға күрә күбеһенсә "подножный корм"да – һәр һыбайлының селтәр ҡапсығы бар. Бесән-фәлән күренеү менән үк, ҡапсыҡҡа төйгөсләп тултыра ла эйәргә бәйләй, туҡтағас ашата. Брезент торба бар – һоло һалып, аттың башына бәйләп ҡуя. Һоло нормаһы ике тәүлеккә бирелә, бер көнлөгөн ашата, икенсе өлөшөн "НЗ" итеп һул яҡ сөмкәлә һаҡлай. Уң яҡтағыһында – патронташ, таҫтымал, ат ҡырғысы һәм сепрәк (атты, йыуғас, һөртөп ҡороторға).

Шайморатов аҡ ҡулъяулығы менән һыпырып ҡарай атты, ҡарайһа – "художник!" тип битәрләй.

Трофей күп файҙаланыла.

Ваҡ йылғаларҙы (Олымь, Березна) на-ходу сығаһың, кейенгән килеш. Яугир шиненең ике салғыйын ҡайтарып, билбауына ҡыҫтыра. Итеген һыу күмә башлаһа, эйәргә менеп ултыра.

Аттарҙың береһе алдан үтһә, бөтәһе лә үтә -- уттан да, һыуҙан да...

Дивизия комиссары М. Нәзиров мәҡәләһенән:

Мин колхозсыларҙы башҡорт аттарына айырыуса хәстәрлек менән мөнәсәбәт итергә саҡырыр инем. Башҡорт кавалерия дивизияһына тапшырылған аттар үҙҙәренең ҡиммәтле сифаттарын бик яҡшы күрһәттеләр. Һуңғы осорҙа беҙҙең дивизия 24 төн буйына туҡтауһыҙ 1200 километр марш үтте һәм шул марш ваҡытында башҡорт аттарынан бер генә ат та сафтан сыҡманы. Был, башҡорт атының тыныс хеҙмәттә генә түгел, хәрби походта ла иң сыҙамлы тоҡом икәнлеген асыҡ күрһәтте. Шуға күрә башҡорт атын яҡшы тәрбиәләп үҫтерергә, үрсетергә саҡырам. (*"Ҡыҙыл Башҡортостан" гәзитенең 1943 йыл 5 гинуар №3 һаны*).

Бына алдымда С.Р. Ҡадировтың атһөйәр йәнле бер яугиренән – Шишмә районы Яңы Ябалаҡлы ауылынан Хәбибйән ағай Хисмәтуллиндың (шағирәбеҙ Миңлегөл Хисмәтуллинаның атаһының) сәләм хаты: "Йыһат энем, һаумы! Йыһат туған ошоно бюеҙҙең Ҡадировҡа бер үк тапшырығыҙ инде", -- тип үтенгән. Тапшырғанмын,

Сабир ағай ҡулы менән 1972 йылдың 25 декабрендә уға яуап яҙылыуы әйтелгән. Инде хатты асайыҡ:

Һаумы Ҡадиров!

Ҡадиров иптәш, мин бит һеҙҙең "Агиҙел" журналының бишенсе һанында беҙҙең данлы Башҡорт дивизияһы хаҡында яҙган иҫтәлектәрегеҙҙе уҡып, самаһыҙ ҡыуандым. Илап уҡыным, бөтәһе – факт, дөрөҫ. Һаулыгыңды теләйем.

Ҡадиров, мөмкин булһа, ошоно айырым китап итеп сыгар, беҙҙең Башҡорт дивизияһының ҡүргәне менән йәштәр танышһындар. Был – һеҙҙең оло хеҙмәт, рәхмәт.

Инде бераҙ үҙем хаҡында.

Ҡадиров, мин һаман да колхозда эшләйем, түҙә алмайым һис. Тормошом мул, пенсия алабыҙ ҡарсыҡ менән икәүләп – икебеҙгә 76 һум. Ләкин һаулыҡ юҡ, бигерәк тә ҡарсыҡ туҙҙы, шул сәбәпле ҡалага китергә булдыҡ, нисек булыр инде... Әлбиттә, ауыл һагындырыр, әммә башҡа сара юҡ, ҡарсыҡ эшкә ярамай. Квартира алырга тип уйлайбыҙ, балалар әмәлен килтереп сыгарһа.

Ҡадиров иптәш, был журналга яҙгандарың бөтәһе лә дөрөҫ – туңган ат иттәре ашап аяуһыҙ көрәшкәндәр барыһы ла хаҡ. Мин был журналды бригадала халыҡҡа уҡыным, бик ихласлыҡ менән тыңланылар. Аҙаҡтан әйтеп ҡуйҙым: "Вот беҙ башҡорт атлылары нисек һугыштыҡ!" – тип маҡтанып та алдым.

Ҡадиров, мин уҡыусы балалар һорауынса мәктәпкә барып, бераҙ һөйләп тә сыҡтым башҡорт атлылары хаҡында. "Бабай, ҙур рәхмәт, таҙалыҡ менән йәшә!" – тинеләр...

Хөрмәтле ветераныбыҙ, ҡоралдашы С.Р. Ҡадировтан кәңәш-төңәш хаты алгас, 1973 йылдың 13 февралендә тагы яҙып ебәргән:

Ҡадиров дуҫ, мин бераҙ яҙҙым да грипп менән сирләнем – 20 гинуарҙан биреле. Был көндә аҙыраҡ йөрөй башланым, колхозда эшләмәйем, сөнки таҙалыҡ юҡ.

Ҡадиров дуҫ, ҡалага күсеү-күсмәү тураһында кәңәш бирәһең дә ул, ауыл тормошо яҡшыраҡ, тип. Бына мин сирләп киттем, бик ҡаты ятам, больницага барырга ат бирмәйҙәр; ул гына ла етмәһә, декабрь айының эш хаҡын бирмәнеләр – 70 һум, ҡасандыр ниндәйҙер малдар игенгә кергәне өсөн... Мин ҡараным фәҡәт 25 баш ҡолон, ялангa сыгарып йөрөтмәнем. Бер зәгиф ҡарт, һугыш инвалиды тип иҫкә лә алмайҙар, бына хәҙер малдарыма аҙыҡ юҡ, ҡышты нисек сыгырбыҙ?.. Колхоз тигәнең ҡартайгас яратмай шул. Ҡадиров, иртән сәгәт 5-тә кит, кисен 8-9-ҙа ҡайт – ҡартайгас түҙеп буламы? Юҡ мал – юҡ, аска үлмәм, әммә әҙерәк тыныс йәшәргә ине, тип уйлайым.

Ҡадиров, быныһы һинең һүҙгә яуап: ауылда мал аҫырау бик ауыр хәҙер, туганды ла ҡагыталар бит...

Шул уҡ конверт эсенә элегерәк – ауырымаҫы борон яҙылган дәфтәр биттәре һалынган:

Һаумыһыгыҙ, Ҡадиров иптәш! Һеҙгә күп сәләм бүләк итеп, һеҙгә мыҡты таҙалыҡ, оҙон гүмер теләп ҡалыусы Хәбибйән тип хәтерләрһегеҙ.

Ҡадиров, мине иҫкә алып хат яҙыуыңа ҙур рәхмәт. Хатыңды алган көндә ҡунаҡ йыйгайным, шунда ҡысҡырып уҡынылар һәм һинең "Агиҙел" журналы ла миндә ине. Унда фотоң да бар бит. Ундагыларҙы ла уҡынылар ҙа ҡул сәпәкәй итеп һиңә рәхмәт әйттеләр. Ҡолагың ишетмәһә лә, ҙур кешеләр – Ҡадировтар, Кусимовтар менән танышһың икән, тиҙәр. Һинең ул әҫәрҙе бында бер-нисә кеше уҡыгандыр, үҙем дә ике мәртәбә уҡып сыҡтым – бөтәһе лә дөрөҫ бит!

Мин үҙемдең ҡайҙа булғандарҙы яҙып йөрөй торғас, бер ҡалын дәфтәр тулғайны. Шуны һаҡлап тотһам да, госпиталдә кейемдәрҙе тапшырғанда алдылар ҙа ҡул сәғәтен, бритваны, яҙған дәфтәрҙе ҡайтарып бирмәнеләр, бер йәврәй завсклад ине...

Ҡадиров иптәш, минең баш алама бит, хәтер юҡ – нык сир ҡалды шул контузиянан... Үҙең беләһең инде: Дон буйында сигенеп, Донға яҡын бер оҙон соҡорға барып тулдыҡ. Соҡор эсе ҡуйы ағас, ер туңғайны, немец самолеты йөрөп тора. Минең бер иптәш ҡырыйҙа бер ҙур ағасҡа пулемет ҡуйып, боевой охранда тора, пулеметы ҡоролған зажигательный пулялар менән. Мин соҡорға төшмәй, был иптәш янына йыш киләм; политрук Ғайсинга әйтәм, бик түбән оса, атайыҡ, тим. Гилдин тигән иптәш атты самолетҡа – ут ҡабынды, дөрләп барып төштө. Шуның өсөн беҙгә бер награда ла булманы, уны юллап йөрөү ҙә юҡ...

Шайморатов приказ бирә, наступать по направлению Сталинграда, тип. Ҡадиров, беләһең, илле километр ятҡан фашисты һарыҡ урынына ҡыуҙыҡ бит! Шунан барып бер совхозға керҙек, ҡар ҡатыш ямғыр яуа. Һалам ышығында төн тороп, иртән сәғәт 9-10-да – бер соҡор һымаҡ ерҙә таллыҡ, шул таллыҡта аттарҙы ҡалдырып (дүрт атҡа бер кеше ҡуйып), йәйәүләп атакаға күтәрелдек – немец ҡаса, бер ротаһы атып булашты, беҙҙекеләрҙе лә ауҙарҙы, ләкин үҙҙәрен юҡ иттек. Минең бер ҡоҙа кеше (Шишмә районы Ҡара Яҡуп ауылынан) бик ҡаты яраланды, “ҡоҙа, ҡалдырма!” тип ҡысҡыра. Уны йөкмәп, тал буйынан бара инек, немецтың бер танкыһы килеп сыҡты тал араһынан һәм пулеметтан һиптерҙе. Беҙ бер ямға осоҡ, минең аяҡҡа эләккән – нык түгел. Беҙҙең ПТР яҡын тора ине, немец танкыһын бер атыуҙа яндырҙы. Һалдаттары үҙ яҡтарына ҡасалар, беҙҙең пулеметчиктар аларын да йыҡты. Берәһе сатанлап тал буйына килә, беҙҙе күрмәй, мин теге ҡоҙаның аяғын бәйләп маташам. Автоматты тиҙ генә алып, немецты ауҙарҙым, әлегә тыныс һымаҡ. Ҡоҙаның күлдәген алып (вещмешоктан), аяғын ҡыҫып бәйләнем, таллыҡ буйлап барабыҙ, ҡоҙаның хәле бөтә башланы – ҡан бик аға, буран кеүек бит... Беҙҙең бәхеткә, пар ат егеүле бричка тап булды, ул минең брат ине...

...Ҡадиров, мин эскадрон командиры Рәхмәтуллинда разведчик инем бит. Уның менән урманға кереп етә алманыҡ, дошман ике тапҡыр минометтан атты; 26 кеше инек, шунда Рәхмәтуллин һәм 8 һалдат һәләк булды, мине шоссейка юлдан алып ырғытҡан. Күҙ күрмәй, ҡолаҡ ишетмәй, күҙҙән, танауҙан, ҡолаҡтан ҡан аға. Бер иптәш йөкмәп арыш араһына килтергән; ярты сәғәттән һуш керҙе, шунан Рәхмәтуллинды арыш араһына ерләнек. Мине өс километр артҡа санчасҡә ебәрҙеләр, ҡыйралған бер йортта минең кеүектәр ята, 11 кеше. Бер ҡараусы-ашатыусынан башҡа бер кем дә юҡ. Яҡында ҙур ғына ауыл, беҙҙе унда ебәрмәйҙәр. Патрулдә торған бер һалдаттан, өсөнсө эскадрон ҡайҙа ята, тип һораным. Анауы ауыл ҡырындағы зират янында, тине. Барып табып, аттарҙы һорашам. Минең атты бер сержант менгән, бик яман дөнөп килә. Ат башынан эләктереп алдым. Был ат минеке, төш аттан, тип, ат башын ебәрмәйем. Атым танып тора, сөнки Димдә ятҡанда вагондан үҙем алдым, монгол тоҡомло. Мин уны Балановка ауылында өйрәттем: ят, тиһәм, ята, минән башҡа берәүгә лә ҡарамай – һис уның кеүек ат юҡтыр... Сержанттан тартып алдым, атымдан айырылмаҫ өсөн, 15 көнгә полевой госпиталгә барманым. Ул атыма пуля ла теймәй, уттан да алып сыға ине. Монгол аттары ҙур түгел, ләкин яҡшылар. Шул атым һис иҫемдән сыҡмай: уның менән ниҙәр генә күрмәнек – ир ҡанаты ат, тиҙәр бит. Ир башы менән ат башы күрә шул барыһын да...

Ҡадиров дуҫ, ат йәнле Кусимов миңә әйтә торғайны: "Кәләшеңде иҫеңә төшөрмә, атыңды иҫеңдән сығарма!" – тип, бик дөрөҫ әйткән. Мин шул атымды ҡәҙерләп, үҙем ашамайым – атыма ҡаптырам. Бер саҡ төндә шәкәр сөгөлдөрөнә тап килдек, бик үҫкән. Эйәр сөмкәләренә тултырҙым, юлда атыма ҡаптырып ебәрәм – һоло юҡ, аҙыҡ юҡ... Шул атҡайым һаман да иҫмдән сыҡмай, йөрәгемде өҙә...
Ҡадиров, Димдә саҡта ярышҡа сыҡтыҡ 15 километрға. Минең атҡа дүрт саңғысы тағылды, мин ал бирмәнем. Шайморатов рәхмәт әйтте һәм бүләкләнеләр. Ҡар ярып барып сыҡтым алға.
Ҡадиров дуҫ, ерән атым хаҡында бер-ике шиғыр яҙам:
Ерәнҡашҡа атҡайым,
Башын сайҡай малҡайым.
Алдарында һолоһо бөтһә
Өҙөлә йөрәк майҡайым.

Ерән атымдың ялдарын
Ҡибланан иҫкән ел тарай.
Фашистар ҡасҡан сағында
Арттарынан ҡалмай юл ҡарай.

Ерән атым сапҡан саҡта
Маңлай сәсен йыя алмай.
Дошмандарҙы күреп ҡалһа,
Үҙен үҙе тыя алмай.

Ерәнҡашҡа малҡайым,
Ҡалды минең атҡайым.
Дәһшәтле ут эстәрендә
Ниҙәр күрҙе икән йәнкәйем?..

Ҡыҙы һөйләй торғайны: һуғышта менеп йөрөгән шул атын иҫенә төшөрә лә илай-илай һамаҡлай, тип...
Шағирәбеҙ Миңлегөл Хисмәтуллинаның моңло поэмаһы бар – ат йәнле ветеран атаһының кисерештәре хаҡында...

Инде үҙемдең дә ошо ат йәнлеләр араһына килеп ҡыҫылыуымды әйтәйем.
Күренекле педагог һәм мәктәп дәреслектәре авторы Төхфәт ағай Аслаев, шундай уҡыу китаптарының береһенә индерергә кәрәк, тип, башҡорт аты тураһында бер нәмә яҙып биреүемде һорағайны. Сабир ағай һөйләгәндәргә таянып, баяғы данлы яу айғыры "Ҡорос ат" – "Кречет" тураһында йыйнаҡ ҡына хикәйә тыуҙы:

Ҡорос ат
Илебеҙҙең көнбайышында Бөйөк Ватан һуғышы барған саҡта — 1942 йылда була был. Башҡортостандың Миәкә районындағы Илсеғол ауылынан бер юлы ир-егеттәрҙе һәм аттарҙы һуғышҡа оҙаталар. Иң алда ҡоростай ҡара-йылтыр бер толпар бейеп, тояҡтарынан осҡон сәсрәтеп бара. Уның исеме ҡағыҙҙа урыҫса

“Кречет” тип яҙылған (ҡайһы берәүҙәр, яңылыш, “Керчь” тип йөрөтәләр), ә башҡортса Ҡорос ат тип әйткәндәр. Ул Илсеғол ауылының өйөр айғыры булды, көтөүлектә йылҡы өйөрөн бәлә-казанан һаҡланы. Ҡара төндәрҙә ҡолондарҙың, тай-тулаҡтың боғаҙынан алырға иткән бүреләрҙе һис яҡын ебәрмәне. Яҡыныраҡ килгәндәрен, сабып барып, йөнтәҫ елкәләренән тешләп алып быраҡтырҙы, ҡорос тояҡтары менән тибеп баштарын ярҙы. Һыҙылып таң атҡан һайын, йылҡыларҙы ауыл осона ҡайтарып, йәмле Дим буйҙарын яңғыратып кешнәп ебәрер ине. Ауыл халҡы был кешнәүҙе ишетеп ҡыуаныр ҙа: “Һәй, Ҡорос атыбыҙ ҡайтты, кешнәп таңды уятты!” — тип һамаҡлар ине. Сөнки уның кешнәүе лә ифрат яғымлы, үҙенә башҡа бер кешнәү ине.

Һуғышҡа китеүселәрҙе халыҡ күҙҙән яҙҙырғансы оҙатып ҡалды. Китеүселәрҙең һуңғы хушлашыуы булып, тау башында Ҡорос аттың йөрәк өҙгөс кешнәүе яңғыраны. Дим буйҙарын шаңғыртҡан был моңло кешнәү кешеләрҙең күңелендә мәңге яңғырап ҡалды. “Яу ҡырында иҫән йөрө, Ҡорос ат, дошмандарҙы еңеп ҡайт! Яуға киткән батырыңды эйәреңдә алып ҡайт!” — тип теләне оҙатып ҡалыусылар.

Ҡорос атты Башҡорт атлы дивизияһының беренсе полк командиры урынбаҫары Әсфән Ғәбитов эйәрләне, һуғыш утына керҙе. Майор Әсфән Ғәбитов та, тап Ҡорос ат кеүек үк, Илсеғол ауылынан ине. Улар бергә утты-һыуҙы кистеләр, дошманды күп ҡырҙылар. Ҡорос аты Ғәбитовты күп тапҡырҙар әжәлдән араланы. Брянск ҡалаһы янындағы бер алышта йәҙрә ярсығы икеһен дә бер юлы яраланы. Ҡорос аттың — еңел яра, ә Ғәбитовтың — ауыр яра ине. Айырылышҡанда икеһенең тиң күҙҙәренән әсе йәш тәгәрләне. Әсфән Ғәбитов госпиталгә киткән саҡта дивизия комиссары Мөбәрәк Нәзировтан үтенде: “Еңеү көнөнәсә яугир сафта ҡала алманым. Ҡорос атты үҙеңә тапшырып ҡалдырам. Дошманды тар-мар ҡылғас, атты Илсеғолға алып ҡайтығыҙ. Шайморатов генерал шулай бойорҙо. Шуға күрә үҙеңде лә, уны ла һаҡла инде!” Майорҙың ҡулын ҡыҫып: “Егет башы иҫән булһа, Ҡорос ат та һау булыр, илгә әйләнеп ҡайтыр!” — тип һүҙ бирҙе комиссар.

Әммә Нәзировҡа ла тиҙҙән икенсе яҡҡа китергә тура килде. Ҡорос атты яугир капитан Ибраһим Фәттәхов менеп йөрөнө. “Бара торған ереңә күҙ асып йомғансы елдереп еткерер, уттан-һыуҙан һөрлөкмәй алып сығыр. Уның менән беҙ үлемесле күп алыштарҙы үттек, күп әжәлдәрҙе еңдек. Ҡорос ат ул әҙәм һымаҡ аҡыллы, түҙемле һәм батыр яугир”, — тип хөрмәтләп һөйләр ине Фәттәхов.

Дим туғайҙарында уйнаҡлап үҫкән Ҡорос ат ут эсендә меңәрләгән саҡрымдарҙы елеп үтә, алыҫ Днепр һәм Висла, Шпрее һәм Эльба һыуҙарын эсә. Башҡорт атлы дивизияһында ул Сталинград янында уҡ фашистарҙы ҡамап тар-мар итеүҙә, Луганск өлкәһендә дошман тылына ярып кереп уларҙы ҡыйратыуҙа ҡатнаша. Яуыз илбаҫарҙарҙы ҡыуа-ҡыуа Чернигов, Ковель, Люблин, Познань, Трептев, Бранденбург ҡалаларын үтеп, көнбайыштан Германияның баш ҡалаһы Берлинға дөрөп керә. Эльбаға барып етеп, уның һыуын да эсә. Ҡыйратылған Гитлер өңө Рейхстаг эргәһендә яугир сафта Еңеү көнөн — 1945 йылдың 9 майын ҡаршылай.

Һуғыш бөткәс, яугирҙәребеҙ илгә әйләнеп ҡайта. Яуға алынған аттарҙы кире ҡайтарыу тәртибе булмаһа ла, башҡорт яугирҙәре Ҡорос атты илгә ҡайтарырға Советтар Союзы Маршалы Семен Буденныйҙан рөхсәт һорап алалар. Шулай итеп, Бөйөк Ватан һуғышында еңеп сыҡҡан Ҡорос атты 1947 йылда полковник Сәйфулла Хәбиров менән майор Ибраһим Фәттәхов Илсеғолға алып килеп тапшыра.

Яҙҙың иң йәмле көндәре, Дим буйҙары шау-сәскәгә күмелгән саҡ була ул. Һыҙылып таң атҡанда, һары һандуғастар йырына ҡушылып, алыҫ-алыҫтарҙан ауылға үтә таныш ат кешнәүе ишетелә. Артынса уҡ ауылдағы бөтә аттар йөрәкһеп кешнәп ебәрә. Сихри кешнәү менән әҫәрләнгән халыҡ урамға сыға эркелеп: "Ҡорос аттың кешнәүе, Ҡорос ат ҡайтып килә!.."

Ауыл осонда, ысынлап та, текә тауҙан Ҡояш һымаҡ тәгәрләп төшөп килгән Ҡорос ат — һуғыш батыры күренә, күҙҙәренән һағыныу ҡатыш шатлыҡ йәштәре аға. Ауылдаштар, йүгереп барып, яугир толпарҙы муйынынан ҡосаҡлайҙар, уға ҡушылып илайҙар... Эйе, күп батырҙар, ҡайта алмай, яу ҡырында ятып ҡалды... "Ҡайҙа ғына бармай, ниҙәр күрмәй ир-егеткәй менән ат башы!" — тип йырлай бит халҡыбыҙ...

23.02.1995.

Ағиҙелдән Эльбағаса барып етеп, тыуған ауылына **Еңеү** менән әйләнеп ҡайтҡан был яугир башҡорт толпарын баш ҡалабыҙҙың ***Еңеү баҡсаһында бронзанан һынландырырға кәрәк ине*** (төҫ-һүрәте һаҡланған)... Әгәр рәсми органдар ҡуҙғалмаһа, илдән иғәнә йыйып эшләтергә мөмкин.

Рухи-мәҙәни мөхит

Быларын да, үтенесем буйынса, Сабир ағай үлеренә бер йыл ҡалғанда үҙ ҡулы менән яҙып биргәйне.

Ҡайһы бер иҫтәлектәр

112-нсе Башҡорт атлы дивизияһының Брянски фронтындағы тәүге һуғыш уңыштары (һүҙ Олымь, Любанька – Озерное утарҙары төбәгендәге алыштар хаҡында бара) корпус күләмендә билгеле булып ҡына ҡалманы, ә тиҙ арала бөтә фронтҡа ла таралып өлгөрҙө. Яугирҙәребеҙҙең батырлығы хаҡында армия һәм фронт газеталарында күп кенә очерктар баҫылды.

Тап ана шул көндәрҙә Брянски фронтында "Красная звезда" газетаһының танылған хәбәрсеһе яҙыусы Константин Симонов килеп төшкән. Башҡорт атлыларының ҡыйыу хәрәкәтен ишеткәс, ул беҙҙең дивизия частәре урынлашҡан төбәккә юл тота. Ул көндәрҙә беҙҙең яугирҙәрҙең бер төркөмө боевой ордендар һәм миҙалдар менән бүләкләнгәйне. Симонов шул егеттәрҙе күреп һөйләшергә теләүен белдерҙе.

Һуғыш тынған араларҙа дивизияның һәүәҫкәрҙәр концертын ойоштора инек. Бөгөн дә шундай уҡ сараға әҙерлек бара ине. Ҡурайсы Ғәйфулла Сарбаев (Баймаҡтан) менән гармунсы Мирсәйет Ғайсинды (Өфөнән) бик тиҙ табып килтерҙеләр. К. Симонов, йылмайып, ошондай һорау бирҙе:

-- Йә, ни эшләйбеҙ? Йырлайбыҙмы, бейейбеҙме? Әллә дошманды туҡмарға китәбеҙме?

Сарбаев та юғалып ҡалманы:

-- Беҙҙең тик ятҡан юҡ ул, иптәш батальонный комиссар, -- тине, -- эш араһында йырлап та, бейеп тә алабыҙ!

Симонов, ҡурайҙа "Азамат"ты тыңлап бөткәс, үҙе һүҙ башланы:

-- Был ҡурайҙа яңғыраған көй боронғораҡтыр, ахыры, шулаймы? Йырлап та ишеттерә алаһығыҙмы шуны?

Сарбаев ялындырып торманы:

Алыҫтарҙан ғына, ай, күренә
Ирәмәлкәй тауҙың аҡ ташы.
Ҡайҙа ғына бармай, ниҙәр күрмәй
Ир-егеткәй менән ат башы.

Симонов һорауы буйынса, йырҙы тиҙ генә бергәләшеп урыҫсаға тәржемә иттек. Төнгә ҡарай К. Симонов корпус комиссары Н. Белов менән бергә күрше 14-енсе дивизия урынлашҡан төбәккә китеп тә барҙы.

Күп тә үтмәй, “Красная звезда” (1942 йыл 31 июль) газетаһында “Башҡорт дивизияһында” тигән очерк-һүрәтләмәһен күрҙек. Уны беҙ бөтә полктарҙа, эскадрондарҙа ҡулдан-ҡулға йөрөтөп уҡыныҡ. Ул беҙгә ҙур дәрт бирҙе.

Башҡорт кавалерия дивизияһы Сталинград өсөн алып барылған ҡаты һуғыштарҙа ныҡ ҡатнашты. 19 ноябрҙә башланған ҙур һөжүм, билдәле булыуынса, дошмандың Сталинград янындағы төркөмләнешен ҡамап алыу, юҡ итеү менән тамамланды. Беҙҙең дивизия 8-енсе атлы корпус составында Ростов өлкәһенең Морозовский, Обливская, Тацинская тимер юл станцияларын һәм Усть-Белая Калитва ҡалаһын азат итеүҙә ҡаһармандарса ҡатнашты.

Ана шул көсөргәнешле һуғыштарҙа политбүлек башлығының комсомол буйынса ярҙамсыһы Н. Аҙнағолов (Бүздәктән) менән яҙыусы Шакир Насиров яраланып, тылға госпиталгә оҙатылды. Ш. Насировтың яраланыуы политбүлек органы “Ҡыҙыл атлылар” газетаһына наҡ ҡына ауырлыҡ килтерҙе. Былай ҙа етешмәй ине хеҙмәткәрҙәре. Бигерәк тә газетаның редакторы Али Ҡарнай ныҡ ҡайғырҙы. Насировты ул эшлекле, ижади тәбиғәтле булғаны өсөн ярата һәм уға ышана ине. Насиров урынына Башҡортостандың Көйөргәҙе район газетаһында эшләп киткән Йәмилев фамилиялы политрукты ваҡытлыса саҡырып торорға булдыҡ.

Ошо еңеүле һөжүм менән алға барған көндәрҙә, декабрь башында булһа кәрәк, дивизияға яҙыусылар – Ҡадир Даян менән Әхнәф Кирәй (Кирәй Мәргән) килеп төштөләр. Дивизияның икенсе эшелоны Тацинская станцияһында, ә беренсе эшелон (шул хисаптан политбүлек тә) Уст-Белая Калитва ҡалаһында ине. Эштең, әлбиттә, тығыҙ сағы. Шулай ҙа ваҡыт табып, комдив уларҙы ла ҡабул итте. Иртәгәһенә икеһен дә штатҡа алыу тураһында бойороҡ булды. Улар политбүлек органы “Ҡыҙыл атлылар” газетаһына беркетелде.

Тап шул көндәрҙә лейтенант Атаев төркөмөнөң Усть-Белая Калитва ҡаршыһындағы (йылға аръяғында) ҡалҡыулыҡ өсөн алып барған ҡаты һуғышта геройҙарса һәләк булыуы тураһында хәбәр таралды. Кирәй Мәргәндең газетала эшләү тәжрибәһе бар икән – был подвигты тиҙ генә элеп алды ла корпус, армия, фронт газеталарына хәбәрҙәр, һүрәтләмәләр ойоштороҙо. Ваҡиғаларҙың ҡыҙыу эҙенән атаевсылар тураһында хатта берәй брошюрамы, китапмы сығарыу тураһында һүҙ ҡуҙғалды. Ләкин ҡайҙа сығарырға? Билгеле, фронт шарттарында мөмкин түгел был. Бының өсөн бик оператив рәүештә Өфөгә ҡайтырға кәрәк, Ҡайтарып ебәрергә лә мөмкинлек булыр ине, фронтҡа тылдан самолеттар осоп тора, ләкин Кирәйҙең үҙен күндерә алманыҡ.

-- Иптәш батальон комиссары, -- тине ул, -- мин әле яңы ғына бында килеп төштөм бит. Ныҡлап танышырға ла өлгөрә алманым. Мин ҡабат әйләнеп килгәнсе, дивизия әллә ҡайҙа буласаҡ бит. Атаевсылар тураһында һуңынан, иркенләп яҙып сығырбыҙ.

Һуңынан был турала Кирәй Мәргәндең хәтеренә төшөрҙөм, әлбиттә. Ул миңә үҙенең “Утыҙ батыр ҡалҡыулығы” тигән очерыгын күрһәтте. Был әҫәре заманында республика газетаһы биттәрендә донъя күргән һәм мәктәп дәреслектәрендә, хрестоматияларҙа күп тапҡырҙар баҫылған. Уҡытыусылар был материалды әлегәсә дәрестә һәм мәктәптәге тәрбиә эшендә файҙаланалар икән.

Һүр. 13. Уңдан һулға: Ҡадир Даян, Сәйфулла Хәбиров, Хәлил Хәмитов (Ергәндән). Германия, 03.04.1945

Ҡадир Даян менән Кирәй Мәргән килгәс, “Ҡыҙыл атлылар” газетаһының эше шаҡтай йәнләнеп китте. Ҡыҫҡа очерктар, һүрәтләмәләр, шиғырҙар бирелә, халыҡ ижады өлгөләре – мәҡәлдәр, әйтемдәр, йыр, таҡмаҡ йыш ҡына күренә башланы. Былар бөтәһе лә беҙҙең боевой газетаның йөҙөн үҙгәртте, үтемле яһаны, яугирҙәр уны көтөп ала, ҡулдан-ҡулға йөрөтөп уҡый. Үҙҙәре лә ваҡыт табып яҙыша, йыр, таҡмаҡ, бәйет кеүек нәмәләр ижад итеп, һалып ебәрәләр ине. Шундайҙарҙың береһе эскадронға сығып йөрөгәнендә Али Ҡарнай ҡулына килеп кергән. Башта уны бер яугир, кемгә тапшырырға белмәй, кеҫәһендә оҙаҡ йөрөткән. А. Ҡарнай уны ҡыр сөмкәһенән алып кәңәш һорай:

-- Бик ҡыҙыҡ бер бәйет табылды, ни эшләтәйек икән? Әллә газетабыҙҙа баҫып сығарабыҙмы?

Бәйетте бергәләшеп (Кирәй Мәргән менән Ҡадир Даян да бар ине) уҡып ҡарайбыҙ. Исеме лә юҡ, башы ла, аҙағы ла. Әммә үҙе күңелде тартып тора:

Арғы яҡта иҫкән елдәр
Бирге яҡта иҫерме?
Иҫкән елдәр сәләмемде
Илгә алып китерме?...

Бераҙ уҡығас, уны кем яҙғаны асыҡланды:

Ҡыҙыл әрмейес Яҡупов
Башҡортостан иленән.
Яҙҙым ошо бәйетемде,
Яраланғас билемдән...

Материал беҙгә оҡшаны, ләкин бик оҙон ине. Ә беҙҙең фронт газетаһы бик бәләкәй күләмдә сыға. Бүлеп-бүлеп биргәндә лә, биш-алты һанға һуҙыласаҡ. Мин уны тылға – “Ҡызыл таң” газетаһына (ул саҡта “Яңы ауыл” тип атала ине) ебәрергә кәңәш бирҙем. Кирәй менән Даян да быны хуп күрҙеләр. Ҡарнай, баш сайҡап торҙо ла:

-- Ай-һай, иптәштәр, барып юлығырмы икән? – тине. – Хәрби почта быңдай күләмлене үткәрмәҫ. Берәй делегация килгәнен көтөргә тура килер инде, былай булғас. Ә материал йәл, әрәм була...

Шулай ҙа бер-нисә айҙан һуң был бәйет А. Ҡарнай иҫкәртмәһе менән “Дон далаларында” тигән исем аҫтында “Ҡыҙыл Башҡортостан” газетаһында баҫылып сыҡты (1943 йыл 11 май) һәм шунан һуң да төрлө йыйынтыҡтарҙа күп тапҡырҙар ҡабатланды.

Һүр. 14. Һулдан уңға: С.Р. Ҡадиров һәм Фәйзи Ғәскәров.
Сталинград фронты, 1942. *Л. Яҡупов фотоһы*

Халыҡ ижады менән күберәген Кирәй Мәргән ҡыҙыҡһына ине. Ул хатта хәрби частәрҙә сыға торған “Боевой листок”тарҙа урынлаштырылған көләмәстәрҙе, һәр төрлө таҡмаҡтарҙы күсереп алып йөрөгән. Башта был миңә сәйерерәк тойолдо. Ни өсөн, тигәндә, минең теләк – яҙыусыларҙы күләмлерәк, эрерәк һәм мөһимерәк эшкә файҙаланыу, уларҙың иғтибарын яугирҙәрҙең көндәлек боевой эшен теркәп барыуға йүнәлтеүҙән ғибәрәт ине.

-- Йыры-таҡмағы ярай инде, -- мин әйтәм, -- бәйет сығарыу ҙа була торған эш. Электән дә һалдат бәйеттәре күп сыҡҡан. Ә был анекдот-көләмәстәрҙең ни кәрәге бар? Ваҡытыңды юҡҡараҡ әрәм итмәйһеңме икән?

-- Дөрөҫ, -- ти был, -- көләмәс (анекдот) атамаһы үҙе үк сәйер ишетелә ҡолаҡҡа. Әммә, иптәш батальон комиссары, көләмәстәрҙә халыҡтың йор күңеле, уйын-көлкөгә булған һәләте сағыла. Көләмәс аша халыҡ үҙ дошмандарынан көлә, уны мыҫҡыллай, юҡка сығара. Унан һуң, бындай юмор һәм сатира менән һуғарылған ижад төрҙәре һуғышсыларҙың рухын күтәреүгә ярҙам итә бит. Мин уларҙы хатта газетала урынлаштыра барыр инем. Башҡа боевой газеталарҙа улар күренгеләп тора...

Шунан ул көләмәстәрҙең бер-нисәһен уҡып ишеттерҙе, бына улар:

“-- Әй Фриц! Ни эшләп һин үҙ ротаңа ҡайтмай йөрөйһөң?

-- Рота тигәнең, һерр лейтенант, мин үҙем булам инде”...

Ҡыҫҡа ғына ошондай һөйләшеү (диалог) аша немец-фашист ротаһының юҡка сығыуы, йәғни бер һалдатҡа тороп ҡалыуы күҙ алдына баҫтырыла. Был, әлбиттә, көлкө тыуҙыра, уҡыусыға тиҙ барып етә. Йәки бына тағы ла бер миҫал:

“-- Әй, был немец һалдаттары ниңә йоҡа кейенгән? Шинелдәре лә беҙҙекенән йоҡараҡ, гимнастеркалары ла...
-- Сигенгәндә йүгерергә еңел булһын тип шулай кейенә улар”...
Күрәһегеҙ, бынның ла көлкө уята, дошман ғәскәренең сигенергә әҙер тороуы тураһында һөйләй. Бындай көләмәстәр, дөрөҫтән дә, фронт газеталарында, беҙҙекендә лә баҫылғаланы.
Кирәй Мәргән, яйы килгәндә таныштырып ҡалайым, тигәндәй, ҡыр сөмкәһендә йөрөгән тағы күп кенә ижад өлгөләрен уҡып ишеттерҙе, бына бер-нисәһе:
Ике мылтыҡ, бер мылтыҡ –
Беренән-бере артыҡ.
Иртә лә янда, кис тә янда –
Һөйгән йәр кеүек танһыҡ.

Һүҙ юҡ, бындай ҡыҫка күләмле таҡмаҡтар ҙа кәрәк, улар яугирҙәрҙең рухын күтәрә.
Йәки бына:
Ике ҡылыс, бер ҡылыс,
Ҡыны – еҙ, үҙе көмөш.
Көнгә ялтырап тора,
Немец ҡалтырап тора, --
Бер һелтәп алдым,
Ҡынына һалдым...

Быларҙан башҡа тағы ла бер-нисә бәйет уҡыныҡ, йыр һәм таҡмаҡ өлгөләре менән таныштыҡ:
Донда икән, бында икән
Һуғыштың иң ҡатыһы.
Ҡаты һуғыш барған саҡта
Күренмәй көн яҡтыһы.

Донда икән, бында икән
Сығып ҡаршы алалар.
Илашып рәхмәт әйтәләр,
Беҙҙе оҙатып ҡалалар...
Минең үҙемә бигерәк тә фронт шарттарында яҙып алынған мәҡәлдәр оҡшаны. Мәҫәлән: “Аттың даны – егет ҡулында, егеттең даны үҙ ҡулында”. “Аттың матурлығы – башында, егеттең матурлығы түшендә”. “Аттың яҡшыһы алға сыға, егеттең яҡшыһы данға сыға”. “Үтмәҫ ҡылысты билдә йөрөтөү ҙә ауыр”. “Ағастың баһаһы – биргән емешенә ҡарап, яугирҙең баһаһы күрһәткән батырлығына ҡарап билдәләнә”.
Мәҡәлдәр араһында хатта шиғыр кеүек яңғырағандары ла бар ине:
Разведчик булһын үткер,
Сабельник булһын сапҡыр,
Связной булһын оскор,
Коневод булһын тапҡыр,
Ярҙамсың булһын йылғыр,

Менгәнең булһын айғыр...

-- Быларын, -- мин әйтәм, -- үҙебеҙҙең боевой газетала бирә барырға кәрәк. Әлбиттә, иң яҡшыларын ғына һайлап.
Боевой газетала, әлбиттә, бирә барырбыҙ, иптәш батальонный комиссар, -- ти Кирәй Мәргән, -- әммә бындай материалды йыйыу эшен дауам итергә кәрәк. Халыҡ ижадының ошондай матур ынйыларын беҙ ҙә йыймаһаҡ, кем йөрөр улар артынан? Сүпләп, туплап барайыҡ әле, күҙ күрер. Бәлки, иҫән ҡайтһаҡ, “Башҡорт кавалеристарының ауыҙ-тел ижады өлгөләре” тигән берәй йыйынтыҡ сығарып булыр.
Уның ҡыр сөмкәһендә оҙаҡ ҡына йөрөп, илгә ҡайтҡас улар “Һуғыш фольклоры” тигән нам аҫтында 1944 йылда Өфөлә айырым китап булып баҫылып сыҡты. Был йыйынтыҡ, һуңлап булһа ла, беҙгә фронтҡа килеп етте. Ләкин К. Мәргәнгә халыҡ ижады өлгөләрен әйтеп яҙҙыртҡан һуғышсыларҙың һәм командирҙарҙың күбеһе дивизияла юҡ ине инде. Ауыр һуғыштарҙа күптәр яраланып, госпиталгә оҙатылған, ә байтағы батырҙарса һәләк булған. Был бәләкәй генә китап беҙгә халҡыбыҙҙың аҡылын, патриотик тойғоларын алып килде, изге яуға өндәне.
Талантлы шағир Ҡадир Даян ул көндәрҙә күп кенә боевой шиғырҙар ижад итте. Уның шиғырҙары еңел уҡыла, күңелдәргә тиҙ барып етә ине. Ҡайһы берҙә хатта йыр итеп йырлап йөрөнөләр:
Башҡорттар китте һуғышҡа,
Оҙатып ҡалды Күк Урал.
Ат уйнатып алдан бара
Шайморатов генерал...

Был бөгөнгө көндә лә бик тулҡынландырғыс, монументалб яңғырай. Ҡадир Даяндың шиғырҙары боевой газетабыҙҙа ла күп кенә баҫылып сыҡты. Шағир фронтта үҙ шиғырҙарын йыш ҡына үҙе лә уҡып ишеттерә ине:
Атың ауһа һуғыш ҡырҙарында,
Йәйәү төшөп дошман ҡырырһың.
Аяҡтарың талһа, ергә ятып,
Күкрәк менән алға шыуырһың.

Атым яҡшы, тимә, һай, егетем,
Ат һынала бейек тауҙарҙа.
Ирмен, тиһәң, көсөң яуҙа күрһәт.
Ир һынала ҡанлы яуҙарҙа!

Шағирҙың фронт шарттарында яҙылған ҡайһы бер әҫәрҙәре, ҡулланма-наказ кеүек, халыҡ күңелендә тыуған мәҡәлдәй үткер:
Һалдат боҙмаҫ биргән антын,
Һалдат анты бер була.
Антын боҙмаған егеттәр
Ил алдында ир була.

* * *

Туғандаш Украинаны фашист илбаҫарҙарынан азат итеү барышында фронт газеталарында украин халҡы менән туғанлыҡ һәм дуҫлыҡ темаһын нығыраҡ яҡтыртыу бурысы ҡуйылды. Беҙҙең “Ҡыҙыл атлылар”ҙа ла украин халҡына туғандарса ярҙам күрһәтеү темаһына арналған төрлө хәбәрҙәр, һүрәтләмәләр, очерктар, шиғырҙар бирелә килде.

Шул көндәрҙең береһендә беҙҙең корпус беркетелгән армияның политбүлек органы “Боевой товарищ” газетаһының хәрби хәбәрселәре килеп төштө. Шул газетала башҡорт яугирҙәре өсөн башҡорт телендә махсус бит сығарырға кәрәк. Фронт шарттарында, билдәле, бындай бурысты башҡарыу оҙаҡҡа һуҙылмаҫҡа – шунда уҡ үтәлергә тейеш. Махсус биттең планын йәһәт төҙөп, яҙыусыларҙы эшкә ултырттыҡ. А. Ҡарнай үҙе украин һәм башҡорт егеттәренең дуҫлығы тураһында, дөрөҫөрәге, Крепак фамилиялы украин егетенең (командир) ҡаһарманлығы тураһында “Дуҫлыҡ” тигән очерк яҙҙы. Был очерк подвал итеп бирелде. Кирәй Мәргән дивизияның күптән түгел Украина ере өсөн һуғышып һәләк булған әлеге утыҙ ҡаһарман тураһындағы “Башҡорт халҡының батыр улдары” тигән очерк-һүрәтләмәһен үҙгәртеп, ҡыҫҡартып эшләп бирҙе, уны биттең үҙәгенә урынлаштырҙылар. Ҡадир Даян “Атлы егеткә” тигән шиғырын килтерҙе. “Сәләм һиңә, Украина!” исемле ялҡынлы редакцион мәҡәлә яҙылды. “Ҡыҙыл әрмис Батталов”, “Сержант Багаев инициативаһы”, “Героик подвиг” кеүек вағыраҡ хәбәрҙәр ҙә урынлаштырылды. Шунан был биткә “Башҡорттар Украина өсөн һуғышта” тигән дөйөм баш бирелде. Аҫҡа вағыраҡ хәрефтәр менән: “Башҡорт егеттәре! Тыуған Уралдың, йәмле Украинаның – барлыҡ Советтар Союзының азатлығы өсөн алға!” – тигән лозунг ҡуйылды. Был материалдар бөтәһе лә урыҫса сыҡҡан газетала башҡорт телендә бирелгәнлектән, наборҙы беҙҙең поход типографияһында йыйырға тура килде. Шулай итеп, “Боевой товарищ” газетаһының бер бите – армия типографияһында, икенсеһе, йәғни башҡорт телендәгеһе, дивизия типографияһында баҫылды.

Был сара, билдәле, беҙҙең өмөттө тулыһынса аҡланы. Башҡорт һәм украин яугирҙәре араһында дуҫлыҡ, берҙәмлек көндән-көн көсәйә барҙы, ул дуҫлыҡ беҙҙе, ҡулға-ҡул тотошоп, бергә атлап, яуыз дошмандың ҡара өңө Берлинға илтеп еткерҙе.

Сабир Ҡадиров.

31.05.1983.

Яугир тураһында һуңғы иҫтәлек

Сабир Рәхим улы Ҡадиров ғүмере буйына үҙенең бик күп яуҙаштары тураһында йылы иҫтәлектәр яҙҙы, уларҙың дәһшәтле яуҙағы батырлығын, кешелеклелеген данланы. Был моңло йыр ана шулай күп йылдар буйына өҙлөкһөҙ дауам итер кеүек ине. Әммә тәҡдир аяуһыҙ... Һуңғы тапҡыр ҡулына ҡәләм алыуына теүәл егерме ике йыл тулып үткәс, ветеран иҫтәлектәре шәлкеменә һуңғы нөктә ҡуйғандай, уның үҙе тураһындағы эскерһеҙ һәм моңло ядкәр өҫтәлде:

Хәтеремдә ҡалғандар

1941 йыл. Немец фашистары илебеҙгә баҫып керҙеләр... Ватанды һаҡлау өсөн һәр кем яуға китергә әҙер. Һөйөклө атайыбыҙ Ҡадиров Хәбир Рәхим улы 1941 йылдың август айында фронтҡа китте. Әсәйебеҙ Хәтимә менән беҙ -- өс бала теҙелеп ҡалдыҡ. Иң ҙуры Динара (мин) – 8 йәштә, улы Рев – 5 йәштә, ә иң бәләкәсебеҙ Венераға ни бары 2 йәш ине. Атайыбыҙ шул 1941 йылдан алып 1945 йылдың 3 мартына тиклем һуғыш ҡырында, яуҙа булды. Ул Воронеж шәһәрен, Орел, Брянск, Курск ҡалаларын дошман ғәскәрҙәренән азат итеүҙә ҡатнашып, Белоруссияны, Польшаны азат итеү һуғыштарында ҡаты яраланып госпиталгә эләгә... уны Глейвиц тигән бәләкәй шәһәрҙә ерләп ҡалдыралар. Бөйөк Еңеүҙең 60 йыллығы айҡанлы минең ҡыҙым – атайымдың ейәнсәре Роза үҙенең улдары Урал, Илдар менән атайм эҙҙәренән барып, ҡәберен эҙләп таптылар, сәскәләр һалдылар.

Атайым бик оптимист кеше ине. Хаттарында: “Хәтимә, балалар менән беҙҙе көтөп тороғоҙ, оҙаҡламай Берлинды аласаҡбыҙ – дошманды еңеп ҡайтырбыҙ”, -- тип яҙғайны... Ул шулай уҡ оптимист Сабир олатайымдың бер туған энеһе ине. Сабир, Заһир олатайҙар – атайымдың ағайҙары дошманды еңеп иҫән-һау әйләнеп ҡайттылар, тормош дауам итте...

Атайымдан 8 йәштә тороп ҡалған булһам да, тырыша-тырмаша үҫеп, 1950 йылда Бәләбәй районы Туҙлыҡыуыш урта мәктәбен уңышлы тамамланым. Ауылда балалар уҡытып, юғары уҡыу йортонда ситтән тороп уҡырмын, тип йөрөй инем, сөнки әсәйемә донъя көтөүҙәре бик ауыр – Рев туғаным 7-нсе класты ғына тамамлаған, ә Венера һеңлем 4-енсе класта ғына уҡый. Ләкин беҙҙең туған йәнле, хәстәрлекле Сабир олатайыбыҙ мине Өфөгә саҡырҙы: “Динара ҡыҙым, бөтә документтарыңды ал да тиҙ арала килеп ет”, -- тине. Ҡыуанып, аттестатымды күтәреп барып керҙем. Мине үҙе пединститутҡа килтереп, документтарымды тапшырышты. Үҙҙәрендә йәшәтеп, экзамендарға әҙерләндертте. Аттестатҡа 11 экзамен биргәйнем, институтҡа 7-не тапшырҙым. Сабир олатайым саҡырып алғансы, Өфөнө күрмәгәйнем, бик ҙур ҡала икән, тип хозурландым. Институт биналарын күреү – үҙе бер ғүмер ине минең өсөн! Ә бит ауылда урта мәктәп тигәнем – элекке мәсеттәрҙе һүтеп яһалған ғына ине.

Хәҙер шуны уйлайым: Сабир олатайым атайҙарса хәстәрлек күргән бит ул ваҡытта! Көн дә икеһе лә эштә, өйҙә яңғыҙым ҡалам. Үҙе үҙәк баҙарға барып итен, кәбеҫтәһен, кишерен алып ҡайтып бирә ине миңә. “Динара ҡыҙым, бына ошоларҙан аш бешереп аша, ас ултырма. Экзамендарыңа яҡшылап әҙерлән”, -- тиер ине.

Экзамендарҙан һуң ҡайтып китеп, әсәйгә бераҙ йорт эштәрендә булышҡанда, институттан саҡырыу килеп төштө -- ҡабул ителгәнмен! 1 сентябргә ҡоштай осоп барып еттем. Өҫкә кейергә булмаһа ла, ҡайғырып тороу юҡ инде. Әсәйем ашарға тип биргән аҡсаһына һырған көпәйкә алып кейеп, уҡый башланым, пединституттың дөйөм ятағынан урын бирҙеләр. Атайым Бөйөк Ватан һуғышында һәләк булғас, уның ғаиләһенә, балаларына льготалар бар ине.

Шулай итеп, Башҡорт Дәүләт педагогия институтын 1954 йылда тамамлап, эшләй башланым, ғаилә лә ҡороп ебәрҙем. Аллаға шөкөр, ике ҡыҙ үҫтерҙем. Өлкәне Энже әлеге көндә математика уҡытыусыһы булып эшләй. Икенсеһе Роза француз теленән уҡыта. Үҙем күп йылдар буйына урта мәктәптә уҡытыусы, директор ярҙамсыһы, директор булып эшләнем. Йәмәғәт эштәрендә лә әүҙем ҡатнашып, ауыл Советы депутаты, район Советы депутаты булып күп тапҡырҙар һайландым. 11 йыл

Благовар ҡасаба Советында председатель булып эшләнем. Әлеге көндә Энже ҡыҙым һәм ейән-ейәнсәрҙәрем менән бергә Өфөлә йәшәйем. Артурыбыҙ Нефть институтын тамамлап, армияла икенсе йыл хеҙмәт итә. Светлана 11-енсе класта уҡый. Мин, оләсәй кеше, яҙмышымдан ҡәнәғәтмен. Ҡәҙерле Сабир олатайыма уның хәстәрлектәре өсөн бер туҡтауһыҙ рәхмәт уҡыйым. Ул беҙҙе, балаларыбыҙҙы бик ярата ине. Туғаным Рев, атайымдың шахматын алып, Сабир олатайыбыҙ янына китә лә икәүләшеп шахмат уйнайҙар ине.

Сабир олатайымдың атаһы – беҙҙең бабаҡайыбыҙ Ғәбделрәхим 1953 йылға тиклем үҙ нигеҙендә йәшәне, 83 йәшкә етте. Сабир олатайыбыҙ йыл да уның хәлен белергә ҡайта ине. Ә мин 9-ынсы класта уҡығанымда уларҙың янына барып, үтенестәре буйынса “Таштуғай”, “Сибай” кеүек оҙон көйҙәрҙе йырлай инем.

Сабир олатайым бик тә йыр, моң ярата ине. Ғүмеренең һуңғы көндәрендә Өфөнөң 21-енсе дауаханаһында ятҡанында янына йыш барып йөрөнөк. Ауыр хәлендә булһа ла, барыбыҙҙы ла танър ине. Шундай көндәрҙең береһендә ул мине күргәс тә хәлһеҙ генә тауышы менән “Сибай”ҙы һуҙып ебәрҙе. Янына ултырып, башын тотоп, аҡрын ғына икәүләшеп моңландыҡ:

Йәшел генә сана, зәңгәр дуға,
Ектерһәнә, Фатимам, тураҡка.
Йүгереп кенә яныңа ҡайтыр булһам,
Ирешер инем, Фатимам, мораҡка.
Һандуғастар һайрар, ай, ер түгел,
Кәкүктәр ҙә саҡырыр ер түгел.
Илама ла, Фатимам, ай, илама,
Йүгереп кенә ҡайтыр ер түгел...

Шул йырҙан һуң бер аҙна ғына йәшәне...

Сабир олатайымды үҙенең тыуған ауылына (Бәләбәй районы Туҙлыҡыуышҡа) алып ҡайтып, райондаштары, ауылдаштары ҡәҙерләп ерләнеләр. Бик ҙурланылар уны! Әле лә ҡәберенә сәскәләр һалынып тора. Ауыл мәктәбе музейында уның кәрәкле китаптары, фотокарточкалары, фронт яҙмалары һаҡлана. Яҡты иҫтәлеге мәңге ил йөрәгендә ҡалыр. Амин!

Сабир олатайым! Ҡәҙерлебеҙ һин беҙҙең! Һин һәр ваҡыт беҙҙең менән! Һин – мәңгелек!

Динара Ҡадирова-Тереғолова. 30.10.2005.

Мәңгелеккә күскән ветеран инде беҙҙең данлауға ла, хурлауға ла битараф, әммә яҡты донъяла сағында ҡаһармандың ҡәҙерен белмәүҙәре, ғүмере буйына бәғзеләрҙең рәхмәт урынына һөмһөҙ рәнйетеүҙәре өсөн әрнеп тә ҡуя йөрәк. Хатта “Энциклопедия”ға ла, кәбәктәй килбәттәрен килеп үҙҙәре йәпләшһәләр ҙә, уға ярты ус яҫыһындай ҙа урынды бирмәгәндәр. Һәр нәмәне үҙенең наҡыҫ аршинында бизмәнләткән “энциклопедист”тың тар күңеленә һыйышмаған, күрәһең. Әммә ваҡыт иләге тос бойҙайҙы кәбәктән үҙе айыра...

ОБСТОЯТЕЛЬСТВО ГИБЕЛИ М.М. ШАЙМУРАТОВА

В 70-х годах, когда я собирал материал для задуманного мною романа о славной 112-ой (впоследствии 16-ой гвардейской) Башкирской кавалерийской дивизии, глубоко меня взволновал героический рейд дивизии в тыл немецко-фашистских захватчиков в феврале 1943 года и трагическая гибель тогда командира дивизии генерал-майора М.М. Шаймуратова. И на этой почве я крепко подружился с бывшим заместителем начальника (а во время рейда начальником) политотдела дивизии гвардии майором запаса, ныне покойным (пусть Аллах место ему определит в раю!) Сабиром Рахимовичом Кадыровым, который всячески помогал мне в означенном деле. И я тоже старался не оставаться в долгу: в Башкирском книжном издательстве в моей литературной записи вышли его книги о боевом пути дивизии и лично генерале М.М. Шаймуратове "Через огни и воды" (1977), "Орел Урала" (1981), последняя была издана и в переводе с башкирского на русский язык (1985). И вот благодаря стараниям моего высокоавторитетного старшего друга летом 1971 года Верховный Совет БАССР откомандировал нас, ветерана дивизии гвардии полковника запаса С.Х. Хабирова (должен был ехать сам С.Р. Кадыров, но семейные обстоятельства задержали его) и меня, писателя, (потом к нам присоединился еще и мой коллега Р.Г. Низамов) в Ворошиловградскую область для ознакомления местами боев дивизии во время рейда и состоянием там дел по увековечению памяти о погибших. Мы имели с собою официальное письмо-обращение к местным властям об оказании нам всяческой помощи в пути, подписанное самим Председателем Верховного Совета БАССР Ф.В. Султановым, что сильно облегчило нашу поездку. Там я воочию убедился в правдивости воспоминаний С.Р. Кадырова о рейде, а также о месте, обстоятельствах гибели генерала. Нам было известно, что в октябре 1948 года там работала наша особая Правительственная комиссия под председательством С.Р. Кадырова, в числе членов которой был и профессор судебной медицины В.Г. Кузнецов. Комиссия произвела эксгумацию останков М.М. Шаймуратова и организовала его траурное перезахоронение. Здесь хочу особо отметить, пока еще не исчезло бесследно, точное месторасположение могилы национального героя: она находится на территории химзавода им. Петровского (в рабочем поселке того же имени) на середине мемориальной площадки на фоне мраморных стел с именами погибших в рейде высших командиров (в том числе нашего генерала) 7-го гвардейского кавалерийского корпуса, над ней высится отдельный памятник — фигура воина в коленопреклонной позе с венком в руках. В свое время этот памятник над могилой генерала был сооружен благодаря упорному ходотайству ветерана дивизии, ныне покойного писателя Ахтяма Ихсана; первоначально на фасаде постамента под венком имелась бронзовая доска с именем гвардии генерал-майора М.М. Шаймуратова, но впоследствии она бесследно исчезла, а могила генерала стала "могилою неизвесного воина" (фотография могилы с этим памятником после нашей поездки в 1971 году мною была опубликована на страницах газеты "Совет Башкортостаны" в очерке "В краю где сверкали алмазные клинки")...

Благодаря тому же незабвенному С.Р. Кадырову в апреле 1984 года мне был предоставлен кратковременный доступ к так называемому "секретному сейфу" секретариата Верховного Совета БАССР с материалами, собранными по случаю

представления (посмертно) генерал-майора М.М. Шаймуратова на звание Героя Советского Союза и некоторые из этих документов мне удалось тогда списать. Ниже они публикуются впервые.

Но прежде письма, исходящие от Маршала Советского Союза Семена Михайловича Буденного:

Письмо с конвертом:

Секретарю Башкирского областного комитета КПСС тов. Нуриеву З.Н.

Посылаю Вам копию письма члена Президиума Верховного Совета СССР Маршала Советского Союза С.М. Буденного с поддержкой Вашего ходатайства о присвоении посмертно звания Героя Советского Союза ген.-майору Мингалею Мингазовичу Шаймуратову.

Приложение: на 1 листе.

Для поручений Маршала Советского Союза С.М. Буденного:

Молодых.

23 июня 1958 года.

Резолюция: Ознакомить членов бюро ОК и зав. отделами.

З. Нуриев. 27.06.-

(Бөтә бюро ағзалары уҡығанлыҡҡа ҡул ҡуйған).

Член Президиума Верховного Совета СССР
Маршал Советского Союза С.М. Буденный.

23 июня 1958 г. №240,
г. Москва.

В Центральный Комитет КПСС.

Мне стало известно, что Башкирский обком КПСС и правительство Башкирской АССР обратились в ЦК КПСС с просьбой о присвоении посмертно звания Героя Советского Союза генерал-майору Шаймуратову Мингалею Мингазовичу – бывшему командиру 112 Башкирской гвардейской кавалерийской дивизии.

Я знал М.М. Шаймуратова человеком большой силы воли, способным военачальником и горячим советским патриотом. В дни тяжелой борьбы с немецко-фашистскими захватчиками он проявил себя умелым организатором и командиром кавалерийского соединения, неоднократно показывая примеры личного мужества, доблести и геройства.

Присвоение М.М. Шаймуратову посмертно звания Героя Советского Союза будет достойной оценкой его заслуг в борьбе против черных сил фашизма и послужит благородному делу воспитания советских людей в духе беззаиетной преданности нашей великой Родине.

Поддерживаю ходатайство Башкирского обкома КПСС и Совета Министров БАССР о присвоении посмертно звания Героя Советского Союза генерал-майору Мингалею Мингазовичу Шаймуратову.

С. Буденный.

(Үҙенең ҡултамғаһы).

О командире 16-ой гв. кав. дивизии генерал-майоре Шаймуратове М.М.

1

(лл. 1-4, машинопись).

Председателю Совета Министров Союза ССР тов. И.В. Сталину

По заданию Государственного Комитета Обороны в ноябре месяце 1941 года была сформирована Башкирская кавалерийская дивизия, командиром которой приказом НКО был назначен, отозванный из кавалерийского корпуса Доватора, полковник Шаймуратов М.М.

В течение краткого времени усилиями полковника Шаймуратова дивизия превратилась в боеспособное соединение и в апреле 1942 года была направлена в действующую армию в состав Брянского фронта.

На протяжении всей Вел. Отеч. войны дивизия постоянно находилась на ответственных участках фронта и всегда справлялась с боевыми задачами, проявляя смелость и морально-политические качества.

В июле 1942 года дивизия нанесла сокрушительный удар по наступающему противнику в районе Барки — Тербуны, уничтожила более 5.000 солдат и офицеров, отбросила противника и удержала этот участок обороны до самой глубокой осени.

В октябре 1942 года, преодолевая трудный, длительный тысячекилометровый марш, дивизия в организованном порядке прибыла в район Серафимовичи и вошла в состав войск Юго-Западного фронта, откуда, приданная пятой танковой армии, 19-го ноября первой прорвала глубоко укрепленную оборону противника и успешными боями вышла в район станции Аблиевской, перерезала железную дорогу Сталинград — Ростов, путь отхода немецким частям.

В дальнейших боях дивизия принимала активное участие в освобождении станций Морозовская, Тацинская, Белая Калитва и была переброшена в район Ворошиловграда для выполнения особого задания командования — прорваться в тыл противника.

Находясь в глубоком рейде в районе Чернухино — Дебальцево, дивизия смелыми кавалерийскими налетами уничтожила крупные базы снабжения, тылы, штабы и пускала под откос эшелоны немецких войск, идущие на подкрепление передовых позиций.

Во время выполнения этого боевого задания в рейде 24 февраля 1943 года генерал-майор Шаймуратов героически погиб в деревне Штеревка Ивановского района Ворошиловградской области.

В последующих наступательных действиях наших войск дивизия генерал-майора Шаймуратова продолжала участвовать во всех боевых операциях, вплоть до взятия Берлина, за что неоднократно отмечалась в приказах Верховного Главнокомандующего, получила наименование Черниговской, награждалась орденами Красного Знамени, Суворова, Кутузова III-й степени и 70 (в

действительности 78. — *Й.С.*) ее воинов были удостоины звания Героя Советского Союза.

Областной комитет ВКП(б), Президиум Верховного Совета и Совет Министров Башкирской АССР, учитывая особые заслуги перед Родиной бывшего командира 16-ой гвардейской кавалерийской дивизии генерал-майора Шаймуратова М.М., просят Вас присвоить ему посмертно звание Героя Советского Союза и разрешить установить монументальный памятник в городе Уфе.

Секретарь областного комитета ВКП(б) **С. Вагапов.**

Председатель Президиума Верховного Совета Башкирской АССР

Н. Нигмаджанов.

(Исправлено: **Ф. Загафуранов**).

Гор. Уфа, 11 декабря 1948 года.

(Исправлено: 9 ноября 1950 года. — Возможно, дата очередного представления героя к высокому званию).

2

(лл. 5-11, машинопись и оригинал от руки).

В Президиум Верховного Совета БАССР от бывшего начальника Особого отдела 16-ой гвардейской дивизии 7-го кав. корпуса гв. майора Кузнецова Михаила Ильича об обстоятельствах гибели командира 16-ой гв. кавдивизии 7-го кав. корпуса гв. генерал-майора Шаймуратова М.М.

Мне известно следующее: генерал-майора Шаймуратова я знал с декабря 1941 года, т.е. с начала формирования Башкирской (гв. 16-ой) кавдивизии и до момента его гибели, т.е. 23 февраля 1943 года. Вместе с ним участвовал во всех боях, проходивших под его командованием. Боевые действия, проходившие под командованием Шаймуратова получили блестящую оценку Верховного командования, о чем свидетельствуют неоднократные приказы с объявлением благодарности И.В. Сталина, а 15 февраля 1943 года дивизии было присвоено звание гвардейской.

Лично Шаймуратов во всех известных мне боевых действиях проявлял себы как беззаветно преданный Родине, талантливый и смелый командир Советской Армии.

По окончании боевых действий под Сталинградом и выполнения боевых задач под Ворошиловградом 16-ая кавдивизия в составе 7-го корпуса была направлена в рейд в глубокий тыл противника, где под командованием Шаймуратова в тяжелых зимних условиях вела ожесточенные бои, нанося противнику громадный ущерб в живой силе, технике и на коммуникациях.

Немецкое командование, стремясь уничтожить наши части, действовавшие в их тылу, бросила на нас несколько стрелковых дивизий, мотомеханизированные и танковые части, авиацию, однако наша дивизия продолжала беспрерывно наносить сокрушительные удары по врагу вплоть до своего выхода из тыла противника.

Генерал-майор Шаймуратов в период рейда по тылам противника вел себя подлинно героически, ярким примером чего может служить его поведение в период боев в Чернухино. По приказу командования к нам в Чернухино должны были дойти наши мотомехчасти, поэтому заняв с боем часть улиц Чернухино, наша дивизия в течение пяти суток вела беспрерывный бой с противником, к последнему дню боя на занимаемых нами улицах противником были сожжены и разбиты все

постройки, снег стал черным от копоти и земли, вздымаемой снарядами и минами. Командный пункт Шаймуратова находился в небольшом деревенском погребе, где постоянно глушило разрывами и осыпалась земля, однако Шаймуратов ни на минуту не терял самообладания и весь был поглащен напряженностью боя и стремлением нанести как можно больший ущерб противнику.

На исходе пятых суток был получен приказ о выводе наших частей из Чернухино в другое место. Командование корпуса, во главе с генерал-майором Борисовым, зная о том, что Чернухино окружено плотным кольцом противника, проявило растерянность (мое личное мнение), а вывод частей из Чернухино возложило на Шаймуратова, что им и было исключительно мастерски проведено; все части, находившиеся в Чернухино, вышли при незначительных потерях в людском составе. Шаймуратов вывел тогда целый корпус буквально из пасти противника, вывел глухой ночью, одному ему известными путями.

По выходе из Чернухино дивизия, продолжая с боями продвигаться в тылу противника, к 21 февраля 1943 года подошла к ст. Петровеньки, где в течение суток вела бой нанося большой урон немецким войскам, при чем было сильно разрушено ж.д. полотно и уничтожено несколько ж.д. составов. В ночь на 22 февраля мы заняли шахту N 152 и днем 22 февраля шел бой, который к вечеру утих. С наступлением темноты, в 8-9 часов вечера я зашел к Шаймуратову, он в это время находился в маленьком домике рабочего шахты, там же в этот момент находился нач. штаба Голенев. Был получен приказ о выводе наших частей из рейда, т.е. из тыла противника, в соответствии с которым Шаймуратов и давал указания. Переговорив о предстоящих действиях и задачах наших частей при выходе из рейда, Шаймуратов отпустил нач. штаба Голенева, а со мной, как командир уже имевший опыт выхода из рейдов (имеется в виду участие М.М. Шаймуратова в глубоком рейде в составе корпуса Доватора под Москвой. — *Й.С.*), стал беседовать о предстоящих трудностях, с которыми мы можем встретиться, при чем менее всего он думал о себе, а беспокоился о том, хватит ли стойкости, решительности и физических сил у бойцов и командиров в решительный момент при выходе, т.к. предполагался жестокий бой с наседавшими немецкими частями и одновременно бой при прорыве укрепленной линии обороны противника, тогда как силы нашего людского состава измотаны прошедшими непрерывными боями. Шаймуратов тогда говорил: "Предстоит выполнить самую сложную часть задачи, вывести дивизию из тыла, выход из тыла является самым сложным моментом, т.к. при этом можно оказаться в самом неожиданном положении, может оказаться, что некоторые из нас будут в безвыходном положении, лишены возможности получить помощь товарищей и будут предоставлены сами себе, может случиться, что часть дивизии прорвется, а часть не успеет, т.к. прорыв в обороне противника может быстро сомкнуться".

О себе им было тогда сказано так: "Если я окажусь в безвыходном положении, то вот будет мой выход (при этом указал на имевшийся у него пистолет), чтоб я бывший батрак, старый командир опозорил собой Красную Армию, этого я допустить не могу". Тогда же Шаймуратов рассказал мне как погиб Доватор, с которым он был вместе в боях под Москвой.

Вскоре был получен приказ о выступлении и наша дивизия вышла, а к 4 часам утра 23 февраля 1943 года вступила в деревню Юлино. По прибытии в д. Юлино

Шаймуратов был вызван в штаб корпуса, куда вместе с ним пошел и я. Там Шаймуратову было приказано генерал-майором Борисовым не приостанавливая движения итти на прорыв, при чем наша дивизия должна первой прорвать оборону противника. Шаймуратов спросил, будет ли дана время на разведку, но получил ответ, что разведка уже произведена другими частями и что перед нами очень слабые силы противника, после этого Шаймуратов позвал меня и мы пошли к своей дивизии, по пути он только сказал: "Было бы лучше, если бы разведка была произведена нами, но раз есть приказ его нужно выполнять". Вызвал Голенева и отдал ему последние приказания на предстоящий бой.

1950 йылдың 25 апрелендә Х. Ҡолмөхәмәтов Салауат районының Яңы Ҡаратаулы ауылында Сафия инәй Исламованан һорашып яҙып алған шәжәрәнең башланышы ошондай:

1. Дөртмән. — 2. ???. — 3. Аҙналы. — 4. Юлай. — 5. Салауат һәм Юлайҙың ҡыҙы (исемен белмәйем), ул ***Бишәүҙәрҙә*** була»...

Күренеп тора: беренсе бабаның дөрөҫ исеме Дәрдмәнд (ғәрәпсә мәғәнәһе «бисара, ғәзиз») булып, бер аҙ боҙоп — “башҡортса”лаштырып яҙылған. Унан һуңғы (һорауҙар ҡуйылған икенсе быуын) исемде иһә «ревизские скаски»ҙарҙан соҡсоноп һәм тоҫмаллап таптыҡ: Мөъмин (ғәрәпсә мәғәнәһе «ышаныусы, инаныусы; Ислам динендәге кеше». Урыҫса доҡументтарҙа Мукмин, Мукминов тип яҙыла). 1773-75 йылдарҙағы бөйөк боланан һуңғы осорҙа Салауат Юлаевтың тоҫмалланмыш тоҡомдарының байтағы, батша хөкүмәте ялсыларын аймылыш ҡылыу өсөндөр, үҙ аталары исемен йәшереп, шул Мукминов фамилияһында йөрөй. Мәҫәлән, 1795 йылғы ревизияла Якшиваново ауылында йәшәүсе башҡорт типтәре Аҡбулат Мукминов (1721 йыл тыуған) күрһәтелгән, ә уның улы йорт старшинаһы Мортаза Аҡбулатовтың (1746 й.т.) командаһына ҡараған Ҡамышлы, Илмырҙа ауылдарында баяғы Әбдесәләм һәм Балта Аҙналиндар менән бер ҡатарҙан Күсәк Йосопов йәшәй. Шул уҡ Ҡамышлылағы Баязит Киләйев (1800 й. үлгән) уҙамандың улы Рәхимҡол Баязитов (тыумышы 1752 йыл — Салауат Юлаевтың йәштәше) 1816 йылда хәҙерге Ҡырмыҫҡалы районындағы Биштәкә ауылында йорт старшинаһы булып торған, ә уның өлкән ҡатыны Сәғиҙә Мукминова (1758 й.т.) — Салауат Юлаевтың бер туған һеңлеһе йәғни Юлайҙың баяғы шәжәрәлә «исемен белмәйем, ***Бишәүҙәрҙә*** була» тип күрһәтелгән ҡыҙы булырға оҡшай. Бындағы «Бишәүҙәр»ҙе хәҙерге Салауат районындағы *Бишәүләр* ауылы итеп түгел, ә Ҡырмыҫҡалы районындағы ***Биштәкәй*** (хәҙерге Биштәкә) ауылын нигеҙләгән ***бишәүҙәр*** (Тәкәй ауылынан сыҡҡан биш кеше) ауылы тип аңларға кәрәк. Сөнки Салауат заманында тегеһенең, хәҙерге Салауат районындағының, дөрөҫ аталышы “Бишәүләр” түгел, ә ***“Бишәйләр*** булған, йәғни ул ауылды 1735 йылғы Килмәк-абыз етәкселегендәге баш күтәреүҙә Ҡаҫмарт йылғаһы тамағында (Һаҡмар буйы) батша ҡырғынсылары тарафынан ҡыйратылмыш Үҫәргән ырыуының Күк Уралға ҡасып киткән ***“бишәй”*** араһы кешеләре нигеҙләгән (Р.Г. Кузеев, Происхождение башкирского народа. М. 1974; 158 – 159-ынсы биттәр), шуға күрә ул ауыл Үҫәргән һөйләшенә хас *лар-ләр* ялғауы менән (ә хәҙерге Салауат районындағы ҡыуаҡандарҙыҡынса *ҙар-ҙәр* түгел!) “Бишәйләр” тип йөрөтөлгән. Бынан тыш, старшина Рәхимҡолдоң Биштәкәйҙәге бер туған ағаһы Сәғит Баязитов та (1749 й.т.) шул уҡ Салауаттар тоҡомо булыры ихтимал Миһырбан Мукминоваға (1764 й.т.) өйләнгән бит.

Тимәк, әгәр ошо юрауҙарыбыҙ юш килһә, хәҙерге Ҡырмыҫҡалы районындағы был төбәк йорт старшиналарының икеһе тиң (һәм тағы башҡалар) Салауат Юлаевтың яҡын ағай-энеләре булып, улар Е.И. Пугачев болаһында ҡатнашмаған йәғни батша хөкүмәтенең ышаныслы кешеләре һаналған. Ә батшаға ҡаршы баш күтәреп еңелгән башҡорттарҙың ҡатындары, балалары, ҡырғын әтрәттәре тарафынан ҡулға алынып, ихтилалды баҫтырыусы урыҫ офицерҙарына, татарҙарға һәм шулай уҡ батшаға тоғролоҡло башҡорт һәм мишәр түрәләренә ҡоллоҡҡа таратып бирелеүе билдәле. Һәм был төбәк Салауат ғаиләһенең батша язаһынан ҡасҡан ҡайһы бер ағзаларына боҫоу урыны булыуы бик ихтимал. ***Салауат Юлаев ҡылысының*** беҙҙең замандарғаса ***тап шул төбәктә*** һаҡланыуы ла ҡеүәтләй был фекерҙе.

Салауат Юлаев ғаиләһенең яҙмышы

Заманаһының заңына һәм йолаларына ярашлы, йәш кенә (ә ысын йәше тураһында һүҙ – алдараҡ) Салауаттың өс ҡатыны һәм уларҙан тыумыш балалары (һаны билдәһеҙ) булған. Батырҙың эҙенә төшөрҙән элек үк, ҡырғынсылар уның ҡатындарының һәм балаларының бер нисәһен ҡулға ала, шунан һуң үҙен дә эләктерә. Салауаттың үҙенең әйтеүенсә, уның бер улы Өфө ҡала коменданты полковник С.С. Мясоедовта, икенсеһе генерал Ф.Ю. Фрейманда тотҡон булып, «башҡа ҡатындары һәм балалары иһә урындағы түрәләр тарафынан бүлешеп алынған» (береһененең дә исеме аталмай). Мәҡәләбеҙ башында уҡ ҡуйылған һорауға яуапты нәҡ ошо һуңғы «башҡа»лары араһынан һәм Салауаттың Е.И. Пугачев болаһында ҡатнашмаған ағай-энеләренең төйәге булырҙай ***Биштәкәй*** (хәҙерге Биштәкә), ***Илмырҙа, Ҡамышлы*** (Ҡырмыҫҡалы районы) ауылдарынан эҙләйек.

Билдәле булыуынса, Салауатты тәүҙә, үҫмер-малай көйөнсә, тол ҡалған еңгәһенә өйләндергәндәр һәм шунан һуң алған ҡатындарының береһе Гөлбәзер (Гөлбәзир тип тә әйтәләр, урыҫса Гульбазар тип яҙылған; фарсы ҡатнаш ғәрәпсә мәғәнәһе — «сәскә орлоғо») исемле булған. «Ревизские скаски» (ЦГИА Р.Б., фонд И-138, оп. 2, дело 355, л. 151) буйынса, 1816 йылдың февралендә 60 йәшлек (1756 й. тыуған) был «вдова Баязитова Гульбазар» Ҡамышлы ауылында баяғы түрә ***Баязит*** Киләйевтең тол ҡатыны рәүешендә теркәлгән, ә шул уҡ йылдың икенсе бер ҡағыҙында (дело 347, л. 221) шул ***Баязит*** Киләйевтең Абдуллатиф исемле улының әсәһе итеп күрһәтелгән. Тимәк, Абдуллатифтың 1787 йыл тыуыуына ҡарағанда, Салауат Юлаевтың хәләл ефете Гөлбәзер Ҡамышлы ауылы типтәре ***Баязит*** Киләйевкә иң кәмендә 1786 йыл тормошҡа сыҡҡан (шуға тиклем Салауатын көткәндер?).

Инде килеп Салауат улдарының да баяғы «башҡа»лар ҡатарындағы берәйһе, моғайын, ошо төбәктә ереккәндер, тигән ышаныс тыуа. Ағай-энеләре уның Салауат улы икәнен дә, Салауат ҡушҡан ысын исемен дә бик нығ йәшергән булыр, әлбиттә. Һәр хәлдә, ул бындағы Салауат ағай-энеләрендә тормаҫҡа, фамилияһын Салауатов тип тә, Юлаев һәм Аҙналин тип тә атамаҫҡа тейештер. (Ә хәҙер үҙҙәрен Салауат Юлаевҡа бәйле шәжәрә төҙөргә тырышҡан Салауатовтар нәҫеле иһә бөйөк батырыбыҙ менән бер заманда, бер төбәктә аралашып, батырыбыҙ тыуып-үҫкән хәҙерге Иглин районы Тәкәй ауылына яҡын Тауыш ауылында йәшәгән һәм батша администрацияһына уның тураһында шаһитлыҡ ҡылған [Крестьянская война 1773 – 1775 гг. на территории Башкирии, Уфа – 1975, 327, 328, 329, 426-сы биттәр] Салауат Собханғолов нәҫелдәрелер. Ошоларҙан сығып, Салауаттың икенсе бер шәжәрәлә («Ағиҙел» журналы, 1978/6, 120-122-нсе биттәр) исемләнгән ике улы ***Аҡбулат*** һәм ***Шатморат*** тирәһендә төпсөнөү кәрәк. Бөтә дәлилдәрҙе йыйып оҙаҡ тикшергәндән һуң, баштараҡ Аҙналиндар менән бергә исеме аталған Илмырҙа ауылы уҙаманы баяғы Күсәк Йосоповҡа һәм уның Мөрсәлим (ғәрәпсә мәғәнәһе «ебәрелгән илсе, пәйғәмбәр») исемле улына (1765 й. тыуған) шып-туҡтала иғтибар (1795 йыл ревизияһы буйынса), — йәғни ҙә ки Салауат Юлаевтың улын, ысын исемен һәм килеп сығышын йәшереп, унда шуның (Күсәктең) улы итеп яҙҙыртҡандарҙыр, исем мәғәнәһе лә дөрөҫләй быны – “ебәрелгән илсе”. Абайлаһаҡ, Е.И. Пугачев болаһы баҫтырылғанда уланға ***ун*** йәш булған. Был иһә Юлай Аҙналиндың 1775 й. 25 февралендәге һорау алыу барышында, ике ҡатынымды һәм ***ун*** йәшлек уланымды әсир итеп алып киткәндәр, хәҙер ҡайҙа икәнлектәрен белмәйем, тигәненә тап килә,

сөнки башҡорт йолаһынса тәүге ейән (йәғни Салауаттың тәүге улы) ҡартатаһының (йәғни Юлайҙың) уланы һанала ла уның ҡарамағында тәрбиәләнә. Салауаттың был улы, бәлки, Салауаттың тәүге ҡатынынан (еңгәһенән) тыуғандыр, ә бәлки, ул саҡтағы 9 ғына йәшлек Гөлбәзерҙәндер (ҡыҙҙарҙың енси өлгөрөүе 8-9 йәштә лә була). Ә Салауат үҙе, йәғни атай кеше, тарихсыларыбыҙ бер ниндәй ҙә тәғәйен документҡа таянмайынса, фәҡәт уның язаланыу барышында батша хөкөмдарҙарына әйткән һүҙҙәре буйынса ғына, ә ул уйҙырма булыуы ла бик мөмкин! -- ул саҡта йә — 13, йә 11 йәштә (сөнки уны, баяғыса, бер ниндәй ҙә ышаныслы документҡа таянмай, йә — 1752, йә 1754 йылда тыуған һанайҙар). Әммә был да тәбиғәт ҡанунына тап килә: малайҙарҙың енси өлгөрөүе 10-11 йәштән үк икән (Большая Советская Энциклопедия, 20-нсе том, 241-енсе бит). Ә шулай ҙа шик тыуа: совет заманында батырыбыҙҙың юбилейына әҙерлек айҡанлы яҙыласаҡ мәҡәлә проектын тикшергәндә уның тыуған йылын тар ултырышта тауыш биреү юлы менән генә билдәләп ҡанунлаштырған ғалимдарыбыҙ яңылышманымы икән? Сөнки бына “Протокол N 2 заседания комиссии по составлению научной биографии Салавата Юлаева. 3 марта 1952 года. Присутствовали члены комиссии: тт. Типеев, Туктаров, Усманов и Васильев… Постановили: …а) тезис [в проекте статьи] – точные данные о рождении Салавата не сохранились – из статьи исключить, привести общепринятую дату рождения Салавата – 16 июня 1752 года… Председатель Типеев Ш.И., секретарь Туктаров С.З.” Ләкин “общепринятую дату” тигәне лә хаҡ түгел, сөнки халыҡ хәтерендә һаҡланғанға тап килмәй, быны атаҡлы Мәскәү тарихсыһы иҫкәрткән:

“Отзыв т. Устюгова о рукописи “Салават Юлаев – национальный герой башкирского народа” (к 200-летию со дня рождения).

В целом очерк удовлетворителен… 2. Откуда известна точная дата рождения Салавата – 16 июня 1752 года? Насколько известно, в источниках нет точных указаний не только на число , но и на год. А упоминание в некоторых фольклорных материалах о том, что Салават родился ***в год барса,*** ведет к 1746 г., поскольку ближайшими годами барса к предполагаемому времени рождения Салавата были 1746 и 1758 гг… 1758 год исключается, остается 1746 г., т.е. что Салавату в момент начала крестьянской войны было 27 лет. То обстоятельство, что Салават еще до крестьянской войны выполнял обязанности старшины вместо отца, а также, что Салават имел трех жен, говорит за более зрелый возраст… Старший научный сотрудник Института Истории АН СССР Н. Устюгов”.

Беҙҙекеләр күбеһенсә: “Салауат булған, һәй, булғаҙир/***Егерме лә ике*** йәшендә” тигән халыҡ йырына таяныусан, ләкин уны яңы быуындар элекке ***“ете”*** тигәнде берҙәй яңғырашлы ***“ике”*** тип йырлауы бик ихтимал (“Ирәмәлкәй”ҙе “Ирәндеккәй” тип шаңғыртҡандай)…

Әммә төптө ерлекһеҙ, ләкин рәсми ҡабул ҡылынған даталдарҙы һанға һуғып барайыҡ. Әле генә бында беҙҙең тарафтан ***Салауаттың улы*** һаналған ***Мөрсәлим*** дә шундай уҡ «иртә»ләрҙән: 1777 йылда 12 йәшендә уның беренсе ҡатынынан *Рәхмәтулла* тигән малайы тыуа; 1834, 1850, 1859 йылдарҙағы ревизия ҡағыҙҙарына (делолар: 459 — 67-98-енсе биттәр; 619 — 484-532-нсе биттәр; 729 — 134-енсе бит) ул, *Рәхмәтулла,* Биштәкә ауылында йәшәүсе «зауряд хорунжий Рахметулла Мурсалимов Мукминов» (йәғни Мөрсәлим Мукминовтың улы) тип икеләтә фамилиялап теркәлгән, был, моғайын, алда буласаҡ ревизияла буталсыҡ тыуҙырмаҫ өсөндөр,

сөнки уның атаһы Мөрсәлим дә был осорҙа үҙенең әүәлге ысын аталышы ***Шатморат*** (ҡағыҙҙарҙа боҙоп «Шамрут» тип яҙылған) исеменә ҡабат ҡайтып, башҡа туғандары кеүек үк, бабаларының береһе булған Мөъминдең исемен фамилия итеп алып, Биштәкәй ауылында Шамрут Мукминов булып йөрөй, ә тыуған йылы шул уҡ — «Мөрсәлим» тыуған 1765 йыл...

Шулай итеп, милли геройыбыҙ Салауат Юлаевтың бер улы ***Шатморат*** табылды, тиһәк тә була һәм уның (Шатмораттың) өлкән улы булған баяғы Рәхмәтулла Мөрсәлимов Мукминовтан кесерәк уландары барыһы ла ҡағыҙҙарға Шамрутов (ә кәрәк ине Шатмуратов) фамилияһында теркәлгән. Артабанғы быуындар иһә һәр береһе, ғәҙәттәгесә, тәғәйен үҙ аталарының исемен фамилия итеп, *Шатморат* бабаның исеме етенсе быуында ғына шәжәрәгә йәнә әйләнеп ҡайта ла данлыҡлы генералыбыҙ *Шайморатов* фамилияһы рәүешендә бөтә илгә таныла.

Инде бер һорауға яуап бирәйек: “Генерал Миңлеғәли Миңғазитдин улы Шайморатов бер рәсми анкетала милләтен “татар” тип күрһәткән дәһә?” Аптырамайыҡ: шанлы Совет хакимиәте тарафынан Башҡортостандың Миңзәлә өйәҙен Татарстанға ҡырҡып биреп ҡалдырылғандан һуң шундағы шул ваҡыттағы *ике йөҙ меңдән ашыу аҫаба башҡорт* һәм уларҙың хәҙерге тоҡомдары ла “татар” булып яҙылып йөрөй ҙаһә... Ошондай хәл Башҡорт исемен йөрөткән республикабыҙҙа ла аҙ түгел…

Бер юлы ике милли герой (Салауат һәм Миңлеғәли)

Тәүҙә был икәү шәжәрәһенең туп-тура теҙемен күрһәтәйек:

1. Юлай Аҙналин (1730 й. тыуған). — 2. Салауат Юлаев (1752, йәки 1754, йәки 1746 — 1800). — 3. Шатморат-Мөрсәлим (1765-1848). — 4. Фәсихитдин (1802 й.т., уның ҡатыны Фатима Зәйнәшева). — 5. Фәхрилислам (1829 й.т., уның ҡатыны Сабира Әннәсова). — 6. Миңғазитдин (1866 й.т., уның ҡатыны Бибитайфа). — 7. Миңлеғәли Миңғазитдин улы Шайморатов генерал (1899-1943).

Хәҙерге барлыҡ доҡументтарҙа М.М. Шайморатов генералдың тыуыу датаһы 1899 йылдың 15 авгусы тип яңылыш яҙылып йөрөй. Шул хатаны төҙәтмәккә, төп сығанаҡты барланыҡ:

«Оренбургское магометанское духовное собрание. Метрические книги записей Уфимского уезда Уфимской губернии за 1899 г., номеры 90-176, страница 170, Биштеке. К 1-ой мечети.

№6. Миңлегәли. Аугусның 10-чи көнөндә. Биштәкдә туган. Атасы мишәрдән башҡорт Миңгәжәлдин Фәхрилислам углы. Анасы Бибитайфа типтәрдән башҡорт Мөхәмәдиәр ҡызы».

Күрәһегеҙ, башҡорт Салауат Юлаевтың нәҫелдәре, билдәле тарихи сәбәптәр арҡаһында, тәүҙә — башҡорттан мишәр, шунан һуң мишәрҙән башҡорт, ә Советтар осоронда татар яҙылып йөрөй...

Инде әле күрһәтелгән Салауат Юлаев нәҫеленең 1859 йылға тиклемге киңәйтелгән шәжәрәһен дә бирәйек, шуның буйынса унын бөгөнгө тоҡомдары ла үҙ-үҙҙәрен асыҡлар:

Салауат Юлаев (1752, йәки 1754, йәки 1746 -- 1800). — Шатморат-Мөрсәлим (1765-1848). Шатмораттың биш улы булған:

1. Рәхмәтулла Шатморат улы (1777 й.т., 1859 йылда уға 82 йәш). Рәхмәтулланың улдары:

А) Ғәлиулла (1805 й.т.). Ғәлиулланың улдары: Ғәҙелша (1831 й.т.), Ғиззәтулла (1838 й.т.), Камалитдин (1840 й.т.), Йәләлитдин (1848 й.т.), Яҡуп (1849 й.т.);

Б) Ғәтиәтулла (1813 й.т.);

В) Хәмиҙулла (1814-1852);

Г) Әхмәтғәли (1819-1840);

Д) Абдулсалих (1822 й.т.);

Е) Мөхәммәтрәхим (1822 й.т.). Мөхәммәтрәхимдең улы Мөхәммәткәрим (1842-1852);

Ж) Абдулғәни (1824 й.т.). Әбдулғәниҙең улы Ғәлимөхәммәт (1856 й.т.);

2. Хисамитдин Шатморат улы (1798 й.т.). Хисамитдиндең улдары:

А) Бәҙиғитдин (1820 й.т.). Бәҙиғитдиндең улдары: Фәттәхитдин (1843 й.т.), Кашафитдин (1845 й.т.), Ғәйнитдин (1859 й.т.);

Б) Хәйритдин (1828 й.т.);

В) Хафизитдин (1850 й.т.);

Г) Садритдин (1856 й.т.);

3. Фәсхитдин Шатморат улы (1802 й.т.). Фәсхитдиндең улдары:

А) Фәхрелислам (1829 й.т.). Фәхрилисламдың улдары: Йәләлитдин (1854 й.т.), Нурғәли (1857 й.т.), Миңғазитдин (1866 й.т.). Миңғазитдиндең улы ***Миңлегәли Шайморатов генерал*** (1899-1943);

4. Әбделғәлим Шатморат улы (1834 й.т.);

5. Зәйнитдин Шатморат улы (1793 й.т.). Зәйнитдиндең улдары:

А) Ғималитдин (1818 й.т.). Ғималитдиндең улы Абдрахман (1852 й.т.);



Б) Кашафитдин (1822 й.т.). Кашафитдиндең улдары: Мөхәммәтҡәнәфиә (1840-1853), Мортаза (1855 й.т.), Мөстәҡим (1857 й.т.)...

Был мәғлүмәттәр заманында М.М. Шайморатовтың 100 йыллыҡ юбилей байрамын әҙерләүселәргә, тыуыу датаһын дөрөҫләһендәр өсөн, 1999 йылдың 19 апрелендә яҙып биреледе, тик эҙемтәһеҙ ҡалды. Башҡорт телле матбуғатта ҡыҫҡараҡ варианты беренсе тапҡыр баҫылды «Аҙна" гәзитендә.

Артабанғы эҙләнеүҙәргә ерлек

Был бүлектә эҙәрмәндәр ҡарамағына авторҙың ике тоҫмаллауы бирелә (сәмлейәндәр архивтарҙа төбөнә туҙ ҡуйһын өсөн).

1. Салауат Юлаевтың ҡырғынсылар әсир итеп алып киткән икенсе улы ***Аҡбулаттың*** эҙҙәренә төшөү мөмкинлеге бар: ул Аҡбулат хәҙерге билдәле ҡурайсы

Ишморат Илбәковтың бабаһы булыуы бик ихтимал. Сөнки уларҙың быуындан-быуынға бирелә килгән ғаилә легендаһы буйынса, хәҙерге Хәйбулла районына ҡараған үҫәргән башҡорттарының батша хәҙрәттәренә итәғәтле (ихтилалда ҡатнашмаған) бер старшинаһына, ихтилал баҫтырылғас, Ырымбур гөбөрнәтере бер әсир малайҙы аҫыраулыҡҡа тапшыра; артабан уны бөтә ***ил-йорт бағып*** үҫтергәнлектән, фамилияһын ***Илбаҡов*** тип яҙҙырталар, исемен ***Мырҙа*** тип атайҙар (үҫәргән башҡорттарында мырҙа -- "бей [кенәз] улы" мәғәнәһендә: тимәк, яу башлығы Салауат бей-кенәздең улы). Шул Мырҙа нәҫеленең шәжәрәһе ҡурайсы И. Илбәковта бар.

2. Икенсе тоҫмалдың төп-ерлеге (сығанаҡтар):

а) Башкирские шежере (филологические исследования и публикации), Уфа -- 1985, 69 -- 70-енсе биттәр. Юлайҙың Салауаттан өлкәнерәк тағы ике улы күрһәтелә: Раҡай, ***Сөләймән***.

б) "Ағиҙел" журналы, 1978, №6, 120 -- 122-нсе биттәр, "Туғыҙ ауыл Тырнаҡлы" аймағы шәжәрәһе. Тырнаҡлы аймағына ингән ауылдар: Лағыр (боронғо исеме Васҡын), Шәрәк, Иҫке Мөхәммәт, Ибрай (Ураҙгилде), Яңы Мөхәммәт (Торамороно), Яуын, Юныс (Әпкәҙир), Сәғир (Сутыш), ***Әнйәк*** (Йәнгилде).

3. Южноуральский археографический сборник, выпуск 2. Уфа -- 1976, 287-нсе бит. 1841 йылдың 18 октябрендә урыҫ телендә аҡкарылған документтағы №11-енсе Башҡорт кантоны ауылдарының исемлегендә № 16 булып теркәлгән аҫаба башҡорт ауылы: ***Амекеева,*** м.п. число 13, женского 20; Булярской волости, землею владение имеют собственную, башкирцы, живут постоянно в своих селениях.

4. Населенные пункты Башкортостана, часть I. Уфимская губерния, 1877, 290-ынсы бит, №1875. ***Анякова***, деревня при речке бызимянной, число жителей м.п. 278, ж.п. 254, ***тептяры.*** Шул уҡ ауыл кешеләре әүәлерәк 1859 йылғы ревизия (дело 753, лист 555) буйынса ***башҡорттар, типтәрҙәр*** тип теркәлгән.

Шул уҡ китаптағы 303-өнсө бит, №2015. ***Анякова,*** деревня при речке Каширке, число жителей м.п. 90, ж.п. 95. Баяғы уҡ ревизия делоһы, листы буйынса ***типтәрҙәр*** йәшәй (аҫаба башҡорттар күрһәтелмәй).

5. Уралдағы Тырнаҡлы аймағы башҡорттарының (шул иҫәптән Юлай Аҙналиндың) ырыу тамғаһы булып тора бына был саталы **V** (һәнәк) – Минтимер Шәймиев шәжәрәһендә лә шулай.

Ошоларға таянып тоҫмаллайыҡ: Юлай улы ***Сөләймән*** тәүҙә үҙҙәренең аймағындағы ***Әнйәк*** ауылында йәшәгән һәм ҡасандыр, ниндәйҙер сәбәптәр арҡаһында (ә бәлки, 1735 йылғы Аҡай -- Килмәк-абыз яуын баҫтырыуҙа ҡатнашҡандыр ҙа үлтерелгән баш күтәреүселәрҙең ерҙәренән өлөш алғандыр батшанан (шундай тәртип хөкөм һөргән). Йәки үҙе 1840 йылғы Ҡараһаҡал яуында болғанып, яу баҫтырылғас Миңзәлә яғына ҡасҡандыр? Сөнки ***Сөләймән*** тигән башҡорт 1740 йылдың февраль айында шул уҡ Тырнаҡлы аймағы Муса ауылында ғәскәрләнеп торған Ҡараһаҡалдың яҡын яраны итеп күрһәтелә (Материалы по истории Башкирской АССР, ч. I. М. -- Л., 1936). Һәр хәлдә ғәмәл тоҫмалға тап килә: башҡорт Юлай улы Сөләймән Миңзәләнән Бөрө ҡалаһына табан 37-нсе саҡрымда исемһеҙ йылға буйына барып төйәкләнә һәм шул яңы ауылға Уралдағы йәшәп киткән ауылының исемен ***(Әнйәк,*** урыҫса яҙыуҙарҙа ***Аняк)*** килтереп ҡуша һәм ул ауыл тора-бара һәр төрлө (башҡорт, татар, мишәр) типтәрҙәр иҫәбенән ҙурая ла,

шулар өҫтөнлөк алып, ауылдағыларҙың бөтәһе лә рәсми ҡағыҙҙа типтәргә әүерелә. Бер килке халыҡ ауылдан бүленеп сығып, Каширка йылғаһы буйына ерегә, был яңы ауыл да ***Әнйәк*** тип атала (бәлки, Яңы Әнйәк йөрөтөлгәндер?)...

Ошо урында тоҫмалыбыҙҙы саҡ ҡына үҙгәртәбеҙ, сөнки Ҡазан авторҙарының тикшеренеүендә: "Тарихчылар Әнәк авылына XVIII гасыр башында нигез салынуын әйтәләр. Таһир Кәримов, мәсәлән, 1747 елда авылда яшәүчеләр исемлегендә Исай ***Әнәков*** дигән кешенең булуын яза. 1762 елда, өченче ревизия чорында ул инде вафат булган. Димәк, ***Әнәк*** карттан башланган бу авыл" ("Ғасырлар авазы" журналы 2002 ¾), тип әйтелә, -- шулайҙыр. Инде килеп сыға: Уралдағы ***Әнйәк*** ауылын нигеҙләгән ***Әнйәк*** уҙаман (йәки уның улы Усай Әнйәков) яҙмыш елдәре тарафынан Миңзәлә өйәҙенә илтеп ташланып, яңы ерҙә яңы ***Әнйәк*** ауылын башлап ебәргән, ә Юлай улы Сөләймән тигән бөркөтөбөҙ ана шул әҙер ояға килеп ҡунған…

Ауыл халҡының милләт күрһәткесе, Рәсәйҙәге ҡәҙимгесә, башҡорттан татар яһау йүнәлешендә үҙгәргән: 1841 йылғы хисапнамәлә ул тоташ башҡорт булһа, 1859 йылғы ревизияла башҡорттар, типтәрҙәр тип күрһәтелә, ә 1877 йылғы хисапнамәлә иһә башкөлләй типтәргә әйләндерелеп, тоталитар совет хакимияты осоронда бөтә Миңзәлә өйәҙе халҡы татар итеп яҙыла...

Төптәнерәк тикшереү талап ителә: өҫтәрәк шәжәрәләр бүлегендә телгә алынған Ҡамышлы ауылы уҙаманы ***Баязит*** Киләйев (1795 йыл март ревизияһы буйынса 1744 йылда тыуған) татар ғалимы (Ҡазан) Таһир Тимерғазим улы Кәримов төҙөгән шәжәрәләге ***Баязит*** түгелме икән? Асылда ул, моғайын, дәүләт енәйәтселәре (ворҙар) итеп ләғнәтләнмеш Юлай фамилияһынан (ғәҙәттә атай, ҡартатай, бабай исемдәрен фамилия итеп йөрөткәндәр) икәнлеген йәшереп, "Юлаев"ты яҡын мәғәнәүи яңғырашлы "Киләйев"кә үҙгәртеүе ихтимал. Йәнә килеп, ғүмерлеккә һөрөлгән Салауаттың бәхетһеҙ ҡатыны Гөлбәзерҙе ҡатын итеп алыуында ла (башҡорт йолаһы) ғилләбар. Әгәр шулай икән, беҙҙең тоҫмал баяғы Т.Т. Кәримов төҙөгән "Минтимер Шәймиев шәжәрәсе"нә бер кес кенә төҙәтеү аша тап килә, ә төҙәтеү бына нимәнән ғибәрәт: әйтелгән шәжәрәлә Юлай -- Минтимер араһы (8 быуын) 200 йыл тәшкил итә; ҡабул ҡылынған тәртип буйынса һәр быуынға 25 йыл һалһаҡ, был дөрөҫ (25х8=200). Әммә тәүге икенсе һәм өсөнсө быуындың урындары алмашынғандыр кеүек (шәжәрәләрҙә быньдай хәл булыусан); әгәр уларҙы тейешле үҙ урындарына ҡуйһаҡ, барыһы ла ҡалыпҡа ултыра, йәғни: Аҙналин Юлай (1722 й. тыуған) -- Баязит (1744 й. тыуған) -- Сөләймән (1770 й. тыуған) һәм артабан Т.Т. Кәримов төҙөгән теҙем ялғанып дауамлана: башҡорт Аҙналы улы Юлай -- Баязит -- Сөләймән -- Шаһиморат -- Шәмсимөхәммәт -- Вәлимөхәммәт -- Шәймөхәммәт -- Шәйшәрип -- Минтимер...

Башҡорттарҙан татар яһау осоронда Миңзәлә өйәҙе башҡорттарының ысын милләтен дә, ырыуын да, ырыу тамғаларын да онотторҡандар, әммә-ләкин Әнйәк ауылындағы Юлай-баба нәҫеле кешеләре үҙҙәренең Уралдағы Тырнаҡлы аймағы башҡорттарының саталы **V** (һәнәк) тамғаһын, татар тарихсылары танығанса, быуындан-быуынға юғалтмай һаҡлап килгән.

6.09.2003.

МИРЗА АҒАЙ ХӘТИРӘЛӘРЕ

Һүр. 16. Мирза ағай Ғайсаров

Башҡорт кавалерия дивизияһының полк разведка взводы командиры, 1943 йылдың февралендә дошман тылына тәрән рейдта батырҙарса ҡатнашыусы ҡыйыу яугир яҡташым Мирза ағай Ғайсаровтан да (күренекле яҙыусыбыҙ Гөлсирә һылыу Ғиззәтуллинаның атаһы) иҫтәлек яҙып биреүен һорағайным. Ул быны үтәгән булған һәм аманаты ҡулыма, урауыраҡ юлдар үтеп булһа ла, Сабир ағай Ҡадиров арҡылы килеп юлыҡты бер заман. Һуғыштан һуң күп йылдар үткәнлектән, әлбиттә, ветеран ағай ҡайһы бер исемдәрҙе, бәрелеш урындарын һәм даталарҙы яңылышыраҡ хәтерләй (был хаҡта ҡулъяҙма биттәренең ситенә Сабир ағай киҫәтә барған, мин уларҙы иҫкәртмә рәүешендә килтерәм), ләкин уға был йәһәттән теүәл документаль эш итеүе мөмкин дә түгел ине, сөнки ҡулы аҫтында бит штаб ҡағыҙҙары юҡ , һәм һуғышта ла уның барлыҡ эшмәкәрлеге даими алғы һыҙыҡта, күберәген уның арғы яғындағы хәтәр юҫыҡта.. Әммә яҙмалағы рейдта һәм рейдтан сыҡҡан саҡтағы полк разведкаһы эшенә бәйле дәһшәтле эпизодтар, көсөргәнешле кисерештәр үҙкиммәтен юғалтмай; шаһәҙәтнама, ҡыйыу бер яугирҙең башынан үткәндәрҙе тасуирлаусы тарихи документ булараҡ, юйылғыһыҙ әһәмиәтен һаҡлай. Кереш һүҙ урынына авторҙың С.Р. Ҡадировҡа яҙған хатын күсерәм.

Һаумыһығыҙ, хөрмәтле Сабир ағай!
Мин һеҙҙең “Уттар, һыуҙар аша” тигән китабығыҙҙы уҡыу бәхетенә ирештем. Ул китап нишләптер беҙҙең яҡ магазиндарына килеп етмәне. БДУ-ла уҡыған улым студент төҙөлөш отрәтендә Белорет яғында эшләгәйне, шунан алып ҡайтып бирҙе. Китапты тулҡынланмайынса уҡыуы мөмкин түгел. Сөнки ул күп йылдар үтеү менән күңел дәфтәренән юйыла башлаған күп ваҡиғаларҙы, күргән ауырлыҡтарҙы, бигерәген дә батырҙарса һәләк булған иптәштәрҙе күҙ
алдына килтереп баҫтырырға ҙур ярҙам итте. Мине лә хәтергә алғанығыҙ өсөн ҙур рәхмәт. Рейд ваҡытында һеҙҙең иң яуаплы өс вазифаны үтәп, дивизия алдына ҡуйылған ҡатмарлы, ауыр бурыстарҙы оҫта, батырлыҡ менән башҡарыуҙа актив ҡатнашып эшләүегеҙ, һәр нәмәгә ҙур иғтибар биреүегеҙ, дивизия командованиеһының генерал Шайморатов етәкселегендә был ауыр бурыстарҙы нисек үтәүен дөрөҫ тасуирларға ҙур мөмкинселек биргән.
Рейдҡа сығыу һәр бер кешенең йөрәгендә Ватан алдында айырыуса ҙур яуаплылыҡ тойғоһон уятты. Уның өҫтәүенә сәйәси-тәрбиәүи эштең киң йәйелдерелеүе массовый героизм тыуҙырҙы. Шуның арҡаһында һәр кем үлем менән хисаплашмайынса фәҡәт дошманды

еңеү теләге менән генә йәшәне. Был хаҡта ла китапта дөрөҫ яҙылған. Батырлыҡ эпизодтары, айырым батырлыҡ күрһәтеүселәр тағы ла бик күп күрһәтелгән булырҙар ине, ундағы дәһшәтле, бик тиҙ, бик йыш үҙгәреп тороусан ауыр һуғыш шарттарында уларҙың барыһын да ишетеп, белеп өлгөрөү мөмкинселеге лә булманы бит инде. Дивизияның разведка начальнигы капитан Гулов үҙенә лә, башҡаларға ла талапсан, тынғыһыҙ батыр командир ине. Ул нишләптер китапта хәтергә алынмаған.

Һеҙҙең минән рейд хаҡында иҫтәлек һорап яҙған хатығыҙҙы ала алмауымды ҙур бәхетһеҙлек итеп һанайым. Бер Өфөгә барғанда ул хаҡта Йыһат ҡусты һорағас, яҙып ебәргәйнем, уға ла бирелмәгән. Кире ҡайтарып алдырҙым. Хәҙер үҙемдә ята. Әгәр һеҙҙе ҡыҙыҡһындырһа, мин уны һеҙгә ебәрер инем.

Әгәр китаптың беҙҙең яҡтарға килеп етмәүе уның аҙ тиражлы булыуы менән бәйләнгән булһа, икенсе тапҡыр баҫтырыу хәстәрен күреү ҙә яҡшы булыр ине. Сөнки рейд Башҡорт атлы дивизияһы эшмәкәрлегендә күренекле урын тота. Шуның өсөн халыҡ бик ҡыҙыҡһына. Шул йәһәттән китап халыҡты, бигерәк тә йәш быуынды патриотик рухта тәрбиәләүҙә ҙур әһәмиәтле тип уйлайым.

Һеҙгә ихтирам менән ***М. Ғайсаров.***

294-енсе полктың разведвзвод командиры,
өлкән сержант. 05.12.1977.

Рейд

Бик ҡаты бәрелештән һуң дошмандың оборонаһын ярып, таң атып килгәндә тылына сыҡтыҡ һәм бер ауылда туҡтаныҡ. Был һуғышта сабельниктар ҙа, артиллеристар ҙа, минометчиктар һәм башҡалар ҙа бик ҙур батырлыҡ күрһәтте. Һөжүм ойошҡанлыҡта, берҙәмлектә үтте. Һәр кем үҙенең дошман тылында икәнен белә, һәр кем рейдҡа сығарылыуыбыҙҙы ватаныбыҙҙың, баш командованиеның оло ышанысы тип ҡарай. Алға ҡуйылған ауыр заданиеларҙы намыҫ менән үтәүҙе һәр кем үҙенең мөҡәддәс бурысы итеп һанай ине.

Дошман контрһөжүмгә көсә алманы. Сөнки ул күп кенә юғалтыуға осрап, байтаҡ ҡоралдарын ташлап һыпыртҡайны. Тыныслыҡ урынлашты. Мин полк штабына табан йүнәлдем. Урамдан майор Ғафаров менән полк комиссары (фамилияһын онотҡанмын) килә. Ғафаровта йомошом бар ине, уларға табан атланым. Барып етеп һаулыҡ һорашып өлгөрмәнем, бер шальной снаряд беҙҙән 15-20 метр самаһы ерҙә төшөп ярылды. Мин йығылып шыуып киттем. Комиссар ҙа минең эргәнән шыуа. Әйләнеп ҡараһаҡ, Ғафаров баяғы торған урыныбыҙҙа йығылып ята. Барҙыҡ. "Аяҡты һындырҙы", -- ти. Уны күтәреп штаб йортона алып индек. Перевязка яһанылар. Беҙ ярып ингән ерҙе немецтар ябып өлгөрмәгәндәр әле, тип, повозкаһына тейәп, ылаусыға тағы бер һалдат беркетеп өсәүһен ебәрҙеләр. Һуңынан сығып өлгөрмәгәнлектәре, немецтарҙың тотоп үлтереҙәре ишетелде...

Шулай итеп, ошо көндән дошман тылында хәрәкәт итә башланыҡ. Алға барыу күбеһенсә төндә, ҡараңғыла үтә. Юл еңел түгел – тәрән ҡар, һыуыҡ. Бик эре булмаһа ла, бик йыш ҡына һәр ауылды дошман менән һуғышып үтергә тура килә. Һәр бәрелеш ҡорбанһыҙ булмай. Тәүге һуғышта бер-нисә иптәште ерләп китһәк, был көндәрҙә лә юғалтыуҙар булып тора. Алға ҡуйылған ауыр заданиеларҙы үтәү өсөн һәр бер һалдатты ғына түгел, һәр бер снарядты, патронды һаҡларға, аҙ көс түгеп

күберәк файҙа килтереү мәсьәләһе ныҡ ҡуйылды. Был хәл разведка эшен дә ифрат ҡатмарландырҙы, ауырлаштырҙы.

Полк командиры Фондеранцев менән штаб начальнигы Красиков[221] иптәштәр заданиены ифрат ныҡ һәм конкрет ҡуялар. Дошман бармы, күпме, ниндәй ҡорал менән ҡоралланған; әгәр ҙә ул көслө булып, еңеп үтерлек булмаһа, ҡайҙан, нисек үтергә мөмкин? Был ғәҙел һәм дөрөҫ задание ине. Сөнки төп заданиены үтәй торған урынға барып еткәнсе, беҙ полктың көсөн һаҡларға тейешбеҙ. Ә был еңел түгел. Һәр яҡтан уратып алған дошман да йоҡлап ятмай, беҙҙе тотҡарларға, ҡыйратырға тырыша. Ауыл һайын уның ҙурмы, бәләкәйме гарнизоны торғанлыҡтан, ауыл араларында ла хәрәкәт өҙөлмәй, йөрөп торалар. Шуға күрә юлда ла осрашырға, ауылға ингәс патруль менән йөҙгә-йөҙ бәрелешергә, хатта дошман һалдаттары ятҡан өйҙәргә шаҡылдатырға ла тура килде.

Элек, фронт аша разведкаға йөрөгәндә, оккупация аҫтында ҡалған кешеләрҙе осратып, тиҙ генә уртаҡ тел табырға, үҙебеҙҙе ҡыҙыҡһындырған һорауҙарға яуап алырға мөмкин була торғайны. Хәҙер иһә, нисектер, граждансийҙарҙы ла тап килтереү ҡыйын, осрашҡан арала ла яуап алыуы анһат түгел, сөнки бер яҡтан улар беҙҙең ысындан да совет һалдаттары булыуыбыҙға ышанмайҙар, икенсенән ҡурҡалар, карателдәрҙән, провакаторҙарҙан ҡоттары осоп ҡалған. Совет власына дошман ҡатламдарҙан ҡалған һатлыҡ йәндәр ҙә юҡ түгел шул.

Шулай ҙа иң ауыры ҡыш, тәрән ҡар, буран, һыуыҡ булды. Дошман араһында йөрөгәс, һыбайлап разведкаға барыу мөмкинлеге лә бик ҡыҫылды.

Һуғыш – һуғыш инде. Ул бер ваҡытта ла еңел булмаған. Һәр һуғышта ла күп көс, тир, ҡан ҡойолған, ҡорбан бирелгән. Ләкин был һуғыштың үҙенә хас айырмаһы бар ине.

Беҙҙең совет халҡы Бөйөк Октябрь биргән емештән файҙаланып тыныс ҡына тормош ҡороп ятҡан бер мәлдә, беҙҙе ҡолға әйләндереү ниәте менән кешелектең иң яуыз дошманы булған фашист илбаҫарҙары илебеҙгә аңғартмаҫтан ғына ҡапыл баҫып инделәр. Был һәр кемдең йөрәгендә тәрән нәфрәт тыуҙырҙы, асыуын ҡабартты. Йөрәгендә нәфрәт ҡайнаған башҡорт егеттәре лә йән аямай еңеүҙе тиҙләтеү ынтылышы менән һуғыштылар. Беҙҙең арала ҡыйынлыҡҡа зарланған бер тауыш та ишетелмәне. Киреһенсә, ниндәй генә ауыр шарттар булмаһын, халҡыбыҙға хас түҙемлек, тапҡырлыҡ, аҡыл менән уйлап эш ителде.

Тәүге кергән ауылда ял иттек, тамаҡ туйҙырҙыҡ, аттарыбыҙҙы, ҡоралдарыбыҙҙы барланыҡ. Ҡояш байып барған саҡта бынан биш километр самаһындағы ауылды тикшерергә бойороҡ алдыҡ. Барыбыҙға ла һыбай барыуы ҡурҡыныс булғас, дүрт кешене атҡа мендереп, башҡаларыбыҙ йәйәү ҡуҙғалдыҡ. Атлылар тейешле дистанция тотоп икеһе алдан, икеһе арттан барырға, берәй ҡурҡыныс хәл тыуһа, уртала барған беҙгә хәбәр итергә, шулай уҡ кәрәк ваҡытта полк командованиеһы менән тиҙ генә бәйләнеш булдырырға тейеш ине. Шулай ҙа ауылға мәшәкәтһеҙ, бәлә-ҡазаһыҙ ғына яҡынлаштыҡ. Бер ярым километр самаһы ҡалғас, бер соҡорҙа аттар янында ике кеше ҡалдырып, ауылға индек. Бында дошмандың бер рота самаһы ғәскәре булыуын белдек. Һыбайлы ике иптәшкә был хаҡта полкка хәбәр итергә бойорҙом. Үҙебеҙ бындағы хәл менән яҡшыраҡ танышыу ниәте менән кәртә

[221] Красиков рейдта булманы. – *С. Ҡадиров.*

арттарынан ауылдың уртаһынараҡ йүнәлдек. Бер мәл арғы остан тауыш ҡупты. Оҙаҡ та үтмәй, артиллерия, миномет һәм башҡалар менән ҡоралланған пехота үтә башланы. Күптәр. Был хәлде полкка белдереү өсөн тағы ла ике иптәште саптырҙым.

Дошман ауылдың осонда ғына позиция алды. Барыһын да күҙәтеп тороп, беҙ полкка ҡаршы йүгерҙек. Ләкин ҡар ҡалын, батабыҙ, барып булмай. Шулай ҙа полкты дошман позицияһына яҡынлашмаҫы борон ҡаршыланыҡ. Беҙҙең тәҡдим шул ине: полкты һулға бороп, туғай ҡырлатып барып, дошмандың һул флангыһына ут асырға. Байрамов[222] эскадроны, аҙ ғына түбәнләп, дошмандың тылына сыға һәм арттан дөрөргә тейеш. Ҡалған көс тирәк һәм талдарға ышыҡланып, ҡарҙан шыуа-шыуа, дошман позицияһына яҡынлаша. Шул саҡ артиллерия һәм миномет установкалары, ут асып, фашистарҙың артиллерия орудиеларын ҡыйратырға тотондо. Автоматчиктар ҙа ерешә. Тылдан һөжүм итеүсе Байрамов (?) участкаһында эш хатта ҡул алышына барып етте. Ләкин ҡаршы яҡ өсөн һуң ине инде. Ут нөктәләренән бөтөнләй, тиерлек, ҡолаҡ ҡаҡҡан дошмандың беҙҙең ныҡышмалы, көслө һөжүмгә түҙерлек хәле ҡалмағайны. Ул үҙенең һуғыш техникаһын тулыһынса, тиерлек, ташлап, уң флангыһына боролоп ҡасырға ашыҡты. Фондеранцев ике эскадронды урамдан ебәрҙе, улар ауылдың осонан әйләнеп, дошмандың ҡасыу юлын киҫтеләр, ҡалған көс арттарынан эҙәрләне.

Был юлы фашистарҙың бәләкәй генә төркөмө урман шырлығында ҡасып ҡотолдо. Боеприпас, аҙыҡ-түлек тейәлгән бәләкәй генә обозы беҙҙең ҡулға төштө. Бөтә булған ауыр ҡоралдары һуғыш яланында ҡалды. Яраҡлыларын, үҙебеҙгә кәрәген алдыҡ, әлбиттә.

Йәнле трофей менән маташырға бында, тылда, мөмкинселегебеҙ юҡ ине. Шуға күрә әсир алыу булманы. Беҙ ҙә ун бер иптәшебеҙҙе[223], шул иҫәптән бер разведчикты, ерләнек. Полк алға ҡуҙғалды.

Бер бәләкәй генә ауылды үткәс, бынан алда ятҡан ауылды тикшерергә бойороҡ булды. Бөтә взвод һыбайлап саптыҡ. Ауылға яҡынлағас, өс иптәште аттар янында ҡалдырып, ҡарҙан шыуа-шыуа, ауылға индек. Иң остағы өйҙә туҡтаныҡ. Тик ул йоҙаҡлы ине. Икенсеһенә килһәк – ишек асыҡ, ә тәҙрәләр ватыҡ. Инеп тәҙрәнән тирә-яҡты күҙәтергә булдыҡ.

Төн болотло, ҡараңғы, аҙ ғына ҡар төшә, ел дә юҡ. Ауыл тын, хатта эт тауышы ла ишетелмәй. Өс-дүрт минут самаһы ваҡыт үтте. Был – һуғыш өсөн бик күп ваҡыт. Бигерәк тә бына шулай хәрәкәтһеҙ торһаң. Сығып алға барырға ғына иткәйнек, ҡапыл тауыш ишетелде. Ҡараһаҡ, немецтар килеп, теге йоҙаҡлы өйгә инеп китте. Беҙ[224] – шыпырт ҡына шунда. Тәҙрәнән ҡараһам, тегеләр ғәмһеҙ генә тәмәке тартып ултыра. Ниәтләндем: өс кеше тышта һаҡта ҡала, ҡалғандарыбыҙ, өйгә инеп, дошманға автомат тоҫҡарға ла бирелергә ҡушырға, кәрәк икән атырға, шулай ҙа, мөмкин булһа, береһен тере ҡалдырып “тел” итеп алырға.

Атышырға тура килмәне, бирелделәр. Өсәүһен дә полкка алып килдек. Былар ауылда гарнизондың ҙур булмауын, һыртҡы урамдың арғы осонда ятыуы хаҡында әйткәндәр. Ләкин һалдаттарының юғалыуын белепме, әллә башҡа сәбәптәнме, фашистар беҙҙе урамдың был яҡ башында уҡ ҡаршыланы. Башта бик яман ут

---

[222] Байрамов үҙе рейдта булманы. – *С. Ҡадиров.*

[223] Кемдәрҙе? – *С. Ҡадиров.*

[224] Мәҫәлән, кемдәр бар ине? – *С. Ҡадиров.*

астылар. Ләкин, беҙҙең көс уларҙыҡынан артығыраҡ булғас, оҙаҡ ҡарыша алманылар, 25-30 мәйет ҡалдырып, ауылды[225] ташлап ҡастылар.

Таң ата башлағайны инде. Полк ошо ауылда туҡтарға булды. Тамаҡ туйҙырып бер аҙ ял иткәнсе, төш тә ауҙы. Беҙ, разведчиктар, алда ятҡан ауылды тикшерергә, әгәр унда дошман булмаһа, артабанғы ауылға юлланырға задание алдыҡ. Ләкин көпә-көндөҙ нисек барырға? Һыбайлап түгел, бөтә взвод менән йәйәүләп барһаң да, әллә ҡайҙан уҡ дошмандың иғтибарын йәлеп итәсәк.

Ат егеп, ауылса кейенеп, дүрт кеше санала сығып киттек. Ауылға яҡынлашҡас, бер уңайлы урында беҙҙе күҙәтеп торһон өсөн ике иптәште ҡалдырҙыҡ та икәүбеҙ ат менеп ауылға индек. Дошман юҡ икән. Дүртәүбеҙ ҙә икенсе ауылға йүнәлдек. Бында ла ике иптәште ауыл осонда ҡалдырып киткәйнек, тағы дошман булмай сыҡты. Иркенләп ауыл кешеләре менән һөйләшергә булдыҡ. Немецтар, ауыл хәлдәре хаҡында һөйләштек. Кешеләр беҙҙең совет һалдаттары булыуыбыҙға тиҙ ышанды. Сөнки совет армияһының ошо яҡҡа табан килеүе хаҡында ишеткәндәр икән. Полицайҙан бик зарландылар. Ул – ата-әсәһе ауылдан һөрөлгән кулак балаһы, совет армияһына саҡырылыуҙан ҡасып, полицай булып алған да халыҡты бик йәберләй икән. Башҡа яуызлыҡтарынан тыш, элекке активтарҙан дүрт кешене аттырҡан, йәштәрҙе Германияға ҡоллоҡҡа оҙаттырған. Ҡыҫҡаһы, фашистарға йәне-тәне менән брелгән һатлыҡ йән икән. Тотоп ултыртып алдыҡ. Юлға сыҡтыҡ. Ҡояш байығайны инде. Ҡалҡыулыҡҡа күтәрелеп еттек тигәндә генә, өсәр кеше ултырған дүрт ылау килгәнен күрҙек. Туҡтап яҡшылабыраҡ ҡараһаҡ, немец һалдаттары. Иптәштәргә сананан төшөп, уңайлабыраҡ ятып ҡаршыларға бойорҙом. Үҙем аттың тамаҡбауы, арҡалығы менән булыша башлаған кеше булдым. Тегеләр яҡынлашҡас, атырға ишара иттем. Арттағы аттарҙан атышып ҡараған булдылар. Ләкин разведчиктарҙың мәргән пуләләренән бер-бер артлы дөмөктөләр. Өсәүһе ҡул күтәрҙе. Быларҙың берәүһе лә етер тип, офицерҙы ғына ҡалдырҙыҡ. Ҡалғандарын “теге донъя”ға ебәрҙек.

Полицай ошо мәлдән файҙаланып ҡасырға уйланы. Тик алыҫ китә алманы, бер пүлә уны аяҡтан йыҡты. Офицер менән икеһен штабҡа илтеп тапшырҙыҡ.

Разведка дауам итә. Йәнә бер-нисә ауыл үттек. Шуларҙың береһендә бер ротаға яҡын немец гарнизонына осраныҡ. Был беҙҙең өсөн бик ҡиммәткә төшә яҙҙы. Ауыл ситендәге өйгә килеп шаҡылдатҡайныҡ, дошман һалдаттары атылып килеп сыҡты. Беҙгә кәртә артына ҡасыуҙан башҡа сара ҡалманы. Фашистар ата-ата арттан ҡыуа башланы. Ҡар ҡалын, етмәһә, бер тәрән соҡорға тура килдек. Немецтарҙың бер төркөмө таҡыр юлдан беҙгә арҡыры төштө, ҡамалышта ҡалдыҡ. Эш гранаталарға барып етте. Ярай, атыш тауыштары ишетелгәс тә, Фондеранцев тиҙ генә бер эскадрон ебәргән. Улар килеп етеп, тегеләрҙең үҙҙәрен ҡаманы. Был бәрелештә бер генә фашист та тере ҡалмағандыр. Ә беҙҙең бер иптәш яраланы, береһен[226] шунда ерләп киттек.

Ни тиклем генә ашыҡһаҡ та, алға барыу бик ауыр ине. Бигерәк тә артиллерияны йөрөтөүе ҡыйын. Ҡар ҡалын, пушкаларҙың алдына ҡар тығыла. Соҡорҙарҙан

---

[225] Ҡайһы ауыл? – *С. Ҡадиров.*

[226] Исем-фамилиялары? – *С. Ҡадиров.*

уларҙы хатта күтәреп, тигәндәй, сығаралар ине. Был хәл аттарҙы ла, кешеләрҙе лә бик йонсота.

Шул рәүешле килгәндә, разведка бер ауылда немецтарҙың ҙур ғына төркөмө барлығын белде. Күрше ауылда тағы ла бер көслө төркөм ятҡанлығы асыҡланды. Был тәңгәлде[227] тик тау аша ғына үтергә мөмкин. Тауға бик һаҡлыҡ менән кистән үк артыла башланыҡ. Ул текә генә. Тәрән үҙәктәр, соҡорҙар менән бүлгеләнгән. Ҡар ҡалын, бигерәк тә соҡор-саҡырға ныҡ һалған. Төн болотло, ҡараңғы. Һыбайлылар – алдан. Улар ҙа бик ҡыйынлыҡ менән күтәреләләр. Әммә артиллерияны, миномёттарҙы һөйрәп мендереүе әйтеп бөтөргөһөҙ ауыр. Юлды даими ҡарап баралар. Күрәргә тура килә. Өҫтәүенә, көслө буран сыҡты. Аяҡ, өҫ кейемдәре һыуланып, ҡабыҡ кеүек ҡатып бөттө. Аттар, кешеләр бөтөнләй хәлдән тайҙы. Нисә километр үткәнбеҙҙер, таңға табан бер үҙәк буйлап тигеҙлеккә төштөк. Штаб начальнигы мине саҡырып алып, алдағы ауылды тикшерергә бойорҙо. Унда ла дошман ғәскәре бар, ләкин күп түгел ине. Бер быуа атышҡас, ауылды ташлап ҡасты[228].

Кавалерист үҙенән тәүҙә атын туйындырырға, уны тәрбиәләргә тейеш. Бында, дошман тылында, бесән табып ат ашатыу үткән көндәрҙә лә бик анһаттан булманы. Ә был ауылда һалам-бесән бөтөнләй юҡ ине. Ауыл халҡынан һорашып, егеттәр ошондай күҙ асҡыһыҙ буранда ла ҡайҙандыр алыҫтан бесән алып ҡайттылар.

Кис булып, ҡараңғы төшөп килгәндә, полк командиры менән штаб начальнигы беҙҙең взводҡа Чернухино ҡасабаһына разведка яһарға бойорҙо. Дошмандың көсөн, оборона һыҙығын, артиллерия, миномет кеүек эре ҡоралдарының ҡайҙа урынлашҡанлығын яҡшылап белергә, шул уҡ ваҡытта эште ғәҙәттәгегә ҡарағанда ла ныҡ йәшереп, шау-шоуһыҙ ғына башҡарырға талап ҡылдылар.

Ҡасаба төньяҡтан көньяҡҡа табан һуҙылған. Төн яҡ остан инергә булдыҡ. Өс кеше ҡасабаға инәсәк, ҡалғандарыбыҙ уның ситендәге беренсе йорттоң һарай артында ышыҡланып ҡарап торорға тейеш. Былай эшләү, бер яҡтан, аҙ кешене дошман иғтибарға алмай, икенсенән, боҫоп ҡалған иптәштәр ярҙам кәрәк булғанда полкка тиҙ генә хәбәр итә, үҙҙәре лә һөжүмгә күсә алалар. Бигерәк тә ауылға инеүселәр бәхетһеҙлеккә осраһа, ҡалғандар заданиены үтәргә тейештәр. Өсәүҙең береһе алдан барасаҡ, ләкин бер-береһен күҙ уңынан ысҡындырмаясаҡтар.

Шулай итеп тыҡрыҡтан инеп киттек. Алдан барған Кәримов тыҡрыҡтың ҙур урам менән тоташҡан мөйөшөнән боролоп кире йүгерҙе. “Немецтар килә!” – тине ул. “Йүгер, арттағыларға хәбәр ит!” тип ҡысҡырып ҡалдым. Үҙебеҙ бәләкәй ҡапҡанан бер өй алдына инеп киттек. Һарайға боҫтоҡ. Мөйөштән немец һалдаты күренде. Тап ошо мәлдә Кәримов, атлап ҡына барып, иң ситтәге өйҙөң ҡапҡаһынан инеп юғалды. Немецтар йүгерешеп шул ихатаға керҙе, һарайҙы ҡараны. Беҙ, Кәримовты ҡайҙан һөйрәп сығаралар инде тип, тын да алмай күҙәтеп торабыҙ. Ахырҙа немецтар һөйләнә-һөйләнә китеп барҙы. Кәримов иһә, былар улай-былай иткәнсе, ситән тишегенән икенсе яҡҡа сығып йәшенгән икән.

Был тыҡрыҡта уңышһыҙлыҡҡа осрағас, ҡасабаның көньяҡ башынан тикшеренергә тотондоҡ. Был юлы уңышлы барып сыҡты, задание үтәлде. Разведка мәғлүмәттәренә ҡарап, полк командованиеһы һөжүмде ҡасабаның төньяҡ осонан башларға булды.

---

[227] Был ҡайҙа? – *С. Ҡадиров.*

[228] Был хәл ҡасан булды? – *С. Ҡадиров.*

Шул уҡ ваҡытта бер эскадронды үҙәк буйлатып ҡасабаның көньяҡ осона ебәрҙе. Был эскадрон үҙәк көстө дошмандың көньяҡтан яһаясаҡ ударынан һаҡларға тейеш ине.

Алыш бик ҡаты булды. Немецтар һәр бер өй өсөн һуғыштылар. Көньяҡҡа ебәрелгән эскадрон уларҙы тылдан дөрҙө. Дошман күп мәйет ҡалдырып, ауыр ҡоралдарын ташлап, соҡор аҫтындағы урамға ҡасырға мәжбүр булды. Шулай итеп, Чернухиноның бер урамын беҙ биләнек[229].

Төнө буйы позиция нығытылды, бөтә нәмә боевой тәртипкә килтерелде. Дошман да тик ятманы, ул да әҙерләнде, уға өҫтәлмә көс килде.

Таң ата башлағанда, фашистар һөжүмгә күсте. Ләкин бик ҡаты алыштан һуң обороноға ятырға мәжбүр булды ул. Фондеранцев полкты контрһөжүмгә күтәрҙе. Бәрелеш ҡул алышына барып етте. Дошман сигенде. Һөҙөмтәлә беҙ соҡор аҫтындағы урамда ла позиция яулап алдыҡ. Әммә фашистар ҙа алыҫ сигенергә теләмәне. Ике позиция араһында ни бары 60-70 метр самаһы ғына киңлек. Һәр ике яҡ өсөн дә ватылған, емерелгән һарай, кәртә-ҡура, ситәндәр нығытма вазифаһын үтәй. Был һуғыштарҙа Байрамов (? – *С.Ҡ.*) эскадроны, тағы бер өлкән лейтенанттың (исем-фамилияһын хәтерләмәйем) эскадроны айырыуса батырлыҡ күрһәтте. Өлкән лейтенант үҙе соҡор аҫтындағы урамда плацдарм өсөн һуғышҡанда батырҙарса һәләк булды. Өлкән лейтенант Һабанбаев етәкселек иткән миномет эскадроны ла күп эш башҡарҙы. Расчеты сафтан сыҡҡан минометтан Һабанбаев үҙе ут асып йөрөнө. Минометсы Ибентаров Мөхәммәтхан Ҡазихан улы был һуғыштарҙа айырыуса батырлыҡ күрһәтте.

Чернухино урамында нығынып алғас, полктың бер өлөшө оборонала ятып[230], дошмандың бер-бер артлы атакаларын кире ҡағып торҙо. Башҡа өлөшө, төрлө урындарға барып, гитлерсыларҙың айырым гарнизондарын тар-мар итеү, боеприпас складтарын шартлатыу, яндырыу, тимер юл коммуникацияларын өҙөү, ғәскәр һәм боеприпас тейәлгән эшелондарҙы ҡыйратыу кеүек эштәрҙе башҡарҙы. Бындай объекттарҙы табыу нигеҙҙә беҙҙең разведка взводына йөкмәтелде. Был бурысты үтәү өсөн көнөн-төнөн йөрөргә, ауыл кешеләре менән осрашырға кәрәк булды. Ләкин һуғыш барған ауылда кешеләрҙе осратыу, улар менән һөйләшеү еңел эш түгел ине. Шулай булһа ла, халыҡ күп ярҙам итте. Разведка тапҡан объекттарҙан биш урында боеприпас склады яндырылды, һаҡсылары үлтерелде. Бер-нисә ауылда дошман гарнизоны тар-мар ҡылынды. Бер-нисә урында, бигерәк тә Чернухиноның көньяҡ-көнсығышында тимер юл емертелде, рельстар һүтеп алынды. Шул юлда бер эшелон шартлатылды. Айырым заданиелар менән хәрәкәт иткән көстәр бынан башҡа ла бик күп эштәр башҡарҙы. Разведчиктар тарафынан ғына ла ғәскәр тейәлгән бер эшелон “под откос” ебәрелде. Ике тапҡыр дошман обозына осрап, береһендә һигеҙ, икенсеһендә ун бер фашисты үлтереп, бер офицерҙы әсир алып, тейәгән йөктәре менән туғыҙ ылау алып ҡайтып полкка тапшырылды.

Алғы һыҙыҡта, һөжүмдә, сигенеүҙә һәм башҡа ауыр хәлдәрҙә булып, үҙ башынан үткәргән кешеләр белә, әлбиттә: һуғышта үҙ ваҡытында тамаҡ туйҙырып булмай. Йә кухня килә алмай, йә башҡа сәбәптәр табыла. Тәүлек буйына, йәки унан да артыҡ, ашамаған саҡтар йыш була. Шулай ҙа интенданттар яугирҙәрҙе ас йөрөтмәҫ өсөн

[229] Ә 15-енсе дивизия ҡайҙа ине? – *С. Ҡадиров.*

[230] 2-нсе полк ҡайҙа? – *С. Ҡадиров.*

төрлө сараһын күрә. Кухняны килтерә алмаһалар, ҡоро-һары менән булһа ла туйындырырға тырышалар. Әгәр килеп эләкһә, үҙең дә ашауҙың кәрәгенә бирәһең. Ә инде разведчиктар өсөн ял, йоҡо тигән нәмә бөтөнләй икенсе төрлө тора. Иң үҙәккә үткәргәне лә шул ине. Тамаҡты дүрт-биш минутта туйҙыраһың, йоҡо өсөн бик күп – кәмендә бер-ике сәғәт ваҡыт кәрәк. Был бит инде разведчиктарға бик һирәк эләгә торған нәмә. Ә рейдта был мәсьәлә бигерәк тә киҫкенләште. Нисек, ниндәй ситуация булмаһын, аҙыраҡ йоҡламай һис мөмкин түгел. Шуның өсөн Герасим Фондеранцев, дошман тылына кергәс тә: “Әгәр ҙә, уңайлы ваҡыт табып, ял итергә уйлаһа (разведчик), полктың команда пунктына килеп кенә йоҡларға мөмкин”, -- тигән бойороҡ бирҙе. Был бойороҡ бик ҡаты үтәлде.

Шулай бер көн, таң һыҙылып барғанда разведканан ҡайтып, уның һөҙөмтәһе хаҡында һөйләгәс, Фондеранцевтан ял итергә рөхсәт һораным. Рөхсәт булғас, йоҡларға булдым. Йоҡо тигәнең шул: кейемле көйө иҙәнгә йығылаһың да йоҡлайһың.

Күҙем эленә генә башлағайны, бер эскадрон командиры инеп: “Беҙҙең позиция алдынан немецтар юғалды. Разведка ебәргәйнем, 150 – 200 метр самаһы барып килделәр, дошманды осратманылар”, -- тип хәбәр һалды полк командирына. Фондеранцев: “Разведчик, ишеттеңме?!” – тине. Ырғып торҙом. “Тиҙ генә тикшер. Әгәр дошман Чернухинола булмаһа, Дебальцево ҡалаһына тиклем бар”, -- тине ул. Дәррәү взводты күтәрҙем. Киттек. Һарайҙар араһынан 300 метр самаһы ер үткәс, бер ишек алдына индек. Ҡаршыла – ситән. Шуға етеп кенә барғанда, береһе – һарай мөйөшөнән, икенсеһе өй мөйөшөнән пулеметтарҙан ут астылар. Сигенеү юлыбыҙ киҫелде. Ергә йығылдыҡ. Ишек асылһа, өйгә инеп кенә ҡотолорға мөмкин. Мин өй мөйөшөндәге пулеметҡа яҡын инем, һарай мөйөшөндәгеһенә яҡын иптәшкә пулеметҡа граната ырғытырға ишара яһаным. Икебеҙ икеһенә бер үк мәлдә ташланыҡ. Солан ишеген тартҡайным, асылып китте. Шыуышып, барыбыҙ ҙа өйгә индек. Тәҙрәләрҙең быялаһы юҡ, ҡапҡастары ябыҡ. Инеү менән көнбайышҡа ҡараған тәҙрәне астым. Шунан көньяҡҡа сыҡҡан тәҙрәгә барҙым. Бынан 15-20 метр ғына самаһы ерҙән, бейек итеп өйөлгән ҡар өҫтөнән, аҡ маск-халат кейгән өс немец беҙҙең яҡҡа тексәйеп ята. Һырындыға ышыҡлана-ышыҡлана, беҙҙең тарафҡа һалдаттары йүгерә. Күрәһең, ҡамап алырға уйлайҙар. Тәҙрә рамын вата тибеп төшөп, һырындыға ышыҡланып яттым. Артымдан иптәштәр һикерешеп төштө. Фашистарҙы гранаталар менән ҡаршыланыҡ. Шул арала теге күҙәтеүсе өс немецҡа ла автоматтан һиптергәйнем, береһе ятып ҡалды, икеһе ҡар тауынан аунап төшөп китте. Беҙ килгән юлыбыҙҙан ҡайтыу яғына йүнәлдек. Тегеләр автоматтарҙан атып оҙатты. Пулеметтарының тауышы сыҡманы. Тимәк, гранаталарыбыҙ бушҡа шартламаған.

Дошман, тәүге позицияларын ташлап, төньяҡтан көнбайышҡа ҡарабыраҡ һуҙылған оҙон урамға күскән икән. Теге өйҙә тәҙрәләрҙе асып ҡарағанда бер-нисә урында йәшерелгән пушка, миномет установкалары, урам буйлап теҙелгән пулеметтары күренгәйне. Расчеттар пулемет янында ине. Башҡа һалдаттар ҙа күп кенә. Гитлерсыларҙың, яңы урынға күсеп, һөжүмгә әҙерләнеүе ине был. Хәлде һөйләгәс, полк командиры ла, штаб начальнигы ла минең фекер менән ризалашты. Хәҙер үк ныҡлы күҙәтеү ойоштороорға, дошмандан бер генә минутҡа ла күҙ алмаҫҡа ҡушылды. Шунда уҡ егеттәрҙе күҙәтеү өсөн уңайлыраҡ урындарға ҡуйҙым. Улар

тиҙҙән немецтарҙың әүҙем эш алып барыуҙарын, йөк машиналары килеп-китеп тороуын, төштән һуңыраҡ ҡасабаның көнбайыш осонан танк гөрөлтөләре ишетелеүен хәбәр иттеләр.

Ҡояш байып барған саҡта көнбайыштан Чернухиноға табан килеүсе 150-200-ләгән кеше күренде. Обоздары бар. Ул яҡтан беҙҙекеләрҙең килеүе мөмкин түгел ине. Ни тиклем диҡҡәт менән текләһәк тә, уларҙың кем булыуын белә алманыҡ. Фондеранцев артиллерияға атырға бойорҙо. Бер залп бирҙеләр. Снарядтар төркөмдөң уртаһына төштө. Фондеранцев башҡа аттырманы. Миңә әйләнеп: “Бар, разведчик, аныҡ бел, кемдәр икән?” – тине. Шунда торған өлкән лейтенант Һабанбаев: “Иптәш подполковник, Ғайсаров менән барырға миңә лә рөхсәт итегеҙ?” – тине. Фондеранцев рөхсәт итте. Мин, коноводым Кәримов, Һабанбаев, уның коноводы – дүртәүләп ат менеп саптыҡ.

Баяғы халыҡ ҡалҡыулыҡ өҫтөндә ята. Беҙ ватыҡ машиналар ышығында аттар менән коноводтарҙы ҡалдырҙыҡ та Һабанбаев менән: “Беҙ – үҙебеҙҙекеләр!” – тип ҡысҡыра-ҡысҡыра ҡалҡыулыҡҡа күтәрелдек. Тауыш-тын юҡ. Туҡтаныҡ. Таныу түгел, йүнләп күреп тә булмай: ҡуйы, бейек ҡыу әрәмәлектә ҡарҙа яталар. Ҡысҡырғанға яуап биреүсе булмағас: “Әллә үҙегеҙҙең бүркегеҙҙе лә танымайһығыҙмы?” – тип бүректе күтәреп ҡысҡырҙым. Шул мәл янибыҙҙа ғына берәү боҙоҡ урыҫ телендә: “Руки вверх!”—тип аҡырҙы. Әйләнеп ситкә һикерҙек тә ҡарҙа йөҙөп киттек. Беҙгә тоҫҡап көслө ут астылар, баш ҡалҡытырлыҡ түгел. Аҙыраҡ уҙғас әйләнеп ҡараһам, Һабанбаев өс-дүрт аҙым да китә алмаған, һәләк булған... Йөҙөп бара-бара, үҙәк һымаҡ иңкеүлеккә төштөм. Коноводтар аттарҙы килтерҙе. Беҙ ҡайтҡанда ҡараңғы ине инде. Оҙаҡламай фрицтар, танкылар менән сығып, баяғы төркөмдө Чернухиноға алып төштө.

Беҙҙең взвод тағы ла разведкаға китте. Ҡараңғынан файҙаланып, дошман позицияһына мөмкин тиклем яҡынлаштыҡ, төркөмдәргә бүленеп бер-нисә ергә урынлашып, күҙәтергә тотондоҡ. Теге яҡта шау-шоуһыҙ ғына эш бара. Дүрт автомашина менән алғы һыҙыҡтың үҙенә үк һалдаттарын килтереп төшөрҙөләр. Былай ҙа килгән-киткән машина тауыштары, тягач тауыштары килә. Танкыларҙың килеп туҡтауы ишетелде. Төн урталары ауғас, хәрәкәт баҫыла төштө. Таң алдынан бөтөнләй тынды. Алғы һыҙыҡта ятыусыларын да һирәгәйттеләр, төнө буйы окоп һаҡлап туңған фрицтарҙы йылындырырға, ял иттерергә тип алып киттеләр, булһа кәрәк.

Мин күҙәткән тәңгәлдәнерәк, урамдың теге башындағы будка һымаҡ өй мине бик ҡыҙыҡһындырғайны. Сөнки уға өсәр-дүртәр, бишәр кеше инеп-сығып йөрөй ине. Ә хәҙер ундайҙар күренмәй. Йоҡлайҙар, ахыры. Шул ерҙә “тел” төшөрөп булмаҫмы тип, өс кеше, урам аша сығып, өй янына боҫтоҡ. Байтаҡ ҡына ваҡыт үткәс, ике немец өйгә инеп китте. Беҙ – арттарынан... Береһен бысаҡ менән дөмөктөрөп, икенсеһен урам аша һөйрәп алып сыҡтыҡ, штабҡа тапшырҙыҡ.

Дошмандың планын һиҙгәс тә, беҙҙең командование тейешле сараһын күрҙе, бөтә эскадрондар ҙа алғы һыҙыҡҡа һалынды. Артиллерия, миномет установкалары, яңы шарттарға бәйле, тейешле урындарға ҡуйылды. Теләһә ҡасан дошманды лайыҡлы ҡаршылау өсөн, бөтә саралар күрелде. Штаб начальнигы теге беҙ килтергән фашистың ҡиммәтле мәғлүмәттәр биреүе хаҡында әйтте.

1942 йылда иген бик уңды, ауылдан ир-егеттәр һуғышҡа оҙатылып тора көн һайын. Колхозда ҡул көсө бөлөп, йыйын ҡарт-ҡоро, бала-саға, ҡатын-ҡыҙ менән эшләргә тура килде. Көҙ урылған игенде ер өҫтөнә эҫкерткә өйөп бөттөк, ҡар иртә яуҙы. Колхозда тәгәрмәсле бер трактор, бер һуҡҡыс бар – шуның менән иген һуғабыҙ.

Ҡыш ҡар бик ҡалын яуҙы, көн дә күҙ асҡыһыҙ буран. Эҫкерттәр ҡырҙа анда-бында өйөлгән, иген һуҡкысты көн һайын бер урындан икенсеһенә ҡарҙы көрәп алып барырға кәрәк. Төш еткәс кенә иген һуға башлайбыҙ, ул иген дымлы ине -- өй һайын киптерергә таратып бирәбеҙ, кипкән берен дәүләт ҡаҙнаһына оҙатып торабыҙ. Ҙур ҡыйынлыҡтар менән 1942 йылдың 22 февраленә иген поставкаһын саҡ 80%-ҡа үтәнек. Шул 22 февралдең кисенә үк мине партия райкомына бюроға саҡырҙылар, райком секретаре Биктимеров иптәш ине. Хисапнамәмде тыңлағас, мине бик ныҡ ҡурҡытырға уйланылар: халыҡты эшләтә алмайһың, һуғышҡа ебәрәбеҙ, тип янанылар. Мин дә бик бирешмәнем: ебәрегеҙ, мин бөгөндән китергә әҙер, тинем. Шул уҡ минутында райком секретаре район хәрби комиссары Кирсановҡа телефондан шылтыратып, Сәйфуллинға бөгөндән повестка тоттор, тип, мин шул 1942 йылдың 22 февралендә үк повестка алып, 23 февраль көнө колхозды тапшырып, ғаиләм менән хушлашып, изге юлға сыҡтым. Мин военкоматҡа килгәндә төркөмләп оҙатырға 25 кешелек команда йыйыла ине, мин медкомиссиянан үткәнсе, улар китеп тә барғандар. Инде 20 кешелекте йыялар. Мин, ни булһа ла булыр, тип, баяғы 25 кешелек команданы ҡыуып киттем. Магнитогорскиға барһам, улар вагонға тейәлгән, китергә торалар икән, мин дә инеп ултырҙым. Юлда барғанда оҙатмалы пакетты асып ҡараныҡ – исемлектә минең исем-фамилия юҡ ине. Дим станцияһында туҡтаттылар, унда беҙҙе ҡаршы алып, Башҡорт атлы дивизияһы штабы урынлашҡан бинаға алып барып, төрлөбөҙҙө төрлө часҡа бүлделәр. Минең исем исемлектә булмаһа ла, дивизия янындағы элемтә эскадронына алдылар, ә ул тимер юлсылар клубында урынлашҡан икән. Өс ҡатлы нарҙан мин дә урын алып, хәрби өйрәнеүҙәр башланып китте, улар бик ҡаты булды – иртәнге 6-нан төнгө 11 сәғәткәсә тынғы юҡ. Мин ни, элек армияла булмағас, бер аҙна бик ҡыйын булды: тәрән ҡарҙа телефон сымдары һуҙабыҙ, көндәр күҙ асҡыһыҙ буран. Ҡайһы бер иптәштәр сабата, иҫке көпәйкә кейгән -- өшөйҙәр. Ашауҙы инде ни тип кенә әйтергә лә ҡыйын – хөрт! Мин өйҙән арыу ғына аҙыҡ алып барғайным да, күрше бүлмәләге ике аяҡлы сысҡандар, үҙем юҡта тоҡто тишеп, яҡшы ғына ярҙам иттеләр... Шулай итеп ике ай самаһы ваҡыт үтеп тә китте. Бер көн беҙгә кейем бирҙеләр: бушлат, гимнастерка-салбар, итек. Китәбеҙ икән, тип уйлаштыҡ. Күп тә үтмәй, дивизияға Байраҡ тапшырҙылар бөтә составты йыйып, тантаналы доклад булды. Башҡорт АССР-ы Верховный Советы рәйесе Ибраһимов иптәш командирыбыҙ Шайморатовҡа Байраҡты тапшырып, һуғышта дошманды тиҙ көндәрҙә еңеп ҡайтыуыбыҙҙы теләне. Шайморатов, Байраҡты үбеп, телмәр һөйләне. 12 апрелдә бойороҡ булып, шул көнө вагондарға аттарҙы тейәп, көнбайышҡа ҡарап ҡуҙғалып киттек. Беҙ 1-се полк (командиры Кусимов) эшелонында булдыҡ. Юлда барғанда паровоздан алып иң артҡы вагонғаса элемтә һуҙҙыҡ. Бер вагонда 16 ат, 4 яугир барабыҙ. Аттарҙы таҙартабыҙ, туҡталған урындарҙа һуғарабыҙ. Шулай биш көн барғас, аттарҙы вагондан төшөрөп, йөрөтөп алдыҡ, тик тороп бәғзеһенең аяҡтары шешеп киткән.

Шулай байтаҡ юл уҙғас, һуғыш булып үткән ерҙәр осрай башланы: һалам түшәлгән окоптар, аҡ ҡарҙа ҡанлы һаламдар ҙа яҡкылай. Мин бер тапҡыр паровоздың иң алдында моронда һаҡсы булып барҙым, шундай ҙа һыуыҡ булды! Мылтыҡ ҡулда, тик уның, исмаһам, бер генә патроны булһасы! Ошолай нисә тәүлек барғанбыҙҙыр, бер төндә Ефремово станцияһында туҡталып, беҙҙе вагондарҙан төшөрҙөләр. Шул төндә үк 7-8 километр үтеп, бер ауылға барып ҡундыҡ. Иртән тороуыма,

дошмандың бер самолеты дөһөрҙәп килеп ҙур-ҙур мал һарайҙарына ут һалып китте, бөтәһе дөрләп яна. Ә мин, фургон егеп, тимер юл станцияһында ҡалған әйберҙәрҙе алырға тип яланда китеп барам. Бына арттан миңә табан дошмандың бер самолеты шыҡайып килә, пулеметтан һиптереп китте, ләкин тейҙерә алманы – юл ситендәге түңәләскә ышыҡланып ятып ҡалдым. Станцияға барһам, вокзалды пыр-туҙҙырып киткән, шундағы халыҡтарҙың һыйырҙары үлеп ята, мәрйәләр илашалар... Әйберҙәрҙе йәһәт тейәп алдым да кире ауылға ҡайттым. Унда 15 көн самаһы торҙоҡ, әммә тынғы булманы: йә телефон төбөндә киҙеүләйһең, йә аттарға көнлөксө (дневальный) булаһың. Башҡалар тейешһеҙ сәғәттә йоҡлапмы, нисек тә булһа язалы "нәрәт" алып, хужалыҡ взводына оҙатылалар ҙа, шунда 3-4 көн йөрөп ял итеп, берәр бүкәнкәй (буханка) икмәк алып ҡайталар, ундағы туҡ тормошто маҡтайҙар. Мин дә бер көн киҙеү торғанда, ни булһа ла булыр, тип, йоҡлап ултырғанмын. Бер ваҡыт взвод командиры Чернышов килеп ҡысҡырып ебәрҙе: "Встать!" – тип. Ырғып торҙом."Өс тәүлек нәрәт. Сними ремень!" – тине. Мин, Хоҙай бирҙе ләһә, тип, ҡайышты ысҡындырып бирҙем, ул миңә хужалыҡ взводы яғына китергә ҡушты. Бер 20-30 аҙым уҙғайным, йәнә: "Стой!" – тип команда бирҙе, әммә туҡтаманым. Кире кил, тип йәнә ҡысҡырҙы. Кире килгәйнем, одевай ремень, тип ҡайышымды бирҙе лә, ҡабат йоҡлама, тип китеп барҙы. Мин дә уға һүҙ биреп ҡалдым – баяғы рәхәт тормошҡа тарып булманы....

3-4 тәүлек торғас, төндә ҡуҙғалып киттек. Төнөн барабыҙ, ә көндөҙөн ҡайҙа ағаслыҡ – шунда туҡтайбыҙ. Китә торғас, алыҫтағы туп тауыштары яҡын ишетелә башланы. Бер төндә Әлем (Олымь) йылғаһы буйында оборонаға туҡтап, бер йырынты-соҡорҙа артыҡ нәмәләрҙе ҡалдырып, алғы һыҙыҡҡа еттек. Йылға буйында ҡарамалыҡ араһына кереп окоп ҡаҙып, телефондан 1-енсе полк менән элемтә тоташтырғанбыҙ. Бер ваҡыт элемтә өҙөлдө -- дошман артиллерия, миномет менән көслө ут асты. Ағастарҙың ботаҡтары ҡыйылып бөттө, баш ҡалҡытыр әмәл юҡ. Шул ваҡыт яныма шыуышып взвод командиры килде: "Когти кейеп анау телеграф бағанаһына мен дә, аппаратыңды тоташтырып, һөйләшеп ҡара", -- тине. Бағана башына менеүем булды, шрапнель менән бәрҙеләр – нисек тәкмәскәнемде белмәй ҙә ҡалдым, ләкин зыян теймәне. Шул арала ер ябып аҡландан фашистар килә. Яҡында ваҡ ҡына таллыҡ бар ине, шунда беҙҙең "Катюша"лар торған икән: ҡолаҡ тондороп дошман өҫтөнә ут яуҙырҙы. Күпме фашист үлгәндер, ләкин ҡабат ҡалҡып тороусылары булманы. Һауала самолеттар айҡалып һуғыша, ерҙә тамуҡ... Ул ваҡытта немец самолеттары өҫтөнлөк итә ине. Шул бәрелештә яҡташым Йәнбәков Исхаҡ, Мәликов тигән иптәштәремде ҡалдырып сыҡтыҡ. Бер баҫыуҙа буйға үҫкән арыш араһына йыйылып, ҡараңғы төшкәс икенсе урынға китергә булдыҡ, ә 12 һыбайлы барлыҡ кабелдәрҙе йыйып алырға ҡалдыҡ. Беҙгә маршрут алып ҡалған иптәш Абдрахманов ине.

Таң алдынан ҡуҙғалып киттек, таң атып килгәндә бер ҡалҡыулыҡҡа барып сыҡтыҡ. Юлдың ян-яғында окоптар төҫмөрләнә. Вахитов тигән беребеҙҙе белешергә ебәргәйне, ике яҡлап өҫтөбөҙгә ут яуҙыра башланылар, кире тайҙыҡ. Аҙ ғына баҫа атһалар, бер кемебеҙ ҙә ҡалмаҫ ине. Шулай ҙа Вахитов шунда ятып ҡалды. Ике көндән һуң беҙ ул урынды кире алдыҡ, пүлә Вахитовтың ҡарынына тейгән булған, үҙе күлдәге менән яраһын бәйләп ҡараған, меҫкенкәй...

Беҙҙең был бәрелешкән ер Курск өлкәһе булһа кәрәк, оборона һуғышы алып барабыҙ. Бер көн бик ҡаты һуғыш башланып китте, дошман бер ҡалҡыулыҡты биләп ултыра, шул ҡалҡыулыҡ өсөн алыш бара. Мин телефон менән алғы һыҙыҡта ултырам. Яралылар артҡа ағыла. Күҙ асҡыһыҙ саңмы, томанмы, әллә төтөнмө, -- бер нимә аңлап булмай. Снаряд гөрһөлдәүҙәре ҡолаҡты тондорҙо, һис нимә ишеткеһеҙ. Сым өҙөлә -- шыуышып барып ялғап киләм. Атыш өс сәғәт дауам иткәндер.

Шул оборонала ятҡанда мине дивизия штабына саҡырттылар, штаб ике бүлмәле өйгә урынлашҡан. Һаҡсынан рөхсәт алып, өйгә инһәм, Шайморатов өҫтәл ҡырында нимәлер һыҙғылап ултыра, мине дивизия комиссары Мөбәрәк Нәзиров ҡаршы алды. Тура ҡарап торҙо ла: "Һуғыш яланындағы арышты күрәһең бит – ниндәй үҫкән! Дошман ҡулына ҡалдырырға ярамай. Ошо ауылда ике колхоз бар, һин шуларҙан кешеләр алып, уңған игенде ҡул салғылары менән саптырып өйҙөрт!" – тине. Бердина ауылы ине был. "Есть!" – тинем дә, ике колхоздан кешеләр алып, -- 6 август көнө ине, -- 11-12-ләп ҡул салғыһы менән саба ғына башлағайныҡ, -- гел ҡатын-ҡыҙҙар ине, араһында бер йәш балалыһы ла бар, -- 15 минут үттеме-юҡмы, дошман снаряды арабыҙға килеп тә төштө, баяғы балалы ҡатынды снаряд тупраҡҡа күмгән. Барып ярҙамлашып ҡотҡарып алып, яҡында бер тәрән үҙәк бар икән, кешеләрҙең бөтәһен дә шунда йәшерҙем дә кире штабҡа килеп, йәнә Нәзировҡа мөрәжәғәт иттем: "Эшләргә яй бирмәнеләр, снаряд менән аталар", -- тинем. Алай булһа төндә эшләргә кәрәк, ярҙамға һалдаттарҙы бирербеҙ, ә дошман күрмәгән ерҙәрҙе ҡатын-ҡыҙҙар менән көндөҙ сабығыҙ, тине. Шунан эш ҡыҙып китте – 15-ләп яугиребеҙ эшкә тотондо. Сапҡан арышты ат менән ташып, ырҙында баҫабыҙ. Ауылдың уртаһында бер һыу тирмәне булған икән, ватыҡтарын йүнәтеп, эшкә ектек. Арыш һалдырып, үҙебеҙҙең дивизия ондоң файҙаһын күрҙе. Мин как уполнамус булып йөрөйөм, мине яҡшы ашаталар. Шулай итеп, 20 көн самаһы рәхәтләнеп йөрөп ҡалдым. Тиҙҙән беҙҙе икенсе йүнәлешкә ебәрҙеләр. Ә бындағы хеҙмәтем өсөн мин "За боевые заслуги" миҙалы алдым.

Бер мәл дошман самолеттары көндөң башынан уҡ бомба яуҙырып, беҙ туҡталған ауылды утҡа тотто. Ауыл уртаһында бер ҙур бина бар, унда бер кем дә тормай. Мин шунда телефон менән ултырам. Бына бомба килеп төштө, бинаның яртыһын бүҫереп алды, мине саң ҡапланы, ҡолаҡ тонған. Арылы-биреле саңды ҡағыштырып, урамға сыҡһам, самолеттар китеп бөткән, унда-бында һалдаттар күренгеләй. Телефон сымын йыйыштырып алып, икенсе урынға күсергә кәрәк. Хәҙер Озерки тигән ауыл өсөн ҡаты һуғыш бара, дошманды шул ауылдан ҡыуып сығарырға әмер бирелгән беҙгә, ләкин фашистар ныҡ тора. Сәғәт ярым самаһы артиллерия утына тотҡандан һуң, беҙҙекеләр ат өҫтөндә "ура!" ҡысҡырып дошман өҫтөнә ташланды, ләкин ауылды ала алманы. Аҙыраҡ юғалтыуҙар булды. Үҙ окоптарыбыҙға кире килеп урынлаштыҡ, мин ул саҡта 1-енсе полкка элемтә бирә инем.

Йәнә икенсе урынға күстек. Поповка тигән ҙур ғына ауыл яртыһында – немецтар, яртыһында беҙҙекеләр. Урам һуғышы башланып китте. Беҙҙең штаб торған өйҙөң башына шрапнель төшөп ярылды, мин соланда телефон төбөндә ултыра инем, еңелсә яраландым. 5-6 көн санчәстә булып, кире урыныма ҡайттым. Шунда тәүтапҡыр ауылдан посылка алдым. Поповканы 3-4 көндә дошмандан таҙартып, ары киттек. Мине ошо яраланыуымдан һуң 148-енсе артполкка ебәрҙеләр, шунда штаб батареяһында парторг итеп һайланылар, утыҙлап коммунист бар ине.

Инде оҙон маршҡа сығып, Сталинград йүнәлешенә дөрҙөк, ҡыҙыулатып ат өҫтөндә 1500 километр юл үтергә тура килде. Төндә генә барабыҙ, ә көндөҙҙәрен – болотло булһа (дошман самолеттары оса алмай) ғына; ал-ял юҡ, көнө-төнө эйәрҙә, ҡайһы көндәрҙә 60-70 км үтәбеҙ. Күпме тәүлеккә һуҙылғандыр, Дон йылғаһына барып еттек, унда Ҡалас тигән ҡалала беҙгә илдән делегаттар килеп, һәммәбеҙгә бүләктәр өләштеләр, баш ҡалабыҙ Өфө әртистәре уйын ҡуйҙы. Улар менән һаубуллашып, илгә сәләмдәр әйтеп ебәрҙек.

3-4 көн торғас, Донды кисергә әмер булды. Саперҙар һалған пантон күпергә яҡынлағас, дошман самолеттары ябырылып, бомба ташларға маташып ҡарай, зенитчиктар ебәрмәй. Бына беҙҙең бүлек сыға башланы, күпер бәүелеп тора, һыбай сабып үтәбеҙ. Сығып та өлгөрҙөк, фашист самолеттары килеп күперҙе емереп тә китте...

Ун километр самаһы үткәс, бер тәрән йырын-соҡорға барып туҡтаныҡ, бер аҙна самаһы торҙоҡ. Ошонда аҙыраҡ асыҡтыҡ – арттан тәьминәт килеп етмәгән. Буш ваҡытта унда-бында йөрөштөрөп, ҡар өҫтөнән һерәйеп ултырған бойҙай башаҡтарын сүпләп ашайбыҙ. Күп тә тормай, аҙыҡ килә башланы.

1942 йылдың 19 ноябрь таңында беҙгә, атығыҙҙы эйәрләгеҙ, тип бойорҙолар. Аттарҙы эйәрләп, әҙер торабыҙ, таң яҡшы яҡтыра башлағайны. Тәүҙә “Катюша”лар уйнап ебәрҙе, артынса артиллерия телгә килде – атыу бер сәғәткә һуҙылды. Һис нимә ишетеп булмай, бөтәһе геүләп тора. Аттарға атланып, дошман яуына атакаға саптыҡ – румын һалдаттары булған икән, кәрәктәренә бирҙек. Шул көндә 70 километр алға киткәнбеҙ, бик күп ауылдарҙы дошмандан таҙарттыҡ. Икенсе таң һыҙылғанда Облиевский тимер юл станцияһына килеп еттек, дошман бында бик ныҡ оборона тотҡан икән, беҙҙе бик ҡаты ҡаршыланы. Сөнки аңһыҙыраҡ барып, тап ҡаршыһына сыҡтыҡ та көслө утына юлыҡтыҡ. Тирәбеҙ тип-тигеҙ ялан – самолет хатта яңғыҙ кешене лә баҫтырып йөрөп ата, бомбалар ямғырҙай яуа. Шул көн эсендә бер мең яугиребеҙҙе, мең дә биш йөҙ атыбыҙҙы юғалттыҡ, кисенә йыйылғанда Мөбәрәк Нәзиров миңә шулай тип әйтте. Был станцияны ла 3-4 көндән һуң фашистарҙан таҙартып, күп кенә трофей, шул иҫәптән аҙыҡ-түлек, беҙҙең ҡулға төштө.

Декабрҙең 25-тәрендә Красный Яр станцияһына яҡынлап барабыҙ, дошман ерҙән дә, һауанан да бик ныҡ ҡаршылыҡ күрһәтә. Тип-тигеҙ ялан. Фашист самолеттары, бомба яуҙырыуҙан тыш, өҫтөбөҙгә рельс һыныҡтары, тимер мискәләр ташлай...

28 декабрҙә Миняшов тигән бер офицер менән күҙәтеү пунктында ултырабыҙ. Ул бинокльдән ҡарай, ә мин телефондан артҡа хәбәр бирәм. Бер мәл офицерым артҡа ҡарап ҡасып бара; алды ҡараһам, дошман танкылары яҡынлап килә имеш. Аңарсы офоҡ артынан самолеттары ҡалҡып сыҡты, дошман танкылары беҙҙең оборонаға бәреп керҙе, беҙҙекеләр ҡаушабыраҡ ҡалды. Шулай ҙа бик ныҡ ҡаршы торҙоҡ, яландағы аҡ ҡар һөргән ергә әйләнде. Өҙлөкһөҙ яуған бомбалар аҫтында минең ике ауылдашым ятып ҡалды: Солтангәрәйев Сәғәҙиҙе станковый пулеметы менән ҡуша, окобын емереп, ер аҫтында ҡалдырып киткән, Моталов Ямалды танкы пүләләре киҫкән, Фәйзуллин тигән бер иптәш ныҡ яраланған – шунда ятып йән бирҙе. Һөжүм итеүсе дошман менән аралашып киттек, мин дә ике танкисын дөмөктөрҙөм – танкыһы ҡыйралған да ҡайҙа боҫорға урын табалмайҙар ине...

Яңы йылға ҡаршы төндә станцияны алырға әҙерләнәбеҙ. Төнгө сәғәт 2-3-тәр булғандыр, урамдарына бәреп керҙек. Фашистар Яңы йыл табынында бик ныҡ ҡунаҡ

булғандар, күптәре ҡаршылыҡ күрһәтмәй ҡасты, күбеһе әсир булды. Мин бер өйгә инһәм, ҡараңғыла бер нәмә быҫҡып ҡына яныып тора. Һәрмәнеп барып иҫерек радисты тотоп алдым, тышҡа һөйрәп сығарып, приклад төйҙәһе менән туҡмап үлтерҙем. Унда алынған трофейҙар тураһында яҙып тормайым, ул турала матбуғатта күп яҙылды. Минең өсөн шул яҡшы булды: бер складтан 24 килограмм һарымай алып сығып, яуҙашым Ирназаров менән бүлешеп һалып алдыҡ; аҙлап ашағас, ризыҡ байтаҡҡа етте. Ирназаров Ниғәмәт әле лә иҫән, Түбә рудниғы ҡасабаһында тора.

Дошман ғәскәрҙәрен артабан ҡыуып, бер ауылға бәреп индек. Бик ныҡ һыуһап, ишеге асыҡ өйгә инһәм, бер ҡатын үлеп ята – фашист атып киткән, эргәһендә 5-6 йәшлек ҡыҙы илап ултыра. Ошоларҙы күргәс, йөрәгемә ҡан һауып, нәфрәтем шундай артты!

10 февраль төнөндә Усть-Белая Калитва тигән ҡалаға дөрөп керҙек, дошман ғәскәре машиналарын шарылдатып сығып ҡасты. Дивизиябыҙ ҡаланың бер яғын биләне, башҡа дивизиялар – башҡа өлөштәрен. Беҙ, элемтәселәр, ҡала янындағы бер шахтала телефон менән ултырабыҙ, урам һуғышы бара, беҙҙең һуҙған сымдар әйләнгән һайын өҙөлә. Ирназаров менән алмашлап сығып ялғайбыҙ. Тағы ла сым өҙөлгән, инде минең сират. Баш ҡалҡытырлыҡ түгел: өҫтә пуләләр тауҙағы ташҡа тейеп шатыр-шотор ҡаҡлыға. Сыҡҡым бик килмәй, әлбиттә, ә шулай ҙа элемтәне булдырырға кәрәк. Сымды тотоп алдым да әленән-әле тәгәрәп, ҡайһы ерҙә шыуышып, 200 метр самаһы барҙым, теге яҡ осто саҡ табып алып ялғап, ҡайтып киттем. Шундағы хеҙмәтем өсөн "За отвагу" миҙалын бирҙеләр. (Һүрәттә: дивизияның санэскадрон яугире Һылыу (Әхмәтова).

Усть-Белая Калитва ҡалаһынан һуң беҙ фронтты өҙөп, йырыҡ аша немец ғәскәрҙәренең тәрән тылына рейдҡа кереп киттек. Минең менән бергә барған Көмөшҡолов тигән иптәшем шул беренсе көндәрҙә үк ятып ҡалды. Мине, аяғыма пулә тейеп, санчасть арбаһында 3-4 көн тейәп йөрөткәс, өс фургонда яралыларҙы, шул иҫәптән мине лә, бикләнеп өлгөрмәгән фронт йырығы аша кире үҙебеҙҙең яҡҡа ҡайтарып ебәрҙеләр. Каменьково тигән ҡасабаға килтереп, 18 кешене бер өйгә һалдылар. Бик ҡаты яралылары, тома һуҡырҙары бар. Мин, аҡһаҡлап йөрөп, нисек тә тамаҡ туйҙырам. Биш көндән һуң беҙҙе Миллерово тигән ҙур ҡалаға килтереп дауаланылар. Егерме көн ятҡас шөйлә хәл кереп, бер полкташымды эйәртеп баҙарға сыҡһам, Сәғит Әлибаев осраны, Өфөнән килгән өҫтәлмә көс менән китеп бара икән. Ашыҡ-бошоҡ һөйләшкәс: "Хәҙер үк килегеҙ, ана тора эшелон", -- тип станцияны күрһәтте лә ашығып күҙҙән юғалды. Беҙ ҡайтып, госпиталдән ҡағыҙҙарҙы яҙҙырып сыҡҡансы, эшелон ҡуҙғалып киткән. Ни эшләргә лә белмәй, уҙғынсы бер поезға ултырып йүнәлдек, бер тәүлек асығып килә торғас, сыҙамай төшөп ҡалдыҡ. Ашарға юҡ, ауылдан-ауылға йөрөп, бер ай тигәндә саҡ табып алдыҡ үҙебеҙҙекеләрҙе. Инде май айы ине, беҙҙең аяҡтарҙа быйма, табандарына ағас бәйләп алғанбыҙ, өҫ-баш шапшаҡ, ямаулы – мине күргәс Нәзиров аптырап көлдө. Кейем алып, ял итеп, ике айлыҡ полковой курста уҡыным. Яраткан командирыбыҙ М.М. Шайморатов баяғы дошман тылына тәрән рейдта батырҙарса һәләк булған, дивизия менән Белов командалыҡ итә ине. Владимир-Волынский тимер юл станцияһынан дошман беҙҙе ҡыҫырыҡлап сығарҙы, ҙур юғалтыуҙар булмаһа ла, 3-4 кешебеҙ дошман ҡулында ҡалды.

Дивизия бер заман ялға сыҡты, һабан туйы ойоштторҙоҡ, төрлө уйындар булды, көрәштә мин дә ҡатнаштым, бүләктәр бирҙеләр...

Днепрҙы башлап кисергә беҙҙең дивизияға ҡушылған икән. Төндә яр башына барып етеп, окоптар ҡаҙып алдыҡ. Мин бер янып бөткән өйҙөң нигеҙ буйына ике кешелек итеп ҡаҙҙым, 1-енсе полкты элемтә менән тоташтырып ултырам. Окобыма Сәғит Әлибаев килеп төштө, уның менән шунда яҡындан танышып киттек. Ул йәш сағында беҙҙең Баймаҡ районы I Этҡол ауылындағы мәктәптә уҡытҡан икән, ундағы кешеләрҙе һорашты.

Бер төндә яугирҙәребеҙ, кәмәләргә тейәлеп, Днепрҙы сыҡтылар, беҙҙең артиллерия ярҙам итте. Артынса уҡ бөтә дивизия йылғаны кисеп, 7-8 километр яҫылыҡ ерҙе биләп, ике көнмө яҭкас, беҙ йәнә кире сыҡтыҡ, сөнки был урын бик уңышһыҙ булды. Артыбыҙҙа дошмандың бер радисы тороп ҡалған да беҙҙең ҡайҙа – штаб, ҡайҙа блиндаж, --шуларҙы әйтеп торған.

Бына ҡабат Днепрҙың һул ярында торабыҙ. Иптәшем линияны ялғарға киткәйне, мин ултырған окоптың янына снаряд төшөп, мине тупраҡ баҫып, иптәшем ҡаҙаҡ егете Масҡазов ҡаҙып алды. Ҡолағым тонған, ишетмәйем...

Йылғаны был урындан кисә алманыҡ, инде икенсе тәңгәлдәрәк әҙерләнгән күперҙән сығырға булдыҡ. Һауала баш өҫтөндә самолеттар һуғыша, күперҙән һыбай йән-фарман сабып үттек. Урман араһында бер кис ҡундыҡ та иртәгәһенә дошманды ҡыуып киттек, төндә бер ауыл ҡырындағы ағас араһында туҡтаныҡ. Мин был ваҡытта старшина булып хеҙмәт итә инем. Ялан кухняһын алып барып, ауыл ситендәге өйҙән һыу алдыҡ, нисек беҙҙе дошман эләктермәгән – ауыл тулы немец һалдаттары икән! Иртәгәһенә уларҙы ҡыуып сығарҙыҡ. Төндә тағы алға китеп, бер урманда туҡтала-туҡтала барабыҙ. Көтмәгәндә колоннабыҙ арҡылы ун һигеҙ власовсы “ура” һөрәнләп автоматтан һиптереп үтте, беҙ өс кеше һөйләшеп тора инек: бер ҡаҙаҡ егете, бер осетин һәм мин, -- өсәбөҙ ҙә тәгәрәнек. Арттарынан ут астыҡ – шул урында ятып ҡалғандар, иҫерек булғандар. Береһенең билендә ике фляга араҡы бар ине... Ике иптәшем дә ныҡ яраланды, мин иҫән-имен ҡалдым.

Фашистар фронтҡа йөк ташыған тимер юлды алырға тип, юлдың буйына окоптар ҡаҙып яттыҡ. Төн-карала окобымды бик йыуан бер ағас төбөнә ҡаҙҙым – рельстәр минән утыҙ метр самаһында ғына. Таң һыҙылып килә. Бына бер заман таш юлда немецтар күренде: алдан бер танк, артынан автомашинаға тейәлгән һалдаттары яҡынлай. Ут астыҡ. Танкыһы емерелде, һалдаттары машинаһын ташлап ҡасты, байтағы ятып ҡалды. Бераҙҙан һуң дошман иҫен йыйып, контратакаға ташланғайны, бик яҡшы ҡаршыланыҡ: бер юлы ун ике танкыһы яндырылды, күп кенә һалдаты дөмөктө.

Артабанғы һуғыштарҙа, ҡыҫҡаса ғына әйткәндә, Мозырь, Коленкивич, Чернигов ҡалаларын һуғышып алып, беҙҙең дивизияға, уның полктарына шул ҡалаларҙың хөрмәтле исемдәре бирелде. Мозырь ҡалаһын алғанда бик ҡыҙыҡ булды: ҡапыл төндә барып баҫтыҡ, немецтар эске күлдәксән сығып ҡастылар, күп ҡоралдары беҙҙең ҡулға төштө.

Польша еренә аяҡ баҫтыҡ, ауылдарҙы, ҡалаларҙы бер-бер артлы дошмандан таҙартабыҙ. Бер ҡасабаға килеп барғанда балалар беҙҙе сәскәләр менән тәбрикләп ҡаршыланы. Бераҙ барғас, былар ҡапыл юҡ булды, ә ике яҡтағы йорт ҡыйыҡтарынан беҙгә пулеметтан һиптерә башланылар. Менге атымды арба артына

тағып, ултырып килә инем. Автоматымды алып, таш ҡойма аша ырғып төшһәм, бер поляк ҡасып бара. Уға бер һиптерҙем дә, өй башынан атҡан пулеметҡа яҡынлап, уға оҙон пүлә ямғыры оҙаттым. Пулеметты тонсоҡтороп, кире әйләнеп килә ятһам, капитан Мартохин тап булды ла: “Ни эшләп бында яңғыҙың йөрөйһөң?” – тип төпсөндө. “Мынауы ҡыйыҡтан атып торған пулемет утын тонсоҡторҙом”, -- тигәс, “матьчестная!” тип маҡтап ҡуйҙы. Күп тә үтмәне, шул хеҙмәтем өсөн Ҡыҙыл Йондоҙ ордены бирҙеләр.

Варшаваны алыуҙа ҡатнаштым. Уны үтеп, Люблин тигән ҙур ҡаланы көтмәгәндәрендә барып баҫтыҡ та немец ғәскәрҙәрен уғата көнбайышҡараҡ бырaҡтырҙыҡ. Бер генерал Ханс менән немкаһын урамдан тотоп алдыҡ, ҡасып өлгөрмәгәндәр...

Шул ҡалала концентрацион лагерь бар, уны “үлем лагеры” тип атағандар, бер-нисә гектар ерҙе биләгән, әйләнәһен бетон ҡойма менән уратып, тимер сымға электр тогы ебәргәндәр, һәр бағана башында громкоговоритель булған, әжәлгә дусар ҡылынған халыҡтың илашҡаны ҡалаға ишетелмәһен өсөн, ул даими музыка яңғыратҡан. Тәүҙәрәк үлгәндәрҙең йөҙәрләбен-йөҙәрләбен ер ҡаҙып күмеп торғандар, ә һуңыраҡ, шул эштән йонсоғас, мунса индерәбеҙ, тип бикләп, тереләтә үртәй торған булғандар. Унда үлтерелгән кешеләрҙең кейемдәре 2-3 ҙур һарай тулы түшәмгәсә өйөлөп ята ине...

Сандомир тигән урындан Висла йылғаһын аша сығып, фашистарҙы ҡыуып киттек, ундағы ҡыйратылған дошман техникаһының иҫәбе-һаны юҡтыр. Юлдан барырлыҡ түгел – үлектәр өйөлөп ята... Шул китеүҙән Германия еренә барып сыҡтыҡ, Берлинды уң яҡлап үтеп, 250 километр китеп, Эльба йылғаһы янындағы Бранденбург ҡалаһын һуғышып алдыҡ, бер ҙур концлагерҙа бикле торған совет иле ҡыҙҙарын ҡоллоҡтан ҡотҡарҙыҡ, уларҙың иҫәбе-һанына сығырлыҡ түгел ине. Шундағы ике ҡатлы өйгә бер иптәш менән керәйек тиһәк, ишек бикле, эстән атыш гөрһөлдәй. Һарайынан һөймән алып, ишеген ҡайырып керһәк, ике ҡатын, ун йәштәрҙәге бер малай һәм бер ир үлеп ята. Был фашист тәүҙә тегеләрен атҡан да, аҙаҡ үҙенең башына пүлә ебәргән. Өс сумаҙанға иң затлы әйберҙәрен тултырғандар, тик ҡасып өлгөрә алмағандар...

Үлемесле уттар-һыуҙар аша һуҙылған иң изге яу юлыбыҙҙың аҙағы шунда – Эльба ярында булды, унда союздаш америка ғәскәрҙәре менән осраштыҡ, бөйөк Еңеү көнөн дә шунда ҡаршыланыҡ. Ике ҡатлы өйҙә дивизияның тантаналы партия йыйылышы үткәрелде, мин штаб батареяһынан 66 коммунисты алып барҙым. Аҙаҡтан уйын булды, милли моң һәм бейеү күреп, мин дә “Әрме” көйөн йырлап ебәрҙем... Күп тә торманыҡ, һағыныслы үҙ илебеҙгә ҡарап юл тоттоҡ...

Сәйфуллин Ғәлиәхмәт Ғәйетбай улы.

Сибай ҡалаһы, Ленин урамы, 19, кв. 4.

19.02.1980.

Ҡәҙерле Йыһат Солтанов туғаным!

Һеҙгә күп сәләмдәр менән шатлыҡлы оҙон ғүмер теләп хат яҙыусы Сәйфуллин тип белерһең. Мин һау йәшәйем, һинең Б. Мәмбәтҡолов арҡылы яҙып ебәргән сәләмеңде алып уҡыным, ҙур рәхмәт.

Миңә йәнә өс төрлө һорау ҡуйып ебәргәнһең, бына шуларҙы яҙмаҡ булам.

1. Мин 1908 йылдың иҫкесә 10 февралендә Түбәнге Ғәҙелбай ауылы I Этҡол ауыл советы Баймаҡ районында ярлы ерекмән ғаиләһендә тыуғанмын. 14 йәштән атам менән старатель булып алтын йыуҙыҡ. Атай ҡарт булғас, мине 16 йәштән өйләндерҙе. 2 атыбыҙ, 1 һыйыр, 5-6 баш ваҡ мал бар ине. Атам менән бергә торһам да, 1928 йыл октябрь айында 12 хужалыҡ әртилгә ойоштоҡ, мин бер атты алып, шул артилгә кереп киттем, шунда хисапсы эшен алып барҙым. Колхоз ҙурая барҙы, мин дә уның менән ҡуша үҫә барҙым. Алдағы хатымда аңлайышлы итеп яҙғайным.

2. Дивизия төҙөлөп ятҡан саҡ ине, беҙ барғанда кешеләрҙе төрлө бүлектәргә бүләләр ине, мине дивизия штабы янындағы элемтә эскадронына алдылар, беҙ Дим станцияһында дивизия штабы менән бергә клубта урынлаштыҡ. Дүрт ҡатлы нарҙа 60-70 кеше яттыҡ, радистар һәм элемтәселәр. Иртән торһаҡ, шул һуғыш һөнәрен өйрәндек.

3. Мин рейдҡа кереп, төрлө ауылдарҙы азат итеп барғанда аяҡтан яраланып, санбүлеккә эләктем, бер төркөм яралылар менән бергә рейдтан сығарылып, Миллерово ҡалаһында ятып дауаландым. Төҙәлгәс, кире үҙбеҙҙең бүлеккә килдем. Артабан, һуғыш бөткәнсе, 148-енсе артполкта хеҙмәт иттем.

4. Мин батареяла парторг булдым. Оборонала ятҡанда Дәүләтов Мөхәммәт тигән иптәшем радист ине, уның менән иртәле-кисле Мәскәүҙе тыңлап, яҙып алып, иртән тороуҙарына һалдаттарыма һуңғы хәбәрҙәрҙе еткерә инем. Үҙебеҙгә күрә Ленин исемендәге ҡыҙыл мөйөш булдырҙыҡ, төнгө 11 сәғәттәге отбойғаса бер генә минут та бушҡа үтмәне. Бына шулар минең өҫтәп яҙаһы нәмәләр.

Өҫтәлмә сәләм менән һаулыҡ теләп, ***Сәйфуллин Ғ.Ғ.*** *03.04.1980.*

Б. М. Мәмбәтколовтың иҫтәлеге.

Йыһат ҡусты!

Сәләм Һеҙгә.

Һеҙҙең һорау буйынса иҫтәлекте яҙып, күсереп бөттөм. Яҙған хатыма яуап булмағас, ебәрмәйерәк торам. Сөнки кире уйлауығыҙ мөмкин, бәлки, уның хәҙер кәрәге булмайҙыр, тип, икеләнеп торам. Хат яҙығыҙ бер-ике һүҙ, ваҡытығыҙ булһа.

Һүр.15. Б.М. Мәмбәтколов

Тағы ла бер фронтовик иптәш яҙа. Ул да яҙып бөтә.

Ихтирам итеп сәләм менән ***Бәҙри Мәмбәтҡолов.***

453640, г. Сибай, пр. Горняков, 3 – 9. 06.02.1980.

Һаумыһығыҙ, Йыһат ҡусты!

Сәләм Һеҙгә һәм тормош иптәшегеҙҙе 8 Март байрамы менән тәбрикләйем. Тормошоғоҙҙа, эшегеҙҙә ҙур уңышлыҡтар, үҙегеҙгә һаулыҡ, шатлыҡ, оҙон ғүмер теләйем. Шундай уҡ тәбрикләү һәм изге теләк һүҙҙәрен беҙҙең һөйөклөбөҙ Гөлфиә Юнысоваға[235] ла еткереүегеҙҙе һорайым.

Һеҙҙең һуңғы хатығыҙҙы 28 февралдә алдым, рәхмәт, ә 29-ында ял итергә сығып киттем Йоматауға.

[235] Гөлфиә Юнысова-Иҙелбаева, билдәле шағирәбеҙ.

Өҫтәлмә иҫтәлектәрҙе ялдан ҡайтҡас яҙып ебәрермен. Бында яҙырға мөмкинселек юҡ. Буштан бушап булмай.
Ихтирам менән ***Бәҙри Мәмбәтҡолов.***
06.03.1980.

Хөрмәтле Йыһат ҡусты!
Сәләм Һеҙгә һәм ғаиләгеҙгә.
Һеҙгә тыныслыҡ бирмәйем булһа кәрәк үҙемдең хатым менән.
Мин 3 – 26 мартта Йоматауҙа булып, ауырып ҡайттым. 4 апрелдә Өфөгә килеп, больницаға индем.
Һеҙҙең һорауҙарға яуап булманы, шуға күрә Һеҙҙең алда уңайһыҙ һиҙәм үҙемде. Шуның өсөн, больницала булһа ла, тормош юлымды иҫкә төшкән тиклем яҙҙым. Һеҙгә ебәрәм. Ҡалған һорауҙарығыҙға хәҙер генә яуап яҙып ебәрә алмайым. Һуңынан. Улар Һеҙгә билдәлелер тип уйлайым.
Таныып, аңлап уҡыһағыҙ ярай. Ауырыу кешенең рәте буламы һуң...
Ғәлиәхмәт Ғәйетбай улына хатығыҙҙы уҡыным, һорауҙарығыҙҙы яҙып бирҙем. Ул яҙып ебәрергә тейеш.
Сәләм менән ***Б. Мәмбәтҡолов.***
12 апрель 1980 й.

Ҡыҫҡаса тормош юлым.

Мин, Мәмбәтҡолов Бәҙри Мөжәүир улы, 1911 йылдың 1 майында (яңыса) Башҡорт АССР-ы Баймаҡ районы Темәс ауылында ярлы ерекмән ғаиләһендә тыуғанмын. Атайым беренсе бөтә донъя һуғышында һәләк булған. Мин өс йәштә ҡалғанмын. Атайымды белмәйем. Алты айлыҡ һеңлем Бибинур, биш йәшлек ағайым Нуритдин, ете йәшлек апайым Шәмсиямал ҡалып, беҙ дүрт йәтим бик ауыр тормош шарттарында әсәйем менән йәшәй башлайбыҙ. Бөйөк Октябрь революцияһы беҙгә яҡты юл асты, аслыҡтан, үлемдән һаҡланы. Әсәйем иргә тормошҡа сыға атайымдың ҡустыһына (Мөхәммәтша), мине Билалда асылған балалар йортона урынлаштыралар. Бара-тора апайымды йәшләй генә кейәүгә бирәләр, ағайым байҙарға батраклыҡҡа ялланып, йыл әйләнәһенә шунда йөрөй унар йыл буйына, һеңлем әсәйемдәр менән ҡала.
1920 йыл башланғыс мәктәптә уҡый башланым. Йәтим һәм ас балалар бик күп булып китеү сәбәпле, кемдең атаһы йәки әсәһе булһа, өйҙәренә ҡайтарҙылар. Шул иҫәптән мин дә ауылға ҡайтып, әсәйемдәр менән йәшәй башланым. Тормош ауыр булды, бигерәк тә 1921 йылғы аслыҡта. Нимәләр генә ашап туҡланманыҡ беҙ ул йылдарҙа! Ат менән һыйырҙы һаҡларға тырыштыҡ, ә башҡа ваҡ малдарҙы ашап бөтөрҙөк. Йәй буйы урманға барып һарана, әтлек һ.б. тамыр ҡаҙып, үлән, еләк-емеш йыйып ҡайтып туҡландыҡ. Әсәйем ите ашалған һөйәкте ҡул тирмәненән үткәреп, майға бешереп, икмәк итеп тә ашатып ҡараны.. Ирәндек тауына барып, таш араһынан мышар[236] йыйып, һыуҙа ҡайнатып киптереп, ауыҙға алғыһыҙ әсене ашай инек. Кыш көнө һеңлем менән мине приютта – ашханала ашаттылар, бөтә йәтим

[236] Мышар – миләш.

һәм ас балалар менән бергә. Хөкүмәт ашатты. Уны "Америка" тип тә йөрөтәләр ине халыҡ телендә. Һеңлем, мин етәкләшеп барып ашап ҡайтабыҙ. Бер бал ҡалағы ваҡ шәкәр, бәләкәй генә аҡ икмәк һәм какао бирәләр ине. Эс күпкәнсе шәкәрһеҙ какаоҙы эсеп ҡайта инек. Ауыр булыуға ҡарамаҫтан, уҡыуҙы ташламаным. Үгәй атай ҙа уҡытырға бик тырышты. 1922 йылдың яҙында Темәстең беҙ йәшәгән Шырҙы йылғаһы яғындағы ауыл ҡарттары, әсәһе менән генә бик ауыр шарттарҙа йәшәгән Зөлҡәрнәйев Мөхитдин тигән малай менән мине, ауыл халҡының һыйыр малдарын көтөргә өгөтләй башланылар һәм көтөүгә ялландыҡ. Ауылдан 4-5 километр алыҫлыҡта Урал яғына Талашты йылғаһы буйына алып барып, көҙгә тиклем һыйыр көттөк. Беҙҙең өсөн был бик файҙалы булып сыҡты. Йылға бәрҙе балығына бай ине. Йылғаға 3-4 урынға морҙа һалдыҡ. Иртәнсәк беҙ барыуға күп кенә балыҡ төшә. Көнөнә өс мәртәбә ала инек балыҡты морҙанан. Һыуға бешереп, туйғансы ашай башланыҡ. Ә һуңыраҡ йыуаш ҡына һыйырҙарҙы аҙлап-аҙлап ҡына һауып, балыҡты тик һөткә генә бешереп ашайбыҙ ҙа һуңынан күтәреп ҡайнаған һөттө эсәбеҙ. Хәл китте бит рәтләнеп! Йәй буйы таҙарып алдыҡ. Балыҡтан тыш, төрлө үләндәр ашай инек. Артҡан балыҡты өйгә алып ҡайтабыҙ...

1922 йылдың көҙөндә иген бик яҡшы уңды. Кешенең күҙе асылды, шатлыҡ килде илгә.

1924 йыл пионерға алдылар, беренсе ҡыҙыл галстук таҡтылар һәм 1 Май байрамында беренсе мәртәбә демонстрацияға сығып, Хөрриәт ҡапҡаһынан үттек.

1925 йылдың көҙөндә Темәс ауылында башҡорт милләтенән булған ярлы һәм батрак балалары өсөн дүрт йыллыҡ башланғыс кластар уҡытыусылары әҙерләү мәктәбе асылды. Педагогик уклондағы икенсе баҫҡыс мәктәбе тип атанылар. Тулыһынса хөкүмәт иҫәбенән ине: бер иш кейендерҙеләр, ашаттылар, дөйөм ятаҡта йәшәнек. Ҡыш уҡыным, йәйге айҙарҙа үгәй атайға ярҙамлаштым. Уның менән Уралға Бетәрә йылғаһы буйына барып, дегет яҡтыҡ, ҡороған ҡарағай ҡырҡып алып ҡайта инек. Дегет менән әрҙәнәне ағайым (үгәй атайҙы ағай тип йөрөтә инек) ялан яғына алып барып, урыҫтарға һатып, аҙыраҡ он, шәкәр, сәй алып ҡайта ине.

1926 йылда комсомолға индем. Шул йылдан башлап бик активлашып киткән булдым. Йәмәғәт эштәрендә әүҙем ҡатнаша башланым. Мәктәптең ячейка ағзаһы итеп, иптәштәр суды рәйесе итеп һайланылар. Мәктәптә генә түгел, комсомолдың ылыҫ[237] комитеты тарафынан да йомоштар бирелә ине (Тәмәстә ылыҫ ине, Йылайыр кантоны). Художестволы һәүәҫкәрҙә актив ҡатнаштым. Темәс халҡы өсөн генә түгел, ә тирә-яҡтағы ауылдарға ла барып спектакль, концерт күрһәтеп, доклад һөйләп, йәнле гәзит ойоштороп йөрөнөк. Төп тема – партия һәм хөкүмәттең сәйәсәтен аңлатыу, яңылыҡҡа өгөтләү, синфи дошманды һәм муллаларҙы фаш итеү булды. Был өлкәлә комсомол ҙур эш башҡара ине.

1927 – 1928 йылдарҙың йәйендә кулактарға бесән сабырға малайлыҡҡа ялланып эшләп, ғаиләгә ярҙам итә инем. Ә көҙ көнө ялан яғында Иҫке Сибай ауылы байҙарына ялланып ураҡ урып, иген алып ҡайтырға тура килә ине, ә ҡышҡыһын – уҡыу.

1928 йылдың ҡышынан башлап ауылдарҙа тәүге ауыл хужалығы әртилдәре (товариществолар) төҙөү башланды. Партияның ылыҫ комитеты ауыл советы һайын

[237] Ылыҫ – урыҫса волость.

берәр коммунисты уполнамус итеп ебәрҙе. Комсомолдың ылыҫ комитеты уларға ярҙамға берәр комсомолец билдәләне. Коммунистар етешмәү сәбәпле булһа кәрәк, иң актив комсомолецтарҙан бер-нисә кешене партияның ылыҫ комитетының яуаплы уполнамустары итеп билдәләнеләр (беҙҙең мәктәптән алты кеше), шулар араһында мин дә бар инем. Миңә ярҙамға һабаҡташым Ғәзизов Ҡәүиҙе беркеттеләр. Волкомда инструктаж алғас, 1928 йылдың ноябрендә Ғәзизов менән мин Әбделмәмбәт ауыл советына киттек. Ул советҡа 5-6 ауыл (Әбделмәмбәт, Мәхмүт, Хөсәйен, Ҡалмаҡ һ.б.) ҡарай ине, хәҙер улар Әбйәлил районында.

Башлап әртил төҙөүе еңел булманы. Ауыл һайын йөрөп йыйылыш үткәрәбеҙ, халыҡҡа аңлатабыҙ, өгөтләйбеҙ. Ярлылар комитеты һ.б. активтар менән бергәләп эш иттек. Өс кешене комсомолға ылыҡтырҙыҡ, беҙҙең менән бишәү булды – ҙур яугир йәҙрә. Ярлылар һәм батрактар ғариза биреп әртилгә инә башланылар. Ауыл һайын, ваҡ булһа ла, бригадалар барлыҡҡа килде. Беренсе колхозға – ауыл хужалығы әртиленә -- “Ударник” исеме бирҙек. Әммә эш ауырлаша барҙы – кулактар ҡаты ҡаршылыҡ күрһәтте. Шулар ҡотҡоһона бирелеп, ҡайһы берәүҙәр әртилдән бер сығып, бер инеп йөрөнө. Беҙ ҙә эште көсәйтә төштөк. Бер көн кулак малайҙары Ғәзизов Ҡәүиҙе саҡ-саҡ үлтермәнеләр, тиҙ генә белеп ҡалып ҡотҡарҙыҡ. Ауырлыҡтарға ҡарамаҫтан, беҙ, 17 йәшлек комсомолец егеттәр, колхоз төҙөп ҡайттыҡ. Ул ауылдар хәҙер бригада һанала, Киров колхозына ҡарай (ул ауылдарҙа осрашыуҙарҙа булғаным бар).

1929 йыл дәүләт имтихандары тапшырып, аттестат алдыҡ. Шул йылдың көҙөндә волком беҙҙең мәктәпте бөтөүсе иң актив комсомолецтарҙан биш кешене (Ушанов Ш., Дияров К., Мәүлетколов Х., Хәлисова С. һәм мин) Өфөгә пединститутҡа уҡырға юлландырҙы. Бер курс бөткәс, уҡыуҙы ташларға мәжбүр булдым. Сөнки 1930 йылдың яҙында ауылыбыҙҙың 40 өйө янып киткән, шул иҫәптән беҙҙеке лә. Әсәй илай: “Китмә, эшлә, ағайыңа ярҙам ит!”

Уҡырға бара алманым.

1930 йылдың авгусында Баймаҡ районы Мостай ауылына уҡытыусы итеп ебәрҙеләр. Юҡ урында мәктәп астым, ябай ғына парталар һ.б. эшләп, уҡыта башланым. Көндөҙ балаларҙы, ә кисен өлкән йәштәге наҙандарҙы уҡытам. Комсомол ячейкаһы ла ойошторҙоҡ.

Кулактарға ҡаршы киҫкен көрәш барҙы. Төндәрҙә колхоз байлығын һаҡлау өсөн киҙеү ойоштора инек.

Шунда бер уҡыу йылы эшләгәс, 1931 йылдың авгусында мине Темәсемдең Терәк (Опорная) мәктәбенә уҡытыу бүлеге мөдире итеп күсерҙеләр, ике ауылға берәү ине ул вазифа. Терәк мәктәп башҡа күп кенә мәктәптәргә методик ярҙам күрһәтә ине. Эш уңышлы барған һымаҡ тойолдо. Район һәм район мәктәптәре менән бәйләнеш көсәйҙе. Йәмәғәт эштәренә лә ныҡ егелергә тура килде. Кулактарҙы фаш итеү, уларҙы һөрөү, мөлкәттәрен “торг”ка ҡуйып һатыу, колхоз милкен һаҡлау һ.б. эштәрҙең уртаһында ҡайнаным. Темәс ауыл советы ҡаршыһындағы халыҡ йәки иптәштәр суды рәйесе булдым (дөрөҫөрәк исеме иҫкә төшмәй). Налогын үҙ ваҡытында түләмәгән, иген орлоғо тапшырмаған һ.б. шундай гонаһтары өсөн кешеләрҙе саҡыртып алып хөкөм ҡыла инек.

Ҡайһы бер кулактарҙың ҡасып китеп йәшеренгән осраҡтары ла булды, уларҙы эҙләп тә табалар ине. Район ГПУ-һы мине лә бер-нисә иптәш менән Магнитогорскиға

таныш кулактарҙы табып килтерергә юлландырғаланы һәм табып килтергәләнек. 1932 йылдың йәйендә кулак ғаиләләрен Алыҫ Көнсығышҡа һөрөү башланды. Беҙҙең ауыл советына ҡарағандарын Сара тимер юл станцияһына алып барырға районда мине яуаплы итеп билдәләнеләр һәм тағы ла бер-нисә кеше (Буранғолов Фәхритдин, Ниғәмәтуллин Фазлыйәхмәт һ.б.) тәғәйенләнде. Темәс, Муллаҡай, II Этҡол ауыл советтарындағы ғаиләләрҙе арбаларға тейәп, станцияға килтереп еткерҙек. Ундағы көтөп торған ирҙәренә ҡушып, бөтәһен дә тимер юл буйынса Черемховаға оҙаттылар (һәр һигеҙ хужалыҡҡа бер егеүле ат, бер һабан, бер тырма һ.б. ҡорамалдар биреп ебәрелде).

1931/32 уҡыу йылында Темәс педучилищеһы эргәһендә алты айлыҡ башланғыс мәктәп-кластарға уҡытыусылар әҙерләү курстары асылды. Мин унда ла уҡыттым бераҙ. Үгәй атайҙы ла шул курстарҙа уҡытып сығарҙыҡ һәм ул 1933 йылдан 1942 йылда БВ һуғышына киткәненә тиклем уҡытыусы булып эшләне, һуғышта һәләк булды.

1931 йылдың көҙөндә мин өйләндем. Ҡатыным Ғиззәтуллина Биби Минһаж ҡыҙы шул уҡ Баймаҡ районының Юлыҡ ауылында тыуып үҫкән. Ул да атаһынан йәшләй – бала сағынан ҡалған, апалары аслыҡ йылдарында үлгән. Ул да әсәһе менән ауыр тормош шарттарында интеккән. Темәстә мин уҡыған мәктәпте бөттө, 27 йыл уҡытыусы булып эшләп, 50 йәшендә пенсияға сыҡты. (Һау булһаҡ, 1981 йылда уның менән бергә ғүмер иткәнгә 50 йыл, ә миңә 70 йәш тула).

1932 йылдың көҙөндә мине Ирәндек тауы аръяғына Татлыбайға күсерҙеләр, мәктәпкә уҡытыу бүлеге мөдире итеп. 14-15 ауылды берләштергән Төбәк берекмәһе методисы итеп тә билдәләнеләр. Татлыбайҙа ШКМ (школа крестьянской молодежи) һәм башланғыс мәктәп бар ине, йәмәғәтем менән шунда уҡыттым. Унда ла колхозды нығытыу эшендә ҡатнашырға тура килде.

1933 йылдың көҙөндә I Этҡол Үрнәк мәктәбенә (Образцовая школа) уҡытыу бүлеге мөдире итеп күсерҙеләр, ул мәктәп районның методик үҙәге булып һаналды, юғарынан методик материалдар шул мәктәп исеменә килә ине. Уҡытыусыларҙың район конференциялары, семинарҙар, йыйылыштарҙы шунда үткәрҙек.

Уҡыу йылы тамамланыу менән мине Мәскәүгә өс айлыҡ инспекторҙар әҙерләү курстарына ебәрҙеләр (Мәғариф наркомы Бубнов ине). Уҡып ҡайтҡас, Баймаҡ РОНО-һына мәктәптәр инспекторы итеп алдылар. 1938 йылға тиклем – инспектор, шунан һуң 1941 йыл БВ һуғышына киткәнемсә РОНО мөдире булып эшләнем, 1939 йыл партияға алындым. Шулай булһа ла, БВ һуғышына барғанға тиклем комсомолда торҙом, сөнки даими комсомолдың район комитеты пленумы һәм бюро ағзаһы инем. (Һуғышта һәм армияла булған осор Һеҙгә билдәле).

БВ һуғышынан ҡайтҡас, 1944 йылдың сентябренән 1945 йылға тиклем ВКП(б) Баймаҡ райкомының хәрби бүлек мөдире булып торҙом. Ике ҡултыҡ таяғы менән командировкаларға йөрөүе ауыр ине, РОНО-ға күсерҙеләр һәм унда 1947 йылдың майынаса эшләнем дә Түбә ҡасабаһындағы 2-нсе һанлы башҡорт урта мәктәбенә директор булып киттем, 1963 йылдың июленә тиклем шунда эшләнем.

Эш бик ауыр булды. Мәктәп матди-хужалыҡ һәм башҡа яҡтан да бик туҙған-емерелгән ине. Һуғыш башланғандан алып миңә тиклем ете директор алмашынған. Күп көс һалырға тура килде. Күп йылдар эшләү һөҙөмтәһендә коллектив ҙур ғына уңыштарға өлгәште: яҡшы кадрҙар тупланды; мәктәп матди-техник яҡтан нығынды;

ҙур ғына емеш-еләк, йәшелсә баҡсаһы барлыҡҡа килде; хеҙмәт тәрбиәһе көсәйҙе; районда һәм республикала беренселәрҙән булып мәктәп 100% өлгәшеү бирҙе. Юғарынан комиссиялар, делегациялар, корреспонденттар килде, уҡытыусылар йыйынында беҙгә арналған ҙур ғына күргәҙмә ойошторолдо. Партия һәм хөкүмәт беҙҙең тырыш хеҙмәтте юғары баһалай барҙы. Мәҫәлән, миңә 1952 йылда Халыҡ мәғарифы отличнигы исеме, 1954 йылда Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы, 1957 йылда РСФСР-ҙың атҡаҙанған уҡытыусыһы исеме бирҙеләр. 1960 йылда уҡытыусыларҙың Бөтә Рәсәй йыйынына делегат итеп һайланылар. Унда – Кремлдә -- мине Ленин ордены һәм Ушинский миҙалы менән бүләкләнеләр. Башҡортостан уҡытыусылар йыйындарының алтыһында ла ҡатнаштым. Мәктәбебеҙҙә тағы ла бер-нисә кешенең хеҙмәте юғары баһаланды.

Сибай педучилищеһын ойоштороу һәм унда эшләү өсөн 1963 йылдың июлендә мине директор итеп билдәләнеләр. Хатта бер генә бүлмә лә бүленмәгәйне училище өсөн, ә уҡыу йылын башлап ебәрергә кәрәк...

Райондарҙан тиҙ генә уҡыусылар ҡабул итеп, сентябрҙә уҡыу башлап ебәрҙек. Бина булмау сәбәпле, училище ике йыл буйына “квартирант” булып йөрөнө. Шунан һуң ғына бер бәләкәй иҫке мәктәп йортон бирҙеләр, өс смена эшләнек. Хөкүмәттән юллап йөрөй торғас, өс ҡатлы яңы уҡыу йорто, спортзал, 240 кешелек оҫтахана төҙөлдө; 360 кешелек биш ҡатлы дөйөм ятаҡ һалына башланы; матди-техник база нығый барҙы; коллектив яҡшы педагогтар менән тулыландырылды.

1966 йылда, йәғни 55 йәшемдән (БВ һуғышы II төркөм инвалиды) миңә РСФСР-ҙың персональ пенсияһы билдәләнде. Шулай булһа ла эшләнем, тик 1972 йылдың ноябрендә генә хаҡлы ялға сыҡтым.

Түбә мәктәбендә эшләгәндә йыл һайын поссовет депутаты булып, Сибайҙа эшләгәндә ҡала советы депутаты, партияның ҡала комитеты ағзаһы булып һайлана килдем.

Пенсияла булһам да, йәмәғәт эштәренән айырылғаным юҡ. Лекциялар уҡыйым, йыш ҡына осрашыуҙарҙа булам, БАССР Мәғариф министерствоһының штаттан тыш инспекторы һәм партияның ҡала комитеты мәктәп бүлегенең штаттан тыш ағзаһы булараҡ, күп кенә эштәр башҡарырға тура килә.

Алты бала үҫтерҙек -- өс малай, өс ҡыҙ. Ләкин бәләкәй улыбыҙ ҡапыл ауырып, 1967 йылда 25 йәшендә үлеп китте, ауыр ҡайғыға һалды. Бер ҡыҙ һәм малайҙар Сибайҙа тора. Ҡыҙ күп йылдар Башҡорт баҡыр-көкөрт комбинатында, малай “Башмедстрой” тресында эшләй, урта техник белемлеләр. Ике ҡыҙым Өфөлә тормошта. Береһе БДУ бөтөп, инглиз теленән уҡыта. Ире хәрби заводта өлкән конструктор-инженер, шунда партком секретары. Икенсе ҡыҙым авиаинститутты бөтөп, хәрби заводта инженер-конструктор, ә иптәше авиаинститутта уҡыта.

Үҙемдең Ленин һәм дүрт яугир ордендарым, 13 яугир, хеҙмәт һәм юбилей миҙалдарым һәм күп кенә төрлө Хөрмәт грамоталарым бар.

Хеҙмәт стажым 42 йыл, партия стажым – 40, белемем юғары.

Б. Мәмбәтҡолов.

12 апрель 1980 йыл.

Онотолмаҫ йылдар. Һуғыш.

Фашистик Германияны тар-мар ҡылыуға күп йылдар үтһә лә, һуғыш яралары хәтерҙән сыҡмай.

1941 йылдың ноябренән Башҡорт атлы дивизияһы төҙөлә башлай. Ул тулыһынса республикабыҙҙың үҙ сарыфтарынан төҙөлә. Ошо айҡанлы округтарҙан, хатта фронттарҙан элекке кавалерия командирҙарын саҡырырға рөхсәт ителә.

1941 йылдың авгусында уҡ мине фронтҡа оҙатып ҡалдылар. Атлы артиллерияға барып эләктем. Сөнки, кавалерист булһам да, Фин һуғышында разведчиктарҙың атлы артиллерияһында взвод командиры булыуым сәбәпле, артиллерияға тәғәйенләнеләр. Унда батарея менән командалыҡ иттем.

Һүр. 20. Б.М. Мәмбәтҡолов.

Фронт, 1942

Ләкин шул 1941 йылдың ноябрь аҙағында мине бик ашығыс Өфөгә ебәрҙеләр һәм 28 ноябрҙә Өфөлә булдым. Башвоенкоматта эштең нимәлә икәнен аңлаттылар һәм, ҡулға документ тоттороп, һис кисекмәҫтән дивизия төҙөлөү урынына китергә, уны төҙөү эшендә ҡатнашырға бойороҡ бирҙеләр. Ике генә көнгә ҡайтып ғаиләмде күрергә һораһам да, рөхсәт булманы. 29-ынсы ноябргә ҡараған төндә Дим станцияһында булдым, ә штаб кешеләре, медицина, мандат комиссиялары һ.б. иптәштәр күптән үк бында инеләр. 1 декабрҙә райондарҙан яҡшы кейенеп егеттәр, яҡшы аттар, обоздар, аҙыҡ-түлек һәм комсостав килә башланы. Көн-төн, тип әйтерлек, эшләгән медицина һәм мандат комиссияларынан үткәреп, егеттәрҙе полктарға бүлеп, полктар урынлашҡан ауылдарға оҙата торҙоҡ. Аттарҙы ла төҫөнә ҡарап бүлдек полктарға. Кешеләр ҙә, аттар ҙа төрлө райондарҙан төрлөсә килә ине. Ул көндә ауылға барғанда берәүҙәре атҡа атланһа, икенселәре уларға эйәреп, ат эҙенән йәйәү көрт йырып китәләр (ул йылда ҡар ҡалын бурап, еле көслө һәм һыуыҡ булды). Аттар күп килеп, кешеләр аҙ булған көндәрҙә бер кеше атҡа атлана ла ҡалғандарын бер-береһенең ҡойроғона тағып оҙата инек. Эш бик ҡыҙыу барҙы. Райондарҙан иң яҡшы егеттәр килеүенә ҡарамаҫтан, медицина һәм мандат комиссиялары уғата ныҡыраҡ һайлап, тикшереп үткәрҙе. Медицина комиссияһы егеттәрҙең һаулығын, таҙалығын ҡараһа, мандат комиссияһы уларҙың социаль сығышын һәм әхләҡи яғын тикшерҙе. Һөҙөмтәлә ҡайһы берәүҙәр хатта кире ҡайтарылды. Комиссия штаб йортоноң өҫкө ҡатында эшләне (тимер юлсылар клубы). Комиссия эшен тиҙләтер өсөн, ҡаралыусыларҙы алдан уҡ сисендереп, коридор буйлатып баҫтыртып ҡуя инек. Медицина комиссияһын үткәс тә, тиҙ генә кейенеп, мандат комиссияһы ҡаршыһына барып баҫалар. Мәҫәлән, 14 декабрҙә Баймаҡ районынан 208 кеше ҡабул иттек, комиссиянан һуң 17 кеше кире ҡайтарылды. Яңы килгән егеттәр клубтың аҫҡы ҡатында урынлаштырылды, комиссия үткәнсе. Унда ҙур залда өс ҡат нарҙар эшләнде.

Һүҙ ыңғайында шуны ла әйтеп үтергә кәрәк: Баймаҡ районынан килгән егеттәр дивизия комиссары Мөбәрәк Нәзировҡа шул райондағы 46-нсы конезаводтан ҙур булмаған, ләкин бик сос бер һары ат, ә миңә шул уҡ райондың Богачевка колхозынан бик шәп бер саптар айғыр килтереп бүләк иттеләр. Ләкин беҙҙең

БАШКОРТОСТАН АССР ВЕРХОВНЫЙ СОВЕТЫ ПРЕЗИДИУМЫНЫҢ УКАЗЫ

112-се Башҡорт кавалерия дивизияһына Башкортостан АССР Верховный Советы Президиумының байрағын тапшырыу тураһында.

112-се Башҡорт кавалерия дивизияһына Башҡортостан Автономиялы Совет Социалистик Республикаһы Верховный Советы Президиумының байрағын тапшырырға.

Башкортостан АССР Верховный Советы
Президиумының Председателе **Р. Ибраһимов,**
Башкортостан АССР Верховный Советы
Президиумының Секретары **М, Вальшин.**
Өфө ҡалаһы, 22 март 1942 йыл.

1-енсе полкта (Т. Кусимов полкы) гел генә, бөтәһе лә ерән дә көрән ат булды. Шуға күрә лә штаб кешеләре минең айғырҙы тарта ла алалар ине. Шуны белеп ҡалған М.М. Шайморатов кире ҡайтарып бирергә ҡуша ине. Шулай итеп, ул айғыр менән мин фронтҡа киттем һәм үҙем фронтты ҡалдырғанға тиклем унан айырылманым.

Килгән яугирҙәр менән шунда уҡ ҡыҙыу яугир әҙерлек башланып китте. Килгән бер командир уларҙы өйрәтә башланы. Әҙерлек бик ныҡышмалы алып барылды. Булған хәтһеҙ ауырлыҡтар ҙа тотҡарлыҡ итмәне, уларҙы ла еңделәр. Һуғышҡа киткәнсә, тип әйтерлек, яугир утлы ҡорал булманы, бигерәк тә тәүге осорҙа. Тик ул әҙерлекте туҡтатманы. Егеттәр ағас мылтыҡ, ҡылыс, пулемет, хатта арба тәгәрмәсенә нығытылған пушкалар эшләп, эйәрһеҙ аттарға атланып, бер-нисә тиҫтә километрҙар үтеп, һуғыш һөнәренә өйрәнәләр ине. Уларға яйҙаҡ (эйәрһеҙ) атланған килеш тиҫтәләгән саҡрымдар йөрөп ҡайтыуҙары бик еңелдән булманы. Шуның өҫтәүенә яланға сығып киткәндә аттарын тейешле барьерҙарҙан ырғыттыртып китәләр, ә инде йөрөп, арып ҡайтҡас та, тағы ла ырғыттыртып үтәләр ине. Ҡайһы берәүҙәр ултыра алмай йығылып та төшә.

Командный состав та ырай башланы. Полк командирҙарынан Таһир Кусимов, Маҡаев, Нафиҡовтар, комиссарҙар һ.б. командирҙар, политработниктар килде. Әммә бүлексәләр командирҙары араһында пехотанан килеүселәр ҙә бар ине. Беҙҙең 1-енсе полкка иң алда комиссар булып Сәғит Әлибаев килде. Званиеһы батальон комиссары ине. Ул килгәндә мин комиссия эшендә инем. Бер көн өҫкө ҡатта шул ғәм менән йөрөгәндә Сәғит Әлибаев минең алға килеп баҫты ла, мәрәкәләптер инде, ҡулын маңлайына ҡуйып: "Иптәш лейтенант, батальон комиссары һеҙҙең ҡарамаҡҡа килде, -- тине лә -- минең штаб ҡайҙа булыр?" – тип һораны (ул мине электән яҡшы белә ине). Уның менән аҫҡы ҡаттағы залға төштөк тә, юлдан арып килеп йоҡлап ятҡан яугирҙәрҙе аша баҫып, бер ҡыҫыҡ мөйөшкә барғас: "Ошо була һеҙҙең штаб, ә бына боецтар", -- тинем. Ул көлөп: "Миңә боецтар булғас – булды", -- тине лә эшкә тотондо.

Дивизия нигеҙҙә төҙөлөп бөткәс тә (22 көн эсендә!), 1-енсе полктың полк батареяһы командиры итеп күсерҙеләр мине, ә һуңыраҡ, кавалерист командирҙар етешмәүе сәбәпле, эскадрон командиры итеп билдәләнеләр һәм фронттан ҡайтҡансы мин эскадрон менән командалыҡ иттем.

Һуңынан Таһир Кусимов килде. Ул бөтә полкты йөрөп ҡарап сыҡты һәм ҡабул итте. Ул саҡта мин эскадронда инем. Полк командирын беренсе күреүҙә үк ул беҙҙә тәрән һәм иң яҡшы тәьҫир ҡалдырҙы. Уны күргәс тә командирҙар һәм яугирҙәр: “Бына был, исмаһам, командир тиһәң дә командир, бының менән хур булмабыҙ!” – тип үҙ-ара һөйләшеп тә алдылар. Ысынлап та уның хәрби белемле, оҫта-етеҙ командир булыуы асыҡ күренеп һәм һиҙелеп тора ине. Былар барыһы ла һуғыш осоронда асыҡландылар.

Командный составты ат уйынына һәм атта йөрөргә өйрәтеү ифрат та ҡыҙыу барҙы. Күбеһе пехотанан килделәр бит. Уларҙы өйрәтеүҙе Кусимовҡа тапшырҙылар. Тынғы бирмәне, тиҙ өйрәтте уларҙы. Өҙәнгеһеҙ, йәғни өҙәнгегә баҫмайынса өйрәнгәндә ҡайһы берәүҙәр, ултыра алмайынса, аттан ҡолап та төшәләр, ләкин Таһирҙың оҙон сыбыртҡыһы атҡа туҡтарға ирек бирмәй, командир иһә йүгереп барып атына һикереп менеп ултырырға мәжбүр була. Тиҙ өйрәнерһең шул!

Мәҫәлән, полк комиссары Сәғит Әлибаев та бала саҡтан һыбай йөрөргә өйрәнмәгән. Полк командиры Кусимов үҙ комиссарына етеҙ аттар бирергә тырышты, ләкин Әлибаев тыныс, баҫалҡы ат менән йөрөргә теләне. Әҙерлектең тәүге осорҙарында бүлексәгә килгәнендә Әлибаевҡа атынан төшөргә, ә киткәндә атланырға ярҙам итә инек. Атлы комиссар булыуы шулай башланды уның. Күп тә үтмәне, ул һыбай етеҙ йөрөргә, уның өҫтөнлөктәрен өйрәнеп өлгөрҙө һәм үҙе лә башҡаларға өйрәтәбашланы. Ә инде фронтҡа барғанда ул ат өҫтөндә осҡон һымаҡ осто һәм күҙ асып йомғансы теләгән еренә барып етте. Уҫал, етеҙ аттар уға ла күберәк кәрәк булды. Ә инде Таһирҙың ат танып белеү оҫталығына беҙ кавалерист командирҙар ҙа аптырап ҡала инек. Алыҫтан уҡ китеп барған күп аттарға ҡарап тора ла, араһынан береһенә таяғын тоҫҡап: “Ана яҡшы ат, командир аты, ал шуны үҙеңә”, -- тип әйтер ине һәм дөрөҫ булып сыға.

ГРАМОТА

Президиум Верховного Совета Башкирской АССР, вручая от имени башкирского народа знамя 112-й Башкирской кавалерийской дивизии, уверен, что дивизия на полях борьбы с немецкими оккупантами оправдает доверие башкирского народа и правительства Башкирии.

Личный состав дивизии должен драться не жалея сил, энергии, крови и самой жизни с тем, чтобы полностью выполнить приказы Командовании, правительства Союза Советских Социалистических Республик и Народного Комиссара Обороны, любимого вождя, гениального полководца товарища Сталина.

На полях великой отечественной войны, плечом к плечу с русскими, украинцами, белоруссами, узбеками, казахами и бойцами всех других народов страны Советов, отстаивают и защищают свою родину, беспощадно бьют врага доблестные сыны башкирского народа.

Товарищи бойцы, командиры, комиссары и политработники! Правительство Башкирии уверено в том, что 112-я Башкирская кавалерийская дивизия вместе с другими частями славной Красной Армии очистят нашу священную землю от немецких оккупантов и обеспечат полную победу над фашистской бандой.

Смерть немецким оккупантам!

Президиум Верховного Совета Башкирской АССР.
г. Уфа, 22 марта 1942 года.

Һүр. 21. Дивизияға Байраҡ тапшырыу. Һулдан уңға: дивизия командиры М.М. Шайморатов, БАССР Верховный Советы Президиумы Председателе Р. Ибраһимов. Дим станцияһы, 1942 йыл.

Ат ярыштары һәм башҡа төрлө ярыштар ҙа күп үткәрелде полктарҙа һәм дивизияла. Улар барыһы ла яугирҙәрҙе һуғыш шарттарына күнектерергә һәм физик яҡтан сынығырға ярҙам итте. Бик ауыр ярыштар ҙа бар ине. Мәҫәлән, саңғыға баҫҡан килеш шәп сапҡан ат артынан бауға йәбешеп соҡор-саҡыр, урмандан бер-нисә километр араны үтеүҙәре еңелдән түгел ине. Ләкин былар барыһы ла беҙҙең яусыл әҙерлекте нығытты. Хәрби округтан килгән комиссия быны тикшереп, фронтҡа оҙатырға мөмкин тигән һығымта яһаны һәм ҡыҫҡа ваҡыт эсендә беҙҙең дивизия яугир хәрби берәмек булып өлгөрөп етте.

Фронтҡа китеребеҙҙән алда дивизияға Башҡорт АССР-ы Верховный Советының яусыл байрағын тапшырҙылар. Онотолмаҫ ул көн ҙур байрам һәм тантана булып үтте. Республикабыҙ етәкселәре, эшсе, колхозсылар вәкилдәре ҡатнашты. Был тантанала халҡыбыҙҙың наказдары, яҡшы теләктәре һәм ышаныстары әйтелде, ә инде беҙҙең өсөн был көн халҡыбыҙҙың изге наказдарын намыҫ менән үтәрбеҙ тигән ант итеү менән осланды.

Байраҡ тапшырыу тантанаһынан һуң дивизия яугирҙәренең парады булды, шунан һуң төрлө ярыштар үткәрелде: ат ырғылдыртыу, ҡылыс менән сабыу һ.б. Командирҙар ярышында беренселекте, ярыштарҙың һәр төрөндә лә, Таһир Кусимов яуланы, тип әйтерлек. Ул бик юғары оҫталыҡ күрһәтте. 2-нсе полк командиры Нафиҡовтың ярышта етеҙлеге, оҫталығы хәтерҙә ҡалған. Был ярыштарҙа ла элек бик һирәк осрай торған ауыр, ҡыйын шарттар ҡуйылғайны. Мәҫәлән, ҡарҙы һепереп, ер өҫтөнә биш тинлей аҡса һалынған. Ярышыусы шәп сабып барған аты өҫтөнән эйелеп шул аҡсаны алып китергә тейеш. Уны ла тик Кусимов һәм мин алдым.

Фронтҡа китер ваҡыт яҡынлашты. Көн-төн, тип әйтерлек, ҡыҙыу әҙерлек бара. Личный составты, аттарҙы һәм башҡа нәмәләрҙе ныҡлап барланыҡ. Китер көн дә килеп етте.

Беҙҙең полк беренсе эшелонда юлланырға тейеш. Эшелон да бирелде. Аттарҙы вагондарға индереп урынлаштырҙыҡ. Был еңелдән түгел ине. Сөнки аттар ярһыу, бер ваҡытта ла вагон күрмәгәндәр, ҡараңғы, тар вагондарға керергә бик ынтылып тормайҙар ине. Ҡойроҡтарын сепрәк менән сорнап ҡуйҙыҡ – юлда өйкәлеп, ҡырылып бөтмәһен өсөн. Тейешле аҙыҡ һ.б. нәмәләрҙе әҙерләнек. Төйөклө (тюклы) бесәнде асыҡ платформаға тейәнек. Эшелон ҡуҙғалып китте. Хуш, Башҡортостан! Станциялағы халыҡ беҙҙе йылы оҙатып ҡалды.

Полк командирҙары Кусимов та, Әлибаев та һис тынғы бирмәнеләр, өҙлөкһөҙ һәм бер-бер артлы тикшереп барҙылар.

Брянск фронтына 8-енсе кавалерия корпусина барып ҡушылдыҡ. Башта Тула өлкәһе Каменск районында туҡтаныҡ. Мин үҙемдең 2-нсе эскадрон менән Ситово ауылында торҙом. Полк штабы ла шунда урынлашты. Фронт һыҙығы алыҫ түгел. Хәрби техника һәм ҡорал алдыҡ, уны ҡыҙыулатып өйрәнеү башланды.

Окоптар, траншеялар ҡаҙыныҡ һәм тактик өйрәнеүҙәр үткәрҙек. Бигерәк тә яугирҙәрҙе мәргән атырға өйрәтеүгә ныҡлы иғтибар бирелде. Сөнки күбеһе утлы ҡорал менән эш иткәне юҡ, тип әйтерлек. Шулай итеп ике ай буйына хәрби техника үҙләштереүҙе һәм тактик өйрәнеүҙәр үткәреүҙе дауамланыҡ.

Хәрәкәттәге армия шарттарында 600 километрлыҡ марш үтеп, Олым йылғаһы буйындағы Борки ауылы янына килеп туҡтаныҡ. Ул элекке Курск өлкәһе Тербуны районына инә ине. Беренсе ҡаты һуғыш ошонда башланды ла инде.

Беҙҙән алыҫ түгел йылға аръяғына дошман урынлашҡан. Июль башынан алып улар беҙҙе атакалай башланы, беҙҙе ҡыйратып тылға үтергә маташтылар. Егеттәр һынатмай, ныҡ тора, ҡыйыу һуғышалар, ә дошман артиллерия һәм минометтан өҙлөкһөҙ яуҙыра ғына, араһында самолеттары тынғы бирмәй. Беҙҙең полк уң яҡ флангыла тора, оборона һыҙығы оҙон – 8-9 километр.

Минең эскадрон полктың уң флангыһында оборона тотто. Был бик яулы һәм ҡурҡыныс тәңгәл ине. Сөнки беҙҙән уңдараҡ урынлашҡан башҡа ғәскәрҙәр менән ике арала бушлыҡ бар. Дошман шундай урынға ташланыусан була.

Олым йылғаһы буйындағы һуғышта беҙҙең дивизия яугирҙәре беренсе ҡаты һынауҙы үтеп сирҡаныс алдылар һәм ҙур көс, өмөт менән килгән немец илбаҫарҙарының һөжүмен туҡтатып данландылар, фронтта ҙур ышаныс ҡаҙандылар. Дошман ғәскәре бер-нисә тапҡыр йылға аша сығып, беҙҙең оборонаны өҙөргә маташып ҡараны, ләкин барып сыҡманы.

Беҙгә ҡаршы һөжүм итеү өсөн немец ғәскәренә уңайлы тәбиғи шарттар ҙа бар ине. Арыштың буйға оҙон үҫкән ваҡыты. Ҡайһы бер үҙәгерәк, уйһыуыраҡ урындарҙа хатта һыбайлы күренмәй. Фашистар шунан файҙаланып, күп ваҡыт арыш араһынан дөрҙө, тылға ла үтеп кергән осраҡтары булды. Бынан тыш, йылғаның беҙ билəгән яғы һирәк туғайлыҡ, тигеҙ ер һәм асыҡ ялан булды, ә дошман биләгән яҡтың ярҙары бейек, суҡай-суҡай күбәташ та һаҙлыҡ – улар өсөн уңайлы шарттар ине. Ләкин арыштың оҙон һабаҡлы булыуы дошман тылына инеү өсөн беҙгә лә бик ҡулайлы.

6 июлгә ҡараған төндә гитлерсылар үҙҙәре һалған күперҙән сығып, беҙҙең позицияны алырға ныҡыштылар. Бер төндә 3-4 тапҡыр атакаланылар, артиллерия һәм минометтан көслө ут яуҙыралар. Беҙҙең полкка ауырлыҡ төшә, штабҡа ҡурҡыныс килә. Дошман йылғаны уҙып, туғайға урынлаша. Ул арала айырым бүлексәләребеҙ (3-өнсө эскадрон, артиллерия) артҡа сигенеп өлгөрәләр. Уларҙы

кире бороу сараһы күрелә, ә Кусимов үҙе бөтә көстө, хатта штаб кешеләрен алып дошманға ҡаршы ҡаһармандарса һуғыша башлай.

Беҙҙең эскадрон егеттәре үҙҙәре билгән алғы һыҙыҡта дошман яғына тоҫҡалып, бөтәһенә әҙер рәүештә, ырғылырға бойороҡ көтөп яталар. Мин телефондан китмәйем. Таңға яҡын Кусимов бик көслө, ҡабалан тауыш менән ҡысҡыра: “Эскадроның менән йәһәт йылғаны аша сығып, Сирикиноны уратып үтеп дошман тылына керегеҙ ҙә беҙҙең ҡаршылағы дошманды тылынан атакала, бында һуғыш көслө бара, дошмандың умыртҡаһына ҡаты бир!” – тине. Тиҙ генә күтәрелеп, Сирикино утары ҡаршыһындағы кисеүгә ташландыҡ, йылға буйлап дошман снарядтары, миналары яуып торҙо. Коновод менән мин ат өҫтөндә, ҡалғандарыбыҙ йәйәү. Ни булһа ла булыр, тип, егеттәрҙе рухландырыу маҡсатында йылғаны иң алдан һыбай сығып, яр башына күтәрелгәйнем, ауылдан немецтар миңә тоҫҡап атып та ебәрҙеләр. Ырғып төшөп, коновод менән атты һаҙға ышыҡлаттым, ә үҙем яр ҡырыйында ятҡан килеш артҡа әйләнеп ҡараһам, яугирҙәрем кисеүҙе йәйәүләп кисеп сығып ярға ынтылып киләләр, иң алда минең политрук Сөнәғәт Әхмәтов йүгерә (Туймазы районы Чуҡадыбаштан, Сталинград һуғышында һәләк булды). Был ни хәл! – йылғаның арғы яры башында һыбай, яланбаш, муйынына автоматын аҫҡан, ҡара көйгән, йөҙөнә асыу сыҡҡан Кусимов ҡайҡайып тора, эргәһендә коноводы Абдуллин Фитрат (Сибай ҡалаһынан). Полк командиры беҙҙең хәрәкәтте шәхсәнә үҙе күҙәтеү һәм тиҙләтеү өсөн килгәндер. Кусимов ҡул болғап: “Һин ниңә ат өҫтөндә дошман ауыҙына инеп бараһың, был һиңә Чапаев осоро түгел бит!” – тип ҡысҡырҙы. Ә мин уның шундай ҡуйы ут эсендә яр башында тороуына ғәжәп ҡалдым һәм: “Һин дә Чапаев түгел бит, йәһәт бынан китегеҙ, беҙ үҙебеҙ ҙә дошмандың кәрәгенә бирербеҙ!” – тип яуаплауым булды, ул күҙ асып йомғансы юҡ булды – үҙән буйлап сабып китте.

Беҙҙе был яҡтан көтмәгән фашистар ауылды ташлап, йылға буйлап, үҙҙәренең төп көсө яғына ҡастылар, ә беҙ, ауылды уратып үтеп, бейек арыш араһынан дошман тылына кереп тә киттек. Ауыл янына еткәс, биноклдән йылға аша үҙебеҙҙең штаб яғына ҡараһам, унда йылға аша сығып тулған немецтарҙы күрҙем һәм уларға тылдарынан ут асырға ҡарар иттем. Политрук Әхмәтов эскадронды арыш араһына алып китте. Мин ике пулеметсыны яр башына бер уңайлы урынға һалдым да туғайҙағы немецтарға тоҫҡап ут асырға бойорҙом һәм шулай булды ла. Тылдан көтмәгәндә яуҙырылған пулә дошмандың ҡотон алды, улар, ни эшләргә лә белмәй, кирегә әйләнеп үҙ күперҙәренә йүгерҙеләр; һарыҡ көтөүе һымаҡ бер-береһен төртөшөп, күпергә ташландылар. Пулеметсыларым инде тик күпер өҫтөнә генә һиптерҙеләр. Күп кенә фашист һалдаттары Олым йылғаһында үҙҙәренә тыныслыҡ тапты.

Дошман тылында беҙ арыш араһынан бер үҙәккә яҡынлашҡанда, үҙәк буйлап йылғаға табан һуҙылған бер батальон самаһы фашистарҙың тегеләренә өҫтәлмә көс булып килгәнен күрҙек тә арыш араһында тыныс ҡына һағалап яттыҡ. Һис тауышланмаҫҡа, ҡуҙғалмаҫҡа, ҡоралдарҙы һәм берәр граната әҙерләп команда көтөргә, тип бойорҙом. Улар һис хәүефләнмәй, тыныс ҡына киләләр ине. Үҙҙәренең тылында арыш араһында Салауат тоҡомдары ята тип нисек уйларға мөмкин һуң?..

Алдан килгән офицерҙары ла, йылмайышып-көлөшөп, сигареттарын тартып ғәмһеҙ генә атлайҙар. “Килә биргеҙ, көлкөгөҙҙө яңыртырбыҙ әле”, -- тип уйлайым эстән

генә. Ҡайһы берәүҙәр ут асыуҙы ашыҡтырырға теләне, тик ул яҡшы һөҙөмтә бирмәҫ ине. Дошман ҡаршыбыҙға тиңәлгәс кенә: “Гранаты к бою! Огонь!” – тип команда биреү менән үк һәр кем берәр граната ташлап, бөтә ҡоралдан ут астыҡ, хатта ПТР ҙа дөңкөлдәй башланы. Дошман иһә атырға ла, хатта иҫен йыйырға ла өлгөрмәне: үҙәктең бер – теге ярына, бер – был яғына йүгереп йөрөп, күҙ алдында мәйеткә әйләнделәр, тик аҙ ғынаһы кирегә йә йылға яғына ҡасты, ә беҙ тиҙ генә үҙәкте аша сыҡтыҡ та тылдарының түбәнәрәк ынтылдыҡ, шунан тороп ут астыҡ – көслө һуғыш-атыш башланып китте. Полкыбыҙ ҡаршыһында тупланған төп көстәренең бер өлөшөн немецтар тап беҙҙең өҫкә ташларға мәжбүр булдылар. Тау артынан атып торған артиллериябыҙ ҙур ярҙам итте беҙгә. Дошман тылындағы таңдан башланған ҡаты һуғыш кискә тиклем һуҙылды. Эңер төшөүгә беҙ дошмандың полкыбыҙ ҡаршындағы ағаслы-ташлы бейек яр башында биләгән позицияһына барып еттек. Беҙҙең артиллерия, миномет, күрәһең, уларҙы бик ныҡ иҙгән. Унда уларҙың күп кенә мәйете, техникаһы, хатта атҡа егелгән тачанкаһы ҡалғайны. Әжәлдән ҡотолғандары йылға буйлап дивизиябыҙҙың һул флангыһына 2-нсе полк яғына күстеләр. Эскадроныбыҙ яусыл бурысты намыҫ менән үтәне, әммә үлеүселәр ҙә, яраланыусылар ҙа булды. Мин үҙем дә баштан яраландым, суйын ярсығы менән. Ергә йығылғанмын. Бер мәл күҙҙе асып ебәрһәм, башымды марля менән урағандарын күрәм. “Ни булды?” – тигәс, яраландығыҙ, тинеләр. Өҫ-башым, бинокль һ.б. ҡанға буялған. Бер-нисә минут хәл алғас, һуғыш менән етәкселек итеүҙе дауамланым.

Бирелгән бурысты үтәгәс тә, яңы бойороҡ һорап штабҡа элемтәселәр юлландырҙым, сөнки телефон бәйләнеше өҙөлгәйне. Көттөк-көттөк, ә элемтәселәр әйләнеп ҡайтманы, дошман иһә һаман да снарядын, минаһын йылға буйына яуҙыра ла яуҙыра. Күп тә үтмәй, штаб элемтәсеһе килде, йылғаны кире кисеп, үҙ оборонаһына ҡайтһындар, тигән бойороҡто тапшырҙы. Үлгәндәрҙе лә, яралыларҙы ла алып, йылға буйлап үҙебеҙҙең тәүҙә килгән кисеүгә киттек. Иң алда үлгәндәрҙе, яралыларҙы сығарҙылар, һуңынан ҡалғандар кисте. Иң аҙаҡ политрук Әхмәтов менән мин һәм тағы ла бер-нисә кеше кисеп сыҡтыҡ. Йылға уртаһына еткәс, һалҡын һыу тәьҫиренән, буғай, ҡапыл башым әйләнде лә, йылғаға йығылғас, үҙем белмәйем, мине күтәреп алып сығалар ҙа өйгә илтеп һалалар. Шунда иҫемә килеп, башты тотоп яттым. Кусимов санэскадронға оҙатырға бойорҙо. Китергә теләмәһәм дә, бойороҡ ҡаты булды, үтәргә тура килде. Минең урынға капитан Ғайсинды ебәрҙеләр. Полктың санбүлегенән тиҙ үк әйләнеп ҡайтырмын, тигән уй менән ҡалдырҙым эскадронды. Минең менән хушлаштылар ҙа, бер атҡа атландырып, ике һыбай ярышлап ҡулдарҙан тоттолар ҙа алып киттеләр. Тылда ялан тулы армия, хәрәкәт көслө. Кемдең ҡайҙа барғанын белер хәл юҡ. Барабыҙ ҙа барабыҙ. Полктың санбүлеген дә, дивизияның санэскадронын да табып булманы. Бара торғас, емерелеп бөткән Долгорукий станцияһына килеп еттек, унда яралыларҙы вагондарға тейәйҙәр икән, тылға оҙатыу өсөн. Мине күргәс тә, тиҙ ҙә тиҙ тип, аттан төшөрҙөләр ҙә, һорашып та тормайынса, алып барып тауар вагонына тыҡтылар, эшелон ҡуҙғалып та китте, сөнки дошман самолеттары тынғы бирмәй ине.

Ҡайҙа барғанды белгән юҡ. Хәрби тәртип буйынса мин һуғыш ҡоралымды хәрби бүлектә -- санэскадронда ҡалдырып китергә тейеш булһам да, унда эләкмәү сәбәпле, тулы яусыл формала киттем, хатта ҡылысым да үҙем менән ине. Шул рәүешле беҙҙе

Тамбов ҡалаһына килтереп, госпиталгә тапшырҙылар. Ҡоралдарымды госпиталдең комиссарына бирҙем, ә ул горвоенкоматҡа тапшырып, миңә документ бирергә булды ла сейфҡа бикләп ҡуйҙы.

Беҙҙең дивизиянан бында бүтән егеттәр ҙә бар ине: Вәлиәхмәт Йәрмөхәммәтов, полк элемтәсеһе, хәҙерге көндә Сибай ҡалаһында йәшәй; Мансур Вахитов, беҙҙең полктың эскадрон командиры. Бик ҡаты шаңҡытылған – ишетмәй ҙә, һөйләшмәй ҙә, тик дереддәп кенә ята. Мин киткәндә лә бик ауыр хәлдә ҡалды, үлгәндер тип тә уйлай инем.

Ул үлмәгән. Һуғыш бөткәс, 17 йылдан һуң уйламаҫтан Йоматау санаторийында осраштыҡ һәм ҡосаҡлашып үбештек, илаштыҡ, фотоға төштөк. Ул, Ҡариҙел районында йәшәйем, тине. Таныштарҙан башҡалар ҙа булды (онотолған).

Госпиталдә бер ай самаһы яттым. Көнөнә бер мәртәбә баш әйләнеп йығылып, бер-ике минут иҫһеҙ ятҡас тороп китә инем. Башҡаса ауырыу булманы. Йығылыу төрлө ваҡытта һәм ниндәй урында тура килһә -- шунда була ине. Урамдамы, баҡсаламы, баҫкыстамы, бүлмәләме – билдәһеҙ урында тота. Шуның өсөн миңә бер өлкән сестраны беркетеп ҡуйҙылар. Ул янымда йөрөнө, ә өйәнәк һиҙелә башлаһа, палатаға алып инергә тырышты, өлгөрмәһә, йығылған еремдә тулатмайынса тотоп, иҫемә килгәс кенә ҡалдырып китә ине. Ай эсендә ул өйәнәгем бөттө, ләкин һул күҙҙең күреүе, һул ҡолаҡтың ишетеүе кәмене. Бер-нисә йылдан аҙлап үтер, тинеләр һәм комиссия миңә һигеҙ айлыҡ отпускы биреп, өйгә ҡайтырға ҡушты. Ҡәтғи риза булманым, фронтҡа кире ебәреүҙе һорап госпиталь һәм гарнизон комиссияларына, шулай уҡ госпиталдең комиссарына ғаризалар бирҙем, ныҡышмалы рәүештә һораным, сөнки өйгә ҡайтҡас та күп тормайынса фронтҡа китәсәгемде аңланым, һәм, берҙән, ғаиләмде, туғандарымды тағы ла борсорға, ҡауғаландырырға теләмәнем, ә икенсенән, тиҙерәк үҙ дивизияма барып эләгәһем килде. Үтенесемде ҡәнәғәтләндерҙеләр, запасной полк ҡарамағына барырға ҡулға ҡағыҙ тотторҙолар. Комиссар саҡыртып алды ла: "Ҡоралдарығыҙҙы һәм башҡа монаяттарығыҙҙы (наган, ҡылыс, бинокль, портупея, шинель һ.б.) горвоенкоматҡа тапшырырға өлгөрмәнем, ваҡыт булманы; мә, үҙегеҙ менән алып китегеҙ", -- тип кире ҡайтарып бирҙе. Тулы яусыл формала запас полкка киттем. Ул иһә тимер юлдан әллә ни алыҫ түгел, тирә-яғын урман ҡаплаған бер ҙур ғына ауыл эргәһенә урынлашҡан. Ауыл осона барып ингәс тә, үҙебеҙҙең дивизияның ике егетен осраттым. Дивизияға бынан өҫтәлмә алырға килгән икән, тип шатландылар улар. Мин үҙемдең хәлде аңлатҡас, күңелһеҙләнеп: "Бында, кем булыуыңа ҡарамаҫтан, пехотаға ебәрәләр; көнөнә 14-15 сәғәт шөғөлләнеү, ашау ҙа хөрт", -- тип зарланып алдылар. Кис, эңер төшкән ваҡыт ине. Ауыл осондағы бер өйҙә йоҡлап, таң атыуға станцияға барып, нисек тә үҙ дивизияма ҡайтырға булдым, яусыл формала булыуымдан файҙаланып.

Сәғит Әлибаев хатында Олымдан йәғни Боркиҙан ҡайһы йүнәлештәрәк, сама менән күпме километрҙа булғандарын тумбытҡайны, шул яҡка юҫыҡланып, төн уртаһында уҡ станцияға төштөм. Унда бер кем дә юҡ, тик бер-нисә тауар вагоны тағылған поезд тора, йүнәлеше нәҡ мин бара торған яҡка тоҫкалған. Поезд ҡуҙғалыуға, арттағы вагонға инеп ултырҙым да киттем, таң атҡансы күп юл үтелгәндәй тойолдо.

Поезд туҡтағас та, вагондан ырғып төштөм. Яҡтыра башлағайны. Ҙур ауылдың үҙем бара торған юҫыҡтағы осона сығып, бер өйгә индем. Әбей менән бабай алсаҡ

ҡаршыланылар, бераҙ тамаҡ та туйҙы. Ял иткәс, ауыл осондағы оло юлға сыҡтым. Унда йөк машиналары бик күп йөрөй икән, хәрби машиналар. Эйәртенешкән өс машинаны туҡтатып, старшинаны ризалатып, береһенә ултырып киттем. Тағы ла күп кенә юл үтелде. Юл саттарында туҡтатып документ һорайҙар ине, миндә ул юҡ. Ләкин офицер формаһы, ҡоралы бар. Мин машина кабинаһынан күренеп: "Иптәш һалдат, танымайһыңмы әллә совет офицерын, тотма беҙҙе, ебәр!" – тип әйтеү менән үткәреп ебәрәләр. Шулай итеп машинанан машинаға эләгә-эләгә елтерәп килә торғас, элегерәк үҙебеҙ булып киткән Долгорукий станцияһына килеп еттем. Унда вагондарҙан он һәм башҡа аҙыҡ-түлек бушаталар, машиналарға тейәп, төрлө яҡҡа алып китәләр. Мин үҙемдең юҫыҡтағы бер он тейәгән машинаға ултырып киттем һәм, байтаҡ ҡына оҙон юл үткәс, ул башҡа йүнәлешкә бороллдо; мин машинанан төшөп ҡалдым да юлдан ситкә сығып уйланып ята инем, ат юлы буйлап ҡушарлап ат еккән биш-алты ылау килә. Алдарына сыҡһам, үҙебеҙҙең дивизия кешеләре икән! Улар ҙа аҙыҡ-түлек тейәгән. Һаулыҡ һорашып күрештек, ҡосаҡлаштыҡ. Олым буйындағы һуғыш өсөн 97 яугиребеҙҙең орден һәм миҙалдар менән бүләкләнеүен һөйләнеләр һәм мине лә бүләк менән ҡотланылар.
Дивизия торған II Тербуниға килеп еттек. Ялан кухняһы ашын яҡшы ғына менгереп тамаҡ туйҙырғас, уйға ҡалдым. Дивизия штабына күренергә ҡурҡтым, сөнки ҡасып килдем; йөрәк тыныс түгел; ә үҙемдең полк оборонала беренсе һыҙыҡта тора икән. Ни булһа ла булыр, тип, үҙебеҙҙең полкка – Кусимовҡа йүнәлдем, ялан кухняһына эйәреп. Ҡыуаҡлыҡ буйлап китеп барһам, блиндаж алдында Кусимов ултыра. Ситтән ҡарап торам: ул нимә тураһындалыр уйланған, бошонҡо һымағыраҡ тойолдо – уғата шомлана төштөм. Сөнки беҙ уның йөҙөнә ҡарағас та кәйефен белә инек. Шулай ҙа тура атланым. Мине күрҙе лә: "Ә, Мәмбәтҡолов ҡайтҡан!" – тип ҡысҡырып ебәрҙе. Шул арала блиндаждан комиссар Әлибаев килеп сыҡты, өсәүләшеп күрешеп-һаулаштыҡ. Кусимов: "Бик яҡшы иттең ҡайтып, әйҙә, эскадроныңды ҡабул ит. Унда берәүҙе тәғәйенләгәйнек, уңманыҡ", -- тине. Комиссар ҙа шуны ҡабатланы. Нисек ҡайтҡанымды әле белмәйҙәр. Аңлаттым, запас полкка тип бирелгән документты һондом. "Чепуха!" – тине полк командиры һәм дивизия штабына шылтыратып һөйләште лә документтарҙы йыртып ташланы. "Вот, ошо минуттан һин эскадрон командиры, бар, эскадроныңды ҡабул ит", -- тип ҡулды ҡыҫты. Шулай итеп мин яңынан үҙ эскадронымдың командиры булдым.
Оборона. Оборонаға күсерҙән алда II Тербуны районында, Лобановка, Озерски тирәһендә бик ҡаты һуғыштар була. Дошмандың 14 меңлек армияһына ҡаршы беҙҙең 4 меңлек ғәскәр һуғыша һәм беҙҙең яугирҙәр дошман һөжүмен туҡтата, оборонаға күсә. Оҙон үҙәк аръяғында немецтарҙың оборонаһы, был яҡлап беҙҙеке, ара ни бары 800 метр, ә урыны менән алдынғы позицияға 300 метр. Оборонала торғанда ла ҡаты ғына бәрелештәр була ине. Дошман беҙҙең оборонаны өҙөргә ныҡ тырышты, күп кенә контрһөжүмдәргә күсте. Ләкин егеттәребеҙ йомшаҡлыҡ күрһәтмәнеләр, дошманға ныҡ ҡаршы тороп, йәнле көсөн һәм техникаһын ҡыйраттылар. Оборона һуғышында бигерәк тә снайперҙар дошманды күпләп сүпләне. Разведка ҙур урын алды. Разведкаға йыш йөрөйҙәр ине. Дошман тылына инеп, хатта уның штабын туҙҙырып "тел", документтар алып ҡайттылар. Шуны ла әйтергә кәрәк: разведкаға барғанда ҡайһы берәүҙәр, сығып өлгөрмәйенсә, дошман тылында ҡала ине лә бер-нисә көндән һуң (2-3, хатта 5-6 көн) ябығып, һарғайып,

һаҡалы үҫеп, өҫ-баштары батҡаҡҡа ҡатып ҡайтып киләләр ине. “Ҡайҙа йөрөнөгөҙ, нимә ашанығыҙ?” – тигән һорауға: “Һаҙлыҡта яттыҡ, уңайлы мәлен көттөк, үлән тамыры ашап-сәйнәп йөрөнөк”, -- тип яуап бирәләр ине.

Дошман оборонаһы алдан уҡ яҡшы нығытылған, ә беҙ оборонаға күскәс кенә төндәр буйы окоптар, траншеялар, блиндаждар ҡаҙыныҡ һәм төҙөнөк, шул уҡ ваҡытта дошманды ла һағаларға кәрәк ине. Былар барыһы ла аҡыл менән эшләнде.

Дошман тынғы бирмәне. Көн һайын, тигәндәй, аш ваҡытында снаряд йәки мина яуҙыралар, ҡайһы берәүҙәр һәләк булғыланы. Ашағанда бер урынға тупланырға рөхсәт ителмәне, икешәрләп кенә барып аш алдылар. Полк һәм дитвизия кешеләре алғы һыҙыҡта бик йыш булды, өҙлөкһөҙ тикшереп йөрөнөләр.

Бер эпизод иҫкә төштө: бер көн көндөҙ эскадрон хәлен белеү өсөн Кусимовтың ярҙамсыһы Ғайсин килде. Шунан күрше эскадронға китергә булды. Мин уны бер аҙ оҙатып барҙым. Ике ара траншеялар менән тоташтырылған, ул арала ҡыуаҡлыҡ юҡ, асыҡ. Ғайсин траншеяға төшмәй, өҫтән китергә булды. Мин ҡаршы килдем, ул тыңламаны. Үҙе бик таҙа, йыуан ҡорһаҡлы ине. Киттек өҫтән. Ул – алдан, мин артта ҡалыбыраҡ барам. Күҙәтеп, аңдып ятҡан дошман һалдаттары атып та ебәрҙеләр, беҙ ергә йығылдыҡ. Мин ергә батҡан һымаҡ ятам, ә ул түмәр шикелле ҡалҡыуыраҡ, ә үҙе: “Һәләк булабыҙ!” – тип өҙәләнә. “Ҡысҡырма, ҡыбырҙама, соҡорға ырғырға әҙерлән!” – тинем дә үҙем туп кеүек тәгәрләп траншея төбөнә ауҙым, ә ул ята, еңел генә ырғып төшөрөнә ышанмай, күрәһең. Ярай әле атыу ҡабатланманы. Ул да ышылдап килеп төштө лә траншея буйлап үҙ юлына китте.

Дошман йоҡламай. Аҙлап-аҙлап төрлө яҡтан “тел” сүпләй һәм унан файҙалана. Оборонала оҙаҡ ҡына торҙоҡ, шуға ла немецтар беҙҙең командирҙарҙың фамилияларын беләләр ине. Иртә менән: “Шаймуратов жив? Кусимов жив? Айда, покурим!” тип ҡыҫҡырған саҡтары ла булды.

Ҡара көҙ етте, яугирҙәр өшөй башланы. Яҡын ауылдарға икешәр һалдат ебәреп, тимер мейестәр эшләтеп, блиндаждарға ҡуя башланыҡ.

Оборонала торғанда партия, актив йыйылыштары йыш ҡына үткәрелде. Дивизия политработниктарынан Мөбәрәк Нәзиров, Әхмәт Абдуллин, Сабир Ҡадиров һ.б. полктарҙа, полк бүлексәләрендә йыш булалар, яугирҙәр араһында күп кенә тәрбиәүи эштәр үткәрәләр ине. Шуның өсөн дә егеттәр уларҙы яҡындан белде.

Оборонаны ҡалдырып оҙон юлға сығасағыбыҙ һиҙелә башланы. Сөнки личный составты, аттарҙы, техниканы ентекләп әҙерләттеләр. Ҡуҙғалып китеү минуттары ла етте. Октябрь урталарында беҙҙең дивизияны Сталинградҡа табан йүнәлттеләр. Фронт буйлап (алғы һыҙыҡтан 8-12 километр) бик ҡатмарлы шарттарҙа айҙан артыҡ һуҙымда туҡталышһыҙ, тип әйтерлек, меңгә яҡын километрҙы яусыл маршта үтеүе еңел булманы. Тау-таш, һыу-һаҙлыҡ, соҡор-саҡыр, урман аша таныш булмаған ерҙәрҙән барырға тура килде. Уның өҫтәүенә, уйламағанда, дошман самолеттары тынғы бирмәй. Фронт һыҙығы яҡын булыу сәбәпле, тик төндәрҙә генә хәрәкәт иттек, ә көндөҙҙәрен урманда, баҡса араһында, һаҙлыҡта, тәрән соҡорҙа торорға тура килә ине. Ҡараңғыла таныш түгел ерҙәрҙән барғанда ҡайһы бер яугирҙәрҙең, хатта ваҡ бүлексәләрҙең аҙашып китеү осраҡтары ла булды. Ат өҫтөндә барғанда йоҡоһона баш булмағандар аттан ҡолап та төшә ине, ә атын етәкләп барғанда йәйәүләгән килеш йоҡлап теҙемдән ситкә сығып китәләр, йә булмаһа йоҡлап барып, алдағы

атҡа бәрелеп уяналар. Шуның өсөн яҡшы тәртип һаҡланырға һәм теҙемдәгеләр бер-береһен яҡшы күҙәтеп барырға тейеш.
Ямғырлы бысраҡ ваҡыттар бигерәк тә ауыр. Айырыуса тау менгәндә, тау битенән, ҡырын урындарҙан, күперҙән, һаҙмат урындарҙан үткәндә бысраҡҡа батып, һыуланып, артиллерияны, машиналарҙы, обоздарҙы яугирҙәр үҙҙәре этәреп баралар. Ләкин ошо маршты ла “отлично”ға үттек. Марш яугирҙәрҙең яусыл һәләтлеген, тәртибен, һиҙгерлеген уғата нығытты.
Төнө буйы арып килгән колонналарға ял итергә лә ваҡыт етмәй ҡала. Килеп туҡтағас та, иң элек атты ҡайғыртаһың. Уларға урын әҙерләйҙәр; шунда эйәрен алып һыуытырға, ашатырға, һуғарырға, таҙартырға, дағаларын тикшерергә, бушағандарын нығытырға кәрәк. Артынса ҡоралыңды, бөтә техниканы таҙартырға, ипкә килтерергә, котелогыңды тотоп ашҡа йүгерергә, тамаҡ туйҙырырға кәрәк. Ул арала яугирҙәрҙе йыйып, үткән төндәге маршты йомғаҡлайһың, полктан да килеп тикшереп китәләр. Бөтә бүлексәләрҙе ҡарап энә күҙенән үткәрәләр. Бигерәк тә Кусимовтың шәхсәнә үҙе тикшермәгән көнө юҡ. Туҡтағас та, штабтан фарман килтерәләр, унда шул төндәге сәфәрҙең һөҙөмтәһе яҙылған була, кемгәлер маҡтау, кемгәлер шелтә эләгә. Ял итергә ваҡыт ысынлап та аҙ ҡала, көндөң үткәнен белмәйһең, ә алда тағы ла сәфәр көтә...
Башҡортостан халҡы беҙҙе онотманы. Дивизияға бер-нисә мәртәбә делегация килде, маршта барғанда ла, һуғыш ваҡытында ла. Улар араһында партия, хөкүмәт, эшсе синыф, колхоз-совхоз вәкилдәре, артистар, яҙыусылар булды. Сталинградҡа барған әлеге марш ваҡытында шундай делегация Ҡалас ҡалаһында беҙҙе ҡыуып етте. Артистарҙан Бәҙәр Йосопова, йырсы Хәбир Ғәлимов, ҡурайсы Ғата Сөләймәнов һ.б. бар ине (дөйөм фото һаҡланған, исем-фамилияларын белмәйем). Дивизияға күп кенә бүләк – аҙыҡ, кейем, аттарға һоло, бик күп хат һ.б. күстәнәс килтерҙеләр. Хаттарҙың күбеһен пионерҙар, уҡыусы балалар яҙған. Һәр береһендә, тип әйтерлек: “Дошманды тиҙерәк тар-мар итеп ҡайтығыҙ, беҙ көсөбөҙҙән килгән тиклем һеҙгә ярҙам итербеҙ”, -- тигән һәм башҡа йөрәкте һыҙландырырлыҡ та, шатландырырлыҡ та һүҙҙәр әйтелгән. Бүләктәрҙе, күстәнәстәрҙе бүлексәләргә өләштеләр. Ҡунаҡтар һәр урында яугирҙәр араһында булып танышып сыҡты. Полктарҙа митингылар үткәрелде. Беҙҙекеләр унда ҡаты һуғыштарҙа егеттәребеҙҙең батырлыҡтары тураһында һөйләнеләр, ә ҡунаҡтар республика хеҙмәтсәндәренең тылдағы намыҫлы эштәре менән фронтҡа нисек ярҙам итеүҙәрен әйтеп, илдән ҡайнар сәләмдәр тапшырҙылар.
Ҡунаҡтарҙы оҙатҡас, килтерелгән күстәнәстәр менән бер көн яугирҙәрҙе һыйларға булдыҡ. Ҡаҙ, тауыҡ, йылҡы һ.б. ит ҡаҙанға төштө. Аш өлгөргәс кенә, көтмәгәндә, офоҡ артынан фашист самолеттары ҡалҡып сыҡты. Тревога менән ҡубынып, ҡаланы ҡалдырып тиҙ генә юлға сыҡтыҡ. Бешкән тоҙлоҡло ит тә, поход ҡаҙанында борҡолдап, тәмле еҫтәре менән ҡытыҡлап барҙы...
Шуны ла әйтеп китәһе килә: һуғыш шарттарында ла, оборонала торғанда ла, бигерәк тә ғәскәребеҙ ялға сыҡҡанда дивизияның үҙэшмәкәр художество түңәрәге яҡшы эшләне. Улар беҙҙең полктарҙа, хатта корпустың башҡа дивизияларында яугирҙәрҙең күңелен асты, уларҙы рухландырҙы. Өҙҙөрөп бейеүселәр, йырсылар, ҡурайсылар бар ине. Беҙҙең полктан Баҡый Вәлиев, Бәҙри Иҫәнов, әғзәм

Сәлихҡолов, Ғәйфулла Сарбаев, Фәхрази Ибраһимов һ.б. әүҙем ҡатнаштылар һәм батыр ҙа һуғыштылар (былар барыһы ла Баймаҡ районы егеттәре).

Алда данлы Дон. Көнэлгәре һалынған күпер аша йылғаны сыға башланыҡ. Алдан беҙҙең 1-енсе полк үтте һәм һаҙлыҡтарға таралышып ышыҡландыҡ. Беҙҙән арттағы полк сыҡҡан саҡта (Макаев полкы булһа кәрәк) дошман самолеттары күтәрелеп, бомба ташлай башланы. Төндәр буйына бөтә дивизия аша сығып, Дондың уң ярында Көньяҡ-Көнбайыш фронттың 5-енсе танк армияһы биләгән плацдармға килеп, фашистарға һиҙҙертмәй генә Еланская станцияһына ҡаршы бик тәрән бер йырын-соҡорға урынлаштыҡ, сөнки фронттың алғы һыҙығы яҡын ине. Дошман самолеттары көнө-төнө, тип әйтерлек, оса.

Һүр.22. С.Р. Әлибаев

Тәрән соҡор эргәләүен ҡаҙып урын эшләнек тә, ерҙән баҫҡыс киртләсләп, аттарҙы шунда төшөрөп ҡуйҙыҡ, ә кешеләр окоптарҙа, блиндаждарҙа урынлашты.

Тыл алыҫта ҡалды (150 – 200 километр самаһы, тинеләр). Аттарға аҙыҡ етмәй, ә яугирҙәр оҙаҡ ваҡыт хат-хәбәр алманы, үҙҙәренә лә яҙырға форсат тәймәне, -- бошоналар. Төндә бөтәбеҙ ҡырға сығып, ваҡ көрәктәр менән, ҡул менән Дон далаһының бүтәгә үләнен йолҡоп ташыныҡ, ә көндөҙ шул ҡыу үләнде һыуға болғап, ебетеңкерәп, аттарҙы һыйлайбыҙ.

Бер көн тоҡ-тоҡ итеп хат килтереп тараттылар, егеттәрҙең күңеле күтәрелде. Шул көндә беҙҙең эскадронға Нәзиров, Кусимов, Әлибаев һ.б. иптәштәр килде. Эскадронды йөрөп ҡарап сыҡҡас, беҙ йәшәгән блиндажға инделәр. Бер хатты Әлибаев күрҙе лә: “Был һиңә килгән бит, уҡымай нисек түҙеп тораһың?” – тип, өсмөйөшлөнө миңә һуҙҙы, барыһы ла, уҡы ла уҡы, тинеләр. Хатты асһам, унда икенсе класта уҡыған ҡыҙым Клараның фотоһы бар ине, унын артына үҙ ҡулы менән бер-нисә һүҙ сәләм яҙған һәм бер ус аяһындай ғына еләк ҡағы һалып ебәргән. Быны күргәс барыбыҙ ҙа шарҡылдашып көлдөк, ләкин күҙҙәрҙән йәш килде. Еләк ҡағын биш-алты кеше бүлешеп ҡаптыҡ.

Алда ниндәйҙер оло һуғыш көткәнен бөтәбеҙ ҙә һиҙендек. Ҡыҙыу әҙерлек бара. Яугирҙәребеҙ ҙә, соҡорҙа боҫоп ятҡансы, тиҙерәк илбаҫарҙарға ҡаршы йөҙгә-йөҙ килеп алышырға ашҡына.

Бөйөк Ватан һуғышындағы данлыҡлы 19 ноябрь килеп етте. Беҙҙе йәғни командирҙарҙы төндә штабҡа саҡырҙылар ҙа бүлексәләрҙе күрһәтелгән урындарға иртүк сығарырға ҡуштылар. Шунда сығып теҙелгәс, Фронт советының яугирҙәргә мөрәжәғәтен уҡығастары, тубыҡланып ултырып, ҡулдағы ҡоралдарҙан һауаға берәрҙе аттыҡ. Шунан бөтә фронт буйлап артиллерия һайрай башланы – Сталинград һуғышының башланыуы ине. Сәғәт буйына барған артиллерия канонадаһы шул тиклем көслө булды, хатта шартлауҙан сорғолған тупраҡ ҡап-ҡара булып күккә тоташҡандай тойолдо, ә һауаға йөҙәрләгән самолет күтәрелеп, дошман тылын аҡтара башланылар. Шунан һуң бөтә төр ғәскәр ҡуҙғалып һөжүмгә китте. Беҙҙең Башҡорт атлы дивизияһы ла өҙлөкһөҙ һуғышып барып, бер-нисә көн эсендә йөҙәрләгән километр ер үтеп, дошманды ҡыуып китте. Ауыл артынан ауыл, станица артынан станица фашистарҙан азат ителде. Алға атҡан артиллерия уты, һауанан

ташланған бомба афәттәре шул тиклем көслө, хатта бөтә нәмә яна, бөтә нәмә ут эсендә һымаҡ күренә. Ысынлап та ауылдар дөрләй, ер үҙе дөрләй кеүек. Үлгән фашист һалдаттары аяҡ аҫтында ята, ҡасырға өлгөрмәгәндәре ҡулдарын күтәреп әсир төшәләр. Һуғыш уңышлы барғас, егеттәрҙең дә күңеле күтәренке. Бер көн шулай алға дөрөп барғанда эргәмдәге Хоҙайғолов Сәлихйән (Күгәрсен районы Юлдыбай ауылынан, шул Сталинград һуғышында һәләк булды) шатлығынан: “Иптәш командир, фашистарҙың кәрәгенә бирәбеҙ генә, былай булһа беҙ тиҙ генә Берлинға ла барып инербеҙ әле!” – тине. Мин, шулай булырға тейеш, тик Берлин бик алыҫ бит әле, күренмәй, тигәс, үҙе лә көлөп ҡуйҙы.
Блиновский утары эргәһендә бик ҡаты һуғыштар булды. Бында немецтарҙың бик ныҡ оборонаһы булған, километр һайын нығытма эшләгәндәр. Дошман армияһы үҙе биләгән позицияны бирмәҫ өсөн ныҡышмалы ҡаршылыҡ күрһәтә ине. Беҙҙең полк (Кусимов) дивизияның алдынғы әтрәте булып хәрәкәт итте. Ә полктың головной әтрәте булап 4-енсе эскадрон (командиры Сабитов) һөжүм итә, ул полкка юл асып барырға тейеш. Беҙ алға барған һайын, дошман уғата ҡарышты, ә утарға яҡынлағас та бөтә ҡоралдан утасты. Асыҡ яланда беҙҙекеләргә ысын һәләкәт янаны (аттар ҙа беҙҙең менән). Полк төрлө яҡҡа таралып ышыҡланырға ла уңайлы позиция биләргә булды. Кусимов, Әлибаев һ.б. алда барған минең эскадрон менән киләләр ине, яҡындағы бер үҙәккә ҡарай йүгерҙек тә шунда яттыҡ. Сабитов та үҙ кешеләре менән шунда ята ине. Ни өсөн полкка хәбәр итмәгәндер, белмәйем. Кусимов уны күреп асыуланып: “Ниңә бында туҡтап ҡалдың?” – тип һорауына ул: “Баш күтәреп булмай, ҡырып һалалар”, -- тине. Кусимов уны бик ныҡ әрләне лә миңә ҡарап: “Күпме кәшә кәрәк – алығыҙ ҙа тиҙ генә алға ынтыл, утарҙы үтеп ҡалҡыулыҡты ал да *(картаға ҡарап)* шунда нығын, беҙҙе көт, беҙ һеҙҙең арттан барырбыҙ, өҫтәлмә көс ебәрербеҙ”, -- тип ҡаты бойорҙо. Политрук Әхмәтов менән беҙ иң яҡшы 120 кеше, боеприпас, бигерәк тә гранаталар алып алға ташландыҡ. Беҙ яуларға тейешле ҡалҡыулыҡ 2-3 километр самаһы алда ине. Тура утарға түгел, ә һулдараҡ һуҙылып ятҡан, үтә бейек булмаған һырт буйлап ынтылдыҡ. Еүеш ҡарҙы йырып йүгерә-шыуа һыртҡа күтәрелә башланыҡ. Һиҙеп ҡалға дошман беҙгә пулеметтан да, автоматтан да көслө ут яуҙырҙы. Шуға ҡарамаҫтан, үргә күтәрелдек, пулялар баш осонан жыйылдап үтеп торҙо. Атырға рөхсәт итмәнем, алдыбыҙҙа нығытма барлығын аңлап, уны тик атака менән алырға кәрәк тип уйланым һәм шулай булды ла. Фашистар атып ятҡан позицияға яҡынлашҡас, ура ҡысҡырып ташландыҡ, берәр граната ырғытып, уларҙың нығытмаһына – окоптарына барып еттек. Тороп артҡа ҡастылар, беҙгә шул ғына кәрәк ине. Ҡасырға өлгөрмәй ҡалғандары менән бераҙ ҡул һуғышы булып алды, ләкин туҡтап тормайынса алға ынтылдыҡ – ҡасҡан дошманды ҡыуып киттек һәм өҫтөнлөктө ҡулға эләктерҙек. Ләкин немецтар ҙа иҫенә килде – тағы көслө ҡаршылыҡҡа осраныҡ. Шуға ҡарамаҫтан, шыуыша-шыуыша алға барҙыҡ. Һырт буйынан уҙыуы ҡыйынлашты, сөнки ул тигеҙ ерҙә егеттәр яралана, һәләк була башланылар. Ҡараңғы төштө, йәш ҡарға өҫ-баш һыуланды. Шуға ҡарамаҫтан, ярты төн үтеүгә немецтарҙың ике нығытмаһын алдыҡ. Кеше кәмей, ә өҫтәлмә көс юҡ та юҡ. Тик төн урталарында ғына Абдуллин Фитрат (Баймаҡ районынан) 20 автоматсы менән ярҙамға килде. Шунан файҙаланып, тағы ла алға киттек. Тирә-яҡта ла көслө атыштар ишетелә. Беҙҙең алда румындар ине: ҡайберәүҙәре ҡасмайынса әсир төшә башланылар. Шуныһы ҡыҙыҡ: берәүҙәре

ҡараңғыла боҫоп ятып ҡалалар ҙа, беҙ үтеп киткәс тороп, ҡоралдарын ташлап ҡулдарын күтәреп, беҙҙең яҡҡа атлайҙар. Уларҙы тылға оҙатабыҙ, кешеләр тағы ла кәмей, ә ярҙамсы көс һаман юҡ, әммә алға барырға, яусыл бурысты үтәргә кәрәк.

Штабҡа барып килергә булдым, һәм бер-ике яугир менән йүгерә-шыуа киттек артҡа. Үҙебеҙҙең тәүҙә алған окопҡа ырғып төшһәк, унда Кусимов, Әлибаев һәм башҡалар картанан ҡарап яталар. Хәлдәрҙең торошон ҡыҫҡа ғына аңлатып, кеше һораным. Баҡһаң, улар йүнәлткән ярҙамсы көс беҙҙең флангыла дошманға осрап, һуғышҡа бәйләнгән. Беҙҙең исемгә маҡтап йылы һүҙҙәр әйткәстәре шөйлә дәртләнеп киттем. Ләкин Кусимов миңә ҡарап: "Ниңә "ура"ны ул тиклем күп һөрәнләйһегеҙ, бында ла ишетелеп ҡала", -- тине. Мин, "ура"һыҙ атака булмай, беҙ "ура" менән нығытмаларынан ҡыуып сығарабыҙ, унан килеп, "ура" егеттәргә дәрт бирә, ә дошманда ҡурҡыныс тыуҙыра, тинем. Ул йылмайып: "Улай булһа ҡысҡырығыҙ", -- тине. Өҫтәлмә көс булыуына өмөтләнеп, егеттәрем янына килдем дә һөжүмде дауам иттерҙек.

Бер мәл комиссар Әлибаевтың тауышы ишетелде. Әйләнеп ҡараһам, ысынлап та – ул, беҙгә табан шыуышып килә. Ниңә килдегеҙ, йәһәт кире китегеҙ, тинем. Ул: "Хәлегеҙҙе белә килдем", -- тине лә "ура" ҡысҡырып егеттәрҙе дәртләндереп алға йүгерҙе. Ләкин уны тиҙ генә кире оҙаттыҡ.

Тирә-яҡта гөрһөлдәгән атыш тауышын да тыңлап, күҙәтә-күҙәтә барабыҙ, шаҡтай ғына алға инеп киткәнбеҙ, булһа кәрәк. Ошо төнгө ҡаты һуғыштар барғанда күп кенә һалдаттар, командирҙар яраланды һәм һәләк булды. Шулар араһында взвод командиры лейтенант Миңнәхмәт Хәйруллин (Татарстандан), старшина Ғафаров, рядовой Салихйән Хоҙайғолов һ.б. батырҙарса һәләк булды. Фитрат Абдуллин (Баймаҡтан), Шакир Насиров (Өфөнән, яҙыусы, һуғыштан ҡайтҡас мәрхүм) һәм башҡа күптәр яраланды. Күҙ алдында һәләк булыусыларға ҡарауы бик ауыр ине, тик нимә эшләйһең, Тыуған ил шуны талап итә бит. Үлеүселәр араһында бигерәк тә лейтенант Хәйруллиндың бик тә ҡыҙғаныс яфаланып йән биреүе бөгөн дә күҙ алдымда йөрәкте һыҙландырып тора. Минән бер-нисә генә метр алыҫлыҡта яраланып, ҡар өҫтөндә тәгәрләй башланы. Түҙә алмай үҙе һыҙлана, үҙе һөйләнә. Ярҙам итергә ҡуштым, ләкин ҡан сыҡҡан урын да юҡ, яраһын да таба алмай ыҙалаланалар. Ябыҡ яра булған, эс-ҡарындарын өҙгөләгән, күрәһең. Эргәһенә килдем, ул һөйләнә: "Иптәш командир, мин үләм, онотмағыҙ, йәнемде аямай һуғыштым, мин бит комсомолец, әсәйемә, туғандарыма яҙығыҙ", -- тип бер әйләнде лә йән бирҙе. (Үҙем яҙам, ә күҙҙән йәш аға).

Һүр.23. Сөнәғәт Әхмәтов

Хәйруллин, 22 йәшлек лейтенант, Ырымбурҙа Чкалов исемендәге хәрби училищене ваҡытынан элек тамамлап, дивизиябыҙ төҙөлгән беренсе көндәрҙә үк килеп, минең эскадронда взвод командиры булды. Бик аҡыллы, аҙ һүҙле, һөйкөмлө, еңел генә кәүҙәле сос ҡына командир ине. Бөтә һуғыштарҙа ла батыр һуғышты. Һуғыштан һуң бер-нисә йыл үткәс, уның туғандарын эҙләнем. Йорт адресын белмәүем сәбәпле, Татарстандың өлкә гәзитенә, Татвоенкоматҡа яҙып, адресын таптым. Мәктәпкә, ауыл

советына яҙып яуап алдым. Миңнәхмәттең әсәһе улы өсөн пособие алып торған, ләкин, ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, әсәһе үлгән ине, ә атаһы әсәһенән алда киткән. Ауылда бер туғандарынан бер кеме лә йәшәмәй. Бер туған ағаһы ҡайҙалыр төньяҡта хәрби хеҙмәттә, апаһы Урта Азияла тормошта, адрестарын табып ебәрә алманылар. Хәйруллиндың тыуған, үҫкән ере Татар АССР-ы Саба районы Килдебәк ауылы, почта индексы 422061.

Хоҙайғолов Салихйән бик етеҙ, ҡыйыу һуғышсы ине. Ул һаҡланмайынсараҡ һәләк булды, бер һүҙ ҙә әйтә алманы. Дошман бөтә ҡоралдан көслө ут яуҙыра. Ҡола ялан һырт өҫтөндә ҡарға һеңеп, баш та ҡалҡыта алмай, атыуҙың аҙыраҡ туҡталыуын көтөп ятабыҙ. Шул хәтәр мәлдә Салихйән тубыҡланып ултырҙы ла дошман яғына эйелеберәк автоматының дискаһын алмаштырырға маташа. Шуны күргәс, ят, һәләк булаһың, тип ҡысҡырҙым. Ул: “Мин тиҙ генә!” – тине лә алға эйелеберәк ергә ятты, беҙ эргәһенә барғанда яҡты донъянан китеп өлгөргәйне. Түбәһенә пүлә инеп киткән, ҡара-көрән ҡан аға. Шул тыиклем көсөргәнеп йән биргән, күрәһең, ҡултығына ҡыҫҡан автоматын ике кеше көскә һурып алды. (Күгәрсен районы Юлдыбай ауылынан, ҡатыны, балалары ауылда тора. Мин ҡатыным менән уларҙа булдым, ә улар беҙгә килеп йөрөйҙәр).

Күп юғалтыуҙарға ҡарамаҫтан, таң беленеүгә изге хәрби бурысыбыҙҙы намыҫ менән үтәнек – бейеклекте алып, шунда ныҒындыҡ. Немецтар артҡа сигенде. Күрәһең, беҙҙең дивизия полктары башҡа тәңгәлдәрҙә лә дошманды кире сигенергә мәжбүр иткәндәрҙер.

Бейеклекте алғанда йөҙҙән артыҡ (140) кешенән 40-50-ләгән кеше ҡалды. Боеприпас та кәмегәйне. Штабҡа элемтәселәр ебәрҙек тә һирәкләп кенә атып яттыҡ, ярҙам көс тә килмәне. Тирә-яҡта ла көслө атыштар бара. Моғайын, беҙҙең хәлдең мөшкөлөрәк икәнен һиҙеп, немецтар беҙҙе ҡамап алырға булдылар, ә арттағылар әле булһа күренмәй. Уң яҡтан ҡалҡыулыҡты буйлап дошман танкылары килә. Ләкин улар беҙҙең яҡҡа боролмай алға үттеләр, ә беҙҙең артиллерия уларҙы дөмпөлдәтә башланы. Һул яҡ һырт битләп үҙәктән өс ҡатар (шеренга) булып дошман һалдаттары автоматтан ата-ата тура беҙгә табан күтәреләләр. Булған көс менән йәнә ике-өс сәғәт буйына ҡарыштыҡ, ләкин күмәк дошман һаман беҙҙе уратып яҡынлай ине. Боеприпас бөттө, тип әйтерлек. Уң яҡтараҡ тәрән соҡор бар ине, шунда күсергә, артҡа сигенмәҫкә, ҡул менән булһа ла һуғышып, ҡалҡыулыҡты тоторға ҡаты әмер бирҙем. Егеттәр тиҙ-тиҙ генә соҡорға табан шыуыша башланылар. Политрук Сөнәғәт Әхмәтов менән мин, тағы ла бер-нисә һалдат аҙаҡҡа ҡалып атып яттыҡ та, улар китеп бөткәс беҙ ҙә шыуыштыҡ – тороп йүгереү мөмкин түгел ине. Ошо хәтәр, сиктән тыш киҫкен минутта мин ҡаты яраландым. Һис кенә лә шыуышып булмай, һул аяҡтың тик төбө генә ҡыбырлай. Боролоп ҡараһам, һул аяҡтың башы бөтөнләй артҡа әйләнеп ятҡанын күрҙем. Баҡһаң, һөйге төбөнән һынған икән – ҡыҙыулыҡ менән һиҙелмәгәндер. “Мин яраландым, тиҙ генә килеп алығыҙ!” – тип ҡысҡырҙым политрукка. Ул бер һалдат менән әйләнеп килде лә ятҡан килеш икеһе ике ҡулдан тотоп һөйрәп маташтылар, барып сыҡмай. Дошман етеп килә, китеүгә ышаныс бөттө. Ахырҙа уң яҡтан урабыраҡ егеттәрҙе алып китергә, ҡамауҙа ҡалдырмаҫҡа политрукка бойороҡ бирҙем дә, уның менән бәхилләшеп ятып ҡалдым, улар киттеләр. Автоматты ситкәрәк ырғыттым – патроны юҡ ине. Кобуранан алып наганды күкрәк аҫтыма һалдым – ике генә патроны бар. Әгәр ҙә бер-ике немец

минең тере икәнде белһә, уларҙы атырға; әгәр ҙә күп булһалар, үҙемде атырға – терелəй дошман ҡулына эләкмәҫкә, тигән һуңғы өмөт менән тәүәккәлләндем. Ҡарҙы аҙ ғына соҡоп, ике ҡулды арҡыры ҡуйып башты һалдым да үлгән кеше булып йөҙтүбән яттым. Минең тирәлә башҡа үлгәндәр ҙә бар ине. Башымда йылы кәпәс, ҡулда тиренән тегелеп тышланған йылы бейәләй, өҫтә көпәйкә һәм портупея, сөмкә, ә аяҡта әле итек ине.
Немецтар ата-ата килеп, беҙҙекеләр яғына үтеп киттеләр, минең егеттәр ҙә юҡ булдылар. Яңы төркөм һалдаттары ла килеп, йәнә беҙҙең яҡҡа үттеләр. Шулай итеп, дошман тылында ятып ҡалдым, тауыштары алыҫлаша барҙы. Һуғыш барышын тыңлап ятыуҙан башҡа эш ҡалманы миңә. Бына көслө атыш тауыштары ҡайһылыр бер урында тотҡарланып ҡалды, беҙҙең төп көс менән ҫсрашҡандарын аңланым. Немецтар яңынан-яңы ғәскәр килтереп ҡаранылар, ярты көн үтеп китте. Әммә һуғыш-атыш бара һаман. Өшөй башланым, өҫтәге тир ҡатыра, аяҡтан туҡтауһыҙ ҡан аға. Немецтар пушкаларын да ҡалҡыулыҡҡа яҡын килтереп, беҙҙекеләргә аталар. Беҙҙең артиллерия ла эшен ҡыҙыулатты, снаряд алыҫ түгел төшөп ярыла. Кем белә, минең әжәл, бәлки үҙебеҙҙең снарядтан да булыр ине. Көнө буйы, тигәндәй, һуғыш һөҙөмтәһендә беҙҙекеләр немецтарҙы сигендерҙеләр, улар ҡаса башланы.
Иҫем дөрөҫ ине. Ләкин өшөп ҡатҡайным, хатта ауыҙ ҙа ҡарышҡан – тауыш та сыҡмай, хәл дә бөтә башланы. Ун бер сәғәткә яҡын дошман тылында яттым, көнө буйы ҡан аҡты. Өҫтәүенә, немецтар артҡа ҡасҡанда ике немец минең йылы кәпәсте, бейәләйҙәрҙе һалдырҙылар, ҡайыш менән сумканы ла ҡырҡып алып киттеләр, шунан һуң уғата туңа башланым. Быйма талап ителгән осорҙа итек булыу сәбәпле, аяҡҡа теймәнеләр. Итек мине үлемдән дә, пленадан да ҡотҡарҙы – ҙур рәхмәт итеккә!
Был ятыуҙа мин бөтә үткән тормош юлымды, ғәзиз әсәйемде, балаларымды берәм-берәм күҙ алдынан үткәрҙем. Үлемде лә уйламаным, ләкин үлгән сүрәттә лә үлеүемә үкенмәнем һәм ҡурҡманым, сөнки ни өсөн үлеүемде яҡшы аңлай инем. Ошо ауыр минуттарҙа тик бер генә нәмә үкенесле лә, ҡыҙҙаныс та тойолдо: минең үлгәнде – нисек ғазапланып һәләк булғанды бер кем дә күрмәй, бер кем дә белмәй; исмаһам, бер генә кеше булһа ла ҡарап торһасы, күрһәсе тигән аяныслы уй килде башыма. Әгәр ҙә тапмаһалар, күрмәһәләр ниндәй уйҙар, ниндәй һүҙҙәр булмаҫ ине һуңынан, кем белә. Ләкин Хоҙай араланы. Боронғолар әйтмешләй, эсәһе һыуым, ашайһы ризығым булғандыр.
Немецтарҙы ҡыуып киткәс, политрук Әхмәтовтың һәм егеттәрҙең: “Ошонда булырға тейеш, ошонда ҡалды”, -- тигән тауыштары ҡолаҡҡа салынып ҡала. Ләкин “мин бында” тип ҡысҡырырға тауыш та сыҡмай, баш та ҡалҡынмай. Улар ҙа мин кәпәсһеҙ, ҡайыш һәм сөмкәһеҙ ятҡанға шәйләп етмәгәндәрҙер, бәлки. Берәүе килеп, тиргә өтөрәеп туңған сәстән тотоп ҡалҡытты ла: “Бында ята иптәш командир!”, -- тип ҡысҡырып ебәрҙе һәм мине әйләндереп нимәгәлер һалдылар ҙа үҙебеҙҙең яҡҡа тау түбәненә һөйрәп алып киттеләр. Тәнем бер нимә лә һиҙмәй, ауыртмай ҙа ине, ҡулым нисек ятып ҡатҡан – шулай һерәйеп килә, тауыш сыҡмай, күҙ асылмай... Шунан, һөйрәлеп килгәнгәлер инде, тән ҡыҙыша башланы, һерәйгән ҡулдар ҙа төштө. Аяҡ ауыртыуы беленде, сыҙай алмай ҡысҡырғайным, тауыш та сыҡты, күҙ ҙә асылды. Абайлаһам, плащ-палаткаға һалып дүрт кеше дүрт мөйөшөнән тотоп илтәләр. Бер ни тиклем барғас, ҡушарлап ат егелгән бричкаға һалдылар ҙа ауылға

санбүлеккә алып килделәр, бричкала старшина Ғафаров та ята ине. Емерек бер өйгә индереп һалдылар. Шул арала хәл дә бөткән, саҡ тын алып ятыла, ҡан да күп түгелгәйне. Ғафаровтың хәле лә бик ауыр, күрәһең, ныҡ хырылдап саҡ-саҡ һулай. Комиссар Әлибаев менән полк врачы Хомяков эйелде эргәмә. “Хәле нисек?” – тип белеште Әлибаев. Врач: “Күп булһа бер егерме минут ятыр, хәле бик насар”, -- тине. Мин үҙ ҡолағым менән ишеттем һәм күҙемде асып көс менән: “Мин үлергә йыйынмайым!” – тинем дә күҙҙәремде йомдом, ә комиссарҙың күҙҙәрендә йәш күрҙем. Ул башымдан һыйпап торҙо. Улар сығып та китте, Ғафаровтың хырылдауы ла өҙөлдө -- үлгәйне...

Блиновский эргәһендәге был ҡаты һуғыш уңышлы бөттө, утар беҙҙең ҡулға күсте. Дивизия, немец-фашист илбаҫарҙарын ҡыйрата-ҡыйрата, уңышлы һөжүмен дауам итте.

Мине машинаға һалып, дивизияның санэскадронына алып киттеләр. Оҙатыусылар хушлашып, бәхилләшеп, һеҙ илгә ҡайтырһығыҙ, беҙҙекеләргә сәләм әйтегеҙ, тип ҡысҡырғандары ҡолаҡҡа салынды, ә политрук Әхмәтов машинаға ынтылып ҡарап ҡалды. Мин уны башҡаса күрмәнем, һуғышта һәләк булды. (Туймазы районы Чуҡадыбаш ауылынан, өс балаһы ҡала. Бер ҡыҙы Өфөлә, икенсеһе Бәләбәйҙә тормошта, ә өс кенә йәшендә ҡалған улы Урал Салауат ҡалаһында йәшәй, ике бала үҫтерә. Әхмәтовтың әсәһе 1980 йылдың ғинуранды ғына вафат булды).

Санэскадронда мине тағы ла бер бүлмәгә индереп таҡтаға һалдылар. Хәле насар, тип, ҡанмы әллә башҡа бер нәмә бирергә лә операция эшләргә булдылар. Ләкин дивизияның баш хирургы Әхмәт Дәүләтов мине ҡараны ла: “Хәле хөрт, 15-20 минуттан артыҡ ятмаҫ”, -- тине. Ул һүҙҙәрҙе мин икенсе тапҡыр үҙ ҡолаҡтарым менән ишеттем. Һәм миңә бер ярҙам да күрһәтмәй, дөрөҫөн әйткәндә, әжәлдең эш бөтөрөүен көтәләр һымаҡ тойолдо. Хомяков, киреһенсә, тиҙерәк ярҙам итеү яғында булды. Аҙыраҡ һүҙ көрәштергәс, Хомяков: “Мин хужаларҙың[238] бойороғон үтәйем!” – тине лә аяҡҡа, ҡулға энә ҡаҙап йылы ғына бер нәмә ебәрә башланы, ә мин ойоп ҡына ята бирҙем. Күпмелер ваҡыт үткәс, хәл өҫтәлгәндәй булды. Дәүләтов (Өфөнән, профессор, һуғыштан һуң үлде; беҙ уның менән бер-нисә осрашып, һөйләшеп көлөштөк) мине яңынан ҡараны ла: “Молодец, йөрәгең ныҡ икән”, -- тине һәм операция яһарға булдылар. Наркоз бирмәнеләр. Ниндәйҙер дарыу менән энә ҡаҙанылар ҙа итекте, салбарҙы һәм эске кейемде ҡайсы менән ярғыслап алып, эшкә керештеләр. Баш менән ике ҡулды бер ир санитар, һау аяҡты икенсеһе тотто; аяҡты ҡырҡҡылап ваҡ һөйәктәрен сүпләп иҙәнгә ырғыта барҙылар. Шартлағыс пулә тейеп, аяҡ һөйәгенең бер сирек самаһын ватҡан. Теге йылы нәмә энә буйлап һаман да аға, тыныс ҡына ятырға тырышам. Дәүләтов миңә ҡараны ла: “Түҙ, командир, түҙ, булған ярсыҡтарҙы сүпләп бөтөрәбеҙ – бер ваҡытта ла ыҙалатмаһындар үҙеңде”, -- тине.

Операция тамамланғас, аяҡтың ике яғына ике таяҡ ҡуйып бәйләнеләр ҙә бер бүлмәгә яралылар йәнәшәһенә индереп һалдылар. Араларында Кусимов, Макаев һәм башҡа күптәр бар ине. Кусимов мине үҙ эргәһенә иҙәнгә һалдырҙы: ул һәм Макаев – карауатта, ҡалғандар иҙәндә.

---

[238] Дивизия, йәки полк командирҙарының.

Операциянан һуң, артыҡ нәмә ашатып, эсереп ҡуймаһындар, тип һәм һыу-фәлән биреү өсөндөр инде, дивизия комиссары Нәзировтың һеңлеһе Бибинурҙы (ул да дивизия штабында ине) яныма ултыртып ҡуйҙылар. Нимәлер ебетеп, аҙлап-аҙлап ҡына ашата. Бер аҙҙан һуң дивизияның "Ҡыҙыл атлылар" гәзите редакторы яҙыусы Али Ҡарнай яныма килде лә: "Һеҙ үткән төндә алғы һыҙыҡта бик ҡаты һуғышҡанһығыҙ икән, шул турала һөйләгеҙ әле, беҙгә материал кәрәк", -- тип блокнотын алды, ә миндә ул ҡайғы юҡ ине. Эргәлә ятҡан Таһир Кусимов уның һүҙен ишеткәс, асыуланып: "Командирҙың хәле насар, күрәһегеҙ бит; материал кәрәк булғас, һуғыш майҙанына барып күрергә лә яҙырға кәрәк!" – тип бик ҡаты ғына әйтеп туҙҙырып ташланы, башҡалар ҙа уның һүҙен хупланы...
Шулай көндәр үтә тора, беҙ ятабыҙ. Бераҙ хәл кергәнде күрҙе лә Кусимов миңә аҙ ғына хәмер эсерергә уйланы, Бибинур, быға ҡаршы булһа ла, командирҙың һүҙен ҡыя алманы. Аҙ ғына эсерҙеләр. Ысынлап та, еңелерәк булған һымаҡ һиҙҙем үҙемде, аяҡтың һыҙлауы ла кәмегәндәй тойолдо...
Бер көн дошман самолеттары ябырылып, тирә-яҡҡа бомба ырғытып китте, былай ҙа емерек өй дер-ҡалтыраны, тәҙрә быялалары сылтыраны. Кискәрәк беҙҙе машиналарға тейәп, йәһәтләп тылға оҙаттылар. Беҙ дүрт кешене бер йөк машинаһына теҙеп һалдылар, хәлләрәктәр тирәләп ултырыштылар, Кусимов шофер янында кабинала барҙы. Ул да аяҡтан яраланған. Һуғыш булып үткән ялан буйлап, төрлө техника йырғыслаған ҡарлы юлдан төнө буйы илттеләр. Машина һикертә-бәрә, сыҙар ғына әмәл юҡ, һыҙланабыҙ, юл буйынса аҡырабыҙ, улай ғына ла түгел, етмәһә, меҫкен шоферҙы әрләйбеҙ, ул ни эшләһен инде. Кусимов тәҙрәнән әйләнеп беҙгә ҡысҡыра, аҡырмағыҙ, ти...
Таң беленеп яҡтыра башлағанда килтереп бер йорткамы, әллә һарайғамы төшөрҙөләр ҙә киттеләр. Хәл бөтөп, һыҙланып, көнө буйы ятабыҙ. Әллә бөтәбеҙгә бер санитар -- өлгөрмәй, өлгөрөп тә ни ҡыйратһын инде, еңел яраны бәйләүҙән башҡа. Ашау-эсеү ҡайғыһы юҡ, ярау итеү ҙә онотолдо. Аяғы һауҙар юл буйлап атлап китәләр...
Эңер төшөүгә машиналар килә, беҙҙе сығарып тейәйҙәр ҙә йәнә аҡыртып төнө буйы алып баралар, тағы ла бер урынға төшөрөп китәләр. Шулай ыҙалай торғас, тик сыҡмаған йән менән туғыҙынсы тәүлектә саҡ тимер юлға килеп еттек. Аяҡты бәйләгән таяҡтар бушап, теге яҡҡа ла, был яҡҡа ла шыуып ыҙалатты, яңыртып бәйләү булманы, һыҙланыу үҙәккә үтте. Беренсе төндә үк мин Кусимовтан айырылыштым, күрәһең, ул, туҡталып тормайынса, тиҙерәк артабан киткәндер.
Беҙҙе инде вагондарға тейәнеләр. Өс тәүлектән һуң Балашово ҡалаһына сортировочная госпиталгә килеп эләктек. Ҙур залға индереп һалдылар ҙа һәр кемдең хәлен тикшереп, дарыу ҡаҙап, яраларын бәйләп, йәһәт кенә сығарып ялан госпиталенә йәғни вагондарға тейәй башланылар. Был госпиталдәге яралыларҙың күплегенә аптырарһың. Тәүлегенә меӊ кеше килеп, шул тиклеме тылға оҙатыла, тип һөйләнеләр. Сират миңә лә етте. Хирург ҡараны ла: "Тиҙ генә таҙартып бәйләгеҙ ҙә 7-нсе палатаға оҙатығыҙ", -- тине. Был миңә аңлашылманы башта. Башҡаларҙы тышҡа вагондарға ташыйҙар, мине иһә шул әйтелгән палатаға индереп һалдылар ҙа сығып киттеләр. Хәле бик насар, тейешле урынға барып етмәҫлек кешелрҙә шул бүлмәгә һалалар икән. Ысынлап та ауыр хәлле, ышанысһыҙ 13 кеше ятабыҙ. Ысынлап та тәүлегенә 2-3 кеше үлә. Уларҙы алып китәләр, урындарына яңылар килә.

Шулай итеп, дөрөҫөн әйткәндә, әжәл көтөп ятабыҙ. Тәүге көндәрҙә миңә лә бер төрлө лә иғтибар булманы, тип әйтерлек. 3-4 көн үткәс, врач ҡараны ла дарыу ҡаҙарға ҡушты. Тағы ла бер-нисә көндән һуң ҡарап, аяҡка ике кирбес тағып тарттырып ҡуйырға бойорҙо. Доктор минең үлмәҫемә ышана башланы, буғай. Айға яҡын яттым – үлмәнем дә ҡуйҙым. Ахырҙа хирург ҡараны ла: “Сердце хорошее, выдержил, отправить в глубокий тыл”, -- тине һәм ялан госпитале вагонына индереп, стенаһына носилка менән элделәр ҙә төпкөлгә оҙаттылар. Иғтибар ҙа артты, ашау-эсеү ҙә ипләнде, аяҡ та ныҡ бәйле, урын да шөйлә уңай. Комиссар көн дә политинформация үткәрә.

Оҙаҡ килдек. Маршрут үҙгәрә барҙы. Башта Ташкентҡа, унан Омскиға, Ҡазанға тинеләр, аҙаҡ үҙебеҙҙең Өфөгә килтереп, 2575-енсе эвакогоспиталгә урынлаштырҙылар (Ленин урамы, тимер юл вокзалы яғындараҡ).

Ҡаты яралы 20-ләп кеше, күбеһе офицерҙар, бер бүлмәлә ятабыҙ. Мине бүлмәнең бер мөйөшөнә ишеккә ҡаратып һалдылар ҙа, операция яһағандан һуң 14 килограмлы гер тағып, станок аша аяҡты тартырып ҡуйҙылар. Бау тағыу өсөн тубыҡтан түбәнерәк ике урындан һөйәкте быраулап тиштеләр.

Аяҡ һөйәге тиҙ ялғанмайынса, шул гер менән оҙаҡ ятырға тура килде. Тик алты ай үткәс кенә ул ялғанып үҫте, шунда ғына герҙе ысҡындырҙылар. Өс айым урындан тороп, йөрөп өйрәнеүгә үтте. Алты ай буйына тәҙрәнән дә күрмәнем тышты, тик ишек башына ғына ҡарап яттым, сөнки арҡа боролоп булманы. Арҡам уйылып бөттө, уны спирт ишараты менән ыуған булалар. Күрмәгәнде күрһәтте был аяҡ, тик йән генә сыҡманы. Боронғоларҙың: “Әҙәм тигәнең – эт йәнле”, -- тигәндәре дөрөҫ икән.

Яраланғас айҙан артыҡ ваҡыт үтте, хат яҙыу тураһында уйларға ла мөмкин түгел ине, унан алда ла яҙып булманы. Тимәк, өйҙәгеләр хәлемде белмәй.

Өфөгә килгәс тә телеграмма һуҡтырттым (Баймаҡҡа). Ике көндән һуң ҡатыным килеп өҫтөмә йығылды... Ул бер-нисә тапҡыр шулай булып, ҡалала фатирға урынлашып, унар, егермешәр көн тороп, яныма килеп йөрөнө. Район етәкселәре һәм башҡа иптәштәр ҙә хәлемде белде, өлкә етәкселәре лә хөрмәтләнеләр. Бүлмәбеҙҙә артистар концерт ҡуйҙы, яҙыусылар ҙа булды. Үҙемде, аҙыҡ алып тороу өсөн, Хөкүмәт ашханаһына беркеттеләр (ашау хөртөрәк ине). Аҙыҡты йә ҡатын, йә сестра килтереп торҙо.

Дивизия комиссары Мөбәрәк Нәзиров менән Таһир Кусимов та килде (Нәзиров дивизияға өҫтәлмә көс алырға ҡайтҡан, Кусимов госпиталдән сыҡҡайны).

Яраланғандан һуң ун ай үткәс кенә ике ҡултыҡ таяғы менән өйгә ҡайтып индем һәм шул көндән алып икенсе төркөм инвалиды булып ҡалдым.

* * *

Тағы ла бер-нисә һүҙ.

Һуғыш – һуғыш инде ул. Уйламаған төрлө хәлдәр, ваҡиғалар булып тора. Уларҙың барыһы ла һуғыш шойҡаны. Үлде йәки хәбәрһеҙ юғалды, тигән хәбәр ҡағыҙы килһә лә, күп ваҡыттан һуң ул әҙәм үҙе ҡайтып килеү осраҡтары ла була. Йәиһә башҡа төрлө юлдар менән дә хәбәрҙәр килеп етә бөрәүҙәрҙең өйөнә һәм ауыр ҡайғыға һала.

Минең турала ла үҙебеҙҙең дивизия күләмендә төрлө хәбәрҙәр таралып өлгөрә. Уны ла һүҙ ыңғайында яҙып китәйем. Берәүҙәр – үлгән, тип, икенселәре ҡаты яраланған да дошман тылында ҡалған, тип (быныһы дөрөҫ), өсөнсөләре уның ҡайҙа булыуын бер кем дә белмәй, тип һүҙ таратып йөрөгәндәр. Ә бына Зекериә Ҡунаҡбаев тигән бер егет (Баймаҡ районы Юлыҡ ауылынан -- йәмәғәтем Биби һәм уның әнейенең ауылдашы), беҙҙең дивизияла хеҙмәт итеүсе (мин уны белә инем), Юлыҡҡа әнейенә хат яҙған. Хатында ул, элекке район мәғариф бүлеге мөдире, Биби апаның иптәше, Камилә әбейҙең кеәйүе командир Бәҙри Мәмбәтҡолов ҡаты һуғыш ваҡытында һәләк булды, уң ҡабырғаларын снаряд аҡтарып ташлаған, мин уны үҙ ҡулым менән ерләнем, тип хәбәр иткән. Хат минең ғаиләгә килеп эләгә. Оло ҡайғыға тарып, көн дә “ҡара ҡағыҙ” көтә башлайҙар. Минең айлата ебәреп торған аҡсаны ла барып алмайҙар, аҡса урынына “ҡара ҡағыҙ” тоттороп сығарырҙар, тип ҡурҡалар.

Баймаҡ районы Муллаҡай ауылы егете Билалов Рамаҙан да фронттан шул ауыл советы рәйесе Хәйритдинова Әминәгә ебәргән хатында, иптәш Мәмбәтҡолов дошман тылында һәләк булған тип ишеттем, дөрөҫ булһа, бик ҡыҙғаныс, тип яҙған. Ул хатты район советы башҡарма комитеты рәйесе Һиҙиәт Нәзиров та уҡыған, өйгә лә ишетелгән.

Тағы ла шул: дивизия комиссары Мөбәрәк Нәзиров дивизияға өҫтәлмә көс алып кире фронтҡа китерҙән алда ғаиләһен күрергә Баймаҡҡа ҡайта, район активы йыйылышында уның менән осрашыу үткәрәләр. Шунда кемдер берәү: “Иптәш Мәмбәтҡолов һәләк булған, тигән хәбәр йөрөй, дөрөҫмө?” -- тип һорағас, Нәзиров: “Мин киткән төндә ул дошман тылында ҡалды тигән хәбәр ишетелгәйне, нисек булғандыр, дөрөҫөн белмәйем, тип яуап ҡайтарған. Шундай икеле хәбәрҙәр айҙар буйына гиҙгән. Актив йыйылышының иртәгәһенә минән баяғы телеграмма килә лә ҡатынымды Нәзиров менән бергә Өфөгә оҙаталар.

Йәнә бер ҡыҙыҡлы иҫтәлек. Мин өйгә ҡайтып бер-нисә көн үткәс тә, өҫтөнә көнгә уңған, һарғайған һалдат гимнастерка-салбары, пилотка кейгән бер егет килеп иңемә башын һалды ла илап ебәрҙе. Үҙен танымайым, тик кейеменә ҡарап һалдат булыуын аңланым. “Һин кем? Ниңә илайһың?” – тип һораным. Ул бераҙ тынысланғас, йәнә илай-илай: “Ғәфү итегеҙ, иптәш командир, мин – Ҡунаҡбаев Зекериә, Һеҙҙе, ул һәләк булды, үҙ ҡулым менән ерләнем, тип хат яҙған кешемен”, -- тине. Ниңә дөрөҫ булмағанды яҙҙың, тигәс, ул: “Үҙ кешебеҙ ерләгән икән тип тынысланырҙар, күңелдәренә яҡшыраҡ булыр тип уйлағайным”, -- тине. Хәҙер мин өйҙә инде, иламағыҙ, тип тынысландырҙым уны. Яугирем, яраланып, минән алда ҡайтҡан булған икән. Хәҙерге көндә Әбйәлил районы Йәнгел совхозында йәшәй, осрашып йөрөйбөҙ...

Бәҙри Мәмбәтҡолов.

Сибай ҡалаһы, ғинуар – февраль 1980 й.

Полк командиры Т. Кусимов мәҡәләһенән.

Һуңғы көндәрҙәге һуғыштарҙың береһендә Мәмбәтҡолов командалыҡ иткән эскадрон ҡаршылыҡ күрһәтеүсе дошман ғәскәрен ҡыйрата һәм уның менән аралашып һуғыша башлай. Бына шул саҡ Мәмбәтколов Бәҙри ҡаты яраланып немецтарҙың тылында тороп ҡала. Эскадрон яугирҙәре быны белеү менән ҡайтанан

атакаға ташланып, дошманды артҡа сигенергә мәжбүр итәләр ҙә үҙҙәренең һөйөклө командирын ҡотҡарып алып сығалар. Хәҙер иптәш Мәмбәтҡолов икенсе тапҡыр юғары наградаға күрһәтелде. ("Ҡыҙыл Башҡортостан"дың 1943 йыл 7 ғинуар №5 һаны).

Генерал Шайморатовты һәм Башҡорт дивизияһы яугирҙәрен маҡтап яҙыу – ярамаған "милләтселек"...

Һүр. 24.. Генерал М.М. Шайморатов.

Сталинград фронты, 1942

Ҡадир Даян фажиғәһе.

Протокол №1 общегородского собрания писателей Башкирии от 17 и 18 августа 1951 года.

Повестка дня:

1. Идеологические извращения в литературе, вскрытые статьями в газете "Правда" и задачи писателей Башкирии.

2. О переводах башкирской поэзии.

Слушали: по первому вопросу доклад т. Валеева А.;

По второму – т. Харисова А.

Доклад Валеева А.

...серьезные успехи нашей литературы были достигнуты после исторического решения ЦК ВКП(б) по идеологическим вопросам... Но это вовсе не означает, что мы гарантированы от проявления националистических тенденций в нашей литературе. Тем более, что отдельные башкирские писатели в свое время были раскритикованы в партийной печати и в литературной критике. Я имею в виду пьесы поэта-драматурга Б. Бикбая, роман Дж. Киекбаева и отдельные стихи и песни К. Даяна...

В 1943 году К. Даян опубликовал свое стихотворение "Сынам Башкирии", где он пытался дать характеристику воинственности башкирского народа вне времени и пространства:

Спокойные, хладнокровные

Башкиры, живущие на Урале.

Если уж вскипит у них ненависть –
Огонь забушует.
Из древних времен
Башкир был мужественным батыром.
Он, как тигр, набрасываясь,
Гнал своих врагов.
Он батыром родился,
В боях победами прославился.
Врагам он – яд.
Друзьям – исцеление.

И на основе такой, с позволения сказать, исторической характеристики Кадир Даян делает вывод, что из этой войны башкиры будут возвращаться с победой...

Наша советская армия победила потому, что она была армией социалистического государства, руководимого великой Коммунистической партией, гениальным полководцем тов. Сталиным. А не потому, что башкиры или другие народы "родились батырами" и испокон веков были героями, как это неуклюже пытался доказать поэт Кадир Даян.

В текущем году Башгосиздат выпустил в свет книгу избранных произведений Кадира Даяна. Стихотворение, о котором сейчас только шла речь, конечно, в избранный сборник не вошло. Тем не менее рецидивы идейных ошибок, приводящих в конечном счете к *национализму,* нашли место и в этой последней книге поэта.

Очевидно многие товарищи, сидящие здесь, знают песню Кадира Даяна об отважном *генерале Шаймуратове,* которая начинается следующими словами:

Уезжали башкиры на войну,
Провожал их голубой Урал.
Впереди на играющем коне
Ехал Шаймуратов генерал.

В "Избранном" песня "Генерал Шаймуратов" имеет примечание "измененный вариант". Вариант изменился, а существо ошибки осталось. В измененных строках говорится о боевых делах генерала, о том, что он "проходил через огонь и воды", "огненную бурю поднимал", "когда чужую свору громил". И далее говорится:

Урал растил сыновей
Со славными сердцами и мужественно-честных.
Вот с ними врагов громил
Шаймуратов-генерал.

И опять получается так, что башкирские воины хорошо воевали только потому, что их растил Урал, а советское государство тут не при чем. При этом не надо забывать: говоря об Урале, Кадир Даян не имеет в виду весь Урал, а имеет в виду только Башкирию... На 107-й странице "Избранного" напечатана другая песенька о гнедом коне большегривом – в третьей строфе песни говорится:

На седле отважный егет –
Сокол голубого Урала.

Едет, как батыр Салават,
Высоко подняв саблю свою.

Опять егет отважный потому, что он – “сокол голубого Урала” и потомок Салавата, а советское государство тут не при чем.

Или вот на 113-й странице книги напечатан “Марш Кусимова”. Опять “как молния блестит сабля и “из-под копыт искра летит” – едет “отважный сын башкирина – Кусимов”...

Все эти фактыговорят о том, что поэт Кадир Даян до сих пор не сумел осбободиться от серьезных идейных ошибок своего творчества, которые, в конечном счете, приводят к националистическим ошибкам...

А. Валеев. *(Үҙ ҡултамғаһы).*

Выступления в прениях:

6. Х. Каримов.

...Те ошибки, о которых речь шла выше, особенно ярко проявились в творчестве поэта Кадира Даяна, о чем убедительно говорил первый докладчик, о чем основательно по-партийному писала газета “Кызыл Башкортостан” (статья Г. Амири “Против искаженного изображения социалистической действительности в поэзии”).

Многие стихи Кадира Даяна действительно далеки от нашего времени, ничего не имеют общего с действительными чувствами и переживаниями советских людей...

Ряд его песень не опубликованы в печати, ибо этого не могут претендовать. Но почему же они поются по радио? Почему же наши талантливые композиторы порою впустую затрачивают свои творческие энергии, сочиняя музыку на подобные тексты Даяна?..

Может возникнуть вопрос: неужели только сегодня обнаружены эти ошибки Даянова? Нет. На эту тему не мало выступлений и в секции драматургии ССП, и на партийных собраниях. Но беда в том, что т. Даянов до сих пор не прислушивается к этой справедливой критике. В этом ему мешали зазнайство и высокомерие.

Идеологические извращения в произведениях поэта Кадира Даяна и некоторых других авторов говорят не только об идейном отставании этих авторов, но они говорят также о серьезных недочетах в целом в работе СП, и его правления...

9. Р. Габдрахманов.

В докладе было умолчено о *теме любви* в нашей литературе. Разрешать тему любви – задача наших писателей. Наши юноши любят и любят они сильно и искренно, как не могут любить другие юноши в капиталистическом обществе.

В этой области имеются извращения, особенно в произведениях Кадира Даяна. Даян по своим произведениям выступает как человек, который не умеет по-настоящему любить. Герои его произведений о любви – бездельники, живущие какими-то непонятными для наших людей чувствами. Они любят друг-друга за “красивые глаза”. А где же душевные качества этих героев? Герои Кадира Даяна могут влюбиться друг в друга за какие-либо минуты, а забывать могут так же в один миг. А наши люди любят друг друга не за их внешнюю красоту...

11. Р. Нигмати.

..."Правда" в своей передовой статье от 16 июля 1951 года указывает: "Известно, что существо национализма кроется в стремлении обособиться и замкнуться в рамках национальной ограниченности, не видеть того, что сближает и соединяет трудящихся национальностей Советского Союза. Одним из своеобразных проявлений национализма является уход от тем современности в далекое-далекое прошлое, идеализация старины, наблюдающиеся у отдельных писателей".

В своей редакционной статье газета "Кызыл тан" совершенно правильно вскрыла идейные пороки в творчестве поэта Кадира Даяна. Разьве Кадир Даян явно не отходит от тем современности? Отходит. Разьве Кадир Даян не идеализирует прошлое? Идеализирует. Разьве Кадир Даян не воспевает в 1950 году допотопные орудия труда – серп и косу? Воспевает. Да, серп и коса нам еще бывают нужны. Но не они решают успехи социалистического сельского хозяйства. Не их нужно воспевать, а воспевать нужно современную передовую советскую технику...

15. А. Усманов.

...У Даяна нет партийности, целеустремленности. Он любуется сам собой, в итоге получается искусство ради искусства...

Другой факт. Даян популярный поэт среди народа. Он популярен не потому, что заслуживает этого, а потому, что его сильно пропагандируют и композиторы, и комитет радиоинформации и т.д. Пора положить конец такому факту.

Решение собрания:

...наряду с достижениями в башкирской советской литературе – в творчестве отдельных писателей все еще имеет место факты идеологического извращения и ошибки, приводящие в конечном счете к национализму. В песнях и стихах башкирского поэта Кадира Даяна башкирский народ, сама Башкирия и ее столица Уфа изображается вне времени, вне эпохи, поэт не замечает великие социалистические преобразования, происшедшие в Башкирии, старательно перечисляя в своих песнях и стихотворениях растительный и животный мир и богатства Урпала вообще, поэт Кадир Даян не видит советских людей, строящих коммунизм, а в тех редких случаях, когда поэт берется за показ людей, он не уходит дальше изображая их отсталыми в экономическом, техническом, культурном и идейном отношениях, с примитивными орудиями труда "дедовских времен". Эти порочные песни Кадира Даяна без разбора принимаются союзом Композиторов для переложения на музыку и усиленно пропагандируются комитетом Радиоинформации и бригадами Башфилармонии...

Председательствовал **Х. Каримов.**

Протокол вел секретариат: **Ш. Биккулов, Галиев.**

(Все подписи подлинные)

Подготовка к декаде башкирской литературы и искусства в 1952 году.

Справка о состоянии башкирской советской литературы на 1 марта 1952 года. *(Оригинал от руки Мустая Карима).*

...Идейные ошибки одного из башкирских поэтов К. Даяна на протяжении нескольких последних лет служили предметом суровой критики партийной печати и читательской общественности...
Председатель правления ССП Башкирии **М. Каримов.** *(Үҙ ҡултамғаһы).*

Шулай итеп, Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында данлы Башҡорт атлы дивизияһында хеҙмәт иткән, уның бөтә батырлыҡтарын үҙ күҙе менән күреп, үҙ иңендә татып белгән һәм шулар хаҡында яҙырға тырышҡан әҙибебеҙ Ҡадир Даян шул изге теләге һәм эштәре өсөн ҡаты туҡмала... Был, әлбиттә, КПСС-тың Башҡортостан өлкә комитетының электән үк килгән яһил сәйәсәте ине, ә баяғы йыйылышта сығыш яһаусылар, теләйме-теләмәйме, уның бойороғон үтәне. Тимәк, был темаға башҡаларҙың тотонмауы, дивизия тураһында оҙаҡ йылдар һуҙымында тос әҫәрҙәр ижад ителмәүе өсөн аптырарға ярамай...
Өфө, 2006.

АҘАҠ ҺҮҘ

Билдәле булыуынса, немец-фашист илбаҫарҙарына ҡаршы һуғышҡа Ватаныбыҙҙың күп милләтле бөтә халыҡтары берҙәм күтәрелә, "Все для фронта! Все для разгрома врага!" тигән лозунгы аҫтында илдең бөтә көс-ҡеүәте егелә. 1941 йылдың һуңғы алты айында уҡ республикабыҙҙың хәрби хеҙмәткә яраҡлы 297.190 кешеһенең 231.993-ө һуышҡа оҙатыла, мөмкин булған бөтә матди байлыҡтар, шул иҫәптән яу аттары, техника, аҙыҡ-түлек, кейем-һалым һ.б. халыҡ хужалығынан фронт файҙаһына ҡырсып алына. Ҡыҫҡа арала ерле халыҡтан дивизиялар, бригадалар, авиаполктар, дивизион һәм бронепоездар төҙөлөп өлгөртөлә, фронт өсөн, еңеү өсөн үтә кәрәкле һәм ауыр тыл хеҙмәте ас-яланғас ҡарт-ҡоро, ҡатын-ҡыҙ, бала-саға иңенә ауҙарыла. Ошоға миҫал итеп ВКП(б)-ның Башҡортостан өлкә комитеты бюроһы ҡарарҙарынан бер-нисә өҙөк алайыҡ:

"Обязать секретарей горкомов и райкомов ВКП(б), председателей исполкомов городских и районных советов на смену рабочих, призванных из промышленных предприятий, мобилизовать женщин и мужчин, годных к физическому труду" (13 апрель 1943 йыл).

"Некоторые руководители предприятий, хозяйственных, советских и партийных организаций, исходя из местнических интересов, игнорируют первостепенные задачи беспрерывного пополнения рядов Красной Армии свежими резервами, не освобождают для Красной Армии людей под предлогом "незаменимости", хотя часть из них в народном хозяйстве вполне может быть заменена нестроевыми, годными к физическому труду, и женщинами...

Осудить факты проявления со стороны отдельных руководителей предприятий, хозяйственных, советских и партийных организаций местнических настроений, выразившихся в нежелании высвободить из народного хозяйства людей для пополнения Красной Армии, вполне могущих быть замененными нестроевыми, годными к физическому труду, и женщинами"... (29 март 1944 йыл).

Тимәк, һуғышҡа яраҡлы бөтә кешеләребеҙ, матди маяларыбыҙ айҙыҡын-айға, йылдыҡын-йылға ҡырсып алынып тора, шунан да артыҡ көсәнергә хәл ҡалмай кеүек...

Көрсөккә таянған ошо афәтле көндәрҙә республика халҡының, етәкселәренең бөтә биргәндәргә өҫтәлмә рәүештә өр-яңынан, бөтәһен дә республиканың тулайым үҙ иҫәбенән һәм, ул ғына ла етмәгәндәй, ылғый башҡорттарҙан ғына торған тағы ла ике дивизия, атлы дивизиялар, төҙөп бирергә көс-ҡеүәте, дәрте ташып торғандай итеп күрһәтелә тарих китаптарында, "хеҙмәтсәндәрҙең шул берҙәм теләктәрен" бойомға ашырыуҙы республика етәкселеге бик үтенеп һорағас, Дәүләт Оборона Комитеты Председателе Сталин быны ҡәнәғәтләндергән, тиеп яҙыла. Әммә большевистик-тоталитар режимдың күп ҡарарҙарының, шул иҫәптән хеҙмәтсәндәрҙең ете ҡат тиреһен тунап ала торғандарының да, "хеҙмәтсәндәрҙең үҙҙәренең үтенеп һорауы буйынса" тип ҡабул ҡылынғанлығы мәғлүм...

Ә ғәмәлдә был "башланғыс", һис шикһеҙ изге башланғыс, республикаға юғарынан, Мәскәүҙән, төшөрөлә: тәүҙә Дәүләт Оборона Комитеты 1941 йылдың 13 ноябрендә республиканың тулыһынса үҙ иҫәбенән ике башҡорт кавалерия дивизияһы төҙөргә №894-СС ҡарарын ҡабул ҡыла. Һәм шунан һуң өс тәүлек үткәс, 1941 йылдың 17

ноябрендә, ВКП(б)-ның Башҡорт өлкә комитеты бюроһы был ҡарарҙы “одобрить и принять к неуклонному исполнению” тигән ҡарарын сығара...

Әйтергә кәрәк, баштан-аяҡ фәҡәт республика елкәһенә ятҡан быңдай милли дивизия ул ваҡытта Башҡортостандан башҡа бер республикала ла төҙөлмәй, был эшкә, моғайын, Сталинды 1919 йылда башҡорт атлыларының “революция бишеге” Петроградты һәләкәттән ҡотҡарып ҡалыу иҫтәлеге этәргәндер. Ләкин иҫкене ҡабатлау, беренсенән, яңы шарттарҙа үҙ-үҙен аҡламауы, хатта зыянға килтереүе билдәле. Икенсенән, атаҡлы маршал Тухачевскийҙың алда буласаҡ һуғыш хаҡындағы доктринаһында кавалерияның инде көнө бөтөүе, моторҙар һуғышы буласағы тураһында бик дөрөҫ әйтелгәйне. Тухачевский юҡ ителгәс, өҫтөнлөк алған кавалерист маршал С.М. Буденный кавалерияны әүәлгесә төп көстәрҙең береһе итеп һананы. Германия армияһында иһә, киреһенсә, кавалерия бөтөрөлөп, моторҙарға өҫтөнлөк бирелде...

Һәр хәлдә, республика етәкселеге был әһәмиәтле башланғысты дәррәү бойомға ашырырға тотондо. Башҡорттар йәшәгән ауылдарҙа, ҡалаларҙа халыҡҡа социалистик Ватаныбыҙҙы һәләкәттән һаҡлап ҡалыу өсөн аҡтыҡ көстө егеп тырышырға – тулыһынса үҙ иҫәбебеҙҙән милли дивизиялар төҙөп оҙатырға кәрәклеген паңлатып йыйылыштар үткәрелде һәм күптәр был дивизияға үҙҙәре теләп яҙылды. Дивизия комиссары М.З. Нәзировтың Дала Хәрби Округы Хәрби Совет ағзаһы Мехлисҡа яҙған рапортына ҡарағанда, дивизияла башҡорттар – 89%, татарҙар – 7%, башҡа милләт кешеләре 4% тәшкил иткән. Борондан уҡ ата-бабаларыбыҙ ҙур Ватаныбыҙ Рәсәйҙең именлеге хаҡына һуғыш ҡырҙарында йәнен аямаған башҡорттоң был патриотизмы, әлбиттә, һоҡланғыс күркәм күренеш, ләкин ғәскәрҙәрҙе күпләп ҡырыу ҡоралдары ҡулланылған яңы заман һуғышында беҙҙең кеүек аҙ һанлы милләт өсөн был ифрат хәүефле. Сөнки милли ғәскәри төркөм һуғыш ҡырында шул милләттең үҙен генә һайлап алып онтаҡлаусы хәтәр әжәл тирмәненә әүерелә...

Шулай итеп, 112-нсе Башҡорт дивизияһы башҡорт халҡының ҡаймағынан ғына һайлап төҙөлдө һәм уның һәр яугире үҙен ата-бабаларҙың данын, аҡ намыҫын тап төшөрмәй һаҡлаусыһы итеп тойҙо, шул арҡала дивизия утҡа кергән тәүге көндәренән үк сая алышты, һәр ваҡыт алдан барҙы, һис сигенеү белмәне.

1942 йылдың көҙөндә Сталинград янында фашистар фронтын ярып, 5-енсе танкы армияһы менән берлектә көньяҡ-көнбайышҡа табан Усть-Белая Калитва ҡалаһынаса ғәрәсәтле 360 км араны бер туҡтауһыҙ һуғышып үткәндәрендә Башҡорт дивизияһы гел корпустың алдында бара һәм шаҡтай ауыр юғалтыуҙар кисерә, быны иһә республика халҡы үҙ иҫәбенән ямарға тейеш була. 1942 йылдың 3 ноябрендә республика етәкселегенә аҙҡарылған, дивизия башлыҡтары Шайморатов, Нәзиров, Абдуллин ҡул ҡуйған рәсми хатта ошондай юлдар бар: “Дивизия имеет потери в конском составе, около 1000 бойцов сейчас без лошадей. Поэтому убедительно просим, если возможно, пополнить конским составом за счет народного хозяйства Башкирии... Просим, если возможно выслать нам (для медсанэскадрона) 100 комплектов теплой постельной принадлежности (одеяла, белье, простыни)”...

Бигерәк тә Обливская тимер юл станцияһы янындағы һуғыш һәләкәтле була. Ул саҡтағы дивизия командирының урынбаҫары Г.А. Белов яҙыуынса, баш өҫтөндә илле

самолет өҙләкһеҙ осоп йөрөп ата, ә дивизияның уларға атырҙай зениткалары юҡ, совет самолеттары ла ярҙамға килмәй...
Өлкән лейтенант Ғәлиәхмәт Ғәйетбай улы Сәйфуллиндың да иҫтәлеге шул хаҡта: "Облиевская тимер юл станцияһында дошман бик ҡаты ҡаршылаңы. Аңһыҙыраҡ барып, тап ҡаршыһына ҡаптыҡ та көслө утына юлыҡтыҡ. Тирәбеҙ тип-тигеҙ ялан – самолет хатта яңғыҙ кешене лә баҫтырып йөрөп ата, өҫтөбөҙгә бомбалар, рельс һыныҡтары яуҙыра. Шул көн эсендә бер мең яугиребеҙҙе, мең дә биш йөҙ атыбыҙҙы юғалттыҡ; кисенә йыйылғанда дивизия комиссары Мөбәрәк Нәзиров миңә шулай тип әйтте"... Һәм тағы баяғы Г.А. Белов яҙмаһы: "В течение 25 ноября противник сделал не менее восьмисот самолет-вылетов, не давая возможности конникам подняться. Как только какое-либо орудие или пулемет открывали огонь, на него немедленно набрасывались самолеты врага. За один только день из строя выбыло 4 командира полка, начальник штаба дивизии, 12 командиров эскадронов, свыше пятисот человек личного состава и до 1500 коней"... Ә һауанан ярҙамға бер смолет та килмәй... Бына шул мәхшәрҙе дөрөҫләүсе рәсми документ:
"Письмо управления генерал-инспектора кавалерии Красной Армии в Башкирский обком ВКП(б) с просьбой о пополнении личного состава 112-й Башкирской кавалерийской дивизии. 30 декабря 1942 г.
112-я Башкирская кавалерийская дивизия героически сражается в составе войск Юго-Западного фронта. В результате упорных боев дивизия понесла большие потери и крайне нуждается в срочном пополнении. В соответствии с письмом заместителя народного комиссара обороны т. Щаденко № 1/3107-Ш от 16-го декабря 1942 года, прошу Вас принять все меры к выделению в кратчайший срок людских и конских ресурсов.
Для практического разрешения вопросов в приеме для дивизии пополнения, от управления генерал-инспектора кавалерии Красной Армии командируется заместитель командира дивизии по политчасти подполковник тов. Назыров, которому прошу оказать всемерное содействие и помощь в получение пополнения для восстановления 112-й Башкирской кавдивизии.
Врид. генерал-инспектора кавалерии Красной Армии
*генерал-майор **Обухов**".*
Иғтибар итегеҙ: дивизияны тергеҙеү ("для восстановления") тураһында һүҙ бара, тимәк, ул ифрат ныҡ ҡаҡшатылған...
Көсәнә-көсәнә көрсөккә таянған республиканың етәкселеге, әлбиттә, ашығыс ҡарарҙар ҡабул ҡылып, дивизия өсөн кешеләр ҙә, аттар ҙа, башҡа нәмәләр ҙә хәстәрләп ебәрергә ныҡ тырыша, тик быны тиҙ араларҙа атҡарырға насип булмай. Һөҙөмтәлә атлыларыбыҙ сафтары һирәкләнгән, ҡанһыраған килеш һаман һуғышыуын дауамлай. Дивизияның рейд ваҡытындағы политбүлек башлығы вазифаһын башҡарыусы С.Р. Ҡадировтың КПСС өлкә комитетына атҡарған бер аңлатмаһынан күренеүенсә: "Назыров поехал в Уфу 17 ноября 1942 года за пополнением и прибыл в дивизию только 27 марта 1943 года. За это время не было ни от кого ни одной телеграммы. Мы продолжали выполнять нагрузку за полноправную дивизию, хотя активных штыков было всего лишь 52%"... Ошондай хәлдә яугирҙәребеҙ дошман тылына тәрән рейдҡа керергә тейеш була...
Ворошиловградты фашистарҙан азат итеү өсөн был рейд һис шикһеҙ кәрәк булғандыр һәм ул, әлбиттә, яңы заман һуғышының талаптарына ярашлы итеп һәр

яҡлап үлсәнергә, кавалериянан тыш, танкылар, авиация ярҙамында атҡарылырға тейеш ине. Тик үкенес: Ҡыҙыл Армия генералитеты был юлы ла иҫкереп бөткән үткән заман өлгөһөндә эш итә -- маршал С.М. Буденныйҙың Атлы армияһының 1919 йылда Дебальцевоға тәрән рейдын үҙгәрешһеҙ ҡабатлай...

Рейд барышы баштан уҡ хафаға һала: дошман фронтын өҙөп бирергә тейешле 3-өнсө гвардия аомияһы (генерал Д.Д. Лелюшенко) быны эшләмәй; корпустың күрше дивизиялары ла уңышҡа ирешә алмаған, Башҡорт дивизияһы алға дөрөп, фронт һыҙығында ике км оҙонлоғонда "ҡапҡа" асып, бөтә корпусты эйәртеп кереп китә. Тик баяғы армияның ярҙамһыҙлығы арҡаһында "ҡапҡа" арттан бик тиҙ ябылып, һуғыш монаяттары тейәлгән дивизия обоздары бүленеп тороп ҡала, яугирҙәребеҙ һуғыш кәрәк-яраҡтарын дошман ҡулынан тартып алып һуғышырға мәжбүр була...

Корпус командиры генерал-майор М.Д. Борисовтың үҙенә һүҙ бирәйек:

"Корпусҡа, көнбайышҡа табан барғаныбыҙ һайын, немецтарҙың ҡаршылыҡ күрһәтеүе бермә-бер артты. Корпус дошмандың торған һайын көслөрәк танк һәм пехота һөжүмдәренә тарыны. 12-һенән 18 февралгә тиклем булған арауыҡта, немец-фашист ғәскәрҙәренең тылында Бронская, Чернухино, Городище станциялары төбәген үҙ ҡулдарында тотоп, 7-енсе гвардия атлы корпусы дошмандың күп тапҡырға артыҡ пехота һәм танк көстәре менән ҡаты һуғыштар алып барҙы. Дошман байтаҡ дивизияларын, фронттың башҡа участкаларынан күсереп, ошо төбәккә тупларға мәжбүр булды. Шуға ла ҡарамаҫтан, биләнгән төбәкте корпусыбыҙ частәре үҙ ҡулдарында ныҡ тотоп, аҙыҡ һәм һуғыш монаяттары һаҡлауыҡтарына (складтарына), яғыулыҡ баҙҙарына өҙлөкһөҙ сапҡындар яһауын дауам итте, уларҙы шартлатты һәм яндырҙы. Бынан тыш, ҡыйыу һәм тәүәккәл эш ҡылып, атлылар дошмандың яғыулыҡ һәм башҡа хәрби материалдар тейәлгән эшелондарын түңкәрҙеләр, шуның менән уға ҙур зыян килтерҙеләр.

Атлыларҙың уңышлы хәрәкәт итеүҙәренә лә ҡарамаҫтан, хәл шаҡтай ҡатмарлана бара, сөнки корпустың тороп ҡалған тылы менән бәйләнеш юҡ ине. Дошман ҡеүәтләнгән һайын, һуғыш монаяттарыбыҙ етмәй башланы. Атлылар бер килке күләмдә немец-фашистар иҫәбенә, нигеҙҙә уҡсы ҡоралдары менән, ҡоралландылар. Әммә һуғыш монаяттарына ҡытлыҡ бөтмәне. Беҙҙең 3-өнсө гвардия армияһы командалығына йүнәлтелгән бөтә үтенестәр яуапһыҙ ҡалды"...

Тимәк, дошмандың тәрән тылында үлемесле һуғышҡан атлы корпус фронт штабы тарафынан "онотолған", бер ниндәй ҙә ярҙам күрһәтелмәйенсә, яҙмыш ҡулына тапшырылған...

"Дошмандың танкылары менән көрәшеү өсөн артиллерия снарядтары кәрәк ине, — тип дауамлай М.Д. Борисов. — Корпус шул йәһәттән яман ҡытлыҡ кисерҙе. Дошман танкыларына ҡаршы ҡуйыу өсөн атлыларҙың бер генә лә танкыһы юҡ ине.

Ҡамау балдағын ҡыҫып, дошман үҙенең көстәрен ашығыс рәүештә үҫтереүен дауам итте. Катастрофа янаны атлыларға. Корпус командиры 3-өнсө гвардия армияһы командующийынан, ә унан һуң Көньяҡ-Көнбайыш фронт командующийынан баҫып алынған төбәкте ҡалдырып китергә һәм үҙ ҡарамағында хәрәкәт итергә рөхсәт биреүҙәрен һораны. *Быны эшләү рөхсәт ителмәне. Биләгән районды ҡулда тоторға ҡушылды, шул уҡ ваҡытта беҙҙең 7-нсе гвардия корпусына ярҙамға танк һәм механикалаштырылған корпустар йырып үтеп бара, тип вәғәҙә ителде.* ***Әммә был***

корпустар кавалеристарға һис бер ҡасан килеп етмәне. Һуғыш монаяттары ла килтерелмәне"...

Ни өсөн?!

СССР Оборона министрлығындағы архив материалдарына таяныып, Д.Д. Лелюшенко үҙе асы хаҡиҡәтте асып һала: фронттағы шарттар үҙгәреү сәбәпле, ти ул, 2-нсе танк корпусы был ваҡытта, 7-нсе кавалерия корпусы тап Чернухинола саҡта уҡ, 17 февралдә үк, кешеләр һәм матди яҡтан тулыландырыу өсөн, ут һыҙығынан алып тылға фронт резервына ебәреләә, ә 22 февралдә 2-нсе Тацинский гвардия танк корпусы ла тылға күсереләә. ***Тимәк, командующийҙар М.Д. Борисовты һыйлаған вәғәҙәләр — шыр-ялған, бушҡыуыҡ булып сыға.***

М.Д. Борисовтың аңлатмаһын артабан ентекләйек.

"17 февралгә ҡарай ошондай шарттарҙа ҡалдыҡ: беҙҙең 7-нсе гвардия корпусына йә һис бер ниндәй файҙаһыҙга һәләк булырга, йә ҡамау ҡулсаһын өҙөргә лә дошмандың тылында, уны югалтыуҙарга юлыҡтырып һәм тылын ҡаҡшатып, йылгыр хәрәкәткә күсергә. Корпус командиры 18 февралгә ҡараган төндә ҡамау ҡулсаһын өҙөргә әмер бирҙе...

18 февралгә ҡараган төндә, фронтты йырып сыгыу урынында ойошҡан ҡаршылыҡҡа осрамай, Фащевка станцияһының көньяҡ-көнсөгөш йүнәлешендә дошман тылындагы ҡамауҙан сыҡты корпус, әммә тәрән рейдта килеш ҡалыуын дауам итте. Шул уҡ 18-енең иртә таңында корпус командиры әмер алды: үҙе белгәнсә эш итергә. Дошман беҙҙе көтмәгән Фащевка станцияһы һәм Покровский ҡасабаһына килеп етеп, алгы частәребеҙ немец-фашист көстәрен юҡ иттеләр, һәм корпус, туҡталып тормай, артабан көньяҡҡа китте. Әсир төшкән немец офицерҙарынан гитлерсы командование тарафынан әллә нисә дивизияның, шул иҫәптән, танк дивизияһының, фронттан бында күсерелеүе, улар алдына корпусты уратып алып юҡ итеү бурысы ҡуйылганлыгы беленде...

Ошоларҙың бөтәһе тураһында 7-нсе гвардия кавалерия корпусы командиры, йәгни мин, Көньяҡ-Көнбайыш фронттың командующийы генерал Ватутинга еткерҙем һәм унан корпусты кисекмәҫтән һугыш монаяттары менән тәьмин итеүен һораным.

Фронт командующие шунда уҡ яуап бирҙе. Ул, биләнгән һыҙыҡты ҡалдырмаҫҡа ҡушып, корпус командиры ҡарарын хупланы һәм, 19 февралдә бөтә фронт авиацияһы корпусҡа эшләйәсәк, һугыш монаяттары ла алып барасаҡ, тип ышандырҙы. Эштең былайга бороло шона шатланып, 19 февралдә корпус бүлектәре самолеттарга төшөү майҙансыҡтары әҙерләнеләр, унда танытыу билдәләре күрһәтеп киҙеү торҙолар, осҡостарҙы көттөләр. Ләкин самолеттар булманы... 7-нсе гвардия корпусына бер үҙе генә дошман пехотаһына, танкыларына ҡаршы ауыр һугыштар алып барырга һәм рейдтан, фронттагы гәскәри бүлектәрҙең ярҙамын күрмәйенсә, үҙе генә йырып сыгырга тура килде".

Корпус командиры М.Д. Борисовтың шаһәҙәтнамәһе тамам.

Ләкин ошо ифрат ҡатмарлы һәм аянысл ы шарттарҙа ла тәрән рейдтан ҙур юғалтыуҙарһыҙ сығырға мөмкинлек булған, әгәр ҙә ки корпус командиры аҡтыҡ сәғәттәрҙә үҙенең штабын да, Башҡорт дивизияһының йөҙәрләгән яугирҙәрен дә һәләк иткес дыуамаллыҡмы, аҡылһыҙлыҡмы ҡылмаһа...

1943 йылдың 22 февралендә дивизиялар, план буйынса Көньяҡ-Көнбайыш фронттың 3-өнсө гвардия ғәскәрҙәре ҡаршы яҡтан ярҙам итеү һөжүменә күсергә тейешле (ләкин үтәлмәгән!) фронт һыҙығына терәлгәнсе яҡынлашып, уны йырып сығырға әҙерләнә.

Инде С.Р. Ҡадиров шаһитлығы:

“Ошо мәлдә арттан корпус командиры генерал-майор М.Д. Борисовтан ашығыс әмер килде: һис туҡталып тормаҫҡа, Штеровкаға ҡарай боролорға. Ләкин командир менән штаб начальнигы һаман, һағайып, Штеровка яғын тыңлайҙар ине әле. Колонналар ҙа туҡталды.

Яндырай холоҡло ике турат егелгән, айыу тиреһе көпләп йылытылған санаһында, ҡар бураны уйнатып, Шайморатов башлап барған урта колонна янынан корпус командиры М.Д. Борисов саптыртып килеп етте, киҫкен тауыш менән Шайморатовҡа: “Ниңә ҡатып ҡалдығыҙ? Ҡурҡаһығыҙмы?! Алға! Алға!” — тип, ҡулын болғай-болғай оранлап, ылауын Штеревка яғына тура дондорҙо. (Корпус командирының был имәнес ҡылығын уның янында булған, иҫән ҡалған рейдсыларҙың күбеһе асыҡ хәтерләй). Корпустың штаб начальнигы И.Д. Сабуров санала корпус командиры менән ҡушарлап ултырғайны. Улар “дошман фронты аша юл асыҡ — Штеревка үҙебеҙҙең 3-өнсө армия ғәскәрҙәре ҡулында” тип белде, буғай. (Аҙаҡ мәғлүм булыуынса, шул Штеревка юлында фашистар тоҙағына барып ҡапҡан баяғы ылауҙағы И.Д. Сабуров һәләк була; М.Д. Борисов үҙе, яраланған килеш дошман ҡулына эләгеп, әсирлектә йөрөп ҡайта).Сана күҙҙән юғалды. Шайморатов дивизияны шул корпус командиры менән штаб начальнигы олаҡҡан яҡҡа борҙо ла ҡыҙыу темп менән алға әйҙәне. Күп тә үтмәй, Штеревка яғынан атлыларыбыҙға ҡаршы бөтә төр ҡоралдарҙан шквал ут асылды”...

Һәм тағы:

“Председателю Президиума Верховного Совета Башкирской АССР
т. Нигмаджанову Г.В. СПРАВКА

112-я Башкирская кавалерийская дивизия в составе 7-го кав. корпуса в конце января 1943 года получила приказ войти в глубокий тыл противника по маршруту: Ворошиловград – Дебальцево.

Применяя обходные маневры, с большими боями нам удалось занять хутор Чернухино, что северо-восточнее 3 км от узловой ж.-д. станции Дебальцево Ворошиловградской области.

Во время прорыва и дальнейшего наступления 112-я дивизия во главе со своим командиром генерал-майором Шаймуратовым М.М. шла головной дивизией в корпусе. В боях за Дебальцево 112-я дивизия также принимала на себя главные удары противника. После выполнения задачи было решено с боями выходить из этого района. Перед снятием корпуса с Чернухино 17 февраля 1943 года командир корпуса генерал-майор Борисов решил снова направить головной дивизией дивизию Шаймуратова, хотя эта дивизия в период указанного рейда имела наибольшие потери, чем другие.

Несмотря на это Борисов настоял на своем, хотя Шаймуратов и командиры других дивизий (генерал Якунин, генерал Челенко) были другого мнения. Нужно сказать, в период рейда отношения Борисова к Шаймуратову были неделовые. Это объясняется по-видимому тем, что перед рейдом командиром корпуса был назначен Шаймуратов вместо Борисова. (Шаймуратов работал больше 15 дней командиром корпуса, а Борисов находился в резерве).

На обратном пути дивизия Шаймуратова поскольку шла головной, также имела значительные потери, в особенности в боях за шахты № 5, 6, 12 и на станции Петровки. К 5 часам 23 февраля 1943 года корпус вплотную дошел до обороны противника, которая занимала линию от хутора Юлино 1, 2, Фромандировка до хутора Штеровки Ивановского района Ворошиловградской области. От Штеровки до хутора Елизаветовка и Мало-Ивановка, где проходила оборона Красной Армии, составляет не более 7 – 8 километров. Командир направляющей дивизии тов. Шаймуратов в Юлино 1, 2 решил остановиться и заняться разведкой, но в это время он был вызван Борисовым (в это время Борисов и его начальник штаба полковник Сабуров были пьяными), который приказал Шаймуратову немедленно начать активное наступление на противника без всякой разведки.

Попытки Шаймуратова объяснить обстановку Борисовым не были приняты. На основании приказа Борисова Шаймуратов с Юлино 1, 2 в 5,25 утра 23 февраля 1943 года дал приказ наступать по направлению Мало-Ивановки. Сам со штабом дивизии двигался между двумя колоннами (слева конники во главе с нач. штаба Голеневым Иваном Ивановичем, а справа – пешая группа во главе с командиром 64-го полка подполковником Фондеранцевым). Когда голова группы конников равнялась с хутором (с правой стороны) Фромандировка, то противник с трех сторон открыл сильный огонь. Через 10-15 минут немцы пошли в атаку под прикрытием танков. В это время генерал Шаймуратов всеми силами стремился организовать управление боем, но это ему не удалось, ибо с частями нашей дивизии смешались корпусные части и отдельные эскадроны 15-й дивизии, которые действовали левее нас. От центра боя правее 600 – 700 метров находился небольшой лесок (лощина Романовка), что северо-восточнее от хутора Штеровки не более одного километра, генерал Шаймуратов по-видимому решил занять этот лес, направился туда. Мы тоже хотели направиться за ним, но в это время был убит мой конь и был ранен начштаба подполковник Голенев И.И. Когда мы с боем, защищая раненых, добрались до этого леса, генерала Шаймуратова там не оказалось, а лес был занят немцами. От этого леса в направлении Мало-Ивановки находится балка, которая соединяется с хутором Штеровка. Генерал Шаймуратов, когда убедился, что лес занят немцами, направился в эту балку, но и здесь он встретил большое сопротивление противника, где в неравном бою был убит.

Место гибели Шаймуратова от центра боя находится не более 700 – 800 метров.

Я как участник с начала до конца этого рейда глубоко убежден, что генерал Шаймуратов М.М. до последнего момента находился в центре своей дивизии и непосредственно руководил всеми боями.

Оценка активной роли дивизии Шаймуратова в этом рейде правильно дана в книге "История Отечественной войны" том 1 изд. ГлавПУРККА.

Бывший зам. нач. политотдела
112-й Башкирской кавалерийской дивизии
гв. майор ***С. Кадыров.***

Шул бер көндә шул урында бер юлы Башҡорт дивизияһының 749 (ете йөҙ ҡырҡ туғыҙ) яугире ятып ҡала (ә Чернухино – Дебальцевола һәләк булыусылар һаны 415)... Бынан аҙаҡ 112-нсе (16-нсы гвардия) атлы дивизияһы яңы командир Г.А. Белов етәкселегендәге төрлө милләтле дивизияға әйләнде һәм, немец-фашист илбаҫарҙарын туҡмай-туҡмай һүрелмәҫ дан ҡаҙанып, Эльбағаса барып етте.

02.11.2007

ЙӨКМӘТКЕҺЕ

КОРНИ...
Все мы братья по крови..
Еще раз об Аркаиме и Атлантиде...
Еще раз об Атлантиде……………………………………………………

ЯҘМАЛАР...
Ҡитғалағы бөтә алфавиттарҙың башланышы...
Месопотамия... шумер һүрәт-яҙыуы..
Кесе Азия... ҡатай (ҡат, хет) һүрәт-яҙыуы..
Кесе Азиялағы һарт-лид-этерҫәк яҙыуы...
Һарт-этерҫәк (этруск) яҙыуҙары..
"Авл Фелуск" торадашындағы яҙыу...
Надписи на этрусском бронзовом зеркале...
Изображение на саркофаге..
Иссыҡ ҡорғанында... ырын яҙыуы...
Асылыкүл буйы тәүырын яҙыуы...
Асылыкүл ядкәренең уҡылышы..
Древние... надписи... у озера Кандракуль...
Ҡуңғырат (Түңгәүер)... һүрәт-яҙыуы...
Турбаслынан иероглиф-һыҙыҡ яҙыу..
Солоҡсо баба... тораташындағы ырын яҙыу..
Родоптағы... ырын яҙыу...
Ҡатай-көҙәндәрҙең... иероглиф яҙыуы...
Силәнгә -- Өргөн ырын яҙмалары..
Ташъядкәрҙең тексы...
Белге Утан Уҡымышлыһы яҙған ядкәр...
Юллыҡтуған яҙған ҙур ядкәр...
Ядкәрҙең уҡылышы..

ҠАЙҺЫ БЕР КАРТАЛАР...
Сандыр ауылында табылған...
Бабаларыбыҙ эҙ ҡалдырған ерҙәрҙәге ташкарталар................................
Ер шарының географик атластары..
Күк Уралдың аҫабалары…………………………………………………

БАБАЛАР ТУРАҺЫНДА ТӨРЛӨ МӘҒЛҮМӘТТӘР......................................
Ҡытай йылъяҙмаларында башҡорт..
Тупо или Тукюе...
Боронғо башҡорт һәм ҡытай... императорҙары..
Ҡәбиләләр..
"Бүреләр тоҡомо" үҫәргәндәрҙең...
Ҡытай йылъяҙмаларында Башҡортостан...

ШАҢДАУ..
Бөйөк Ватан һуғышы яугирҙәренең хәтирәләре...
Милли дивизияның фиҙакәр йылъяҙмасыһы..
Рейдҡа инер алдынан һәм рейдта...
Инеү һәм сығыу (ҡыҫҡаса)..
Рейдтан сығыу йүнәлешендә..
Рейдтан сыҡҡас, дивизияның хәле..
Хаҡиҡәткә тоғролоҡ өсөн...

Аңлатма, “Ағиҙел” журналы редакцияһына...
“Ағиҙел” журналы редакторы ип. Низамовҡа..
Черниговты азат иткәндә..
Тарихты боҙоусыларға..
Тарихты дөрөҫ яҙайыҡ...
Ветерандарҙың рәсми мөрәжәғәтнамәләре...
Төрлөләрҙән..
Яҡын ҡоралдаш дуҫым..
Кавалерия аттары..
Ҡорос ат...
Рухи-мәҙәни мөхит...
Яугир тураһында һуңғы иҫтәлек..

ОБСТОЯТЕЛЬСТВА ГИБЕЛИ М.М. ШАЙМУРАТОВА......................
САЛАУАТ ЮЛАЕВ ШӘЖӘРӘҺЕН ТЕРГЕҘЕҮ................................

МИРЗА АҒАЙ ХӘТИРӘЛӘРЕ...
Рейд...

НА ПУТЯХ К ПОБЕДЕ..
Прорыв..
Освобождение Усть-Белой Калитвы..
Несколько эпизодов из боевой жизни С.А. Ахметовой......................
Ватан алдындағы изге бурысты үтәнек...

СИБАЙҘАН ХӘТИРӘЛӘР..
Ғ.Ғ. Сәйфуллиндың ҡыҫҡаса иҫтәлеге..
Б.Б. Мәмбәтҡоловтың иҫтәлеге..
Ҡыҫҡаса тормош юлым...
Онотолмаҫ йылдар. Һуғыш..
Полк командиры Т. Кусимов мәҡәләһенән..
Генерал Шайморатовты һәм Башҡорт дивизияһы яугирҙәрен маҡтап яҙыу – ярамаған милләтселек...
Ҡадир Даян фажиғәһе..
Аҙаҡ һүҙ...